

ВАФА ӘХМӘҘИЕВ

# БЫУЫНДАР БӘЙЛӘНЕШЕ

*Башҡорт әҙәбиәте тарихы*
*һәм әҙәби процесс хаҡында*
*мәҡәләләр*

*электрон баҫма*

КИТАП

ӨФӨ • 2013

УДК 821.512.141-95
ББК 83.3 (2Рос-Баш)
Ә 85

**Әхмәҙиев, В. И.**

Ә 85 Быуындар бәйләнеше: Башҡорт әҙәбиәте тарихы һәм әҙәби процесс хаҡында мәҡәләләр / Вафа Әхмәҙиев. — Өфө: Китап, 2013. — 488 бит.

ISBN 978-5-295-05865-3

Күренекле башҡорт ғалимы һәм шағиры Вафа Әхмәҙиевтең (1937—1983) әҙәби мираҫында башҡорт әҙәбиәтенең феодализм осорон, XX быуат башындағы рухи мөхитте сағылдырған ғилми мәҡәләләрендә теоретик һәм методологик мәсьәләләр яҡтыртылыу менән бер рәттән төрлө дәүерҙә ижад иткән яҙыусыларҙың әҙәби портреттары бирелде.

**УДК 821.512.141-95**
**ББК 83.3 (2Рос-Баш)**

**ТП — 187/13**

**ISBN978-5-295-05865-3**

© Әхмәҙиева Ф. Ш., 2013
© БР-ҙың Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте ДУП-ы, 2013

## ӘҘӘБИӘТ ҒИЛЕМЕ ҺӘМ ТЕОРИЯ МӘСЬӘЛӘЛӘРЕ

### Феодализм дәүере әҙәбиәтендәге реалистик тенденциялар

XIX быуаттың икенсе яртыһына, йәғни мәғрифәтселек дәүеренә аяҡ баҫҡанға тиклемге башҡорт әҙәбиәте идея-эстетик йөкмәткеһенең ифрат ҡаршылыҡлы, жанрҙарының уғата сыбар, теленең халыҡ теленән алыҫлашҡан булыуы менән характерлана.

Үҙенең юл башын боронғо болғар дәүләте ерлегендә башҡорттар араһынан сыҡҡан Ҡол Ғәли тарафынан ижад ителгән «Йософ вә Зөләйха» ҡиссаһынан алған яҙма әҙәбиәт алты быуатҡа һуҙылған оҙайлы дәүер эсендә ғәйәт ҡаршылыҡлы һәм ҡатмарлы юл үтә. Был оҙайлы дәүерҙең әҙәбиәтенә милли әҙәбиәт булып формалашыу күҙлегенән сығып ҡарағанда, XVI быуаттың тәүге яртыһына тиклем Урал-Волга буйы төрки дөйөмлөгө өҫтөнлөк алып килһә, Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуңғы этабы башҡорт милли ерлеге ныҡына барыуы менән характерлана. Идея йөкмәткеһенән сығып ҡарағанда, был дәүерҙең әҙәбиәтендә төп ике йүнәлеш — дөйөм кешелек гуманизмы рухы менән һуғарылған донъяуи йүнәлеш һәм ислам дине идеологияһын яҡлаусы дини-мистик йүнәлештәр айырылып тора. Шул уҡ ваҡытта феодализм дәүере башҡорт әҙәбиәтенең ҙур бер тармағы булған ауыҙ-тел әҙәбиәтендә, башҡорт халҡының милли һәм синфи азатлыҡ хәрәкәтенең поэтик сағылышы халыҡ ынтылышының кәүҙәләнеше булараҡ, социаль азатлыҡ мотивтары ла ҙур ғына урын ала. Был мотивтар яҙма әҙәбиәттәге прогрессив тенден-

цияларҙы көсәйтеүгә шаҡтай ҙур булышлыҡ итә, ундағы гуманистик башланғыстарға демократик төҫ бирә.

Урта быуаттарҙа башҡорт әҙәбиәте, Көнсығыш менән тығыҙ бәйләнештәге дөйөм төрки әҙәбиәтенең бер тармағы булыу сәбәпле, фарсы һәм ғәрәп телле Көнсығыш әҙәбиәтенең көслө йоғонтоһонда үҫеш ала. Был йоғонто ғәрәп, фарсы телдәрендәге дини һәм донъяуи йөкмәткеле әҫәрҙәрҙең шәрехләнеүен йәки тәржемә ителеүендә лә, Фирҙәүси, Низами, Сәғҙи, Хәйям һымаҡ бөйөк һүҙ оҫталарының тәьҫирендә Алтын Урҙа дәүере дастандарының килеп тыуыуында ла асыҡ күренә. Көнсығыш әҙәбиәтенең йоғонтоһо, әлбиттә, баштан уҡ ике яҡлы була. Ләкин дини йоғонто көсәйә, ислам дине Башҡортостанға нығыраҡ тарала барған һайын, донъяуи йөкмәткеле әҙәбиәттең үтеп инеүенә һәм таралыуына шарттар ауырлаша барған. «Синфи йәмғиәттә, бигерәк тә феодализмдың нигеҙҙәре емерелә башлаған осорҙарға тиклем, халыҡ менән культура араһында ислам дине стена булып торғанлыҡтан, — ти Ә. Харисов, — тәбиғи, быуындар теләген сағылдырған Рудаки менән Фирҙәүси, Ғүмәр Хәйям менән Низами һәм Сәғҙи менән Ғәлишер Нәуаи әҫәрҙәре түгел, бәлки ана шул ислам стенаһының һаҡсы-йырсыһы, дини хыялдағы «теге донъя» шағиры Әхмәт Йәсәүиҙең, уның мөриттәренең һәм бөткөһөҙ эйәрсәндәренең шиғырҙары шул замандың рәсми поэтик репертуары булып йөрөнө»[1].

Әммә, нисек кенә булмаһын, яҙма әҙәбиәт Көнсығыш әҙәбиәтенән һутланып үҫеүе, Көнсығыштан үтеп ингән әҫәрҙәр милли ерлектә ижад ителгәндәренән күләм яғынан да, таралыу йәһәтенән дә өҫтөнлөк алыуы әҙәбиәттең идея-эстетик йөкмәткеһен билдәләшеүҙә генә түгел, уның ижад методын формалаштырыуҙа ла ҙур урын тотҡан. Башҡорт әҙәбиәте, урта быуаттарҙа һәм унан һуңыраҡ та, бер яҡлап, Көнсығыш ренессансы романтизмы традицияларын аҙмы-күпме дауам иттерһә, икенсе яҡтан, дини рухтағы дастандарҙа һәм суфыйсылыҡ поэзияһында көслө сағылыш алған реакцион романтизмдың көслө йоғонтоһон кисерә.

---

[1] Харисов Әхнәф. Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы. XVIII—XIX быуаттар. Башҡортостан китап нәшриәте, Өфө, 1965, 180-се бит.

Билдәле булыуынса, прогрессив романтизм менән реакцион романтизм бер үк «идеаллаштырыусы» ижад тибының ике ҡапма-ҡаршы яғын тәшкил итәләр, сөнки уларҙың икеһенең дә һүрәтләү предметы шәхестең һәм йәмғиәттең «рухи донъяһы өлкәһенә ҡайтып ҡала»[2], йәғни романтизм әҙәбиәте үҙенең йөкмәткеһе менән кешелек йәмғиәтенең рухи ынтылыштарын һәм рухи тайпылыштарын идеаллаштыра. Донъя әҙәбиәте тарихынан асыҡ күренеүенсә, яҙма әҙәбиәт ҡол биләүселек дәүерендә лә, феодализм дәүерендә лә өҫтөн синыфтарҙың рухи ынтылыштарын кәүҙәләндергән. Һәр хәлдә ҡолдар йәки көтөүселәр романтик әҙәбиәттең иғтибар үҙәгендә булмаған. Шуға күрә лә романтизм әҙәбиәтенең тарихы асылда хакимлыҡ итеүсе синыфтарҙың рухи донъяһының тарихы ул. Ә инде прогрессив романтизмға ҡараған әҫәрҙәрҙә дөйөм кешелек гуманизмы, демократик идеялар сағыла икән — был айырым прогрессив ҡарашлы һүҙ оҫталарының, үҙ синыфы мәнфәғәттәре менән генә сикләнеп ҡалмай, дөйөм кешелек донъяһы идеалдары юғарылығына күтәрелә алыу һәләтенә бәйләнгән.

Көнсығыш романтизмы тураһында һүҙ йөрөткәндә, беҙ уны XVIII быуаттың аҙағында XIX быуат баштарында Европа һәм рус әҙәбиәттәрендә буржуаз ысынбарлыҡҡа оппозиция характерында килеп тыуған романтизм методынан айырып ҡарарға тейешбеҙ. Сөнки Көнсығыш романтизмы үҙенең килеп сығышы менән дә, йүнәлештәре менән дә Европала буржуаз мөнәсәбәттәр көсәйә барған дәүерҙә барлыҡҡа килгән романтизмдан айырылыбыраҡ тора. Шул уҡ ваҡытта, уларға киң мәғәнәлә әҙәби-художестволы ижад тибы итеп ҡарағанда, улар араһында типологик уртаҡлыҡтар ҙа байтаҡ.

Гносеологик яҡтан яҡын килгәндә Көнсығыш романтизмы әҙәбиәтенең тамырҙары халыҡтың мифология нигеҙендә ижад ителгән героик эпостарына барып тоташа. Мифологик һәм героик йөкмәткеле эпостарҙа сағылыш алған гуманистик традициялар Көнсығыштың классик шағирҙарының героик поэмаларында артабан

---

[2] Гаджиев А. А. Романтизм и реализм. Теория литературно-художественных типов творчества. Баку, 1972, с. 29.

үҫтерелеүе быға асыҡ миҫал булып тора. Был эпостарҙа кеше менән тәбиғәт араһындағы ҡаршылыҡтар, кешенең тәбиғәт серҙәренә төшөнөргә, тәбиғәттең аяуһыҙ көстәрен еңергә тырышыуы менән бергә кешелек йәмғиәтендә моронлай һәм тамырҙарын ебәрә башлаған яуызлыҡҡа ҡаршы көрәш идеяһы юғары художестволы кәүҙәләнеш алған. Уларҙа героик башланғыс өҫтөнлөк итә. Эпос геройы батырлыҡты бөтә халыҡ өсөн эшләй, ул халыҡтың эстетик идеалын сағылдыра. Әлбиттә, әле уларҙа эстетик идеал мифологик ҡараштар нигеҙендә кәүҙәләнеш ала. Хәҙерге күҙлектән яҡын килгәндә халыҡ эпостары романтик ижад тибына ҡарай. Әммә улар ижад ителгән дәүерҙәрҙә тенденциоз рәүештә романтизм тибына яраҡлаштырып ижад ителмәгәндәр, улар асылда ысынбарлыҡты художестволы танып-белеүҙең, эстетик үҙләштереүҙең бер кимәлен, тарихи торошон сағылдыра.

Донъя әҙәбиәте тарихынан сығып байҡағанда, романтизмдың яҙма әҙәбиәттә нығыныуы һәм теоретик яҡтан нигеҙләнә башлауы һуңғараҡ дәүергә тап килә. Халыҡтың эпик поэмалары романтик ижад тибына ҡайтып ҡалһалар ҙа, халыҡ ижадында беҙ романтизмдың ҡапма-ҡаршы ике йүнәлешен осратмайбыҙ тиерлек. Романтизмдың актив һәм пассив йәки прогрессив һәм реакцион тармаҡтары синфи йәмғиәт емеше, яҙма әҙәбиәт өлөшө булып тора. Яҙма әҙәбиәт барлыҡҡа килгәс, синфи ҡаршылыҡтар көсәйеү менән бергә, бер йүнәлеш халыҡтың эпик поэмаларындағы гуманистик традицияларҙы артабан дауам иттерһә, икенсе йүнәлеш дини-идеалистик ҡараштарға нигеҙләнә һәм аңлы, тенденциоз характер ала, шулай итеп реакцион романтизм тамыр йәйә башлай. Ислам дине ерлегендә үҫеш алған реакцион романтизм, беренсенән, Ғәли батыр серияһына ҡараған «Киҫекбаш», «Ҡиссаи Фәттәхетдин», «Ҡиссаи Ибраһим», «Ҡиссаи Сәҡәм» кеүек дини ҡаһарманлыҡ, йыһатсылыҡ рухы менән һуғарылған ҡиссаларҙа һәм пәйғәмбәрҙәр тураһындағы уйҙырма хикәйәттәрҙә кәүҙәләнеш алһа, икенсенән, аллаға «яҡынайыу» хаҡына фани донъя мәшәҡәттәренән арыныу, кешенең ерҙәге тормошон «теге донъя» тураһында хыялланыуға, Аллаға һығыныуға ғына бағышлау идеяһын уҙғарған суфыйсылыҡ поэзияһында үҙенең юғары нөктәһенә күтәрелә.

Әйтергә кәрәк, Ғәли батыр серияһындағы ҡиссалар Башҡортостанға ислам дине менән бергә үтеп ингәндәр һәм, изгеләштерелеп, дини дәреслектәр юғарылығында йөрөтөлгәндәр, шунлыҡтан башҡорттар araһында бындай типтағы оригиналь әҫәрҙәр ижад ителеү мөмкин булмаған. Ә инде дәрүишлек хәрәкәте менән бергә үтеп ингән суфыйсылыҡ поэзияһы традициялары, Башҡортостан шарттарында ныҡлы ерлек табып, үҙенең оригиналь шиғырҙарын барлыҡҡа килтергән. Милли һәм синфи иҙеү көсәйә, ислам дине рәсми яҡтан нығына барған һайын уның да абруйы күтәрелгән, XIX быуаттың тәүге яртыларында инде был йүнәлеш башҡорт яҙма поэзияһындағы өҫтөнлөк итеүсе йүнәлеш дәрәжәһенә өлгәшкән. Тажетдин Ялсығолов (1767—1838), Әбелмәних Ҡарғалы (1784—1824), Һибәтулла Салихов (1794—1867), Шәмсетдин Зәки (1825—1865), Ғәли Соҡорой (1826—1889) һ.б. шағирҙарҙың ижады, нигеҙҙә, суфыйсылыҡ поэзияһы традицияларын Башҡортостан ерлегендә дауам иттереүе быға асыҡ миҫал булып тора.

Шул уҡ ваҡытта, кешене актив эшмәкәрлектән дүндереүсе реакцион романтизм яҙма поэзияға шаҡтай көслө йоғонто яһаһа ла, фольклор һәм ауыҙ-тел әҙәбиәте уның йоғонтоһона артыҡ ныҡ бирелмәй, киреһенсә, унда романтизмдың прогрессив йүнәлеше өҫтөнлөк итә. Реакцион романтизм «урта быуаттарҙағы шиғри эпос, дастансылыҡ традицияларында шаҡтай көслө булыуына ҡарамаҫтан, — тип билдәләй Ғ. Хөсәйенов, — халыҡ эпосы «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Заятүләк менән Һыуһылыу» һ.б. ҙур ҡобайырҙар ерлегендә ҡалҡып сыҡҡан прогрессив романтизм күпкә ҡеүәтле ине... Прогрессив, демократик, халыҡсан рухтағы бындай романтизмдың һыҙаттары мажаралы хикәйәт, «Бахтиәрнамә» кеүек повестарҙа ла, төрлө сәсмә әҫәрҙәрҙә лә асыҡ сағылды. Бында әкиәт менән хикәйәт, ҡисса менән повесть, йәғни фольклор һәм яҙма әҙәби традициялар тығыҙыраҡ үрелде. Халыҡ ижады, халыҡсан фантастика яҙма әҙәбиәткә, уның традицион романтизмына тәрән демократик төҫ бирҙе»[3].

[3] Хөсәйенов Ғ.Б. Башҡорт әҙәбиәтендә ижад методы мәсьәләләре. Китапта: Башҡорт әҙәбиәтендә метод һәм стиль мәсьәләләре. Өфө, БФАН СССР, 1982, 9-сы бит.

Революцияға тиклемге башҡорт милли әҙәбиәтенең ҙур һәм көслө тармағы булған ауыҙ-тел ижады яҙма әҙәбиәттәге прогрессив романтизмдың милли ерлеген ныҒытыуҙа мөһим урын тотҡан кеүек, әҙәбиәттә реалистик тенденциялар ҙа иң элек ауыҙ-тел әҙәбиәтендә, халыҡ ижады менән яҙма әҙәбиәт араһында торған сәсәндәр ижадында барлыҡҡа килә.

Халыҡтың ысынбарлыҡты художество-эстетик танып белеү тарихындағы бындай киҫкен һынылыш, әлбиттә, үҙ-үҙенән генә барлыҡҡа килә торған күренеш түгел. Бындай идея-эстетик һынылыш халыҡтың социаль-экономик тормошондағы йәки тарихындағы киҫкен һынылыштар дәүеренең сағылышы булараҡ майҙанға килә.

Башҡорт халҡының тарихында халыҡтың художество-эстетик аң үҫешен реалистик нигеҙгә бороп ебәрерҙәй ниндәй социаль-тарихи ваҡиғалар булған һуң, тигән урынлы һорау тыуа. Был һорауға яуаптың асҡысы ла, минеңсә, реалистик нигеҙле ҡобайырҙарҙа, йәғни сәсәндәр ижадында тәүҙәрәк ныҡ сағылған тарихи ваҡиғаларҙа ята. Реалистик нигеҙле ҡобайырҙарҙа Урал менән Ағиҙел («Иҙел йорт») образдарында кәүҙәләнеш алған Тыуған ил төшөнсәһе, тыуған-үҫкән ер тойғоһо шул тиклем көслө сағылыш алып, бына ошо Тыуған илде хан баҫҡынсыларынан азат итеү өсөн көрәш идеяһы үҙәккә ҡуйылған икән, тимәк башҡорт халҡының милли аңын уятырҙай бындай киҫкен һынылыш та Башҡортостан тупрағы татар-монгол баҫҡынсыларының аяҡ аҫтында көйрәгән, башҡорт халҡы үҙенең бойондороҡһоҙлоғон юғалтҡан бер дәүергә тап килгән.

Әлбиттә, башҡорт халҡының рухи уяныу дәүере татар-монгол ябырылыуынан байтаҡ алда, төрлө ҡәбиләләрҙән бүленеп сыҡҡан тарҡау ырыуҙарҙың, көньяҡ Урал итәктәренә тупланып, бер бөтөн халыҡ булараҡ йылдам ойошоу дәүерендә үк башланған булырға тейеш. Башҡорттар тураһындағы тәүге тарихи мәғлүмәттәр X быуаттың баштарында уҡ, 922 йылда Болғар дәүләтенә ислам динен таратыу маҡсатында килгән ғәрәп илсеһе Ибн-Фаҙландың яҙмаларында теркәлеп ҡалған. Башҡорттар был ваҡытта, шаҡтай ҙур территория биләп, көньяҡ Урал тауҙарынан алып Яйыҡ менән Иҙел (Волга) араһындағы Каспий диңгеҙенә тиклемге иркен

далаларҙа күсеп йөрөгәндәр[4]. Тимәк, башҡорт халҡының төп ядроһы XX быуатҡа тиклем үк этник яҡтан бер бөтөн халыҡ булып ойошҡан булған. Тап бына шуға ла ул теге йәки был ырыу, ҡәбилә исемендә түгел, ә хәҙерге исемендә аталып йөрөтөлгән. X—XIII быуаттарҙа башҡорт халҡының этник консолидацияһы артабан дауам иткән һәм политик яҡтан ҡәбиләләр союзы тибындағы ҙур булмаған дәүләте ойоша башлаған[5]. Өҫтәп тағы шуны әйтергә кәрәк: халыҡ ижады материалдарында, легендаларҙа һәм риүәйәттәрҙә сағылыш алыуынса, билдәле бер урында йыл һайын ырыу вәкилдәре йыйналып, төрлө мәсьәләләрҙе хәл итә торған йыйындар был ойошоп яткан илдең рәсми дәүләт органы функцияһын үтәгән. Башҡорттарҙың татар-монгол ябырылыуына тиклем шаҡтай ныҡ ойошҡан ҙур халыҡ булыуын XIII быуаттың аҙағында XIV быуаттың башында йәшәгән күренекле Иран тарихсыһы Рәшит-ит-Дин дә билдәләп үткән. Ул үҙенең йылъяҙмаһында башҡорттарҙы өс тапҡыр телгә алған һәм өсөһөндә лә ҙур халыҡтар рәтендә күрһәткән[6]. XIII быуат баштарына башҡорттарҙың ҙур этник союзға берләшкән киң билдәле халыҡ булыуын хәҙерге совет тарихсылары ла раҫлай. «Һәр хәлдә, — тип яҙа, мәҫәлән, А. П. Смирнов, — монголдар ябырылыр алдынан башҡорттар шаҡтай ҙур территория биләгәндәр һәм Урал алды тирәһендә генә түгел, унан алыҫ яҡтарҙа ла киң билдәле булған ҙур этник төркөмгә берләшкән булғандар»[7].

Элек төрлө территорияла, төрлө дәүләттәр составында йәшәгән этник төркөмдәрҙең, үҙәге Көньяҡ Урал булған шаҡтай ҙур территорияға тупланып, үҙ-ара туғанлашып һәм яҡынлашып, башҡорт халҡы тигән яңы

---

[4] Очерки по истории Башкирской АССР, т. I, часть I, с. 21—22.

[5] Мажитов Н.А. К вопросу о характере общественных отношений у средневекового населения Южного Урала. В кн.: Материалы по хозяйству и общественному строю племен Южного Урала. Уфа, БФАН СССР, 1981, с. 130.

[6] Рашид-ад-Дин. Сборник летописей, т. I, кн. I, М.-Л., 1952, с. 66.

[7] Смирнов А.П. Железный век Башкирии. Материалы и исследования по археологии СССР. 58. Культура древних племен Приуралья и западной Сибири. Изд-во АН СССР, М. 1957, с. 74.

этник союзға берләшеүе, йәғни яңы бер халыҡтың барлыҡҡа килеүе уның рухи тормошонда ла билдәле бер һынылыш дәүере башланыуға социаль-тарихи ерлек булып торған. Дөйөм ил күләмендәге мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн йыл һайын уҙғарыла торған йыйындар халыҡтың дөйөм байрамы тантанаһына әүерелгән. Унда халыҡ таланттары — сәсәндәр һәм йыраусылар, берҙән, үҙ оҫталыҡтарын күрһәтһәләр, икенсенән, ойошоп ятҡан илдең берҙәмлеген яҡлаусы, сит ил баҫҡынсыларына яуға әйҙәүсе ялҡынлы ҡобайырҙар менән сығыш яһағандар. Йыйындар халыҡ таланттарын киң майҙанға алып сыҡҡан. Был күренеш сәсәндәр ижадының актуаллеген күтәреүҙә, тормошсанлығын нығытыуҙа мөһим урын тотҡан, сәсәндәр ижады донъяуи ҡобайырҙар, әйтештәр һәм әйтемдәр характерын ала башлаған. Тормоштоң ҡәтғи талабы сәсәндәр ижадында ҡобайыр жанрын ыҡсымлаштырып, уға көнүҙәк мәсьәләләрҙе күтәреүсе ораторлыҡ сәнғәте функцияһын йөкмәтеүгә килтергән, шул замандың мөһим мәсьәләләрен ҡуйыу үҙенән-үҙе ҡобайырҙарҙың публицистик пафосын көсәйтергә булышлыҡ иткән.

Шул рәүешле, башҡорттар татар-монгол ябырылыуын, сәсәндәр ижады нигеҙендә ныҡлап формалаша килгән шаҡтай бай ауыҙ-тел әҙәбиәтле халыҡ булараҡ, рухи яҡтан да күтәрелә барған бер дәүерҙә ҡаршы алғандар. Күсмә халыҡ өсөн быңдай рухи күтәрелеш Яңырыу дәүеренә торошло булмаһа ла, уның әһәмиәте халыҡтың татар-монгол хандары иҙеүе аҫтында быуаттар буйы яфа сигеү дәүерендә лә үҙенең рухын һәм милли үҙаңын һаҡлап ҡалыу өсөн ифрат ҙур булғанлығы шикһеҙ. Сөнки Алтын Урҙа дәүләтендә һарай шағирҙары тарафынан ижад ителгән дөйөм төрки дастандары башҡорт халҡының ысынбарлығынан шаҡтай алыҫ торған һәм уның милли мәнфәғәттәрен күҙәтмәгән. Улар, нигеҙҙә, феодаль аристократияға тәғәйенләнеп, бик тар даирәгә генә билдәле булып ҡалған. Монгол ябырылыуына тиклем, башҡорт йыйындарында формалашҡан сәсәнлек институты, «ойошоп ятҡан» илде хан баҫҡынсылары килеп яулағас, юҡҡа сыҡмаған, киреһенсә, сәсәндәр ижады, асыу һәм нәфрәт тойғоһо менән һуғарылып, донъяға айыҡ ҡараш аша халыҡ яҙмышын ҡайғыртыусы, азатлыҡ өсөн көрәш идеяларын уҙғарыусы оранға әйләнгән. Был иһә романтик йүнә-

лештә үҫеш алған яҙма әҙәбиәттән айырмалы рәүештә, ауыҙ-тел әҙәбиәтендә замандың көнүҙәк мәсьәләләрен күтәреүсе реалистик тенденцияның көсәйеүенә, үҙенә күрә бер система ала барыуына килтергән. Тап бына шуға ла феодализм дәүере башҡорт әҙәбиәтендәге реалистик башланғыстар тураһында мәсьәлә ҡуйыла икән — был мәсьәлә иң элек ана шул сәсәндәр ижадына, уларҙан мираҫ булып ҡалған һәм бөгөнгө көндә лә үҙенең эстетик ҡиммәтен юғалтмаған реалистик нигеҙле ҡобайырҙарға ҡайтып ҡала.

Сәсәндәр тарафынан ижад ителгән ҡобайырҙар, әйтештәр, әйтемдәр һәм тарихи йырҙарҙағы реалистик тенденциялар тураһында конкрет һүҙгә күсеү алдынан башҡорт әҙәбиәте тарихында сәсәндәрҙең тотҡан роле, уларҙың ижад репертуары һаҡланыу шарттары тураһында айырым фекерҙәр менән уртаҡлашып китеү урынлы булыр. Сөнки быға тиклем башҡорт фольклористикаһында сәсәндәр ижадын тик фольклорға ғына ҡайтарып ҡалдырыу арҡаһында, тарихта исемдәре ҡалып та, ижадтары халыҡлашып киткән Һабрау йырау (XVI—XV б.), Ҡарас (XVI—XII б.), Ҡараҡай (XVIII б.), Килдеш (XVIII б.), Йәммәт (XVIII б.), Көнебек-Насир (XIX б.), Ҡыуатов (XIX б.) кеүек сәсәндәрҙең ижад репертуарҙарын асыҡлауға һәм биографияларын өйрәнеүгә бер ниндәй иғтибар бирелмәгән кеүек, ижад репертуарҙарының бер аҙы һаҡланып ҡалған һәм исемдәре киң билдәле булған Ерәнсә (XV б.), Ҡобағош (XV—XVI б.), Мәхмүт (XVIII б.), Байыҡ (1710—1814), Ҡонҡас (XVIII—XIX б.), Буранбай-Йәркәй (1781—1868), Ишмөхәммәт (1781—1878), Ғәбит (1856—1921) кеүек сәсәндәрҙең дә ижадын, авторҙарынан айырып алып, фольклор әҫәре итеп ҡарау тенденцияһы өҫтөнлөк итеп килде.

Фольклорсылар башҡорт халҡының героик эпостары — ҡобайырҙар, иртәктәр тураһында һүҙ йөрөткәндә уларҙы ижад итеүселәр һәм быуындан быуынға тапшыра килеүселәр сәсәндәр икәнлеген иҫтән сығармай, әлбиттә. Сәсәндәрҙең эпик ҡомартҡыларҙы тыуҙырыуҙа ғына түгел, ижтимағи тормошта тотҡан урындарына ла ҙур баһа бирәләр. Был хаҡта К. Мәргән, Ә. Харисов, М. Сәғитов, Н. Зариповтарҙың хеҙмәттәрендә төплө фекерҙәр бар. «Сәсәндәр, — тип яҙа Ә.Харисов, — общинаның көндәлек тормошо менән ныҡ бәйләнештә бул-

ғандар. Улар төрлө йыйындарҙа, байрамдарҙа үҙ ырыуҙарының һиммәтен һаҡлар, ил ағаларының эшен яҡлар булғандар. «Алтын аҡыл» эйәһе булғандары өсөн сәсәндәргә, бейҙәр һәм старшиналар ҡушыуы буйынса, низағлы мәсьәләләрҙе хәл иткәндә лә ҡатнашырға тура килгән. Яу ваҡыттарында сәсәндәр йыш ҡына бейҙәрҙең, ырыу башлыҡтарының кәңәшселәре булып йөрөгәндәр. Ғөмүмән, патриархаль укладлы тормош шарттарында ныҡлап эшләнгән һәм дөйөм ҡабул ителгән әхлаҡ кодексы булмағанлыҡтан, сәсәндәргә, үҙ заманының аҡыл эйәһе булараҡ, күп төрлө эш төшкән, улар поэтик һүҙ оҫтаһы булып ҡына ҡалмағандар»[8].

Шул уҡ ваҡытта, теге йәки был ҡобайыр тураһында конкрет фекер йөрөткәндә, фольклорсылар әҫәрҙең авторын, ул билдәле булған һүрәттә лә, бөтөнләй тип әйтерлек күҙ уңынан ысҡындыралар. Әлбиттә, сәсәндәрҙең ижадына, фольклор критерийҙарынан тороп яҡын килгәндә, был тәбиғи күренеш. Сөнки, беренсенән, сәсән ижады телдән һөйләнелеүе һәм телдән таралыуы менән генә түгел, бәлки күп яҡтары менән халыҡ ижады традицияларына нигеҙләнһә, икенсенән, фольклорсыны индивидуаль ижад түгел, бәлки халыҡ ижадына хас булған дөйөм һыҙаттар, фольклорҙың коллектив ижад булыуы ҡыҙыҡһындыра.

Сәсәндәрҙең исемдәре халыҡ хәтерендә һаҡланып та, ижадтары халыҡлашып, дөйөм халыҡ ҡомартҡыһына әүерелеп китеүенә төп сәбәптәрҙең береһе ил һәм халыҡ мәнфәғәтен күҙәтеүсе сәсәндәрҙең аңлы рәүештә халыҡ исеменән һөйләргә, халыҡ менән бер бөтөн булырға ынтылыуҙары, үҙҙәренең ҡобайырҙарында халыҡ идеалын кәүҙәләндереүҙәре булһа, демократик рухлы һүҙ оҫталарының һәр ваҡыт иҙеүселәргә ҡаршы яҡта тороуҙары, хандар заманында ла, батша самодержавиеһы шарттарында ла башҡорттар араһында даими рәүештә ҡабынып торған восстаниелар баҫтырылған һайын был восстаниеларҙың идеологтары, ҡотҡосолары булған сәсәндәрҙең властар тарафынан эҙәрлекләнеүҙәре икенсе бер сәбәп булып торғанлығы бәхәсһеҙ. К.Мәргәндең әйтеүенсә, бындай эҙәрлекләүҙәр сәсән-

---

8 Харисов Әхнәф. Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы. XVIII—XIX быуаттар. Өфө, 1965, 76-сы бит.

лек сәнғәтенә ҙур удар яһаған. «Билдәле булыуынса, — ти ул, — өҫтөнлөк итеүсе синыфтарҙың иҙеүе һәм аҙаҡыраҡ колониаль администрация органдарының ҡыҫымы быуаттан быуатҡа һәм йылдан йылға көсәйә барыуы арҡаһында, сәсәндәр артабан үҙҙәренең ижади эшмәкәрлеген йәшерергә, конспиратив шарттарҙа алып барырға мәжбүр булғандар. Шуны һыҙыҡ өҫтөнә алып үтергә кәрәк: сәсәндәр өҫтөнә, ғөмүмән, сәсәнлек сәнғәте өҫтөнә, йүнәлдерелгән удар, беренсе нәүбәттә, улар ижадындағы хәл иткес репертуарға, халыҡ тормошоноң актив яғын сағылдырған, көрәш рухы менән һуғарылған репертуарына, бер һүҙ менән әйткәндә, героик эпос репертуарына ҡағылған. Шуның өсөн иң тәүҙә тап ана шул халыҡ тормошондағы героиканы сағылдыра торған эпик форма, конкрет алғанда, ҡобайыр формаһы ҡорбан булған да инде»[9].

Әйтергә кәрәк, К. Мәргән бында «ҡобайыр формаһы ҡорбан булған» тигәндә был форманың XVIII быуат аҙаҡтарында актив ижад ителеүенән туҡтай барыуын, майҙанға тарихи йырҙар сығыуын күҙ уңында тота. Ә инде шуға тиклем ижад ителгән ҡобайырҙарға килгәндә, улар йәшәүенән туҡтап ҡалмаған, телдән-телгә күсеп, бөгөнгө көнгә тиклем килеп еткән. «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Заятүләк менән Һыуһылыу» кеүек эпостарҙың ғына түгел, һуңғыраҡ дәүерҙә барлыҡҡа килгән реалистик нигеҙле ҡобайырҙарҙың да беҙҙең көндәргәсә һаҡланып ҡалыуында ла сәсәндәрҙең роле ҙур булған, сөнки, сәсәндәр араһында киң таралған ғәҙәт буйынса, бер сәсәндең ижад репертуарын икенсе быуын сәсәне үҙләштереп алдағы быуындарға тапшырған.

Был мәсьәләгә туранан-тура ҡағылышлы булыуы йәһәтенән Ғ.Хөсәйеновтың «Башҡорт әҙәбиәте тарихында сәсәндәр ижадының урыны һәм роле» тигән мәҡәләһе айырым иғтибарға лайыҡ. Башҡорт халыҡ сәсәне М.Буранғоловтың фольклор яҙмаларына һәм башҡа сығанаҡтарға таянып яҙылған был мәҡәләһендә автор, беренсенән, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ аҡындары ижады кеүек үк башҡорт сәсәндәренең дә ижады индивидуаль ижад булыуын һәм яҙма әҙәбиәт менән фольклор араһында

---

[9] Кирәй Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. Өфө, 1961, 75-76-сы биттәр.

тороуын һыҙыҡ өҫтөнә алһа, икенсенән, айырым сәсәндәрҙең шәхестәрен асыҡлауға ынтылыш яһай һәм сәсәндәр ижадының күсәгилешлеге һуңғы дәүерҙәргә тиклем дауам итеүен күрһәтә. Уның әйтеүенсә, «Ҡобағош сәсәндең репертуарын, ижад традицияларын ейәне Ҡарас сәсәндең ҡабул итеүе һәм үҫтереүе ихтимал, тип әйтергә нигеҙ бар. Ә Байыҡ сәсәндең бөтә репертуарын Ишмөхәмәт сәсән, унан Ғәбит сәсән ҡабул иткән. Уларҙың исемен, айырым әҫәрҙәрен сәсән Мөхәммәтша сәсәнгә тапшырған. Шулай быуаттар аша сәсәндән сәсәнгә тапшырыла килгән ижадты Ғәбит сәсән һ.б. күп кенә ҡурайсылар, сәсәндәр ауыҙынан Мөхәммәтша Буранғолов ҡағыҙға теркәгән»[10].

Беҙҙең өсөн шуныһы мөһим: хәҙерге көнгә тиклем килеп еткән ҡобайырҙар ғына түгел, тарихи йырҙарҙың да байтағы үҙ заманында оҫталыҡтары профессиональ юғарылыҡҡа күтәрелгән сәсәндәрҙең ижад емеше булған. Улар, быуындан быуынға күсә килеп бер ни тиклем үҙгәрештәргә дусар булһалар ҙа, үҙ заманының рухын һәм тын алышын, эстетик идеалдарын бөгөнгө көнгә килтереп еткергән. Әлбиттә, башҡорт сәсәндәренең ижады үҙ заманында ҡағыҙға теркәлеп ҡалһа, беҙ бөгөнгө көндә һәр сәсәндең шәхси тормошона, шәхси уй-кисерештәренә ҡағылышлы, йәғни сәсән индивидуаллеген аса торған әҫәрҙәре тураһында ла һүҙ йөрөтә алыр инек. Сөнки башҡорт сәсәндәре менән бер заманда йәшәгән, улар менән әйтештәрҙә ҡатнашҡан ҡаҙаҡ аҡындарының ижад мираҫында уларҙың үҙ шәхесенә ҡағылышлы әҫәрҙәрҙең булыу факты башҡорт сәсәндәренең ижады ла тик юғары граждалыҡ мотивтарын сағылдырыусы ҡобайырҙарҙан ғына тормағандыр, уларҙың да үҙ шәхесенә бәйләнешле, конкрет тормош картиналарына ҡағылышлы әҫәрҙәре булғандыр тигән урынлы һөҙөмтәгә килтерә. Әммә сәсәндәрҙең шәхес булараҡ эҙәрлекләнеүе, сәсәндәр үҙ ижадын «йәшерергә» мәжбүр булыуы арҡаһында, халыҡ хәтерендә тик дөйөм халыҡ мәнфәғәтен яҡлаусы әҫәрҙәр генә тороп ҡалып, ҡалғандары онотола, юғала барған, йәки сәсән-

---

[10] Хөсәйенов Ғ. Башҡорт әҙәбиәте тарихында сәсәндәр ижадының урыны һәм роле. — Башҡорт әҙәбиәте тарихынан. Өфө, 1975, 41-се бит.

дең ижады фольклорлашып, шәхесе легендаларҙа кәүҙәләнеш алған, ижадының да бер аҙы ана шул легендаларҙың, көләмәстәрҙең органик өлөшөнә әүерелгән. Быға Ерәнсә сәсәндең шәхесе һәм уға бәйләнешле көләмәстәр асыҡ миҫал булып тора.

Был хәл сәсәндәр ижадын айырым-айырым өйрәнеүҙе ифрат ҡатмарландыра. Сөнки ҡайһы бер сәсәндәрҙең репертуары аҙмы-күпме билдәле булһа ла, ҡайһы берҙәренеке бөтөнләй билдәле түгел. Халыҡ күңелендә ундай сәсәндәрҙең исеме бер башҡа, әҫәре бер башҡа тиерлек һаҡланып, сәсән менән уның ижады араһындағы бәйләнеш ептәре бөтөнләй тип әйтерлек өҙөлгән. Тап бына шуға ла беҙ сәсәндәрҙең ижад мираҫы булып торған ҡобайырҙарҙы, әйтемдәрҙе, әйтештәрҙе һәм тарихи йырҙарҙы өйрәнгәндә Ҡобағош, Ерәнсә, Мәхмүт, Байыҡ, Буранбай-Йәркәй, Ишмөхәммәт сәсәндәрҙең айырым әҫәрҙәренән башҡаларын конкрет сәсән шәхесенә бәйләп ҡарауҙан мәхрүмбеҙ.

Әммә теге йәки был ҡобайыр, әйтем йәки тарихи йыр тураһында һүҙ йөрөткәндә, был әҫәрҙең айырым сәсән тарафынан ижад ителгәнлеген, индивидуаль ижад емеше булып торғанлығын күҙ уңында тотоп эш итергә тейешбеҙ. Сөнки беҙҙең көнгә тиклем килеп еткән был әҫәрҙәрҙең үҙ заманында осраҡлы кешеләр тарафынан түгел, ә профессиональ юғарылыҡта торған сәсәндәр тарафынан ижад ителгәнлеген бер кем дә инҡар итә алмай. Шул уҡ ваҡытта сәсәндәр, борон-борондан башҡорт халҡының эпик ҡомартҡыларының төп ижадсылары булып, мифологик нигеҙле «Урал батыр», «Заятүләк менән Һыуһылыу», «Аҡбуҙат» кеүек мәшһүр әҫәрҙәрҙе тыуҙырыуҙа мөһим урын тотҡанлыҡтарын да күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай. Сюжетында реалистик ысынбарлыҡҡа ҡарағанда романтик мажаралылыҡ һәм тылсымлы осраҡлылыҡ өҫтөнлөк иткән «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Бабсаҡ менән Күҫәк», «Алдар менән Зөһрә», «Тарғын батыр», «Тарғын менән Ҡужаҡ», «Ек Мәргән» кеүек ҡобайыр һәм иртәктәр ҙә сәсәндәр ижадының емеше булып тора. Шуға күрә сәсәндәр ижадында реалистик тенденциялар тураһында һүҙ йөрөткәндә беҙ иң элек сит ил баҫҡынсыларына ҡаршы көрәш идеялары билдәле бер тарихи ерлектә конкрет сағылыш алған поэтик әҫәрҙәр

менән синфи тигеҙһеҙлек мотивтары өҫтөнлөк иткән поэтик мираҫты күҙ уңында тотабыҙ.

Сәсәндәр ижады тураһында һүҙ йөрөткәндә беҙ шулай уҡ был мираҫҡа ауыҙ-тел әҙәбиәте («изустная литература») итеп, уны фольклорҙан айырып алып ҡарау яғында торабыҙ. Был ҡараш әҙәбиәт ғилемендә яңылыҡ түгел. «Ауыҙ-тел поэзияһы, — ти А.Гаджиев, — ул инде фольклор түгел, шул уҡ ваҡытта «яҙма әҙәбиәттең» дә бөтә үҙенсәлектәренә эйә булып бөтә алмай. Ул — художестволы әҙәбиәттең тәүге тарихи формаһы һәм ул бөтә халыҡтарҙа ла бар. Фольклор — коллектив ижад, халыҡ ижады емеше булһа, ауыҙ-тел әҫәре — билдәле бер авторҙың индивидуаль ижад емеше»[11]. Ошонан сығып ғалим ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ аҡындарының, ашуғтарҙың ижадын тулыһынса индивидуаль ижад итеп ҡарай. Бында тағы шуны билдәләп үтергә мөмкин: ауыҙ-тел әҙәбиәте художестволы әҙәбиәттең тәүге тарихи формаһы булараҡ яҙма әҙәбиәттән элгәре булған кеүек, яҙма әҙәбиәт барлыҡҡа килгәс, уның менән йәнәшә үҫеш алыуы ла мөмкин. Уңайлы тарихи шарттар булмауы арҡаһында ҡырғыҙҙарҙа, мәҫәлән, яҙма әҙәбиәт Октябрь революцияһынан һуң ғына барлыҡҡа килеп, уға тиклем уның ролен аҡындар поэзияһы башҡарып килһә, башҡорт сәсәндәренең ижады байтаҡ ваҡыт яҙма әҙәбиәт менән йәнәшә үҫеш ала һәм үҙенең актив позицияһын тик XIX быуаттың икенсе яртыһында ғына юғалта. Халыҡ тормошона тығыҙ бәйле булыуы менән дә, демократик рухы менән дә шуға тиклем сәсәндәр ижады башҡорт халҡының художество-эстетик зауҡына яҙма әҙәбиәткә ҡарағанда күпкә тулыраҡ яуап биргән.

«Барына ата, барына әсә» булған Уралтауға ҡайнар мөхәббәт, тыуған ерҙе сит ил баҫҡынсыларынан азат итеү өсөн көрәш идеяһы менән һуғарылған реалистик нигеҙле ҡобайырҙар XIII быуаттың урталарынан алып XVIII быуаттың аҙаҡтарына тиклем булған оҙайлы дәүер эсендә халыҡтың социаль-тарихи ысынбарлығына үтеп инеү йәһәтенән дә, һүҙ сәнғәте булараҡ камиллашыу яғынан да ҙур үҫеш юлы үтә. Аяуһыҙ ваҡыт һына-

---

[11] Гаджиев Ариф. Реализм в литературах советского Востока. Баку, 1978, с. 35.

уын үтеп, беҙҙең көндәргә килеп еткән «Иҙел йорт», «Иҙел ер», «Мамай хан хикәйәте», «Мәргән менән Маянһылыу», «Сура батыр», «Сүкем батыр», «Баязит батыр», «Ай Уралым, Уралым», «Урал тигән илем бар», «Ил тигәндең кеме юҡ», «Йыраү һүҙе», «Бейек тауҙың үлгәне», «Йырсы ла булған йырсының» һ.б. ҡобайырҙар XIII—XVI быуаттарҙа ижад ителеп, башҡорт халҡының Алтын Урҙа иҙеүенә, Себер, Ноғай, Ҡазан хандарына ҡаршы көрәшен сағылдырһа, XVI быуаттан алып XVIII быуаттың аҙаҡтарына тиклем ижад ителгән «Ай Уралтау, Уралтау», «Уралып ятҡан Уралда», «Был донъяла тиңлек юҡ», «Юлай менән Салауат», «Салауат батыр», «Тәүеш Мәргән» кеүек ҡобайырҙарҙа һәм Байыҡ сәсән ижадында батша хөкүмәтенең милли-колониаль иҙеүенә ҡаршы алып барылған оҙайлы һәм ауыр көрәш аҙмы-күпме поэтик кәүҙәләнеш алған.

Әлбиттә реализмды билдәләүсе дөйөм методологик критерийҙарға таянмайынса сәсәндәр ижадындағы реалистик тенденцияларҙы ла айырып күрһәтеү һәм нигеҙләү мөмкин түгел. Һәм был мәсьәлә шаҡтай ауыр мәсьәләләрҙең береһе булып тора. Сөнки беҙ сәсәндәр ижадына тәнҡитле реализм талаптарын ҡуя алмаған кеүек, мәғрифәтселек реализмы критерийҙары менән дә яҡын килә алмайбыҙ. Был осраҡта беҙ реалистик ижад тибының бөтә тарихи формаларын үҙ эсенә ала торған дөйөм критерийҙарға таянырға тейешбеҙ. Был йәһәттән совет әҙәбиәт ғилемендә һуңғы йылдарҙа донъя күргән хеҙмәттәрҙән А. А. Гаджиевтың «Романтизм һәм реализм» тигән хеҙмәтендәге теоретик положениелар романтик һәм реалистик ижад типтарының эске тәбиғәттәренә шаҡтай тәрән үтеп инеп һәр бер ижад тибының үҙенә генә хас булған һыҙаттарын асыҡлау йәһәтенән дә, донъя әҙәбиәте тарихында реалистик ижад тибының, бығаса раҫланып килеүенсә, Яңырыу дәүерендә генә башланмай, антик әҙәбиәттә үк формалаша килеүен теоретик нигеҙләүе менән дә ҙур иғтибарға лайыҡ. Ғалим үҙенең хеҙмәтендә романтик ижад тибы нигеҙҙә кешенең һәм кешелек йәмғиәтенең рухи тормошон кәүҙәләндереүгә ҡайтып ҡалыуын һыҙыҡ өҫтөнә алһа, «реалистик ижадта, бөтәһенән дә бигерәк кеше тормошоноң социаль яҡтары кәүҙәләнеүен» билдәләй, «реалистик ижад тибына ҡараған әҫәрҙәрҙең

нигеҙендә социаль тематика ята»[12], — ти. Бынан тыш автор романтик ижад тибына ҡараған әҫәрҙәрҙә ваҡиғалар ысынбарлыҡтан алыҫлашҡан арауыҡ һәм абстракт ваҡыт эсендә барһа, реалистик әҫәрҙәрҙә хәрәкәт конкрет ваҡыт һәм конкрет ерлектә барыуын билдәләй. Ғалимдың был теоретик ҡараштары сәсәндәр ижадындағы реалистик тенденцияларҙы өйрәнеүҙә мөһим бер методологик таяныс булып тора. Сөнки, беренсенән, феодализм дәүерендә йәшәгән һәм ижад иткән сәсәндәрҙең төп һүрәтләү предметы, тематик нигеҙе булып башҡорт халҡының шул дәүерҙәге социаль-тарихи ысынбарлығы торһа, икенсенән, реалистик йүнәлештәге ҡобайырҙарҙа һәм әйтештәрҙә кәүҙәләнеш алған ваҡиғалар, реалистик ижад тибы принциптарына ярашлы рәүештә, конкрет, реаль ерлектә бара, уларҙа шул замандың көнүҙәк проблемалары күтәрелә.

Мифологик һәм социаль-көнкүреш эпостарында аҙмы-күпме төҫмөрләнә килгән, әммә төп һүрәтләү объектына әйләнә алмаған тыуған ер образының, Тыуған ил төшөнсәһенең социаль-тарихи ерлеге нығына. Ә инде ил төшөнсәһенең нығыныуы, патриотизм тойғоһоноң тәрәнәйеүе, һис шикһеҙ, әҙәбиәт майҙанына иле һәм халҡы мәнфәғәтен үҙ мәнфәғәтенән өҫтөн ҡуйыусы яңы типтағы, актив тәбиғәтле геройҙың килеүе хаҡында һөйләй. Әйтелеп үтелеүенсә, сәсәндәр ижадындағы был һынылыш, йәғни ҡобайырҙарҙа социаль тематиканың өҫтөнлөк ала башлауы, башҡорт иленә татар-монголдар ябырылып, уны баҫып алған, халыҡтың һәм илдең бойондороҡлоғо юҡҡа сыҡҡан аяныс бер дәүергә тура килә.

Был дәүерҙән тороп ҡалған тәүге поэтик әҫәрҙәр иҫәбенә Н.Зарипов хаҡлы рәүештә «Иҙел йорт» менән «Бейек тауҙың үлгәне» тигән ҡобайырҙарҙы индерә[13]. Хронологик яҡтан ҡарағанда «Бейек тауҙың үлгәне» ҡобайыры йыртҡыслығы менән даны киң таралып өлгөргән, бик күп илдәрҙе буйһондороп, үҙҙәренең кем

---

[12] Гаджиев А. А. Романтизм и реализм. Теория литературно-художественных типов творчества. Баку, 1972, с. 134.

[13] Ҡарағыҙ: Башҡорт халыҡ ижады. Эпос. Өсөнсө китап. Төҙөүсеһе, инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авторы Н. Т. Зарипов. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте, 1981, 13-сө бит.

икәнлеген күрһәткән татар-монголдар Башҡортостанға аяҡ баҫмаҫ борон, әммә аҡһаҡалдар менән илдәр ҡыҙырып, һүҙ тыңлап йөрөгән сәсәндәр был яуыздарҙың башҡорт иленә лә ябырыласағын һиҙенгәс, халыҡты бына-бына килеп ябырыласаҡ ошо аяуһыҙ яуға ҡаршы көрәшкә туплау ораны булараҡ ижад ителгән. Сөнки, ҡобайырҙың йөкмәткеһенән аңлашылып тороуынса, әлегә ил дошман аяғы аҫтында түгел, әммә был ҡурҡыныс килеп баҫҡан. Шуға ла сәсән, бөтә һәләтен һәм оҫталығын туплап, ирмен тигән ир-егеттәргә:

Яйыҡ китһә, юл китер,
Иҙел китһә, ил китер,
Илең китһә, ни ҡалыр?
Яңғыҙ яман бей ҡалыр,
Ике күҙеңә саң һалыр, —

тип, беренсенән, илһеҙ ҡалыуҙың ир-егет өсөн үлемдән дә яман икәнлеген аңлатырға тырышһа, икенсенән, «яу килгәндә өнһөҙ булып» ханға ҡулың бирһәң, яуыз хан илең-халҡыңды ниндәй хәлгә төшөрәсәген асыҡтан асыҡ әйтеп бирә:

Ойошоп ятҡан ҙур йортто
Өрккән ҡуйҙай итер хан;
Арыҫландай ирҙәрҙе
Йыуаш ҡуйҙай итер хан.
Илеңде алыр ҡулыңдан,
Ғәскәр алыр улыңдан;
Тартып алыр малыңды,
Иҫәпкә алыр барыңды;
Боғаҙламай эсер ҡаныңды,
Үлтермәй алыр йәнеңде, ау,
Үлтермәй алыр йәнеңде.

Артабан сәсән яу килгәндә ябалаҡтай боҫоп ҡалыр ҡурҡаҡтарҙы шелтәләп, ирмен тигән ир-егеттәрҙең батырлығын данлай, уларҙы алда торған хәл иткес алышҡа әҙерләй. Шуныһы мөһим: ҡобайырҙа батыр образы Тыуған ил образы, батыр яҙмышы ил яҙмышы менән айырып алғыһыҙ тығыҙ бәйләнештә кәүҙәләнеш ала. Тәрән патриотизм рухы менән һуғарылған был әҫәр тыңлаусыларҙы әҫәрләндерерлек, уларға рухи ғәйрәт бирерлек ҡайнар һулыш, донъяға айыҡ ҡараш менән ижад ителгән. Ҡобайырҙың артында донъя хәлдәренән хәбәрҙар булған актив сәсән шәхесе тора, ул әҫәргә үҙ

тәжрибәһен генә һалмаған, ә халыҡ тәжрибәһен, халыҡтың тәрән аҡылын дөйөмләштергән. Бер ҡарамаҡҡа был ҡобайырға нормативлыҡ хас кеүек. Был ҡурҡаҡ менән батырҙы, яман менән яҡшыны ҡырҡа айырып күрһәтергә ынтылышта һиҙелеп ҡала. Әммә был ҡобайыр, башҡа әйтемдәрҙән айырмалы рәүештә, иң элек үҙ заманының талаптарынан сығып ижад ителгән, унда ваҡыт конкретлығы бар, сөнки ҡобайырҙа ысынбарлыҡҡа айыҡ ҡараш, шул осорҙағы килеп тыуған шарттарҙы реаль күҙлектән сығып анализлау һәм баһалау ярылып ята.

«Бейек тауҙың үлгәне» ил татар-монголдар ябырылыуы ҡурҡынысы килеп баҫҡан хәүефле бер осорҙоң ҡомартҡыһы булһа, «Иҙел йорт»та илдең һәм халыҡтың бойондороҡһоҙлоғо юҡҡа сыҡҡан дәүер кәүҙәләнә.

Нур Зариповтың әйтеүенсә, «Иҙел йорт» үҙ заманында шаҡтай ҙур күләмле ҡобайыр булып, беҙҙең көндәргә был әҫәрҙең айырым өҙөктәре генә килеп еткән. Шуныһы характерлы: был ҡобайыр, эпик сюжеттар традицияһына ярашлы рәүештә, теге йәки был эпик геройҙың исеме менән аталмай, ә башҡорт халҡының тыуған ере, һыулаған һыуы Ағиҙел йылғаһына туранан-тура бәйләнештә, «Иҙел йорт» тип атала. Тимәк, әҫәрҙә дөйөм ил төшөнсәһе беренсе планға сығарыла. Әҫәрҙең сюжетынан уның реаль тормош ваҡиғаларына, шул замандың иң көнүҙәк проблемаһына арналғанлығы күренә. Бында мажаралыҡ та, аштырыу ҙа, мифик заттар ҙа, тылсым көстәре лә бөтөнләй юҡ. Бында ваҡиғалар бөтәһе лә тарихи-реалистик планда кәүҙәләнеш ала. Ҡобайыр «атам — кейәү, әсәм килен булған» Иҙел йортто ололоҡлауға ҡоролған инеш менән асылып китә лә, икенсе бүлектә ҡулына ҡорал тоторҙай ир-егеттәрҙе ҡырып-үлтереп, ҡатын-ҡыҙҙарҙы мәсхәрәләп, донъяның аҫтын-өҫкә әйләндереп килгән дәһшәтле дошман яуының ябырылыуы, был ҡурҡыныс яуҙан «ҡарҙай башы ағарған, ҡарт һанына кергән» кешеләрҙең генә тороп ҡаласағы иҫкәртелә. Ҡыҙ менән әсәнең диалогына ҡоролған өсөнсө бүлектә дошман аяғы килеп баҫҡан илдәге көсөргәнешле атмосфера, халыҡтың ни эшләргә белмәй юғалып ҡалыуы, был кәүерҙәрҙән (динһеҙҙәрҙән) ҡотолоу өсөн, ашыға-ашыға мал-тыуарҙарын әйҙәп, күсенергә йыйыныуы һүрәтләнә. Ҡыҙҙың әсәһенә биргән ҡәтғи һәм дорфа яуап-

тарында «күс ярағын күрмәгән», дошманды илгә уҙғарған ирҙәргә йәнасыулы үпкә белдерелә:

— Күс[14] ярағын күрмәһә,
Абышҡалар ҡороһон!
Монаятын алдырһа,
Һәмтерәп[15] яуға ҡол булһын.
Булъямаһа ярағын,
Кәүер[16] алһын йыйырын!
Күлек[17] ҡулда булмаһа,
Баҡтансылар ҡороһон!
Һаҙаҡ-һауыт булмаһа,
Ирмен тигән ирҙәрҙең
Бүре тартһын йоронон,
Йоронон, ау, йоронон![18]

Дүртенсе — халыҡтың баҫып килгән дошман яуынан ашыға-ашыға сигенеүен һүрәтләгән бүлектә яу заманының динамикаһы, драматизм тағы ла көсәйә. Дошман юлын ҡаплап тороу өсөн артҡа «терәү һалып юртҡан» халыҡтың кире әйләнеп ҡайтыуына мөмкинлек булмаған кеүек, алда ни көткәне лә билдәһеҙ:

Алдыбыҙҙы ағартҡан —
Аяҙ микән, таң микән?
Аяҙ микән, таң микән?
Артыбыҙҙы ҡарайтҡан,
Артыбыҙҙы ҡарайтҡан —
Болот микән, саң микән?
Болот микән, саң микән?[19] —

тигән юлдар был шомлолоҡто, көсөргәнешлекте тағы ла арттыра төшә. Ҡобайыр дошмандың ҡыуып етеүе һәм «Бүлтеректәй бүреләй илде бүлеп» тарҡатып бөтөүенә тәрән үкенес менән тамамлана. Ҡобайырҙа хәтәр ваҡиғаны иҫкәртеү маҡсатында эпик сюжеттарҙа йыш ҡулланыла торған традицион төш күреү һәм уны юрау-

---

[14] Күс — ырыу, халыҡ.

[15] Һәмтерәү — илдән айырылып ихтыяжында ҡалыу, зар-интизар булыу.

[16] Кәүер — гәүер, кафыр (ислам динендә булмаған халыҡ).

[17] Күлек — ат йәки дөйә, артмаҡлы мал.

[18] Башҡорт халыҡ ижады. Эпос. Өсөнсө китап. Өфө, 1981, 42-се бит.

[19] Шунда уҡ. 43-сө бит. Ҡобайырҙарҙан өҙөктәр артабан да ошо баҫманан килтереләсәк.

ға ҡоролған бишенсе бүлекте иҫәпкә алмағанда, бөтә ваҡиғалар реалистик планда кәүҙәләнеш алған. Әҫәрҙә идеаллаштырылған йәки ҡабартылған бер ниндәй образ да, персонаж да юҡ. Бында таланған һәм бөлдөрөлгән ил, халыҡ фажиғәһе поэтик дөйөмләштерелеп бирелә.

Ысынлап та, әгәр әҫәр ҙур бер эпик ҡобайырҙың өҙөктәре, уның инеш өлөшө генә булһа, әҫәрҙең беҙгә килеп етмәгән бүлектәрендә һис шикһеҙ илде был бәләнән ҡотҡарыу өсөн азатлыҡ яуына күтәрелгән ил батыры образы ла кәүҙәләнеш алғандыр һәм ул батыр сәсән тарафынан идеаль юғарылыҡҡа күтәрелеп, сюжетта романтик коллизия өҫтөнлөк алғандыр, тип уйларға урын бар. Әгәр ҙә шулай икән, әҫәрҙең романтик өлөштәре онотолоп, романтик эпостағы реалистик элементтар ғына халыҡ күңелендә һаҡланып ҡалыу факты үҙе генә лә ысынбарлыҡты реалистик кәүҙәләндерергә ихтыяждың көслө булыуын, халыҡтың тормошҡа айыҡ күҙ менән ҡарарға ынтылышын күрһәтә.

Феодализм дәүерендәге сәсәндәр ижадында романтизм менән реализмдың үрелеп килеүе, ике ижад тибының бер үк әҫәр эсендә синкретик характерҙа үҫеш алыуы башҡорт халҡының Нуғай хандарына ҡаршы көрәшен сағылдырған «Мәргән менән Маянһылыу» эпосы миҫалында айырата асыҡ күренә. Эпик традицияларҙы дауам иттереүсе был ҡобайыр тулайым алғанда сюжет үҫтерелеше менән дә, образдарҙың идеаллаштырылып кәүҙәләндерелеүе менән дә романтик ижад тибына ҡарай. «Килмешәк хан яуынан ҡан илаған илде ҡурсып» имгәнгән йөҙ йәшлек ҡорбашы Нәҙерша батырҙың хаҡ эшен дауам иттереү өсөн, яу туплап, көрәшкә сыҡҡан Мәргәндең ил ҡыҙырып йөрөгән йырсы ҡиәфәтендә Нуғай ханына барып, уның башын өҙә сабыуы һәм ханлығын ҡолатып, ҡолдарын азат итеп, талап йыйылған малдарҙы халыҡҡа таратып биреүендә, әлбиттә, халыҡтың азатлыҡ идеалы кәүҙәләнеш алған. Әҫәрҙә батыр йөрәкле Маянһылыу менән уға тиңдәш батыр Мәргән араһындағы мөхәббәт тә романтик планда һүрәтләнә. Ҡобайырҙа шулай уҡ батырлыҡ тураһында һүҙ йөрөткәндә мифологик эпостарҙағы Һәүбән, Иҙел менән Яйыҡ, Алпамыша кеүек батырҙар, Барсын менән Нәркәс кеүек ҡыйыу ҡыҙҙар образдарына һылтаныу бар. Ҡобайырҙа Маянһылыу образы ла «Алпамышаны ҡойонан алған» Барсындың һәм «кө-

рәштә Яйыҡты йыҡҡан» Нәркәстәрҙең изге эшен дауам иттереүсе образ булараҡ кәүҙәләндерелә. Маянһылыуҙың атаһы Нәзершанан атҡа атланып, ҡулына ҡорал тотоп яуға сығырға рөхсәт һорауында ла романтик идеал сағыла. Былар бөтәһе лә әҫәрҙең романтик стилен көсәйтә. Шул уҡ ваҡытта Нуғай ханының халыҡтан яһаҡ түләтеп, ҡыйыу ирҙәрҙең баштарын юйып, ҡатын-ҡыҙҙарын, мал-тыуарын талап йәшәүен, халыҡты иҙеүен һөйләгән урындарҙа реалистик тенденция ярылып ята. Йәғни романтик сюжетлы ҡобайырҙа реалистик элементтар ныҡлы урын ала. Бына Мәргәндең ил батырҙарын йыйып, уларға илдең аҡһаҡалы Нәҙершанан аманат итеп әйткән телмәрен генә алып ҡарайыҡ:

— Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем,
Тыңлағыҙ һеҙ, азамат.
Минең әйткән һүҙҙәрем —
Нәҙершанан аманат.
Указ килгән был яҡҡа,
Урал буйы халыҡҡа,
Тамъян, Бөрйән, Ҡыпсаҡҡа,
Мал-тыуарҙан күп төрлө
Бирегеҙ, тип, яһаҡҡа.
Мал-тыуарҙан яһағын,
Һорағанын түләнек,
Шулай ҙа ул ҡуйманы,
Яуын асты был яҡҡа, —

тип башланып китә телмәр. Артабан сәсән ҡобайырҙа «атабыҙ — кейәү», «әсәбеҙ — килен» булған, «һарынаһы еләктәй», «йылғалары көмөштәй», ҡош-ҡорттарға һәм йәнлектәргә бик бай булған мөһабәт Уралдың реалистик образын тыуҙыра. Һәм бына ошо илдең дошман аяғы аҫтында тапалыуын, халыҡтың ыҙа сигеүен иҫкәртеп, ил батырҙарын яуға өндәй:

Ил һаҡларға яу асҡан,
Гүргә башы инһә лә,
Ҡурайҙарҙа уйналып,
Ил телендә маҡталып,
Йырҙарында йырланып,
Йөрәгендә миң булып,
Исеме, мәңге һаҡланып,
Быуаттар буйы юғалмаҫ.
Ай, Уралым буйында,
Һыуын эскән йән булып.

Атын менгән ир булып,
Ҡыҙын ҡосҡан йәр булып,
Уралға яу килгәндә,
Дошман ҡулын һуҙғанда
Яуҙан ҡурҡып тормаһын.
Илар күҙ ҙә бер саҡта,
Йәше кибеп, көлөр ул;
Яуға сапҡан батыр ҙа,
Дошман киткәс иленән,
Аттан төшөп, Уралдың
Биттәрендә уйнар ул, —

ти Мәргән батыр. Шул рәүешле, ҡобайырҙың Мәргән телмәре рәүешендә бирелгән был өлөшө романтик әҫәрҙәге реалистик элементтарҙың һиҙелерлек урын алып тороуы хаҡында һөйләй. Сөнки был өлөштә, беренсенән, Уралтау образында кәүҙәләнгән Тыуған ил төшөнсәһе конкрет сағылыш алһа, икенсенән, әҫәрҙең тап бына ошо өлөшөндә шул замандың тарихи ысынбарлығы, социаль-тарихи шарттар кәүҙәләнеш ала. Асылда Мәргәндең телмәре рәүешен алған был өндәмә менән сәсән халыҡҡа, үҙ замандаштарына әйтәһе төп фекерен еткерә, уны азатлыҡ яуына саҡыра. Тимәк, Нуғай ханының халыҡты иҙеүе, илде бөлгөнлөккә төшөрөүе, быға халыҡтың асыу-нәфрәте ҡабарыуы реалистик йүнәлештә сағылыш алһа, Мәргән батыр менән Маянһылыуҙың Нуғай ханына ҡаршы сығып, уны ҡолатып, илде азат итеүендә халыҡтың азатлыҡ идеалы романтик кәүҙәләнеш алған.

«Мәргән менән Маянһылыу» эпосында Тыуған илде кәүҙәләндергән Уралтау образы әҫәрҙәге ваҡиғаларҙы үҙ тирәһенә ойоштороусы үҙәк образ булып тора, һәм азатлыҡ өсөн көрәш идеяһы Уралтау образы менән тығыҙ бәйләнештә бирелә. Был тәбиғи, сөнки башҡорт халҡы үҙе төйәкләнгән мөһабәт Уралтауҙан башҡа тормошто күҙ алдына килтерә алмаған. Тап бына шуға ла мәшһүр «Урал батыр» эпосында уҡ кәүҙәләнеш алған был образ башҡорт халыҡ ижадының, айырата халыҡ тормошо менән тығыҙ бәйле булған сәсәндәр ижадының үҙәк образына әүерелгән. «Урал батыр» эпосында был образ яуыз көстәргә ҡаршы көрәшеүсе мифик образ булараҡ кәүҙәләнеш алһа, артабан, синфи йәмғиәт барлыҡҡа килеп, ысынбарлыҡҡа айыҡ ҡараш нығына барыу менән бергә, был образ реаль Тыуған ил образы булараҡ кәүҙәләнә башлаған. «Урал батыр», «Аҡбуҙат»

кеүек эпик ҡомарҭҡылар был образды халыҡ күңелендә изгеләштереүгә булышлыҡ итһә, башҡорт ырыуҙарының Уралтау тирәһендә берҙәм союзға тупланып, улар араһында берҙәм ил тойғоһо нығына барған бер осорҙа татар-монголдарҙың ябырылыуы Уралтауға бәйләнешле ил тойғоһон нығытыуға килтергән. Урал образының тыуған ил төшөнсәһен алып китеүендә сәсәндәрҙең роле ҙур булған. Сөнки сәсәндәр ижадының үҙәк темаһы булып тыуған ил һәм уның азатлығы темаһы тора. Ә инде азатлыҡ өсөн көрәш мәсьәләһен тыуған ил төшөнсәһенән, уның азатлығы мәсьәләһенән айырып ҡарап булмай. Шуға күрә Уралтау образы азатлыҡ өсөн көрәш идеяһы менән һуғарылған эпик сюжеттарҙа ҙур урын алып торған һәм уларҙағы реалистик тенденцияларҙа ҙур булышлыҡ иткән. Феодализм дәүерендә ижад ителгән «Мәргән менән Маянһылыу», «Иҙеүкәй менән Мораҙым» һәм «Юлай менән Салауат» эпостарындағы Уралтауға арналған реалистик ҡобайырҙар быға асыҡ миҫал булып тора. Был эпостарҙың һәр ҡайһыһында Уралтау тыуған ил образы булараҡ кәүҙәләнеш ала һәм азатлыҡ өсөн көрәш темаһы менән тығыҙ бәйләнештә бирелә.

Быларҙан тыш Уралтау тураһында төрлө ваҡытта, төрлө кешеләрҙән яҙып алынған тиҫтәгә яҡын үҙ аллы ҡобайыр бар. Әйтергә кәрәк, был ҡобайырҙар менән эпик сюжеттарҙың органик өлөш булып торған Уралтау тураһындағы ҡобайырҙарҙың араһында традицион, хатта текстуаль уртаҡлыҡтар аҙ түгел. Шуға күрә Уралтау тураһындағы был ҡобайырҙар үҙ аллы әҫәр булараҡ ижад ителгәндәрме, әллә улар эпик сюжеттарҙан тороп ҡалғандармы тигән урынлы һорау тыуа. Ғ.Хөсәйенов «Башҡорт әҙәбиәте тарихында сәсәндәр ижадының роле һәм урыны» тигән мәҡәләһендә «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосындағы Һабрау йырау ауыҙынан әйтелгән Уралтау, батырлыҡ һәм ҡурҡаҡлыҡ, намыҫ һәм бурыс, хаҡлыҡ һәм ялғанлыҡ тураһындағы композицион яҡтан бер бөтөн ҡобайырҙар, Һабрау йырауҙың ижад репертуары булараҡ тәүҙә айырым таралып, эпосты ижад итеүсе сәсән тарафынан эпос персонажына әйләнгән Һабрау ауыҙынан әйттерелеүе мөмкин тигән ҡараш уҙғара. Ғалим бында «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосындағы Һабрау ауыҙынан әйтелгән «Ай Уралтау, Уралтау» һ.б. ҡобайырҙарҙың халыҡ араһында

үҙ аллы әҫәр булып таралыу фактына таяна[20]. Йәғни Ғ.Хөсәйенов Уралтау тураһындағы ҡобайырҙар тәүҙә айырым, үҙ аллы әҫәр булараҡ ижад ителеп, һуңынан эпостарға инеп киткән тигән фекерҙе яҡлай.

Быны нисек булғанлығын асыҡ ҡына әйтеүе ҡыйын, әлбиттә. Бында тик шуны ғына билдәләп үтке килә. Уралтау тураһындағы ҡобайырҙарҙың героик эпостарҙың эсендә лә ҙур урын алып тороуы һәм үҙ аллы әҫәр булараҡ та киң таралып, туҡтауһыҙ үҫеш кисереүе башҡорт халҡының тарихи ысынбарлығы, уның әленән-әле иҙеүселәргә ҡаршы баш күтәреүе, азатлыҡ өсөн көрәш тарихы менән тығыҙ бәйләнгән. Был ҡобайырҙар героик эпостарҙа, илдең аҡһаҡалдары йәки сәсәндәр ауыҙынан әйттерелеп, эпос геройҙарын көрәшкә саҡырыу ораны булып яңғыраһа, үҙ аллы әҫәр булараҡ таралған ҡобайырҙар туранан-тура халыҡтың үҙенә төбәп әйтелгән. Композицион яҡтан йыйнаҡ һәм сағыштырмаса ҡыҫҡа булған үҙ аллы ҡобайырҙар башҡорттарҙы азатлыҡ өсөн көрәшкә саҡырыу ораны булып хеҙмәт иткән. Был уларҙың үҙ аллы әҫәр булараҡ киң таралыуына һәм ижад ителеүенә уңай шарт булып торғанлығы шикһеҙ.

Ун ете томлыҡ «Башҡорт халыҡ ижады» баҫмаһының эпостарға бағышланған өсөнсө китабында Уралтауға арналған биш үҙ аллы ҡобайыр урынлаштырылған. Уларҙың Уралтауҙы маҡтауға арнаған төп өлөштәрендә традицион уртаҡ урындар булыуына ҡарамаҫтан, был ҡобайырҙар айырым алғанда һәр береһе үҙ аллы әҫәр булып тора. Һәм уларҙа Урал образына бәйләнешле рәүештә сәсәндәр ижадында реалистик тенденция көсәйә барғанлығы, социаль мотивтар тәрәнәйә төшкәнлеге асыҡ күренә.

Башҡорт ырыуҙарының берләшеп, «Урал буйын төйәк — Ялан ерҙе йәйләү» итергә һүҙ ҡуйышҡан замандарын сағылдырған «Ете ырыу» тигән легенданың органик өлөшө итеп бирелгән тәүге ҡобайырҙа тау башҡорттарының ялан башҡорттарына Уралдың ниндәй ил икәнлеген аңлатыу, ил тойғоһон уларға ла еткерергә тырышыу маҡсаты үҙәктә тора:

---

[20] Ҡара: Башҡорт әҙәбиәте тарихынан. Өфө, 1975, 28-се бит.

Илде туфандай ҡаплаған,
Ҡара һыуҙан әрсегән;
Дейеү-пәрей үҫтереп,
Ерҙең сәскә, ағасын,
Ялан, Урал буйҙарын
Һыу аҫтында тынсытып,
Зар илатҡан Шүлгәнгә,
Аҡбуҙ толпарын менеп,
Диңгеҙ йөҙөп, яу асып
Килгән Урал батырҙың
Буйлап үткән һуҡмағы —
Беҙҙең данлы Уралтау.
Ете ырыуҙың атаһы
Шунда ырыу йәйҙереп,
Барына ата булған тау.
Иҙел, Нөгөш, Яйыҡты,
Үҙән, Эйек, Ҡаҫмартты —
Һауыны еткән елендәй,
Барын берҙәй ағыҙып,
Балаһын күреп һыҡранған
Әсәләй һуғарып ил иткән —
Барына әсә булған тау.

Күренеүенсә, бында сәсән Уралды изгеләштереү маҡсатында эпос геройы Урал батыр образына ла мөрәжәғәт итә. Шул рәүешле, был ҡобайырҙа башҡорттарҙың, Урал тигән илгә тупланып, берҙәмлеккә ынтылышы поэтик сағылыш ала. Сәсән бына ошо берҙәм ил төшөнсәһен нығытырға тырышҡанлығы күренә. Шул уҡ ваҡытта сәсән әле мифологик ышаныуҙарҙан да арынып бөтмәгәнлеге һиҙелеп тора. Ҡыҫҡаһы, Уралтау образы был ҡобайырҙа романтик планда кәүҙәләнеш ала.

«Ай Уралым, Уралым» тип аталған ҡобайырҙа иһә Урал был донъяның йәннәте юғарылығына тиңләштерелә. Әммә шуныһы иғтибарға лайыҡ: был маҡтау һүҙе тыңлаусы тарафынан тулыһынса реаль ҡабул ителерлек итеп ижад ителгән. Сөнки Уралды маҡтау тулыһынса реаль ерлеккә нигеҙләнгән. Тик сәсән бында Уралдың гүзәллеген һәм байлығын мөмкин тиклем тулы күрһәтеү маҡсатынан сығып поэтик эпитеттарҙы һәм сағыштырыуҙарҙы мул ҡулланған. Поэтик образ ысынбарлыҡтың үҙе йәки уның күсермәһе булмай уның художестволы кәүҙәләнеше икәнлегенән сығып ҡараһаҡ, Урал образы был ҡобайырҙа нисек кенә маҡтап һүрәтләнһә лә уның реалистик кәүҙәләнеш алғанлығын инҡар итә алмайбыҙ. Сөнки Урал бында бөтә һәйбәт си-

фаттарында поэтик дөйөмләштерелгән тау образы ғына түгел, ә изге төйәк, тыуып үҫкән ил образын кәүҙәләндерә. Ҡобайырҙа:

Ябырылып яу килгәндең
Һөйәге ҡалған Уралтау,
Айбарланған батырҙың
Төйәге булған Уралтау, —

кеүегерәк юлдар булһа ла Уралтауҙың поэтик торошон ғына сағылдыра. Унда ил алдына килеп баҫҡан хәүеф-хәтәр, ниндәйҙер көсөргәнеш тойолмай. «Уралып ятҡан Уралда» тигән ҡобайырҙа Уралдың ҡуйынында айыу, бүре, төлкө кеүек ҡыраҒай йәнлектәр, аҫтында алтын менән баҡыр ғына түгел:

Уралтауҙың буйында
Байы ла, фәҡир ҙә бар,
Байығам тип, тир түккән
(Һис мандымаҫ) бахыр ҙа бар,
Уралтауҙың өҫтөндә
Һуғыш та, үлеш тә бар, —

икәнлеге асыҡтан-асыҡ әйтеп бирелгән. Шул рәүешле был ҡобайырға социаль тигеҙһеҙлек мотивтары килеп ингән һәм ундағы реалистик тенденция көсәйә төшкән. Ә инде һуңғараҡ дәүерҙә, XVIII быуаттың урталарында ижад ителгән «Ай Уралтау, Уралтау» ҡобайырында Уралдың ҡош-ҡорттарға бай, үҫемлектәргә мул булыуын маҡтау бөтөнләй икенсе планға күсеп, әҫәрҙә социаль йөкмәтке өҫтөнлөк алғанлығы күренә. Ҡобайырҙың беренсе строфаһы уҡ «Уралын биргән батырҙар Уралға ул булырмы?» тигән риторик һорау менән башланып китә лә был һорау, юлдан-юлға киңәйтелә барып, замандың көсөргәнешле атмосфераһын тыуҙыра.

Ай Уралтау, Уралтау,
Урал тигән бейек тау,
Беҙгә төйәк булған тау.
Битен монар баҫҡанда,
Һөтө булған Иҙелен
Улын һуйған дошманы
Йәйрәп эсеп ятҡанда,
Бөҙрә сәстәй урманын
Дошман ҡырҡып ятҡанда,
Еләҫ таңын йылытып,
Сығып килгән ҡояшта

Дошман йылынып ятҡанда,
Һылыу ҡыҙҙай түшенә
Дошман завод һалғанда,
Түҙеп торһа батырҙар,
Яуға сыҡмай тик ҡалһа,
Уға бала булырмы? —

тигән юлдар был әҫәрҙең Башҡортостанға батша хөкүмәтенең милли-колониаль политикаһы үтеп инеү сәбәпле башҡорт халҡының яҙмышы тағы ла аянысыраҡ бер хәлгә тороп ҡалған бер дәүерҙә ижад ителгәнлеген апасыҡ күрһәтеп тора. Беҙҙең өсөн иң мөһиме шул: ҡобайырҙа колониаль политиканың ҡот осҡос эҙемтәләрен күрһәтеү, килеп тыуған хәлдең айышына төшөнөргә һәм халыҡты шуға төшөндөрөргә тырышыу, йәғни социаль мотивтар беренсе планға сыға, милли-колониаль иҙеүгә ҡаршы көрәшкә саҡырыу, синфи һәм милли азатлыҡ өсөн көрәш мотивтары ҡобайырҙың төп пафосын билдәләй. Тимәк баштан уҡ реалистик йүнәлештә үҫеш алған Уралтау циклындағы ҡобайырҙарҙа һуңғы дәүерҙә, бигерәк тә XVIII быуаттың икенсе яртыһында ысынбарлыҡҡа тарихи ҡараш көсәйә, шуның менән бергә реализм шаҡтай нығына. Сөнки уларҙа милли һәм социаль иҙеүгә ҡаршы көрәш темаһы үҙәк темаға әйләнә. Ә инде социаль мәсьәләләрҙең төп проблемаға әйләнеүе реализмды билдәләүсе мөһим критерийҙарҙың береһе булып тора.

Феодаль мөнәсәбәттәр киҫкенләшеү, социаль һәм милли иҙеү көсәйеү менән бергә сәсәндәр ижадында реалистик тенденцияларҙың да көсәйә барғанлығы Урал циклына ҡараған ҡобайырҙарҙа ғына түгел, героик эпос традицияларына нигеҙләнгән батырҙар тураһындағы ҡобайырҙарҙа ла асыҡ сағылыш алған. Был тәбиғи хәл. Сөнки азатлыҡ һөйөүсе башҡорт халҡы араһынан ирек өсөн көрәш яуҙарында бынамын тигән халыҡ батырҙары күтәрелеп сыҡҡан. Ғәҙел булмаған һуғышта уларҙың күбеһе һәләк булған йәки үлем язаһына тарттырылған. Ләкин халыҡ үҙ улдарының исемен онотмаған. Сәсәндәр уларҙың исемдәрен ҡобайырҙарҙа, тарихи йырҙарҙа мәңгеләштерһә, халыҡ хәтерендә улар легенда геройына әүерелгән. Шуныһы үкенесле: был ҡобайырҙарҙың байтағы беҙгә килеп етмәгән. Килеп еткәндәренең дә күбеһе фрагментар хәлдә. Шулай булыуына ҡарамаҫтан, «Сура батыр»,

«Сүкем батыр», «Баязит батыр», «Аҡшам батыр», «Түлгән батыр», «Салауат батыр», «Буранғол ҡашҡа» кеүек ҡобайырҙар тарихи ысынбарлыҡҡа нигеҙләнеп ижад ителгәнлектәрен инҡар итеп булмай. Был ҡобайырҙарҙа тарихи шәхестәр һәм уларҙың ҡылған батырлыҡтары, халыҡ алдында күрһәткән үлемһеҙ эштәре баһалана. Уларҙың нигеҙендә тарихи ысынбарлыҡ ята, үҙәгендә тарихи шәхестәр — халыҡ батырҙары тора. Шул уҡ ваҡытта был төр ҡобайырҙарҙы тулыһынса реалистик әҫәр тип тә әйтеп булмай. Сөнки сәсән, батырҙың хаҡ эшен, батырлығын һүрәтләгәндә, берҙән, «Баязит батыр ир ине, Күкрәгенән ҡан сыҡһа, Тирем сыға тиер ине», тип, бер ни тиклем ҡабартып, аштырып һүрәтләһә, һәм был «дөйөм урындар» бер батыр тураһындағы ҡобайырҙан икенсеһенә күсһә, икенсенән, батырҙарҙы данлағанда, сәсән теге йәки был батырҙың эшмәкәрлегенә батырлыҡ тураһындағы үҙ идеалын, халыҡ идеалын һала. Шулай итеп, реаль шәхес һәм уның ҡылған эшенә иғтибарҙы йүнәлтеүе менән әҫәр реалистик нигеҙҙә торһа, батырҙы һүрәтләгәндә индивидуаллеккә ҡарағанда эпик һыҙатлы дөйөмләштерелгән батыр күҙ уңында тотолоуы һәм әҫәрҙең идеяһында сәсәндең батырлыҡ тураһында үҙ идеалы сағылышы менән әҫәр романтик төҫ ала. Был күренеш иһә феодализм дәүерендәге ҡобайырҙарҙың ижад методы синкретик характерҙа булып, реализм менән романтизмдың бер үк әҫәр эсендә үрелеп килеүен күрһәтә. Әлбиттә, был синкретизмдан сәсәндәр еңел генә ҡотола алмағандар. Сөнки, беренсенән, мифологик нигеҙле эпостар традицияһы үҙен ныҡ һиҙҙерһә, икенсенән, һүҙ сәнғәтенең ижтимағи роле, ҡәтғи тормош ихтыяжы идеалдарҙың юғарылығын, романтик күтәренкелеген талап иткән. Милли һәм синфи иҙеү аҫтында икеләтә яфа сиккән башҡорт халҡы бер ваҡытта ла азатлыҡ идеалынан баш тартмаған, үҙенең өмөтөн илде бәләнән ҡотҡарырҙай батырҙарға бағлаған. Шуға күрә ул замандарҙа азатлыҡ өсөн көрәш идеяһы менән һуғарылған ҡобайырҙарҙы халыҡ тулыһынса реалистик әҫәр итеп ҡабул иткән, уларҙа халыҡтың реаль идеалы кәүҙәләнеш алған.

1773—1775 йылдарҙағы Пугачев етәкселегендәге Крәҫтиәндәр һуғышы унда иң актив ҡатнашҡан башҡорт халҡының азатлыҡ өсөн көрәш тарихында күркәм урын алып тора. Батша хөкүмәтенең милли-колониаль

иҙеүенә ҡаршы быға тиклем дә туҡтауһыҙ баш күтәреп килгән башҡорт халҡы был һуғышта тәү тапҡыр рус, татар, сыуаш һәм башҡа халыҡтар менән берлектә синфи иҙеүгә лә ҡаршы сығыш яһаны. Был азатлыҡ һуғышы башҡорттар араһында синфи аң уяныуға, рус хеҙмәтсәндәре менән дуҫлыҡ һәм берҙәмлек тойғоһоноң тағы ла нығыныуына килтерҙе. Билдәле, бындай ҙур тарихи ваҡиға башҡорт халҡының ижтимағи һәм эстетик аңы үҫешенә лә ҙур йоғонто яһай. Быға Крәҫтиәндәр һуғышының данлы полководецы Салауат Юлаев поэзияһы, Байыҡ сәсән ижады һәм шул осорҙоң ҡомартҡыһы булып торған «Юлай менән Салауат» ҡобайыры асыҡ миҫал булып тора.

Байыҡ сәсәндең ҡобайырҙары кеүек үк, тормошо тураһындағы айырым мәғлүмәттәр ҙә беҙҙең көндәргә Ғәбит сәсәндең М.Буранголовҡа һөйләп яҙҙырыуы буйынса ғына килеп еткән. Байыҡ 1710 йылдарҙа Ырымбур губернаһы Златоуст өйәҙе Мырҙалар волосы Мәхмүт ауылында Байназар тархан ғаиләһендә тыуған. Байназар тархан Аҙналы тархандың замандашы булыу һәм уның менән аралашып йәшәүҙәре сәбәпле, уларҙың улдары Байыҡ менән Юлай ҙа йәштән үк таныш булғандар һәм XVIII быуаттың тәүге яртыһында булып уҙған башҡорт восстаниеларының береһендә ҡатнашҡандар. Яу баҫтырылып, баш күтәреүселәр эҙәрлекләнә башлағас, Юлайҙы атаһы аралап, имен-аман алып ҡалған, Байыҡ, морон төртөргә урын тапмай, ҡаҙаҡ араһына сығып киткән. Аҡын Бохар (1693—1787) менән әйтешенән күренеүенсә, Байыҡ сәсән унда ҡаҙаҡ аҡындары менән яҡындан аралашып йәшәгән. Донъялар бер аҙ тынысланғас, Башҡортостанға әйләнеп ҡайтып, «күпте күреп күп белгән», халыҡтың аҡылын һәм тәжрибәһен туплаған Айҙар (данлыҡлы) сәсән буларaҡ киң танылыу алған. Крәҫтиәндәр һуғышы ваҡытында халыҡты азатлыҡ өсөн көрәш яуына өндәүсе ялҡынлы ҡобайырҙар менән сығыш яһаған. Салауат Юлаевтың азатлыҡ һөйөүсе батыр һәм шағир булып формалашыуына ҙур йоғонто яһаған сәсәндәрҙең береһе булған. Яу баҫтырылғас, тағы ла ҡайҙалыр йәшеренеп ятҡан.

XVIII быуатта булып уҙған восстаниеларҙы үҙ башынан үткәргән, уларҙа һәр ваҡыт халыҡ яғында сығыш яһаған сәсән, 1812 йылғы Ватан һуғышы башланғас та, батшалыҡҡа үс тотоп, битараф булып ситтә ҡалыр-

ға теләмәгән. Башҡорт атлыларын һуғышсан ҡобайыр әйтеп юуға оҙатып ҡалған, еңеп ҡайтҡан яу батырҙарын тантаналы еңеү маршы — «Байыҡ» йыры менән ҡаршы алған.

Байыҡ сәсән ижадының да күп өлөшө халыҡлашып, аноним ҡобайырҙарға һәм әйтемдәргә әйләнгән. «Байыҡ сәсәндең ҡаҙаҡ аҡыны Бохар менән әйтешкәне», «Байыҡ сәсәндең Салауат батырға әйткәне», «Байыҡ сәсәндең ҡайтанан килеп сыҡҡаны, халыҡҡа туғанлыҡты аңлатҡаны» тигән ҡобайырҙар беҙҙең көндәргәсә уның ижад репертуарын ҡабул иткән Ишмөхәммәт, Ғәбит сәсәндәрҙең Байыҡтың исемен һәм әҫәрҙәренең ижад ителеү тарихын килер быуындарға еткереү маҡсатында һөйләгән инеш һүҙҙәре менән бергә килеп еткән. Сәсәндәр ижады телдән таралыуы сәбәпле, бындай инеш һүҙҙәр уларҙың ижадын исеме менән бергә һаҡлауҙың берҙән-бер сараһы булған. Сөнки башҡорт сәсәндәре араһында, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ аҡындарында киң таралғанса, үҙ исемдәрен әҫәрҙәренең аҙағына ҡыҫтырып нығытып ҡалдырыу ғәҙәте бөтөнләй тип әйтерлек булмаған. Шуға күрә ҡайһы бер фольклорсыларҙың был инеш һүҙҙәр һәм аңлатмалар менән Байыҡтың ҡобайырҙарын бер бөтөн фольклор әҫәре итеп ҡарарға тырышыуҙары менән килешеп булмай. Сәсәндең шәхесе һәм ижады йәки конкрет бер әҫәре тураһында мәғлүмәт биреүсе бындай инеш һүҙ йәки легендалар Ҡобағош, Ерәнсә, Мәхмүт сәсәндәрҙең айырым әйтештәре һәм ҡобайырҙары алдынан да килтерелгән. Шуның арҡаһында ғына уларҙың әҫәрҙәре лә беҙгә авторҙарына беркетелгән көйө килеп етә алған.

Байыҡ сәсәндең беҙгә килеп еткән ҡобайырҙарында традицион поэтик саралар, алымдар булыуына ҡарамаҫтан, уларҙа сәсәндең үҙенә генә хас булған, ижад индивидуаллеген билдәләүсе һыҙаттар ярылып ята. Был айырата сәсәндең әйткән ҡобайырҙарында үҙ героик шәхесенең үҙәктә тороуында, күпте күреп, күп кисергән, үҙ яҙмышын халыҡ яҙмышынан башҡа күҙ алдына килтерә алмаған, халыҡ исеменән һөйләргә тулы хоҡуҡлы аҡһаҡал булараҡ кәүҙәләнеш алыуында асыҡ күренә. Шулай уҡ Байыҡтың был ҡобайырҙарының йөкмәткеһе уның үҙ биографияһы менән тығыҙ бәйле. Байыҡ сәсән үҙенең ҡобайырҙарында үҙ шәхесен артҡы, нейтраль планға сығарырға теләмәй, киреһенсә,

тарихи ваҡиғаларҙың уртаһына ҡуйып, халыҡҡа әйтер һүҙен үҙ исеменән әйтә. Ҡаҙаҡ аҡыны Бохарҙың йомағына яуабында уҡ Байыҡ сәсән беҙҙең алдыбыҙға, дан, дәрәжәләр менән иҫәпләшеп тормай, һүҙҙе тура бәреп әйтеүсе зирәк аҡыллы сәсән булараҡ килеп баҫа. Бохар, Байыҡҡа йомаҡ әйтеп, был йомаҡтан иркен ҡаҙаҡ далаһын һәм үҙенең солтаны Аблайҙы маҡтатыуға иҫәп тотһа, был яҡтарға заруративан килеп сыҡҡан истәк Байыҡ сәсән яуабының тәүге өлөшөндә «ҡомдан сөйәлдәй тау» өйөлгән, һыуһаған әҙәм «йотомдай һыу тапмаҫ», «ишәктәй моңло» ҡысҡырған ҡош-ҡорт төйәкләнмәҫ шөкәтһеҙ даланың дөйөмләштерелгән образын тыуҙырһа, икенсе өлөшөндә, Ҡаҙағстандың шул замандағы тарихи ысынбарлығына төрттөрөп: «Ҡаҙағыңды киптергән Киң далала ҡуш Алаш», — ти. Ҡаҙағстандың бер нисә Урҙаға бүлгеләнгән булыуы ҡаҙаҡ халҡының берҙәмлеген ҡаҡшатыуына, үҙ-ара сапҡындар, ыҙғыш-талаштар халыҡты йонсотоуына ишара яһай. Быны менән генә сикләнеп ҡалмай, Аблай солтанға ла тел тейҙерә: уны үҙ антына хыянатта ғәйепләй. Әлбиттә, ғәрсел ҡаҙаҡ аҡыны Бохарға был оҡшамай. Әйтешкә сәсәндәр тарафынан бирелгән сәсмә аңлатмала бынан һуң Байыҡтың ҡаҙаҡ түрәләре тарафынан эҙәрлекләнә башлауы һәм ул тыуған Уралына әйләнеп ҡайтыуы хаҡында әйтелә.

«Байыҡ сәсәндең Салауат батырға әйткәне» тигән ҡобайыр XVIII быуаттың икенсе яртыһындағы Башҡортостан ысынбарлығына сәсәндең тарих һабаҡтары аша байҡау яһауы менән дә, быуаттар буйы азатлыҡ өсөн көрәш яуҙарында ҡанһыраған башҡорт халҡының үлемһеҙ рухын, ҡаҡшамаҫ ихтыярын сағылдырыуы менән дә ҙур иғтибарға лайыҡ әҫәр.

Ҡобайыр «Ил тигәндең кеме юҡ» тигән риторик һорауға яуап формаһында ҡоролған ыҡсым һәм тәрән мәғәнәле инеш һүҙ менән асылып китә. Илгә характеристика биргән был инештә сәсән башта уҡ Салауат батырҙың иғтибарын етди мәсьәләләргә йүнәлтә:

Күсе[21] лә бар был илдең,
Көсө лә бар был илдең,

[21] Күсе - халҡы.

Күсен ситтәр талағас,
Үсе лә бар был илдең, —

ти Байыҡ сәсән.

Салауат батырҙы үҙе менән таныштырыуға арналған икенсе бүлектә беҙҙең күҙ алдыбыҙға ил азатлығы өсөн ҡанлы яуҙарҙа ҡатнашҡан, үҙ яҙмышын халҡы яҙмышы менән айырылғыһыҙ бәйләгән сәсәндең реалистик образы кәүҙәләнә. Ул үҙен Салауат менән: «Таланған күстән айырылған... Асыуҙа ҡайнап сыныҡҡан, Уралда аунап ереккән... Торор йорто юйылған, Балалары һуйылған, Батырҙары ҡыуылған Ил сәсәне ҡартымын», — тип таныштыра. Ләкин ул әле был донъянан ваз кискән, көрәштән баш тартып, үлем көткән ҡарт түгел. Яуыздарға элеккесә ят, «аты юҡҡа — ат», йәғни кешенең күңелен, дәртен күтәрә белеүсе кешелекле кеше булып ҡалған был ҡарт үҙенә ҡаяла башаҡ ҡайрашырҙай юлдаш, илдең ҡонон алышырҙай ҡорҙаш эҙләй. Сөнки ул сәсән генә түгел, ә халыҡтың тоғро улы, ҡайнар патриоты:

Айҙар тигән атым бар,
Ҡулымдан ҡорал һалмаҫҡа
Илгә биргән антым бар, —

ти ул алдында баҫып торған йәш батырға. Күренеүенсә, ҡобайырҙа Байыҡ сәсән, берҙән, индивидуаль кәүҙәләнеш алһа, икенсенән, ул үҙенең рухы менән халыҡ рухын, уның ҡаҡшамаҫ ихтыярын да сағылдыра.

Әҫәрҙең өсөнсө бүлеге Салауатҡа төбәп әйтелә. Бында сәсән илдең яулы уҙғанына тарихи ҡараш ташлай. Уралда буй үҫтереп, уның азатлығы өсөн яу сапҡан батырҙарға дан йырлай, ҡол йәки мал теләп килгән, халыҡты иҙгән һәм ҡанһыратҡан хандарға, батша түрәләренә нәфрәт утын сәсә:

Батырҙар сапҡан — ил тигән,
Хандар сапҡан — ҡол тигән,
Йөҙ егерме ауылды
Ҡыуҙай үртәп көйҙөргән,
Ил өҫтөнә яу ҡылған,
Ил таларға дау һалған,
Илде ҡанға йөҙҙөргән,
Тәфкиләү ҙә сапҡан, дан тигән.
Ат йөҙҙөрөп күҙ йәшкә,

Ошаҡ тейәп тиктәҫкә,
Олатайың Шәғәле,
Унын улы Аҙналы, —
Улар ҙа сапҡан, мал тигән.

Шул рәүешле, ҡобайырҙа илдең ҡанлы тарихына, фажиғәле яҙмышына байҡау яһап, сәсән, берҙән, илдең уҙғаны менән таныштырһа, икенсенән, булып уҙған яуҙарҙың социаль йөкмәткеһен асып бирә. Шуныһы бик мөһим: ҡобайырҙан Байыҡ сәсәндең донъяға айыҡ ҡараш ташлап, киләсәкте уҙған тарих һабаҡтары аша тоҫмалларға ынтылышы күренә. Ул быға тиклем булып уҙған яуҙарҙың уңышһыҙ тамамланғанлығын да яҡшы аңлай. Ләкин бында ул халыҡты, халыҡ батырҙарын ғәйепләмәй, киреһенсә, батырҙар сапҡан юл, ҡаяға тамған ҡан образдарына мөрәжәғәт итеп, азатлыҡ өсөн көрәш йәш быуындың изгенән дә изге бурысы икәнлеген аңлатырға тырыша. Ул азатлыҡ һәм ғәҙеллек өсөн көрәшеүсе халыҡтан да көслө нәмә юҡ икәнлегенә, унын ҡасан да булһа еңеп сығасағына ҙур ышаныс менән ҡарай. Ә инде ҡол, дан йәки мал теләп килгән хандарҙың, батша түрәләренең эшенә килгәндә, уларҙан яуызлыҡтан башҡа бер ни ҙә ҡалмағанлығын һыҙыҡ өҫтөнә ала:

Бары бөткән, ҡалмаған, —
Ҡаяға тамған ҡан ҡалған,
Батырҙар сапҡан юл ҡалған,
Дошманға бысаҡ ҡайрарға
Бөтмәй торған ил ҡалған, —

ти. Ғөмүмән, был ҡобайырҙа Крәҫтиәндәр һуғышы алдынан булған революцион ситуация, халыҡтың иҙеүселәргә ҡаршы көрәшкә әҙер торғанлығы шаҡтай уңышлы кәүҙәләнеш алған. Ҡобайырҙың бөтә пафосы бына ошо тарихи дәүерҙе сағылдыра.

Билдәле булыуынса, халыҡ был яуҙа ла еңелеп, баш күтәреүселәр ҡаты язаға тарттырылған. Байыҡ сәсән үҙе лә йәшеренеп көн күрергә мәжбүр булған. Ләкин тормошҡа айыҡ ҡарай белгән Байыҡ ил эсендәге ғәҙелһеҙлек менән ил башына төшкән дөйөм бәләне айыра белгән. Башҡорт халҡының антиколониаль сығыштарында ул халыҡты социаль ғәҙелһеҙлеккә, милли-колониаль иҙеүгә ҡаршы көрәшкә өндәһә, Рәсәйгә фран-

цуздар баҫып ингәс, унда дөйөм ил тойғоһо, патриотизм тойғоһо ҡалҡып сыҡҡан. «Байыҡ сәсәндең ҡайтанан килеп сыҡҡаны, халыҡҡа туғанлыҡты аңлатҡаны» тип аталған ҡобайырҙа ул, халыҡтың аҡһаҡалы, идеологы булараҡ, башҡорт халҡын Ватанды һаҡларға берҙәм көрәшкә саҡыра. Бында ла сәсән һүҙҙе уратып бик алыҫтан башлай. Ҡасандыр илде килеп баҫҡан ҡанһыҙ Сынғыҙ ханға ҡәһәрле баһа биреп, уның халыҡты иҙеүен, кәмһетеүен, динен, ҡанын һорап тормай бөтәһен дә ҡолға әйләндерергә тырышыуын иҫкә алып китә:

Быуын-быуын үткәндә,
Хандар килеп киткәндә,
Хандан илгә ни ҡалды?
Эркелеп ҡандан һаҙ ҡалды,
Ил таланып таҙ ҡалды,
Өҫтөндә бөтмәҫ зар ҡалды, —

ти, һәм олатайҙар юҡҡа ғына Мәскәүгә барып баш эймәгән, яҡла, тип Аҡ батшаға бушҡа ғына ант бирмәгән, тип башҡорт халҡының Рәсәйгә ҡушылыуының тарихи сәбәптәрен хәтергә төшөрә. Ҡобайырҙың башҡорт менән рус халҡының тарихи туғанлығын аңлатыуға арналған бүлеге әҫәрҙең кульминацион нөктәһе булып тора. Халыҡ сәсәне тарафынан бер ниндәй көсәнмәй-нитмәй һәм быҙың өсөн бер кемдән дә хуплау йәки бүләк өмөт итмәй ысын йөрәктән ижад ителгән был бүлек бөгөнгө көндә лә башҡорт халҡы менән рус халҡы араһындағы дуҫлыҡ-туғанлыҡ гимны булып яңғырай:

Туған, туған, тигәс тә,
«Ул туған — кем?» — тигәс тә,
«Ата, әсә бер булған
Ҡарындашмы?» — тигәс тә,
Берәүҙең яңғыҙ балаһы
Кемде ҡарындаш тир икән?
Әсә лә һөттәш булмаһа,
Кеме һыуҙаш — шуны әйтер.
Йылғала һыуҙаш булмаһа,
Кеме ерҙәш — шуны әйтер.
Бер әсәнән түлләгән
Ҡыҙҙан бажа булмаһа,
Бер тупраҡты еҫкәгән
Ҡыҙҙан бажа — шуны әйтер.
Бер йылғанан һыулаған,
Бер тупраҡта аунаған,

Әсәләй күреп шул ерҙе,
Ырыҫын шуға төйнәгән,
Төйәкләнеп, туҡланып,
Йәндәй күреп, һоҡланып,
Йыр йырлаған, көйләгән,
Моңон-зарын үҙ-ара
Бер-беренә һөйләгән, —
Ирме булһын, ҡыҙ булһын,
Батшамы ул, кем булһын,
Шул тупраҡта түлләһен,
Илде ҡурсып үрләһен, —
Бер туғаның шул булыр.

Ҡобайырҙың аҙағында бына ошо туғанлыҡ хаҡына, батшаға олатайҙар биргән ант хаҡына Тыуған илде яҡлау өсөн изге яуға күтәрелергә өндәй, сөнки ул «Француз булһын, кем булһын, Ситтән килгән ят булырын, унан илгә ҡот булмай, баҫҡан ере ут булырын» бик яҡшы аңлай. Шул рәүешле, 1812 йылғы Ватан һуғышы дәүерендә Байыҡ сәсәндең ижады дөйөм Рәсәй иленең бойондороҡһоҙлоғон һаҡлау өсөн көрәш оранына әйләнә. Йәғни уның патриотизмы Урал һәм Башҡортостан менән генә сикләнеп ҡалмай, интернациональ төҫ алып, дөйөм ил тойғоһо — Рәсәй юғарылығына күтәрелә. Әлбиттә, күпте күргән сәсәндең аңындағы был һынылыш, һис һүҙһеҙ, Пугачев менән Салауат етәкселегендә рус һәм башҡорт халҡының социаль азатлыҡ өсөн бер төптән көрәше һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән. Сөнки Крәҫтиәндәр һуғышы, еңелеүгә дусар булһа ла, рус һәм башҡорт халҡының дуҫлыҡ һәм туғанлыҡ тойғоһон нығытыуға, дөйөм ватандашлыҡ тойғоһоноң артабан көсәйеүенә ҙур булышлыҡ иткән.

Йыйнап әйткәндә, Байыҡ сәсәндең ижады бөтә компоненттары менән реалистик ижад тибына ҡарай.

«Юлай менән Салауат» сағыштырмаса һуңғы дәүерҙә ижад ителһә лә, уның авторы асыҡланмаған. Шулай ҙа «Байыҡ сәсәндең Салауатҡа әйткәне» тигән ҡобайырҙың эпоста маңлайында яуҙан ҡалған яра эҙе булған, тупыс бармаҡлы йөҙйәшәр ҡарт ауыҙынан ҡабатланыу факты был ҡомартҡы йә Крәҫтиәндәр һуғышы ваҡиғаларын үҙ башынан кисереп, 1812 йылғы Ватан һуғышынан һуң ғына вафат булған Байыҡ сәсәндең үҙенеке, йә булмаһа, уның репертуарын ҡабул иткән Ишмөхәммәт сәсәндең ижад емеше булыуы бик ихтимал. Сөнки «Юлай менән Салауат»ты Мөхәмәтша Бу-

ранғолов Ишмөхәммәт сәсәндең уҡыусыһы Ғәбит сәсәндән яҙып алған. Нисек кенә булмаһын, был ҡобайыр Юлай менән Салауатты ла, Крәҫтиәндәр һуғышының барышын ғына түгел, килеп сығыу һәм еңелеү сәбәптәрен яҡшы белгән кеше тарафынан ижад ителгәнлеге шикһеҙ. Ә былырҙың бөтәһен дә Салауаттың атаһы Юлай менән йәштән таныш булып, улар менән яҡындан аралашып йәшәгән, хатта Юлай менән бергә балаларҙа ҡатнашҡан Байыҡ сәсәндән дә яҡшы белеүсе кеше булмаған.

Героик эпос традицияларына нигеҙләнеп, фабулаға ҡоролған был әҫәр сюжет көсөргәнешлеге, төп конфликттың социаль конфликт булыуы менән айырылып тора. Әҫәрҙең композицияһы менән стиле лә традицион эпостарҙан шаҡтай ныҡ айырыла. Сөнки әҫәрҙә шиғри хикәйәләү ҙә, традицион ҡобайыр алымдары ла, лирик йырҙар ҙа, драмаға хас булған ҡара-ҡаршы әйтештәр ҙә урын алған. Сәсән Салауаттың эске донъяһын асыу өсөн уның йырҙарына ҙур ғына урын бирһә, көсөргәнешле урындарҙа ҡобайыр алымдарын киң ҡуллана. Юлай менән Салауаттың үҙ-ара мөнәсәбәтен, Салауаттың һөйгәне Гөлбәзир менән аңлашыуҙарын һүрәтләгәндә автор драма әҫәрҙәренә хас алымдарҙы ҡуллана. Әҫәрҙең сюжетын традицион эпостарҙағыса персонаждарҙың үҙ-ара конфликтына ғына ҡайтарып ҡалдырмай, Крәҫтиәндәр һуғышын киң планда кәүҙәләндерергә, төп геройҙарҙың яҙмышын халыҡ яҙмышы, тарихи осор менән тығыҙ бәйләп һүрәтләүгә ынтылыш «Юлай менән Салауат» эпосын яҙма әҙәбиәттәге роман жанрына яҡынайтҡан. Был факт үҙе үк сәсәндәр ижадының халыҡтың ауыҙ-тел әҙәбиәте менән яҙма әҙәбиәт араһында торған, яҙма әҙәбиәткә ерлек нығытҡан ижад булыуын раҫлай. «Юлай менән Салауат» тарихи ҡобайыр. Һәм әҫәрҙең тарихилығы булып уҙған тарихи ваҡиғаларға нигеҙләнеүе менән генә сикләнмәй, ә бына ошо тарихи ваҡиғаларға сәсәндең тотороҡло тарихи баһа бирергә ынтылышында ла, Крәҫтиән һуғышын хәрәкәт иттереүсе төп көстәрҙе дөрөҫ тоҫмаллауында ла асыҡ күренә. Ҡобайырҙың төп конфликты — социаль конфликт. Унда башҡорт хеҙмәтсәндәренең ситкә ер һатып байып ятыусы үҙ байҙары һәм тархандары менән башҡорт ерҙәрен талаусы баярҙарға һәм заводчиктарға ҡаршы көрәше сағылдырыла. Һәм был көрәште

кәүҙәләндергәндә сәсән тарихи ысынбарлыҡҡа тоғро булып ҡала. Шуға күрә XIII—XVI быуаттарҙа ижад ителгән героик эпостар романтик ижад тибына ҡарап, уларҙа айырым элементтар формаһында төҫмөрләнһә, «Юлай менән Салауат» ҡобайырында реалистик һүрәтләү өҫтөнлөк ала. Был, беренсенән, әҫәрҙең тарихи ысынбарлыҡҡа нигеҙләнеүендә һәм тарихи ысынбарлыҡ ҡабартылмай һәм идеаллаштырылмай тарихта булғанса эҙмә-эҙлекле кәүҙәләнеш алыуында күренһә, икенсенән, тарихи шәхестәр Юлай менән Салауат образдары социаль-тарихи яҡтан нигеҙләнгән образдар булараҡ кәүҙәләнеш алған. Әҫәрҙә Юлай образы ла, Салауат образы ла социаль конфликттың үҙәгенә ҡуйылып, уларҙың шәхес булып формалашыуы эҙмә-эҙлекле кәүҙәләндерелгән.

Ҡобайырҙа Юлай шаҡтай ҙур тормош тәжрибәһе туплаған, тормошҡа айыҡ аҡыл менән ҡарай белеүсе кеше булараҡ кәүҙәләнеш алған. Ул да, улы Салауат кеүек, йәш сағында бик дыуамал, ғәҙеллек яратыусы егет булып, атаһы Аҙналы тархандың ихтыярына буйһонмай, уның юлына ҡаршы төшә башлаған. Атаһы түрәлектән төшөрөлөп, уның урынына түрә булып алғас та халыҡ яҡлы булып, ерҙәрҙе заводсыларға һатмаҫҡа, улар менән «алыш-биреш итмәҫкә» тырышҡан. Әммә башҡорт ерҙәрен талау, башҡорттарҙы ҡыҫырыҡлау дауам иткән. Быны күреп, йәне әсегән Юлай, тәүҙә эште тыныс юл менән хәл итергә уйлап, генерал-губернаторға, батшаға хат яҙып ҡараһа ла ыңғай яуап ала алмаған. Конфликттың артабан киҫкенләшеүе Юлайҙы халыҡ яғына яҡынайтҡандан-яҡынайта бара. Юлайҙың «Илдең аҡҡан күҙ йәшен үҙ йәшендәй күреүсе» ғәҙел ил ағаһы булыуы уға үҙ зарын һөйләргә килгән халыҡ менән әңгәмәһендә, йыйылған халыҡҡа төбәп әйткән ҡобайырында күркәм кәүҙәләнеш алған. Уның халыҡҡа мөрәжәғәт һүҙе, берҙән, илде талаусы заводсыларға, уларға ҡушылып халыҡты иҙеүсе ҡуштан түрәләргә ҡаршы көрәшкә өндәүсе яу ораны булып яңғыраһа, икенсенән, әгәр ҙә халыҡ еңелә ҡалһа, был яуҙың ниндәй ауыр эҙемтәләргә килтерәсәгенә халыҡты алдан иҫкәртеүе кеүегерәк ҡабул ителә:

> Илдең күп яуҙар менән
> Ҡаҡшағанын беләһеҙ.

Баярҙарҙан таланып
Йонсоғанын беләһеҙ.
Һикһән йәшенә еткәндә,
Талған күҙен секрәйтеп,
Ҡатҡан билен бөкрәйтеп,
Һыу ташыған әсәләй,
Ил ҡалғанын күрәһеҙ.
Туҡһан йәшенә еткәндә,
Ҡатҡан билен бөкрәйтеп,
Туҡ(ы)рандай туҡылдап,
Ябалаҡтай уһылдап,
Утын ҡыр(ы)ҡҡан аталай
Буласағын беләһеҙ, —

ти Юлай халыҡҡа. Шулай уҡ яу сабып еңелә ҡалһаң «Һылыуҙарҙың тол ҡалып, Батырҙары — ситлектә, Балалары — бишектә Хур булырын беләһеҙ», — ти. Был эпизодта Юлай беҙҙең алға халыҡ яғында тороп, уның аһ-зарын тәрән аңлаусы ғәҙел түрә булып та, эште төптән уйлап эш итеүсе аҡыллы яу башлығы булып та килеп баҫа. Уны яуға күтәрелеү ҡурҡытмай, ә был яуҙың яҙмышы, уның эҙемтәләре борсой. Шул уҡ ваҡытта ул иле таланғанда яуҙан өркөп ятыр ҡурҡаҡ ир түгел, шуға ла, боронғо героик эпостарҙағы батырҙарҙы иҫкә алып, «Ул батырҙар бары ла Яланғас тыуған әсәнән», «Илгә дошман килгәндә, Ҡул ҡаушарып тормаған», ҡолонсаҡтай уйнаған балаларын, һөйгән йәрен, татлы йоҡо ҡалдырып бәпләгән әсәһе менән ҡарт атаһын — «барын ташлап ат менгән», — тип халыҡтың сәмен дә ҡуҙғата. Халыҡтың уй-ниәте бер икәнлеген белгәс кенә улар менән яуға күтәрелә. Заводсыларға һәм түрәләргә ҡаршы күтәрелгән был яу тар-мар ителә. Юлай бер аҙ йәшеренеп урманда йәшәргә мәжбүр була. Түрәләр алдында ышанысы юғалған Юлай, ете йыллыҡ һуғышта ҡатнашып, һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн миҙалдар алып ҡайтҡас ҡына яңынан абруй ҡаҙанып старшина була. Шуға күрә ул Салауаттың елкенеп йөрөүен бер ҙә оҡшатмай. Салауат егет булып еткәс, ирмен тигән ирҙәрҙең тын алышын белеп ҡайтырға йыйынып ат эйәрләүен күргәс, Юлай улына киҫәтеп былай ти:

— Ошо осорҙа бик, балам,
Тының һалҡын һиҙелә,
Атҡа менгән көндәрең
Бары ҡанлы күренә.

Баярға балта сабыу —
Батшаға ҡаршы барыу,
Унның килер бүләге;
Ҡанға батып юғалыу.

Шул рәүешле ул нисек булһа ла улын ҡанлы яуҙан әрсәләргә, эште олоға ебәрмәҫкә өндәй, был эшкә батшаға биргән тоғро антҡа хыянат итеп ҡарай. Бер ауыҙы бешеп, бөтә нәмәне өрөп ҡабырға өйрәнгән Юлай, Салауат Пугачев яғына сығып, яңынан ғәскәр туплау өсөн үҙ төйәгенә әйләнеп ҡайтҡас та, улын был хәүефле эштән баш тартырға өндәй. Әммә улы үҙенең ҡарарында ныҡ тороп, халыҡ Салауатҡа дәррәү ҡушылғас, үҙе лә атҡа атланып яуға сыға. Күренеп тороуынса, ҡобайырҙа Юлай шаҡтай ҡаршылыҡлы образ булараҡ кәүҙәләнеш алған. Беҙҙең өсөн шунығы мөһим: Юлай образын һүрәтләгәндә сәсән бер ниндәй ҙә схематизмға бирелмәгән. Унның һәр поступкаһы социаль-психологик яҡтан шаҡтай ныҡ нигеҙләнгән. Ҡобайырҙың дөйөм йөкмәткеһенән һәм пафосынан аңлашылыуынса, Юлайҙың Салауатҡа ҡаршы төшөүе, хәүефле эштән баш тарттырырға тырышыуы үҙенең батшаға тоғролоғонан түгел, бәлки, «Урал ҡанға буялып, Батырҙары туралып», «Ил күмергә әйләнеп» ҡалған яуҙарҙың шаһиты булыуы, ысынбарлыҡҡа айыҡ ҡарарға тырышыуы менән бәйле. Унның илде һатып, ил талап ятыусы ҡуштан түрәләр менән бер яҡынлығы ла юҡ. Шуға ла ул азатлыҡ өсөн көрәш яуынан ситтә ҡалмай, баш күтәреүселәр яғына аяҡ баҫыуы тәбиғи ҡабул ителә.

Ҡобайырҙа Салауаттың ил талаусы бай, түрәләр менән баярҙарға һәм заводчиктарға ҡаршы көрәшкә күтәрелерҙәй ғәҙел һәм батыр йөрәкле ир булып формалашыуы эҙмә-эҙлекле кәүҙәләнеш алған. Сәсән Салауаттың бала сағы тураһында хикәйәләгәндә унның бик бәләкәйҙән бөтә нәмә менән ҡыҙыҡһыныусан, һәр нәмәнең асылына төшөнөргә тырышыусан үҙ һүҙле, шул уҡ ваҡытта ғәҙеллекте яҡлаусан бала булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала.

Салауат йәштән үҙһүҙле,
Үҙе һөймәҫ кешегә
Күңеле ҡаты булһа ла,
Бынау ярлы, был бай, тип,
Һис айырып тормаған.

Көтөүсене, ялсыны
Һис ваҡытта һүкмәгән,
Тырнаҡ менән сиртмәгән, —

ти автор, батырҙың йәштән үк ябай халыҡҡа аяныс һәм ихтирам тойғоһо менән ҡарауын билдәләп. Йыйындарҙа ат сабыштарында, данлы батырҙар менән көрәштәрҙә сыныҡҡан батырҙың рухи яҡтан формалашыуын күрһәтеүгә лә ҡобайырҙа шаҡтай ҙур иғтибар ителгән. Ул, берҙән, «Йырсы менән йырлашып, Сәсән менән әйтешеп» халыҡ ижады традицияларында тәрбиәләнһә, икенсе яҡтан, уҡыуға ла ҙур иғтибар иткән:

Татарса ла уҡыған,
Урыҫса ла уҡыған,
Аҙналдан ҡала Уралда
Ике ҡәләм белеүҙә
Ул икенсе ир булған.

Башҡорт халҡының быуаттар төпкөлөнән килгән героик эпостары традициялары артабан үҫтерелгән һәм байытылған был ҡобайырҙа, әлбиттә, боронғо эпик сюжеттарға хас булған традицион алымдар менән традицион образдар ҙа ҙур ғына урын алып тора. Был йәһәттән ҡарағанда, Салауатҡа һунарҙа йөрөгәндә тап булған яуҙарҙа ғәрипләнеп бөткән аҡ һаҡаллы ҡарт ана шундай, халыҡ аҡылын үҙенә туплап, геройға халыҡ аманатын, көрәш эстафетаһын тапшырыусы традицион ҡарт образы булараҡ ҡабул ителә.

Ҡарап торған күҙҙәре —
Ҡаҙалырҙай уҡ төҫлө;
Һүҙ ҡушҡанда һүҙҙәре —
Күпте күргән ир төҫлө, —

булған был ҡарттың тыуған ер, халыҡ яҙмышы, башҡорт халҡының азатлыҡ өсөн көрәш яуҙарында түккән хәләл ҡандары тураһындағы ғибрәтле һүҙҙәре болоҡһоп йөрөгән Салауаттың күңеленә яфа сиккән, әммә көрәштән баш тартмаған туған халҡының аманат һүҙе булып һеңеп ҡала. Һәм Салауат ошо көндән алып илде ҡан илатыусы бай-түрәләргә һәм баярҙарға ҡаршы көрәш юлына аяҡ баҫа. Шул көндә үк башҡорт урмандарын рөхсәтһеҙ ҡырҡып ятҡан баяр кешеләрен осратып, уларҙы иптәштәре менән туҙҙырып ҡыуып ебәрә.

Үҙе әйләнеп ҡайтыуға, был хәбәр атаһы Юлайға ла барып етә. Ҡайтып ингәндә, уны өйөндә атаһына ошаҡ менән килгән баяр кешеләре ҡаршы ала. Был эше өсөн атаһы менән олатаһы Аҙналы ҡарт Салауатты уңлыһуллы сәпәләп тә алалар, әммә Салауат аталарына бер һүҙ ҙә әйтмәй, тирмәнән сығып баяр кешеләрен көтөп ала ла, уларға тетрәткес янау һүҙҙәре әйтеп һала:

Атамдан мине һуҡтырып,
Ярҙай халыҡ алдында
Намыҫымды таптатып,
Күңелегеҙ булмаһын.
Атам мине һуҡһа ла,
Мин атымдан төшмәмен;
Урманда уҡ юнғанда,
Айыуға тип юнмамын.
Урал буйы урманда,
Ат уйнатҡан баярҙың
Бер ҡараһын күрһәм дә,
Аҫтын-өҫкә килтермәй
Ҡул ҡаушырып ҡалмамын! —

ти Салауат асыу һәм нәфрәт менән. Салауат үҙ һүҙендә ныҡ тороп заводсыларға, баярҙарға һунарға йөрөргә лә, мал-тыуарын көтөргә лә ирек бирмәй башлағас, баярҙар, Һағынбай кеүек ҡуштан башҡорт түрәләре менән һүҙ беркетеп, Һағынбайҙың Салауатҡа бәләкәй сағында йәрәштерелгән ҡыҙы Гөлбәзирҙе биреп, уны ҡулға алырға ниәтләнәләр. Салауат Гөлбәзирҙе ятһа ла, аумаҡайланып, бындай хәйлә тоҙағына эләгер егет булмай. Киреһенсә, Һағынбайҙа ҡунаҡ булып сыҡҡас, үҙен күрергә тирә-яҡ йәйләүҙәрҙән йыйылып килгән халыҡҡа ялҡынлы телмәр менән мөрәжәғәт итә. Үҙенең илде талар баярҙарға, «бесәй усы миҙалға» илде һатҡан түрәләргә, ил хәстәрен күрмәй ғәмһеҙ ятҡан байҙарға ҡаршы аяуһыҙ көрәшкә сыҡҡанлығын аңлатып:

Ҡара ҡанға батһам да,
Уларға юл ҡуймаҫҡа,
Илде һатҡан яуыздарҙы
Түшәгендә һуйырға;
Йәшенеп-боҫоп иленең
Ауыр көнөн белмәүсе,
Ил йөҙөнән көлөүсе,
Ике телле ирҙәрҙең
Яуыз телен ҡырҡырға

Илем өсөн ант иткән
Салауат батыр мин булам! —

ти. Салауаттың ил яҙмышын иңенә күтәргән ир булып өлгөрөп етеүе уның, халыҡтың тын алышын белеү өсөн Башҡортостан буйлап сығып китергә ат эйәрләп йөрөгәндә, атаһы менән икенсе тапҡыр һүҙгә килеп, уның менән инде үҫмер булып түгел, үҙе тотҡан юлында тайпылышһыҙ, батыр йөрәкле ир булып һөйләшеүендә айырата асыҡ күренә. Юлайҙың: Янаралдың алдында Миҙал биргән батшама Минең биргән антымды Инде боҙмаҡ буламһың?! Ҡайт һин, улым, ул уйҙан», — тип өгөтләүҙәренә ҡаршы Салауат:

Атам — түрә, тархан, тип,
Баяр, батша дуҫы, тип,
Ил талаусыны күрһәм,
Ҡул ҡаушырып тормамын,
Тота килеп түрәгә
Ҡулым бәйләп бирмәмен.
Бөтә халыҡ ут йотоп,
Ере-һыуы таланып,
Зар илашып торғанда,
Яйрап ятып тирмәмдә
Ҡаҙы-ял мин иммәмен.
Илем кисһә ҡан йылға,
Мин дә бергә кисермен;
Илем янһа утында,
Мин дә бергә янырмын, —

тип, атына атлана һәм ил ҡыҙырып йөрөп ҡайтырға юл ала. Ҡобайырҙа Салауат ошо сығып китеүенән бер ыңғай ике йыл йөрөп, зар илаған халыҡтың тын алышын белеп, типһә тимер өҙөрҙәй ун ете йәшлек ир булып әйләнеп ҡайта, тип әйтелә. Был факт бәлки Салауаттың биографияһына тура ла килмәйҙер, әммә беҙ ҡобайырҙан документаль дөрөҫлөк талап итә алмайбыҙ, сөнки сәсән ысынбарлыҡты халыҡ ҡарашынан сығып кәүҙәләндерә һәм был осраҡта ла Салауат характерының логик үҫешенә хыянат итмәй, бәлки уның Пугачевҡа барып ҡушылғанға тиклем үк был мөһим аҙымға бөтә булмышы менән әҙер булыуын күрһәтә. Тап бына шуға ла, Әбей батшаның фарманын үтәп, ғәскәр туплаған атаһының бойороғо буйынса Йәмәлкәгә ҡаршы яуға тип юлға сыҡһа ла, уның уйы икенсе төрлө була. Юлда әлеге тупыс бармаҡлы аҡ сал ҡарт менән яңынан ос-

рашып, был ҡарт уға Пугачевтың өндәмә-хатын тоттор-ғас һәм эштең ниҙәлеген аңлатып биргәс, Салауат Бүгә-сәүгә яу менән түгел, ә нан менән барып ҡушыла һәм һуғыштың аҙағына тиклем уға тоғро булып ҡала.

Сәсән ҡобайырҙа Салауаттың батыр ир булып фор-малашыуын эҙмә-эҙлекле күрһәтеү менән бергә, уның рухи донъяһын, уй-кисерештәрен һүрәтләүгә лә ҙур урын биргән. Шуға ла Салауат образы әҫәрҙә индиви-дуаль образ булараҡ кәүҙәләнеш алған. Салауаттың эс-ке донъяһы Гөлбәзиргә булған ҡайнар мөхәббәтендә лә, тыуған ил, уның азатлығы тураһындағы йырҙарында ла, атаһына, халыҡҡа төбәп әйтелгән ялҡынлы телмәр-ҙәрендә лә асыҡ сағыла.

Билдәле булыуынса, 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫ-тиәндәр һуғышы бөтә төр иҙеүгә ҡаршы йүнәлтелгән һуғыш булды. Иң мөһиме: унда азатлыҡ өсөн рус, баш-ҡорт, татар, сыуаш, мари һ.б. халыҡтар бер төптән көрәштеләр. Йәғни синфи һәм милли иҙеүгә ҡаршы йү-нәлдерелгән был һуғыш халыҡтар дуҫлығына нигеҙлән-де, ул бөтә булмышы менән интернациональ характер-ҙа булды. Тарихи ысынбарлыҡҡа тоғро булған автор был мөһим фактты ла күҙ уңынан ысҡындырмаған. Әгәр ҙә тупыс бармаҡлы ҡарт сәсән үҙенең Салауатҡа әйткән һүҙҙәрендә төп иғтибарҙы синфи ҡаршылыҡ-тарға йүнәлтеп, «алтын табаҡтан аш ейгән» менән «таш табаҡтан аш ейгәндәр» араһында бер ниндәй уртаҡлыҡ булмауын тулы асып бирһә, Пугачевтың өндәмәһен аң-латҡанда, автор был һуғыштың бөтә милләттәр өсөн берҙәй әһәмиәтле булған азатлыҡ һуғышы булыуына баҫым яһаған. Ҡобайырҙан күренеүенсә, Пугачевҡа ба-рып ҡушылған Салауат та был һуғыштың интернацио-наль характерҙа икәнлеген, социаль азатлыҡ өсөн көрәш икәнлеген яҡшы аңлаған. Уның яңынан ғәскәр йыйыр-ға үҙ төбәгенә әйләнеп ҡайтҡас, халыҡҡа мөрәжәғәт итеп әйткән телмәре быға асыҡ миҫал:

Илем тигән ир батыр,
Атын менеп, теҙгенен
Һулаҡайға тартһын ул,
Ил эсендә түш йәйгән
Бөтә баяр, тарханды
Дошманым тип белһен ул;
Сусҡа көткән урыҫты,
Йылҡы көткән башҡортто,

Һыйыр көткән татарҙы,
Йөн тетеүсе сыуашты —
Барыһын да бер тигеҙ
Үҙенә дуҫ итһен ул.
Быуат-быуат түгелгән
Ҡандан тыуған батыр тип,
Үҙен яҡшы белһен ул!

Салауаттың был телмәрендә батырҙың социаль позицияһы ла, Крәҫтиәндәр һуғышының интернациональ характерҙа булыуы ла, был һуғыштың быуаттар буйы барған азатлыҡ өсөн көрәш яуҙарының логик дауамы булып тороуы ла бер фокусҡа тупланып, тәрән һәм сағыу кәүҙәләнеш алған.

Бер ҡарамаҡҡа был ғәҙәттән тыш күренеш кеүегерәк, әммә XVII—XVIII быуаттарҙа башҡорт халҡының азатлыҡ өсөн көрәш яуҙарының идеологтары, пропагандистары юғарылығына күтәрелгән сәсәндәр ижадында реалистик тенденцияларҙың шаҡтай көсәйеүен, халыҡ сәсәндәренең социаль мәсьәләләргә иғтибарының бермә-бер артыуы фактын күҙ уңында тотҡанда, Крәҫтиәндәр һуғышынан һуң ижад ителгән был ҡобайырҙа сәсәндең тарихи дөрөҫлөккә тоғро булып ҡалыуы, бөтә илгә даны таралған Салауатты халыҡ позицияһынан сығып реалистик кәүҙәләндерергә ынтылышы тәбиғи күренеш.

1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы — илебеҙ тарихының ҡалҡыу бер дәүере ул. Тарихтың ҡалҡыу, героик дәүерҙәрендә халыҡ стихиялы рәүештә генә хәрәкәт итмәй, уның рухи энергияһы ла үҙенең юғары бер мәленә күтәрелгән була. Сөнки азатлыҡ өсөн көрәштә рухи яҡтан бөлгән, күңеле һүрелгән халыҡты күтәреп булмай. Тап бына шуға ла беҙ был дәүер сәсәндәр ижадында тормошҡа айыҡ ҡараш менән көрәш романтикаһының бергә берегеүен, үрелеп килеүен күрәбеҙ. Тик «Юлай менән Салауат» эпосында инде реализм романтик сюжет эсендәге элементтар характерында ғына түгел, киреһенсә, әҫәр баштан-аяҡ реалистик принциптарға нигеҙләнгән. Ундағы шартлылыҡ та реалистик шартлылыҡ. Тупыс бармаҡлы, аҡ һаҡаллы ҡарт, мәҫәлән, ҡобайырҙа шундай шартлы образдарҙың береһе. Ул ҡарт быуаттар буйы азатлыҡ өсөн көрәшкә күтәрелеп ҙур тәжрибә туплаған, социаль һәм милли иҙеүҙән ғазап сиккән, әммә көрәштән баш тартмаған

башҡорт халҡының образын дөйөмләштерә. Был ҡарт — А. С. Пушкиндың «Капитан ҡыҙы» повесындағы теле ҡырҡылған башҡорт ҡартының игеҙәк туғаны. Ҡобайырҙа тупыс бармаҡлы ҡарттың сәсән булыуы ла аңлашылып тора. Ул Салауатҡа халыҡтың уй-фекерен, уның ҡарашын еткерә, аманатын тапшыра. Пушкин әҫәрендәге ҡарттың теле ҡырҡылған икән, тимәк юҡҡа ғына ҡырҡылмаған, ул да сәсән булған һәм халыҡ араһында ҡотҡо тараҡҡан. Йәғни был образдар араһында уртаҡлыҡ ҙур. Улар, бер яҡтан, халыҡ образын дөйөмләштерһәләр, икенсе яҡлап, азатлыҡ өсөн көрәшеүсе халыҡ араһынан сыҡҡан типик образдар итеп ҡаралырға ла хаҡлы. Крәҫтиәндәр һуғышының тарихын яҙған Пушкин, әлбиттә, «телһеҙ башҡорт» образын һауанан алып ижад итмәгән, ә реаль шәхестәргә таянған. Шулай уҡ ул Ырымбурға килеп, материал туплағанда «Юлай менән Салауат» ҡобайыры тураһында ишетеп ҡалыуы ла, «телһеҙ башҡорт»то ошо эпостағы тупыс бармаҡлы ҡарт образына нигеҙләнеп ижад итеүе лә бик ихтимал...

Йыйнап әйткәндә, тормош деталдәренең дөрөҫлөгө менән дә, Юлай, Салауат кеүек төп образдарҙың характерҙары социаль мөхит менән тығыҙ бәйләнештә асылыуы һәм әҫәр тарихи ысынбарлыҡҡа нигеҙләнеп, уның төп йөкмәткеһе халыҡтың социаль азатлыҡ өсөн көрәшен сағылдырыуы менән дә «Юлай менән Салауат» ҡобайыры реалистик принциптарҙа ижад ителеүен раҫлай.

## XX БЫУАТ БАШЫНДА БАШҠОРТ ПОЭЗИЯҺЫ

XX быуат башы башҡорт әҙәбиәте, бигерәк тә уның халыҡсан-демократик әҙәбиәт булып үҫеп килеүе, иң элек 1905 йылғы буржуаз-демократик революцияға бәйле. Был революция, бер яҡтан, самодержавие тарафынан быуаттар буйы иҙелеп килгән халыҡтарҙың милли уяныуына этәреш яһап, бығаса тотҡарланып, баҫылып килгән милли әҙәбиәтен, культураһын үҫтереп ебәреүгә сәбәпсе булһа, икенсе яҡлап, был революция һәр милләттең үҙ эсендәге төрлө социаль ҡатламдарҙы ла хәрәкәткә килтерҙе.

1905 йылғы революциянан һуң барлыҡҡа килгән ваҡытлы татар матбуғаты биттәрендә татарҙар менән бергә башҡорттарҙың да төрлө социаль ҡатламдарының тауыштары ишетелә башланы. Был осорҙа, айырата 1905—1907 йылдарҙа, алдынғы рус һәм татар пролетариаты менән бергә башҡорт эшселәр синыфы ла көрәш майҙанына сыҡты. Татар телендәге беренсе большевистик «Урал» газетаһында, һул демократик йүнәлештәге «Карчыға», «Чүкеч» кеүек сатирик журналдарҙа баҫылып сыҡҡан революцион рухтағы шиғырҙарҙа шул осорҙағы татар һәм башҡорт эшселәр синыфының һәм ауыл ярлыларының тауышы ла ишетелеп ҡалды. Ләкин, милли пролетариаттың әле формалашып һәм ойошоп етмәүе өҫтәүенә, ҡара реакцияның һөжүме арҡаһында, революцион рухтағы был әҙәбиәт, профессиональ юғарылыҡҡа күтәрелеп, киң ҡолас менән үҫеп китә алманы. Уның ҡарауы, был осорҙа хеҙмәтсән массаларҙың ауыр тормошона теләктәшлек итеүсе, социаль тигеҙлек һәм азатлыҡ идеяларын алға һөрөп, самодержавие деспотизмын, феодаль-патриархаль иҫкелекте, дини фанатизмды тәнҡит итеүсе һәм шул осорҙоң йөҙөн

билдәләүсе халыҡсан-демократик әҙәбиәт шаҡтай киң ҡолас менән үҫеп китте.

Шулай уҡ «Дин вә мәғишәт» кеүек дини органдар тирәһенә тупланып, бөтә төр яңылыҡты быуып ташларға ынтылған ҡәҙимселәрҙең, реакцион дин әһелдәренең әле үҙ позицияһында шаҡтай ныҡ тороуҙарын күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай.

«Һәр бер милли культурала, — тип өйрәтә В. И. Ленин, — етлекмәгән төҫтә булһа ла, демократик һәм социалистик культура элементтары бар, сөнки һәр бер милләттә хеҙмәтсән һәм эксплуатацияланыусы масса бар, уның тормош шарттары ҡотолғоһоҙ рәүештә демократик һәм социалистик идеология тыуҙыра. Ләкин һәр милләттә шулай уҡ һәм шуның менән бергә, «элементтар» төҫөндә генә түгел, бәлки хөкөм һөрөүсе культура төҫөндә — буржуаз культура ла, ә күбеһенсә тағы ҡара груһтар һәм клерикалдар культураһы бар. Беҙ, «демократизмдың һәм бөтә донъя эшселәре хәрәкәтенең интернациональ культураһы» лозунгыһын ҡуйып, һәр милли культуранан уның тик демократик һәм социалистик элементтарын ғына алабыҙ, уларҙы тик һәм һис һүҙһеҙ һәр милләттең буржуаз культураһына, буржуаз милләтселегенә ҡапма-ҡаршы итеп алабыҙ»[22].

Синфи антагонистик йәмғиәт шарттарында тыуған культура мираҫын өйрәнеү һәм баһалауҙа беҙ В. И. Лениндың ошо күрһәтмәләренән сығып эш итәбеҙ. Сөнки, башҡа милли әҙәбиәттәр кеүек ныҡ үҫешкән әҙәбиәт булмаһа ла, үҙ аллы әҙәбиәт булып формалашыу юлына яңы ғына баҫһа ла, XX быуат башындағы башҡорт әҙәбиәтендә лә, социалистик һәм демократик элементтар булған кеүек, хакимлыҡ итеүсе синыфтарҙың реакцион ҡараштарын сағылдырған, халыҡ өсөн ят әҫәрҙәр ҙә юҡ түгел.

XX быуат башындағы башҡорт демократик әҙәбиәте татар әҙәбиәте менән тығыҙ бәйләнештә барҙы һәм, интенсив рәүештә прогрессив рус әҙәбиәтенең йоғонтоһон кисереп, тиҙләтелгән үҫеш юлын үтте. Ул сағыштырмаса ҡыҫҡа ваҡыт эсендә мәғрифәтселек реализ-

---

[22] В. И. Ленин. Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 24-се том, 129-сы бит.

мынан тәнҡитле реализм әҙәбиәте булып формалашыуға аяҡ баҫты.

XIX быуат аҙаҡтарына тиклем башҡорт яҙма әҙәбиәте башлыса поэзиянан торған әҙәбиәт ине. XX быуат башында иһә, поэзия өҫтөнлөк иткән һүрәттә, проза жанрҙары ла шаҡтай йылдам рәүештә үҫә башлай. Нәҫер, хикәйә кеүек бәләкәй проза жанрҙарының Ә. Таңғатаров, М. Ғафури кеүек һүҙ оҫталары үҫеп сыға. М. Ғафури, А. Таһиров, З. Өммәти, Ә. Иҫәнбирҙин кеүек прозаиктар тәүге башҡорт повестарын ижад итәләр. Ваҡытлы матбуғат биттәрендә башҡорт халҡының киләсәге, ер мәсьәләләрен күтәреүсе публицистика шаҡтай киң үҫеш ала. Башҡорт милли театры тыуып өлгөрмәһә лә, башҡорт халҡының ысынбарлығын сағылдырыусы драма әҫәрҙәре лә барлыҡҡа килә. Был күренештәр, берҙән, ижтимағи политик шарттарҙың, тарихи ваҡиғаларҙың йылдам алмашыныуы, замандың уғата көсөргәнешлеге менән бәйле булһа, икенсенән, яҙма әҙәбиәткә һут биреүсе бай ауыҙ-тел ижады хаҡында әйтеп тормаҫтан, традицияларға бай һәм көслө рус әҙәбиәтенең, шулай уҡ шаҡтай алға киткән татар әҙәбиәтенең башҡорт милли әҙәбиәтен формалаштырыуға ифрат ыңғай йоғонтоһо менән аңлатыла.

Ләкин үҙ башҡорт әҙәбиәтенең милли яҙма теленә нигеҙләнгән матбуғаты һәм нәшриәте булмай, шул заман татар әҙәби телендә яҙылып, татар матбуғаты биттәрендә һәм нәшриәттәрендә баҫылып килгән башҡорт шағирҙарының һәм яҙыусыларының ижадын башҡорт әҙәбиәте итеп ҡарау һәм шунан сығып фекер йөрөтөү революцияға тиклем бөтөнләй тип әйтерлек булманы. Тик Бөйөк Октябрь революцияһынан һуң ғына башҡорт халҡының әҙәби мираҫын йыйып баҫтырыу һәм ғилми өйрәнеү эшен йәйелдереп ебәрергә мөмкинлек тыуҙы.

Был эш Бабич әҫәрҙәрен йыйыуҙан башланып китә. 1920 йылдың апрелендә Башҡортостан ревкомы уның әҫәрҙәрен Башҡортостан дәүләт милке тип ҡарар сығара һәм уны йыйып баҫтырып сығарыу бурысын Мәғариф Комиссариатына йөкләтә. Мәғариф Комиссариаты был эште башҡарыу өсөн махсус комиссия төҙөй һәм Бабичтың бөтә Башҡортостанға сәселгән әҫәрҙәрен йыйыуҙы шағирҙың замандашы Төхфәт Сенәкәйгә тапшыра. Сенәкәй Бабич булған урындарҙа йөрөп, уның

әҫәрҙәрен йыйып тәртипкә килтерә. Ләкин Стәрлетамаҡ нәшриәте уны баҫтырып сығарырлыҡ хәлдә булмағас, Комиссариат был йыйылған материалдарҙың күсермәһен Ҡазанда баҫтырып сығарыу өсөн Ғ.Ибраһимовҡа ебәрә. Ғ.Ибраһимов «Ваҡытһыҙ һәләк булды» тигән баш һүҙ менән 1922 йылда Бабич әҫәрҙәренең һайланма йыйынтығын баҫтырып сығара.

Ғ. Ибраһимовтың был йыйынтыҡҡа яҙған инеш мәҡәләһе Бабич ижадын өйрәнеүҙәге тәүге хеҙмәт булыуы менән генә түгел, бәлки күп мәсьәләләрҙе дөрөҫ ҡуйыуы менән һәм, шағирҙың шәхесен яҡындан белгән кеше булараҡ, уның ижадын һәм тормошондағы ҡаршылыҡлы моменттарҙы объектив баһалауы менән айырылып тора.

1929 йылда йәмәғәтселек Бабичтың үлеүенә 10 йыл тулыу датаһын билдәләп үтә. Шул уңай менән уның ижады һәм тормош юлы хаҡында Башҡортостан һәм Татарстан матбуғаты биттәрендә ифрат ҡаршылыҡлы мәҡәләләр баҫылып сыға.

Бабич әҫәрҙәрен йыйыу эшенә күренекле яҙыусы Имай Насыри тотона. Ул Бабичтың быға тиклем билдәле булмаған байтаҡ шиғырҙарын туплай һәм 1929 йылда «Сәсән» журналының 5, 6-сы һанында «Шәйхзада Бабич» тигән мәҡәлә баҫтыра. Был мәҡәлә, Ғ. Ибраһимов мәҡәләһе кеүек, Бабич ижадына тарихилыҡ принцибынан сығып анализ яһауы менән айырылып тора.

Дөйөм алғанда, утыҙынсы йылдарҙың тәүге яртыһына саҡлы башҡорт халҡының Октябрь революцияһына тиклемге әҙәби мираҫын йыйыу һәм ғилми өйрәнеү мәсьәләләрен ҡуҙғатыусы сығыштар, был өлкәлә тәүге тәжрибә булараҡ айырым мәҡәләләр һәм докладтар матбуғат биттәрендә йышая барғанлығы күренә.

И.Насыри «Әҙәбиәт майҙанында» тигән икенсе бер мәҡәләһендә: «Башҡа милләттәргә кәрәк булған иҫке әҙәбиәтте, иҫке классиктарҙы өйрәнеү, бөгөнгө тормошоңдо үткәндәр менән сағыштырып үлсәп ҡарау — беҙгә лә бик кәрәкле булған нәмә. Беҙҙең дә үҙебеҙгә күрә әҙәбиәтебеҙ, тарихи материалдарыбыҙ бар. Беҙгә лә иҫке документтар эҙләргә, улар менән бөгөнгө тормошто сағыштырырға кәрәк. Дөрөҫ, революциянан элекке миҙгелдә матур әҙәбиәт арҡыры күҙ алдына кәүҙәләндереү өсөн башҡорт халҡының үҙ яҙма матур

әҙәбиәте бөтөнләй юҡ тип әйтерлек хәлдә. Шуға ҡарамаҫтан, башҡорт тормошон матур әҙәбиәт көүҙәләндермәгән тип әйтеү хата булыр»[23], — ти. Булған тиклем әҙәби мираҫты ул йыйып баҫтырырға, өйрәнергә саҡыра.

1929 йылда, Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһына ун йыл тулыу уңайы менән, башҡорт совет әҙәбиәтенең тыуыу һәм үҫеү юлдары хаҡында ҙур булмаған тикшеренеүҙәр ҙә күренгеләй башлай. Был йәһәттән Д.Юлтыйҙың «Башҡорт нәфис әҙәбиәте» тигән мәҡәләһе иғтибарға лайыҡ. Юлтый, башҡорт әҙәбиәтенең үҫеше хаҡында һөйләүҙән элек, революция алдындағы башҡорт әҙәбиәтенә лә, айырым яҙыусыларҙың ижадына ла туҡталып китә[24].

Ғөбәй Дәүләтшиндең Башҡортостан яҙыусыларының конференцияһында һөйләгән «Башҡорт әҙәбиәтенең тарихи үҫеше»[25] тигән доклады ла Д. Юлтыйҙың ошо мәҡәләһенә яҡын тора. Ләкин Дәүләтшин башҡорт яҙма әҙәбиәтен Юлтый кеүек 1905 йылдан түгел, ә алыҫтанырaҡ, XIX быуат баштарынан, суфый шағирҙар ижадынан алып ҡарай. Шулай уҡ XX быуат башында пантюркистарҙың һәм татар буржуаз милләтселәренең башҡорт халҡын татарлаштырырға тырышыу политикаһы алып барыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала. Ошондай ҡаршылыҡлы шарттар булыуына ҡарамаҫтан, ти ул, С. Яҡшығолов, Ф. Туйкин, З. Өммәти кеүек яҙыусылар үҙҙәренең әҫәрҙәрендә башҡорт халҡының ысынбарлығын сағылдырҙылар, аяҡҡа баҫып килеүсе башҡорт буржуазияһының тауышын ишеттерҙеләр.

Революцияға тиклемге башҡорт яҙыусылары баштараҡ дөйөм «төрки» телдә, унан һуң татар яҙма әҙәби телендә ижад иткәндәр. Был күренеш башҡорт яҙма әҙәби мираҫын өйрәнеүселәрҙең ҡаршылыҡлы һығымталар сығарыуына килтергән. Ғабдулла Амантай «Милли әҙәбиәтте билдәләү принциптары» тигән мәҡәләһендә бына ошо мәсьәләгә асыҡлыҡ индерергә, был күре-

---

[23] Башҡортостан, 1929, 7 август.

[24] «Мәҙәниәт фронтында ун йыл» исемле йыйынтыҡ. — Өфө, 1929, 95-се бит.

[25] На подъеме: Сборник материалов 1-й Облконференции пролетарских писателей. — Уфа, 1930.

неште тәүге тапҡыр ғилми яҡтан нигеҙләүгә ынтылыш яһаған. Ул революцияға тиклем татарҙы ла, башҡортто ла хеҙмәтләндереп килгән яҙма телдең үҙсәнлектәренә тарихилыҡ принцибынан сығып шаҡтай объектив баһа биргән, был телде башҡорттар ҙа борондан үҙ яҙма теле итеп иҫәпләп, ҡулланып килеүҙең тарихи сәбәптәрен асыҡлаған. Аҙаҡтан Амантай: «Теге йәки был әҙәбиәтте теге йәки был милләт әҙәбиәте итеп таныр өсөн уның теле яғынан шул милләт массаһы үҙенеке итеп таныған телдә яҙылыуы, тематик яҡтан күпселектә шул милләт тормошон сағылдырыуы, идея йүнәлеше яғынан шул милләт культураһын байытыу һәм үҫтереүгә туранан-тура булышлығы булыуы шарт»[26], — тигән һығымтаға килгән.

Әҙәбиәт күренештәренә был рәүешле яҡын килеү һуңғы дәүер өсөн, нигеҙҙә, дөрөҫ принцип булып тора. Ләкин уны башҡорт халҡының тулайым яҙма әҙәби мираҫын билдәләүгә универсаль принцип итеп ҡарап булмай. Сөнки был принциптың тәүге пунктын кире ҡағып булмаған һүрәттә лә, икенсе пункты бөтә дәүерҙәр өсөн мотлаҡ булып тора алмай. Әҙәбиәттең халыҡ тормошона яҡын килеүе, теге йәки был яҙыусының конкрет милләт вәкиле булараҡ сығыш яһай башлауы һәр халыҡтың тип әйтерлек милләт булып ойошоу дәүеренә аяҡ баҫҡан осоронда ғына күренә башлай. Ә инде һәр халыҡтың милләт булып формалашыуы, билдәле булыуынса, феодализмдан капитализмға күсеү осорона тура килә. Был осор, үҙ сиратында, мәғрифәтселек идеологияһын һәм әҙәбиәтен килтереп тыуҙыра. Шуға ла, ниндәй әҙәбиәттең тарихына күҙ ташлаһаң да, милли үҙенсәлектәр, милли характерҙар тап ошо мәғрифәтселек осоронда нығыраҡ сағыла башлағанлығы күренә.

Ғ. Амантай «Башҡорт әҙәбиәте»[27] дәреслеген һәм хрестоматияһын яҙғанда нигеҙҙә үҙенең ошо принцибынан сығып эш иткән. Дәреслек С. Яҡшығолов, Ф. Туйкин, Х. Ғәбитов, Ш. Бабич, Ә. Таңғатаров, Д. Юлтый, А. Таһировтарҙың революцияға тиклемге ижадтарын өйрәнеү буйынса асылда тәүге хеҙмәт булыуы яғынан әһә-

---

[26] Октябрь. — Өфө, 1934, № 4.

[27] Башҡорт әҙәбиәте: Дәреслек һәм хрестоматия. II киҫәк, 6-сы класс өсөн. — Өфө, 1934.

миәтле. Яҡшығолов, Туйкин, Таңғатаров, Ғәбитов кеүек яҙыусыларҙың биографияларын да беҙ тик Амантайҙың ошо китабынан ғына таба алабыҙ.

Билдәле булыуынса, утыҙынсы йылдарҙың урталарынан алып илленсе йылдарға тиклем, революцияға тиклемге әҙәби мираҫты тулыһынса тупларға һәм өйрәнергә мөмкинлек булмай.

Шуға ла был йылдар эсендә А. Ҡудаштың 8-се класс өсөн әҙәбиәт дәреслегендә[28] М. Аҡмулла менән М. Өмөтбаев ижадтары хаҡындағы айырым бүлектәрҙән тыш, әҙәби мираҫты өйрәнеүгә ынтылыш яһаған теге йәки был хеҙмәтте атап күрһәтеүе ҡыйын.

Илленсе йылдарҙың икенсе яртыһынан башлап әҙәби мираҫты йыйып баҫтырыу һәм фәнни яҡтан өйрәнеү эше йәнләнеп китте. Был осор М. Ғафури, Д. Юлтый, А.Таһиров, Ш.Бабичтарҙың һайланма әҫәрҙәре баҫылып сыҡты, уларға ғилми яҡтан төплө баш һүҙҙәр яҙылды, әҫәрҙәренә аңлатмалар бирелде.

Был йылдарҙа әҙәби мираҫты туплау һәм өйрәнеү буйынса айырата Ә.Харисов ҙур эш башҡарҙы, һөҙөмтәлә уның XX быуат башына тиклемге культура тарихын һәм әҙәби мираҫты өйрәнеү буйынса ҙур хеҙмәте — «Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы. XVIII—XIX быуаттар» (1965) тигән китабы баҫылып сыҡты. Был күренеш әҙәбиәт ғилеме тарихында оло ваҡиға булды, һуңғы йылдарҙа шулай уҡ Ғ.Хөсәйеновтың С.Ҡудаш, Д.Юлтый ижадтарына, Ғ.Рамазановтың М.Ғафури ижадына арналған ентекле монографиялары баҫылды. Был монографияларҙа С.Ҡудаш, Д.Юлтый, М.Ғафуриҙарҙың революцияға тиклемге ижадтарына ла шаҡтай тулы анализ яһалды.

Шулай ҙа юғарыла яһалған күҙәтеүҙәрҙән асыҡ күренеүенсә, XX быуат башындағы башҡорт әҙәбиәтен дөйөм алып монографик планда өйрәнгән хеҙмәттәр әлегә тиклем бөтөнләй юҡ әле.

«XX быуат башында башҡорт поэзияһы» тигән хеҙмәттә Ғ.Хөсәйенов ошо дәүерҙәге башҡорт поэзияһының үҫешен күҙәтеүҙе маҡсат итеп ҡуя. Йәғни, төп бурыс булып башҡорт поэзияһының ошо дәүерҙәге фор-

---

[28] А. Ҡудаш. Әҙәбиәт: Башҡорт урта мәктәбенең 8-се класы өсөн дәреслек. — Өфө, 1951.

малашыу мәсьәләләрен тикшереү, уның йүнәлештәрен һәм үҫеш юлдарын билдәләү тора. Ошо бурысты үтәү процесында поэзияла тәнҡитле реализмдың ниндәй шарттарҙа үҫеүе, уның формалаша барыуына ла күҙәтеү яһала.

XX быуат башы ҙур-ҙур тарихи ваҡиғаларға бай һәм ҡатмарлы булған кеүек, был осорҙа башҡорт поэзияһы ла шаҡтай ҡаршылыҡлы үҫеш кисерә. Хеҙмәт шул осор поэзияһын монографик планда өйрәнеү буйынса тәүге тәжрибә булып тора һәм ул бөтә мәсьәләләрҙе күтәреүгә һәм тулыһынса хәл итеүгә дәғүә итмәй.

## Революция тулҡындарында

### 1

Башҡорт баҫма әҙәбиәтенең йәнләнеп, үҙ аллы әҙәби процесс булып формалашыу юлына ныҡлы аяҡ баҫыуы 1905—1907 йылдарҙағы буржуаз-демократик революция осоро менән тығыҙ бәйле. Революция уға тиклем моронлап килгән милли интеллигенцияның рухи уяныуына, милләт төшөнсәһенең конкрет характер ала барыуына, икенсе төрлө әйткәндә, башҡорттарҙың милләт булып ойошоуына ифрат ыңғай йоғонто яһаны.

XX быуат башы төрлө идеялар, йүнәлештәр, партиялар көрәшенең сыбарлығы менән айырылып тора. Ләкин дәүерҙең йөҙөн, ижтимағи үҫештең йөкмәткеһен иң эҙмә-эҙлекле революцион синыф булған пролетариат һәм уның идеологияһы — марксизм-ленинизм билдәләй ине. Шуға күрә Башҡортостандағы милли-колониаль иҙеүгә ҡаршы азатлыҡ хәрәкәтен буржуаз милләтселәрҙең эшмәкәрлегенә генә ҡайтарып ҡалдырыу дөрөҫ булмаҫ ине.

Империализмға, милли-колониаль иҙеүгә ҡаршы көрәш, милләттәрҙең үҙбилдәләнеше мәсьәләләре Коммунистар партияһының программаһында урын алыуы үҙе үк был көрәшкә коммунистарҙың етәкселек итеүе һәм уны көсәйтеүе хаҡында һөйләп тора. Шуға ла милли-азатлыҡ хәрәкәте, дөйөм революцион процестың состав өлөшөнә әйләнеп, батша самодержавиеһының нигеҙен ҡаҡшатыуға хеҙмәт итте.

В. И. Ленин 1905 йылда «Партия ойошмаһы һәм партиялы әҙәбиәт» тигән мәҡәләһендә әҙәбиәттә партияһыҙлыҡ, буржуаз азатлыҡ һәм буржуаз индивидуализм принциптарын ҡырҡа кире ҡағып, партиялылыҡ принциптарын ҡайнар яҡлап сыҡты һәм әҙәбиәт дөйөм пролетариат эшенең мөһим өлөшө булып әйләнергә тейеш тип өйрәтте. «Эшкә тотонайыҡ, иптәштәр! — тип яҙҙы В.И.Ленин. Беҙҙең алда, социал-демократик эшселәр хәрәкәте менән айырылғыһыҙ бәйләнештә, ауыр һәм яңы, ләкин бөйөк һәм маҡтаулы, киң, төрлө яҡлы һәм күп төрлө әҙәбиәт эшен ойоштороу бурысы тора»[29].

Пролетариат юлбашсыһының был хеҙмәте, үҙенең баҫылып сыҡҡан көнөнән алып, әҙәбиәт өлкәһендә партия политикаһының етәксе документына әйләнде.

1905—1907 йылдарҙағы революция осоронда Коммунистар партияһының легаль һәм легаль булмаған органдарында революцион йөкмәткеле йырҙар һәм башҡа төр әҫәрҙәр барған һайын йышыраҡ күренә башлай. Бигерәк тә эшселәр ойошмаларында революцион йырҙар киң тарала. Башҡорттар һәм татарҙар араһына революцион поэзияның килеп инеүе, Ҡазан, Ырымбур, Өфө большевиктарының эшмәкәрлеге менән тығыҙ бәйле. Эшселәр араһында популяр революцион йырҙарҙы рус теленән татарсаға тәржемә итеп таратыуҙа айырыуса Ҡазан большевиктарының роле ҙур була. «Марсельеза», «Варшавянка», «Смело, товарищи, в ногу» һәм башҡа революцион йырҙар татарсаға тәржемә ителеп, РСДРП-ның Ҡазан комитеты листовкаһы формаһында гектографта баҫылып таратыла[30].

«Ил ауыҙына иләк ҡаплап булмай» тигәндәй, был татарсаға тәржемә ителгән йырҙар Ҡазанда ғына таралып ҡалмай, татарҙар һәм башҡорттар йәшәгән Өфө, Ырымбур һәм башҡа урындарға ла үтеп инә, татар, башҡорт эшселәренең популяр йырҙарына әүерелә бара. Революцион йырҙарҙың таралыуы, бер яҡлап, башҡорттар һәм татарҙар араһында синфи аң уятыуға бу-

---

[29] В. И. Ленин. Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 12-се том, 104-се бит.

[30] Ҡарағыҙ: М. Х. Гайнуллин һәм Ж. Г. Вәзиева. Татар әдәбияты. XX йөз. I кисәк. — Казан, 1954, 279—286-нчы битләр.

лышлыҡ итһә, икенсе яҡтан, революцион рухтағы оригиналь поэзияның килеп тыуыуына ҙур йоғонто яһай. Ырымбурҙа татар телендә сыҡҡан беренсе большевистик газета «Урал» һәм уның йоғонтоһонда булған «Карчыға» журналы биттәрендә революцион рухтағы милли шиғырҙарҙы йыш осратырға мөмкин була. Шулай уҡ эшсе һәм крәҫтиән талаптарын, йәғни синфи талаптарҙы ҡуйған революцион-демократик йөкмәткеле шиғырҙарҙы «Чүкеч» журналында һәм дәүләт думаһында «Мосолман хеҙмәт тайфәһе» группаһын ойоштороусы башҡорт депутаты К.Хәсәнов етәкселегендә сыҡҡан «Дума» газетаһы биттәрендә лә осратырға мөмкин.

Был поэзияны, тематикаһына ҡарап, өс төркөмгә бүлергә һәм яҡынса ошолай атарға була: эшселәр тауышы; крәҫтиәндәр тауышы; самодержавиеға һәм реакцияға ҡаршы йүнәлтелгән демократик йөкмәткеләге революцион поэзия.

Эшселәр синыфының буржуаз-демократик революция осорондағы талаптарын сағылдырған һәм уларҙы үҙ хоҡуҡтарын яулау өсөн берҙәм көрәшкә саҡырған шиғырҙарға 1906 йылда «Карчыға» журналының 2-се һанында баҫылған «Һигеҙ сәғәт эш ваҡыты», «Чүкеч» журналының 1907 йылғы 17-се һанында сыҡҡан «Эшсе ауыҙынан», «Дума» газетаһының 1907 йыл 16-сы май һанында бирелгән «Эшсе» шиғырын һәм «Карчыға»ла 1907 йыл ғинуар һанында урынлаштырылған сатирик йөкмәткеле «Байҙар марсельезаһы» шиғырҙарын индерергә мөмкин. Уларҙың һәр береһен дә, әлбиттә, эшселәр синыфының алдынғы ҡараштарын сағылдырыусы, эҙмә-эҙлекле революцион шиғыр тип әйтеп булмай. Уларҙа милли эшселәр синыфының әле ысын мәғәнәһендә пролетариат булып етлекмәүенән килеп сыҡҡан йомшаҡ яҡтар ҙа юҡ түгел. Шуға ла шиғырҙарҙың дөйөм рухына күбеһенсә эшселәрҙең яҡындағы маҡсаттарын — экономик талаптарҙы алға һөрөү хас.

Шул уҡ ваҡытта, эшселәр синыфының үҫешенә тарихи ҡарағанда, экономик талаптарҙың өҫтөнлөк итеүе тәбиғи ҙә, сөнки ул Коммунистар партияһының революция осорондағы тактикаһы һәм программаһына ярашлы рәүештә алып барыла һәм пролетариатты артабан политик көрәшкә ылыҡтырыуҙа мөһим сараларҙың береһе булып тора ине. «Һигеҙ сәғәт эш ваҡыты» шиғырында:

Сигез сәғәт эш ваҡыты —
Безгә бигрәк шул кирәк[31], —

тип эш көнөн һигеҙ сәғәт менән сикләү талап итеүһә, «Эшсе» шиғырында эшселәр тормошона тәрәнерәк үтеп инеү һәм талаптарҙы ҡәтғиерәк ҡуйыу күҙгә ташлана. Бында ла шиғыр эшсе ауыҙынан һөйләтелә. Автор тәүҙә эшсенең тормошо ауыр булыуға, тир түгеп, аһ ороп эшләүенә ҡарамаҫтан бик аҙ эш хаҡы алыуына, уның да бер өлөшө буржуйҙар тарафынан тотолоп ҡалыныуына зарлана. Шулай уҡ:

Китеп бетте чәчә торған ерләремез,
Эшче булдыҡ хатын-ҡыз һәм ирләремез,
Ҡызу көндә ауыр эшләр эшли-эшли,
Арҡамыздан аға ҡара тирләремез[32], —

тип, ерҙәре тартып алынған һәм бөлгөнлөккә төшкән крәҫтиәндең, ауылын ташлап, эшсе булып китеүен, йәғни башҡорт һәм татарҙарҙың пролетарлашыу процесын сағылдыра. Кисә генә тип әйтерлек еренән айырылған крәҫтиән — бөгөнгө эшсе, әле Дума иллюзияларынан да азат түгел:

Һич ҡурҡмыйча хаҡымызны тәмам сорыйҡ,
Бирмәсәләр, һәр ҡайымыз ҡаршы торыйҡ, —

тип әйтелә шиғырҙа, һәм һорап та алып булмаһа, берләшеп көрәшкә күтәрелеү кәрәклеген дә иҫкәртеп ҡуя. Бында инде Дума депутаты К.Хәсәновтың Думала тотҡан позицияһы асыҡ күренә. Шулай булыуына ҡарамаҫтан, шиғыр синфи мәсьәләләрҙе күтәреүе, хеҙмәт кешеһен яҡлап сығыуы менән үҙ заманы өсөн ҙур әһәмиәткә эйә.

«Чүкеч» журналында баҫылған «Эшсе ауыҙынан» шиғыры юғарыла ҡаралып киткән шиғырҙарҙан революцион рухы менән ярайһы ыңғай яҡҡа айырылып тора. Бында ла тәүҙә һүҙ эшселәрҙең көнө-төнө эшләүҙәренә ҡарамаҫтан, ас-яланғас йәшәүҙәре тураһында бара. Артабан: «Ни өсөн беҙгә донъяла был тиклем

---

[31] Карчыга, 1906, № 2.
[32] Дума, 1907, 16 май.

яфалар, ғүмер буйы бөтмәй торған хафалар... Беҙҙең дә рәхәт күрәһе көнөбөҙ бармы?» — кеүек һорау ҡуйыла, һәм:

Юҡ, туғандар, рәхәт көтәргә ярамый,
Бергәләп көрәшергә кирәк, һич нигә ҡарамый.
Көрәшеп кенә хаҡымызны алырмыз,
Юҡса бөтөнләй мәхрүм ҡалырмыз[33], —

тип эшселәрҙе, бәхетте көтөп кенә ятмай, революцион көрәш менән яулап алырға саҡыра.

1905—1907 йылдарҙағы революция осоронда крәҫтиәндәр талабын сағылдырыусы демократик рухтағы поэзияға «Карчыға»ла баҫылған «Ер кәрәк» (1907), «Ауыл халҡынан» (1907), «Дума члендарына» (1907) һәм «Дума» газетаһындағы «Бер крәҫтиәндең Думаға зарланып әйткәне» тигән шиғырҙарҙы индерергә мөмкин. Был шиғырҙар, йөкмәткеләре менән бер-береһенә яҡын тороп, художестволы эшләнештәре яғынан заманындағы профессиональ поэзиянан түбәнерәк булһалар ҙа, уларҙа аграр мәсьәләнең ни дәрәжәлә киҫкен тороуы сағылған һәм яҙмыштары ошо мәсьәләгә бәйләнгән крәҫтиәндәрҙең революция осорондағы психологияһына хас һыҙаттар кәүҙәләнеш тапҡан.

Был шиғырҙар стиле һәм композицион ҡоролошо яғынан эшселәр тауышын яңғыратҡан шиғырҙарға бик яҡын торалар. Уларҙың бөтәһе лә тип әйтерлек крәҫтиән ауыҙынан һөйләтелә. Шулай уҡ бөтәһе лә тип әйтерлек 1907 йылдың яҙғы айҙарында баҫылып сыҡҡан, һәм, ҡарҙар иреп, ерҙәр асылыуын — яҙ килеүен хәбәр итеү менән башланып китәләр. Ләкин крәҫтиәнде яҙҙың поэтик гүзәллеге түгел, ә уның сәсеү ваҡыты икәнлеге ҡыҙыҡһындыра, сөнки ул яҙғы көн йыл туйҙырғанлығын яҡшы белә. Ләкин шиғырҙарҙа яҙҙың килеүе крәҫтиәндең хәсрәттәрен яңыртып ҡына ебәрә. Ул аслыҡтан һәм яланғаслыҡтан яфа сиккән, өҫтәүенә, сәсер ере лә юҡ. Шуға ла крәҫтиән поэзияһының үҙәк мәсьәләһе булып ер мәсьәләһе тора, һәм уны Дума аша хәл итергә саҡырыу үткәрелә.

---

[33] Чүкеч, 1907, № 17.

Был йәһәттән «Ер кәрәк» шиғыры үҙенең актив революцион идеялы булыуы менән айырылып тора:

Ач үлемдән ҡотылу өчен
Бигрәк безгә жир кирәк,
Аны сугышып алу өчен
Арыслан йөрәкле ир кирәк.
. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .
Бер ағыздан ҡычҡырайыҡ,
Күрсәтәйек еремез тарлығын;
Бөтен халыҡ союз ҡылып,
Белдерәйек ҡүәтебез барлығын[34].

Ә ҡалған шиғырҙар, үрҙә әйтелгәнсә, туранан-тура Дәүләт Думаһына мөрәжәғәт формаһында яҙылған. Миҫал өсөн «Дума члендарына» тигән шиғырға туҡталып китәйек. Автор шиғыры менән туранан-тура Дума ағзаларына мөрәжәғәт итә. Ләкин ул, буржуаз милләтселәр кеүек, милләт һәм дин тураһында ғына ҡайғыртмай, уның төп ҡайғыһы — кәмһетелгән, хәйерселеккә төшөрөлгән хеҙмәтсәндәр массаһы, крәҫтиәндәр. Шуға ла беҙ был шиғырҙа буржуаз ҡоролошҡа социаль протест булып яңғырарлыҡ юлдар осратабыҙ:

Безне бер яҡлап байлар аулады,
Зур налоглар салып хөкүмәт талады;
Суйырға алып барған ҡуйлар кебек,
Көтү-көтү сугышҡа һәм ҡыуалады.
Алабутадан булды ашларымыз,
Ер, ирек, дип ҡырылды күп йәшләремез,
Алар өчен түгелде ҡанлы йәшләремез.
Хөкүмәт жаһиләт пәрдәсене ҡорған,
Ҡуәт юҡ мунларға ҡаршы торорға.
«Истибдад[35] чылбырын өзөү» — дип,
Арыслан егетләр булды ҡорбан.
Аларның күбесе төрмәгә тулды,
Асылған-киселгәннәр дә күп булды.
Хөрриәт теләүче күп адәмләр
Салкын Сибириәгә ҡуылды...

Күренеүенсә, автор бында хөрриәт, ер, ирек даулаусылар менән уларға ҡаршы тороусы ҡара көстәрҙең көрәшен эҙмә-эҙлекле һөйләп бирә, һәм заманының ре-

---

[34] Карчыга, 1907, № 6.
[35] Истибдад — реакция.

акцион атмосфераһын ярайһы тулы сағылдыра. Артабан:

Сайладык беҙ сезне ир диеп,
Кирәкләремезне алып бир диеп,
Дин, шәриғәт, дип кенә утырмағыҙ,
Ҡычҡырыңыз: «Ирек һәм ер!» — диеп, —

ти.

Дума ағзаларын уңды-һулды айыра белергә, «октябристар» һәм башҡа шундай халыҡ мәнфәғәттәренә ҡаршы тороусы партияларҙың йоғонтоһона бирелмәҫкә, «һулдарҙан һис айырылмаҫҡа» саҡыра.

Йәне-тәне менән хеҙмәтсәндәр яғында торһа ла, автор әле синфи бөлгөнлөктән һәм ҡоллоҡтан марксизм-ленинизм теорияһы менән ҡоралланған революцион көрәш аша ҡотолорға мөмкинлеген аңлауҙан алыҫ тора.

Динемезгә булсын полный ихтияр:
Теләгән торма ашасын, теләгән — ҡыяр.
Социализм тәмам урынлашсын,
Шул ваҡыт ҡына халыҡ булыр бәхтияр[36], —

ти ул. Социализмдың Дума тарафынан урынлаштырылыуына ышана. Күрәһең, ул ҡайҙандыр социализм тураһында ишетеп ҡалған, уның кешеләргә ғәҙеллек, бәхет һәм ирек алып килеүен дә шәйләгән. Ләкин социализмды яулап алыу тураһында түгел, ә һорап алыу яғында тора. Халыҡтың, аңын томалап, хакимлыҡ итеүсе синыфтарға иҙеү ҡоралы булып хеҙмәт итеүсе диндең асылына төшөнә алмай, уның менән социализм араһында ниндәйҙер гармония эҙләй. Шулай булыуына ҡарамаҫтан, шиғыр самодержавиеға һәм реакцияға ҡаршы йүнәлеше, хеҙмәтсәндәр мәнфәғәтен күҙәтеүе менән уҡыусыла ыңғай тәьҫир ҡалдыра.

«Урал» газетаһы биттәрендә баҫылған «Төрмәнән», «Яҙ килеүе» һәм «Карчыға»ла баҫылған «Күҙ йәштәре» шиғырҙарында самодержавиеға һәм реакцион көстәргә ҡаршы нәфрәт ауаздары асығыраҡ һәм көслөрәк ишетелә.

---

[36] Карчыга, 1907, № 8.

«Күҙ йәштәре» шиғырында, мәҫәлән, икмәк, ирек, ер даулаусы революцион халыҡҡа реакцион көстәрҙең күтәрелеүе, илдең һәр мөйөшө нагайкалар һелтәп тороусы стражниктар, казактар, полевой судтар менән тулыуы, ҡыҫҡаһы, «бөтә Россияның чумаға әйләнеп» барыуы һүрәтләнә. Хөрриәт, икмәк даулаусылар атылалар, төрмәгә ултыртылалар һәм Себергә һөрөләләр. Ләкин автор өмөтөн өҙмәй:

Озаҡламый, төн ни ҡәдәр озын булмасын,
Ер йөзе золым илә һәм тулмасын,
Арысландар Сибириәгә күпме ҡуылмасын, —
Ниһаят, бер таң атмый ҡалмас имде[37], —

тип киләсәккә ышаныс менән ҡарай.

«Төрмәнән» шиғырында, татар һәм башҡорт поэзияһында беренсе башлап, азатлыҡ өсөн көрәш юлында реакция тарафынан төрмәгә ташланған политик тотҡон — революционер образын тыуҙырыуға ынтылыш яһалған. Халыҡ бәхете өсөн көрәшеүсе тотҡон төрмәлә лә көрәш уты менән янып йәшәй:

Төрмәләрдә черсәм дә палачларның ҡулында,
Җаным-тәнем фида улсын хөрриәтнең юлында.
Телем берлән итәмен ант шаһитләрнең санына
Ҡәләмемне манчып язам йөрәгемнең ҡанына.
Ер йөзене ут алса да, кире ҡайтмам юлымнан,
Җан бирсәм дә, бән бирмәмен җәсрәтене ҡулымнан[38].
Эй, туғандар, тырышайыҡ, җәсрәтене алырға,
Золымларның жанларыны җәһәннәмгә салырға!
Бер көн етәрмез, алырмыз ҡулымызға хөрриәтне,
Күңелеңездә ныҡ тотыңыз ошбу изге ниәтне[39].

«Урал» газетаһында баҫылған «Яҙ килеүе»[40] тигән икенсе шиғыр поэтик йәһәттән юғарыла ҡаралған әҫәрҙәрҙән айырылып тора. Унда шағир үҙенең әйтәһе фекерен туранан-тура ҡоро һөйләү рәүешендә түгел, ә образлы фекер йөрөтөү аша әйтеп биргән. Шиғырҙа азатлыҡты быуып тороусы ҡара көстәр — «ҡаты туңған боҙҙар» һәм «афәтле ел болоттары», ә кешеләргә

---

[37] Карчыга, 1906, № 2.
[38] Җәсрәт — ҡыйыулыҡ, батырлыҡ, йөрәклелек.
[39] Урал, 1907, 12 ғинуар.
[40] Шунда уҡ, 1 апрель.

тигеҙ бәхет алып килеүсе революция — яҡты ҡояшлы яҙ образдары аша һүрәтләнгән.

1905—1907 йылдарҙағы революцион рухтағы шиғырҙарҙың күбеһенең, шул иҫәптән «Яҙ килеүе» шиғырының да авторы быға тиклем билдәле түгел ине. Ләкин «Дума члендарына» шиғырын «Ш. М.» имзаһы аша «Карчыға» журналын сығарыусы Шакир Мөхәммәдов үҙе яҙған икәнлеген икеләнмәй әйтергә мөмкин. Шулай уҡ «Ҡайғылы» псевдонимы менән баҫылған «Күҙ йәштәре» шиғыры ла стиле менән «Дума члендарына» яҡын тора. Был шиғырҙы ла Ш.Мөхәммәдов яҙған тип әйтергә ныҡлы урын бар. Ә инде «Яҙ килеүе» шиғырының аҫтына «Сафуан әл-Яппари» тип ҡуйылған. Тимәк, уның авторы — башҡорт шағиры Сафуан Яҡшығолов. Сөнки, беренсенән, С.Яҡшығолов был ваҡытта Яңы Яппар ауылында йәшәгән булһа, икенсенән, был шиғырын ул, бер аҙ үҙгәртеп, 1912 йылда баҫылған «Дим буйы» тигән китабына ла индергән. Китапта шиғырының яҙылыу датаһы «1905 сәнә, үктәбер» тип ҡуйылған. Шулай итеп, шиғыр «Уралда» 1907 йылда баҫылһа ла, ул 1905 йылда уҡ яҙылған булған.

Революцияның еңелеүе менән бергә революцион йөкмәткеле шиғырҙарҙың майҙаны булып торған большевистик «Урал» газетаһы һәм демократик позицияла торған башҡа органдар ҙа, реакцияның ҡыҫымы арҡаһында, йәшәүенән туҡтанылар. Ләкин революция тулҡындары менән килеп тыуған күтәренке рухлы был поэзия эҙһеҙ генә ҡалманы, әлбиттә. Ул революция осоронда синфи аңы уяна башлаған башҡорт һәм татар хеҙмәтсәндәренең күңел түрендә урын ала, уларға аҡты ҡаранан айырырға ярҙам итеп, яңы көрәшкә рухландырыу өсөн хеҙмәт итә. Шулай уҡ революцион поэзияның һәйбәт традициялары артабан башҡорт һәм татар шағирҙарының ижадында үҙенсәлекле рәүештә дауам иттерелә.

## 2

Россиялағы беренсе революция алдынан башланған халыҡ хәрәкәте һәм дөйөм революцион күтәрелеш йылдарында әҙәбиәткә килгән иң күренекле шағир **Мәжит Ғафури** (1880—1934) булды. Уның ижады XIX

быуаттың һуңғы сирегендәге шағирҙар Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев, Мифтахетдин Аҡмулла һәм татар мәғрифәтселек әҙәбиәте традицияларында үҫеп сыҡты, һәм ул, ижадындағы ҡаршылыҡлы яҡтарын еңә барып, XX быуат башының ҡатмарлы шарттарында башҡорт һәм татар әҙәбиәтенең халыҡсанлығы өсөн көрәштә үҙәк урында торҙо, үҙенән һуң әҙәбиәткә килеүсе күпселек шағирҙарға ыңғай йоғонто яһаны.

Ғафуриҙың бай һәм күп яҡлы ижады халыҡ тарафынан баһаланыу яғынан да, фәнни өйрәнелеү яғынан да бәхетле ижад булды. Башҡорт һәм татар әҙәбиәт ғилеме донъяһында уның поэзияһы һәм прозаһы тураһында йөҙәрләгән мәҡәләләр яҙылыуы, ижадының айырым проблемаларын йәки айырым осорҙарын өйрәнгән махсус тикшеренеүҙәрҙең барлыҡҡа килеүе быға асыҡ миҫал була ала. Шулар араһынан Ғ. Рамазановтың 1965 йылда донъяға сыҡҡан хеҙмәте әҙәбиәт ғилеменең бөгөнгө юғарылығынан тороп әйтелгән һуңғы һүҙ булыуы менән айырым урынды биләй.

Ләкин башҡорт әҙәбиәтенең тарихы, бигерәк тә уның XX быуат башы тураһында һүҙ барғанда, Ғафури ижадын, ул ни тиклем күп яҡлы өйрәнелгән булыуына ҡарамаҫтан, урап үтеп булмай.

М.Ғафури ижады үҙенең тәбиғәте менән башҡорт һәм татар әҙәбиәттәренә ҡарауы, уның ике халыҡҡа ла хеҙмәт итеүе бәхәсһеҙ инде. Шулай ҙа ҡайһы бер әҙәбиәтселәр Ғафури ижадының был яғын «татар-башҡорт шағиры» кеүегерәк дөйөм һүҙҙәр менән генә урап үтеү яғында булдылар, был күренештең тарихи асылына үтеп инеүҙән алыҫ торҙолар. Мәсьәләнең айышы, әлбиттә, мираҫ бүлешеү түгел, Ғафури ижадына тәрәнерәк үтеп инеп, ысынлап та ике халыҡ шағиры икәнлеген теоретик раҫлау һәм ике туғандаш халыҡтың да культураһын үҫтереүҙә уның тотҡан урынын билдәләүҙә.

Һуңғы йылдарҙа башҡорт әҙәбиәтселәре был йәһәттән ярайһы ҙур эш эшләнеләр. Ә.Харисов «Башҡортостан ысынбарлығы һәм Мәжит Ғафури»[41] тигән мәҡәләһендә Ғафури ижадының барған һайын башҡорт халыҡ

---

[41] Ҡарағыҙ: Әхнәф Харисов. Әҙәби күренештәр. — Өфө, 1963, 27—47-се биттәр.

ижады традицияларынан үҫеп сыҡҡан милли һыҙаттарҙың тәрәнәйә барыуына уңышлы күҙәтеү яһаған. Ғ.Рамазанов иһә үҙенең монографияһында Ғафуриҙың милли сығышын, бөтә яҙмышының Башҡортостанға бәйле булыуын һәм ижады башҡорт халҡының эстетик аңын үҫтереүҙә ҙур урын тотҡанлығын билдәләне, уның әҫәрҙәре ике халыҡтың да художестволы аңы тыуҙырған традицияларҙан үҫеп сығыуын, яҙыусының «шул ҡәрҙәш халыҡтарҙың тормошон, яҡты идеалдарын, тарихи үҫештәге уртаҡлыҡты»[42] сағылдырыуын тулы күрһәтте. Шулай уҡ Ғафури ижадын ике милли культура үҫешендәге әҙәби бәйләнештәр фонында, дөйөм әҙәби процестың бер уртаҡ күренеше итеп ҡарауҙы был хеҙмәттең уңышы тип иҫәпләргә кәрәк.

Ләкин XX быуат башында Башҡортостандағы әҙәби процесс бер бөтөн итеп өйрәнелмәүе арҡаһында, башҡорт әҙәбиәтенең үҙ милли ерлегенә ултырып, үҙ аллы әҙәбиәт булып үҫеү йүнәлешендә уртаҡ күренеш булған Ғафури ижадының бигерәк тә ҡайһы яҡтары мөһим этәргес булып тороуы асыҡланып бөтмәгән әле. Сөнки, нисек кенә булмаһын, уртаҡ күренештәр уртаҡ булып ҡала: башҡорт әҙәбиәтенең милли йөҙөн улар ғына билдәләй алмай. Ни өсөн тигәндә, башҡорт халҡы менән татар халҡы тормошонда бик күп уртаҡлыҡтар булған кеүек, һәр халыҡты үҙ аллы милләт иткән этник һәм тарихи айырмалар ҙа аҙ түгел.

Башҡорт халҡының милләт булып формалашыу процесы 1905 йылдарға тиклем бик аҡрын булыуы арҡаһында, Ғафури әҙәбиәткә килгән осорҙа башҡорт яҙма әҙәбиәте үҙ милли йөҙөн асыҡларлыҡ кимәлгә күтәрелә алмағайны әле. Ә был ваҡытта инде татар әҙәбиәте үҙ аллы милли әҙәбиәт булып формалашҡан була. Ғафури ижады, тәбиғи рәүештә, бына ошо татар әҙәбиәтенең ағымына ҡушылып китһә лә, нигеҙҙә, остазы Аҡмуллаға ла хас булған дөйөмлөк традицияларын дауам иттереп, татар һәм башҡорт халыҡтарының икәүһе өсөн дә берҙәй мөһим булған көнүҙәк мәсьәләләрҙе күтәреп сыҡты. Шуға ла буржуаз-демократик революциянан һуң әҙәбиәткә килгән һәм башҡорт әҙә-

---

[42] Ғилемдар Рамазанов. Мәжит Ғафури ижады. — Өфө, 1965, 22-се бит.

биәтен үҙ аллы милли әҙәбиәт итеп үҫтереп алып киткән башҡорт шағирҙарына иң элек Ғафури ижады йоғонто яһай.

Ижадының башланғыс осоронда М. Ғафури, күпселек мәғрифәтселәргә хас рәүештә, алға киткән Европа илдәренән ғибрәт алып, халыҡты аң-белемгә, мәғрифәткә ылыҡтырыу юлы менән бәхетле итергә мөмкин тигән ҡараште торҙо. Ул халыҡты ҡараңғылыҡҡа, бөлгөнлөккә дусар итеүсе төп сәбәптәрҙең айышына төшөнә алмаған кеүек, был бөлгөнлөктән, наҙанлыҡтан сығыуҙың мәғрифәттән башҡа юлдары барлығын да күҙ алдына килтерә алмай ине әле.

«Яңы тормош һәм культура тулҡыны, — тип яҙҙы С.Г.Рыбаков, — рус булмаған халыҡтар араһына килеп ҡағылып, уларҙы быуаттар буйы хөкөм һөргән йәшәү рәүештәренән баш тартырға мәжбүр итә, яңы тормош нигеҙҙәренә яраҡлашыу кеүек ауыр мәсьәлә — «йә йәшәү, йә үлем» мәсьәләһе алдына ҡуя. Был кризистың ауырлығы тағы шуның менән арта: хакимлыҡ итеүсе ҡәбилә вәкилдәре бында культураны йыртҡыстарса — крайҙы ҡырағай рәүештә талау, күсмә халыҡтарҙы ерһеҙ ҡалдырып, малдарынан яҙҙырып, — йәғни уларҙы быуаттар буйы йәшәп килгән тормош укладынан бер ниндәй эҙмә-эҙлекһеҙ ҡыҫырыҡлап сығарыу, үлемгә дусар итеү юлы менән көсләп индерҙеләр... Тормош тулҡыны бында бигерәк тә тимер юл үткәрелгәндән һуң ҙур үҙгәрештәр һәм үҙгәртеп ҡороуҙар үткәрә башланы»[43].

XIX быуат мәғрифәтселеге традицияларында тәрбиәләнгән Ғафури бына ошо яңы «тормош тулҡындарының» шауҡымында әҙәбиәткә килә һәм ижадының тәүге осоронда, Ғ.Халиттың дөрөҫ билдәләүенсә, «тышҡы эффекттан алынған беренсе тәьҫир алдараҡ тора»[44]. Шуға ла «Себер тимер юлы...» әҫәрендә шағир тимер юл образы бөтәһенән дә элек фәндең һәм техниканың бер ҡаҙанышы булараҡ, «бөтә көсө менән беҙгә өгөт һөйләүсе» күргәҙмә материал хеҙмәтен үтәй. Тимер юл буйында ултырған башҡорт, татар ауылдарының бөл-

---

[43] С. Г. Рыбаков. Музыка и песни уральских мусульман с очерком их быта. — С.-Петербург, 1887, с. 4.

[44] Г. Халит. Мәжид Гафури ижаты. — Казан, 1941, 23 нче бит.

гөнлөктә, ҡараңғылыҡта йәшәп ятыуҙары шағирҙа үҙ халҡы өсөн әсенеү тойғоһон уята, ләкин әлегә ул синфи йәмғиәт шарттарында цивилизацияның кеше һөйәктәре өҫтөнән ҡоролоуын да, Рыбаков әйтеп үткән милли-колониаль политиканың асылын да аңлап етә алмай, бөтөн нәмәгә тик мәғрифәтсе күҙлегенән генә сығып ҡарай.

Милләтемә итһәм ҡул менән ишара, —
Аты арыҡ, артта ҡалған был бисара,
Артҡа ҡалһа, һаман да ҡайғыһы юҡ,
Алға таба барырға ҡылмай сара[45], —

тип милләтенең артта ҡалыуына халыҡтың үҙен ғәйепләй, һәр бер халыҡтың тарихи яҙмышын — алға китеүен йәки артҡа ҡалыуын — буржуаз этика шауҡымына бирелеп, булдыҡлылыҡ-булдыҡһыҙлыҡҡа ғына ҡайтарып ҡалдырыу яғында тора. «Аурупалы һәр майҙанда алға сыҡты, Африка, Азияны ергә йыҡты», — тип европалыларҙың «ҡаһарманлыҡтарын» хуп күреү ҙә бына ошо бер яҡлы ҡараштарҙан килә ине. Шул рәүешле, Ғафури «Себер тимер юлы...» әҫәрендә мәғрифәткә һәм булдыҡлылыҡҡа бөтөн нәмәне аҡлаусы берҙән-бер критерий итеп ҡарай ине әле.

Әммә донъя тураһында тәрәнерәк уйланыу артабан уның күҙен аса барҙы. 1904 йылда яҙылған «Башҡа мәмләкәттәрҙә мосолмандарҙың хәле» тигән шиғырында был йәһәттән уның ҡараштарында һиҙелерлек үҙгәрештәр, яңы ҡаршылыҡтар барлыҡҡа килгәнлеген күрәбеҙ. Шағир бында ла мәғрифәтселек ҡараштарында тороп:

Мосолмандың һәр урында ҡол булыуы —
Ҡулдарында мәғрифәт, ғилем юҡтан, —

ти, фән һәм техниканы баҫып алыу ҡоралына әйләндереүсе европалыларға нәфрәт менән ҡарай. Хәҙер инде ул Германияның Багдадҡа тимер юл һалыуын да циви-

---

[45] Мәжит Ғафури. Әҫәрҙәр: 6 томда. 1-се том. — Өфө, 1954, 4-се бит. (М. Ғафури шиғырҙарынан өҙөктәр артабан да ошо баҫманың 1-се томынан килтереләсәк.)

лизация индереү, ағартыу тип түгел, бәлки «хәйлә менән ҡул һалыу» икәнлеген төшөнә бара.

Ысынбарлыҡҡа донъя күләмендә күҙ ташлау шағирҙы үҙ илендәге хәлдәргә лә аныҡыраҡ ҡарауға алып килә. Башҡа мәмләкәттәрҙәге мосолмандарҙың хәлен һөйләп килгәндән һуң, ул уҡыусының иғтибарын үҙ иленә йүнәлтә:

Бынан һуң күҙеңде һал һин бирегә:
Халҡыбыҙ ниҙәр эшләй, ниҙәр күрә,
Ниңә былай арыҡ малдай арыҡландыҡ,
Ҡаныбыҙҙы кем һура, кем һимерә?
Япраҡтары ҡойолоп бөткән алмағастай,
Алмаһын төрлө яҡтан ҡорт кимерә,
Теләгән аҫылдарын үҙенә алып,
Ҡалдыҡ-боҫтоҡ, серектәрен беҙгә бирә, —

тип, асыҡтан-асыҡ әйтмәһә лә, халыҡты иҙеп тороусы батша хөкүмәтенә, уның милли-колониаль политикаһына ишара яһай.

«Хаҡ тағәлә беҙҙе тура килтерҙе донъяның матур ҡыҙҙай заманына» тип ауыҙ асҡан Ғафури инде «был донъя — юлдан яҙған уҫал ҡатын» да икәнлегенә төшөнә бара. Ләкин Ғафуриҙың антиколониаль ҡараштары мосолмансылыҡ менән тығыҙ бәйле ине әле. Ошо сикләнгәнлек арҡаһында, ул колониаль политика донъя империализмына хас булған дөйөм күренеш икәнлеген асып һалыу юғарылығына күтәрелә алманы.

Ғафури поэзияһына антиколониаль мотивтарҙың килеп инеүе, әлбиттә, бер мосолмансылыҡҡа ғына ҡайтып ҡалмай, ул бер яғы менән 1905 йылғы революция алдынан башланған аграр хәрәкәткә лә барып тоташа ине. Ғафури был хаҡта асыҡтан-асыҡ әйтеп биреүҙән «тартынды» ғына. Ә инде 1905 йылғы революциянан һуң был антиколониаль мотивтарҙы башҡорт шағирҙары конкретыраҡ һәм асығыраҡ формала, милли ерлектә дауам иттеләр.

Буржуаз-демократик революция тулҡындарында, хеҙмәтсәндәрҙең һүҙ, матбуғат азатлығы яулап алыуы Ғафуриҙа әйтеп бөтөргөһөҙ шатлыҡ тойғоһо уята, ул үҙенең революцияға тиклем быуылып килгән уй-хистәрен асығыраҡ, көслөрәк итеп халыҡҡа еткереү, ижады менән халҡына арымай-талмай хеҙмәт итеү теләгендә янып йәшәй:

Был көн кеүек шатлыҡ көндәр булыр һирәк,
Был көндөң ҡәҙерен бик белмәк кәрәк.
Ҡулыбыҙҙан бығау, сынйыр алынғанда,
Ҡуҙғалайыҡ, әфәнделәр, беҙ тиҙерәк! —

*«Шатлыҡ»*

тип, милли интеллигенцияны был уңайлы шарттан файҙаланып ҡалырға, актив эшмәкәрлеккә саҡырҙы.

17 Октябрь манифесы буржуаз-демократик революцияның батша самодержавиеһынан ҡайырып алған бер ҡаҙанышы ине. Иҙелеп, ҡыйырһытылып килгән рус булмаған халыҡтар өсөн был айырата ҙур шатлыҡ булып күренде. Азатлыҡҡа һыуһаған халыҡтың вәкиле булараҡ, Ғафури ҙа был хәлде «алдан, арттан һәм уң менән һулыбыҙҙан» асылған хөрриәт, һәр милләткә үҙ яҙмышын үҙе хәл итеү өсөн тыуҙырылған уңай шарт итеп ҡабул итте. «Хөрриәт дәүерендә» тигән шиғырында:

Ватылды хазинаның йоҙаҡтары,
Өҙөлдө аяҡтағы тоҙаҡтары,
Хазинаның эсенә күҙең һалһаң,
Күҙгә төшә һәр милләттең үҙ хаҡтары, —

тип азатлыҡты һәр милләттең үҙ өлөшө булған уртаҡ хазина итеп кәүҙәләндерһә, шул уҡ 1905 йылда яҙылған «Инсаф һәм иттифаҡ», «Алға китеү» шиғырҙарында милләтте берҙәмлеккә саҡырып, «асыҡ хазинанан» үҙ өлөшөңдө алырға, форсаттан файҙаланып ҡалырға өндәй:

Был заман ҡуҙғалғанға килде форсат,
Мәғарифҡа ғөмүм милләт ҡуҙғалыр саҡ.

Ғафуриҙың был рухтағы саҡырыуы 17 Октябрь манифесына һәм беренсе Думаға ҙур ышаныс менән ҡарауынан килә ине. Артабан инде, «Көндәребеҙ» шиғырынан күренеүенсә, шағир азатлыҡ мәсьәләһе бөтөнләй үк хәл ителмәгән икәнлегенә төшөнә башлай:

Тыштан һәр бер нәмәне эшләү дөрөҫ,
Асылда һис нәмәгә юҡ ихтыяр.
. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .
Күп кеше ошо көндө ғәйепле булды,
Ҡалманы яҡшыларға һис иғтибар.

Йәки бына тағы бер өлгө:

Кешеләрҙең бәғзеһе туҡ, бәғзеһе ас,
Астарға мәрхәмәтле күҙеңде ас,
Донъя тулған мазлумдарға күҙе төшөп,
Ғәбделмәжит шиғыр яҙа аптырағас.

Яуызлыҡтың социаль асылына тамам төшөнөп етә алмау Ғафуриҙың этик ҡараштарына дини-идеалистик философияның аҙмы-күпме йоғонто яһауынан да килә булһа кәрәк. Был осорҙа әле Ғафури яуызлыҡ менән изгелеккә кешенең тәбиғәтенә тыумыштан һалынған сифаттар һымағыраҡ итеп ҡарай, уларҙың асылын социаль-экономик шарттарҙан эҙләмәй. Яуызлыҡты айырым «золом» эйәһенә генә ҡайтарып ҡалдырыу «Эт һимерһә, эйәһен тешләр» тигән шиғырында ла ярайһы асыҡ сағылған:

Ғәҙеллектә туҙан ҡәҙәр ләззәт булмаҫ,
Золомдо яҡшылыҡ тип уйлағанға;
Хаҡтан ҡурҡып, бәндәләрҙән оялмаһа,
Өйрәнгән ғәҙәтен ҡуя алмаһа,
Күңеле урынында итмәҫ ҡарар, —
Сусҡа кеүек бысраҡлыҡҡа туя алмаһа!

Шул рәүешле Ғафури социаль йөҙө асыҡ булмаған залимдарға һәм, ғөмүмән, золомға ҡаршы сыға, уның әлегә эстетик идеалы ғәҙеллек урынлаштырыусы изгелекле кеше булып ҡала бирә. Был факт шағирҙың был осорҙа әле мәғрифәтселек ҡараштарынан арынып бөтә алмағанлығын күрһәтеп тора.

1906 йылдың башында, революция менән самодержавие араһында көрәш киҫкен төҫ алған осорҙа, яҙылған «Эс бошоу» шиғырында:

Ике арала татыулыҡтар киткән ваҡыт,
Рәхим, шәфҡәт һәм мөхәббәт бөткән ваҡыт;
Тама-тама һыу һауыты ташып китеп,
Тулған һауыт түгелергә еткән ваҡыт, —

икәнлеген күрһә лә, һаман «татыулыҡ» һәм «шәфҡәтлелек» яғында тора, ни эшләргә кәрәклеген үҙе лә асыҡ ҡына әйтә алмай.

Был донъяның йәрәхәте төҙәлмәҫтәй,
Хәле ғәжәп: үлмәҫтәй һәм терелмәҫтәй, —

тип аптырашта ҡала. Ни өсөн кешеләр ғәҙеллек һәм тигеҙлекте рәхим, шәфҡәт, татыулыҡ менән генә ур-таҡлашмайҙар икән тигән һорау уның башын ҡаңғырта әле. Һуңғараҡ инде «Ҡурҡаҡлыҡ», «Мал өсөн», «Фидаи тотҡон ауыҙынан» тигән шиғырҙарында шағир азат-лыҡты һорап ҡына алыу мөмкин түгел икәнлегенә ышана, һәм поэзияһы шаҡтай революцион төҫ ала. «Ҡурҡаҡлыҡ» шиғырында, мәҫәлән:

Йыландан ауырыуға һорау дарыу —
Уларға «бир әле» тип һорап барыу.
. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .
Бирмәҫтәр, бер ваҡытта беҙ алырбыҙ,
Йәрәхәткә ағыу һалһа, ҡуҙғалырбыҙ,
«Баһадирҙар ғәйрәт менән тартып ала»,
Шул эштәргә ғибрәт менән күҙ һалырбыҙ, —

ти, һәм «шулай яҙған яҙмыштыр» тип ҡул ҡаушырып ултырыусыларҙы ҡаты тәнҡит итеп, актив эшмәкәрлек-кә, көрәшкә саҡыра.

1906 йылдың аҙағында яҙылған «1906 йылдың 1907 йылға васыяты», «1906 йылға 1907 йылдың яуабы» ши-ғырҙары революцион-демократик рухы менән Ғафури ижадының был осорҙағы иң юғары нөктәһе булды. Был шиғырҙар Ғафуриҙың революцияға ниндәй күҙлектән ҡарап, уны нисегерәк баһалауын һәм артабан ниндәй теләк менән яныуын асыҡлау өсөн асҡыс та булып торалар. «1906 йылдың 1907 йылға васыяты» шиғырын-да революцияла өлгәшелгән уңыштарға ысын күңелдән шатлана, шул уҡ ваҡытта ул бының менән генә тыныс-ланып ҡалыу яғында түгел: «бөтмәне дошмандарға күп үстәрем» тип, Етенсе йылды артабан эште дауам итте-рергә саҡыра. Етенсе йылдың яуабында инде шағир со-циаль мәсьәләләргә нығыраҡ яҡын килә һәм:

Бик әҙ генә кешеләрҙең кәйефе өсөн,
Бисара ас халыҡты һис тә һатмам, —

тип, үҙенең төп маҡсаты итеп ас-яланғастарҙы яҡлау мәсьәләһен күтәрә, һәм «мәғлүм ҙур кешегә» үткер теште батырып ҡына ҡалмай, ер йөҙөндәге реакцияны һеперелеп түгеп, «донъяға кейҙерербеҙ башҡа күлдәк», ти. Образлы итеп әйтелгән был юлдарҙа халыҡтар ти-геҙ хоҡуҡлы һәм бәхетле булһын өсөн, донъяны рево-

люцион юл менән үҙгәртеп ҡорорға, иҫке тәртиптәрҙе тамырынан юҡ итергә кәрәк тигән ҙур мәғәнә ята.

М.Ғафури, шулай итеп, үҙенең ижадында революцион-демократик юғарылыҡҡа, донъяны революцион көрәш юлы менән үҙгәртеп ҡороу кәрәклеген аңлау юғарылығына күтәрелә барҙы. Шағирҙың революцион-демократик ҡараштары иң элек халыҡтар һәм милләттәр араһында тигеҙ хоҡуҡ урынлаштырыу, уларға үҙ аллы үҫеш тәьмин итеүсе азатлыҡ яуларға ҡайтып ҡала ине. Сөнки быға ул артабан милләттең үҙ эсендә тигеҙлек, татыулыҡ урынлаштырыу өсөн беренсе шарт итеп ҡараны. Ә инде азатлыҡтың ирешелгән тиклемен файҙаланып ҡалырға, милләтте, мәғрифәт менән ҡоралланып, культуралы милләттәр юғарылығына күтәрелергә саҡырыуы яғынан Ғафури мәғрифәтсе булып ҡала бирҙе. Был уның шиғырҙарында ғына түгел, шул осорҙарҙағы публицистик мәҡәләләрендә лә ярылып ята. «Шәкерттәр хаҡында» (1906), «Бер йыллыҡ тәрәҡҡи» (1906), «Шәкерттәргә ҡарата» (1906), «Хәлебеҙ нисек вә ни ҡылырға уйлайҙар?» (1907) кеүек мәҡәләләре быға асыҡ миҫал булып тора. Ошо осорҙа яҙған күпселек шиғырҙарында ла Ғафури халыҡтың алға китеүен, тәрәҡҡи итеүен «әфәнделәргә», уларҙың эшмәкәрлегенә бәйләгәнлеге күренә. Мәҫәлән:

Ҡулыбыҙҙан бығау, сынйыр алынғанда,
Ҡуҙғалайыҡ, әфәнделәр, беҙ тиҙерәк!

*«Шатлыҡ», 1905*

Алданып күп ваҡыттар бушҡа ҡалдыҡ,
Әфәнделәр, тырышайыҡ алданмаҫҡа!

*«Инсаф һәм иттифаҡ», 1905*

Көтһәк тә дүрт күҙ менән, әфәнделәр,
Ул ҡарғалар беҙҙең эште тамам итмәй.

*«Улар — улай, былар — былай», 1906*

Эш күрһәтмәй нисә йылдар һөйләһәк тә,
Мөмкин түгел, әфәнделәр, алға барыу.

*«Инсаф», 1906*

Уларҙың былай насар булыуына
Уйлағыҙ, әфәнделәр, кемдәр сәбәп?

*«Баҙарға сыҡтым», 1907*

Шағир, идея-рухы менән революцион халыҡ яғында торһа ла, халыҡтан бигерәк зыялыларға мөрәжәғәт итә. Шәкерттәр ҙә беренсе планда тора.

«Бөтә Россияның идараһына рази булмай, Россияны милләт мәжлесе асырға вә башҡа өмөт ителгән хөрриәттәрҙе бирергә мәжбүр иткән вә был эштәргә башлап керешкән кешеләр — Россияның шәкерттәрелер. Бөтә Россия халҡының фекерҙәрен ҡуҙғатырға, истибдадты ситкә атырға сәбәпсе булған Россияның шәкерттәрелер»[46], — тип шәкерттәрҙе уянырға, «хәлебеҙҙе ислах ҡылырға», йәғни иҫке тәртиптәргә реформа үткәрергә саҡырҙы.

Ғафури был осорҙағы «ижадында синфи мөнәсәбәттәрҙе лә ҡуҙғатмай ҡалманы, әлбиттә. Ҡомһоҙ, кеше көсө менән йәшәүсе байҙарға ул синфи асыу йөрөттө, ярлыларға ҙур теләктәшлек һәм ихтирам менән ҡараны. «Бай кеше», «Баҙарға сыҡтым» шиғырҙары, «Ярлылар йәки өйҙәш ҡатын» повесы быға асыҡ миҫал булып тора. 1905 йылда яҙылған «Бай кеше» шиғырында бай һәм уға хеҙмәт иткән ярлылар араһындағы мөнәсәбәттәрҙе, маҡтансыҡ байҙың үҙ ауыҙынан һөйләтеү алымы менән бик оҫта күрһәтеп бирҙе, һәм:

Яҡты көн, хәҡиҡәттәр тыуыр бер көн,
«Мин, мин!» тип маҡтана алмаҫ бындай утын.
Йәһәннәмгә осор әле бер ваҡыттар
Барсаһы: алтын, көмөш, ҡиммәтле тун! —

тип, был байҙарға «хисап көнө» киләсәгенә ышаныс менән ҡараны.

Әммә шағир шул байҙарҙы тиҙерәк йәһәннәмгә осороу өсөн иҙелеүсе халыҡты синфи көрәшкә күтәрелергә өндәү урынына, мәғрифәтселек ҡараштарынан арына алмай, «милләт ҡайғыһын» төп ҡайғы итеп һананы.

«Ғафуриҙың революцион-демократик ҡараштары, — тип яҙа Ғ. Рамазанов, ижадының был осорона баһа биреп, — уның мәғрифәтселеге менән ҡушылып килделәр йәки, икенсе төрлө әйткәндә, был осор уның мәғрифәтселеге революцион-демократик характер алды»[47].

---

[46] М. Ғафури. Әҫәрҙәр. 6-сы том. — Өфө, 1957, 10-сы бит.
[47] Ғ. Рамазанов. Мәжит Ғафури ижады, 117-се бит.

Ғ.Рамазанов та Ғафуриҙың революцион демократлығын мәғрифәтселегә менән бәйләп, уның милли рамкалар менән сикләнгәнлеген һыҙыҡ өҫтөнә ала. Сөнки Ғафури милли азатлыҡ яҡлау мәсьәләһендә революцион-демократик позицияла торһа ла, үҙ милләтен алға киткән милләттәр юғарылығына күтәреп, милләттәштәре араһында татыулыҡ һәм ғәҙеллек урынлаштырыуҙың берҙән-бер юлын мәғрифәттә күреүе һәм социаль мәсьәләләрҙе, тарихты хәрәкәт иттереүсе төп көстәрҙе күреп етмәүе менән мәғрифәтсе булып ҡалды.

Ғафури ижадында мәғрифәтселектең һуңғараҡ ҡалып дауам итеүе иң элек мәғрифәтселек хәрәкәте идеологик күренеш булараҡ бөтөнләйе менән көн үҙәгенән төшөп ҡалмауына бәйләнгәйне. Сөнки Ғафуриҙың мәғрифәтселек ҡараштары, буржуаз милләтселектән айырмалы рәүештә, демократик характерҙа ине. 1905 йылғы буржуаз-демократик революция тулҡындары менән татар ваҡытлы матбуғатының киң рәүештә үҫеп китеүе, юғары типтағы мәҙрәсәләрҙең асылыуы татар буржуазияһының эшмәкәрлегенә тығыҙ бәйләнештә барҙы. Татар буржуазияһының бер өлөшө был факттарға мәғариф һәм культура мәсьәләләренең хәл ителеше итеп ҡаранылар. Ҡаҙаҡ, башҡорт кеүек арттараҡ ҡалған халыҡтарға цивилизациялы милләт вәкилдәре күҙлегенән ҡарап, уларҙың үҙ аллы үҫешенә ышанмаған булып, мәғрифәт эстәү юлы менән үҙҙәренең йоғонтоһона буйһондорорға тырышыу ҙа татарҙарҙа мәғрифәт мәсьәләләре инде хәл ителгән тип ҡарауҙан килә ине.

«Йәҙитсе буржуа интеллигенцияһы, — тип яҙа Ғәли Халит, — киреһенсә, үҙ синыфын культуралы итеп, хатта Европанан да уҙҙыра алырлыҡ көскә эйә була алырлыҡ тип, ҡәнәғәтләнеү һәм ышаныс менән «милли һуллыҡ» күрһәтеп маҡтанып сыҡты: ул, Мәжит Ғафури кеүек, милләт өсөн ҡайғы-хәсрәттә булманы, ә үҙ синыфының эшенә оптимист булараҡ ҡараны, политик-экономик нигеҙ барлығына үкенесһеҙ таянды. М.Ғафури, йәҙитселек сәскә атҡанда ла, татар халҡының культура һәм техникала, ғөмүмән прогреста башҡа халыҡтар алдында артыҡ маҡтанырлыҡ ере юҡ икәнлеген күрһәтте»[48].

---

[48] Г. Халит. Мәжид Гафури ижаты, 19—20 нче битләр.

Быныӊ өҫтәүенә, Ғафуриҙыӊ мәғрифәтселегe культура үҫеше йәһәтенән татарҙарҙан арттараҡ ҡалған башҡорт халҡының яҙмышы, уның ысынбарлығы менән бәйләнгән булыуын да күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай. Реакция йылдарында ла Башҡортостандағы әҙәби процесс менән тығыҙ бәйләнештә уның мәғрифәтселеге дауам итә.

Реакция йылдарында Ғафури күпселек ғүмерен ауылдарҙа үткәрә, башҡорт халҡының ауыр тормошо менән яҡындан таныша. Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады менән ҡыҙыҡһыныу, уның айырым өлгөләрен яҙып алыу ҙа ошо йылдарға ҡарай. «Ер һатыусы ағайҙар эргәһендә» (1911), «Өфөлә ҡыҙҙарға махсус мәҙрәсә һалыныу мөнәсәбәте менән» (1911), «Ҡатай башҡорттары» (1911) кеүек публицистик мәҡәләләре лә Ғафури ижадының башҡорт халҡы ысынбарлығына ни дәрәжәлә тығыҙ бәйле булыуы хаҡында һөйләп торалар.

«Ҡатай башҡорттары» мәҡәләһендә, мәҫәлән, Ғафури, ҡатайҙарҙың тау-урман араларында, үҙәктән алыҫта йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, заманынан артта ҡалмаҫҡа тырышып, берҙән-бер байлыҡтары булған ерҙәрен вәкеф итеп булһа ла, мәктәптәр асып, уҡыу-уҡытыу эштәрен юлға һалырға йөрөүҙәрен күреп ҙур ҡыуаныс тойғоһо менән: «Уларҙың ұяныуҙары өсөн беренсе мәртәбә шатланам»[49], — тип яҙҙы.

Ғафури поэзияһының бигерәк тә ошо тәүге осоронда башҡорт халҡының үҙенсәлекле көнкүреше, ауыҙ-тел ижады, Башҡортостандың һоҡландырғыс тәбиғәте киң сағылыш тапҡан. 1905 йылдарға тиклем әле уның поэтик ижады йөкмәткеһе менән генә түгел, формаһы яғынан да шиғырының ритмик интонацияһы, синтаксик конструкциялары, хатта, Ғ.Рамазановтың күҙәтеүҙәренән асыҡ күренеүенсә, лексикаһы менән башҡорт һәм ҡаҙаҡ ысынбарлығынан үҫеп сыҡҡан, Туҡайҙың бик тапҡыр әйтеүенсә, шиғырҙарынан «күсмә халыҡ еҫе сығып торған» Аҡмулла поэзияһына яҡын торҙо. Шуға ла Аҡмулла поэзияһын күңелендә һаҡлаусы өлкән быуын кешеләренең Ғафури шиғырҙарын да Аҡ-

---

[49] М. Ғафури. Әҫәрҙәр. 6-сы том, 4-се бит.

мулланыҡы тип һөйләп ебәреүҙәренә бер ҙә ғәжәпләнергә ярамай[50].

Башҡорт фольклорында үҙәк мотивтарҙың береһе булған тыуған ергә, тыуған тәбиғәткә мөхәббәт тойғоһо, дидактик алымдың эстетик принциптарына һыйышып етмәүенә ҡарамаҫтан, Ғафуриҙың «Йәш ғүмерем» әҫәренә бәреп килеп ингән һәм уны реалистик картиналар менән байытыуҙа мөһим урын тотҡан. Башҡорт халыҡ ижадында тыуған ил образы итеп кәүҙәләндерелгән Урал, Ағиҙел образдарына бәйле тәбиғәт картиналарының; туранан-тура башҡорттарҙың көнкүреше, культураһы менән бәйле йәйләүҙәрҙең, бәйгеләрҙең, ҡымыҙының, ҡурайының, һунар ҡоштарының Ғафури поэзияһына һүрәтләү предметы һәм төрлө поэтик саралар функцияһында килеп инеүҙәре, һис һүҙһеҙ, артабан үҫеп китер башҡорт поэзияһы өсөн үҙенә бер өлгө әһәмиәтен алды. Бына шуға ла уның поэзияһы 1905 йылғы революциянан һуң әҙәбиәткә килгән башҡорт шағирҙары Д. Юлтый, С. Яҡшығолов, М. Татлыбаев кеүек шағирҙарға айырыуса яҡын һәм үҙ ине.

Шулай итеп, М.Ғафуриҙың башланғыс һәм 1905—1907 йылдарҙағы поэзияһы, уның революцион-демократик рухы һәм оҙаҡҡараҡ һуҙылған мәғрифәтселегe 1905 йылғы революция тулҡындары менән әҙәбиәткә килгән, ижадтарын нигеҙҙә мәғрифәтсе булып башлап ебәргән Башҡортостан шағирҙарының күбеһенә ҙур йоғонто яһаны.

Артабанғы башҡорт поэзияһы бер Ғафури традицияларына ғына таянманы, әлбиттә. Ул татар поэзияһының, айырыуса Ғ.Туҡайҙың, шулай уҡ рус классик әҙәбиәтенең көслө йоғонтоһон кисерҙе. Халыҡтың ауыҙтел ижады традицияларын ижади үҙләштерә башлау иһә яҙма поэзияны идея-рухы, теле һәм һүрәтләү саралары яғынан халыҡсанлаштырыу, милли ерлекте нығытыу өсөн мөһим роль уйнаны.

XX быуаттың тәүге ун йылында инде башҡорт поэзияһының үҙенә генә хас тематикаһы һәм проблемалары барлыҡҡа килә. Татар әҙәбиәтендә мәғрифәтселек үҙ урынын башҡа йүнәлештәргә бирә барған бер

---

[50] Ҡарағыҙ: Р. Шәкүров. Исемдәре Урал ташында. — Совет Башҡортостаны, 1970, 9 ғинуар.

осорҙа башҡорт поэзияһында унның әле шаҡтай актив ижтимағи күренеш әһәмиәте алыуы башҡорт шағирҙарының эстетик зауыҡтарына ғына түгел, ә шул замандағы Башҡортостан, унның тарихи үҫеше менән тығыҙ бәйле ине.

## 3

XX быуат башындағы башҡорт әҙәбиәте мәғрифәтсе шағир Сафуан Яҡшығолов ижады менән тығыҙ бәйле. Унның поэзияһында 1905 йылғы революциянан һуң, милли азатлыҡ хәрәкәте менән бергә йәнләнеп, үҙ аллы төҫ алып үҫеп киткән башҡорт мәғрифәтселегенең төп һыҙаттары көслө сағылыш тапҡан.

Сафуан Суфиян улы Яҡшығолов 1871 йылда хәҙерге Миәкә районы Илсеғол ауылында урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Бала саҡтан уҡырға зирәк, һүҙгә оҫта булған. Шуға күрә, хәлфәләрҙең кәңәшен тотоп, атаһы уны артабан уҡытыу тураһында хәстәрлек күрә. Һәм Сафуан, ауыл мәҙрәсәһен тамамлағас, уҡыуын дауам иттерә.

Ләкин Сафуанды, «Иғтираф» тигән шиғырынан асыҡ күренеүенсә, дини-схоластик мәҙрәсә ҡәнәғәтләндермәй: үҙ алдына тарих, география кеүек донъяуи фәндәрҙән белем алырға тырыша, рус телен өйрәнә, көнсығыш һәм рус әҙәбиәте менән таныша. Шул уҡ шиғырында ул көнсығыш әҙәбиәтенең классик шағирҙары Науаи, Сәғҙи әҫәрҙәрен, башҡорт шағиры Ғәли Соҡоройҙо һәм шул осорҙа баҫылып сыҡҡан «милли романдарҙы» йотлоғоп уҡыуы тураһында яҙа. Туҡай әйтмешләй, «аҡ икмәк юҡта ҡара икмәк хеҙмәтен» үтәгән «Тәржеман» газетаһын уҡып барырға ла һәүәҫ була.

Шул рәүешле, ғүмеренең ҡап яртыһы XIX быуатта тороп ҡалған Сафуандың донъяға ҡарашы ҡәҙимселәр менән йәҙитселәрҙең үҙ-ара тартҡылашыуы йоғонтоһонда формалаша, ул, заманы өсөн яңылыҡтың кәүҙәләнеше булып күренгән йәҙитселек хәрәкәтен йәнетәне менән яҡлап, шул сафҡа баҫа.

Сафуан Яҡшығолов мәҙрәсәне тамамлағас, хәҙерге Дәүләкән районына ҡараған Яңы Яппар ауылына мул-

лалыҡҡа тәғәйенләнә. Ҡалған ғүмерен ул ошо башҡорт ауылында үткәрә.

М. Әйүповтың «Мәғрифәтсе шағир Сафуан Яҡшығолов» тигән мәҡәләһенә ҡарағанда[51], С. Яҡшығоловтың мәғрифәтселегә муллалығынан алда йөрөгән: башҡа муллалар кеүек малға, хәйер-саҙаҡаға ҡыҙыҡмаған, күп ваҡытын халыҡ араһында үткәреп, аң-белем таратыуҙы үҙенең төп маҡсаты итеп һанаған, үҙе йәшәгән ауылда мәҙрәсә асып, шунда яңы ысул менән балалар уҡытҡан.

С.Яҡшығоловтың ҡасан яҙа башлауы асыҡ ҡына билдәле түгел. Шиғырҙарында сағылған ваҡиғаларға ҡарағанда, ул 1905 йылға тиклем үк үҙенең тәүге әҫәрҙәрен яҙған булырға тейеш. «Башҡорт хәлдәре» тигән китабына индерелгән «Порт-Артурҙан» шиғыры, мәҫәлән, рус-япон һуғышы осоронда яҙылған. Был һуғышта үҙе ҡатнашҡанмы, юҡмы, — әлегә билдәһеҙ, ләкин шағир һуғыш картиналарын үҙ күҙе менән күргән, үҙе кисергән булып сығыш яһай. Автор япондарҙың һуғыштағы өҫтөнлөгөн, уларҙа фән һәм техниканың алға китеүенә алып барып бәйләй. Винтовка урынына тәре күтәреп йөрөгән руханиҙар, муллаларҙың дәһшәтле ҡорал алдында бер ни ҙә ҡыла алмағанын күреп:

Ишан, мөрид, фатиха юҡ японда, —<br>Бары һөнәр, мәғрифдер, туғаным[52], —

ти ул.

С.Яҡшығоловтың тәүге шиғырҙары 1906—1907 йылдарҙа күренә башлай. Беренсе шиғыры 1906 йылда «Фикер» газетаһында, икенсеһе 1907 йылда «Урал» газетаһында баҫылып сыға. Әйтеп үтелеүенсә, большевистик «Урал» газетаһында уның «Яҙ килеүе» шиғыры 1907 йылдың 1 апрелендә баҫыла. Әммә шиғыр 1905 йылда уҡ яҙылған була. Күрәһең, С. Яҡшығолов газетаның идея-рухына бөтөнләйе менән ҡаршы булмағандыр, юҡһа ул үҙенең революция осоронда яҙған был шиғырын унда тәҡдим итмәҫ ине. Нисек кенә булма-

---

[51] Совет Башҡортостаны, 1967, 14 март.

[52] Сафуан Якшыгулов. Башкорт хәлдәре. Стәрлетамак, 1911, 18 нче бит.

һын, шиғырҙың большевистик органда баҫылып сығыуы һәм уның идея йүнәлеше заманы өсөн ҙур әһәмиәткә эйә булған тип ҡарарға кәрәк.

С.Яҡшығоловтың «Мөғәллим Солтангилде әфәнденең мәрҫиәһе» тигән тәүге китабы 1908 йылда Ҡазанда баҫыла. Был мәрҫиә Этҡол ауылының йәш мөғәллиме Солтангилденең ваҡытһыҙ үлеүе айҡанлы яҙылған. Мәрҫиәнең Яҡшығолов ижадын өйрәнеү өсөн әһәмиәте шунда: әҫәр документаль характерҙа булһа ла, унда шағирҙың мәғрифәтселек ҡараштары сағылмай ҡалмаған. Шағир Солтангилденең яҡшы ғаиләлә тәрбиәләнеүен, рус-башҡорт мәктәптәрендә һәм заманында алдынғы һаналған Буби мәҙрәсәһендә тырышып белем алыуын иғтибар үҙәгенә ҡуя. Мәғрифәтселәр, реалистик әҙәбиәттең беренсе баҫҡысында тороп, тәү башлап шәхестең формалашыуында мөхиттең ҙур урын тотоуын билдәләйҙәр. Ләкин уларҙың мөхит төшөнсәһе ғаилә менән мәҙрәсәнән уҙып китә алмай: иғтибар үҙәгендә тик тәрбиә мәсьәләһе генә тора. Шуға күрә улар әле теге йәки был мөхитте тыуҙырыусы социаль сәбәптәрҙе аңлауҙан алыҫ торалар.

С.Яҡшығолов мәрҫиәнең аҙағында уҡып кеше булған һәм халҡына хеҙмәт итергә, мәғрифәт орлоҡтарын сәсергә тотонған йәш уҡытыусының ваҡытһыҙ вафат булыуына ҙур үкенес белдерә. Шуға, уның ҡыҫҡа, ләкин яҡты ғүмеренә бер йәдкәр булһын тип, ошо мәрҫиәмде яҙҙым, яҡшы кешеләрҙең донъялыҡтағы эшен онототорға ярамай, ти. Автор мәрҫиәлә Солтангилденең донъялыҡтағы эштәрен маҡтай, уның тормош юлын башҡаларға өлгө итеп, мәғрифәтселек идеяларын үткәреүҙе маҡсат итеп ҡуя.

Сафуан Яҡшығоловтың «Башҡорт хәлдәре» һәм «Дим буйы» тигән йыйынтыҡтары бер-бер артлы — тәүгеһе 1911 йылда Стәрлетамаҡта, икенсеһе 1912 йылда Ҡазанда баҫылып сыға. Был китаптарҙың сығыуы башҡорт әҙәбиәтенең үҙ аллы әҙәбиәт булып үҫә барыуын раҫлаусы мөһим күренеш ине. «Башҡорт хәлдәре» сыҡҡас, «Ваҡыт» газетаһы: «Китап шиғыр менән ватандаштарыбыҙ башҡорттар хәлен гүзәл һүрәттә бәян ҡылған, шуға, тәртип ҡылыусыһы ла С.Яҡшығолов ысын башҡорттан булғаны сәбәпле, дәхи әһәмиәте артыҡ. Башҡорттар бөтөн барлығында улар тураһында

кәнделәренең[53] ҡулы менән яҙылған әҫәр, тарихтарында урын алырға лайыҡ булып, һәр кемгә алып уҡырға лазым тиһәк, артыҡ булмаҫ»[54], — тип белдерә.

Был, әлбиттә, рецензия түгел, ә китапты таратыу өсөн бирелгән иғлан. Ләкин уны татар ваҡытлы матбуғатында башҡорт әҙәбиәте тураһында тәүге һүҙҙәрҙең береһе итеп ҡарарға мөмкин. Сөнки газета китапты башҡорттарҙың «тарихтарында урын алырға лайыҡ» тип иҫәпләй.

Ошо ике йыйынтыҡта С.Яҡшығоловтың 1905 йылдан алып 1911 йылға тиклем яҙған шиғырҙары тупланған. «Дим буйы»на яҙған баш һүҙендә автор был китабында «Башҡорт хәлдәре» тигән йыйынтыҡтан тороп ҡалған шиғырҙарын туплауы тураһында әйтеп үтә. Шуға күрә был ике йыйынтыҡтағы шиғырҙарҙы айырмай, бергә ҡарау маҡсатҡа ярашлыраҡ булыр.

Сафуан Яҡшығолов 1905 йылғы буржуаз-демократик резолюцияға, царизм тарафынан иҙелгән һәм ҡыйырһытылған халыҡтарға үҙ аллы үҫеш өсөн тулы азатлыҡ алып килеүсе революция тип, ҙур ышаныс менән ҡарай. Уның революция осоронда кисергән тойғолары «Яҙ килеүе», «Сулпан», «Яҙ зоһуры», «Таң ата», «Дим буйында яҙғы таң» тигән шиғырҙарында ярайһы асыҡ сағылыш алған. С.Яҡшығолов был шиғырҙарында, башҡа мәғрифәтселәр кеүек, үҙенең революцияға мөнәсәбәтен, азатлыҡҡа һыуһауын туранан-тура риторик юл менән әйтеп бирмәй. Ул үҙенең эске кисерештәрен тәбиғәткә уяныу алып килеүсе яҙ, яҙғы таң һәм йылы мәрхәмәтле ҡояш, йәнләнеү кисергән яҙғы тәбиғәт образдары аша сағылдыра.

Әле поэзияла мәғрифәтселек дидактикаһы, рационализм көслө булған осорҙа поэтик образдар аша фекер йөрөтөүгә ынтылыш яһау башҡорт поэзияһы өсөн үҙе бер яңылыҡ ине. Әлбиттә, С.Яҡшығоловтың был шиғыры артында ла яҡтылыҡҡа, мәғрифәткә йөҙөн борған һәм халҡын уянырға саҡырыусы мәғрифәтсе торғанлығы һиҙелеп тора. Ләкин автор уларҙа үҙенең мәғрифәтселек ҡараштарын һәм башҡа теләктәрен кинәйә менән әйтеп бирә. Сөнки революция тулҡындары ме-

---

[53] Кәнделәренең — үҙҙәренең.
[54] Ваҡыт, 1912, 25 май.

нән уянған хистәрҙе мәғрифәтселек дидактикаһы йәки ҡоро вәғәзләү аша асып бирә алмаҫ ине. Шуға ла шағир кисергән тойғоларын романтик күтәренкелек менән, поэтик образдар аша һүрәтләүгә ынтыла. Был йәһәттән уның «Сулпан» шиғыры ла бик характерлы:

Ҡараңғы төн үтеп, таң атмаҡны хәбәр бирер Чулпан,
Ҡараңғыдан хафаланған күңелләрне ачар Чулпан.
Арып, хәлсезләнеп, йоҡлап хәлен жыймыш мосафирға[55]
Таң атып, ҡузғалыр ваҡыт еткәнен күстәрер[56] Чулпан.
Мона! Хәҙер таң ата, һәм күтәрелә ҡара пәрдә,
Бу мужудәтләр[57] алмашынадыр тип күргәзә Чулпан.
Әгәр инсан, тороп йоҡосындан, салса күҙен күккә,
Белер сабах яҡынлығын, күренсә күҙенә Чулпан.
Ата таң, нур чағыладыр яланларға, туғайларға,
Сабахның нуры ҡушылып, бигрәк нурлана Чулпан.
Оҙаҡламый мәшриҡдән[58] сузылып таң да беленер,
Юғарыға күтәрелсә бер азраҡ йолдызым Чулпан.
Ҡуаныр, шадланыр һәр кессә[59] күрү бән бу сәғәдәтне[60],
Ҡуанғандан булыр йөзе аның, гүйә, Чулпан[61].

Ҙур илһам менән тыуҙырылған поэтик образдарға һалынған эстетик йөкмәтке иң элек уҡыусыға үҙенең эмоциональ көсө менән тәьҫир итә. Шағир таң атыуын хәбәр итеүсе Сулпан образына ла ҙур мәғәнә һалған. Унда ҡараңғылыҡта яфа сиккән һәм арып хәлдән тайған шул заман кешеһенең киләсәк тураһындағы идеалы сағылған. Артабан ошо шиғырҙың дауамы булған «Ҡитғала» Сулпан таң образы менән алмашына, һәм картиналар конкретлаша төшә. Таң атыу менән бөтөн тәбиғәт хәрәкәткә килә:

Ер йөҙөндә һәр бер әшъя[62] бу ваҡытда ҡуҙғала,
Киләчәкдә үҙ хәленә мәғнәүи күҙен сала[63], —

ти шағир.

---

[55] Мосафир — юлаусы.
[56] Күстәрер — күрһәтер.
[57] Мужудәт — күк есемдәре.
[58] Мәшриҡ — көнсығыш.
[59] Кессә — кеше.
[60] Сәғәдәт — бәхет.
[61] С.Якшыгулов. Башкорт хәлдәре. 7 нче бит.
[62] Әшъя — һәр бер йән эйәһе.
[63] Сафуан Якшыгулов. Башкорт хәлләре, 7 нче бит.

Шуға ла йыйынтыҡты асып ебәреүсе юғарылағы өс шиғыр «башҡорт хәлдәренә» инеп китеү алдынан үҙенә бер поэтик увертюра итеп ҡабул ителә. Улар менән шағир уҡыусыларына тик ишара ғына яһай, ә төп фекере алда әле.

Быларҙан һуң «Иртәкаэ вә инхитат тормозлары»[64] шиғырында шағир мәғрифәтселек поэзияһынан тороп, кешелек донъяһына, ундағы даими үҙгәрештәргә үҙенсә тарихи ҡараш ташлай, теге йәки был милләттең алға китеүе йәки артҡа ҡалыуының төп сәбәптәрен аңлатып бирергә тырыша, һәр кеше ватанының шатлығы менән шатланып, ҡайғыһына ҡайғырып йәшәгән ваҡытта ғына милләт алға китеүе мөмкин; бының өсөн аң-белемгә, мәғрифәткә эйә булырға, бөтөн булмышың менән милләтеңдең киләсәге өсөн көрәшергә кәрәк. Был хәлде хәҙерге көндә алға киткән римлеләр ҙә, инглиздар ҙа, французлар ҙа кисерҙеләр, шуға уларҙың хәлдәре ал да гөл, улар хәҙер бөтә донъяны үҙҙәренә ҡаратып торорлоҡ ҡеүәтле милләттәргә әүерелделәр, ти. Милләтем, ватаным тип тырышып, уның киләсәге өсөн янып йәшәһәң, милләтең алға китәсәк, «бынан элек ғәйреләргә ҡол икән — солтан буласаҡ», тип, үҙ милләттәштәрен европалыларҙан үрнәк алырға, көслө буржуаз милләткә әүерелергә, алға киткәндәргә тиңләшергә саҡыра. Әммә «нигә кәрәк» дәүерендә бөтә эш алға түгел, артҡа китер ти:

Ул дәүердә һәр кеше үз хәленә хайран улыр,
Бер эшкә баш, йәки бер ҡәүмнең рәисе[65] улған кеше
Үз файдасын күзәтеп, ғәйреләрдән[66] ғәүер[67] улыр.
«Донъяны бер бән төзәтмәм», — диер, — аның сахабы[68] бар.
Хода тәҡдиренә һәр ни шәйе язылса, шул улыр».
. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .
Сәбәбен ҡылмаç, телендә бар сүзе «яҙмыш» улыр,
Дусҡа ярдәм, дошманға ҡалҡан булыр фәҡәт доға,
Мәғрифәт, ғилем, һөнәр дигәнләре бик аз улыр.
Бу заманда милләтнең бетәр нәфесе[69], ҡөдрәте,

---

[64] Иртикаэ — юғары күтәрелеү, алға китеү; инхитат тормозы — артҡа ҡалыу, артҡа һөйрәүсе тормоз.
[65] Ҡәүмнең рәисе — халыҡтың, ырыуҙың етәксеһе.
[66] Ғәйре — башҡалар.
[67] Ғәүер — ситтә йәшеренеп ҡалыр.
[68] Сахаб — эйә, хужа.
[69] Нәфес — рух.

Ғәйрәте сүнеп, җәмәғәт интизамы[70] бозолор.
Күбәйер ялған суфыйлар ул заманда халыҡ-ара,
Һөнәре — башын түбән эйеп, күзен йоммаҡ улыр.
Яҡшылыҡны халыҡҡа ғибәдәттә күстәргән улыб,
Милләткә бер пәрә[71] бирмәс, маҡсады алмаҡ улыр.
Атрафындан[72] атыш алыб, эчендә ҡалса милләте,
Ничек исә читкә тайып, үз башын юймаҡ улыр[73], —

тип, бар эште яҙмыш менән тәҡдиргә тапшырып, доға ҡылыу менән генә шөғөлләнеүсе суфыйҙарҙы, муллаларҙы, вайымһыҙ кешеләрҙе ҡаты тәнҡит итә. Дини фәлсәфәлә киң таралған тәҡдирҙе инҡар итеп, милләтен алға ебәреү өсөн, актив эшмәкәрлеккә өндәй.

Күренеүенсә, Яҡшығоловтың был программа характерындағы шиғырҙарында беҙ уянып, аяҡҡа баҫып килеүсе милли буржуазияның тауышын ишетәбеҙ. Инде уның танауына еҫ кереп өлгөргән, башҡа буржуаз милләттәрҙең нисек алға китеүенең сере мәғрифәттә, фән һәм техникала икәнлегенә төшөнгән, маҡсат — шулар йүнәлешендә хәрәкәт итеп, милләтте алға ебәреү. Ләкин шағир мәғрифәтсе булараҡ, хаким синыф мәнфәғәтен генә күҙәтмәй, ғөмүмән милләт тураһында һөйләй, уның алға киткән милләттәр ҡатарына баҫыуын теләй. Яҡшығолов, башҡа халыҡтарҙың мәғрифәтселәре кеүек, европаса донъя көтөүҙе ҡайнар яҡлай, шунан сығып, диндең үҙенә һүҙ тейҙермәһә лә, дин, йола ҡанундарына йәбешеп ятыусы иҫке ҡарашлы муллаларҙы, прогресҡа ҡаршы тороусыларҙы аяуһыҙ тәнҡит итә. Был «Нисек өшкөрәләр?», «Ҡарт иргә бирелгән башҡорт ҡыҙының зары» шиғырҙары миҫалында ла асыҡ күренә.

Шулай уҡ башҡорт мәғрифәтселегенең антиколониаль характерҙа булыуын тағы ла бер иҫкәртеп китергә кәрәк. Сөнки ул туранан-тура ер мәсьәләһенә барып тоташа. Ә башҡорттарҙа ер мәсьәләһе иң элек колониаль иҙеүгә ҡаршы мәсьәлә булып тора. Уның киҫкенләшеүе, ерҙәрҙе талау һаман көсәйә барыу үткән замана-

---

[70] Интизамы — тәртибе.
[71] Пәрә — өлөш.
[72] Атраф — тараф, ян-яҡ.
[73] Сафуан Якшыгулов. Башкорт хәлләре, 9—10-нчы битләр.

ларҙы, киң сахраларҙы, йәйләүҙәрҙе идеаллаштырыуға ла алып килгән. Әлбиттә, был бер Сафуан Яҡшығолов ижадына ғына хас күренеш түгел. Үткәнде идеаллаштырыңҡырап хәтерләү шул заман публицистикаһына, прозаһына, хатта тарихи әҙәбиәткә лә үтеп ингән.

Үткәнде идеаллаштырыу, ғөмүмән, йәмғиәт формациялары алмашыныу осоронда була торған реакцион күренеш. Үткәнде, ғәҙәттә, көрәш аренаһынан төшөп ҡалыусы синыфтар идеаллаштырыусан. Уларҙың инде көрәшергә, үткәнде кире ҡайтарырға хәленән килмәй, шуға ла улар үткән тормош тураһында тәмле-тәмле иҫтәлектәр һөйләү менән йыуаналар.

Ә ни өсөн европаса донъя көтөү формаларын алға һөрөүсе башҡорт мәғрифәтселәре үткәнде идеаллаштыралар? Был ҡаршылыҡ ниҙән ғибарәт?

1861 йылғы реформанан һуң башҡорттарҙы күп йылдар буйы ҡаңғыртҡан кантонлыҡ системаһы бөтөрөлә, һәм улар араһына капиталистик мөнәсәбәттәр үтеп инә башлай. Ләкин был ижтимағи процестың ыңғай яҡтары менән бергә, тиҫкәре яҡтары ла күп була. Сөнки рус крәҫтиәндәре, помещиктарҙан азат ителгәс, осһоҙ ерҙәр эҙләп, Башҡортостанға күпләп ағыла башлайҙар.

Башҡорт ерҙәренә килеп ултырған помещиктар, кулактар, хужалыҡ алып барыуҙың алдынғы ысулдарын ҡулланып, буржуазлаша, капиталистлаша баралар. Ә башҡорттар тормоштоң яңы укладына күнегеү юлында ҙур ауырлыҡ кисерәләр. Хужалыҡ бөлгөнлөккә төшә. Үткән киң сахраларҙы инде кире ҡайтарып булмай, ә яңы тормошҡа эҙмә-эҙлекле әҙерлек юҡ. Әммә артабан был көйө йәшәү ҙә мөмкин түгел, әйләнә-тирәгә абайлабыраҡ ҡарап, заманса йәшәргә тырышыуҙан башҡа сара юҡ.

С.Яҡшығоловтың «Сирек быуатлыҡ үҙгәреш» шиғыры бына ошо хаҡта асыҡ һөйләй. Бына утыҙлап ҡына өйҙән торған тыныс башҡорт ауылы. Уның халҡы ҡышын ошонда ҡышлап, йәйен иркен сахраларға сығып китер булған, хатта ауылда йән эйәһе лә ҡалмаған. Бер заман, ауылдың бөтә тыныслығын боҙоп, эргәнән генә Һамар тимер юлы үтеп китә. Был юл менән башҡорт ерҙәренә сит халыҡтар ағыла башлай. Теге ауыл эргәһендә Дәүләкән ҡалаһы үҫеп сыға. Ҡалала һөнәрсе-

лек менән дә, сауҙа менән дә күбеһенсә ана шул ситтән килгән кешеләр шөғөлләнә. Уларҙың ҡулында төрлө-төрлө машиналар. Хәҙер башҡорттарға ана шул халыҡтарҙан үрнәк алырға һәм эшкә тотонорға кәрәк, элеккесә йәшәү мөмкин түгел, ти шағир. Әммә шул уҡ ваҡытта боронғо киң сахраларҙы, йәмле йәйләүҙәрҙе иҫенән сығара алмай, «Боронғо башҡорт сахраһы» шиғырында ул:

Бар иде башҡорт илендә
Бик гүзәл, хозур заман,
Ере иркен, маллары күп,
Күчмәле йөрөгән заман, —

тип үткәнде һағынып хәтергә ала. Һәм шунда уҡ, үҙе йәшәгән реаль ысынбарлыҡ менән иҫәпләшеп, уның талаптарынан сығып, туған халҡын:

Инде ҡайтып вәхшилектән,
Уянырға башлаңыз!
Мәғрифәт, ғилем алырға
Көнләшеп Европадан[74], —

тип ижтимағи прогресҡа саҡыра.

Халыҡтың бөлгөнлөккә төшөүен күреп тороусы С.Яҡшығолов, әлбиттә, үҙ заманы менән риза түгел. Шуға ла ул үткәнде үҙ заманына ҡаршы ҡуя. Шул уҡ ваҡытта халҡының ни өсөн бөлгөнлөккә дусар булыуын аңлап етә алмай, төп ғәйепте уның үҙенә ауҙара. «Ҡурай» шиғырында ул башҡорттарҙың Россия дәүләтенә ҡушылғандан алып үҙ заманына тиклем үткән яуылы юлдарын бөтәһен дә ҡурай ауыҙынан һөйләтә, һәр заманға үҙенсә баһа бирә һәм ахырҙа ошондай һығымтаға килә:

Сезләрдә бара-бара бөттө һиммәт,
Ҡулыңызда ҡалмады һич бер ғәйрәт.
Шуңа ҡарап ҡанун төҙеп һәм хөкүмәт,
Аҡрын-аҡрын ерегезне алды, имде.
. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . .
Үзеңез дә белерсез уйлап ҡарап,
Сезне ҡылды «поземельный банка» харап[75].

---

[74] Сафуан Якшыгулов. Башкорт хәлдәре, 21—24 нче битләр.
[75] Сафуан Якшыгулов. Башкорт хәлдәре, 27—28 нче битләр.

Шағир бында, хөкүмәткә тел тейҙереүҙән алыҫ тороуына ҡарамаҫтан, батша хөкүмәтенең Башҡортостанда үткәргән колониаль политикаһы асылына төшөнә. Бары тик уны асыҡтан-асыҡ әйтеп бирергә генә ҡыйыулығы етмәй. «Ҡурайға ҡаршы» шиғырында шағир хатта ерһеҙләнеүҙең «ыңғай» һөҙөмтәһен күрһәтә:

Аларның ерләре аз ҡалған яхшы:
Шул киң сахралар аларны ҡылды вәхши.
Һөнәр, сәнәғәт, ғилемдән бары бизеп,
Йөрөделәр ҡоры сәхрәдә гизеп.
Әгәр дә ҡалса ерләре бу көн аз,
Ачылачак аларға бер яңы яз;
Мәғариф бағыдыр[76] ул, анда гөлзар[77]
Атып чәчкә бирер ул татлы әҫмар[78]
Алар килсен бу көндән иттихадҡа[79],
Һәммә милләт илә бер иттифаҡҡа[80].

Ғөмүмән, был осор бер С.Яҡшығолов ҡына түгел, башҡа шағирҙар ҙа ерһеҙ ҡалған башҡортҡа мәғрифәткә, һөнәргә тотоноуҙан башҡа сара юҡ тип ҡарайҙар. Был ҡараштар Д.Юлтыйҙың «Башҡорт хәле» (1908), М.Татлыбаевтың «Башҡорт ағаларыма хитап» (1909), Ғ.Ходаяровтың «Башҡорт халҡына хитап» (1910) тигән шиғри хитапнамәләрендә айырата асыҡ сағылды. Улар ҙа, С.Яҡшығолов кеүек, үҙҙәренең хитаптарында шул заман ысынбарлығын ҡаты тәнҡит итеп, башҡорт халҡын аң-белемгә, донъя көтөүҙең европаса формаларын үҙләштереүгә өндәнеләр.

Сафуан Яҡшығоловта «Башҡорт ағаларыма хитап» шиғырынан башланып киткән был тема «Башҡорт хәлдәре» менән «Дим буйы» тигән китаптарында үҙәк темаға әүерелеп, уларҙы бер-береһенә тығыҙ бәйләп тора. Был тема артабан уның «Күңел ялҡындары» йыйынтығында ла һиҙелә. Ләкин унда өҫтөнлөк итмәй инде.

Ер-һыуҙың ҡәҙерен белергә кәрәк тигән фекерҙе Сафуан Яҡшығолов иркен йәйләүҙәрҙе, ундағы йылҡы

---

[76] БаҒ — баҡса.
[77] Гөлзар — сәскәлек.
[78] Әҫмар — емеш.
[79] Иттихад — фекер берҙәмлеге.
[80] Иттифаҡ — берҙәмлек, бер һүҙҙә булыу.

өйөрҙәрен, гүзәл тәбиғәт картиналарын күҙ алдына баҫтырыу юлы менән дә «Боронғо башҡорт сахраһы», «Дим буйы», бөтәһенә лә шаһит булған ҡурай аша ла «Ҡурай» шиғыры, «беҙҙе лә һатып ҡуймаһындар» тип ҡурҡышып ултырған тауҙар образдары арҡыры ла «Дим буйы», хатта боронғо ата-бабаларҙың изге ҡәберлегенән ишетелгән рәнйеүле тауыш булып та «Башҡорттарҙың боронғо ҡәберстанынан бер сада» еткерергә тырыша.

Ләкин Сафуан Яҡшығолов ерҙәрҙең ҡулдан китеүен башҡорттарҙың үҙҙәренең ғәйебе итеп кенә ҡарай тип әйтһәк, хатараҡ булыр. Сөнки ул, «Ҡурай» шиғырынан күренеүенсә, колониаль политиканың асылына ярайһы үтеп ингән булған. Был йәһәттән уның һуңғараҡ яҙылған «Инде хәҙер» шиғыры ла бик характерлы. Элек башҡорттар иркенләп күсеп йөрөгән, бейә бәйләгән, ҡымыҙ эсеп йәшәгән урындар хохол менән урыҫҡа тороп ҡалды, ти ул. Бында шағир хохол (украинец) менән урыҫтың бөтәһенә лә: Башҡортостанға үҙ иркенән тыш килеп сығырға мәжбүр булған ярлыһына ла, арзан табыш эҙләп килгән байына ла айырмай, колонизаторҙар тип ҡарай.

Башҡорттарҙың рустарға иҙеүсе, талаусылар итеп ҡарауының сәбәптәрен В.И.Ленин 1919 йылдың 19 мартында РКП(б)-ның VIII съезында һөйләгән телмәрендә түбәндәгесә аңлатып биргәйне:

«Башҡорттар великоростарға ышанып етмәйҙәр, сөнки великоростар культура яғынан күпкә алда булып, үҙҙәренең культуралылығын башҡорттарҙы талауға файҙаланғандар. Шуға ла был ҡараңғы яҡтарҙа великорос исеменә башҡорт «иҙеүсе», «мошенник» мәғәнәһен һалған»[81].

С. Яҡшығолов артабан үҙенең «Инде хәҙер» шиғырында:

Бүленде бүлгәләнеп ере душҡа,
Алынды ҡазнаға күбе бушҡа, —

---

[81] В. И. Ленин. Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы. 38-се том, 183-сө бит.

ти, һәм үҙ-ара ыҙғыш-талаштар бөтәһе лә бына ошо ерһеҙлектең һөҙөмтәһе тимәксе була:

Хәзер бетте арада берләшүләр,
Уйын, фикерен сөйләшеп серләшүләр,
Араларда арта иреш, ызғыш,
Диеп: «Ревиз буйынча яңы душ!»
Жәдәл[82], зәнжал[83], хөсед, кенә тоташҡан —
Байы — фәҡиргә, фәҡире байға дошман[84].

Ә элекке ваҡытта, унынса:

Бик йомарт булган фәҡирләргә
Узаман байлары,
Эчсә, ҡымызы хәзер булған,
Ашаса — ит-майлары.
Йыйылған аҡ тирмәләргә
Бай, ярлы, бергә ултырып,
Саф ҡымыз эчкәнләр анлар
Көрәгәләр тутырып[85].

*«Йәйләү хәтирәсе»*

С.Яҡшығоловтың ыңғай һәм, шул заман ысынбарлығынан сығып ҡарағанда, прогрессив яҡтары уның эҙмә-эҙлекле мәғрифәтселегендә. Ул «Башҡорт ағаларыма хитап», «Йәшлек дәүере», «Башҡорт хәлдәре», «Йәш балаларға хитап», «Ҡурайға ҡаршы» һәм башҡа шиғырҙарында халыҡты килеп тыуған ауырлыҡтар алдында ҡаушап ҡалмаҫҡа, киләсәкте ҡайғыртып, актив эшкә тотонорға, мәктәптәр асырға, уҡыу-уҡытыу эштәрен яйға һалырға саҡырҙы:

Уҡығыз, языгыз, үгрәнегез тел,
Керергә мәғрифәткә бағлаңыз бил.
Бу дөнъяда булган һөнәрле ирләр:
Химиклар, механиклар, инженерләр.
Бары да эшкә керешкәнләр укудан.
Уку, уку диләр бит һәммә милләт,
Уку өчен ҡылыңыз сез дә һиммәт[86].

*«Башҡорт хәлләре»*.

---

[82] Жәдәл — һүҙ көрәштереү.
[83] Зәнжал — янъял, талаш.
[84] Сафуан Якшыгулов. Күңел ялкыннары. — Уфа, 1916, 9-нчы бит.
[85] Шунда уҡ, 7—8-се биттәр.
[86] Сафуан Якшыгулов. Дим буйы. — Казан, 1912, 6-нчы бит.

Шағир үҙенең мәғрифәтселеге менән буржуаз рамкаларҙа ғына сикләнеп ҡалманы, байтаҡ шиғырҙарында, дөйөм халыҡ мәнфәғәтен күҙәтеп, демократик идеяларҙы ла алға һөрҙө. Бигерәк тә ижадының тәүге осоронда ижтимағи күренештәргә, кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәргә мәғрифәтсе күҙлегенән сығып ҡарай. Был туранан-тура мәғрифәткә өндәгән шиғырҙарында һәм «Порт-Артурҙан», «Нисек өшкөрәләр», «Ҡарт иргә бирелгән башҡорт ҡыҙының зары», «Башҡорт ҡыҙына», «Мөғәллим Солтангилде әфәнденең мәрҫиәһе» әҫәрҙәрендә һәм исемһеҙ шиғырҙарында асыҡ күренә:

— Айырған бер-берендән бәндәләрне, —
Дисезләр, — бу дөнъяда сәбәб ни?
— Түгел тау-таш, дәхи ярада әхбәр[87],
Түгел төрлө телдә булмаҡ, эй яр[88]!
Сәбәбе бәлки жаһиләтдер-жаһиләт.
Кәлебләрдә[89] улған бәғзе хөсүмәт[90], —

ти ул бер исемһеҙ шиғырында. Кешеләр араһындағы талаш-тартыш, әхлаҡһыҙлыҡ — бөтәһе лә наҙанлыҡтан һәм күңел боҙоҡлоғонан килә, ти. Бында, шул рәүешле, С.Яҡшығоловтың дини-идеалистик фәлсәфәһе менән мәғрифәтселек ҡараштары уҡмашҡан. Сөнки мәғрифәтсе «бала күңеле — аҡ ҡағыҙ» тигән ҡараште тора һәм тәрбиәгә ҙур әһәмиәт бирә. Ләкин уларҙың тәрбиә сфераһы ғаилә менән мәҙрәсә тирәһенән уҙып китә алмай. С.Яҡшығолов изгелек менән яуызлыҡ тыуғанда уҡ бәндәләрҙең күңеленә һалынған була тигән дини-идеалистик ҡараштарҙан айырылып етә алмаһа ла, наҙанлыҡты тәнҡит итеп, тәрбиә мәсьәләһен алға һөрә, йәғни мәғрифәтселеге өҫкә сыға. Шуға ла «Йәшлек дәүере», «Йәш балаларға хитап» шиғырҙарында шағир үҙ халҡының киләсәген йәштәрҙә күреп, туранан-тура уларға мөрәжәғәт итә һәм мәғрифәткә өндәй:

Бәхыңызлар! Иске тормыш бик күңелсез,
Милләтемез организме ҡалған хәлсез,
Шул хәлсезлек ауыруының дәуасыны
Эй йәшләр, бу көндән эзләңез сез.

---

[87] Әхбәр — диңгеҙ.
[88] Эй яр — эй дуҫ, иптәш.
[89] Кәлеб — күңел.
[90] Хөсүмәт — әшәкелек, яуызлыҡ.

Һәм шунда уҡ был «дауаның» нимә икәнлеген асып бирә:

— Бу ауырыуға, дисәләр, дәуа нәдер?
— Ғилем, һөнәр, әдәбият, мәдәниятдер,
Милләтемез яртысыны тәшкил иткән
Хатын-ҡызны мәғариф илә тәрбиәдер[91].

Шиғырға һүҙ ыңғайы менән тағы бер мөһим тема — ҡатын-ҡыҙ азатлығы темаһы килеп инә.

Был мәсьәлә уның «Ҡарт иргә бирелгән башҡорт ҡыҙының зары» шиғырында тулыраҡ һәм асығыраҡ сағылған. Шиғыр сеңләү традицияларынан үҫеп сыҡҡан. Ул — ҡыҙҙың ата-әсәһенә, ҡарт кейәүенә пассив протест тауышы булып яңғырай:

Юҡ миңә тиңдәш, юҡ миңә ибдәш,
Ағыр күземдән ғөмер буйы йәш,
Ашымда юҡ тәм, донъяда юҡ йәм,
Ғөмерем буйына моңаям, көйәм[92] .

Ҡыҙҙың киләсәктә бер өмөтө лә юҡ, сөнки үҙе тыуғансы уҡ шәриғәт, йола ҡанундары уның киләсәген хәл итеп ҡуйған, ул үҙенә-үҙе хужа түгел. Яҡшығолов, шиғырында ауыҙ-тел ижадындағы сеңләү традицияларын уңышлы үҫтереп, шул рәүешле, башҡорт ҡыҙының аяныс яҙмышын асып бирә һәм был иҫкелек ғәҙәттәренә ҡырҡа ҡаршы сыға, ҡатын-ҡыҙҙың тиң хоҡуҡлы булырға тейешлегенә ишара яһай. Икенсе бер «Башҡорт ҡыҙына» шиғырында донъя зиннәттәренә ҡыҙығып, төҙәнеп-биҙәнеп, кейәү көтөп кенә йөрөгән бай ҡыҙын мәғрифәткә, аң-белемгә ынтылмауы өсөн ҡаты шелтәләй. Уға ла иҫке ғәҙәттәрҙең ҡорбаны итеп ҡарай, сөнки ата-әсәһе лә ҡыҙҙы тиҙерәк кейәүгә биреп туй итеүҙән башҡа бер ни ҙә уйламайҙар. Шулай итеп, С.Яҡшығолов ҡатын-ҡыҙға ҡарата иҫке ғәҙәттәргә ҡырҡа ҡаршы сығып, уларҙың ирҙәр менән тиң хоҡуҡлы булып белем алырға, үҙ яҙмышын үҙе хәл итергә тейешлеген алға һөрә. Был — заманы өсөн һис һүҙһеҙ прогрессив күренеш булып тора.

---

[91] Сафуан Якшыгулов. Башкорт хәлләре. 13 нче бит.
[92] Сафуан Якшыгулов. Күңел ялкыннары, 16-нчы бит.

Яҡшығоловтың тәбиғәт, философик лирикаһына һәм мәсьәләләре менән тәржемәләренә туҡталып китмәйенсә, ижадын тулыһынса күҙ алдына килтереү мөмкин түгел. Уларҙа шағир мәғрифәтсе генә булып ҡалмай, үҙ заманының төрлө күренештәренә, кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәргә тәрәнерәк үтеп инә, заманы тураһында уйланыусы һәм уны үҙ әсәрҙәрендә сағылдырыусы художник булып сығыш яһай.

«Яҙғы таң», «Сулпан», «Яҙ зоһуры», «Киләсәк яҙ», «Таң ата» шиғырҙары тураһында һүҙ булғайны инде. Уларҙа шағир 1905 йылғы революцияға мөнәсәбәтен яҙ, таң образдары, уяныусы яҙғы тәбиғәт һулышы аша үҙенең ошо революция осорондағы елкенеүле хистәрен асып бирә һәм шул уңай менән халҡын да тәбиғәт кеүек уянырға саҡыра.

Поэтик параллелизм һәм тәбиғәт картиналары аша кеше тормошона ишара яһау «Көҙ көнө», «Һарғайған япраҡҡа ҡарап», «Ағым һыуға ҡарап» шиғырҙарында ла асыҡ күренә. Был шиғырҙарында ул: көҙ, һарғайған япраҡ, ағым һыу образдары аша ғүмерҙең үтеп барыуына ишара итә. «Ағым һыуға ҡарап» шиғырында:

Жил иссә, ҡаршыдан тулҡынланасыз,
Бәрелеп ярларға гяһ[93] ҡомланасыз,
Киреп күкрәк, чыдамлыҡ күрсәтәсез,
Ничә чүп-чарларны йөкләп китәсез.
Сезне туҡтатмый ҡамыш, ҡуғалар да,
Туфраҡ, таш ҡатышлы буалар да,
Үтәсез туҡтамый, хәл итми бер дә,
Шулай үтә безем ғәзиз ғөмер дә[94], —

тип көрәш һәм ҡаршылыҡтар менән үткән кеше ғүмере тураһында фекер йөрөтә.

С.Яҡшығолов ижады үҙенең дөйөм йүнәлеше, стиле яғынан публицистик тенденциозлығы менән мәғрифәтселек реализмына ҡайтып ҡалһа ла, остаздары итеп һанаған М.Ғафури, Ғ.Туҡайҙарҙың көслө йоғонтоһонда бигерәк тә һуңғы «Күңел ялҡындары» йыйынтығына ингән шиғырҙарында буржуаз ысынбарлыҡты реалистик һүрәтләү алымдары күренә башлай. Был йәһәттән

[93] Гяһ — йәки.
[94] Сафуан Якшыгулов. Дим буе, 16-нчы бит.

«Йәм табам», «Тормош», «Дуҫтар», «Шатлыҡ ни нәмәлә», «Донъя тәгәрмәсе», «Өмөт» шиғырҙары характерлы.

«Өмөт» һәм «Йәм табам» шиғырҙары, йөкмәткеләренән күренеүенсә, ҡара реакция йылдарының шауҡымы менән әҙәбиәттә хөкөм һөргән дөйөм күңел төшөнкөлөгө осоронда яҙылған булһа кәрәк. «Йәм табам» шиғырында шағир:

Көнләрем ҡараңғыдыр, чыҡмый ҡояшым бер ваҡыт,
Нигә бирми ходайым миңә ғөмеремдә бәхет?
Ҡарасам, бар халыҡ ғалим, ҡайғыда тик мин генә,
Шул көенчә йыллар, айлар үтә, җил үткән кеби,
Хәзер инде был фәләҡдан[95] өмөтем бөткән кеби, —

тип тормош ауырлыҡтарынан зарлана һәм күңелһеҙ донъянан тик ижад менән генә:

Йәм табам, ҡайғым тарала, басыла
Янған йөрәк, хисләрем-шиғырләрем
Шул, башҡа нишләмәк кирәк[96], —

ти. Шулай ҙа донъянан бөтөнләй биҙеү, төңөлөү яғында түгел. Шағир «Өмөт» шиғырында, тирә яғымды болот ҡаплап китеп, артым-алдым күренмәй, юл таба алмай ыҙаланһам да, «киләсәккә өмөт итәм, һаман рәхәтләнәм», — тип, алдағы көнгә ышаныс белдерә.

«Дуҫтар» шиғырында ул буржуаз йәмғиәттәге иҫәп-хисапҡа ҡоролған дуҫлыҡты ҡаты тәнҡит итә. Кеше, ти ул, һәр ваҡыт үҙенең дошманынан һаҡлана, ә дуҫтарына тартынмай, эс бауырын асып бирә. Ләкин дуҫтар ҙа ҡулыңда малың барҙа ғына һине яҡын күрәләр. Әгәр малың да, даның да китһә, йәки уларҙың көйөнә килмәй башлаһаң, ғәйебеңде һатып бик тиҙ ситләшәләр һәм артыңдан көлөп ҡалалар, ти.

Дөйөм ынтылыштар берләштермәгән синфи йәмғиәттә дөйөм шатлыҡ та булыуы мөмкин түгел, унда һәр кеше үҙ яғын ҡайыра, үҙ табышы менән генә шатлана, кешелә ҡайғыһы юҡ. С.Яҡшығолов быны «Шатлыҡ ни нәмәлә?» шиғырында бик асыҡ әйтеп биргән.

---

[95] Фәләҡ — яҙмыш.
[96] Сафуан Якшыгулов. Күңел ялкыннары, 2 нче бит.

Жан вә телдән милләтем тип хезмәт иткән бер фазыл[97]
Хаҡ сөйләп, хибескә[98] кергәндә, доносчы шадлана.
Бик шәп атларны матур файтунға өчәрләп жигеп,
Илдән илгә туҡтамый гизсә, ишанлар шадлана.
Мәктәп ачып, тиз укуға башласалар балалар,
Шартлатып мәктәпне япсалар, ҡәдимче шадлана.
Арыҡ атын, иске тунын соң көнөндә бер кеше
Васыятында әйтсә фидиягә, ну мулла шадлана.
Бирсәләр гүр садаҡасы дип, кәжә, сарыҡ йәки ҡаз,
Ҡоры ҡалмадым бит әле дип, мөәзин шадлана.
Ян янына ҡапчыҡ асып, йөз суын түгеп сорап,
Бирсәләр әгәр бер сыныҡ икмәк, саилчы[99] шадлана.
Йөз-меңәрләп саудагәр, талап байып Мәскәү малын,
Сумға егерме тин илә япды иҫә, шадлана[100].

Күренеүенсә, шағир бында кемдең нимәгә шатланыуын һөйләп биреүҙе генә маҡсат итеп ҡуймаған, намыҫһыҙ сауҙагәрҙәрҙе, ишандарҙы, ҡомһоҙ муллаларҙы тәнҡит итеп, уларға ярлы, намыҫлы халыҡты, дөйөм милләт эшен ҡайғыртыусыларҙы ҡаршы ҡуя.

«Донъя тәгәрмәсе», «Тормош» шиғырҙарында шағир шатлыҡ һәм ҡайғы, йәшәү өсөн көрәш кеүек мәңгелек темаларға мөрәжәғәт итә. Донъяла ҡайғы менән шатлыҡ аралашып йөрөр, ти. Кеше, нисек кенә ауыр булмаһын, ҡайғы килде тип, баш эймәҫкә, өмөтөн өҙмәй үҙенә юл ярырға, яҡты тормошҡа ынтылырға тейеш, ти.

С.Яҡшығолов рус әҙәбиәте менән дә ярайһы таныш булған. Ул үҙенең ижад ғүмерендә руссанан бер нисә мәҫәл тәржемә иткән.

Мәҫәл ул — дидактик жанр. Ә дидактика мәғрифәтселек осоронда, әҙәбиәт кешегә иң элек аҡыл өйрәтә, фәһем бирә тип ҡараған осорҙа өҫтөнлөк итеүсән. Яҡшығоловтың күпселек тәржемәләре — Крыловтан. Ул Крыловтың «Маймыл һәм күҙлек», «Маймыл һәм көҙгө», «Ағас», «Тирмәнсе» кеүек мәҫәлдәрен тәржемә иткән. Тәржемәләр араһында тағы ла «руссанан» тип ҡуйған «Йылан һәм һөлөк», «Ҡуяндар һәм баҡалар» тигән әҫәрҙәр бар. Шағир үҙе лә бер нисә мәҫәл яҙған. Шулар араһынан «Төлкө менән торна», «Бығау-

[97] Фазыл — намыҫлы кеше.
[98] Хибес — төрмә.
[99] Саилчы — хәйерсе.
[100] Сафуан Якшыгулов. Күңел ялкыннары, 22 нче бит.

лы фил» әҫәрҙәре иғтибарҙы тартып тора. Тәүгеһендә шағир төлкө образында кеше көсөнән файҙаланып йәшәүсе иҙеүселәрҙе, ә торна образында иҙелеүселәрҙе кәүҙәләндергән булһа кәрәк. Мәҫәлдән күренеүенсә, төлкө ни тиклем хәйләкәр булмаһын, үҙ ҡанаты булмағас, оса алмай һәм һәләкәткә дусар була.

Ә «Бығаулы фил» мәҫәле идея йөкмәткеһе менән шағирҙың тәржемәләренән дә, оригиналь әҫәрҙәренән дә айырылып тора. Был мәҫәлдең ҡыҫҡаса йөкмәткеһе шулай: бер ир уҫал филде тотоп бығаулап ҡуя. Фил ғүмер буйы бығаулы тороп тамам ҡартая, ғүмерендә бер шатлыҡ та күрә алмай, бөтөнләй тупаҫлана. Берҙән-бер көн ир филде ҡыҙғана һәм, аяғынан бығауын алып, азат итә. Ләкин фил урынынан да ҡуҙғалмай тора бирә: әсирлеккә шундай күнеккән, хатта аяғы бығауҙан ысҡындырылғанын да һиҙмәй:

Боғаусыз ҡалдығины белмәмешдер,
Азадлыҡтан хәбәрдар улмамышдыр[101].

1905—1907 йылдарҙағы буржуаз-демократик революция осоронда батша самодержавиеһы, революцион халыҡтан ҡото осоп, бер аҙ ташламалар иғлан итте. Ә күптәр быны ысын хөрриәт итеп ҡабул иттеләр. Бигерәк тә иҙелеүсе милләттәрҙең буржуазияһы, был «хөрриәттән» файҙаланып ҡалырға тырышып, актив эшмәкәрлеккә тотондо, культура өлкәһендә ҡайһы бер реформалар яһаны, ваҡытлы матбуғатын, китап баҫыу эштәрен яйға һалып ебәрҙе, уҡыу-уҡытыу эштәре йәнләнеп китте. Ләкин башҡорт халҡы был мөмкинлектәрҙән етерлек дәрәжәлә файҙалана алманы. Уның тормошонда күҙгә күренерҙәй ҙур үҙгәрештәр булманы. Күрәһең, С.Яҡшығолов был мәҫәлендә оҙаҡ йылдар батша самодержавиеһы тарафынан иҙелеп йәшәгән башҡорт халҡын бығаулы фил образында кәүҙәләндереп, уның иҙелеү арҡаһында ниндәй дәрәжәлә миңрәүләнеүенә, «хөрриәт» килгәс, үҙ талаптарын дауларға ла хәле булмауына ишара яһай торғандыр. Быны шағирҙың икенсе бер әҫәре, «Башҡорт ағаларыма хитап» тигән шиғыры ла раҫлап тора. Был шиғырында ла автор һәр халыҡ

---

[101] Сафуан Якшыгулов. Күңел ялкыннары, 4 нче бит.

Думанан үҙенең өлөшөн һорай, ә һеҙ һаман иҫегеҙ китмәй, ғәмһеҙ йөрөп ятаһығыҙ, уйнап ҡурай, тип башҡорттарға зарлана. Йәғни, «хөрриәттән» файҙалана белмәгәндәре өсөн башҡорттарҙы шелтәләй. Ә инде мәҫәлдә шул уҡ фекерҙе аллегорик формала әйтеп бирә.

Сафуан Яҡшығолов ижады менән үҙенә тиклем ижад иткән татар һәм башҡорт шағирҙарының традицияларын дауам иттерә.

С.Яҡшығолов шулай уҡ башҡорт халҡының ауыҙтел ижадын да ӨЙРӘНГӘН булған. Бигерәк тә уны йырҙар ҡыҙыҡһындырған. Халыҡ йырҙарының бер аҙын ул «Дим буйы» китабына индергән. Шағирҙың ижадына халыҡ йырҙарының ҙур ғына йоғонто яһағанлығы күренә: күп кенә шиғырҙары йыр үлсәме менән яҙылған, йырға хас һүрәтләү сараларын, афоризмдарҙы осратырға мөмкин. Әлбиттә, уның ижадында былар өҫтөнлөк итмәй, уның поэзияһы нигеҙҙә яҙма традицияларҙы дауам итеүсе булып ҡала.

С.Яҡшығоловтың теленә килгәндә инде, ижадының тәүге осоронда уның теле әле бик сыбар, унда иҫке төрки, ғәрәп, фарсы лексикаһы өҫтөнлөк итә. Ләкин ул быны тора-бара үҙенә хуп күрмәгән, «ғади кешеләр ҙә фәһем алырлыҡ» телдә яҙырға тырышҡан. С.Яҡшығоловтың татар телендә баҫылған поэзияһы башҡорт тормошон сағылдырғанлыҡтан, шағир үҙе лә башҡорт булғанлыҡтан, тәбиғи рәүештә, әҫәрҙәрендә башҡорт лексикаһы ҙур ғына урын алған. Шуға, яҙғандары татар уҡыусыһына ла аңлашылһын өсөн, ул күп кенә башҡорт һүҙҙәренә аңлатмалар биреп китер булған.

Сафуан Яҡшығоловтың ижадын ҡарап сыҡҡандан һуң, яҡынса шундай һығымта яһарға мөмкин.

Ул — мәғрифәтсе шағир, уның ижады XIX быуаттың аҙаҡтарында, XX быуаттың баштарында башҡорт буржуаз милләтенең ойоша башлау осорона тап килгән. Шағир ижадының ҙур ғына өлөшөндә аяҡҡа баҫып килеүсе милли буржуазияның ҡараштарын, мәғрифәтселек идеялары менән бергә ҡушып, дөйөм милләтте, синыфтарға айырмай, бер бөтөн итеп ҡарап, аң-белемгә саҡырған, иҫкелек ҡалдыҡтарын, дини фанатизмдың мәғрифәтселәр өсөн зарарлы яҡтарын тәнҡит иткән. Был осорҙа башҡорт халҡы феодаль-патриархаллектән буржуаз демократияға табан үҫеш юлында була, һәм

был процесс колониаль һәм милли иҙеүгә ҡаршы көрәштә бара. Шуға күрә, Яҡшығолов ижадына тарихилыҡ принцибынан яҡын килгәндә, заманы өсөн уның прогрессив характерҙа булғанлығы күренеп тора. «Башҡорттар йәшәйәсәкме әллә үлеп бөтәсәкме?» тигән мәсьәлә ҡуйыртылған бер осорҙа, шағир күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәне, халыҡтың киләсәген мәғрифәткә ылығыу, донъя көтөүҙең европаса формаларын үҙләштереүҙә күрҙе.

1905—1907 йылдарҙағы буржуаз-демократик революция осоронда уның ижады айырата прогрессив төҫ ала. Был бигерәк тә большевистик «Урал» газетаһында баҫылған «Яҙ килеүе» һәм шул осорҙарҙа яҙылған «Яҙғы таң», «Сулпан» кеүек шиғырҙарынан күренә. «Яҙ килеүе» шиғырында ул революцияны яҙ менән, ә реакцияны ҡаты һыуыҡтар, ҡара болоттар менән сағыштыра, һәм «көнгә табан ҡарап торған күҙгә ҡаршы» әсе елдәрҙең иҫмәүен, бөтә кешегә лә ҡояш нуры тигеҙ төшөүен теләй. Йәғни, тигеҙлек һәм ғәҙеллек идеяларын алға һөрә.

Дәүләт Думаһының асылыуын, замандаштары кеүек, ул да ил конституцияһы булды тип, ҙур шатлыҡ менән ҡаршы ала һәм оҙаҡ ҡына ваҡыт шул иллюзияларҙан арына алмай. Быға уның либераль позицияла тороуы ҡамасаулай. Шуға ла ул Ғ.Туҡай, М.Ғафуриҙар күтәрелгән революцион-демократик юғарылыҡҡа күтәрелә алмай, мәғрифәтселек позицияһында тороп ҡалды һәм шунан ары китә алманы.

Артабан С.Яҡшығолов Туҡай һәм Ғафури йоғонтоһон кисерә, һәм 1916 йылда сыҡҡан «Күңел ялҡындары» китабына ингән шиғырҙарынан тәнҡитле реализм юғарылығына күтәрелә барғанлығы күренә. Ул ҡатын-ҡыҙ азатлығын яҡлап сыға, заманының буржуаз әхлаҡ нормаларын реалистик йүнәлештә тәнҡит итә.

С.Яҡшығолов үҙ ғүмере эсендә өс революцияны кисерә. Бөйөк Октябрь Социалистик революцияһына үҙенең ыңғай мөнәсәбәтен 1919 йылда яҙылған «1917 йыл Үктәбер инҡилабы байрамы мөнәсәбәте илә» тигән шиғырында асыҡ сағылдырҙы:

Ун еденсе йылғы Үктәберне яд итү был көн,
Шул ҡәдерле, тарихи көн бәйрәмен итү бу көн,
Андан элгәре заманлар көсһөҙ иде эшчеләр.
Анлара ҡүәт баһадирлек биргән көндер бу көн.

Берләшеп, асыуланып, ғәйрәтләнеп, ярлы халыҡ
Илгә мәйҙан бар залимләрне төшергән көн бу көн.
Ихтилалсы эшчеләр бу ихтилал утын яғып,
Ихтилал ялҡынларын ситкә тараҡҡан көн бу көн.
Сын таң атып, сын азадлыҡ нурлары балҡып сығып,
Вәхшилек, ҡоллыҡ юйылған «күк асылған» көн бу көн.
Яд итәм, бәйрәм итәм шул Үктәбер бәйрәмене, —
Ҡолты көн бу, яҡты көн бу, бик шәрәфле изге көн[102].

Шулай ҙа ул артабан йәнләнеп киткән социалистик йөкмәткеле башҡорт совет әҙәбиәтенә хеҙмәт итеү юлына баҫа алманы, совет ҡоролошона ҡаршы контрреволюцион юлға баҫып, эмиграцияға китеүселәргә лә эйәрмәне, ә революция тарафынан гарантияланған выждан азатлығынан файҙаланып, шул заманда Россия мосолмандарының дини идаралығы тарафынан Өфөлә сығарылған «Диянат» журналына ислам динен маҡтап шиғырҙар яҙҙы.

Ижадына тулайым баһа биргәндә, ошо яҡтарын күрһәтеп үтеү менән бергә, уның XX быуат башы шағиры икәнлеген оноторға ярамай. Ә ул осорҙағы ижады заманы өсөн прогрессив күренеш булып, башҡорт әҙәбиәтенең үҙ аллы милли әҙәбиәт булып формалаша башлау процесында үҙәк урында торҙо.

## Икеләнеү ҡатыш өмөт йырҙары

### 1

1905—1907 йылдарҙа йәнләнеп алған милли азатлыҡ хәрәкәте, аң-белемгә ынтылыш реакция йылдарында бөтөнләйе менән һүнеп ҡалманы. Башҡорттарҙың үҙ милли матбуғаты тыуып өлгөрмәһә лә, уларҙы хеҙмәтләндергән татар телендәге ваҡытлы матбуғат, китап баҫыу эштәренең яйға һалыныуы әҙәбиәт майҙанына ла яңынан-яңы көстәрҙең килеүенә уңайлы шарт булды.

Был осорҙа поэзияға килгән йәш көстәрҙең күпселеге үҙҙәренең ижадын халыҡтың ошо милли уяныуы менән тығыҙ бәйләнештә, мәғрифәтсе булараҡ башлап ебәрәләр. Сафуан Яҡшығолов тураһында әйтеп тормаҫ-

---

[102] Башкортостан хәбәрләре. 1919, 5 ноябрь.

тан, мәғрифәтселек шаңдауы Дауыт Юлтый, Вәсим Солтанов, Фәйзи Вәлиев, Ғиззетдин Иҫәнбирҙин, Ямалетдин Юмаевтарҙың башланғыс ижадында үҙен ярайһы нык һиҙҙерә.

Шулай уҡ Мәжит Ғафури поэзияһында ла мәғрифәтселек үҙенсәлекле рәүештә дауам итте. Уның поэзияһы, ғөмүмән, реакция йылдарында шаҡтай ҡатмарлы төҫ алды, ижадында реалистик йүнәлеш өҫтөнлөк ала барыу менән бергә, шағир ваҡыт-ваҡыт күңел төшөнкөлөгөнә лә бирелгеләне, үткән замандарҙы идеаллаштырып, нескәртелгән милләтселек йырҙарын да һыҙҙырғыланы. Быны төп сәбәптәре, әлбиттә, шағирҙың субъектив ҡараштарына ғына ҡайтып ҡалмай, реакцияның ҡыҫымы арҡаһында, үҙ идеалын төҫмөрләй алмай йонсоуҙан да килә ине. Ә инде айыҡ ҡына идеалың булмауы теләһә ниндәй шағирҙы ла төрлө яҡҡа тайпылырға, абынырға һәм өмөтһөҙлөккә бирелергә мәжбүр итә. Реакция йылдарында М. Ғафуриҙың мәғрифәтселеге дауам итһә лә, шағир инде хәҙер мәғрифәткә халҡын бәхеткә илтеүсе берҙән-бер юл итеп ҡарамай ине.

Ғафуриҙа реакция йылдарында мәғрифәтселек традициялары нигеҙҙә өс йүнәлештә дауам иттерелә. Беренсенән, шағир әле был осорҙа өгөт-нәсихәтселектән, мәғрифәтселек поэзияһының төп алымы булған дидактиканан арынып етә алмай. Күп кенә шиғырҙарында һаман уҡыусыны өндәй, уға һабаҡ бирә. Был боронғо үзбәк шағиры Аллаяр суфыйҙың дини дидактика менән һуғарылған «Ҫөбат әл-ғажизин»ына тәҡлид формаһында яҙылған «Замана шиғырҙары» (1909) тигән китабында ла бик асыҡ күренде.

Ғафури, әлбиттә, был китабын Аллаяр суфыйҙың теге-донъя йырҙарына пародия рәүешендә яҙған һәм үҙ заманының ҡомһоҙ дин әһелдәрен, сауҙагәрҙәрҙе, байҙарҙы тәнҡит иткән. Кешеләр ожмах менән тамуҡты был донъяла уҡ татыйҙар, ярлылар тамуҡ ғазабын татыһа, байҙар, ҡомһоҙ муллалар ожмахта йәшәйҙәр тип, социаль тигеҙһеҙлекте фаш итеүҙе күҙ уңында тотҡан. Ләкин китапҡа ингән шиғырҙар формаһы яғынан «Ҫөбат әл-ғажизин»дан ары китмәгән. Унда өгөт-нәсихәт хөкөм һөрә. Етмәһә, «Ҫөбат әл-ғажизин» менән таныш булмаған уҡыусыға Ғафуриҙың, был китабына ингән шиғырҙарының ҡайһы бере бөтөнләй тип әйтерлек аң-

лашылырлыҡ хәлдә түгел. Формалағы консерватизм шағирҙың әйтергә теләгән фекерен томалап, уны уңышһыҙлыҡҡа дусар иткән.

Икенсенән, Ғафури реакция йылдарында үҙенең иғтибарын йыш ҡына йәш быуынды тәрбиәләүгә, балаларҙың күңеленә «орлоҡ сәсеүгә» йүнәлтә. Йәштәрҙе тәрбиәләмәй, уларҙы йәмғиәт өсөн кәрәкле, булдыҡлы кешеләр итеп әҙерләмәй тороп, ғәҙеллек һәм тигеҙлек өсөн көрәштә уңышҡа ирешеү мөмкин түгел тип ҡарай. 1910 йылда «Ҡыҙҙарға махсус милли шиғырҙар» тигән йыйынтығы, шулай уҡ балалар өсөн яҙылған башҡа шиғырҙары быға асыҡ миҫал булып торалар. «Уҡыусы йәш ҡыҙға» шиғырында, мәҫәлән, шағир үҙенең йәш балаларға, бигерәк тә ҡыҙҙарға ниндәй ҙур өмөт бағлағанлығын ап-асыҡ әйтеп биргән:

Донъя һеҙһеҙ һис төҙәлмәҫ, иң ҡәҙерле бәндә һеҙ!
Шөбһәһеҙ, милләт төҙәлер, һеҙ уҡып төҙәтһәгеҙ,
Хәлебеҙҙең төҙәлеүен һеҙҙән көтәбеҙ инде беҙ.

Өсөнсөнән, реакция һәм яңы революцион күтәрелеш йылдарында Ғафури поэзияһында мәҫәл жанры ярайһы ҙур урын алып тора. Билдәле булыуынса, мәҫәлдә тормош материалы яҙыусының әйтәһе фекере өсөн ғибрәтле күренеш, иллюстрация функцияһын үтәй. Ә инде тормош материалын үҙ фекеренә иллюстрация итеп файҙаланыу күренеше мәғрифәтселек әҙәбиәтендә иң киң таралған алымдарҙың береһе. Был алым мәғрифәтселек эстетикаһында тәрбиәләнгән Ғафури өсөн бик уңайлы ине. Ғафуриҙың мәҫәлгә тотоноуы шулай уҡ ҡара реакцияның ҡыҫымынан да, әйтергә теләгән фекерҙе туранан-тура әйтеп бирергә мөмкинлек булмауҙан да килә ине.

Ғафури үҙенең мәҫәлдәре менән рус мәҫәлсеһе И. А. Крылов һәм Көнсығыш классикаһының традицияларын уңышлы дауам иттерҙе. Шулай уҡ башҡорт халҡында хайуандар тураһындағы әкиәттәрҙең киң таралған булыуы Ғафури мәҫәлдәренә йоғонтоһоҙ ҡалмаған булырға тейеш. Һәм был күренеш халыҡтың мәҫәл жанрын еңел ҡабул итеүгә ныҡлы ерлек булып тора ине.

Ғафуриҙың мәҫәлдәре башҡорт һәм татар әҙәбиәтселәре тарафынан ярайһы тулы өйрәнелгән, шуға күрә уларға махсус туҡталыуҙың кәрәге юҡ. Тик шуны ғына

әйтеп китергә кәрәк: Ғафури үҙенең мәҫәлдәре менән дә мәғрифәтселек әҙәбиәтенең традицияларын дауам итте. Ләкин ул ғибрәт биреү, өгөт-нәсихәт менән генә сикләнеп ҡалманы, бигерәк тә яңы революцион күтәрелеш йылдарында, көслөләрҙең көсһөҙҙәрҙе йәберһетеүен, ғәҙелһеҙлекте тәнҡит итеп, «Эт менән ҡуян», «Үгеҙ менән бүре», «Һарыҡты кем ашаған?», «Ҡара йылан һәм тәлмәрйендәр батшаһы», «Януарҙарға килгән үләт» кеүек мәҫәлдәрендә үткер социаль мәсьәләләрҙе күтәреп сыҡты. Көслөләрҙең көсһөҙҙәр өҫтөнән хакимлығын фаш итеп, ғәҙеллек һәм тигеҙлек идеяларын алға һөрҙө.

Д.Юлтыйҙың поэзияға мәғрифәтсе булараҡ аяҡ баҫыуы хаҡында әйтелгәйне инде. Ул, «Башҡорт хәле» (1908), «Садалар» (1909), «Ҡатын-ҡыҙ ғәләменә» шиғырҙарынан күренеүенсә, ижадының тәүге осоронда тулыһынса мәғрифәтсе булып сығыш яһаны. «Садалар» шиғырында:

> «Беҙ барабыҙ ҙур аҙымдар берлә мәғрифәткә табан»[103], —

тип, мәғрифәткә ынтылыуҙы төп маҡсат юғарылығына күтәрҙе.

> Етер шул пәрҙәләр, шәлдәр, сапандар ҡаплаулы йөҙгә,
> Тотоп ирек әләмдәрен, баҫығыҙ мәҙәни эҙгә.
> Тауыш бирегеҙ ирекка, күккә ашһын тауышығыҙ һеҙҙең,
> Етер ярты йәшәү беҙгә: тороғоҙ, яртыбыҙ беҙҙең[104], —

тип «Ҡатын-ҡыҙ ғәләменә» шиғырында ҡатын-ҡыҙ азатлығы мәсьәләләрен мәғрифәтселек менән тығыҙ бәйләнештә күрҙе.

Ҡатын-ҡыҙ азатлығы мәсьәләһенең мәғрифәтселек менән бәйле рәүештә күтәрелеүе С.Яҡшығолов, Я.Юмаевтарҙың ижадында ла күҙгә ташлана. Я.Юмаев «Йәш ҡыҙға» шиғырында ҡатын-ҡыҙҙың тиң хоҡуҡлы булыуын ирҙәр кеүек аң-белемгә, мәғрифәткә эйә булыуынан күрә:

---

[103] Дауыт Юлтый. Һайланма әҫәрҙәр. 1-се том. — Өфө, 1957, 22-се бит.

[104] Дауыт Юлтый. Һайланма әҫәрҙәр. 1-се том. — Өфө, 1957, 21-се бит. (Д. Юлтый шиғырҙарынан өҙөктәр артабан да ошо баҫманан алынды. — В. Ә.)

Тор, уян, йәш ҡыз, әнә күренеп тора ул нурлы көн,
Яз, уҡы, бул мәғрифәтле, булма ярты, бул бөтөн[105].

Мәғрифәтселек әҙәбиәтенең шауҡымы поэзияға ошо осорҙа килгән Ш. Бабич һәм Ғ. Иҫәнбирҙиндәрҙең дә ҡайһы бер шиғырҙарында һиҙелеп ҡалды. Ләкин улар, мәғрифәтте абсолют юғарылыҡҡа күтәреүҙән алыҫ булып, мәғрифәткә үҙҙәрен халыҡ бәхете өсөн көрәшкә әҙерләүсе бер сара итеп ҡарау яғында торҙолар. Был күренеш үҙ сиратында поэзияла лирик башланғыстың өҫтөнлөк ала барыуы менән дә бәйле ине.

Шул уҡ ваҡытта был осорҙа йәш шағирҙар араһында эҙмә-эҙлекле мәғрифәтселек ҡараштарында тороусылар ҙа юҡ түгел ине. Фәйзи Вәлиев, мәҫәлән, 1911 йылда «Өмөтлө күңелдән» тигән шиғырында:

Бездә ич ғәйрәт вә саф ҡан, ник, имеш, без бөтәбез!?
Без уҡысаҡ, безме, без, ә, без җиһан селкетәбез.
Бетмибез без, бер дә юҡ сүз! Без һаман алға табан
Атлыйбыз, тумырылабыз алға дөлдөлдән яман[106], —

тип «башҡорттар үлеп бөтә» тигән уйҙырма ҡараштарға ҡаршы сыҡты һәм өмөтөн мәғрифәткә алып барып бәйләне.

Мөхәммәтвәсим Солтанов та «Канау буйы» (1910), «Ләззәт, йәки тәм» (1912) тигән китаптары менән үҙен мәғрифәтсе итеп танытты.

Тәүге китабында автор ауылдарҙа канау буйҙарына ултырып ғәйбәт һатыусы, милләт һәм дин өсөн иждиһат ҡылмаусы эшлекһеҙ кешеләрҙе ҡаты тәнҡит итә һәм милләт өсөн янып йәшәүсе шәкерттәрҙе ауылдарға ҡайтырға, халыҡ араһында аң-белем сәсергә өндәй.

«Ләззәт, йәки тәм» тигән икенсе китабында наҙан халыҡты алдап, уны ҡараңғылыҡта тотоуҙан ләззәт вә тәм табыусы хәҙрәттәрҙе, кеше көсө менән байығыусы байҙарҙы, араҡынан ғына тәм табыусы мужикты ҡаты тәнҡит итә. Автор был кешеләрҙең донъя тураһындағы фәлсәфәләрен ҡырҡа кире ҡаға һәм, аҙаҡ килеп, аслы-туҡлы йәшәп булһа ла, уҡып белем алырға тырышып

[105] Җамалетдин Юмаев. Әдәби шигырьләр. — Казан, 1915, 24 бит.
[106] Шура, 1911, № 3.

йөрөүсе шәкертте осрата. Шәкерт донъяның бөтә ләззәтен белем алыуҙа күрә. Шуға ла В.Солтанов уны идеал юғарылығына күтәрә һәм уға тормоштоң асылын аңлаусы ысын кеше итеп ҡарай. Сөнки шәкерт донъяның тәмен мәғрифәткә эйә булып, халҡына хеҙмәт итеүҙән башҡа нәмәлә күрмәй.

Дөйөм алғанда, башҡорт поэзияһында реакция йылдарында ла мәғрифәтселектең дауам итеүе әҙәби традицияларҙың тотороҡло булыуына һәм башҡорттар араһында был осорҙа мәғрифәтселек хәрәкәтенең сағыштырмаса йәнләнеү кисереүенә бәйле ине. Ләкин 1905 йылғы революциянан һуң, башҡорт поэзияһында С.Яҡшығоловтан башҡа шағирҙар был йүнәлештә артыҡ ҙур уңышҡа өлгәшә алманылар. Ә инде С.Яҡшығоловтың ижады, нигеҙҙә 1905—1907 йылдарҙағы революция осоронда йәнләнеп китеп, реакция йылдарында ла шуның ҡыҙыуы менән дауам итһә лә, уның мәғрифәтселеге йөкмәткеһе менән татар һәм башҡорт әҙәбиәтендә 1905 йылға тиклемге мәғрифәтселек әҙәбиәтенә яҡын торҙо. Ул шул осор мәғрифәтселек идея-тематикаһын революция уңайы менән яңы шарттарға конкрет башҡорт ысынбарлығына бәйләне. Шулай уҡ уның ижады ла һуңға табан тәнҡитле реализмға табан йүнәлеш алды. Ә ҡалған йәш шағирҙарҙың йырлайһы йыры үҙ көсөнән сығып барыусы мәғрифәтселек менән генә сикләнеп ҡалыуы мөмкин түгел ине, әлбиттә. Уларҙың башланғыс ижадында мәғрифәтселек бер ни тиклем сағылып ҡалһа ла, улар был йүнәлештә яңы һүҙ әйтә алманылар. Беренсенән, был осорҙарҙа мәғрифәт орлоғон сәсеп кенә халыҡты бәхетле итергә мөмкин тигән ҡараштарға ышаныс ҡаҡшай, емерелә, шуның менән бергә мәғрифәтселек әҙәбиәтенең ерлеге лә юҡҡа сыға бара ине. Икенсенән, ижтимағи күренештең ғәрип яғы — ҡара реакцияның һөжүменә ҡаршы тороу әҙәбиәттә мотлаҡ икенсе йүнәлештәрҙең үҫеш алыуына этәрә ине.

## 2

1905—1907 йылдарҙағы буржуаз-демократик революция еңелгәндән һуң башланған реакция йылдары әле яңыраҡ ҡына аяҡҡа баҫып килгән, яңы традициялары

нығынып етмәгән башҡорт әҙәбиәтенең үҫеш юлында ҙур ауырлыҡтар килтереп тыуҙыра.

Революцияла ҡатнашыусыларҙы эҙәрлекләүҙәр, һөргөндәр, шымсылыҡ, великоросс шовинизмының көсәйеүе, пантюркистар йоғонтоһоноң һәм татар буржуаз милләтселегенең активлашыуы, бер яҡлап, аграр мәсьәләләрҙең киҫкенләшеүе һәм башҡорт ерҙәренең артабан таланыуы, 1911 йылдарҙа Башҡортостандағы ҡот осҡос аслыҡ, икенсе яҡтан, реакция йылдарында әҙәбиәткә килеүсе йәш шағирҙарҙың ижадында күңел төшөнкөлөгө мотивтарының урын алыуына объектив сәбәптәр булып торҙо. Был күңел төшөнкөлөгө үҙенең йөкмәткеһе менән, иң элек, хөкөм һөрөүсе ҡоролошҡа ҡаршы протест характерында булды. Буржуаз-демократик революцияға ҙур өмөт бағлап күҙен асҡан шағирҙарҙың өмөттәре, улар иҫтәрен дә йыя алмай, сабый һымаҡ ҡыуанып торған мәлдә, селпәрәмә килде. Шунан өмөтһөҙлөк, икеләнеүҙәр, яңы идеал табырға ынтылыштар осоро башланды.

Реакция һөжүмгә күсеп, ысын азатлыҡтың килеүенә шөбһәләнә башлаған һиҙгер күңелле Ғафури әле 1906 йылда уҡ «Мал өсөн» шиғырында:

> Хөрриәт, ҡояш кеүек, сыҡты яҡты,
> Ләкин дә оҙаҡ тормай кире батты, —

тип бик тапҡыр итеп әйтеп һалғайны.

Мәғрифәтселек традицияларында тәрбиәләнгән Башҡортостан шағирҙары хөрриәттең кире батыуын, йәғни реакцияның һөжүмен, яҡшылыҡ менән изгелек өҫтөнән яманлыҡ менән яуызлыҡтың хөкөм һөрөүе итеп ҡабул иттеләр. Сөнки улар хөрриәтте быуыусы реакцияның социаль айышына бик асыҡ ҡына төшөнөп етә алмайҙар ине. Шуға ла был осорҙа мораль-этик проблемалар башҡорт поэзияһының үҙәк проблемаларының береһе булып ҡалды.

М. Ғафури 1908 йылда яҙылған «Яҡшылыҡ» шиғырында:

> Итәм тип яҡшылыҡ мин, үҙ уйымса,
> Һәр эште эшләнем выждан буйынса,
> Ләкин дә яҡшылыҡтар аҫҡа ҡалды,
> Күренмәй береһе лә шунда юғалды.
> Өҫтөн сыҡҡас яманлыҡ яҡшылыҡтан,
> Сыға һәр яҡшылыҡ бушҡа һәм юҡҡа, —

тип, реакцияны яуыҙлыҡтың абсолют хакимлығы итеңкерәп аңлатты. Артабан да уның ижадында выждан һәм намыҫ, хаҡлыҡ һәм тоғролоҡ кеүек этик категориялар ҙур урын алып торҙо. «Хәҡиҡәт» (1911) шиғырында хәҡиҡәт өҫтөнән алтын-көмөштөң хакимлығын фашлаһа, «Сыҡмамын», «Выжданды һатма» (1911) әҫәрҙәрендә ике йөҙлөлөк һәм хыянат кеүек түбәнлектәрҙе ҡамсылап, выждан сафлығы, тоғролоҡ, кешелеклелек кеүек сифаттарҙы алға һөрҙө.

«Бай һәм хеҙмәтсе», «Байҙар алдында» (1908), «Хәйерсе» (1909), «Татар ҡатыны» (1908) кеүек социаль йөкмәткеле шиғырҙарында ла байҙарҙың хеҙмәтселәр өҫтөнән хакимлығы, руханиҙарҙың ғәҙелһеҙлеге ана шул яманлыҡтың яҡшылыҡ өҫтөнән хакимлығы кеүегерәк итеп күтәрелә. Ә инде «Әйтергә еңел һүҙҙәр» шиғырында «выждан», «ҡыл яҡшылыҡ», «тигеҙлек», «хаҡ» кеүек һүҙҙәрҙе һәр кем еңел әйтә алһа ла, асылда был һүҙҙәрҙең ысынлаһыуына әсенә, сөнки, ти шағир, «көс» һүҙе был һүҙҙәрҙең барын еңә, йәғни хаҡлыҡ, тигеҙлек һөйөүсе, выжданлы кешеләр түгел, ә көслөләр хөкөм һөрә. Шуға ла Ғафури үҙенең мәҫәлдәрендә лә ғәҙеллек һәм тигеҙлек идеяларын яҡлап, ана шул яуыз көстөң хакимлығын ҡәһәрләне.

Выждан сафлығы, тоғролоҡ һәм ғәҙеллек мәсьәләләрен шулай уҡ был осорҙа Д. Юлтый, Ғ. Иҫәнбирҙин, Я. Юмаевтар ҙа күтәреп сыҡтылар. Д. Юлтый «Китәм» шиғырында үҙен иҙеүсе, намыҫһыҙ мөхиттән зарланды:

Улар тел беҙҙәрен сәнсеп,
Ағыуланды бөтә йәнем,
Аға йәшем, яна бәғерем,
Мөғәҙҙән дәхи[107] выжданым.
Ҡасам, тормайым, китәм хәҙер
Был яһилдар араһынан;
Йәнем һөймәй, тамам биҙҙем
Был вәхшиҙәр ҡараһынан.

Был, әлбиттә, донъянан китергә йыйыныуу түгел, ә кешене керләүсе мөхиттән ҡотолорға, выжданына тоғро булып ҡалырға эске бер ынтылыш ине.

---

[107] Мөғәҙҙән дәхи — ғазаплана тағы.

Ш. Бабич поэзияһында ла был мәсьәлә лирик геройының күңелендә выждан һәм нәфсенең көрәше формаһындараҡ сағылыш тапты. Ул, выжданды ғына яҡлап, нәфсене бөтөнләй кире ҡағыу яғында торманы. Ләкин нәфсе төшөнсәһе уның поэзияһында йәшәргә һыуһау, рухи азатлыҡ мәсьәләләренә барып тоташты. Был күренеш уның ижады баштан уҡ диалектик ҡаршылыҡтар — аҡыл һәм хистәр көрәшенең сағылышы булып, урғып килеп тыуыуына бәйле ине булһа кәрәк:

Ҡуй нәфсене иркенә, тән төрмәһендә ятмаһын,
Тик уны выждан ебе менән тышаула, ҡасмаһын![108] —

тигән юлдарҙа уҡ Бабичтағы выждан һәм нәфсе — аҡыл һәм тойғоноң үҙ-ара көрәш диалектикаһы асыҡ күренеп тора. Артабан был тема уның «Ғазазил» поэмаһында ла ярайһы ҙур урын ала.

Шул рәүешле реакция һәм яңы революцион күтәрелеш йылдарында мораль-этик проблемаларҙың ҡуйылыуы, бер яҡтан, мәғрифәтселек әҙәбиәтенең традицияларында барһа, икенсе яҡтан, был мәсьәләләр реакцияға йәки яуызлыҡҡа ҡаршы яҙыусыларҙың гуманистарса протесы формаһында үҫеш алды. Реакция йылдарында халыҡҡа яҡын тороусы М. Ғафури, Д. Юлтый, Ш. Бабич азатлыҡ, ғәҙеллек һәм тигеҙлек кеүек дөйөм гуманистик идеалдан өмөттәрен бөтөнләй өҙмәнеләр. Ләкин был идеалға ирешеүҙең дөрөҫ юлдарын аңлауҙан, пролетариат идеологияһынан алыҫ торҙолар. 1905—1907 йылдарҙа, унан элегерәк тә мәғрифәтселәр был идеалға мәғрифәт таратыу менән ирешергә мөмкин тип ҡарайҙар һәм шуға ышаналар ине. Был ышаныс уларҙы актив эшмәкәрлеккә этәрҙе. Ләкин реакция йылдары был ҡараштарҙы ҡаҡшатты, юҡ итә барҙы. Был кризисҡа башҡорт халҡының артабанғы яҙмышы тураһындағы бәхәстәр ҙә ҡушылды. Өҫтәүенә, аслыҡ, яланғаслыҡ хөкөм һөрҙө. Артабан тормош нисек буласаҡ? Был һорауға башҡорт шағирҙарының береһе лә яуап бирерлек хәлдә түгел ине.

---

[108] Шәйхзада Бабич. Һайланма әҫәрҙәр. — Өфө, 1958, 65-се бит. (Ш.Бабич шиғырҙары артабан да ошо баҫманан килтерелә. — В. Ә.).

Йәмғиәт менән шәхес, идеал менән ысынбарлыҡ араһында бәйләнештәр йомшарған, юҡҡа сыға барған, ошондай билдәһеҙлек хөкөм һөргән осорҙарҙа, донъя әҙәбиәте тарихында романтизм методы үҫеш ала килгән. XIX быуат башындағы рус әҙәбиәтендә лә романтизм 1825 йылғы декабристар восстаниеһының уңышһыҙлыҡҡа осрауынан һуң тыуған реакция һәм билдәһеҙлек осоронда көсәйеп китә.

А. М. Горькийҙың билдәләүенсә, «Романтизм — ул әле күп яҡтары асыҡланып етмәгән, бер дәүерҙең икенсе дәүергә күсеү осоронда була торған һиҙенеүҙәр, күңел тороштары нескәлектәренең сағылышы, ләкин уның төп нотаһы — ниндәйҙер яңылыҡ көтөү; тыуасаҡ яңылыҡ алдында ҡаушап ҡалыу, шул яңылыҡты йөрәкһеп белергә ынтылыу»[109].

Романтизм Көнсығыш Европала ла, Россияла ла әҙәбиәттәр ярайһы ныҡ үҫешкән осорҙарҙа килеп тыуған, һәм ул үҙенең Байрон, Шелли, Лермонтов кеүек классиктарын тыуҙырған. Яңы үҫеш алған башҡорт әҙәбиәтендә әле романтизмды классик юғарылыҡҡа күтәрерлек шағирҙар ҙа, уны теоретик яҡтан нигеҙләрлек әҙәбиәт ғилеме, тәнҡит тә юҡ ине. Әлбиттә, был методтың үҫеш алыуына Көнбайыш һәм рус әҙәбиәтенән өйрәнеү, уларҙы тәржемә итеү ҙә этәреш яһай. Башҡорт шағиры М. Өмөтбаевтың тәржемәһендә башҡорт һәм татарҙар тәү башлап А. С. Пушкиндың «Баҡсаһарай фонтаны» поэмаһы менән танышалар. С. Рәмиевтең романтик ижады ла нигеҙҙә Көнбайыш һәм рус әҙәбиәтенең йоғонтоһонда үҫеш ала. Артабан Я. Юмаев, Ғ.Иҫәнбирҙиндәрҙең, А. С. Пушкин менән М. Ю. Лермонтовтан өйрәнеп, уларҙың шиғырҙарын тәржемә итеүҙәре татар һәм башҡорт поэзияһында романтизмдың үҫеше үҙ алдына ғына башланмауы хаҡында һөйләп тора. Ләкин башҡорт поэзиһында был методтың тыуыуы иң элек реакция йылдарындағы ижтимағи-политик шарттарҙың романтизмды Көнбайышта һәм рус әҙәбиәтендә килтереп тыуҙырған шарттарға оҡшаш булыуынан эҙләргә кәрәк.

---

[109] М. Горький. История русской литературы. — М., 1939, с. 42.

«Романтизм әҙәбиәтенең дөйөм идеологик йүнәлеше, — тип яҙа У. Р. Фохт, — ысынбарлыҡҡа киҫкен тәнҡитле, килешмәүсән мөнәсәбәт, азатлыҡ пафосы, иҫ киткес ҙур эмоциональ көсөргәнештә икенсе бер «булыуы мөмкин тип уйланған» тормошҡа ынтылыш менән характерлана»[110].

Ләкин романтиктар үҙҙәре ынтылған тормошто асыҡ ҡына төҫмөрләй алмайҙар, ул томан эсендә ҡала. Шулай уҡ хөкөм һөрөүсе ҡоролош менән килешмәүсәнлек шағирҙың актив эске бунты формаһында ла, бик пассив — донъянан биҙеү, үткәнде идеаллаштырыу, «теге» донъяға ынтылыу формаһында ла булыуы мөмкин. Бының тәүгеһе — актив йәки прогрессив романтизмды, икенсеһе — пассив йәки реакцион романтизмды килтереп тыуҙыра.

Реакция һәм унан һуңғы йылдарҙа башҡорт поэзияһында романтизмдың был ике йүнәлеше лә үҫеш ала. Шулай уҡ был метод реалистик метод менән аралашып барғанлығы күҙгә ташлана.

Романтизм әҙәбиәтенең тәбиғәте хаҡында шул уҡ У.Р.Фохт былай тип яҙа: «Ысынбарлыҡта абсолют идеалдың, исмаһам, шәүләһен генә булһа ла тотоп алырға ынтылыш романтиктарҙа тәбиғәткә, гонаһһыҙ, саф ҡатын-ҡыҙ күңеленә, сабыйҙар психологияһына ҡарата ҙур ҡыҙыҡһыныу уята. Ошо уҡ маҡсатҡа экзотика, тарихи үткән тормош, әйткәндәй, һәр ваҡыт шартлы, модернизацияланған тормош, шулай уҡ фольклор хеҙмәт итә»[111].

Был раҫлау беҙгә реакция һәм яңы революцион күтәрелеш йылдарындағы башҡорт поэзияһын аңларға һәм уның методы тураһында тәрәнерәк һүҙ йөрөтөргә ярҙам итә.

Һүҙҙе тәбиғәт лирикаһынан башлайыҡ.

Тәбиғәт темаһы, әлбиттә, поэзияның мәңгелек темаларының береһе. Ләкин ул һәр заманда үҙенең конкрет функцияһын үтәй. Шағир С. Яҡшығолов ижадында ла тәбиғәт лирикаһы ярайһы ҙур урын алғанлығын күреп үткәйнек. Ул тәбиғәт күренештәренә лә мәғрифәт күҙ-

---

[110] У. Р. Фохт. — Некоторые вопросы теории романтизма. — В сб.: Проблемы романтизма.-М.: Искусство, 1967, с. 85.

[111] Юғарыла күрһәтелгән китаптан, 86—87-се биттәр.

легенән сығып баһа бирә, ундағы яҙ, таң атыуы картиналарын ғибрәт итеп ҡуйып, халҡын уяныуға саҡыра ине. Ә инде реакция һәм унан һуңғы осорҙа тәбиғәт лирикаһы бөтөнләй икенсе үҫеш ала.

Тормош ауырлығынан, мөхиттең ҡыҫымынан биҙрәгән М. Ғафури, Д. Юлтый, Я. Юмаев, Ғ. Иҫәнбирҙин, Ф. Туйкиндар тәбиғәт ҡосағына иң элек тынғылыҡ һәм сафлыҡҡа һыуһап үҙҙәре ташланалар.

Был осор тәбиғәт темаһы М.Ғафуриҙың поэзияһында ғына түгел, романтик хикәйә һәм нәҫерҙәрендә лә ҙур урын алып тора һәм тәбиғәт уның прозаһында ла, поэзияһында ла нигеҙҙә бер үк функцияларҙы башҡара. «Бер сәскәнең нәләһе» (1911) тигән нәҫерендә, «Япраҡ» (1909), «Харап булған баҡса» (1910) шиғырҙарында сәскә, баҡса, япраҡ кеүек образдар лирик параллелизм хеҙмәтен үтәй, һәм шағир сәскәнең рәхимһеҙ ҡулдар тарафынан өҙөп ырғытылыуы, йәп-йәшел япраҡтың ҡыраужан һарғайып кибеүе, баҡсаның харап булыуы аша ерҙә ғәҙеллектең, тормош йәменең юҡҡа сыға барыуына ишара яһай, шуның өсөн өҙгөләнә. Ә инде «Ҡырҙа», «Ҡояш байығанда» (1909), «Эңер ваҡыты» (1911) һәм башҡа шиғырҙарында ғазап сигеүсе йәненә тынғы эҙләп һәм сафлыҡҡа сарсап, үҙе тәбиғәт ҡосағына ташлана.

Тәбиғәттәге мәңгелек гүзәллек һәм гармония, «Эңер ваҡыты» шиғырынан асыҡ күренеүенсә, шағирға ниндәйҙер идеаль матурлыҡ менән идеаль ҡөҙрәттең сағылышы булып тойола:

Һауа барған һайын сафлана, ҡыр тула хуш еҫ менән,
Күңел юғарылана әллә ниндәй бөйөк хис менән.

Шағир үҙе лә аңлап етмәгән был билдәһеҙ «әллә ниндәй бөйөк хис» — тәбиғәткә хас булған гүзәллек һәм гармония — кешеләр араһында ла бер ваҡыт тантана итәсәгенә ышаныс, шағир күңелендә һүнмәгән тарихи оптимизм сатҡылары ине. Шағир күңелендәге был өмөт сатҡылары артабан уның «Йондоҙ» (1912), «Таң яҡтыһы» (1915) шиғырҙарында тағы ла көсәйә һәм асыҡлана бара. Был иһә, үҙ сиратында, Ғафури романтизмының актив һәм прогрессив характер ала барыуы хаҡында һөйләп тора.

Тәбиғәт лирикаһы Ғ. Иҫәнбирҙин менән Я. Юмаевтарҙың да ижадында ярайһы киң урын алып тора. Я.Юмаев тәбиғәткә күп осраҡта илаһи көстөң ҡөҙрәте кеүегерәк итеп ҡарап, уның алдында баш эйһә, Ғ.Иҫәнбирҙин тәбиғәт менән ҡауышыу, берегеү яғына бармай, унан өҫтөнөрәк торорға тырышҡанлығы күренә. Ул «Тәбиғәттә» шиғырында тәбиғәттәге мәңгелек тынғыһыҙлыҡ, хәрәкәт менән һоҡлана.

**Дауыт Юлтыйҙың** империалистик һуғыш осорона тиклемге ижадына килгәндә, уны тәбиғәттән бөтөнләй айырып алғыһыҙ тип әйтергә мөмкин. Донъяны эстетик танып белеүҙә халыҡ ауыҙ-тел ижадының традицияларын дауам иттереп, Юлтый үҙен уратып алған донъяға, кешеләр араһындағы ҡатмарлы мөнәсәбәттәргә тәбиғәт күренештәре, халыҡ ижадындағы традицион образдар аша интуитив рәүештә үтеп инергә тырыша. Ул үҙенең башланғыс ижадына Туҡай менән Ғафуриҙарҙың йоғонтолары булғанлығын һыҙыҡ өҫтөнә алһа ла, уның поэзияһы күбеһенсә башҡорт халҡының йыр традицияларында үҫеп сыҡҡан. Д.Юлтый халыҡ поэзияһында киң таралған толпар, һандуғас, таң еле, ай, ҡояш, йондоҙ кеүек традицион образдарҙың, халыҡ йырҙарының һәлмәк ритмикаһын, һүрәтләү сараларын еңел һәм урынлы файҙалана. Уның ижадында, тәү башлап тип әйтерлек, башҡорт халыҡ поэзияһы профессиональ поэзия менән ысынлап ҡауыша барыу процесын кисерә.

...Дауыт Юлтый тыуып үҫкән ауыл тәбиғәттең әллә ниндәй сихри гүзәл мөйөшөндә урынлашмаған. Унда күңелде арбар мөһабәт тауҙар ҙа юҡ, ләкин унда шағир күңелен йәлеп итерлек үҙенсә матурлыҡ хөкөм һөрә. Шағир тыуған йорттан йөҙ-йөҙ илле аҙымдар самаһы ғына төньяҡта ялтырап, был яҡтарҙың йырҙарында маҡталған Туҡ йылғаһы ағып ята. Уның ярҙарына өйкөм-өйкөм булып зифа талдар, ялбыр өйәнкеләр үҫкән, саҡ ҡына арыраҡ — ярҙарын ҡалын ҡамыш ҡаплаған ваҡ-ваҡ күлдәр теҙмәһе; унда суртандар ҡарпый, быжылдап сүрәгәйҙәр ҡойона. Туҡ буйы йәйҙең йәмле көндәрендә хуш еҫле дала сәскәһенә күмелә, тирә-йүндә бал еҫе аңҡып тора. Алыҫтараҡ ваҡ-ваҡ ҡына ҡалҡыулыҡтар күҙгә ташлана, ләкин улар дала киңлеген сикләй алмай. Дүрт яҡта ла — күҙ күреме етмәҫ дала офоҡтары, улар йәйге аяҙ көндәрҙә, бигерәк тә таңда-

рын, тулҡынланып ятҡан диңгеҙҙе хәтерләтә. Был яҡтарҙа кистәрен ай яҡтыһы сағыуыраҡ, айһыҙ төндәрҙә йондоҙҙар ҡуйыраҡ һәм асығыраҡ булып йымылдайҙар... Ҡыҫҡаһы, тәбиғәт бында кешене ҡыҫмай, кеше бында үҙен түңәрәк ер шарының өҫтөндә торған кеүек хис итә. Тәбиғәттәге ошо иркенлек, осһоҙ-ҡырыйһыҙ дала шағирҙың рухи донъяһына йоғонто яһамай ҡалыуы мөмкин түгел. Дауыт Юлтыйҙың романтик характерлы лирик геройы ла үҙен ҡыҫыусы мөхит, йәмғиәт менән ошо иркен тәбиғәт араһында талпына. Юлтый тәбиғәт картиналарын күпселек шиғырҙарында яҡты буяуҙар менән хәрәкәттә бирергә ынтыла. Тәбиғәттәге йәнлелек һәм иркенлек шағирҙың күңелен һәр ваҡыт әйҙәп тора. Ләкин шағир күңеле тыныс түгел:

Сикһеҙ киң күк йөҙөн сыбарлаған
Йондоҙҙарға ҡарап ирек асам;
Яҙмышҡа буйһонған һыныҡ күңел
Шунан рәхәт тапһын, исмаһам, —

тип йондоҙҙарға ынтылһа ла («Эҙләнеү», 1909), бына-бына үҙенең изге теләктәрен алып килер тип, йәйге таң елдәренә өмөт итһә лә, «өмөттәре бушҡа китә, таралалар», юҡҡа сыға баралар («Йәйге таң», 1909).

Д.Юлтый шулай уҡ ҡайһы бер осраҡта тәбиғәт образдарын символик планда ла иркен ҡуллана. «Томанлы көндәр» (1909) шиғырында шағир халыҡ ижадынан килгән «ҡара томан» образы аша үҙен уратып алған мөхиткә ишара яһай:

Әйләнәмде ҡаплап алған
Ҡурҡыныслы ҡара томан,
Был ҡурҡыныслы томандан
Ала алмайым башты һаман.

Һәм был ҡара томан шағирға асылмаҫ та, күтәрелмәҫ тә булып тойола:

Истиҡбалым ҡараңғы төн,
Күрә алмам тим нурлы аҡ көн,
Әсе хәсрәт көйөн көйләп,
Һыҙыла күңелем көндөҙ вә төн...

Ләкин йәмғиәт тарафынан ҡыйырһытылған шағирға тәбиғәт ҡосағы һаман берҙән-бер күңел йыуатҡысы бу-

лыуынан туҡтамай. Тәбиғәт менән азатлыҡҡа ынтылыусы үҙ күңеле араһында ниндәйҙер уртаҡлыҡ күргәнлектән, уның лирик геройы һәр ваҡыт тип әйтерлек тәбиғәт менән япа-яңғыҙ ҡалып серләшеүҙә эске бер ҡыуаныс таба, тәбиғәт ҡосағына ул бигерәк тә эңер мәлдәрендә, айлы төндәрҙә һәм таң атҡан саҡтарҙа ташлана.

Ижадының башланғыс осоронда шағирҙың лирик геройы халыҡтан алыҫыраҡ тора, ул шәхси бәхеткә һыуһап, үҙен иҙеүсе мөхиттән зарлана ине. Юлтыйҙың елкенеүсе романтик геройы артабан активлаша төшә. Халыҡтың оҙон йырҙары традицияһында үҫеп сыҡҡан «Һандуғасҡа» шиғырында ил ғәме, халыҡ зары лирик геройҙың төп ҡайғыһына әүерелә барғанлығы күренә:

Һандуғасым, бирсе ҡанатыңды,
Бейек-бейектәргә осайым;
Бейектәргә осоп, түбән төшөп,
Зарлы илдең ғәмен эсәйем!

Был инде бөтөнләй икенсе йыр. Шағирҙың романтик геройы эҙләнеүҙәр, болоҡһоуҙар аша халыҡҡа яҡынлаша, үҙ яҙмышын халыҡ яҙмышы менән бәйләй. «Йәйге таң» (1914) шиғырында беҙ лирик геройҙы тағы ла тәбиғәт уртаһында итеп тоябыҙ. Шиғырҙа төндөң үҙенсә матур, серле күренештәре аяҙ, көләс таң менән алмашына. Йәйге аяҙ иртәлә йомарт ҡояш нурҙарында тәбиғәт тантана итә. Унда мәңгелекте раҫлаусы тормош ҡайнай, һәм был тәбиғәттең тантанаһы, илаһи көсө лирик геройҙың күкрәгендә йәшәү дәрте, изге һәм юғары тойғолар уята:

Әллә болот булып һауаларҙа,
Һибергәме көмөш тамсылар?
Әллә, Хыҙыр булып, йәшендәрҙән
Һелтәргәме ергә ҡамсылар?
Әллә, йәйге таңдың нурҙарындай,
Илгә ҡарап күктән янырға?
Әллә, гөлгә ҡунған ысыҡтарҙай,
Миллион тамсы булып тамырға?

Шиғырҙан күренеп тороуынса, донъяны тәбиғәт күренештәре аша ҡабул итеүсе тәбиғәт балаһы — күкрәгенә ил ғәмен йыйған романтик герой ҙур рухи күтәренкелек менән актив көрәшкә, бөйөк идеалға ынтыла.

«Абсолют идеалдың шәүләһе» реакция һәм яңы революцион күтәрелеш йылдарындағы башҡорт поэзияһында сабыйлыҡ менән ҡатын-ҡыҙҙы идеаллаштырыуҙа асыҡ күренде һәм саф мөхәббәт мәсьәләһе менән бергә хәл ителде.

Гонаһһыҙ, донъя бысраҡтары менән керләнмәгән сабыйлыҡты идеаллаштырыу һәм уны һағыныу бигерәк тә Я.Юмаевтың ижадында ярайһы ҙур урын алып тора. Ул «Ҡыҙ бала» (1910), «Ҡаҙаҡ ҡыҙына» (1914), «Сабый зары» (1914), «Мәйүскә» (1916) кеүек шиғырҙарында гонаһһыҙ һәм михнәт сикмәгән сабыйлыҡты үҙ заманының ҡәһәрле, кешенең тәбиғи сифаттары менән иҫәпләшмәҫ ысынбарлығына ҡаршы ҡуя. Тормош менән идеал, тәбиғи сафлыҡ менән йәмғиәт араһындағы ҡаршылыҡтарҙың хәл ителмәҫлек ҙур булыуына ишара яһай, һәм үҙе лә сабый саҡтарын һағынып һыҡтай.

Д.Юлтый иһә «Йәш балаға» (1910) шиғырында:

Һин минең бәхетем, ҡара төн
Тумырған аҡ сулпаным;
Һин минең барлыҡ өмөтөм,
Ғәрше көрси[112] солтаным.
Ай вә йылдар талпынып та,
Аҡ күгемдә тапмаған
Идеалымдың йондоҙо һин,
Бар юлымды аҡлаған, —

тип, сабыйға идеал йондоҙо итеп табына. Быны, әлбиттә, әле ата булып өлгөрмәгән үҫмерҙәрҙә балаға ҡарата аталыҡ тойғоһо тип әйтеп булмай, был билдәһеҙ идеал йондоҙо — сабыйлыҡ үҙе, уның сафлығы, эскерһеҙлеге ине. Донъя бысранып, керләнеп бөткән бер саҡта, сафлыҡ символы булған сабый күңеленә тартылыу кире ҡаҡҡыһыҙ тәбиғи күренеш.

Поэзияла мөхәббәт темаһы, мөхәббәттең үҙе һымаҡ, бик боронғо, һәр ваҡыт яңыртылып тороусы темаларҙың береһе. Башҡорт яҙма поэзияһында ла был тема оҙайлы ғына үҫеш юлы үтә. Саф мөхәббәт тураһындағы тәүге шиғырҙарҙы беҙ Салауат Юлаев ижадында уҡ осратабыҙ. Шулай уҡ XVIII—XIX быуаттарҙа башҡорттар араһында киң таралған ҡулъяҙма поэзия өлгөләре

[112] Ғәрше көрси — алланың күктәге тәхете.

araһында ла юғары хистәр менән һуғарылған һәм йөрәк тауышы булып ишетелгән мөхәббәт шиғырҙары бар. XIX быуат аҙағында ижад иткән М. Өмөтбаевта ла мөхәббәт лирикаһына ҡараған һәйбәт шиғырҙарҙы осратып була. Ошо өлгөләргә ҡарап ҡына ла был мәңгелек һәм ҡартая белмәҫ теманың үҙ эволюцияһын төҫмөрләргә, унда теге йәки был замандың ҡабатланмаҫ һыҙаттарын тотоп алырға мөмкин.

Ә бына башҡорт әҙәбиәтенең мәғрифәтселек осоронда, рационализмдың һәм граждандлыҡ публицистикаһының алғы планға сығыуы арҡаһында булһа кәрәк, мөхәббәт поэзияһы бер яҡ ситтә тороп ҡалды. Беҙ М.Аҡмуллала ла, М. Ғафуриҙың башланғыс ижадында ла, С.Яҡшығолов поэзияһында ла мөхәббәт шиғырҙарын осратмайбыҙ. Сөнки мәғрифәтселек осоронда шәхес һәм уның рухи донъяһы түгел, ә йәмғиәт менән халыҡ алдындағы ижтимағи бурыс тойғоһо өҫтөнлөк итә. Реакция йылдарында йәмғиәт менән шәхес араһында ҡаршылыҡтарҙың көсәйеүе шәхесте үҙенең эске донъяһына «әйләнеп ҡайтырға», хатта шунда бикләнергә мәжбүр итә. Был осор поэзияла публицистика түгел, шәхестең рухи донъяһын сағылдырыусы лирика өҫтөнлөк ала.

Мөхәббәт — ул кешенең иң юғарғы тойғоһо, уға һәр ваҡыт романтика хас. Шуға ла, тәбиғи, һәр заман шағиры мөхәббәтте идеал юғарылығына күтәрә. Башҡорт поэзияһында реакция һәм яңы революцион күтәрелеш йылдарында М. Ғафури, Д. Юлтый, Я. Юмаевтар мөхәббәт лирикаһының һәйбәт өлгөләрен бирҙеләр.

Беҙ М. Ғафури, Д. Юлтый, Я. Юмаевтарҙың мөхәббәт шиғырҙарындағы һәр лирик геройҙың үҙенә генә хас темпераментын, индивидуаль һыҙаттарын күрәбеҙ. Әйтәйек, Юлтыйҙың лирик геройы янып-шашып, балаларса бер ҡатлылыҡ менән һөйһә, Юмаев геройына бер ни тиклем «тыйнаҡлыҡ» хас, ул «йәшерен һөйөүҙән», мөхәббәттең ғазаптарынан «ләззәтләнеүгә» тартым, шулай уҡ уның геройы мөхәббәттә лә бер аҙ һүлпәнлек, пассивлыҡ күрһәтеп ҡуя; Ғафуриҙың лирик геройында, ул нисек кенә мөкиббән ғашиҡ булмаһын, хискә ҡарағанда аҡыл өҫтөнлөк итеңкерәй. Шул уҡ ваҡытта өсөһөнөң дә мөхәббәт лирикаһында заманына хас уртаҡ һыҙаттарҙы ла күҙәтергә мөмкин.

Беренсенән, улар мөхәббәт шиғырҙарында ла үҙҙәрен уратып алған мөхитте кире ҡағалар, мөхәббәт уларға ғәҙәттәге тәбиғи тойғо ғына түгел, ә лирик геройҙы иҙеүсе ысынбарлыҡтан бер аҙға булһа ла аралап, уға йән тыныслығы биреүсе ләззәт ҡосағы ла.

Һинең шул халәтең һаман тора, китмәй күҙ алдымда,
Шулай сәждә ҡылып ятһам ине һаман алдында.
Онотмайым, онотмайым, һис шул төндәге шатлыҡты,
Барлығым һәм йәнем был донъянан тамам азатлыҡты, —

ти Ғафури «Беренсе мөхәббәт» (1912) шиғырында. Шағирға был минуттар ғишҡына иҫергәне өсөн генә түгел, «йәне был донъянан тамам азат» булғаны өсөн дә ҡәҙерле.

Ошоға оҡшаш кисерештәрҙе Д. Юлтыйҙың «Мәхбүбәмә хат» (1910) шиғырында ла осратабыҙ:

Бөгөн минең тормош һин генә,
Бөгөн донъя миңә нур ғына,
Бөгөн, һылыуым, һине күрер өсөн,
Йөрәгемдә ялҡын урғыла.
Бөгөн ҡара тормош ҡаралығы
Бер минутҡа китһен күҙемдән,
Бөгөн йөрәгемә ут алайым
Һинең янып торған күҙеңдән.

Ямалетдин Юмаев та мөхәббәт тойғоһоноң донъя ваҡлыҡтарынан һәр ваҡыт өҫтөн һәм юғары тороуын раҫлай:

Көн үтәр, ғишҡың синең күңелемдә мәңге саҡланыр,
Керләнер донъя, мәгәр ул чын мөхәббәт саф ҡалыр[113].

*(«Бер матурға», 1914)*

Икенсенән, ижадтары демократик характерҙа булған шағирҙар ҡатын-ҡыҙҙа рухи матурлыҡ менән тышҡы һылыулыҡтың берҙәмлеген күрергә теләнеләр. Был — ҡатын-ҡыҙҙың тулы хоҡуҡлы булыуын, уның йөҙөндә рухи һәм физик яҡтан идеаль матурлыҡты күрергә теләүҙән, шуға ынтылыуҙан килә ине. Ошо принциптан сығып, Ғафури «Матур ханым» (1909) шиғы-

[113] Җамалетдин Юмаев. Әдәби шигырьләр, 19-нчы бит.

рында төҫ-башҡа матур булып та, тәрбиәһеҙ, рухи донъяһы буш ханымды ҡаты шелтәләп, матурлыҡты мещандарса аңлаусыларға ҡырҡа ҡаршы сыҡты. Юлтый «Ул» (1910) шиғырында һөйгәненең ил ғәмен йыйған, диңгеҙ кеүек киң һәм тәрән күңеле менән һоҡланды, шул осор татар әҙәбиәтендә «сәнғәт — сәнғәт өсөн» теорияһын алға һөрөүселәргә ҡаршы сығып, халыҡсан, демократик эстетиканы алға һөрҙө.

«Дауыт Юлтыйҙың полемик характерҙағы был шиғырында, — тип яҙа Ғайса Хөсәйенов, — кешенең матурлығы тышҡы һылыулыҡ менән генә түгел, ә барынан да элек эске рухи гүзәллеге, ғали күңеле менән билдәләнә тигән эстетик идеалға барып тоташа. Мәгәр шағир Көнсығыш классик поэзияның биҙәктәренә, ҡупшы образдарына ҡаршы сыға икән тип уйларға ярамай. Дауыт Юлтый полемикаһы эстет шағирҙарға ҡаршы йүнәлдерелгән»[114].

Мәғрифәтселек иллюзияларының емерелеүе, ғәҙеллек һәм тигеҙлек, дуҫлыҡ һәм туғанлыҡ идеалына ирешеүҙең аныҡ юлдарын күрә алмай, билдәһеҙлек эсендә эҙләнеүҙәр Ғафуриҙы мөхәббәткә үҙенсә философик мәғәнә һалыуға алып килде. Ул, мөхәббәттә бөтә изге эштәрҙең башланғысын күреп, уға донъяны хәрәкәт иттереүсе илаһи көс итеп ҡараны һәм уны абсолют юғарылыҡҡа күтәреп идеаллаштырҙы, саф мөхәббәттең һәр бер кеше күңеленә урынлашыуын теләне:

Әгәр ҙә был мөхәббәт бәндәләргә ысын урынлашһа,
Хәҡиҡәткә ирешеү өсөн үҙенә юл асһа, —
Еңә алмаҫ быны һис башҡа ҡеүәт, сөнки ул көслө,
Булыр шунда кешеләр һәммәһе бер туған төҫлө.
Бөтөр шунда был көндәге хөсөд һәм дошманлыҡ,
Тыуыр донъяға дуҫлыҡтар — «бына шунда ысын инсанлыҡ».

1912 йылда яҙылған «Түгелгән йәш» шиғырында әйтелгән был фекерҙе шағир «Саф күңел», «Янған йөрәк» (1914) кеүек шиғырҙарында үҫтерҙе һәм эҙмә-эҙлекле яҡланы.

Халыҡ өсөн янып йәшәүсе шағир шәхси мәнфәғәттәр менән генә сикләнеп ҡала алмай. Мөхәббәткә «был

---

[114] Ғайса Хөсәйенов. Дауыт Юлтый: Тормошо һәм ижады — Өфө, 1963, 33—34-се биттәр.

ғәләмдең тәңреһе» итеп ҡарауға шағирҙың шәхси кисерештәре этәреш яһаһа ла, быбың асылы — абсолют идеалға өлгәшеүҙең дуҫлыҡ һәм туғанлыҡ, ғәҙеллек һәм тигеҙлек даулауҙың яңы юлдарын табырға тырышыу, ғазаплы эҙләнеүҙәр һөҙөмтәһе ине.

XX быуат башындағы башҡорт поэзияһында башҡорт халҡының үткән тормошон идеаллаштырыу хаҡында С.Яҡшығолов ижадына арналған бүлектә туҡталып кителгәйне инде. Ләкин бында өҫтәп тағы ла шуларҙы әйтергә кәрәк.

Үткәнде идеаллаштырыу реакция һәм яңы революцион күтәрелеш йылдарында айырым күренеш характерын ала барҙы. Был әҙәбиәттә романтизм методының үҫеше менән дә бәйле ине. Колониаль политиканың көсәйеүе, башҡорт ерҙәренең артабан таланыуы, милли хоҡуҡһыҙлыҡ, азат тормошҡа һыуһап та, уның киләсәгенә ышаныстың ҡаҡшай барыуы башҡорт шағирҙарының күпселеген, ысынбарлыҡҡа ризаһыҙлыҡ йөҙөнән, үткәнде идеаллаштырырға этәргән. С. Яҡшығолов менән Д. Юлтый тарихи үткәнде халыҡтың сәмен уятыу өсөн, мәғрифәтселек ҡараштарынан сығып идеаллаштырһалар, М. Ғафури, Ф. Туйкин һәм Ғ. Иҫәнбирҙин үткәнгә хөрриәттең, иркенлектең һәм ҡаһарманлыҡтың булып үткән, кире ҡайтмаҫ бер дәүере итеңкерәп ҡарайҙар. Уларҙың бөтәһенең дә был темаға яҙылған шиғырҙары йөкмәткеһе яғынан да, формаһы яғынан да бер-береһенә бик яҡын тора.

Үткәнде идеаллаштырыу ысынбарлыҡҡа пассив протест формаһында булһа ла, уға тик реакцион күренеш итеп кенә ҡарарға ярамай торғандыр, сөнки Ф. Сөләймәновтан башҡа шағирҙар үткәнде һағынып һыҡтау менән генә сикләнеп ҡалманылар, улар халыҡтың киләсәге тураһында ҡайғыртып, халыҡ бәхете өсөн янып йәшәнеләр. Ф. Сөләймәновтың үткәнде идеаллаштырыуы, йөкмәткеһе менән башҡаларҙан айырылып тормаһа ла, яҙыусы үҙе феодаль-патриархаль ҡараштарҙа торғанлыҡтан, яңы формациялағы ижтимағи үҫешкә, тарихи прогресҡа ҡаршы характерҙа булды. Ф. Сөләймәнов үҙенең проза әҫәрҙәрендә лә, поэзияһында ла киләсәккә бер ниндәй ишара ла яһамай, ҡотолғоһоҙ үлемгә йөҙ тотҡан феодаль-патриархаль башҡорт йәмғиәтенең тоғро йырсыһы булып ҡалды.

Был осор башҡорт поэзияһы татар поэзияһы менән тығыҙ бәйләнештә үҫте, рус классик әҙәбиәтенең ыңғай йоғонтоһон кисерҙе. Шул уҡ ваҡытта бөтөнләйе менән тип әйтерлек фольклор традицияларын дауам иттереп, халыҡтың бигерәк тә йыр традицияларында үҫеп сыҡҡан шағирҙар ҙа юҡ түгел ине. Был йәһәттән шағир һәм драматург Ф.Туйкиндың ижады айырылып тора.

### 3

**Фазыл Туйкин** 1888 йылда Һамар губернаһы Бөгөлмә өйәҙе Зәй-Ҡаратай ауылында урта хәлле башҡорт ғаиләһендә тыуа. Бик йәштән уҡырға башлап, ауыл мәктәбен бөткәс, Ҡазанда «Мөхәммәдиә» мәҙрәсәһендә уҡый. Мәҙрәсәне тамамлағас, 1907—1908 йылдарҙа үҙ ауылында уҡыта башлай, унан һуң Өфөлә Хәкимов мәҙрәсәһендә мөғәллим булып эшләй. Шул осорҙа Афзал Таһиров менән бергә Абдрахман ауылында елем матбуғатында «Тегермән» исемле журнал да сығарып йөрөй. Әҙәби ижадҡа ла ул тап ошо йылдарҙа тотона. 1912 йылда ул «Шура» журналында тәүге шиғырҙарын баҫтыра. Ошо уҡ йылда уның боронғо болғар дәүләтенең тарҡалыуы осорон сағылдырған «Сатыш әфәнде» тигән ҙур күләмле хикәйәһе, «Ватан ҡаһармандары», «Тормош ҡорбандары» тигән драмалары һәр береһе айырым китап булып баҫылып сыға. 1915 йылда Өфөлә «Нардуған» исемле ҙур булмаған шиғырҙар һәм йырҙар йыйынтығы сыға.

Шул осорҙағы ваҡытлы матбуғат биттәрендә Ф.Туйкиндың уҡыу-уҡытыу, ҡатын-ҡыҙ азатлығы мәсьәләләренә арналған публицистик мәҡәләләре лә күренгеләй. «Тормош мәҙәниәтендә ҡатындар» тип аталған мәҡәләһе, мәҫәлән, йөкмәткеһенең тәрәнлеге һәм публицистик үткерлеге менән айырылып тора.

«Тарих биттәрен аҡтара башлаһаҡ, — тип яҙа ул, — ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың элекке замандан бирле тормош юлында ирҙәр менән бер сафта теҙелеп килеүҙәре күренә. Улар хәҙерге көндә бик күбебеҙ тарафынан ирҙәргә генә тейешле һанала торған нәмәләрҙең барыһын да ирҙәр менән уртаҡлашып йәшәгәндәр; ирҙәр менән бер майҙанда эшләгәндәр, бергә мал көткәндәр, йорт ҡарағандар, урман киҫкәндәр, ат өҫтөндә урман-ҡыр-

ҙарҙы гиҙеп, уҡ атҡандар, етмәһә, ирҙәр менән бергә һуғыш майҙандарында күренгәндәр. Уның менән генә ҡалмайынса, милләттең рухын күтәреү юлында ла бик нығ булышҡандар: нардуғандар (әҙәбиәт кисәләре) яһап, ирҙәр менән бергә мәжлестә йырлағандар, ҡурай уйнағандар. Араларынан оҫта ҡурайсылар, хайран ҡалырлыҡ йырсылар сыҡҡан»[115].

Ләкин, шуға ҡарамаҫтан, ҡатын-ҡыҙ хоҡуҡһыҙ. Был хоҡуҡһыҙлыҡ — милләттең рухһыҙ, аңһыҙ булыуына төп сәбәптәрҙең береһе, ти яҙыусы. Артабан мәҡәләһендә ул ҡатын-ҡыҙҙарҙың тиң хоҡуғын даулап, уларға белем биреү, уларҙы йәмғиәт эштәренә актив ылыҡтырыу мәсьәләләрен күтәрә.

«Тормош ҡорбандары» драмаһында ла ул, дин һәм йола ҡанундары тырнағында ғазапланыусы башҡорт һәм татар ҡыҙҙарының аяныс тормошон сағылдырып, ҡатын-ҡыҙ азатлығын яҡлаусы булып сығыш яһай.

Ф.Туйкиндың әҙәби эшмәкәрлеге төрлө яҡлы. Ул башҡорт әҙәбиәте тарихында иң тәүге сәхнә әҫәрҙәрен тыуҙырыусы драматург һаналырға хаҡлы. Ләкин уның поэзияһы артыҡ ҙур түгел. Ул поэзияға, шул осорҙағы башҡа шағирҙарҙан айырмалы рәүештә, яҙма әҙәбиәт традицияларынан түгел, ә халыҡ йырҙары традициялары аша килгән. Был тәбиғи, сөнки Ф. Туйкин үҙ заманында башҡорт һәм татар халыҡтарының йырҙарын йыйып баҫтырыуға күп көс һалған фольклорист та булған. Уның ижады башҡорт милли ерлегенән үҫеп сыҡҡан һәм шуға ереккән ижад. Быға «Ватан ҡаһармандары» тигән драмаһы, публицистик мәҡәләләре, «Йырҙар әхтәрисенең» ҙур ғына өлөшөн тәшкил иткән башҡорт халыҡ йырҙары һәм «Нардуған» тигән йыйынтығы асыҡ миҫал булып тора.

Яҙыусының ижадына тулы баһа биреү өсөн, драма әҫәрҙәренә, прозаһына, халыҡ ижадын йыйыу эшмәкәрлегенә һәм совет осорондағы ижадына туҡталып китеү кәрәк булыр ине. Ләкин алынған теманың тәбиғәтенән сығып, «Нардуған»ға ингән йырҙар һәм шиғырҙары, йәғни поэзияһы хаҡында ғына һүҙ йөрөтөләсәк.

Ф. Туйкиндың поэзияһы тематик яҡтан артыҡ бай түгел. Ул, башҡорт поэзияһында йыр жанрын үҫтереп

---

[115] Сөйембикә, 1913, №4.

ебәреү өсөн ярайһы ҙур эш эшләһә лә, йыр уның үҙ ижад мөмкинлектәрен сикләгән.

Ф.Туйкин үҙенең оригиналь йырҙарын халыҡтың теге йәки был йыр ҡалыбына һуҡтырып, әҙер көйгә көйләп яҙыр булған, һәм һәр йырына эпиграф итеп, халыҡ йырынан бер өлгө строфа килтергән. Был эпиграф үҙ йырының йөкмәткеһенә тура килеү-килмәүе уны артыҡ ҡыҙыҡһындырмаған. Быны автор үҙ йырын ана шул әҙер йырға йырлау кәрәклеген иҫкәртеү өсөн генә эшләгән булырға тейеш.

Шағирҙың йырҙарында иң алғы планда тәбиғәт ҡосағы, Ағиҙел, Ашҡаҙар буйҙары, Урал тауҙары, шунда борон-борондан йәшәп килгән башҡорттарҙың элекке йәйләү-сахра тормошо тора, һәм былар үҙ заманынан риза булмаусы лирик геройҙың эске кисерештәре аша һынландырыла.

«Йәмле йәй» йырында, мәҫәлән, шағир:

Идел буйларында, киң болында
Йылҡыларым утлай чабында,
Ожмахларың торсын бер яғыңда,
Шул болында йөрөгән чағымда, —

тип гүзәл тәбиғәт ҡосағын ожмахтарҙан артыҡ күреп маҡтай. Шунда йырлай-йырлай бесән сабыуҙарҙы үҙе бер бәхет күрә, ләкин был әле үткән тормоштоң бер сатҡыһы ғына, был шау-шыу шағирҙың уйҙарын алыҫ үткәнгә алып китә:

Мона шунда хозур, ай, күңелле,
Юғаласың чыннан үҙеңдән,
Иҫкә төшә шундый йәмле жәйләр,
Татлы йәшләр аға күземдән[116], —

ти ул. Был мотив артабан «Ағиҙел», «Ашҡаҙар», «Урал тауы»[117], «Ҡурай» кеүек йырҙарҙа тағы көсәйә, конкретлаша төшә.

---

[116] Фазыл Туйкин. Нардуган. — Уфа, 1915, 3—4-нче битләр.

[117] «Урал тауы» шиғыры Фазылдың ағаһы Кәбир Туйкиндыҡы булырға тейеш, сөнки шиғырҙың аҫтында «К.Т.» имзаһы тора. Шулай уҡ китапҡа Ф.Туйкин Дәрдмәндең «Сәлим бабай» тигән шиғырын да индергән. «Урал тауы» шиғыры башҡорт халҡының үткән тормошон сағылдыра һәм антиколониаль йүнәлештә.

«Ағиҙел» йыры «Ағым һыу» көйөнә ҡулайлаштырылып яҙылған. Йырҙың тәүге строфаһында һүҙ «Ағым һыу — Ағиҙел һыуы» тигән йырҙың үткән замандарҙы хәтерләтеүе хаҡында бара.

Бер заманда гөрләп торған анда
Чиксез ҡалын, ҡуйы урманлар,
Сайрашып төрле ҡошлары,
Төрле-төрле емеш урманларда,
Төрле чәчкә тулып торғанлар,
Йәмләнеп болын буйлары.
Аҡ тирмәләр ҡороп жәйләгәнләр
Аның матур йәмле болынында,
Гөрләшеп, башҡорт жыйыны.
Көтү-көтү ҡуйлар, күп йылҡылар
Утлағаннар аның буйында,
Уйнашып эчеп сыуыны[118].

Хәҙер, ти шағир, Ағиҙел буйҙары тураһында йырмоң ғына тороп ҡалған: ҡуйы урмандар ҙа, йылҡы өйөрҙәре лә, ҡайнап торған күңелле тормош та юҡҡа сыҡҡан.

«Ашҡаҙар» йырында ла Ашҡаҙар буйында сатырҙар ҡороп, ҡурай тауыштарына ойоп йәшәгән олатайҙарының иркен тормошон, дошмандарға ҡаршы берҙәм яу сапҡан батырҙарҙы идеаллаштыра һәм:

Ай Ашҡаҙар! Нигә шул бабайның
Данлы чатырларын тараттың[119], —

тип, Ашҡаҙарға ҙур үпкә белдерә. Был, әлбиттә, ана шул хыялдағы үткән тормоштоң юҡҡа сығыуына әсенеп, ысынбарлыҡҡа протест тауышы ине.

«Башҡорт ҡатыны» йырында шағир халыҡ йырҙарын бик иркен файҙаланып, улы яу ҡырында йөрөгән әсә образын тыуҙыра. Был йырҙың империалистик һуғыш осоронда килеп тыуыуы бик ихтимал. Бында һуғышҡа теләктәшлек тойғоһо юҡ, шағирҙы икенсе нәмә — үҙ халҡының һуғышсан традициялары ҡыҙыҡтыра. Ә әсә образы ауыҙ-тел ижадындағыса кәүҙәләнеш тапҡан.

---

[118] Шунда уҡ, 6—7-нче битләр.
[119] Фазыл Туйкин. Нардуган, 11-нче бит.

Ф.Туйкиндың башҡорт халыҡ ижадын йыйыу һәүәҫе М.Өмөтбаевтың йоғонтоһонан килә булһа кәрәк. Быны Өмөтбаевтың «Ядкар»ындағы халыҡ йырҙарының һәм мәҡәлдәренең «Нардуған»да урын алыуынан да асыҡ күреп була. «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосының йыр формаһында йөрөгән бер өлөшөн беҙ Өмөтбаев китабында ла, Туйкиндың «Нардуған»ында ла осратабыҙ. Шулай уҡ Туйкин «Ядкар»ҙағы ҡайһы бер мәҡәлдәрҙе бер үҙгәрешһеҙ үҙ китабына индергән.

Ф.Туйкиндың ижады, үҙ заманы талаптарынан сығып ҡарағанда, прогрессив йүнәлештәге ижад. Унның үткәнде идеаллаштырыуы, беренсенән, халыҡ ижады стихияһының көслө булыуынан килһә, икенсенән, ул да, С.Яҡшығолов кеүек үк, быының менән генә сикләнеп ҡалмай, публицистикаһында ла, «Тормош ҡорбандары» әҫәрендә лә үҙ заманы ысынбарлығын ҡаты тәнҡит итеп, ҡатын-ҡыҙ азатлығы мәсьәләләрен күтәрә, халҡын ҡараңғылыҡты йырып сығырға, яҡтылыҡҡа өндәй.

«Юлым», «Ысын кеше» тигән шиғырҙарынан күренеүенсә, уның лирик геройы ла үткәнде һағыныу менән генә сикләнмәй, реакцияның ҡаты ҡыҫымына ҡаршы тороусы, баш эймәҫ шәхес икәнлеге лә сағыла:

> Был донъяның әсе зәһәрҙәрен услап берәү йотһа,
> Яуыз донъя ҡаты тырнаҡтары менән уны тотһа,
> Йөрәге әрнеп, уттар ҡабып, үҙ урынынан ҡупһа,
> Бына ошо булыр ысын кеше, бәғерем, кәрәк булһа[120], —

ти ул «Ысын кеше» шиғырында.

Дөйөм алғанда, башҡорт поэзияһында реакция һәм яңы революцион күтәрелеш йылдарында үткәнде идеаллаштырыу, тәбиғәт ҡосағына ташланыу, ҡатын-ҡыҙ, балалар күңеленә, саф мөхәббәткә, халыҡ ижадына мөрәжәғәт итеүҙәр, — бөтәһе лә ысынбарлыҡҡа ҡаршы сығыу, уны кире ҡағыу һәм ниндәйҙер икенсе тормош тураһында хыялланыу күренеше ине. Романтизмдың тәүҙәрәк пассив тармағы өҫтөнлөк итһә, яңы революцион күтәрелеш йылдарында тәнҡитле реализм менән

---

[120] Ҡарағыҙ: Ғ.Амантай. Башҡорт әҙәбиәте: Дәреслек һем хрестоматия. II киҫәк. — Өфө, 1934, 52-се бит.

берлектә уның актив тармағы ла нығына, көсәйә барғанлығы күренә.

Ижады нигеҙҙә ошо йылдарға тап килгән шағир Ямалетдин Юмаевтың поэзияһы быға асыҡ миҫал булып тора.

## 4

**Ямалетдин Юмаев** Курган өлкәһе, Әлмән ауылында тыуып үҫкән. Тыуған йылы әлегә асыҡ ҡына билдәле түгел. Уның менән бергә уҡыған һәм бик яҡындан таныш булған татар журналисы Мәхмүт Бөдәйленең раҫлауынса, ул 1892 йылда тыуған булырға тейеш.

Шағир бик йәшләй етем ҡалып, олатаһы Хисаметдин ҡарамағында тәрбиәләнә, Әлмәндә Насибулла мулланың мәҙрәсәһен тамамлағандан һуң, Троицкиға килеп Яушевтарҙың «Мөхәммәдиә» мәҙрәсәһендә уҡый. Бынан һуң 1912—1913 йылдарҙа шул уҡ ҡалала ике йыллыҡ рус-татар училищеһын тамамлай. Аҙ һүҙле, уҡыуға һәләтле Ямалетдин бында уҡыған осорҙа рус телен бик һәйбәт үҙләштерә. Был уға рус әҙәбиәте менән танышырға мөмкинлек бирә.

«Был осорҙа ул ғәрәп шағирҙары Мәггәри, Имрелкәйс, рус шағирҙары А.С.Пушкин, М.Ю.Лермонтов әҫәрҙәрен йотлоғоп уҡый торғайны», — тип һөйләй был хаҡта замандашы Мәхмүт Бөдәйле.

Училищены тамамлағас, Я.Юмаев Петропавловск тирәһендәге ҡаҙаҡ ауылдарында балалар уҡыта. Унан һуң 1916 йылдарҙа Өфөгә күсеп килә һәм «Тормыш» газетаһында корректор булып эшләй.

Я.Юмаевтың тәүге шиғырҙары матбуғат биттәрендә 1910 йылдарҙа күренә башлай. Ул үҙенең әҫәрҙәрен «Шура», «Аң», «Аҡмулла», «Сөйөмбикә» журналдарында һәм «Тормыш» газетаһында баҫтырған. «Ямалетдин Юмаев шигырьләре» тигән тәүге йыйынтығы 1913 йылда, «Әдәби шигырьләр» исемле икенсе китабы 1915 йылда баҫылып сыҡҡан.

Артыҡ ҙур булмауына ҡарамаҫтан, уның ижады шаҡтай ҡатмарлы һәм ҡаршылыҡлы. Заманаһының тонсоҡторғос атмосфераһы Я.Юмаев поэзияһының романтик характерҙағы лирик геройының эске кисерештәрендә тәрән һынылыш алған. Был лирик герой үҙ

заманы ысынбарлығын йәне-тәне менән күрә алмай, уны кире ҡаға. Бигерәк тә ижадының тәүге осоронда Юмаев үҙен уратып алған донъянан бөтөнләйе менән ситләшә. Уның өсөн халыҡ та, конкрет ил төшөнсәһе лә юҡ, ул күпселек әҫәрҙәрендә шөкәтһеҙ йыһан менән теге донъя араһында тирбәлә.

Тәүге йыйынтығын асып ебәргән «Киске юлдаш» шиғырында беҙ лирик геройҙы шомло ҡара төндә, ырҙын табағында осратабыҙ. Уның ниндәйҙер «серле юлдашы» ла бар. Ләкин былар бөтәһе лә шартлы символик образдар булып сыға:

Әйтсәм әйтим: инде бонлар чын түгел,
Барғаным ындыр түгел һәм ҡыр түгел,
Ул шатырдаған, күкрәгән күкләр түгел,
Ул күкрәгән жен түгел, утлар түгел,
Ул — әнә йәмсез, киәфәтсез жиһан,
«Кичке юлдаш» — ул шиғырьләрем җыйған[121], —

ти шағир китабының дөйөм йөкмәткеһенә ишара яһап.

Я. Юмаевтың лирик геройы гисъянсы шағир Сәғит Рәмиевтың «донъяға ҡаш йыйырыусы» геройына шаҡтай яҡын тора. С. Рәмиев «Алданған» (1908) шиғырында:

Юҡтыр, әлбиттә, ҡояш та,
Ул дадыр хәйлә генә,
Юҡтыр ай да, юҡ ғаләм дә,
Барысы да шәүлә генә[122], —

тип, субъектив идеалистарса, реаль ысынбарлыҡты кире ҡағып, унан өҫтөн торорға ынтылһа, Я.Юмаев үҙ шиғырында йыһандың шөкәтһеҙ образын тыуҙыра.

Күңел төшөнкөлөгө, донъяның золомонан ғына түгел, рәхәтенән дә ваз кисеү мотивтары шағирҙың тәүге йыйынтығына ингән шиғырҙарында айырата ныҡ сағыла. Был — үҙ маҡсаттарын халыҡ массаларының оло маҡсатына ҡушып өлгөрмәгән ваҡ буржуаз интеллигенцияның рухи трагедияһы, әлбиттә, иң элек буржуаз-

---

[121] Жамалетдин Юмаев шигырьләре. — Казан, 1913, 3-нче бит.

[122] С.Рәмиев. Сайланма әсәрләр. Казан, 1962, 34-нче бит.

демократик революцияның еңелеүе, революцияға бәйле булған идеалдарҙың селпәрәмә килеүенең һөҙөмтәһе.

«Күңел» тигән шиғырында был трагедияның асылын шағир үҙе лә ярайһы оҫта итеп асып һала:

Ничә ян дисәң дә янмаҫ, инде сүнгән бу күңел,
Мәңге йоҡлар, һич уянмаҫ, инде үлгән бу күңел,
Уйғата күрмә, ятып бер истирахәт[123] әйләсен,
Әл дә күп михнәт, мәшәҡәтләргә түзгән бу күңел.

Ә ни өсөн шул тиклем хәлдән тайған һәм донъянан дүнгән һуң әле был күңел? Быға шағир үҙе бик асыҡ яуап бирә:

Ҡурҡыныч бәхер хәят[124] дулҡынланып ташҡан ваҡыт,
Талпынып, ҡуллар җәйеп, өстендә йөзгән бу күңел,
«Эзләсәң бәхет вә сәғәдәтне табарсың» дип өмөт —
Эзләнеп, төрле бәлә рәхәтене күргән бу күңел.
«Бу мона иң тәмле» дип, маҡтап хәят шәрбәтләрен
Ҡул соноп эчкән чағында, зәһәрен эчкән бу күңел.

Хәҙер инде был күңелһеҙгә «күлдәк кейҙереп тороуҙың да» кәрәге юҡ: ул, донъяның зәһәрҙәрен услап эскән кеүек, «ләззәт вә тәмдәренән» дә ваз кискән, һәм:

Бу жиһанға хушлашып киткән, кире килмәс хәҙер,
Тәңренә ҡул ҡаушырып, тезләрен чүккән бу күңел.

Идеалдарҙың юҡҡа сығыуы, билдәһеҙлек осорҙарында була торған был рухи төшөнкөлөк еңел генә үтеп китмәй, әлбиттә. Йәмғиәт менән шәхес араһында ҡаршылыҡ ҙурайған һайын тәрәнәйә бара. Ә инде күңел төшөнкөлөгө һәм индивидуализм реакцион романтизмдың үҫешенә ерлек булып торһа, реакцион романтизм иһә йөкмәткеһе менән декадентлыҡҡа бик яҡын. Ысынбарлыҡтан тулыһынса ситләшеп, яуызлыҡҡа ҡаршы көрәштән баш тартып, Я.Юмаев та ижадының тәүге «Күҙемә» шиғырында:

Һәр эшең тапшыр ходайға, түз фәләкнең[125] золымына,
Эстәсәң, ул, кер ҡәбергә — шул ике юлдыр сиңа, —

---

[123] Истирахәт — ял итеү, рәхәтләнеү.

[124] Бәхер хәят — тормош диңгеҙе. Шағир бында революцияны күҙ уңында тота.

[125] Фәләк — яҙмыш.

тигән реакцион принципты алға һөрҙө. Һәм, быға тоғро ҡалып, байтаҡ шиғырҙар яҙҙы.

Тарихи материалистик ҡараштарҙан алыҫ тороп, быуаттар буйы өҫтөнлөк иткән дини-идеалистик идеологияның көслө йоғонтоһонда булған шағирҙарҙың ҡайһы берҙәре, ер йөҙөндә яуызлыҡ хөкөм һөрөп, киләсәк асылмаҫ ҡара томан булып күренгән реакция йылдарында, донъялағы бөтә эштәр алланың ҡөҙрәте буйынса эшләнә тигән уйҙырма ҡараштан сығып, алла алдында теҙ сүктеләр, уға баш орҙолар.

Хатта ижады менән халыҡҡа иң яҡын торған М.Ғафури ҙа был осорҙа «мәғәнәүи көс» алдына барып теҙләнде. Уның был йомшаҡ яҡтары «Итағәт» шиғырында айырым-асыҡ күренде.

Ғафури был шиғырында залим түрәләргә алланың барлығын иҫкәртеп янаһа, Я.Юмаев, суфый шағирҙар кеүек, аллаға яҡынлашырға һәм үҙе тәьҫир итергә, алланың күңелен «йомшартырға» теләне. «Сәждә» шиғырында, мәҫәлән, шағир үҙенең доға ҡылырға әҙерлек ваҡыттарын поэтик оҫталыҡ менән һүрәтләй һәм үҙе уйлап сығарған «донъяла һис ҡайҙа юҡ» шарттарҙа «алҡышланып, күккә ҡарап» доға ҡыла:

Эй ходайым, файдасыз хилҡат[126] итмәдең жир, күк йөзен,
Пакларым затыңны, хаҡ, ҡотҡар ғазабыңдан үзең!
Әй ходайым, күр бәне, ҡуйдым башым ергә бына,
Күзләремдән йәш түгеп, сәждә итәм дәргяһеңә[127].

Дини тойғоноң көслө булыуы Я.Юмаевтың «Рәсүл вә ҡөрьән» (1913), «Сәхәр», «Рамазан» (1912), «Тәхуил кибла» (1914), «Ғәрәптәр» (1916) шиғырҙарында ярылып ята. Бында ул золом алдында көсһөҙлөгөнән аллаға һыйыныу менән генә сикләнеп ҡалмай, ислам диненә, Мөхәммәткә, Ҡөрьәнгә мәдех йырлай:

Һәр минут күңелемдә — алла һәм уның зур ҡөҙрәте,
Башҡаларға миндә юҡ һич ихтыяж һәм инфтиҡар[128],

---

[126] Хилҡат итеү — яратылыш, барлыҡҡа килтереү.
[127] Дәргяһ — ишек төбө, тупһа.
[128] Ифтиҡар — үҙенең мохтажлығын тойоу.

Миндә тик бер teләk, тәңрем шуны итсен ҡабул:
Донъяға тиз дин ислам әйләсен дим интишар[129].

*(«Тәхуил ҡибла»)*[130]

Я.Юмаев ижадының дини-мистик яҡтары — был осорҙағы рус әҙәбиәтендә үҙенең төрлө йүнәлештәрен барлыҡҡа килтергән һәм татар әҙәбиәтенә лә үтеп инә барған декадентлыҡтың йоғонтоһона бирелеп, үлемде, ҡәбер тынлығын һағынған шиғырҙарында ла күренде. «Әсәйем ҡәбере янында» шиғырында:

— Ят, әни, ҡәбереңдә ят; ҡаршыңда җәннәт яҡтысы!
Шул синең урының — урынларның да һәм тап яхшысы!
Тик яныңда иңгерәп торған етем уғлыңны күр!
Күр дә әйт: «Мин донъядан киткәнмен, мең шөкер»[131], —

тип әсәһенең ҡәберҙә ятыуына көнләшеп ҡараһа, «Хәят» шиғырында:

Җафа чикдем хәятдан хәд-хисапсыз,
Үтә көнләр, исеп җилдәй исәпсез,
Күңел ҡайта мәшәҡәтле хәятдан,
Уҡыйым ҡөрьән тотып аятдан.

Ҡулым селтим: хәятда файда юҡ дим,
Дим шунда: «Үлем кил монда, зинһар!
Миңә бер шәфҡәтеңне ҡылғып изһар[132]
Мине ҡотҡар бу дулҡынлы хәятдан,
Исердем инде, ҡу бу ҡабаҡдан!»[133] —

тип, был донъяға бөтөнләй иҫе китмәгән кеше ҡиәфәтендә, сабырһыҙланып үлем көттө, үлемде йәшәүҙән юғары ҡуйҙы.

Я.Юмаев ижадының бигерәк тә башланғыс осоронда өҫтөнлөк иткән һәм төрлө формаларҙа сағылыш тапҡан был күңел төшөнкөлөгө объектив йөкмәткеһе менән реакцион характерҙа булды. Ләкин был күренеш тенденциоз характерҙа булмай, шағирҙың шәхесте иҙеүсе ысынбарлыҡҡа пассив протесы булып торҙо.

[129] Интишар — таралыу, сәселеү, йәйелеү.
[130] Җамалетдин Юмаев. Әдәби шигырьләр, 9-нчы бит.
[131] Җамалетдин Юмаев шигырьләре, 7-нче бит.
[132] Шәфҡәтеңне ҡылғып изһар — шәфҡәтеңде күрһәт.
[133] Жамалетдин Юмаев шигырьләре, 22-нче бит.

Беҙҙең өсөн, әлбиттә, Я.Юмаев ижадының был ҡара яҡтары түгел, бәлки дөйөм демократик идеялар менән һуғарылған һау яҡтары ҡыҙыҡлы. Ижадындағы был прогрессив тенденциялар уның тәүге йыйынтығында уҡ күҙгә ташлана.

Уның романтик геройы ла бер яҡлы ғына түгел, уны илап-һыҡтап, золомға буйһоноп йәшәү һис ҡәнәғәтләндермәй, ул үҙендә ер йөҙөн ҡаплап алған яуызлыҡты һеперепташларҙай потенциаль көс йәшеренеп ятҡанын да белдерә:

Хисләре ҡузғалмый тиз, ул йәш күңел бит янмыйча,
Ут да яҡтырта вә ялҡынлар бирә бит ян дисә,
Төрлө дәртдән буш күңелләр рух бирә алмый башҡаға,
Ис таратмый бит ағачлар төрле яфрак ярмыйча.
Буш түгел дәртдән күңел, һәм ул бөтенләй сүнмәгән,
Йөреймен йәшереп кенә аларны дәрткә санамыйча.
............................................................................
Әй ғәзиз дәртем уты, ян, сүнмә, нурландыр мине!
Сүнмә, ғүмерем аҡтығында ғазраил жан алмыйча[134].

Күңел төшөнкөлөгө менән һуғарылған шиғырҙарына ҡапма-ҡаршы булған был «Дәрт» шиғырын да беҙ шағирҙың тәүге йыйынтығында осратабыҙ. Уның шулай бер түбән төшөп, бер юғары күтәрелеүе, беренсенән, замандың ҡаршылыҡлы булыуы менән аңлатылһа, икенсенән, «Нәсихәт» шиғырынан күренеп тороуынса, был шағирҙың ижад һәм йәшәү принцибына ла барып тоташа:

Бу җиһан солтанысың, һәр эштә ҡурҡаҡ булмасаң,
Кимсетеп үзеңне инсанларға ҡурчаҡ булмасаң,
Нәҡ сәғәдәтнең чыны шул: күзләреңнән йәш түгеп,
Башҡалар көлгән ваҡыт син көлмәсәң, шад булмасаң[135].

Сөнки донъяла яуызлыҡ хөкөм һөрә, шулай булғас, шағирға шатланыр урын юҡ, ул «әсе хәсрәт көйөн» көйләргә тейеш. Был ижад принцибы иһә үҙенең башланғысын Туҡайҙан ала. 1909 йылда «Сәрләүхәсез» («Исемһеҙ») шиғырында Туҡай:

---

[134] Шунда уҡ, 8-нче бит.
[135] Жамалетдин Юмаев шигырьләре, 5-6-сы биттәр.

Ҡузғатмаҡчы булсаң халыҡ күңелләрен,
Тирбәтмәкче булсаң иң нечкә ҡылларын,
Көйләү тиеш, әлбәт, ачы хәсрәт көйен,
Кирәк түгел мәғнәсе юҡ көлкө, уен[136], —

тип яҙғайны. Был принципты артабан уның шәкерттәре эләктереп ала һәм бөтә ижад принцибына әйләндереп ебәрәләр. Д.Юлтыйҙың «Әсе хәсрәт көйөн көйләп, һыҙыла күңелем көндөҙ вә төн...»[137] тигән юлдары быға асыҡ миҫал була ала. Я.Юмаев та «Дуҫыма» (1913) шиғырында:

Сүкмә, дустым, ачы хәсрәт җырларын язган өчен,
Айырылып әүәлге юлдан, башҡа юл алған өчен,
Йырламас идемме диңгез өстләрен, дулҡынларын,
Тынлығын, гөрләүләрен, йә булмаса упҡынларын?
Булмый шул, тик ыңғыраша күкрәк эчендә моңларым,
Ихтыярсыз моң белән керешә язарга ҡулларым.
Йырламас идемме маҡтап бер гүзәлнең ҡашларын,
Аҡмаса күздән ачы, салҡын вә ҡанлы йәшләрем...[138] —

ти, әсе хәсрәт көйөн көйләүҙе үҙенең бурысы итеп һанай. Бында «башҡа юл алыуҙы» ла үҙ ижадына тәнҡит күҙлегенән ҡарап, ысынбарлыҡҡа яҡыныраҡ килеүенә бер ишара итеп аңларға кәрәк.

Ысынлап та, Юмаевтың 1913—1915 йылдарҙа яҙылған шиғырҙары тупланған икенсе йыйынтығы ыңғай яҡҡа шаҡтай айырылып тора. Бындағы «әсе хәсрәт көйө» менән һуғарылған шиғырҙары ла шағирҙың үҙ ҡайғыһы менән аһ-зарына барып ҡушыла. Элекке илаҡ, булдыҡһыҙ, ебеп төшкән романтик герой хәҙер яуызлыҡҡа ҡаршы күкрәк киреп, эске бер елкенеү менән киләсәккә ынтыла.

«Йәш йөрәк», «Әйтсе, зинһар» (1913) шиғырҙарында әле күңел төшөнкөлөгө дауам итә, ләкин шағир уларҙа тормошҡа анализ яһарға, яуызлыҡтың асылын аңларға тырыша, ҡайғы-хәсрәттәре лә тәбиғи төҫ ала. Илаһа ла, ниңә илағанын белеп илай:

Үткәнеңне күпме сағынырсың,
Ниләр күрдең, бармы исеңдә?

---

[136] Габдулла Тукай. Әсәрләр. 2-нче том, 38-нче бит.
[137] Дауыт Юлтый. Һайланма әҫәрҙәр. 2-се том, 28-се бит.
[138] Җамалетдин Юмаев. Әдәби шигырьләр. 3-нче бит.

Мин беләмен: үстең үксез булып,
Хәтсез михнәт, ҡайғы эчендә.
Туған көндән бер яҡты көнөң юҡ,
Көнләреңне ҡаплый болытлар...
Әйләнәндә йөри бәхетсезлек,
Мохтажлыҡтан ялҡынлы утлар[139].

Был юлдар — күҙҙәре шешенгәнсе үкһеп илаған шағирҙың, тынысланғас, тәрән итеп бер көрһөнөүе ул. Һәм ул илап-һыҡтап, ҡарғанып, йәки хоҙайҙан теләп кенә донъяны төҙәтергә мөмкин түгел икәнлеген төшөнә башлай.

Ниһайәт, «Мин» шиғырында беҙ рухи яҡтан яңырыу кисереүсе актив лирик герой менән осрашабыҙ. Ул инде хәҙер яуыз мөхиттең зәғиф тотҡоно түгел, ул үҙен был мөхиттән рухи азат һәм өҫтөн хис итә:

Китте миндән ҡайғылар, син әй, ҡара көн, син дә кит!
Миндә көч, ғәйрәт — диңгез, һәм миндә хөрриәт — мөхит.
Мин тыуғанмын дөнъяға тормыш өчен тик сайланып,
Күкрәгемдә бар минем ялҡынланып бер янған ут.
Ул янар суынмас ғөмергә, йәш йөрәкне ҡыздырыр,
Аҡ ҡәғәзгә күп кенә ялҡынлы жырлар сыздырыр.
Мин көтәм: бер көн килер һәм җырланыр ул жырларым,
Алда бер ныҡ саз булырмын, һич өзелмәс ҡылларым.
Мин сөйәм чынлыҡны һәм ялғанға ҡаршы суғышуны,
Булса рухымда ни-нәрсә, җырымда һәм җырлыйм шуны.
Шул ҡәдәр зур хөрлегем берлән мин һич бер теләк.
Булмый ҡалмас, һәм ауыр чаҡда булыр ул зур терәк.
Ян, йөрәк, сызлан, йөрәк, «мин»дә, әйдә алға кит,
Миндә көч, ғәйрәт-диңгез һәм миндә хөрриәт-мөхит[140].

Шағирҙың «минендәге», йәғни лирик геройындағы рухи күтәренкелек шәхси бер күренеш булып ҡына ҡалмай, яңы революцион күтәрелеш йылдарында халыҡ массаларының рухи уяныуын, үҙ-үҙен социаль иҙеүҙән азат итеүгә әҙер булыуын да сағылдыра ине. Сөнки халыҡ иң элек ҡоллоҡтан үҙен рухи азат итә, шунан һуң ғына ҡоллоҡтоң үҙенә баш күтәрә ала.

Лирик геройҙың ижтимағи активлығы артабан «Вәғәҙә», «Әгәр мин ҡош булһам» (1914) шиғырҙарында тағы ла көсәйә һәм аяуһыҙ булырға һүҙ бирһә, «Әгәр мин ҡош булһам» шиғырында романтик герой:

---

[139] Җамалетдин Юмаев. Әдәби шигырьләр, 6-нчы бит.
[140] Җамалетдин Юмаев. Әдәби шигырьләр, 8-нче бит.

Мин, әгәр бер ҡош булып, бер аз ғүмер сөрсәм иде,
Ҡурҡмыйча һәм өркмичә күктә очып йәрсәм иде, —
Ул ҡара, йәмсез болытларны барсын читкә сөреп,
Туздырып ташлар идем, ҡалдырмыйча сепреп түгеп,
Тәккә бездән ул болыт яҡты ҡояшның шәүләсен
Тормасын йәшереп ходайның безгә биргән дәүләтен.
Безне дәһшәтле йәшенләр вә күкрәүләр белән
Ҡурҡытып, дер селкетеп тик тормасынлар мәңгегә!
Безгә ул җилле суык, ҡарлы болытлар яудырып,
Тормасынлар ач-ялангачларны хәлсезләндереп[141], —

тип ер йөҙөн ҡара болот кеүек ҡаплап, ҡояш нурын — азатлыҡты быуып тороусы яуызлыҡты һепереп түгәргә ынтыла. «Тоғролоҡ, хаҡлыҡ өсөн тауҙар вә диңгеҙҙәр үтеп, талпынып осоу» теләге менән яна.

Дөйөм алғанда, Я.Юмаевтың ижады үҙ заманы ысынбарлығын, синфи һәм милли иҙеүгә ҡоролған йәмғиәтте кире ҡағыу тенденцияһын тотҡан ижад булып тора. Беҙ быны уның лирик геройы образында ла бик асыҡ күрҙек: ул, үрмәксе ауындай сырмап алған ҡоллоҡ сынйырҙарын өҙөп, үҙен рухи яҡтан азат итеү эволюцияһын кисерҙе; ошоға ярашлы рәүештә, үҙендәге пассивлыҡты һелкеп ташлап, актив көрәш позицияһына баҫты.

Үҙен уратып алған мөхиткә, йәмғиәт ҡоролошона оппозиция шағирҙың ваҡыт-ваҡыт, тәбиғәттәге эске гармонияны йәмғиәттә күрергә теләп, тәбиғәт ҡосағына ташланыуында ла («Тәбиғәт алдында», 1912), донъя ваҡлығынан, намыҫһыҙлыҡтан һәр ваҡыт өҫтөн тороусы мөхәббәткә табыныуында ла («Ғашиҡ», 1912; «Бер матурға», 1914; «Белмәйһең, аһ белһәң», 1914; «Яндырылған хат», 1916), эскерһеҙ сабый күңеленә мөрәжәғәт итеүендә лә («Сабый зары», 1914; «Ҡитға», 1914) бик асыҡ күренеп тора.

Ҡара реакция һәм унан күсеү йылдарында башҡорт поэзияһында граждանлыҡ пафосы бер ни тиклем ҡайтышланды. Ләкин мәғрифәтселек осоронда күтәрелгән дөйөм демократик идеялар милли һәм социаль азатлыҡ өсөн көрәш мәсьәләләре артабан да үҙенең үҫешенән туҡтап ҡалманы. Я.Юмаев та романтик шағир булыуына ҡарамаҫтан, үҙ заманының көнүҙәк проблемалары-

[141] Җамалетдин Юмаев. Әдәби шигырьләр, 15-16-нчы битләр.

нан бөтөнләй ситтә торманы. «Фәҡирлек вә байлыҡ», «Бүре менән һарыҡ» кеүек шиғырҙарында алтын-көмөш хакимлығына ҡаршы сығып, хеҙмәтсән халыҡтарға теләктәшлек белдерҙе. «Фәҡирлек вә байлыҡ» шиғырында залим байҙарға социаль нәфрәт менән ҡараны. «Дин вә мәғишәтселәрҙе», ҡомһоҙ муллаларҙы һәм ишандарҙы ҡаты тәнҡит итте. «Ҡыҙ бала», «Ҡаҙаҡ ҡыҙына», «Йәш ҡыҙға» шиғырҙарында һәм «Яҙғы төндә» тигән хикәйәһендә хоҡуҡһыҙ ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡайнар яҡлаусыһы булып сығыш яһаны, уларҙы уянырға һәм үҙ хоҡуҡтарын яҡлау өсөн көрәшергә саҡырҙы.

Я.Юмаев заманы өсөн интеллектуаль яҡтан шаҡтай юғары кимәлдә торған шағир. Ул Көнсығыш халыҡтары һәм рус поэзияһын яҡшы ғына белгән. А.С.Пушкиндың «Дуҫтарға», «Сәскә» һәм бер нисә дүрт юллыҡ шиғырын, М.Ю.Лермонтовтың «Альбомға», «Күңелһеҙ, ҡул бирергә бер кеше юҡ» кеүек шиғырҙарын, И.А.Крыловтың «Квартет» тигән мәҫәлен тәржемә иткән. Ғәрәпсәнән һәм төрөксәнән дә уңышлы тәржемәләре бар.

Сәйфи Ҡудаш Я.Юмаевты: «Туҡай поэтик мәктәбенең бер шәкерте»[142], — тип иҫкә ала. Туҡайға рухи яҡынлыҡ уның шиғырҙарының йөкмәткеһендә лә, поэтик формаһында ла күренә. «Тәғзиә» (1913), «Шағир үлде» (1914) шиғырҙарында, «Йәшерен мөхәббәт» тигән хикәйәһендә Я.Юмаев үҙенең остазы Туҡайҙың поэтик образын тыуҙырыуға ла ынтылыш яһаған.

«Тәғзиә» шиғырында Ғ.Туҡайҙың үлемен халыҡ өсөн ҙур юғалтыу — «рух һүнеп, хис бикләнеп, ҡалған-юғалған асҡысы» итеп ҡабул итә һәм шағирға халыҡ бәхете өсөн көрәшсе, милләттең юлбашсыһы тигән ҙур баһа бирә. 1914 йылдың 2 апрелендә, Ғ.Туҡайҙың үлеүенә бер йыл тулған көндө, яҙылған «Шағир үлде...» шиғырында Юмаев шағирҙы һәләкәткә дусар иткән йәмғиәткә ләғнәт уҡый, уның дөйөм милләт шағиры булмай, ябай халыҡ шағиры икәнлеген иҫбат итә:

Үлде шағир, зар җылап, күз йәшләре дә кипмичә;
Сез залимләр дөнъясында нишләсен ул китмичә?

[142] Сәйфи Ҡудаш. Йәшлек эҙҙәре буйлап. — Өфө, 1964, 34-се бит.

Азмы бәһтән, азмы ғәйбәт яуды шағир өстенә,
Ҡаршы торды ул аның һәр берсенә бер көч илә.
Сез түгелсезме монафиҡлар! «Ҡамап һәр дүрт яғын,
Яҡты көн күрсәтмәгән, ҡаплап кояшын һәм айын»
Бәдбәхетләр сез түгелме, «үрмәләүче тәхетенә,
Көнләшеп тик бер генә яҡтан ачылған бәхетенә».
Аһ ни булған ул, шағир бу донъяғызға килмәсә,
Сез ходайсызларға юҡка алданып ҡул бирмәсә?!
Алданып ялған сөю, маҡтау белән хушланмаса,
Рух бирәм дин халҡына, үз кәлбенә ут салмаса?!
Инде үлде, ҡызғаныу, йығлау нигә, маҡтау нигә?
Ул ҡотолды, сезгә байрам. Нәрсәгә ул аһ вә зар?
Үлде, үлгәч ҡызғануда, әйтегез, ни мәғнә бар?![143]

Күренеп тора, был шиғыр М.Ю.Лермонтовтың Пушкиндың үлтерелеүе айҡанлы яҙылған «Смерть поэта» тигән атаҡлы шиғырының көслө йоғонтоһонда ижад ителгән. Хатта айырым строфалар һәм юлдар бөтөнләйе менән Лермонтов шиғырынан тәржемә ителгән. Шулай уҡ Юмаев бында Туҡайҙың «Үкенес», «Дошмандар» тигән шиғырҙарындағы айырым юлдарҙы йөйө лә беленмәҫлек итеп индереп ебәргән. Был факт үҙе генә лә йәмғиәт тарафынан ҡыйырһытылып, һәләкәтле үлемгә дусар ителгән Пушкин, Лермонтов, Туҡай кеүек бөйөк шағирҙарҙың уртаҡ яҙмышына бер ишара булып тора, һәм Я.Юмаевтың үҙе рухы менән был шағирҙарға ниндәйҙер дәрәжәлә яҡын торғанлығын иҫбатлай.

Шағирҙың империалистик һуғыш һәм февраль революцияһы осоронда яҙылған шиғырҙары «Илһам» тигән өсөнсө йыйынтығына тупланған булған. Ләкин был китап донъяға сыға алмаған. Шуға күрә был осорҙағы ижады тураһында беҙ ваҡытлы матбуғат биттәрендә баҫылған шиғырҙарынан сығып ҡына фекер йөрөтәбеҙ.

Беренсе донъя һуғышы осоронда татар поэзияһында реакцион романтизм көсәйеп китә. Быны шауҡымы башҡорт шағирҙарына ла һуғылмай ҡалмай. Я.Юмаев та яңынан күңел төшөнкөлөгөнә бирелә. «Мәьйүскә», «Ғүмер» шиғырҙарында ғүмеренең заяға үтеүенән зарланһа, «Көндәрем» шиғырында, илдә ҡан ҡойғос һуғыш барыуына ҡарамаҫтан, «Әйләнәм — тынлыҡ, янымда бер ҙә юҡ шау-шыу ауаз; мин йәшәйем хәҙер ҙә ысын иман, саф выждан менән, шул сәбәпле донъяла күңе-

---

[143] Жамалетдин Юмаев. Әдәби шигырьләр, 16-нчы бит.

лем тыныс, ҡайғым да аҙ»[144], тип ысынбарлыҡҡа «арты менән әйләнеп» ултыра һәм суфыйлыҡҡа һалыша. Ләкин был битарафлыҡ оҙаҡҡа бармай.

Февраль революцияһынан саҡ ҡына элегерәк, 1917 йылдың 25 ғинуарында, яҙылған «Көндәр» шиғырында:

Йолдызлары күптән сүнеп бетkән,
Таң чулпаны инде юғалған.
Изге рухлар бары үлеп беткән,
Яуыз рухлар бары уянған.
Дөнъясында инде йәм ҡалмаған,
Нәжесәткә[145] донъя буялған[146], —

тип зар илаған шағир Февраль революцияһын ҙур шатлыҡ менән ҡаршылай:

Шад күңелдән яҡты көнләрнең җырларын җырлап ебәр,
Ал сазыңны, нечкә ҡылларын сызып уйнап ебәр,
Җырла, уйна, өр-яңа дәртләр белән тулған йөрәк,
Ҡайнасын, диңгеҙ кебек тулҡынланып торсын йөрәк.
Йәш күңелдә гөл кебек үскән матур хис сулмасын,
Ул матур гөл бакчасында сандуғачлар сайрасын,
Аҡрын искән җил белән яфраҡ, ағачлар шауласын,
Җырла шул моңлар эчендә шад күңелнең җырларын,
Ырғытып ташла ҡара көчнең ауыр зынҗырларын...

*(«Шат күңелдән»)*[147]

Дөйөм ижадынан күренеүенсә, шағир, Бөйөк Октябрь Социалистик революцияһына тиклем, аҡрынлап булһа ла, ана шул «ҡара көчнең ауыр зынжырларынан» үҙен рухи азат итеү эволюцияһын кисерә, шәхесте иҙеүсе йәмғиәтте күрә алмай, уны кире ҡаға. Хөкөм һөрөүсе ҡоролошҡа ҡаршы был протест революцион көрәш атмосфераһында барһа ла, ул халыҡ массаларының аңлы хәрәкәте менән берегеп етә алмай ҡала. Был протест йәмғиәт үҫеше закондарын аңлауҙан алыҫ торған айырым шәхестең индивидуаль бунты булыуҙан уҙып китә алмай.

Етемлектә ҡыйырһытылып үҫеү, шәхес булараҡ ҡара реакция йылдарында формалашыу был йыуаш һәм

---

[144] Шура, 1915, №17.
[145] Нәжес — тиҙәк.
[146] Тормыш, 1917, 25 ғинуар.
[147] Тормыш, 1917, 25 ғинуар.

уйсан, балаларса тиҙ ышаныусан, шул уҡ ваҡытта бик тиҙ күңеле ҡырылыусан шағирҙың рухи донъяһына тәрән эҙ һалып ҡалдырған. Иҫке тормошто күрә алмай, шуның тарафынан иҙелеп әлһерәгән шағирҙың Октябрь социалистик революцияһынан һуң яңыса йырларға, «ҡылдары өҙөлмәҫ ныҡ бер саз булырға» көс таба алмай, ижадтан ситләшеүе һәм, ваҡытлыса булһа ла, ауылына ҡайтып мулла булып та тороуы — ана шул үҙе күрә алмаған донъянан бөтөнләйе менән азат булып бөтә алмауынан да килгәндер.

Я.Юмаев ижады, күренеүенсә, шаҡтай ҡатмарлы ижад. Поэзияһындағы ҡаршылыҡлы яҡтарҙы ул үҙе лә бик яҡшы аңлаған һәм үҙ-үҙенә тәнҡит күҙлегенән ҡарарға тырышҡан:

Тикшереп тормыйм, минем сүзләр начармы, яхшымы,
Ҡалдырыр халҡым начарын һәм алырлар яхшысын.
Ҡалса миндән бер сүзем халҡым телендә сөйләнеп,
Йәки бер моңло җырым әйтелсә бер аҙ көйләнеп, —
Шул етәр, мин дә етәрмен маҡсадыма шуның белән.
Белмәсәм ил дәртләрен, майданға мин чыҡмас идем,
Милләтемне сөймәсәм, ҡулға ҡәләм тотмас идем[148].

Васыятты хәтерләткән был шиғыр шағирҙың үҙ ижадына баһаһы ғына түгел, киләсәк быуындарға урынлы бер үтенесе лә булып ишетелә.

* * *

Реакция һәм яңы революцион күтәрелеш йылдарында башҡорт поэзияһында романтизм шаҡтай үҫеш алды һәм ул осор әҙәбиәтенең йөҙөн билдәләүсе методҡа әүерелә барҙы. Романтизм әҙәбиәтенең тәбиғәтенә ярашлы рәүештә, был осор поэзияһының үҙәгендә социаль ысынбарлыҡ менән килешмәүсе, уны кире ҡағыусы шәхестең рухи донъяһы булды.

Был осорҙа тәнҡитле реализм методы ла үҙенә юл яра башлағайны инде. Был йәһәттән М.Ғафуриҙың ижады айырылыбыраҡ торҙо. Уның поэзияһында мәғрифәтселек традициялары ла үҙенсәлекле дауам итте. Тынлыҡ һәм сафлыҡ эҙләп, тәбиғәт ҡосағына ташла-

[148] Шура, 1915, № 5.

ныуҙары, саф мөхәббәткә табыныуҙары һәм үткән тормошто идеаллаштырыу күренештәре шулай уҡ уның ижадында романтизмдың сағылышын раҫлап тора.

Йәшәп килгән йәмғиәт ҡоролошона протест романтизм әҙәбиәтендә үҙенсәлекле формала сағыла. Йә ул шәхестең ысынбарлыҡтан ситләшеүе, донъянан биҙеүе формаһын, йә был ысынбарлыҡты кире ҡағып, ниндәйҙер билдәһеҙ, «булыуы мөмкин тип уйланған» тормошҡа ынтылыуында күренә.

Тәнҡитле реализм иһә үҙенең тәбиғәте менән ысынбарлыҡтың реаль картинаһын тыуҙыра һәм, ундағы етешһеҙлектәрҙе дөйөмләштереп, ошо ысынбарлыҡтың асылына үтеп инергә тырыша. Йәғни, буржуаз ысынбарлыҡты кире ҡағыу реалистик әҙәбиәттә, романтизм әҙәбиәтендәге кеүек ситләтелгән формала түгел, ә конкрет рәүештә, был йәмғиәттең асылына үтеп инеү, сатира йәки тәнҡит алымы менән йөҙөн йыртыу формаһында бара. Романтизм әҙәбиәтендә ысынбарлыҡты аңларға, киләсәккә үтеп инергә тырышыу интуитив формала барһа, реалистик әҙәбиәттә художестволы дөйөмләштереүҙәр тормошто күҙәтеү, ысынбарлыҡҡа анализ яһау юлы менән башҡарыла. Ғөмүмән художестволы аңдың реалистик юғарылыҡҡа күтәрелеүе донъяны танып белеүҙә тарихи-материалистик ҡараштарҙың нығынып, үҫеш алыуы менән бәйле. Был осор башҡорт поэзияһында тәнҡитле реализмдың үҫеше, нигеҙҙә, ике нәмәлә асыҡ күренде.

Беренсенән, М.Ғафури, Ш.Бабич, Ғ.Иҫәнбирҙиндәрҙең ижадында ысынбарлыҡты тәнҡит итеүсе сатирик поэзия көсәйә. Ләкин тәүге осорҙа сатира мәғрифәтселек осоронда үҫеш алған феодаль-крепостнойлыҡ, дини фанатизм ҡалдыҡтарына ҡаршы йүнәлгән поэзиянан артыҡ айырылып тормай әле. Әйтәйек, М.Ғафуриҙың «Һәр фәнгә маһир мулла», «Сахибә карамәт», «Замана шиғырҙары», Я.Юмаевтың «Яңғылыш яҙылған», Ш.Бабичтың «Сеп-сей наҙан» кеүек сатирик шиғырҙары иң элек наҙанлыҡҡа һәм халыҡты наҙанлыҡҡа һөйрәүсе дин әһелдәренә ҡаршы йүнәлдерелгәйне, һәм был сатира ана шул мәғрифәтселек әҙәбиәте кимәленән үтеп китә алмағайны әле. Әммә был традиция реалистик сатираның үҫешенә ыңғай йоғонто яһаны.

Мәғрифәтселәр үҙҙәренең тәнҡитен феодаль-патриархаль ҡалдыҡтарҙы, дини фанатизмды юҡ итергә йү-

нәлтһәләр, реалистар буржуаз йәмғиәттең үҙен һәм кешеләр араһында ошо буржуаз йәмғиәт килтереп тыуҙырған мөнәсәбәттәрҙе тәнҡит итәләр. XX быуат башында, әлбиттә, башҡорт ысынбарлығы феодаль-патриархаль ҡалдыҡтарҙан бөтөнләй азат түгел ине. Шуға күрә был иҫкелек ҡалдыҡтарын тәнҡит итеү Октябрь революцияһына тиклем, хатта унан һуң да дауам итә.

М.Ғафури «Татар ҡатыны» (1909), «Ҡарт түгел» (1910), «Йәш ҡыҙ» (1910) шиғырҙарында ҡатын-ҡыҙға ҡарата татар һәм башҡорттар араһында хөкөм һөргән феодаль-патриархаль ҡараштарға ҡаршы сыға. Ләкин ул «Татар ҡатыны» шиғырында мәғрифәтселәр һымаҡ дөйөм һүҙ менән генә сикләнеп ҡалмай, кешелекһеҙ ире тарафынан ҡол хәленә дусар ителгән татар ҡатынының реалистик образын тыуҙыра. «Нишан», «Мансап тәме», «Доноссы», «Һатылдылар» һәм башҡа шундай шиғырҙарында революция осоронда хаҡлыҡ, ғәҙеллек лозунгыларын күтәреп йөрөп тә реакция осоронда халыҡҡа хыянат итеүсе ваҡ буржуаз интеллигенцияның ике йөҙлөлөгөн асып һалды. «Үҙенсә», «Ваҡтар», «Кәмитсе» кеүек әҫәрҙәрендә синфи йәмғиәт килтереп тыуҙырған мещанлыҡты аяуһыҙ тәнҡит итте.

1912 йылда яҙылған «Ирек өсөн көрәш» шиғырында шағир кешенең иркен, азатлығын быуыусы синфи йәмғиәткә, уның халыҡ массаларын иҙеүгә йүнәлдерелгән ҡанундарына ҡаршы сыҡты, һәм:

«Хәҙер миндә ҙур көс бар, көрәшкә бил быуып сыҡтым,
«Хәҙер һинән еңелмәмен!» — тип күкрәккә ҡул һуҡтым», —

тип, үҙен ошо ҡанундар тотҡононан рухи азат итеп хис итте.

Икенсенән, реакция һәм революцион күтәрелеш йылдарындағы башҡорт поэзияһында, бигерәк тә Ғафури ижадында, реалистик тармаҡтың үҫеше ярлы халыҡ тормошон һүрәтләүҙә, халыҡ массаларына яҡынайыуҙа күренде.

Ғафури үҙенең иң тәүге «Фәҡирлек менән үткән тереклек» хикәйәһендә үк бөлгөнлөктә көн күреүсе хеҙмәтсәндәрҙең тормошон сағылдырғайны. Ярлыларға теләктәшлек артабан прозаһында ла, поэзияһында ла ҙур урын ала барҙы. Быға «Ярлылар, йәки өйҙәш ҡатын» повесы, «Баҙарға сыҡтым», «Бай кеше» кеүек шиғыр-

ҙары асыҡ миҫал булып тора. Ләкин әле Ғафури үҙенең тәүге әҫәрҙәрендә, мәғрифәтселек ҡараштарында тороп, ярлыларға теләктәшлек белдереүҙән, уларҙы ҡыҙғаныуҙан уҙып китә алмай. Шуға ла уның әҫәрҙәрендә хеҙмәтсән халыҡ вәкилдәре — ярлылар бик меҫкен, ҡыҙғаныс итеп һүрәтләнә. Был 1908 йылда яҙылған «Бай һәм хеҙмәтсе», «Байҙар алдында», «Ҡыҙғанам», «Хәйерсе» шиғырҙарында бик асыҡ күренә. Уларҙа Ғафури ярлыларҙың, хәйерселәрҙең реалистик образын тыуҙыра. Ләкин бай менән хеҙмәтсе араһындағы мөнәсәбәт синфи мөнәсәбәт икәнлегенә ул үҙе лә төшөнөп етә алмай әле. Шуға ла уның байы бик көслө, рәхимһеҙ, ә хеҙмәтсеһе — үҙ хаҡын да талап итә алмаған бер бахыр. Халыҡ тормошон сағылдырыуҙағы был йомшаҡ яҡтар Ғафуриҙың әле халыҡ массаларының тарихта тотҡан урынын аңлап етмәүенән килә ине.

1911 йылда яҙылған «Ярлы» шиғырында иһә Ғафури ярлыларға теләктәшлек белдереү, уларҙы ҡыҙғаныу менән генә сикләнеп ҡалмай, үҙ көсө менән көн күреүсе ярлының кешелеген яҡлап сыға. Был шиғыр шулай уҡ шағирҙың хеҙмәтсәндәргә яҡынлашыуында билдәле бер һынылыш осороноң башланыуын күрһәтә.

Халыҡ массаларының тарихты хәрәкәт иттереүсе төп көс икәнлегенә ышаныс шағирҙың 1911 йылда баҫылған «Халыҡ теләге» тигән мәҡәләһендә бик асыҡ күренә: «Яҡын арала, — тип яҙа ул, — Россияла булған үҙгәрештәрҙең тәьҫире булараҡ, халыҡ араһында бер төрлө уяныу хисе ҡуҙғала башланы... Шуның һөҙөмтәһе булараҡ, «халыҡ теләге» тигән бер ҡеүәт вә көс сыға башланы. Халыҡ бер нәмәнең булыуын теләһә, ул уның донъяла йәшәргә теләүе тимәктер. Халыҡ теләгенең көслө вә ҡеүәтле булыуына шөбһә юҡтыр. Халыҡ бер нәмәне берҙәмлек менән булдырырға теләһә, ул нәмә һис булмай ҡалмай. Ни саҡлы кәртәләр булһа ла, халыҡ теләге ул ҡаршылыҡтарҙы тар-мар итә, бара торғас, ул кәртәләр емереләләр. Тураһы — халыҡ теләге һәр бер нәмәне булдыра ала торған бер ҡеүәттер»[149].

Халыҡ шағирының был һығымтаһы беренсе революция осоронда үҙенең көсөн күрһәтеп өлгөргән, лә-

[149] Мәжит Ғафури. Әҫәрҙәр, 6-сы том, 44-се бит.

кин реакция йылдарында быуылып торған халыҡ массаларының яңынан хәрәкәткә килеүе, яңы революцион күтәрелештең башланыуы менән тығыҙ бәйләнештә килеп тыуған факт ине. Ул инде хәҙер халыҡҡа мәғрифәтсе күҙлегенән түгел, ә революцион демократ күҙлегенән сығып, уға тарихты хәрәкәт иттереүсе көс итеп ҡарай. Шулай уҡ мәҡәлә «халыҡ теләге» тигән төшөнсәне аңлатып биреү маҡсатын тотоп ҡына яҙылмаған, ә халыҡты тупланырға, үҙ бәхете өсөн көрәшергә саҡырыусы оран да ине.

Бынан һун, Ғафури «Үҙем һәм халҡым», «Мин ҡайҙа?», «Выждан теләге» шиғырҙарында, башҡорт поэзияһында беренселәрҙән булып, халыҡ һәм шағир темаһын күтәреп сыҡты.

Ҡайҙа ярлы, ҡайҙа зарлы, ҡайҙа моңлолар була,
Мин шулар янында булам, улар менән килешеп була,
Юҡ уларҙа төрлө ҡатлау, юҡ уларҙа эс сере,
Тыштары керле, ә ләкин юҡ уларҙа эс кере.
Юҡ наҙланыу, юҡ эрелек, ултырышһаң, һин дә мин,
Юҡ күңел ҡырылыр тигән уй, ул йәһәттән мин имен.

*(«Мин ҡайҙа?», 1912)*

Ярлы халыҡтың рухи матурлығына үтеп инеү — Ғафури ижадында реалистик тармаҡтың нығына һәм көсәйә барыуы менән тығыҙ бәйләнгәйне. Ғөмүмән, яңы революцион күтәрелеш йылдарында Ғафури поэзияһы торған һайын көслөрәк һәм ҡеүәтлерәк була барҙы. Ф.Сөләймәнов, Я.Юмаевтар пессимизмға бирелеп, «теге» донъяны, ҡәбер тынлығын идеаллаштырған бер осорҙа ул «Хәйәт юлында», «Бәхет эҙләү» кеүек кешелек бәхете өсөн актив көрәшкә өндәүсе шиғырҙар менән сығыш яһаны:

Үлеп мең йыл тороуға бер сәғәт ғүмерем алмаштырмайым,
Бәхет эҙләйем ер өҫтөнән, торам мин бында, ник тормайым,
Кешеләргә бәхет эҙләп һуғыш асыусылар берлә
Йәнем сыҡҡансы ауыҙымдан йөрөрмөн һәр ваҡыт бергә.

*(«Бәхет эҙләү», 1913)*

Ғафури ижадында реалистик йүнәлештең көсәйә барыуы, халыҡсан эстетиканың нығыныуы был осор поэзияһында урын алған ваҡ буржуаз индивидуализмға,

пессимизмға һәм мистикаға ҙур удар яһаны һәм ижадтары баштан уҡ демократик нигеҙҙәрәк үҫеш алған Д.Юлтый, Ш.Бабич, Ғ.Иҫәнбирҙиндәргә генә түгел, төшөнкөлөк поэзияһының оҫтаһына әүерелә барған Я.Юмаевҡа ла ыңғай тәьҫир итте.

Үҙен халыҡтың органик бер өлөшө итеп тойоу Ғафуриҙан ҡала Д.Юлтый шиғырҙарында асыҡ билдәләнде.

Мин ғади, мин иң түбән
Тормош төпкөлөнән бер бала;
Йырҙарым да иң түбән
Тормош төбөнән моң ала.
Унда юҡ бер көсәнеү һәм
Унда тәҡлид башҡаға,
Йырҙарым шул иң түбән
Халҡым йөрәгенән аға.

*(Д.Юлтый. «Әйтмәһендәр», 1913)*

Шәйехзада Бабич та «Әллә ниҙән шикләнеп һәм шомланып» («Моңланам» шиғыры) болоҡһоуҙарҙан, әлегә поэзияла үҙ тауышын таба алмай эҙләнеүҙәрҙән һуң, 1914 йылда «Халҡым өсөн» шиғыры менән «ярлы, меҫкен, ҡыҙғаныс халҡына» яҡын килде һәм үҙенең төп маҡсатын халҡының киләсәге өсөн көрәш тип билдәләне.

Реакция һәм яңы революцион күтәрелеш йылдарына тура килгән Ғиззетдин Иҫәнбирҙиндең дә ижады, дөйөм алғанда, реалистик йүнәлештә үҫеш алды.

## 5

**Ғиззетдин Сабит улы Иҫәнбирҙин** 1888 йылдың 8 июлендә Саҡмағош районы Аблай ауылында мулла ғаиләһендә тыуған. Башланғыс белемде ауыл мәҙрәсәһендә алған һәм 1907—1910 йылдарҙа «Ғалиә» мәҙрәсәһендә уҡыған. Ижади эш менән дә тап ошо йылдарҙа шөғөлләнә башлаған. Уның әҙәбиәткә килеүенә «Ғалиә»ләге әҙәби мөхит һәм заманына күрә прогрессив йүнәлештә торған осло ғына ҡәләмле прозаик, бер туған ағаһы Әхкәметдин Иҫәнбирҙин ҙур йоғонто яһаған.

Ғ.Иҫәнбирҙин «Ғалиә»не тамамлағандан һуң, 1911 йылдан 1913 йылға тиклем хәҙерге Бүздәк районы Ки-

лем ауылында, унан һуң Кушнаренко районы Ҡормаш ауылында мөғәллим булып эшләй. Ошо йылдарҙа ул ваҡытлы матбуғат биттәрендә уҡыу-уҡытыу мәсьәләләре буйынса мәҡәләләр менән йыш ҡына сығыш яһай. «Шура» журналының 1912 йыл 5-се һанында баҫылған «Ибдидаи мәктәптәр программаһы хаҡында» тигән мәҡәләһенән күренеүенсә, ул уҡытыуҙағы иҫке методтарға ҡырҡа ҡаршы булған. Теле аңлашылмаған ғәрәп әҙәбиәтен, ҡөрьән сүрәләрен уҡытып, балаларҙың зиһенен томалайбыҙ, уларҙы үҙ аллы фекер йөрөтөү һәләтлегенән дүндерәбеҙ, донъяуи фәндәрҙе уҡытыуға иғтибарҙы көсәйтергә кәрәк һәм уҡытыу мотлаҡ әсә телендә булырға тейеш, тигән ул. Биш йыл самаһы уҡытыусы булып эшләгәндән һуң, Иҫәнбирҙин Башҡортостандың Урал арты яҡтарына килеп сыға, 1915 йылдан алып Февраль революцияһы көндәренә тиклем хәҙерге Асҡарҙа земство тарафынан асылған төбәк китапханаһында мөдир булып эшләй. «Ваҡыт» газетаһының 1915 йылғы 6 ноябрҙәге һанында баҫылған бер хәбәрҙән күренеүенсә, ул бында халыҡты аң-белемгә, китап культураһына ылыҡтырыуҙа арымай-талмай хеҙмәт итә.

Ғ.Иҫәнбирҙин элегерәк яҙа башлаһа ла, матбуғат биттәрендә күҙгә салыныуы 1911 йылға тура килә. Ул да үҙенең әҫәрҙәрен нигеҙҙә «Шура» журналының биттәрендә баҫтырған. 1914 йылда Өфөлә «Шәреҡ» нәшриәтендә сыҡҡан «Гиззетдин Исәнбердин шигырьләре» тигән йыйынтыҡ — уның берҙән-бер китабы. Унда утыҙҙан ашыу шиғыры һәм руссанан тәржемәләре тупланған, ләкин шағирҙың шул йылдарға тиклем яҙған әҫәрҙәре инеп бөтмәгән. Был китабынан тыш төрлө газета һәм журналдарҙа тағы ла утыҙлап шиғыры баҫылып сыҡҡан. Октябрь революцияһынан һуң, Ғ.Иҫәнбирҙин үҙенең һайланма шиғырҙарын туплап, китап итеп сығарыу ниәте менән, М.Ғафуриға тапшыра. Ғафури, китапҡа ыңғай баһа биреп, баҫтырырға тәҡдим итә. Ләкин граждандар һуғышы башланып китеү сәбәпле, был китап донъя күрә алмай ҡала һәм юғала. Артабан шағир үҙе лә яҙыу эшенән ситләшә, яратҡан эше — уҡытыусылыҡҡа бирелеп китә. Белемен заман кимәленә күтәреү өсөн дә күп көс һалырға тура килә уға. 1949 йылда, педагогик эшмәкәрлегенә 40 йыл тулыу уңайы менән, хөкүмәт уны «Почет билдәһе» ордены менән наградлай. Ғ.Иҫәнбирҙин 1968 йылдың 8

февралендә вафат була. Ул Совет осоронда матбуғатта сығыш яһамаһа ла, ғүмер буйы шиғыр яҙыуын ташламаған, ҡулъяҙма архивында социалистик ысынбарлыҡты, совет кешеләренең бәхетле тормошон сағылдырған байтаҡ шиғыры һаҡланған. Әммә улар художестволы эшләнеше яғынан башҡорт поэзияһының совет осоронда өлгәшкән кимәленән күпкә түбән. Шуға ла Ғ.Иҫәнбирҙин уларҙы баҫтырырға тәҡдим итеүҙән тартынған булһа кәрәк.

Ғиззетдин Иҫәнбирҙин дә әҙәбиәткә дөйөм күңел төшөнкөлөгө осоронда аяҡ баҫа. Шуға ла төшөнкөлөк йырҙары ижадының башланғыс осоронда шаҡтай ҙур урын алып тора. Үҙ һүҙҙәре менән әйткәндә, тормошондағы идеалының «шаҡтай сыбалсыҡ» булыуы, уны күп ваҡыт икеләнеүҙәргә, өмөтһөҙлөккә этәрә. Әммә уның лирик геройы «донъяға ҡаш йыйырыусы» С.Рәмиев геройына принципиаль рәүештә ҡаршы тора.

Чигәм ҡайчан ғазап, михнәт, ҡыйынлыҡ,
Килә бергә үк бәхет һәм рәт вә киңлек.
Шуңарға йөзне чытмыйм донъяға мин,
Үтә шатланмыйм да — бер үк тиңлек.
Була бит ҡыш соңында йыл сайын жәй,
Шулай күп эш соңында очрый ыңғай.
Үҙем дә шул беләм ич, михнәт үткәч,
Ничек шадлыҡ игәргә ипле, уңғай.

«Көндәрем» тигән был шиғырынан күренеүенсә, ул ебеп төшкән пессимист түгел, донъяның даими үҙгәрештә булыуын яҡшы аңлай.

Ижадының башланғыс осоронда мәғрифәтселек өҫтөнлөк итә. Ләкин уның мәғрифәтселеге аң-белемгә өндәүҙән бигерәк, әхлаҡ төҙәтеүҙе беренсе планға ҡуйған. «Яман иптәш» (1911) шиғырында, мәҫәлән, шағир: «Әҙәпһеҙ кешеләр артынан эйәрһәң, һис шикһеҙ насар юлға төшәсәкһең» тигән фекерҙе ҡабатлай. Мәғрифәтселәргә хас рәүештә, тәүге шиғырҙарында мөхит төшөнсәһе лә бик тар әле, ғаилә, дуҫ-иш менән генә сикләнә. Артабан, «Мин вә мөхитем», «Егетлек», «Мин», «Ғаләм» кеүек шиғырҙарында мөхит төшөнсәһе киңәйә, шәхес һәм йәмғиәт темаһы ижадының төп темаһына әүерелә бара.

«Мин вә мөхитем» шиғырында Ғ.Иҫәнбирҙин шәхси бәхет менән дөйөм халыҡ бәхете араһындағы диалек-

тик бәйләнеште төҫмөрләй башлай, шуға ла, үҙенең эштәре көйлө булып та, милләтенең эштәре «ул тигәнсә булмауына» әсенә. Тулы бәхет халыҡ менән бергә генә булыуы мөмкин тигән фекергә килә. Уның лирик геройы ыҙалы йылдар реакцияһын үҙ йөрәге аша үткәреүсе, намыҫһыҙлыҡ, ике йөҙлөлөк менән тулған донъяла саф выжданды байраҡ итеп йәшәргә ынтылыусы индивидуум булып ҡала бирә. Ғ.Туҡайҙың «Шағир» тигән шиғыры йоғонтоһонда яҙылған «Егетлек» шиғырында:

Ашыҡмастан кичәрмен мин диңгезен һәм тәп-тәрән ярын,
Текә тау, ҡап-ҡараңғы төн, ҡара урманларын барын[150], —

тип сабырлыҡ менән көрәшкә тотонорға ниәтләнһә лә, бынан һуң яҙған «Ҡайҙа ул?», «Үтте» кеүек шиғырҙарында ғүмеренең әрәм үтеүенән, тормош ауырлыҡтарынан зарланып һыҡрана:

Ҡалмады ялҡын, йөрәк салҡын хәзер, боздан да ул,
Өрдөрә, чирҡандыра анда буран, йәмсез дауыл,
Чәч ағарды, ҡалды ул бик сирәк һәм ҡардай аҡ,
Иске йәш, тойғыр көйенчә йән генә тик ҡалды чаҡ[151].

1913—1914 йылдарҙа Ғ.Иҫәнбирҙин А.С.Пушкин, А.Кольцов әҫәрҙәре менән таныша, уларҙы тәржемә итә. М.Ғафури менән Ғ.Туҡай ижадының гуманистик асылына һоҡлана. Был хәл уның донъяға ҡарашын шаҡтай киңәйтә, поэтик оҫталығы ла күтәрелә бара. Ижады тематик яҡтан байыға төшә. Ошо йылдарҙа яҙған «Ныҡ хәтер», «Мин теләрмен», «Теләк булһа», «Тормош», «Ҡаты көрәш» шиғырҙарында намыҫ менән үҙ халҡының бәхете, уның киләсәге өсөн көрәштән дә изге эш юҡ тигән һығымтаға килә. Был юлда үҙ-үҙен аямаҫҡа һүҙ бирә. Йәшәүенең маҡсатын:

Бүләк көтми, киреп күкрәк барыу тик
Әдәмләргә бәхет эзләү юлында, —

тип билдәләй.

---

[150] Шура, 1913, № 3.
[151] Шура, 1913, № 19.

Халыҡ тормошона яҡынайыу Ғ.Иҫәнбирҙиндә хеҙмәт халҡына ихтирам уята. Был осорҙа уның ижадында хеҙмәт темаһы ҙур ғына урын алып тора. «Игенлек», «Ғаләм вә мәшәҡәт», «Иренсәк менән күңелсәк көн күрмәҫ» кеүек шиғырҙарында кеше көсө менән йәшәүсе әрәм тамаҡтарҙы фаш итеп, «Киң йыһанға кил фәҡәт эшләү өсөн ең һыҙғанып, буш бушыңа башҡалар икмәк ашатмаҫ тоҙ һалып»[152], — тип актив эшмәкәрлеккә өндәй. Ә инде «Ауыл» шиғырында ярлылыҡ, бөлгөнлөк менән хараба хәленә килтерелгән башҡорт ауылының аяныс картинаһын тыуҙыра:

Быларда яҡты көн юҡ, томанлы,
Аяҡ, ҡул, баш, муйын — барсы боғаулы, —

тип конкрет бер ауыл образында бөтә ил өсөн типик күренештәрҙе дөйөмләштереү юғарылығына күтәрелә.

Ғ.Иҫәнбирҙин ижадында тәбиғәт лирикаһы ла ҙур ғына урын биләй. Ләкин уның «Тәбиғәткә» тигән шиғырынан башҡалары бүтән шағирҙарҙың тәбиғәт лирикаһынан айырылыбыраҡ тора. Ул инде тәбиғәт балаһы түгел, унда тынғылыҡ та эҙләмәй, был темалағы шиғырҙарына ул философик мәғәнә һалырға, тәбиғәт картиналары аша үҙ заманының типик образын тыуҙырыуға ынтылыш яһай. Әйтәйек, заманына хас булған моңһоулыҡ уның «Ҡышҡы бүлмәм», А.С.Пушкиндан тәржемә ителгән «Ҡышҡы юл», «Ҡышҡы төндә» шиғырҙарында ҙур оҫталыҡ менән һынландырылған.

Тәү ҡарашҡа саф тәбиғәт лирикаһының өлгөһө булырлыҡ «Ҡаты ямғырлы көн» тигән шиғырына иғтибар итәйек:

Ашыға-ашыға үз юлында, күкрәми һәм йәшнәми,
Емерелер төсле аға күктә болытлар дәръясы.
Дөнъя тик су дөнъясы, туҡтамый шәп яңғыр яуа,
Ыжлай-гөжләй, туҡтамый кискен ҡаты, салҡын һауа.
Жырламый да, шауламый да эшчеләр дә бармаған,
Был етем ҡыр, моңлы ҡырда йән иясе ҡалмаған.
Көн буйына сайрый торған сандугач, турғай да юҡ,
Ҡайғыға чумған бөтөнләй бу ялан, аулаҡ ялан.

---

[152] Шура, 1913, № 19.

Был өшәндөргөс күренеште тәбиғәткә генә ҡайтарып ҡалдырып булмай, әлбиттә, унын артында үҙ заманы тураһында бошонҡолоҡ менән уйланыусы шағир шәхесе тора. Ғ.Иҫәнбирҙин шиғырҙарында тәбиғәт лирикаһы тыуған ер, тыуған илгә мөхәббәт темаларына барып тоташа. Ә «Тыуған ил» шиғыры XX быуат башындағы башҡорт поэзияһында был темаға яҙылған иң һәйбәт шиғырҙарҙың береһе тип әйтергә мөмкин. Ғ.Иҫәнбирҙиндең тәбиғәт лирикаһында риторика түгел, ә образлы фекер йөрөтөү өҫтөнлөк итә. Был — шағирға А.С.Пушкин поэзияһының ыңғай йоғонтоһо хаҡында һөйләй.

Социаль һәм милли иҙеү киҫкенләшә барған XX быуат башы шарттарында был иҙеүгә ҡаршы реакция, үҙ милләтенең хоҡуҡтары өсөн көрәш башҡорт шағирҙарының бөтәһе өсөн уртаҡ булған темаларҙың береһе ине. Һәм был заманы өсөн һис һүҙһеҙ прогрессив, ғәҙел күренеш булды. Был ынтылыштар Ғ.Иҫәнбирҙиндә лә сағылмай ҡалманы. Ләкин уның ижады социаль яуызлыҡҡа актив протест юғарылығына күтәрелә алмаған.

Бер исемһеҙ шиғырында ул былай ти:

Килде язлар, тулды ярлар су белән,
Бу бәхетсез илдә иреми ҡар да әле,
Күккә чыҡды, күкрәде гөл — ғынчалар,
Безнең илләр яфрағын да ярмады.

Милли-азатлыҡ хәрәкәте, 1905 йылғы буржуаз-демократик революция тулҡындары менән йәнләнеп китеп тә, көткән уңыштарға өлгәшә алмауына бер ишара ине был. Артабан, 1915 йылда, «Кейеҙ өй янында» тигән шиғырында башҡорт халҡының үткән тормошон, ата-олатайҙарҙың ҡаһарманлыҡтарын идеаллаштырып һүрәтләү ҙә үткәнде шул заманға ҡаршы ҡуйыу менән бергә милли азатлыҡ хәрәкәтенең уңышына ышанысы ҡаҡшай барыуын күрһәтеүсе бер дәлил булып тора. Ләкин шуныһы әһәмиәтле, күпселеге менән ваҡ-буржуаз позицияла торған милли интеллигенттарҙың ҡарашындағы был һынылыш артабан уларҙың күптәрен социаль яуызлыҡтың асылын аңлай барыуға һәм бөтә төр иҙеүҙәрҙән азат итеүсе социалистик революцияла эшсе-крәҫтиәндәр менән ҡулға-ҡул тотоноп көрәшкә күтәрелергә алып килде.

Ғ.Иҫәнбирҙинденең дә илдәге яңы революцион күтәрелеш йылдарында һәм империалистик һуғыш осоронда үҙ заманының асылына үтеп инә барғанлығы күренә. Ул был осорҙарҙа социаль тигеҙһеҙлекте, ҡомһоҙлоҡто фаш итеүсе шиғырҙар менән сығыш яһай. 1915 йылда «Беҙ» тигән шиғырында:

Юҡ ирек, ялған ирек тик бездә бар,
Бездә бар нәмә ҡысынҡы, барсы тар.
Без бәхетсез, безнең өстә таудай кер,
Адвокат, мулла, мөғәллим барсы бер[153], —

тип буржуаз йәмғиәттең асылына үтеп инеп, уның битлеген йыртып ташлай. Был — ижадының башланғыс осоронда ваҡ буржуаз ҡарашта тороусы шағир өсөн ыңғай яҡҡа ҙур һикереш ине.

* * *

Дөйөм алғанда, реакция һәм яңы революцион күтәрелеш осорондағы башҡорт поэзияһы киң, ләкин ҡатмарлы һәм ҡаршылыҡлы үҫеш юлына аяҡ баҫты. Ул үҙен рационализмдан һәм дидактиканан арындырып һүҙ сәнғәтенә әүерелеү йүнәлешендә байтаҡ уңыштарға өлгәште. Реакцияның ҡыҫымы сәбәпле, был осор әҙәбиәтенең ҙур ғына ҡаҙанышы булып торған публицистик пафос һүрәнләнә төштө. Ләкин, романтизм методының үҫеш алыуы уңайы менән, шәхестең эске донъяһына үтеп инеү, уға психологик анализ тәрәнәйә барҙы. Романтизм методының үҫеүенә тәү шарт булып революциянан һуң аяҡҡа баҫҡан реакция йылдарында шәхестең йәмғиәттән ситләшеүе торҙо. Шуға ла башҡорт поэзияһында тәүҙәрәк пассив романтика өҫтөнлөк итте. Артабан демократик йүнәлештә тороусы Ғафури, Юлтый, Юмаевтарҙың ижадында ул пассивлыҡтан активлыҡҡа табан ыңғайланы. Был процесс илдәге революцион күтәрелештең көслө йоғонтоһонда барҙы. Романтизмдың үҫеше ҡаршылыҡлы характерҙа булһа ла, ул поэзияла лириканың үҫеше өсөн ыңғай роль уйнаны. Мәғрифәтселек поэзияһы һанға һуҡмаған шәхес

---

[153] Шура, 1915, № 20.

һәм уның рухи донъяһын һүрәтләү өлкәһендә ул һыны-лыш яһаны. Ә был — поэзияның артабанғы үҫеше өсөн мөһим шарт ине.

Шулай уҡ романтизмды тәнҡитле реализмдың үҫешенә ҡаршы торған ижад методы тип әйтеп тә булмай. Реализмдың ысынбарлыҡҡа тәнҡит күҙлегенән сығып ҡарауы — мәғрифәтселек поэзияһының публицистик тенденциозлығынан этәреш алһа, ысынбарлыҡҡа романтик оппозиция реалистик поэзияның эмоциональ үҫешенә ыңғай йоғонто яһаны. Реалистик йүнәлеш, юғарыла әйтелгәненсә, буржуаз ысынбарлыҡты тәнҡит итеү, уның йөҙөн асырға ынтылыу, халыҡ тормошон дөрөҫ һүрәтләү, халыҡ массаларына яҡынайыу һәм уларҙы тарихты хәрәкәт иттереүсе көс икәнлеген аҡрынлап төшөнә барыу менән бергә үҫте.

Мәғрифәтселек дәүерендә өҫтөнлөк иткән «милләт» һүҙен был осорҙа Ғафури, Юлтый кеүек шағирҙарҙың поэзияһында «халыҡ» һүҙе ҡыҫырыҡлай башланы. Был күренеш үҙ сиратында алдынғы шағирҙарҙың барған һайын халыҡ массаларына яҡынайыуы, ижадтарында халыҡсан-демократик эстетиканың үҫеше менән бәйле ине.

Реакция һәм яңы революцион күтәрелеш йылдарында башҡорт поэзияһы Көнсығыш классик әҙәбиәтенең традицияларына тәрәнерәк үтеп инә. Шул уҡ ваҡытта был осорҙа Көнсығыш традициялары поэзияла сағыштырмаса өҫтөнлөк алып килеүенән туҡтаны. Татар поэзияһы менән бергә интенсив рәүештә прогрессив рус поэзияһының ыңғай йоғонтоһон кисерә башланы.

Мәғрифәтселек осоронда Башҡортостан шағирҙары И.А.Крылов мәҫәлдәренән өлгө алһалар, уны тәржемә итһәләр, реакция һәм яңы революцион күтәрелеш йылдарында бөйөк рус шағиры А.С.Пушкин, М.Ю.Лермонтовтарҙың ижадын өйрәнеү, Я.Юмаев, Ғ.Иҫәнбирҙин, Д.Юлтыйҙарҙы һүрәтләү сараларының Көнсығыштан килгән традицион ҡанундарынан арындыра барып, яңысараҡ образлы фекер йөрөтөүгә алып килде. Ғафури ижадында халыҡсан демократик эстетиканың өҫтөнлөк алыуы, Иҫәнбирҙиндең тәбиғәт лирикаһындағы образлылыҡ, Юмаев шиғырҙарында геройҙың рухи донъяһына психологик анализдың тәрәнәйеүе, Юлтый романтик геройының демократизмы, — бөтәһе лә иң

элек рус классик поэзияһының конкрет йоғонтоһо хаҡында һөйләй.

Реакция һәм яңы революцион күтәрелеш йылдарында әҙәбиәткә килгән башҡорт шағирҙарының ижадына татар халҡының бөйөк шағиры Ғабдулла Туҡай поэтик мәктәбенең йоғонтоһо айырата ҙур булды. Бигерәк тә Д.Юлтый менән Я.Юмаев шағир булып өлгөрә барған һайын, Туҡай ижадының гуманистик асылына тәрәнерәк үтеп инәләр. Уларҙың романтик геройҙарының активлашыуы, заман ағышы менән бергә, Туҡай ижадындағы көслө яҡтарға, уның баш эйməç актив геройына ла бәйле. Ғафури ижадында тәнҡитле реализм йүнәлешенең көсәйеүендә, яңы революцион күтәрелеш осоронда лирикаһының эмоциональ яҡтан байығыуында һәм башҡа ҡайһы бер мәсьәләләрҙә шулай уҡ Туҡай поэзияһының һиҙелерлек йоғонтоһо бар.

Ҡайһы бер тәнҡитселәр, башҡорт шағирҙары рус поэзияһына ла, хатта халыҡтың ауыҙ-тел ижадына ла башлап Туҡай өлгөһөндә мөрәжәғәт иттеләр тигән фекерҙе үткәрәләр. Эйе, Туҡай был традицияларҙы бик уңышлы файҙаланды. Ләкин был процесты бөтөнләйе менән Туҡайға ҡайтарып ҡалдырыу тарихи ысынбарлыҡ менән тап килеп бөтмәй. Сөнки башҡорт фольклоры традицияларына мөрәжәғәт итеү Аҡмулланан уҡ башланһа, рус классик поэзияһына тәү башлап М.Өмөтбаев мөрәжәғәт итә. Шулай уҡ прогрессив рус культураһына йүнәлеш тотоу һәм халыҡтың ауыҙ-тел поэзияһын өйрәнеү — милли үҙаң үҫешенең яңы баҫҡысына күтәрелеү һәм заман талаптары менән тығыҙ бәйле булған культура үҫешендәге тарихи бер күренеш ине. Был йәһәттән Туҡайҙың үҙ ижады ла ошо тарихи осорҙоң бер күренеше булып килеп тыуғанлығын оноторға ярамай.

Реакция һәм яңы революцион күтәрелеш йылдарында башҡорт шағирҙарының ҡайһы берҙәре шулай уҡ татар поэзияһының үҙенсәлекле бер оҫтаһы Дәрдмәнд ижадының да йоғонтоһон кисерәләр. С.Яҡшығолов, Я.Юмаев, Ғ.Иҫәнбирҙиндәргә Дәрдмәнд поэзияһының идея йоғонтоһо ла күҙгә ташлана. Был шағирҙарҙың милләт яҙмышы тураһындағы айырым шиғырҙары, мәҫәлән, Дәрдмәндтең атаҡлы «Карап» шиғырына бик яҡын торалар.

Татар әҙәбиәте тарихсылары Дәрдмәнд шиғырындағы Карап образында милли буржуазияны ғына кәүҙәләндерә тип, синфи рамка менән сикләү яғында торалар ине. Ибраһим Нуруллин «ХХ йөҙ башы татар әдәбияты» тигән китабында был ҡараштарҙы кире ҡаға һәм Дәрдмәнд Карап образында дөйөм милләт яҙмышы мәсьәләләрен күтәргән тигән фекерҙе әйтә. «Карап» шиғырында Дәрдмәнд татар милләтенең һәм уның «ҡаймағы» булған либераль буржуазияның тормош диңгеҙендә елкән киреп йөҙә алмағанлығына, дәрәжәһенә лайыҡ мәртәбәгә күтәрелә алмағанлығына әсенә»[154], — ти ул.

Бының шулайлығын шағирҙың замандаштары ла яҡшы белгәндәр булһа кәрәк. Я.Юмаев, мәҫәлән, «Дәрдмәндтең «Карап» шиғырына ғиләүә» (1913) шиғырында бына нәмә ти:

Туҡтаған ул, тик торадыр
Бер урында әлсерәп,
Чит-читендән ят караплар
Киткәлиләр мәл сорап[155].

Дәрдмәнд башҡорт тупрағында тыуып-үҫкән һәм ғүмер буйы башҡорттар араһында йәшәгән. Шиғырҙарынан яҡшы күренеүенсә, ул башҡорт халҡының бай ауыҙ-тел ижадын, йәнле һөйләү телен яҡшы белгән. Ул башҡорт еренең алтынын ғына йыйып ятмаған, халыҡтың бай ауыҙ-тел ижадының гәүһәрҙәрен дә үҙ күңеленә йәштән һеңдерә килгән. Ә инде Көнсығыш классикаһын, рус поэзияһын һәйбәт белеү уға башҡорт халҡының фольклор традицияларын файҙаланыуға бер ҙә ҡамасауламаған, киреһенсә, был уның ижадын сафландырып, яңыртып ҡына ебәргән.

Башҡорт халҡы араһында йәшәү, уның үҙенә күрә яҙылмаған ҡанундарына әүерелгән традициялары, ауыҙтел поэзияһы, музыкаль фольклоры тәьҫирендә тәрбиәләнеү шағирҙың характерында ла сағылмай ҡалмаған. Был йоғонто Дәрдмәндте, үҙе лә һиҙмәҫтән, «башҡортлаштыра» барған. Шуға ла уның ижады башҡорт уҡыу-

---

[154] Ибраһим Нуруллин. ХХ йөҙ башы татар әдәбияты. — Казан, 1966, 67-нсе бит.

[155] Җамалетдин Юмаев. Әдәби шигырьләр, 8-нсе бит.

сыһына бик аңлайышлы. Башҡорт милли колориты, мәҫәлән, Дәрдмәнд ижадында шул осорҙағы ҡайһы бер башҡорт шағирҙарынан күпкә юғары тора тип әйтерлек.

Дәрдмәнд, шиғыр оҫтаһы булараҡ, халыҡ ижадын файҙаланыуҙың ябай стилизация юлын һайламаған, уның ижадында иң элек халыҡ поэзияһының эске рухы сағылған. Был — тәбиғәткә, тыуған илгә мөхәббәт тойғоһо менән һуғарылған шиғырҙарында айырымасыҡ күренә. Дәрдмәндтәге тыуған ергә бәйлелек иң элек башҡорт халыҡ ижадынан килә тиһәк хата булмаҫ. Шуға ла бындай шиғырҙарында ул саф башҡорт лексикаһын бик иркен ҡуллана, башҡорт халыҡ поэзияһындағы традицион образдар, ҡобайыр алымдары менән иркен эш итә. Ул бигерәк тә башҡорт халыҡ поэзияһындағы толпар, шоңҡар, ҡурай кеүек образдарҙы һәм «айбарланып», «ажарланып», «монарланып», «ҡомарланып» кеүек башҡорт теленең специфик һүҙҙәрен яратып ҡулланған.

Бынһы үҙ сиратында әҙәби бәйләнештәрҙең икенсе бер мөһим яғы — татар әҙәбиәтенең үҫешенә традицияларға бай булған классик башҡорт халыҡ ижадының һиҙелерлек йоғонтоһо хаҡында һөйләй.

Шулай итеп, был осор башҡорт поэзияһы өр-яңы сифаттар менән байыҡты. Уның йылдам үҫешенә татар һәм рус әҙәбиәте ыңғай йоғонто яһаны.

Мифтахетдин Аҡмулла менән Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтан башланған поэтик традицияларҙы С.Яҡшығолов, Д.Юлтый, Ф.Туйкин, Ғ.Иҫәнбирҙиндәр артабан дауам иттеләр. Был осор поэзияһында алғы планға шәхестең рухи донъяһы ҡуйылһа ла, шағирҙар башҡорт халҡының ысынбарлығын сағылдырҙылар, тәү ҡарамаҡҡа үтә шәхси булып күренгән шиғырҙарында ла донъяға башҡорт вәкиле булып ҡарап ижад иттеләр. Поэзияның күренекле эшмәкәрҙәренең үҙ әҫәрҙәрен «Башҡорт хәлдәре», «Башҡорт халҡына хитап», «Башҡортҡа», «Башҡорт ҡыҙына», «Башҡорт моңо», «Башҡорт ҡатыны» кеүек исемдәр менән атауҙары — пантюркистарға һәм татар буржуаз милләтселәренә ҡаршы үҙенә бер реакция ла булып тора ине һәм был шулай уҡ татар телендә үҫеш алған башҡорт әҙәбиәтен айырып күрһәтергә, уны нигеҙләргә ынтылыштарҙан килә ине.

Был осор башҡорт шағирҙары үҙ халҡының бай ауыҙ-тел ижадына йышыраҡ мөрәжәғәт иттеләр. Фольклор традицияларына нигеҙләнеп яҙма поэзияла йыр жанры формалашты. Халыҡ поэзияһын ижади файҙаланыу — бер яҡтан, әҙәбиәтте халыҡсанлаштырыуҙа ҙур роль уйнаһа, икенсе яҡтан, был милли колоритты, милли ерлекте көсәйтеүгә хеҙмәт итте.

## Һынау һәм көрәш йылдары поэзияһы

XX быуат башында империализмдың эске һәм тышҡы ҡаршылыҡтары тамам киҫкен характер алды, һәм был ҡаршылыҡтар империалистик державаларҙы ҡотолғоһоҙ бәрелешкә алып килде. 1914 йылдың йәйендә Беренсе донъя һуғышы башланып китте. В.И.Ленин «Социализм һәм һуғыш» тигән хеҙмәтендә был һуғышты талау һәм баҫып алыу һуғышы, ғәҙел булмаған һуғыш тип билдәләне, уны граждандар һуғышына әүерелдерергә саҡырҙы. Ул Россияның һуғышта тотҡан политикаһын түбәндәгесә баһаланы:

«Хәҙерге көндә Россияла ике великоросҡа икенән өскә» тиклем хоҡуҡһыҙ «инородец» («ят бауыр») тура килә, һуғыш менән царизм Россия тарафынан иҙелеүсе милләттәрҙең һанын тағы ла арттырырға, уларҙы иҙеү юлын уңайлаштырырға һәм шуның менән великоростарҙың үҙҙәренең дә азатлыҡ өсөн көрәшен быуырға ниәтләнә. Сит халыҡтарҙы иҙеү һәм талау мөмкинлеге экономик торғонлоҡто нығыта, сөнки эшләп сығарыу көстәрен үҫтереү урынына йыш ҡына доход сығанағы булып «ят бауырҙарҙы» ярым феодаль иҙеү тора. Шулай итеп, Россия яғынан һуғыш төптө реакционлығы һәм азатлыҡҡа ҡаршы характерҙа булыуы менән айырылып тора»[156].

В.И.Ленин билдәләп үткән бына ошо хоҡуҡһыҙ «ят бауырҙарҙың» береһе булған башҡорт халҡына ла беренсе донъя һуғышы яңы юғалтыуҙар, аслыҡ-яланғаслыҡ, бөлгөнлөктән башҡа бер ни ҙә килтермәҫе алдан билдәле ине. Шуға уны яҡлаусы булманы. Тик рухани-

---

[156] В.И.Ленин. Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы. 26-сы том, 318-се бит.

ҙар һәм милли буржуазияның хөкүмәт привилигиялары менән файҙаланған бер өлөшө был һуғышты яҡлап сығыш яһанылар, уны «Ватан һуғышы» тип аңлатырға тырыштылар. «Беҙҙәр, — тип яҙҙы, мәҫәлән, «Ваҡыт» газетаһы, — был һуғышҡа Россияның «үҙ истиҡбалын[157] ҡайғыртыуы» тип ҡарайбыҙ, уның халҡы булғанлыҡтан, унһыҙ ҡалыу мөмкин түгел икәнлеген раҫлайбыҙ»[158].

Артабан да «Ваҡыт» һәм «Тормыш» газеталары ошондай «патриотик» сығыштарға урын бирә килделәр. Татар һәм башҡорт һалдаттарының һуғыштағы ҡаһарманлыҡтары тураһында мәҡәләләр яҙҙылар, һалдаттарҙың рухын күтәреү маҡсатынан сығып, фронт менән тыл араһындағы бәйләнештәрҙең рәсми органы булырға дәғүә иттеләр. Татар-башҡорт буржуазияһы һәм руханиҙары ҡан ҡойғос һуғышты яҡлап, хеҙмәтсәндәрҙең социаль һәм милли мәнфәғәттәренә хыянат иттеләр һәм, рус ҡарагруһсы шовинистары менән союзға инеп, синфи азатлыҡ хәрәкәтенә ҡаршы сыҡтылар.

Батшаға тоғролоҡ һәм империалистик һуғышты «Ватан һуғышы» тип күтәреүсе «ура патриотизм» был осор башҡорт һәм татар поэзияһында ла сағылмай ҡалманы.

Һуғыш башланған йылда уҡ, мәҫәлән, М.Ғәбделмәнов тигән берәү Өфөлә «Сугыш жырлары» тигән йыйынтыҡ баҫтырып сығара. Йыйынтыҡ немец һалдаттарының ҡурҡаҡлығы, үҙҙәренең батырлығы тураһында шапырыныуҙар менән тулы «Ғәскәр оҙатҡанда» тигән тәүге бүлегендә автор:

Халыҡ ҡузғалды бердәм башҡалардан илне саҡларға,
Ҡоралланды казаклар да менеп яхшы атларға,
Китәләр төрлө ғәскәрләр ачыҡлыҡ берлә, сер бирми,
Китәләр саҡлар өчен һәммәсе былар туған ерне[159], —

тип был һуғышҡа «Ватанды һаҡлау» һуғышы төҫөн бирмәксе булһа, «Солдат хатлары» тигән бүлегендә үҙҙәренең батырлыҡтары менән маҡтанғандан һуң:

---

[157] Истиҡбал — киләсәк.
[158] Ваҡыт, 1914, 23 июль.
[159] М.Габделмәнов. Сугыш жырлары. — Уфа, 1914, 3-нсе бит.

Немецләрнең йортлары күбесенчә таш була,
Алар китә, ере ҡала, безнең халыҡ баш була, —

тип һуғыштың төп маҡсатын әйтеп биреүҙән дә тартынмай, немецтарҙың ер-һыуына, төҙөк ауылдарына һәм ҡалаларына ҡыҙыға. «Кан түгүче мимеч бәйете» (1915), «Сугыш хәтирәсе» (1916), «Аурупа сугыш хәлләре бәйете» (1914, 1917) кеүек китаптарҙың да йөкмәткеһе ошо «Сугыш җырларынан» артыҡ айырылмай. Был бәйеттәрҙең бигерәк тә тәүге өлөштәре:

Без суғышҡа китәмез, күп шәһәргә етәмез,
Бер солдатҡа ун мимечен дөнъядан юҡ итәмез.

Йәки:

Мимечләрнең ҡалалары кирпеч түгел, таш ҡына,
Дошманны һәләк итәргә йәш йөрәгем ашҡына[160], —

кеүек «ура патриотик» юлдар менән тулы.

Был осорҙа, ғөмүмән, һалдаттар араһында мәҙрәсәнән фронтҡа китеүсе шәкерттәр һәм хәлфәләр тарафынан ижад ителгән бәйеттәр киң таралған була. Ләкин уларҙың күпселеге йорт-еренән, туғандарынан айырылып фронтҡа китергә мәжбүр булған һалдат массаларының пацифистик настроениеларын, һуғышҡа ҡаршы асыу һәм нәфрәтен сағылдырған. Матбуғатта теге йәки был автор исеме менән баҫылып сыҡҡан бәйеттәрҙең дә нигеҙендә, ғәҙәттә, ана шул пацифистик ҡараш ята. Сәйфи Ҡудаштың «Аҡ билеттар бәйете»[161] лә формаһы яғынан ошо бәйеттәр традицияһында тыуған, ләкин ул йөкмәткеһе менән «ура патриотизм» менән һуғарылған бәйеттәргә принципиаль ҡаршы йүнәлештә. Шағир аҡ билетлыларҙың настроениеларын ғына сағылдырып ҡалмай, һуғыштың империалистик асылын фаш итергә ынтылыш яһай:

Ҡатнаша һәр кем моңа нәфсе беләген сызганып,
Дөнъясын пыр туздырып, ер алам дип эзләнеп;
Россия шапра оялмый, Истамбул дип безнеке,

---

[160] Моталлип. Кан түгүче мимеч бәйете. — Казан, 1915, 4—7-нсе битләр.

[161] Сәйфи Ҡудаш. Ак билетлар бәете. — Уфа, 1917.

Дарданилме... Ә Сыныҡ ҡәлғә... алармы — безнеке.
Инглиз күпреп тағы ҡайрай тешен һәм тырнағын,
Ырҗайтып йотмаҡ була барсын, бөтә Африканың.

Һуғышҡа ҡарата мөнәсәбәт профессиональ поэзияла бәйеттәрҙән ныҡлы айырылып торҙо. Шағирҙарҙың ижадында Ф.Сөләймәновтың «Батыр» шиғырынан башҡа, һуғышҡа ҡарата ыңғай мөнәсәбәтте осратмайбыҙ тиерлек. Ф.Сөләймәновтың был шиғыры тәү ҡарауға, ғөмүмән, батырлыҡты данлай кеүек:

Батыр егет килә ат өстендә, аты уйнай ауызын тартҡанда,
Булат сауыт кейгән, сөнгө тотҡан, ташны яра уҡлар атҡанда,
Аҡ очҡынлар оча ат ауызындан, ташлар сына аяҡ астында...
Алға чаба батыр. Нигә ашҡына? Ни ишеткән батыр, ни күргән?
Намусы бар егет нигә ятсын, — ил чигенә бүген яу килгән[162].

Күренеүенсә, бында «патриотизм» бәйеттәрҙәге һымаҡ яланғас түгел. Автор, халыҡ йыры традицияларын файҙаланып, батырлыҡ тураһында матур ғына шиғыр тыуҙырған. Ләкин тарихи килгәндә, был шиғыр шул осор буржуаз матбуғатта пропагандаланған «патриотизмға» барып тоташҡанлығы күренеп тора.

Ф.Сөләймәновтың да артабанғы ижады был йүнәлештә барманы, шулай уҡ демократик йүнәлеш алып та китмәне, унда төшөнкөлөк тәрәнәйә барҙы, һәм ижады ҡырҡа реакцион төҫ алды.

«Мин үлгәс» тигән шиғырында ер тормошона бөтөнләйе менән ҡулын һелтәп:

Килер бу көн... үләр бу тән... китәрмен,
Мөҡәддәс күкләремдә сир итәрмен...[163]
Ҡара «таплы, гөнаһлы, шомлы ергә
Ҡарап күкдән, рәхәтләнеп көләрмен.
Көләрмен, яңғырар шунда ғәрше күк,
Көтелгән бәхетемә шунда җитәрмен[164], —

ти. Шулай ҙа ер тормошона һәм унда ҡалған кешеләргә бөтөнләй мөнәсәбәтһеҙ булырға теләмәй: шиғырҙың аҙағынан күренеүенсә, ул, үлгәс, кешеләрҙе ерҙә йәшәгәнлектәре өсөн мыҫҡыл итмәксе. Унда ер тормо-

---

[162] Шура, 1915, №19.
[163] Сир итәрмен — күңел асырмын.
[164] Шура, 1916, №18.

шона яуыз ирония яңғырай. Кешелә тормошҡа ҡарата пассивлыҡ тәрбиәләүсе реакцион ҡараштарын ул артабан да эҙмә-эҙлекле яҡлай. Бер исемһеҙ шиғырында ул:

Сизәмен: мин килмешәкмен — ер түгел илем минем,
Шул мөҡәддәс күк минем ил, ашҡынам шунда таба[165], —

тип үлемде көтөп алынған ҙур тантана юғарылығына күтәрә. Үлем уның өсөн кешенең юҡҡа сығыуы түгел, ә фани донъянан баҡыйға, ваҡытлынан мәңгелеккә күсеү генә. Тамыры дини уйҙырмаларға барып тоташҡан был реакцион ҡараштарҙың мәғәнәһе асыҡ: кеше донъялыҡҡа ҡыҙыҡмаҫҡа, үҙенең йәшәү шарттарын үҙгәртеү өсөн көрәшмәҫкә, яҙмышҡа буйһоноп, үҙен «теге» донъя өсөн генә әҙерләргә тейеш...

Поэзияға Я.Юмаев, Ғ.Иҫәнбирҙин, Ш.Бабичтарҙан һуңыраҡ килгән, тәүге шиғырҙары ваҡытлы матбуғат биттәрендә 1914 йылда күренгеләй башлаған **Бәхтиәр Мирзановтың** да һуғыш осорондағы лирикаһы әлеге юҫыҡҡа яҡын торҙо.

Уның тәүге шиғырҙарында уҡ беҙ күңеле китек, донъя тарафынан ҡыйырһытылған лирик герой менән осрашабыҙ. Ул әле донъянан бөтөнләй ваз кисмәгән кисеүен. «Күңел йыуатыу» тигән шиғырында, мәҫәлән, үҙ күңелен үҙе йыуатып булһа ла, киләсәккә ышаныс менән ҡарарға тырыша:

Төрле золмәт һәм дә вәхшәтдән буялған ер йөзе
Сафланыр, хаҡ шишмәсендән рахмани[166] бер нур яуар.
Ҡап-ҡара тап берлә керләнгән әдәм күңелләре
Әрчелер, хөсед белән тулған йөрәкдән ҡан ағар[167].

Ләкин бында ла лирик герой үҙе пассив, шуға ла киләсәк яҡты көндө алла ҡөҙрәтенә бәйләүҙән, унан көтөүҙән уҙып китә алмай. Шуға ла, империалистик һуғыш башланып китеү менән, уның был тотороҡһоҙ хыялдары, томан кеүек таралып, юҡҡа сыға. «Күмелгән теләк» тигән шиғырында ул:

---

[165] Шура, 1916, №20.
[166] Рахмани — изге, алла тарафынан булған.
[167] Шура, 1914, № 7.

Күмелде пак күңелдән аҡ теләкләр мәңге килмәскә,
Фәләҡ[168] йөз сытды, ғәһед итде[169] ҡулын, аҡ ҡулын бирмәскә.
Өмед яҡты тип алда, сыныҡ күңелем юандырдым,
Юандырдым да туздем эчдә тулған чиргә-ғәләткә[170],
Ничек шәм ҡалтырый бәғзе, сүндерер җил өрер-өрмәс,
Шуның төсле көтәм аҡтыҡ минут мин дә сүнер-сүнмәс, —

тип үҙен ғазаплаусы тормоштан һыҡрана. Шулай ҙа Б.Мирзановтың романтик геройы Ф.Сөләймәнов геройы кеүек яуыз түгел, һәм ул, үлгәс, күктән ергә ҡарап, «рәхәтләнеп көлөргә» һәм шуның менән кешеләрҙең «иҫтәрен китерергә» йыйынмай, киреһенсә:

Уйымның көйдереп гөл-чәчкәсен, сүнгән зәғиф күкрәк,
Черерсең, тик торыр дөнъя йөзендә аһларың күкрәп ! —

тип был донъяға үпкә белдермәксе. Ләкин шунда уҡ:

Китәм шунда: ғүмерлек ҡайда тәхетем — мәңгелек бәхетем,
Рәхәт — мескен!.. Тыныч — мескен!. телим күбдән —
көтә ләхетем[171], —

ти. Үлемгә «мәңгелек бәхет» итеп ҡарай.

Донъянан биҙеп, үлемде һағыныу мотивтары уның «Әсәйем ҡәбере янында» (1916), «Тәләф йылдар» (1916), «Тотҡон былбылым» (1916) шиғырҙарында тағы ла тәрәнәйә һәм көсәйә барғанлығы күренә.

Кирәкми йәм, матурлыҡ, чәчәк-гөлләр,
Фани йәмгә бизәнгән язғы көнләр!
Илаһи... Шул тынычлыҡ, тәм эчендә
Юғалсам... йоҡласам... миллионча төнләр!..[172]

«Тәләф йылдар» шиғырында «теге» донъя тураһында ана шундай татлы хыялдарға сумып, был донъяның реаль матурлыҡтарын да кире ҡаҡһа, «Тотҡон былбылым» шиғырында үҙен «был ҡәһәрле донъяның тотҡон былбылы» итеп хис итә һәм тәңренән үтенеп-үтенеп үлем теләй: «тотҡон былбылын» донъянан азат итеп, ожмах баҡсаларының иректе йырсыһы итергә хыяллана:

[168] Фәләҡ — яҙмыш.
[169] Ғәһед итте — ант итте.
[170] Ғәләт — хата, гонаһ.
[171] Аң, 1915, № 20.
[172] Сөйембикә, 1916, № 12.

Алчы, тәңрем, бу ҡәһәрле дөнъядан дүндерче бер,
Шунда тибрән, былбылым, син, әйдә бер чыҡ иркеңә.
Уйна сазың соҡланып инде тәбиғәт күркенә,
Әйдә шатлан, көлче бер, түк дә мөҡәддәс хисләрең,
Алчы иркең солтаны булған көнеңдән үчләрең![173]

Ләкин Б.Мирзановтың был осорҙағы ижады бөтөнләйе менән реакцион характерҙа булманы. Ул «Ен туйы», «Инҡилап», «Илсе» тигән романтик поэмаларында һәм айырым шиғырҙарында, ҡайһы бер ҡаршылыҡлы урындары булыуына ҡарамаҫтан, дөйөм гуманистик идеяларҙы күтәреп сыҡты.

«Ен туйы»[174] — әкиәт-поэма. Ләкин автор әкиәт сюжетын шиғырлаштырыуҙы ғына маҡсат итеп ҡуймаған. Әкиәт донъяһын ысынбарлыҡҡа ҡаршы ҡуйыу, әкиәт менән реаль тормош араһындағы параллелизм, ваҡыт-ваҡыт реаль тормош — әкиәт, әкиәт реаль тормош характерын алып китеүе әҫәрҙе традицион әкиәттәрҙән айырып тора.

Поэма-әкиәт авторҙың атаһы ауыҙынан һөйләнелә. Был донъяның әсеһен-сөсөһөн татыған ҡарт, әкиәтенең ышандырыу көсөн ҡеүәтләү өсөн, үҙе лә уның геройы булып ендәр араһында хәрәкәт итә, әҫәрҙең төп геройы булып сығыш яһай. Ҡышҡы буранда аты-ние менән аҙашып йөрөгәндә барып юлыға ул ендәр донъяһына:

Тәңрегә күз йәш түгеп торған чаҡда таң ҡалып,
Килде дә җенләр ҡулымдан туздырып китте алып.
..........................................................................................
Тау итәгендән күренде ҡап-ҡара бер тишек,
Уйладым: бу, билгеле, җен халҡына махсус ишек.

Шул рәүешле автор ваҡиғаларҙы реаль тормоштан туранан-тура тау тишегендәге «ендәр донъяһына» күсерә.

Җен дигәч дә җен үзенчә нәҡ безнең инсан кебек,
Шул ваҡыт җенләр мине итде ҡәдер, итде ҡунаҡ,
Җен түрендә ултырдым, мендәр ҡуйып, арҡа биреп,
Төндә миллионлап йотучы бай кебек, ҡорсаҡ киреп!
Килде алға күп эчемлек, әллә мең төрле тәғәм,
Эй ашыйм ҡорсаҡ киреп, зәм-зәм кебек шәрбәт ҡағам!

---

[173] Шунда уҡ, № 15.
[174] Аң, 1915, № 14.

Җен-пәриләр геү киләләр бик хозур мәҗлес ясап,
Җен ҡызы берлән утырдым бер ҡашыҡдан аш ашап.

Бына бер ваҡыт был әҙәм заты, ендәр донъяһына хайран ҡалып, емеш баҡсаларында йөрөп, төрлө-төрлө тәмле емештәренән ауыҙ итеп, һарайға әйләнеп ҡайта. Әйләнеп ҡайтһа, ни күҙе менән күрһен: һарайҙың бер йәме лә ҡалмаған, ендәрҙе ҙур ҡайғы баҫҡан. Бая ғына бының менән бер ҡашыҡтан аш ашап ултырған ен ҡыҙы үлем түшәгендә ята. Ендәр, ни эшләргә белмәй, ҡатып ҡалғандар. Бына үҙ-ара ниҙер кәңәшләшеп алғандан һуң, былар зыҡ ҡубып ҡыҙҙы ҡайҙалыр алып китәләр. Һәм оҙаҡ та үтмәй, уны үҙҙәренең бер әбейенән өшкөртөп, һауыҡтырып алып ҡайталар. Баҡһаң, ендәргә әҙәм менән бер ҡашыҡтан ашарға ярамай икән. Шуға хәҙер ендәр был әҙәмдән, теләгән нәмәһен биреп булһа ла, ҡотолоу яғын ҡарай башлайҙар. Һәм бер ҡапсыҡ алтын биреп, оҙатып ҡуялар. Артабан ваҡиғалар тағы ла реаль тормош фонында бара. Был әҙәм ҡайтҡас, күп тә үтмәй, атаһы менән әсәһе үлеп китә.

Инде ялғыз башыма ҡалды чанасы, арбасы,
Аты, сыйыры, дөнъясы, ҡапчыҡ тулы «җен хазинасы».
Уйлыймын дөнъя көтәргә, сызғанып һәм өйләнеп,
Бер матур берлән ғөмерлек яр булырға көйләнеп,
Мин шулай җен казнасындан егерме тәңкәгә
Туй ҡылып, сарыф итдем, бирдем бүләкләр әңкәңә.
Күп ваҡыт үтде ғөмерләр әңкәң белән сөйешеп-көлеп,
Дөнъяда тордыҡ шатлыҡ-ғәмен бергә бүлеп, —

ти, әкиәтсе. Һәм үҙенең «ен ҡаҙнаһы» менән болланып, балға-майға ғарыҡ булып, иркен сахраларҙа ғүмер итеүен бәян итә. Ләкин уның был бәхетле тормошо ла асылда әкиәттең үҙенсәлекле дауамы икәнлеге аңлашыла. Әкиәтсе быны үҙе лә бик оҫта итеп әйтеп бирә:

Иң сөйеп менгән атым булды минем ялғыз ҡара ат,
Бер ваҡыт шул ҡара ат ауырып китеп, үлде шашып;
Бер ҡәһәр суҡҡан күчер сүткән икән ялын тарап.
Шул ҡара ат үлгәндән — ялын суткәндән бирле,
Китде байлыҡ су кебек, һәр көн сайын эшләр кире.

Йәнәһе, аттың сейәләнгән ялын һүтергә ярамай, юҡһа ат эйәһе ҡаса, һәм хужаға бөлгөнлөк килә, донъяның ҡото китә.

Әкиәт-поэма, традицион стилдә башланып киткән кеүек, бик оҫта тамамлана ла:

Җә, етәр, үткән тарих бетмәс, өзелмәс төн буйы,
Исдә ҡалған шул ғына: күргәндәремдән җен туйы.
Сыйлады җенләр ҡәдер итеп, ҡунаҡ, мәҗлес ясап,
Җен ҡызы берлән ултырдым бер ҡашыҡтан аш ашап.
Җен туйында җырладым, җенләр белә эчә-эчә,
Җен туйына бардым бөгөн, әйләнеп ҡайттым кичә.

Бында ярлылыҡ менән ғүмере үтеп киткән һәм бәхетле тормош хыялда ғына тороп ҡалған кешенең ысынбарлыҡҡа ҡарата иронияһы ла һиҙелеп ҡала. Әкиәтсенең үҙ тормошон да әкиәт фонында һөйләүе менән «бәхет ул әкиәттә генә булыуы мөмкин» тигән фекер үткәрелә.

Шулай уҡ был әкиәт-поэмала ендәр донъяһын һүрәтләү ыңғайында шағир үҙ заманы ысынбарлығына киҫкен протест белдерә, ундағы ғәҙелһеҙлекте, ике йөҙлөлөктө һәм түбәнлектәрҙе фаш итә.

Монда иркен, азатлыҡ, юҡ күңелләр тарсыныу,
Тарсыныу юҡ, һич ваҡыт ялған ҡанунға буйсыныу.
Монда юҡ, бер тиен өчен юҡ ҡан эчү, нисан талау,
Бай янында ач хәрифләр[175] юҡ, тағын ҡорсаҡ ялау.
Бездәге төсле хәсис[176], пычраҡ, ҡаралған җан белән
Йөрмиләр, җенләр торалар пак намус выҗдан белән.

Әҫәрҙең иң көслө яғы ла тап бына ошонда, уның ялған ҡанундарға, бер тин өсөн ҡан ҡойоусы, әҙәм талаусыларға ҡаршы сығып, азатлыҡ һәм социаль тигеҙлек мәсьәләләрен күтәреп сығыуында.

Бәхтиәр Мирзановтың «Инҡилап»[177] тигән поэмаһында шул заман өсөн мөһим мәсьәләләрҙең береһе булған ҡатын-ҡыҙ азатлығы мәсьәләһе ҡуҙғатыла.

Поэманың сюжеты «Заятүләк менән Һыуһылыу» тигән халыҡ эпосын хәтерләтә биреп ҡуя. Ваҡиғалар

---

[175] Хәриф — түбән, ҡәҙерһеҙ.
[176] Хәсис — әшәке.
[177] Аң, 1916, № 6—7.

күл төбөндә бара. Әммә шағир уларҙы «теге» донъя, хур ҡыҙҙары, үлектәр донъяһы итеп һүрәтләй.

Поэманың лирик геройы ҡаты ямғырлы көндәрҙең береһендә аҙашып китә лә бер күл янына барып сыға. Бына бер ваҡыт күл аҫтынан, аҡҡоштар кеүек теҙелешеп, береһенән береһе һылыу һыуһылыуҙар йөҙөп килеп сығалар һәм егетте үҙҙәре менән күл төбөнә алып төшөп китәләр. Баҡһаң, был күл төбө булмай, «теге» донъя булып сыға. Ҡатын-ҡыҙ бында йәннәттең үҙендә йәшәй. Йәндәре ни теләй, шул бар. Ләкин, ни өсөндөр, бер ваҡыт улар зыҡ ҡубып бәхәсләшә, илашаһыҡташа башлайҙар:

> Аһ, диләр, ул дөнъяда безнең җенескә ерме юҡ,
> Әллә мескен хәлен күргән хаялы ирме юҡ:
> Ник былай һәр көн сайын, ник без һаман артамыз?
> Ни белән үз җинесемезне монда — безгә тартамыз?
> Чик бирик бу эшкә, һәр кем эзләсен, тапсын чара,
> Күпдән онытылған җәрәхәтне ни өчен яңартамыз?

Артабан һәр береһе уртаға сығып донъялыҡта күргән йәбер-золомдарын һөйләй башлай... Ниһайәт, улар, үҙҙәре араһынан «башлыҡ» һайлап, донъялыҡтағы золомға ҡаршы «инҡилап» яһамаҡсы булалар. Ләкин, бына-бына улар ер өҫтөнә күтәрелеп сыға ғына тип торғанда, ҡайҙандыр иһаһайлап, күҙ яуын алырлыҡ алтын-көмөшкә төрөнгән ҡыҙ һүрәтендәге шайтан килеп сыға һәм... ҡатын-ҡыҙҙарҙың бөтәһен дә таң ҡалдыра. Улар, «инҡилап» тураһында бөтөнләй онотоп, шайтанға ҡыҙығып шаҡ ҡаталар... Шул рәүешле автор поэмаһының сиселеше менән үҙ-үҙенә ҡаршы сыға һәм ҡатын-ҡыҙҙың хоҡуҡһыҙлығы уларҙың тәбиғәтенән килә, сөнки улар юҡ-барға тиҙ ышаныусан, уларҙы шайтан аҙҙыра тигән дини реакцион ҡараштарҙан аша атлап сыға алмай.

Был осор башҡорт һәм татар шағирҙары үҙҙәренең романтик поэмаларында сюжет итеп күп осраҡта фольклор материалдарын һәм дини легендаларҙы файҙаландылар.

Нигеҙендә дини легендалар ятҡан поэмаларҙың күбеһендә тип әйтерлек үҙәк образ булып пәйғәмбәрҙәр образы торғанлығы күренә. Татар шағиры Ғ.Сөнәғәтиҙең «Хызыр» (1915), М.Ғафуриҙың «Рисаләт», «Мөхәм-

мәт салаллаһи ғаләйһи вәссәләм» (1917) поэмалары ана шундайҙар ине[178].

Б.Мирзановтың 1916 йылда «Аң» журналының 7-се һанында баҫылған «Илсе» поэмаһы ла бына ошо төркөмгә ҡарай. Ләкин Мирзанов, Ғ.Сөнәғәти менән М.Ғафури кеүек, поэмаһына герой итеп ғәҙеллек һәм тигеҙлек идеяларын алға һөрөүсе идеаль герой юғарылығына күтәрелгән Хызыр йәки Мөхәммәтте һайламай, ә пәйғәмбәрлек бурысын «үҙ өҫтөнә» алырға баҙнат ҡыла. Поэмала дини легендаларға хас серле шарттарҙа күк йөҙө асылып китә, һәм ябраил фәрештә лирик геройға алланың бойороғон тапшыра:

Сина тәңрең вәхи, илһам ебәрде, син пәйғәмбәрсең!
Бозык, азғын адәмләрне тотарсың да җәберләрсең.
..............................................................................................
Мона үткен ҡылыч! Дошманларың теш ҡайраған чаҡда,
Башың кисмәк булып ҡайчан ҡәһәрмән сайлаган чаҡда,
Таян син бу ҡылычҡа, ул синең саҡчы, ярдәмчең,
Кәррә итмәс[179] дошманың ҡәһәре, түгелмәс ергә ҡан тамчы,
Җиһанның йыртҡычын, золымын изәрсең, ергә таптарсың,
Фәхеш, вәхшәт, нәҗесләргә буялған ерне аҡларсың.
Күрәсең, бәндәләрдә чиҡдән ашды ғәдә[180] дошманлыҡ,
Бозылған ҡанларын күкрәкләреңдән инде сафларсың.
Берәүләрнең тажы-тәхтенә, алтынларына ҡол булма,
Йәтим, меҫкен, зәғиф яҡлы бул, аларны яҡларсың.
Дөрес, күздән түгәрсең йәш, бик күп ауыр көнләр.
..............................................................................................
Ләкин тәңрең сиңа биргән йөрәк һәм мәғнәүи көч
Белән омтыл һаман алга, суғыш, зөлмәт белән тартыш,
Мөҡәддәс, ныҡ иманға, мәңге сүнмәс идеалға!
Ҡызу чүлләрдә, тар ердә, минут тормый батып тиргә,
Чәчәрсең берлек, иркенлек, мөхәббәт орлығын ергә.
Ғадәүәт, көнчеллек тамырын чабар, ҡорытыр, өзәрсең,
Суҡыр, күзсез адәмчекләрне бер җиргә тезәрсең,
Еткерерсең сәғәдәткә, бәхеткә, яҡты көнләргә.

Шунан һуң лирик герой, тәңренең изге әмеренә баш эйеп, «бәндәләр эсендә рәсүллек» бурысын йөк-

---

[178] Ҡарағыҙ: Хатип Ғосманов. Бөек Октябрь революциясе һәм гражданнар сугышы чорында татар поэзиясе. — Казан, 1960, 33—37-нсе биттәр.

[179] Кәррә итмәс — һөжүм итә алмаҫ.

[180] Ғәдә (үәт) — нәфрәт, күрә алмау.

ләп, япа-яңғыҙы тороп ҡала. Ләкин поэмала лирик герой артабан актив хәрәкәткә булдыҡһыҙ, уға алла тарафынан бирелгән «илһам» да, үткер «ҡылыс» та ярҙам итә алмай, ул ғәҙелһеҙлек һәм золом алдында көсһөҙ булып ҡала.

«Идеалдарҙың абсолют характерҙа булыуы һәм уларҙы хөкөм һөрөп ятҡан шарттарҙа тормошҡа ашырыу мөмкин түгел икәнлегенә төшөнөү, йәшәйештең бына ошо ҡапма-ҡаршылыҡтарын уғата тәрән кисереү, — тип яҙа А.М.Гурович, — минеңсә, романтизмды «күрше» әҙәби йүнәлештәрҙән айырыусы төп нәмә булып тора»[181].

Б.Мирзановтың «Инҡилап» һәм «Илсе» поэмалары А.М.Гуровичтың романтизмға биргән был билдәләүенә асыҡ миҫал булып тора. Тәүге әҫәрендә ул ҡатын-ҡыҙ азатлығы мәсьәләһен абсолют юғарылыҡҡа күтәреп тә, был мәсьәләне ыңғай хәл итеүҙең аныҡ юлдарын күрә алмайынса үҙ-үҙенә ҡаршы сығып, реакцион һығымтаға килһә, икенсе әҫәрендә бәндәләр араһында үҙен рәсүл итеп тойоусы лирик геройҙың изге ниәттәре еңеп сыға алмаҫлыҡ ҡаршылыҡтарға осрай, һәм ул яңғыҙлыҡта һыҙланып-һыҡыранып йәшәргә мәжбүр булыуҙан уҙып китә алмай. «Илселә» автор дөйөм гуманистик идеяларҙы алға һөрһә лә, уларға илаһи төҫ биреү, реаль ысынбарлыҡтан, реаль мөмкинлектәрҙән алыҫлаштырыуы һөҙөмтәһендә, реакцион романтизмға хас булған өмөтһөҙлөк һәм пассивлыҡтан ҡотолоп етә алмаған.

Шулай итеп, империалистик һуғыш осоронда башҡорт поэзияһында бәйеттәр формаһында таралып киткән «ура патриотик» әҫәрҙәр менән, Б.Мирзановтың поэмаларындағы ыңғай яҡтарҙы иҫәпкә алмағанда, лирикала пассив романтизмдың үҫеш алғанлығын күреп үттек. Был ике тенденция, тышҡы яҡтан һәм килеп тыуыу сәбәптәре менән бер-береһенән шаҡтай айырылып торһалар ҙа, дөйөм йүнәлештәре менән реакцияға хеҙмәт итеп, демократик поэзияға һәм халыҡтың азатлыҡ хәрәкәтенә берҙәй ҡаршы характерҙа булдылар.

---

[181] А.М.Гурович. На подступах к романтизму. — В сб.: Проблемы романтизма. — М.: Искусство, 1967, с. 168.

* * *

Империалистик һуғыш башланып китеүе менән, яңы революцион күтәрелеш йылдарында тауыштары көрәйеп килгән демократик йүнәлештәге М.Ғафури, Ш.Бабич, Д.Юлтый, Я.Юмаев кеүек шағирҙарҙы яңынан күңел төшөнкөлөгө солғап алды. Әммә уларҙың аһ-зары реакцион романтиктарҙағы төшөнкөлөк поэзияһынан айырылып торҙо. Ғафури, Бабич, Юлтый, Ҡудаштарҙың аһ-зарҙары, реакцион шағирҙарҙың индивидуаль пессимизмынан айырмалы рәүештә, донъя һуғышының халыҡ массаларына килтергән ауырлыҡтарына, халыҡ аһзарына барып тоташты.

Был осорҙа демократик йүнәлештәге шағирҙарҙың иғтибар үҙәгендә империалистик һуғыш темаһы торҙо. Улар баштан уҡ һуғышҡа ҡаршы мөнәсәбәттә булдылар һәм, һуғыштың социаль асылына еңел генә үтеп инә алмаһалар ҙа, артабан уның талау һуғышы икәнлегенә төшөнә барыу эволюцияһын кисерҙеләр.

Был йылдарҙа С.Яҡшығолов, Ф.Туйкин, Ғ.Иҫәнбирҙин кеүек бер талай шағирҙарҙың ижады пассивлашты. Улар үҙҙәренең поэзияһында һуғыш темаһына, ғөмүмән, ҡағылманылар, теге йәки был яңы мәсьәләләрҙе лә күтәреп сыға алманылар, ижадтан аҡрынлап һыуына ғына барҙылар.

Яңы революцион күтәрелеш йылдарында, мөхәббәткә яңы мәғәнә һалып, уға кешеләр араһында дуҫлыҡ һәм туғанлыҡ урынлаштырыуҙың бер юлы итеп ҡараған М.Ғафури, был төшөнсәләрҙе селпәрәмә килтереүсе ҡан ҡойғос һуғыштың башланыуы менән, аптырашта ҡалды. Һәм «Фитрәт заманы» шиғырында, һуғышты ерҙәге гонаһ шомлоғо өсөн алла тарафынан ебәрелгән язалыр тип, һығынып-һығынып, аллаға мөрәжәғәт итте:

Инмәй ергә, Ғазраилдан башҡа, күктән бер мәләк[182],
Ал ереңдән Ғазраилды!.. Итмәһен беҙҙе һәләк.
Һуҙма был фитрәт заманын[183], вәхигә[184] мохтаж был ер,
Саф күңелдәр, йәшле күҙҙәр рәхмәтеңә монтазир[185].

---

[182] Мәләк — фәрештә.
[183] Фитрәт заманы — тарихи ике ваҡиға араһындағы өҙөклөк.
[184] Вәхи — алла бойороғо.
[185] Монтазир — өмөт итә мәғәнәһендә.

Мәңге лә бөтмәҫ һәм һүнмәҫ нурҙарың сәс донъяға,
Әҙме мазлумдар шулай доға ҡылалар аллаға.

Ғафуриҙың аллаға шул рәүешле «саф күңелдәр», «йәшле күҙҙәр» исеменән мөрәжәғәт итеүе алла үҙенең мәрхәмәтен күрһәтер тип ышаныуынан килә ине.

Һуғышҡа кешеләр ихтыярынан тыш булған бер нәмә итеп ҡарау ҡайһы бер шағирҙарҙы символизмға ла этәрҙе. Я.Юмаев, мәҫәлән, 1914 йылдың 28 июлендә, һуғыштың тап башланған көндәрендә яҙылған «Болот» шиғырында һуғышты көнбайыштан бик ҙур, ҡап-ҡара, шыҡһыҙ булып үрмәләп-шыуышып, берсә тәңренә эйелгән кеше башы, берсә ҡот осҡос дейеү, берсә шашынған халыҡ, берсә һыуҙа йөҙгән шөкәтһеҙ ҙур балыҡ булып, ер йөҙөн ҡаплап килгән шомло болот образы аша һынландырҙы. Был символика, ҡайһы берәүҙәр раҫлауынса, ҡурҡыныстың көнбайыштан килеүенә ишара яһау ғына түгел ине, әлбиттә. Мифик һындарға әүерелеп, шыуышып килгән ҡара болот образы шағирҙың һуғышҡа ҡотолғоһоҙ һәм ҡаршы торғоһоҙ, кешелек тәбиғәтенә һыймаған бер ҡот осҡос фажиғә итеп ҡарауына бәйле ине.

М.Ғафури ҙа «Фитрәт заманы»ның дауамы һымағыраҡ яңғыраған «Ҡиәмәт» шиғырында был һуғышты заман ахырының етеүе, ҡиәмәт ҡубыуы кеүегерәк итеп һүрәтләне. «Сик ҡуйыр өсөн яуызлыҡтарға килде был ғазап» тип, яман көстәрҙең «күңеленә» шом һалырға ниәтләнде. Бында Ғафуриҙың иҙеүселәргә ҡаршы социаль асыуы сағылып ҡалһа ла, һуғыш яуызлыҡҡа сик ҡуя тиеүе менән тәрән яңылышты.

Һуғыштың килеп сығыуы сәбәптәрен кешеләрҙең әхлаҡтары боҙолғанлыҡҡа ҡайтарып ҡалдырыу уны яңынан выждан сафлығы мәсьәләләрен күтәреп сығыуға алып килде («Ишет, тәңрем», «Изге теләк»). Ләкин күҙ йәштәре лә, изге теләктәр һәм тәүбә ҡылыуҙар ҙа халыҡ тормошона ҡот осҡос фажиғә алып килгән һуғышты туҡтата алмай, ерҙәге йәбер һәм золомға сик ҡуя алмай ине. Аллаға һуңғы өмөттәрен бағлап һығыныуҙарҙың бушҡа китеүе Ғафуриҙың сабырлығын тамам өҙҙө, уға ҙур һабаҡ биреп, алланың барлығын шик аҫтына алыуға килтерҙе.

«Һуғыш дауам итте, — тип яҙҙы ул «Тәржемәи хәлем» исемле иҫтәлегендә, — эшсе-крәҫтиән ҡаны дарья

булып аҡты... Фажиғәләрҙең барған һайын көсәйә һәм арта барыуы күңелгә насар тәьҫир ҡалдыра башланы. Бының бер сиген, ҡан даръяһы ағыуҙың туҡталыуын, күрге килә башланы. Казарма янында, мәхшәр булып, балаларын оҙатҡан ата-әсәләр, аталарын оҙатҡан йәш балалар тулды. Мин бында сәғәттәрсә ҡарап ултырҙым. Шул ваҡытта «Юҡтырһың да, алла...»ны яҙҙым»[186].

Әлбиттә, был осорҙа әле Ғафури алланың барлығын бөтөнләйе менән кире ҡағыу юғарылығына күтәрелеп етмәгәйне. «Юҡтырһың да, алла!» тип әйтеүгә лә ул, һығынып-һығынып та теләктәре алдына килмәгәнлеге арҡаһында, стихиялы рәүештәрәк килде. Һәм унда беҙ әле алланың барлығын шик аҫтына алыуға ҡарағанда ла, быға тиклем уға мөкиббән китеп инанып килгән, әлегә бөтөнләй өмөтөн өҙмәһә лә, сабырлыҡтың сигенә еткән кешенең ялбарыулы тауышын ишетәбеҙ.

Ләкин шағир, «Ишет, тәңрем!», «Изге теләк» шиғырҙарындағыса, алланан күңеленә изгелек һәм яҡшылыҡ орлоҡтары сәсеүен теләмәй инде, «Юҡтырһың да, алла!» тип бер әйтеп ҡуя ла:

Әгәр булһаң,
Сабыр итмәҫ инең был эшкә,
Бөтә ҡөҙрәтеңде бағлап ҡуймаҫ
Инең ерҙә алтын, көмөшкә... —

тип, ерҙәге бөтә ғәҙелһеҙлектәр өсөн, уны ҡыйыу рәүештә битәрләргә тотона. Һәм уның ғәйепләүҙәре аллаға ҡаршы ғына йүнәлтелеп ҡалмай, капиталистик ҡоролошҡа социаль протест булып яңғырай.

«Юҡтырһың да, алла!» шиғырының ижтимағи резонансы ни дәрәжәлә көслө булғанлығы шул замандағы реакцион матбуғаттың һәм мосолман руханиҙарының Ғафуриға ҡаршы дәррәү күтәрелеп сығыуҙарынан да асыҡ күренеп тора. Шиғыр донъяға сығыу менән, Ҡазан, Өфө, Ырымбур һәм башҡа ҡалаларҙың мәсеттәрендә муллалар уның авторын ҡарғап, ләғнәт уҡыйҙар. Фанатизмдың ояһы булған «Дин вә мәғишәт» журналы әҫәрҙең халыҡҡа тәьҫир итеү ҡеүәһен юҡҡа сығарыу өсөн бөтә көсөн һала. 1915—1916 йылдарҙа был реак-

---

[186] Мәжит Ғафури. Әҫәрҙәр. 5-се том, 346-сы бит.

цион журнал, Ғафуриға ҡаршы махсус мәҡәләләрҙән тыш, уны ҡарғап-ҡарғап тәүбә итергә саҡырып һәм «Юҡтырһың да, алла!»ның ижтимағи яңғырашын баҫып ҡалыу маҡсатын тотоп яҙылған назымдарға ҙур урын бирә. Ғафуриға ҡаршы һөжүмгә шулай уҡ ҡайһы бер либераль газеталар ҙа ҡушылды. «Тамле»[187] псевдонимлы берәү, мәҫәлән, «Тормыш» газетаһының 1916 йылғы 26 ғинуар һанында «Шөбһә ҡылмайым» тигән шиғырын баҫтыра. Был автор, Ғафуриҙы һәм уның шиғырын иҫкә алмаһа ла, «Юҡтырһың да, алла!» шиғырының синтаксик һәм эске ритмик ҡоролошон ҡулланып, шул уҡ интонация менән Ғафуриға ҡаршы сығыш яһамаҡ була:

Шиксез барсың, тәңрем! Ҡөдрәтең киң,
Бар нәрсә дә сиңа билгеле,
Нәрсә генә күрсәм, шунда синең
Барлығыңа күрәм билгене.
Чын бар булу ачыҡ синең генә,
Булған нәрсә синең барлығың,
Ҡайсы бер хәлләргә төшенмәсәм,
Бусы минең зиһенем тарлығым.
Ҡызғанасың һәр бер жанларыңны,
Өндисең син хаҡлыҡ юлына,
Рәхәт юлларына төшсен диеп,
Ғаҡыл бирдең кеше ҡулына,
Мәгәр төшенмиләр, аңламыйлар
Ҡуғанлары тоғрылыҡ түгел,
Шул сәбәпле ҡайсы ҡан йәш түгә,
Сәғәдәтлеләр дә юҡ түгел...

Ғафуриҙың алланы шик аҫтына алыуы индивидуаль бунт характерында булманы, ул түҙемдәре һуңғы сиккә еткән халыҡ массаларының аңында барған дөйөм һынылыш осорон сағылдыра ине. Шуға ла шиғыр демократик йүнәлештәге, хөр фекер яғында тороусы йәштәрҙә ҙур теләктәшлек уятты.

Ғафури был шиғырын, әле баҫылып сыҡмаҫ борон, тәү тапҡыр «Ғалиә» мәҙрәсәһенең шәкерттәренә уҡый. Был хаҡта Сәйфи Ҡудаш үҙенең бер иҫтәлегендә түбәндәгесә яҙҙы: «Мәжит Ғафуриҙың был шиғыры, бер ҙән, империалистик һуғыштың ҡыҙған бер осоронда

---

[187] Там — бөтөн, теүәл мәғәнәһендә, йәнәһе, автор үҙен аҡылы теүәл кеше тип әйтмәксе була (В.Ә.)

яҙылыуы һәм, унан һуң, матбуғатҡа сыҡмаҫ борон уҡ, дини бер мәҙрәсәлә уҡылыуы менән был заман өсөн иҫ киткес бер яңылыҡ ине. Шуға күрә лә ул йәштәрҙең фекерҙәрен биләп алды. Тойғоларҙы һиҫкәндерҙе. Күҙ алдына ҡот осҡос картиналар килтереп баҫтырҙы һәм, үҙенең ҡыйыулығы менән, был көнгә тиклем бындай һүҙҙәрҙе ишетергә ғәҙәтләнмәгән баштарҙы зыңҡытырлыҡ ине. Бына шуға күрә лә тыңлаусылар шағирҙы дауыллы алҡыш менән күмделәр һәм, сәхнәнән төшөрмәйенсә, ҡабаттан һөйләттеләр. Был шиғыр көслө ҡул сабыуҙар менән ҡаршы алынды һәм шәкерттәр араһында бөтөнләй көтөлмәгән яңы уйҙар, бәхәстәр тыуҙырҙы»[188].

Шул рәүешле, Ғафуриҙың шиғыры демократия менән реакцион көстәр араһында быға тиклем үк йәшәп килгән ҡапма-ҡаршылыҡтарҙы көсәйтеп, ҡырҡыулаштырып ебәрә. Бер яҡтан, ығы-зығы ҡубып, руханиҙар аяҡҡа баҫһа, икенсе яҡтан, Ғафури күңелендә яралған был шик халыҡ күңеленә лә тәрәнерәк үтеп инә бара. Күп тә үтмәй, 1916 йылда, шағирҙың ҡыйыу тауышына «Әллә алла, әллә иблис...» шиғыры менән Ш.Бабич килеп ҡушыла:

Күктә — алла,
Ерҙә — иблис,
        мин — малай,
Береһе «дин» тип,
Береһе «мин» тип
        Тартҡалай.
Белмәймен:
Әллә алла,
Әллә иблис
        Алдалай?![189]

Күренеүенсә, Бабич уҡыусыға үҙенең ҡарашын тағырға ла, уны ышандырырға ла бик ашыҡмай, алла менән иблис араһында торған лирик герой аптыраашта ҡалған. Уның тегенеһенә лә, быныһына ла ышанғыһы килмәй, ошо битарафлылығы менән ул алланы иблис

---

[188] С.Ҡудаш. Хәтерҙә ҡалған минуттар. — Өфө, 1957, 60-сы бит.

[189] Шәйхзада Бабич. Һайланма әҫәрҙәр. — Өфө, 1958, 88-се бит.

кимәленә төшөрөп кәмһетә һәм Ғафуриҙа уянған шикте көсәйтеп ебәрә.

«Юҡтырһың да, алла!» шиғыры баҫылып сығыуы уңайы менән башланып киткән бәхәстәр, руханиҙарҙың төрлөсә янауҙары, шул уҡ ваҡытта демократик көстәр араһында ҙур отклик тыуҙырыуы Ғафуриҙың артабанғы ижадына ла ифрат ыңғай йоғонто яһағанлығы күренә.

«Юҡтырһың да, алла!»нан алдараҡ (август айында) яҙылған «Яҙмыш» шиғырында:

Хәүеф ҙур!.. Ҡурҡыныс арта!.. Үлем алға килеп баҫҡан,
Халыҡтың яҙмышы сиселер ваҡыт ғайәт яҡынлашҡан, —

тип, ниндәйҙер ҙур үҙгәреш буласағын һиҙенеп ҡуйһа ла, «яҙмыштан уҙмыш юҡ» тигән фаталистик ҡараштан уҙып китә алмағайны әле:

Ирек юҡ, тап уйынсыҡ төҫлө яҙмыш уйната беҙҙе,
Яғабыҙҙан тотоп бер тарта, бер ситкә ата беҙҙе.

«Юҡтырһың да, алла!» шиғырынан һуң яҙылған «Ул кем?» шиғырында Ғафуриҙың һуғыштың социаль асылына тәрәнерәк үтеп инә барғанлығы күренә. Бында инде шағир кешене һуҡыр яҙмыштың ҡоло итеп ҡарамай, ә һәр кешенең ирке һәм яҙмышы үҙ ҡулында тигән фекерҙе үткәрә:

Дошманым тип, һин хәҙер сәнсеп үлтергән бәндә кем?
Күкрәгенән ҡан ағып, алдыңда ятҡан кәүҙә кем?
Нимәгеҙ уртаҡ ине һуң, һәм беләһеңме кемлеген?!.
Юҡ, уны һин белмәйһең, осраштығыҙ һеҙ тик бөгөн!

Сөнки, ти, шағир, берегеҙ ғәрептән, икенсегеҙ шәреҡтән килдегеҙ ҙә эштең асылын уйлап тормай, үҙ иркегеҙҙән тыш, кемдәрҙеңдер ҡушыуы буйынса, «Кем өлгөрһә, шул үлтереү тейеш» тип белдегеҙ.

Шиғырҙың аҙағы һалдаттарҙы үҙ ирктәренә хужа булырға, йәғни ғәҙел булмаған һуғышҡа ҡаршы сығырға саҡырыусы көслө юлдар менән тамамлана:

Мин һорайым һинән хәҙер, үлтереп уны үс ҡандымы?
Һин уны сәнсеп үлтергәс, донъя иркен ҡалдымы?
Юҡ!

Һин шулай ҡоллоҡта йөрөһәң, донъя киң булмаҫ һиңә,
Барса эштәрҙән элек баш бул, туған, үҙ иркеңә.

Шулай итеп, ижадының башынан алып хәҡиҡәт яғында торған һәм шул хәҡиҡәткә өлгәшеүҙең дөрөҫ юлдарын төҫмөрләй алмай йонсоған Ғафури империалистик һуғыш осоронда донъяға киңерәк ҡараш ташланы һәм, ҙур боролош яһап, үҙе эҙләгән хәҡиҡәткә яҡынлашыу юлында яңы баҫҡысҡа аяҡ баҫты.

Беренсе донъя һуғышы осоронда демократик йүнәлештә тороусы шағирҙарҙан, Ғафури кеүек актив ижад итеүселәрҙән Дауыт Юлтый булды.

М.Ғафуриҙың ижады һуғыш осоронда тылдағы халыҡ массаларының рухи донъяһындағы һынылышты кәүҙәләндерһә, был һуғыштың барлыҡ фажиғәләрен һалдат булып үҙ елкәһендә татыған Д.Юлтыйҙың ижады күпселеге менән крәҫтиәндәрҙән торған һәм һуңынан революция яғына аяҡ баҫҡан һалдат массаларының һуғыш барышында, пацифизмдан һәм фатализмдан арына барып, һуғыштың социаль асылына үтеп инеү эволюцияһын күҙ алдына баҫтырырлыҡ кимәлгә күтәрелде.

Яңы революцион күтәрелеш йылдарында романтик күтәренкелек, эске елкенеү менән яҡтылыҡҡа ынтылыусы һәм көрәш пафосы менән януысы шағир һуғыш башланыуын «мәхшәр таңы» атыуы кеүегерәк ҡаршылай һәм тәүге шиғырында уҡ уның халыҡҡа хисапһыҙ бәлә-ҡаза алып киләсәген күреп һыҡрана:

Был һуғышта күпме ирҙәр булалар инде харап,
Ҡалалар етем балалар инде кемдәргә ҡарап!
Эй балалар, ҡыҙғаныс бит, һуң дәрәжә ҡыҙғаныс!
Ихтыярһыҙ түгелә йәштәр, өҙөлә йөрәк, һыҙыла эс.

*(«Һуғыш башланғас», 1914)*

Шулай уҡ был шиғырҙа тыуған ер образы ла сағылып ҡала, ләкин ул халыҡ поэзияһындағыса уландарын илбаҫарҙарға ҡаршы изге һуғышҡа өндәүсе булып түгел, ә һуғыштың мәғәнәһеҙлеген күреп көрһөнөүсе Ерәсә булып кәүҙәләнә:

Ер илай, ер йәш вә ҡан түкөрөп эсенән көрһөнә, —

ти, шағир.

Артабан, һалдат-шағир Дауыт Юлтыйҙың поэзияһын көсләп ут һәм ҡан даръяһына ташланған һалдаттың күңел көндәлеге характерын ала.

Бер исемһеҙ шиғырында:

Ергә ут яуған сағында, тағы ла беҙҙе алдылар,
Тыуған илдән айырып, фирҡәт[190] утына һалдылар, —

тип, һуғыш утына төшөргә үҙ теләгенән тыш мәжбүр булыуын әйтеп һалһа ла, әле һуғыштың асылын аңлап етмәгән шағир был хәлгә төшөүенә яҙмыш ҡушыуы кеүегерәк ҡарай:

Беҙҙе тыуҙырған икән фалһыҙ сәғәттә әсәбеҙ,
Һәм тимәгәндер биләүҙә: «Бул бәхетле, бәпкәбеҙ!»

Шағирҙың был фаталистик ҡараштары, һуғышҡа инеп, аяҡ-ҡулһыҙ ятҡан яралыларҙы, ит киҫәгенә әүерелгән мәйеттәрҙе күреүҙән тағы ла көсәйеп китә. Ҡанға сарсап, минут һайын кеше ғүмерен йотоп тороусы һуғыш ҡырында осло тешен ыржайтып үлем образы һәм үлем ҡурҡынысы уның бөтә рухын биләп ала.

1915 йылда яҙылған «Төнгө һөжүм» кеүек шиғырҙарындағы натурализмға тиклем барып еткән баталь картиналар, «Ҡараңғы төндәрҙә» шиғырындағы символик ҡараңғы төн, ут эсендә күҙгә салынып ҡалған ҡанлы шәүләләр, тештәре ыржайған үлем ҡиәфәте — барыһы ла шағир күңеленең торошон, һәр минут үлем көтөп торған һалдаттың фажиғәле яҙмышын бөтә тулылығы менән асып бирә:

Ҡайҙа барма, унда упҡын, унда ҡанлы кәүҙәләр,
Бар ҡанаттар бәйле тотҡон, алда утлы шәүләләр.
Унда үткер, осло тештәр ыржая, йән туҡмайҙар,
Түгеләә йәштәр, өҙөлә эстәр, ҡан эсеүҙән туймайҙар.
Майлы күҙҙәр, ҡан ауыҙҙар, ҡан-үлемгә талпына,
Һәр тараф йыртҡыс яуыздар, йән боғаҙға алҡына.

Шағир үҙ яҙмышы менән риза булмауына ҡарамаҫтан, реакцион романтиктарса үлемде идеаллаштырмай,

---

[190] Фирҡәт — айырылыу.

киреһенсә, уға тормош быға тиклем булмағанса ҡәҙерлерәк булып тойола.

«Фәрештә теләге», «Һыҙ ҡәләм», «Шинель» шиғырҙарында шағир күңелендә билдәле бер һынылыш осоро башланыуы төҫмөрләнә.

«Фәрештә теләге»ндә, Ғафуриҙың «Фитрәт заманы», «Ишет, тәңрем» шиғырҙарындағыса, Д.Юлтый әле алла мәрхәмәтенә өмөт бағлаһа, «Һыҙ, ҡәләм» шиғырында лирик герой активлаша башлай. Ул инде ҡәләмгә мөрәжәғәт итеү алымы менән:

Һыҙ ҙа үткер алмазыңды, киҫ яуыз көс пәрҙәһен!
Ятмаһын ҡан даръяһында ярлы мазлум ҡәрҙәшең! —

тип, үҙ-үҙе менән һөйләшә, күңеле халыҡ бәхете өсөн көрәш романтикаһы менән ҡабынып китә. «Шинель» шиғырында беҙ, ниһайәт, аҡрынлап булһа ла һуғыштың ауыр шарттарына күнегә, фатализмдан, үлем ҡурҡынысынан ҡотола барған һалдат менән осрашабыҙ. Быға тиклем ҡан һәм ут араһында һаташыуға тиклем алып барып еткергән үлем ҡурҡынысын еңә барыу шағирға донъяға айыҡ күҙ менән ҡарау өсөн мөһим шарт булып тороуын билдәләп үтергә кәрәк. Сөнки минут һайын үлем көтөп йөрөгән кеше, нисек кенә йәшәргә теләмәһен, йәшәү өсөн көрәшкә күтәрелергә булдыҡһыҙ булып ҡалыр ине.

Ғ.Хөсәйенов шағир күңелендәге был эволюцияны тәбиғәт культы менән бәйләнгән лирикаһында ла айырым-асыҡ сағылыуын билдәләп үтә[191].

«Ҡара урмандарҙа кейек аулап...», «Ҡайын төбөндә» шиғырҙарынан күренеүенсә, тәбиғәт ҡосағы шағирҙы, берҙән, яу ғазаптарын оноттороп, тәбиғәт балаһы булып үткән балалыҡ йылдарына алып китһә, икенсенән, ундағы гармония һәм тормош һулышы яу ҡырында тыныс тормоштоң берҙән-бер төҫө булараҡ ҡан ҡойҙорғос мәғәнәһеҙ һуғышҡа нәфрәт тойғоһон көсәйтеп ебәрә.

Фронт шарттарында Д.Юлтыйҙа донъяға айыҡ ҡараш формалашыуҙы тиҙләтеүгә, Беренсе донъя һуғышы

---

[191] Ғ.Хөсәйенов. Дауыт Юлтый: Тормошо һәм ижады, 41-се бит.

осоронда яҙылған шиғырҙарына, шағир үҙе биргән аңлатмаларҙан күренеүенсә, ауылдашы Закир Юлтый менән хат аша бәйләнеш тотоуы ла ыңғай йоғонто яһай[192].

Шул рәүешле, фронт һабағы һәм, хаттар аша булһа ла, халыҡтың һуғыштан тамам йонсоуын күҙәтеүҙәр «Сумка» һәм «Ҡан баҙары» шиғырҙарында шағирҙы һуғышҡа ҡаршы актив протест белдереү юғарылығына күтәрәләр. Был шиғырҙарҙан шағир-гражданин тауышы нығыраҡ ишетелә.

«Ҡан баҙары» шиғырында Д.Юлтый империалистик һуғыштың кеше ғүмере менән һатыу итеүсе баҙар икәнен аңлауға күтәрелә һәм, һуғыш ғазаптарын үҙ елкәһендә татып революционлаша башлаған һалдат массаларының типик вәкиле булараҡ:

Бында ҡан!.. — Артта Ватан —
Пәруар халыҡтар ҡысҡыра:
— Барыһынан да беҙгә ҡиммәт,
Беҙгә ҡиммәт ил, Ватан! —

тип бөтә тауышы менән был һуғыштың социаль йөҙөн асып һала.

Д.Юлтый, шул рәүешле, XX быуат башындағы ҡаршылыҡлы шарттар, ҡатмарлы тарихи ваҡиғалар эсендә ҡайнап, ваҡиғаларҙың ағышын алдан төшөнөргә һәләтле художник булып өлгөрә бара. Ул бөтә рухы менән халыҡҡа бәйләнгән һәм халыҡ вәкиле булып сығыш яһай. Уның революцияға тиклемге поэзияһының оптимистик рухы ла, шиңмәҫ көсө лә халыҡҡа бәйле булыуында.

Дауыт Юлтыйҙың шиғырҙары революцияға тиклем матбуғатта баҫылып сыҡманы. Әммә уның ижады XX быуат башындағы башҡорт поэзияһы, ғөмүмән, Башҡортостандағы әҙәби процесс, бигерәк тә демократик йүнәлештәге шағирҙар ижады менән ниндәйҙер дәрәжәлә тығыҙ бәйле булыуы — кире ҡаҡҡыһыҙ күренеш. Юлтый революцияға тиклем, нигеҙҙә, романтик характерҙағы шағир булып сығыш яһай. Халыҡҡа яҡын то-

---

[192] Ҡарағыҙ: Дауыт Юлтый. Һайланма әҫәрҙәр. 1-се том, 421-се бит.

роуы арҡаһында, уның поэзияһы тәүҙән үк демократик йүнәлештә үҫеш ала. Уға яланғас риторика бөтөнләй тип әйтерлек хас түгел, ул халыҡ ижадынан килеп ингән традицион образдар менән дә, яҙма поэзия традициялары һәм образдары менән дә иркен эш итә.

1915—1917 йылдарҙа башҡорт поэзияһында тәүге поэмалар ижад ителә. Был — поэзияның формалашыу тарихында яңы күренеш ине. Тәүге поэмалар йә фольклор материалдарына («Ғәйеп хазина» — М.Ғафури, «Ен туйы» — Б.Мирзанов), йә дини легендаларға («Илсе» — Б.Мирзанов, «Рисаләт» — М.Ғафури, «Ғазазил» — Ш.Бабич) нигеҙләнеп килеп тыуҙылар. Был хәл иң элек шул осорҙа поэзияла романтизмдың көсәйеп китеүенә бәйле ине. Быны реакцион романтиктар үткәнде идеаллаштырыу йәки дини-идеалистик ҡараштарын үткәреү өсөн файҙаланһалар, демократик йүнәлештәге шағирҙар әкиәт йәки дини легенда сюжеттарын, ғәҙәттә, шул заманда асыҡтан-асыҡ әйтеп бирергә мөмкин булмаған фекерҙәрен «тел төбө» менән кинәйәләп еткереү өсөн ҡулландылар. Романтик поэмаларында шағирҙар, дөйөм гуманистик идеяларҙы алға һөрөү менән бергә, заманы өсөн шаҡтай ҡыйыу фекерҙәр әйтә алдылар.

Был әҫәрҙәр араһында Д.Юлтыйҙың «Үткән быуат» поэмаһы бик үҙенсәлекле.

Поэма ҡалала итексе булып ғүмере уҙған Нури ҡарт менән ҡышҡы буранда уларҙың ярлы өйөнә килеп һыйынырға мәжбүр булған етем башҡорт малайының башынан үткәндәрен һөйләп биреүгә ҡоролған. Нури ҡарт шул заманда ауырлыҡ менән көн күреүсе ярым пролетариаттың типик вәкиле булараҡ кәүҙәләнә. Етем малайҙың башынан үткәндәрен һөйләп, шағир ҡыйырһытылған үҙ халҡының аяныс яҙмыштарына ла ишара яһай. Әлбиттә, Юлтый етемдәр һәм ярлылар тормошон һүрәтләп, уларға теләктәшлек белдереүҙән уҙып, киҫкен социаль мәсьәләләрҙе күтәреп сыға алмай әле. Ләкин үгәйһетелгән халыҡтың етем балаһы образын тыуҙырыуы менән башҡорт халҡының шул замандағы ысынбарлығын шаҡтай дөрөҫ сағылдыра, һәм поэма шуға ла реалистик йүнәлештәге әҫәр булып тора.

Д.Юлтыйҙың Февраль революцияһы алдынан яҙылған шиғырҙарында, әле үҙе һуғыш яландарында йөрөүе-

нә ҡарамаҫтан, тарихи оптимизм сатҡыларының көсәйеүен күрәбеҙ. Хәҙер инде тормош һәм ынтылыштар араһындағы ҡаршылыҡ шағир күңеле аша аҡ ҡағыҙға ҡара шәүлә булып ятмай:

Бер саҡ төндән килһә ҡара болот,
Бер саҡ таңдан йомшаҡ ел иҫә.

*(«Ғүмер еле», 1916)*

Уның халыҡ ғәмен эскән күңеле һис тә тыныс түгел, ул берсә ҡайғы-хәсрәт эсендә ятҡан башҡорт илен байҡап үтә, ундағы аһ-зарҙарҙы ишетеп шомлана, берсә иләҫ-миләҫ булып, бына-бына атыр яҡты таңдың нурҙарын шәйләй.

Был осор уның поэзияһында антитеза, контраст алымдары көсәйә бара. Ҡара болотҡа — йомшаҡ ел, төнгә — яҡты көн, таң сулпаны, өмөтһеҙлеккә — өмөт сатҡылары, ҡайғы-хәсрәткә киләсәккә ышаныс көсө ҡаршы ҡуйыла.

«Ғүмер еле», «Елдәр», «Күңелем тулҡынлана, ниңәләр...», «Таң сулпаны», «Көтәм», «Төнгө йырҙар...» шиғырҙарының дөйөм рухы, таң еле, сулпан, дауыл көткән диңгеҙ образдарының өҫтөнлөк итеүе, шиғырҙарындағы еңел ритмика, образдарҙың хәрәкәтсән төҫ алыуы, былар бөтәһе лә яҡынлашып килгән революция тулҡынын һиҙенгән шағир күңеленең оптимистик рухын асыуға хеҙмәт итә.

Уның Февраль революцияһы алдындағы поэзияһы ниндәйҙер ҙур үҙгәрештең буласағын ашҡынып көтөү менән тулы:

Йоҡламай күкрәк ҡағам,
Шаулаһын тулҡын уның өҫтөндә.
Мин шаулап ағам!
Күкрәгемдең тулҡыны тулҡын
Һөйә, диңгеҙ һөйә;
Күкрәгемдең ялҡынынан
Барса боҙ, ҡарҙар көйә.
Шаулаһын ил, уйнаһын,
Тулҡын атһын киң диңгеҙем!
Тулҡынып ҡаҡһын, уятһын
Тын түшәктән ер йөҙөн!

*(«Төнгө йырҙар»)*

* * *

Башҡорт шағирҙарының береһе **Шәйехзада Бабич** (1895—1919) ижадының иң ҙур һәм емешле осоро Беренсе донъя һуғышы һәм Февраль революцияһы йылдарына тура килә.

Ш.Бабич әҙәбиәткә килгән йылдар, бер яҡтан, башҡорт һәм татарҙар араһында 1905 йылғы буржуаз-демократик революцияның һөҙөмтәһендә милли уяныу, мәғрифәт һәм культура өлкәһендә йәнләнеү менән характерланһа, икенсе яҡтан, был хәрәкәтте, йәнләнеүҙе быуырға, социаль һәм милли-колониаль иҙеүҙе тағы ла көсәйтергә тырышыусы ҡара реакцияның ҡаты һөжүме менән билдәләнә.

Бабич та ижадының башланғыс осоронда, шул замандағы күпселек шағирҙар кеүек, мәғрифәтселек ҡараштарында тора. Уның мәғрифәтселеге, бер яҡлап, лирик геройының «ысын, аҫыл нигеҙле ерҙән күп белемдәр» алып («Эй китап», «Зарланыу», 1910), заманына лайыҡ культуралы кеше булырға шәхси ынтылыштары формаһындараҡ сағылһа, икенсе яҡтан, уның был йылдарҙағы күпселек шиғырҙары, мәғрифәтселек традицияларын дауам иттереп, өгөт-нәсихәткә, дидактикаға ҡорола («Һин алдама», «Нәсихәт» һ.б.). Шулай уҡ Бабич «Кәзә менән дуңғыҙ» (1911), «Тиң булырмы?» (1913) кеүек шиғырҙарында, иҫкелеккә йәбешеп ятыусыларҙы ҡаты шелтәләп, халыҡ тормошонда аң-белем һәм культураның әһәмиәтен яҡлап сыға.

Ләкин мәғрифәтселек әҙәбиәте инде үҙ көсөнән сыға барған бер осорҙа Бабич та, мәғрифәтсе булараҡ, поэзияға әллә ни яңылыҡ өҫтәй алмай ине. Шулай булыуына ҡарамаҫтан, мәғрифәтселек әҙәбиәтенең иң көслө яҡтарының береһе булған иҫкелекте, дини фанатизмды күрә алмаусылыҡ Бабичтың артабанғы реалистик сатираһын үҫтереп ебәреү өсөн билдәле күләмдә этәреш яһағанлығын кире ҡағып булмай.

Бабичтың ҡаҙаҡтар араһында мулдәкә булып йөрөгән саҡта яҙған шиғырҙарында уҡ беҙҙең иғтибарҙы ысынбарлыҡ менән риза булмаған, тынғыһыҙ, эҙләнеүсән лирик герой йәлеп итә. 1910 йылда Ҡаҙағстанда йөрөгәндә тыуған яҡтарын юҡһыныу, үҙенең белемһеҙ икәнлеген төшөнөп борсола башлау формаһындараҡ

моронлаған был ризаһыҙлыҡ тойғоһо: «Бәхетһеҙ мин», «Зарланыу», «Күңел», «Моңланам» тигән тәүге шиғырҙарында береһенән икенсеһенә күсеп тәрәнәйә һәм киҫкенләшә бара, йәмғиәт менән шәхес араһында үҙ-ара гармонияның булмауы, ҡара реакция йылдарында был ҡаршылыҡтарҙың тағы ла көсәйеп китеүе һәм быны тоя башлау яҡтылыҡҡа сарсап күҙен асҡан романтик геройҙы берсә индивидуаль бунтарлыҡҡа этәреп, юғары күтәрә («Күңелле саҡта»), берсә уның талпынып осор ҡанаттарын ҡайырып ташлап, түбәнгә ырғыта («Күңелһеҙ саҡта», 1913).

Ләкин шағир бөтөнләйе менән күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәй. Илдә реакция, ҡараңғылыҡ хөкөм һөрһә лә, Бабич эске бер ҡыуаныс һәм шуҡлыҡ менән халыҡ тормошоноң һау-сәләмәт яҡтарына үтеп инә. «Охотник», «Ямғыр теләге», «Һабантуй һәм милли байрамдар» тигән шиғырҙарында үҙ халҡының үҙенсәлекле йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, байрамдарын поэтиклаштырып, халыҡтың мәңгелек йәшәү көсөн һәм ҡаҡшамаҫ рухын раҫлай.

Был шиғырҙарында ул халыҡтың ҡыуаныстары менән ҡыуаныусы, йор күңеле менән йыуаныусы, уйнаҡ күңелле шағир булып сығыш яһай. Халыҡтың һәйбәт йолаларын, ауыҙ-тел ижадын яратыу һәм йыйыу, йырға, музыкаға мөхәббәт («Ғашиҡ дуҫыма», 1910; «Йырсыны көткәндә», 1913) уның ижады өсөн бөтмәҫ-төкәнмәҫ илһам сығанағы булып хеҙмәт итә. Был уны, һыҙланыуҙар һәм «моңланыуҙарҙан», «әллә ниҙән шикләнеү һәм шомланыуҙарынан», билдәһеҙлек алдында ҡаушап ҡалыуҙарынан арындыра барып, халыҡ яҙмышы тураһында тәрән уйланыуҙарға алып килә. 1914 йылда яҙған «Халҡым өсөн» шиғыры уның ижад программаһы булып яңғырай.

> Дәртле, ҡайнар йырҙарымды
> Йырламайым дәртем өсөн;
> Йырлайым тик мәңге шат,
> Дәртле, көләс халҡым өсөн.
> Иламайым мин көндәрем
> Һырғаҡ, һыуыҡ, һалҡын өсөн;
> Илайым тик ярлы, меҫкен,
> Ҡыҙғаныс халҡым өсөн.
> Йәш сағым, алтын сағым,
> Ялҡын сағым булһын фиҙа

Халҡым алдында минең
Биргән таҙа антым өсөн[193].

Шул рәүешле шағир яҙмышы халыҡ яҙмышына килеп ҡушыла, ул инде бөтә булмышы менән ошо туған халҡына бирелгән. Был шиғырҙа шулай уҡ Бабич ижадын аңлау өсөн мөһим асҡыс булырҙай бер нәмә күҙгә ташлана: шағир халыҡҡа тик бер яҡлы ғына ҡарамай. Уның туған халҡы социаль һәм милли-колониаль иҙелеү һөҙөмтәһендә ҡарап тороуға аяныс, меҫкен бер хәлгә килеп терәлгән, ләкин йәшәү дәрте, рухи ҡеүәте һүнмәгән: ул «мәңге шат, дәртле, көләс», сөнки «халыҡ массаларына пессимизм — ят нәмә» (М.Горький). Шуға ла үҙ яҙмышын халыҡ яҙмышына ҡушып өлгөргән шағир киләсәккә өмөтөн өҙмәй, ғәҙеллектең һәм «аҡ көндөң» тыуырына ышанып йәшәй. Халыҡтың һәйбәт ғөрөф-ғәҙәттәре, бигерәк тә бай ауыҙ-тел ижады, музыка сәнғәтенең көслө йоғонтоһонда тәрбиәләнгән һәм үҙ булмышына халыҡ рухын һеңдергән шағир барған һайын халыҡтың айырылғыһыҙ бер өлөшөнә әүерелә бара. Беҙ был осорҙағы реалистик лириканың өлгөләре булған «Халҡым өсөн», «Бай һәм ярлы», «Көрәшеп үткәр ҡыҫҡа ғүмереңде», «Кем өсөн», «Көтәм» шиғырҙарында үҙенең бөтә яҙмышын халыҡ яҙмышына бәйләй алған оло шағирҙы күрәбеҙ:

Йөрөгән саҡта башҡорт туғайҙарын,
Йәнем әллә ҡайҙа елкенә,
Ишеткәндә моңло ҡурайҙарын,
Йөрәгемә моңдар бөркөлә.
Тауҙарына менһәм, ҡырҙа йөрөһәм,
Балҡый йәннәт нуры — гөлөстан,
Меҫкен башҡорт ауылын килеп күрһәм,
Аңҡый хәсрәт, үлем — гүрестан.

Бына шулай киҫкен контраст картиналарҙы һүрәтләү менән башланып китә Бабичтың «Көтәм» шиғыры (1916). Гүзәл һәм мөһабәт тәбиғәткә ауаздаш яңғыраусы ҡурай-моңо, шағирҙың йөрәгенә дәртле моңдар бөркөп, йәнен әллә ҡайҙарға елкендерһә, гүрестан хәленә килтерелгән ауылдар һәм ундағы ғазаплы тормош, бәғерен өҙгөләп, ләғнәт йәштәрен түгергә мәжбүр итә:

---

[193] Шәйехзада Бабич. Һайланма әҫәрҙәр. — Өфө, 1958, 43-сө бит.

Яныып-көйөп, бәғерем өҙгөләнеп,
Ләғнәт уҡыйым, кемгә — белмәйем,
«Килер микән аҡ көн беҙгә лә?» тип,
Уралҡайға ҡарап илайым.
Күрәм: үҙ олпатын боҙмай һаҡлап,
Урал ята әкрен, тын ғына;
Ала шунда йәнде тынлыҡ ҡаплап,
Килә башлай тәмле уй ғына...

Үҙ олпатын боҙмай ятҡан традицион Урал образына шағир, әлбиттә, ҙур йөкмәтке һалған. Уның олпатлығында һәм тыныслығында халыҡтың ихтыяры, һынмаған рухи көсө сағыла. Шуға ла шағир, шиғырының аҙағында тыуасаҡ аҡ көндөң нурҙарын күреп ҡалғандай, ҡабынып китә:

Ишеткәндәй булам әллә ҡайҙан
Ырыҫ, бәхет, өмөт йырҙарын,
Өмөт ҡайнап, ташып күкрәгемдән,
Көтәм тиҙҙән аҡ көн тыуғанын.

Үҙ халҡының булмышына ошондай ҡараштa тороу, халыҡтың шат һәм һау рухи донъяһы менән ысынбарлығы, көнкүреше араһында гармония күрергә теләү, ошо бәхетле киләсәк өсөн яныып-көйөүҙәр көслө, ләкин сабырһыҙ натуралы Бабич романтизмының да төп йүнәлешен билдәләй булһа кәрәк.

Инде күреп үткәнебеҙсә, империалистик һуғыш йылдарында башҡорт һәм татар поэзияһында романтизм шаҡтай ҡатмарлы характер алып, айырата уның реакцион тармағы, көсәйеп китте. Әлбиттә, Бабич та был ҡатмарлы осорҙо еңел генә үтеп китә алманы.

Айға мендем, ай нуры менән ҡойондом, уйнаным,
Күп һөйөндөм, һөйөнөс менән төйөлдөм — туйманым.
Туйманым, айҙан уҙып, мендем ҡояшҡа ашҡынып;
Юҡ, шулай ҙа булманы ташҡын күңелде баҫтырып...
Шул барыштан барышыма, киттем хоҙайҙың ғәрешенә,
Ун һигеҙ мең ғәләме артымда ҡалды барыһы ла.
Ни өсөндөр тапманы күңелем ҡарар ғәрешендә лә,
Көрсөйҙө[194] күрһәм дә хатта, тынманым унығында ла.

*(«Айга мендем», 1914)*

---

[194] Көрсөй — тәхет.

Бәхеткә сарсаған романтик герой шундай ашҡыныуҙар менән йәшәй, уның күңеле тынғы белмәй, болоҡһоп нимәгәлер ынтыла, бер минутта ут булып ҡабынып («Бер минут», 1914), бер минутта золмәт менән тулған донъяны дауыл булып убып алырҙай ярһый, өҙгөләнә. Былдай көслө шәхестең бәхет һәм азатлыҡ тураһындағы идеалы ла самаһыҙ юғары:

Зәңгәр күк — тажым, сыбар ер — тәхетем,
Үҙем — азат йән, аҡ ҡояш — бәхетем.
Йондоҙҙар һәм ай — серсе дуҫтарым,
Һандуғас, турғай — йырсы ҡоштарым.
...Менһәм тауға, их, осайыммы һуң!..
Бөтә офоҡто ҡосайыммы һуң!
Гөлдәр йылмайған, ҡырҙар нурланған,
Бөтә ер-күге нурға сырмалған,
Шашам, ашҡынам... Шатланам сикһеҙ,
Азат мин, азат! Бәхетем офоҡһоҙ!

*(«Бәхетем», 1916)*

Шағир кешенең ошондай ҙур бәхеткә, офоҡһоҙ азатлыҡҡа хаҡлы икәнлеген белә, күңеле менән ул көндәрҙең алыҫ түгел икәнлеген дә һиҙенә, ләкин үҙе был идеалға өлгәшеүҙең аныҡ юлдарын күрә алмай йонсой. «Үткән көндәр» шиғырында әйтелгәнсә, «күңеле мең төрлөгә» ашҡынғанда, «көнө бер төрлө» булып ҡала бирә:

Бына әле илап, әле көлдөм,
Әле көйҙөм, әле һыҙландым;
Бына әле йырлап, әле тындым,
Әле бар донъяһын ҡыҙғандым.
Бына әле генә ләғнәт ороп,
Таштым, шаштым, ҡуптым тулҡындай,
Әле ғәффәр булып, әле ҡәһһәр,
Холоҡландым тәңрем холҡондай.
Бына әле үҙем һаман ошолай,
Һаман ошо мин — мин, һаман мин;
Күңелем мең төрлөгә талпынғанда,
Көнөм бер төрлөгә янам мин.

*(«Үткән көндәр», 1915)*

Был шиғырҙа романтик натуралы бөтә Бабич сағылған тип әйтергә мөмкин.

Түҙемдәре бәйҙән ысҡынып китеп, шағирҙың:

Йондоҙом өмөтһөҙ,
Күҙ илай өҙлөкһөҙ,

Ҡаҙалһын донъяһы:
Күңелгә ҡыҙыҡһыҙ, —

*(«Аптырағаан минуттарҙа», 1915)*

тип «мәлғүн иблистәр төкөргән» донъяһына ҡул һелтәгән саҡтары, йәки:

Әйҙә, күңелем, бында торма, күккә, күккә, күккә ос,
Күккә ос: күктә тыныс, бында һуғыш, бында ҡылыс, —

*(«Әйҙә, күңелем», 1915)*

тип, тынғылыҡ эҙләп, күңеле менән күккә ынтылыуҙары, йәки:

Гөрләшеп дәртле минуттар
Остолар моңдар менән;
Мин төшөп киттем, төшөп киттем,
Төшөп киттем түбән, —

*(«Остолар», 1916)*

тип түбән төшөп китеүҙәре бына ошо идеал менән ысынбарлыҡ араһында хәл итеүлә алмаҫлыҡ ҙур ҡаршылыҡтар ятыуынан, йә иһә был ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығыр көстәрҙең барлығын күреп тә, үҙ ынтылыштарын һалҡын ҡанлылыҡ менән ошо прогрессив көстәргә ҡуша алмауҙан килә.

Шуныһы бик мөһим, Бабичтың ашҡыныуҙары һәм болоҡһоуҙары үткәнде идеаллаштырыуға йәки ҡәбер тынлығын юҡһыныуға ҡайтып ҡалмай, уның ҡараштары киләсәккә, яҡтыға төбәлгән, ул инде алда ниндәйҙер ҙур үҙгәреш буласағын күңеле менән тоя һәм йөрәкһеп шунда ынтыла. Был ынтылыштар, киләсәктең дауыллы көндәрен алдан һиҙенеү Бабич шиғырҙарының уйнаҡ стиленән, ритмик-интонацион яңғырашынан уҡ бөркөлөп тора. Бабич шиғырҙарында һүҙҙәрҙең һәм өндәрҙең үҙ-ара яңғырашы, рифмалаштырыуҙың телдә булған бөтә мөмкинлектәрен, ассонанс, аллитерация күренештәрен иҫ киткес оҫта файҙаланып, быларҙың бөтәһен бергә көслө ритмика ағымына буйһондора һәм шиғырҙы музыкаға яҡынлаштыра. Ә был музыкалағы оптимистик ноталар иһә шағир күңеленең динамикаһын тулыһынса сағылдырып ҡына ҡалмай, ваҡиғаларға

ифрат бай, ҡатмарлы һәм хәрәкәтсән дәүерҙең ауазы булып ишетелә.

Эйе, Бабичтың көрәш романтикаһы менән һуғарылған шиғырҙары бер талай түҙемһеҙлек, сабырһыҙлыҡ формаһындараҡ сағылған төшөнкө шиғырҙары менән аралашып килде. Шулай ҙа уның романтикаһы, ижтимағи тормоштан йөҙ сөйөрөп, кешене пассивлыҡҡа, төшөнкөлөк һаҙлығына һөйрәүсе реакцион романтизмға бөтә йүнәлеше менән ҡаршы торҙо, ҡаршылыҡлы характерҙа булыуына ҡарамаҫтан, нигеҙҙә ыңғай күренеш булды.

Бабичтың ижтимағи активлығы, тормошҡа актив мөнәсәбәттә булыуы реалистик лирикаһы менән романтикаһында ғына түгел, үҙ заманы өсөн шаҡтай үткер сатирик әҫәрҙәрендә лә асыҡ сағылды. Хронологик яҡтан килгәндә, уның сатираһының айырата 1916 йылдарҙа көсәйеп киткәнлеге күҙгә ташлана. Был күренеш Бабичтың, бөтөнләйе менән интуиция стихияһына ғына бирелмәй, тормошҡа объектив анализ яһай башлауы, буржуаз йәмғиәткә ҡарата нәфрәт тойғоһо аҡыллы, тотороҡло характер ала барыуы, йәғни шағирҙың гражданин булып өлгөрөп етеүе менән бәйле булһа кәрәк.

Бабич сатираһының башын, ғәҙәттә, Туҡай традицияларына алып барып бәйләйҙәр. Һүҙ юҡ, Бабич сатираһы мәғрифәтселек традицияларына, бигерәк тә Туҡайҙың реалистик сатираһына тығыҙ бәйле. Бабич та үҙенең күпселек юмористик һәм сатирик әҫәрҙәрендә пародия алымын оҫта ҡулланды. Ләкин Бабич сатираһы менән Туҡай сатираһының айырмаһы ла юҡ түгел. Туҡай сатираһы, уның бөтә ижады кеүек, татар ысынбарлығынан үҫеп сығып, нигеҙҙә, татар халҡының мыҫҡыллы көлөү традицияларын дауам итһә, Бабич сатираһы башҡорттарҙың да, татарҙарҙың да ысынбарлығында үҫеп сыҡты. Һәм үҙенең сатираһында ла башҡорт халҡының йор рухын сағылдырҙы.

Икенсенән, Туҡай сатираһы татар буржуазияһының ғына түгел, иҫкелекте кәүҙәләндереүсе руханиҙарҙың да әле шаҡтай көслө заманында килеп тыуып, шуларға ҡаршы йүнәлдерелһә, шуға ла киҫкенерәк, ваҡыт-ваҡыт тура мәғәнәлерәк, яланғасыраҡ булып китһә, Бабич сатираһы, башлыса руханиҙарҙың комик характер ала барған, буржуазияның позицияһы инде шаҡтай ҡаҡшаған осорҙа килеп тыуа, шуға ла ул йыш ҡына

комик характер ала. Ҡыҫҡаһы, Бабич сатираһында юмор һәм комизм өҫтөнлөк ала тип әйтергә мөмкин.

Бабич донъя һуғышы һөҙөмтәһендә ҡиммәтселектең иҫ киткес күләмдә артыуы кеүек етди нәмәләрҙән әсе ирония менән көлгәндә лә («Йәшәһен ҡиммәтселек», 1916), һуғыш йылдарында, төрлө ҡиәфәткә инеп, ҡомһоҙланып байып ятыусы, әҙәм талаусы юғары ҡатламдарҙы, ҡан эсеүселәрҙе фаш иткәндә лә («Ҡандала», 1916) үткер сатирик булып ҡала белә.

«Ҡандала» балладаһы — кинәйәле әҫәр. Бында, кешенең йоҡоһонан файҙаланып, ҡан эсеүсе ҡандала, уны күреп тороусы, ләкин яҡлаусы күҙ һәм ҡандаланы һытып ташларға әҙер тороусы ҡул образдары үҙәктә тора.

Әҫәрҙәге был образдарға тәү тапҡыр, айырым-айырым алып, иғтибар итеүсе И.Нуруллин күҙҙең ҡыланышын «яуызлыҡҡа көс менән ҡаршы тормау» идеяһын һөрөүсе толстойсылыҡҡа алып барып бәйләмәксе. Әлбиттә, кинәйәле әҫәрҙәге һәр деталгә, һәр образға һалынған идеяны автор үҙе уйлағанса дөрөҫ итеп аңлатып биреү ауыр, шулай ҙа бында Бабич, социаль яуызлыкты томалап, иҙеүсе синыфтарға хеҙмәт итеүсе динде һәм руханиҙарҙы күҙ уңында тотҡан булһа кәрәк. Нисек кенә булмаһын, Бабичтың симпатияһы күҙ яғында түгел, ә иҙелеүсе ҡатламды кәүҙәләндереүсе һәм ҡандаланың сәсрәп барып төшкәнен күреп ҡыуаныусы ҡул яғында.

Шул заманда татар һәм башҡорт ижтимағи тормошонда теге йәки был яҡта тороп, актив ҡатнашыусы йәмғиәт, культура эшмәкәрҙәре, сауҙагәрҙәр, байҙар һәм руханиҙарға үҙҙәренә лайыҡ баһа биреп, ыңғайҙарынан — еңелсә юмор, тиҫкәреләренән әсе мыҫҡыл менән көлгән һәм әҙәм көлкөһөнә ҡалдырған «Китабеннас» әҫәре менән «Ғазазил» поэмаһында Бабичтың сатирик таланты тағы ла асығыраҡ һәм тулыраҡ сағыла.

«Ғазазил» поэмаһын шағир иблистең күктән ергә һөрөлөүе тураһындағы дини легенданы файҙаланып, уға пародия итеп ижад иткән. Поэманың идеяһын үҙ заманында Ғ.Ибраһимов билдәләп үткәйне. Поэма бигерәк тә донъя яратылышы тураһындағы дини уйҙырмаларҙың төпһөҙ һәм бер ҡатлы булыуынан әсе көлөүе һәм уларҙы емереп ташлауы менән дини легендаға

ғына түгел, динден үҙенә лә пародия булып яңғырай. Иблистең күктән ергә һөрөлөүен һәм шуға бәйләнешле ваҡиғаларҙы комик ситуацияларҙа биреүе менән дә Бабич дини хөрәфәттәрҙең асылын фаш иткән.

Ғазазилдың аллаға, уның ҡанундарына ҡаршы баш күтәреүендә бунтарь характерлы Бабичтың үҙ романтик геройына ла бик яҡын тороуын күрмәй үтеү мөмкин түгел. «Донъяға» шиғырында Бабич быға тиклем йәшәп килгән ҡанундарға ҡаршы бына ниндәй бунт күтәрә:

Һалҡын аҡылың
Үҙеңә булһын,
Теймә күңелемә,
Үҙемдә торһон:
　　Күңелем — ялҡын,
　　Ғүмерем — алтын.
Үҙ маяғымды
Үҙемсә ҡаҙап,
Үҙ һабағымды
Үҙемсә аңлап,
Юлдар яһармын,
Шулай йәшәрмен,
Күктә осормон,
Йондоҙ булырмын,
Диңгеҙ кисермен,
Теләһәм нишләрмен:
　　Мин — ирек йәне,
　　Ханы, солтаны.
Мин — үҙем әҙәп,
Үҙем — нәзәкәт,
Донъя үҙемә
Итһен итәғәт!
Иманым — үҙем!
Ҡөрьәндер — һүҙем!

Ғазазилдың бунтында ла беҙ тап ошондай ынтылыштар менән осрашмайбыҙмы ни:

Иблис әйтте: «Дәүләтеңде һанһынам,
Әммә шуныһы: буйһонорға кәмһенәм!
Сөнки мин ҙур, сөнки мин — нур, мин — ғалим,
Үҙ-үҙемә кескенә бер алла мин!»

Артабан, Иблистең ерҙә кешеләрҙең күңелен яулап, уларҙы аҙҙырыуына, тереклек һыуы «әбелхәятты», алланан урлап алып, донъяға мәңгелек йәшәү бөркөргә ниәтләнеүенә, ҡыҙҙарынан «Марсельеза» йырлатып йөрөтөүҙәренә лә бер ҡатлы көлкө итеп кенә ҡарарға

ярамай. Бында ла Бабичтың тел төбө шаҡтай тәрәндә. Поэма дини легендаға пародия булып килеп тыуһа ла, тап бына ошо заманда, ҡанундарға ҡаршы сығып, уларҙы емерергә әҙерлек осоронда яҙылыуы уның заман менән эске бәйләнешен тағы ла көсәйтә.

Бабич иблис ҡотҡоһона бирелеп аҙған кешеләрҙә кемдәрҙе күҙ уңында тота? Әллә бының менән мосолман руханиҙарының һәм юғары ҡатламдарҙың революцион эшселәр хәрәкәтен «юлдан яҙғандар, иблистәр, шайтандар хәрәкәте» тип ҡарауҙарынан ирония менән көләме, әллә үҙенең революцион хәрәкәтте, уның асылын тулыһынса аңлап етмәүен сағылдырамы? Быларҙы өҙөп кенә әйтеүе ҡыйын, ләкин беҙ шағирҙың лирик геройының поэманың аҙағында бына ошо аҙған, юлдан яҙған кешеләрҙең атына атланып китеүен асыҡ күрәбеҙ. Шуға ла поэманы конкрет заман һәм ундағы ҡапма-ҡаршы хәрәкәттәрҙән, Бабичтың донъяға ҡарашынан һәм бөтә ижад йүнәлешенән айырып ҡарап булмай. Ғ.Ибраһимовтың хәбәр итеүенсә, Бабич поэмаһының икенсе киҫәген дә яҙған булған. Тимәк, был көйөнсә уға тамамланған әҫәр итеп ҡарап булмай, шуға ла поэма серле булып ҡала бирә.

Шул рәүешле Беренсе донъя һуғышы осоронда Бабич поэзияһы идея йөкмәткеһе яғынан да, художество кимәле яғынан да башҡорт һәм татар поэзияһында билдәле бер урын алған ижад булып әүерелде. Уның ижады, шаҡтай бай традициялар нигеҙендә үҫеп сығып, татар, башҡорт әҙәби процесының бер уртаҡ күренеше булды. Ләкин милли ерлеге, милли колориты, башҡорт халыҡ ижады традицияларын киң ҡулланыуы яғынан башҡорт поэзияһының үҙаллылыҡҡа ынтылышында бер аҙым алға атланы. «Көтәм» шиғырын башҡорт телендә яҙып, матбуғатта шул көйө баҫтырырға тырышыу факты ла быға асыҡ миҫалдарҙың береһе булып тора.

* * *

Илде бөлгөнлөккә дусар итеп өс йыл буйы дауам иткән империалистик һуғыш синфи ҡаршылыҡтарҙы быға тиклем күрелмәгән хәлдә киҫкенләштерҙе һәм революцион ситуацияның тамам өлгөрөп етеүенә алып килде.

1917 йылдың февралендә буржуаз-демократик революция ҡабынып китте һәм, Россиялағы беренсе революция башҡара алмай ҡалған ҙур эште башҡарып, батшаны тәхетенән баш тартырға мәжбүр итте. Пролетариаттың етерлек дәрәжәлә ойошоп өлгөрмәүе арҡаһында власть октябристар һәм кадеттар етәкселегендәге буржуаз хөкүмәт ҡулына эләкһә лә, Петроградта һәм башҡа ҡалаларҙа эшселәр һәм һалдаттар депутаттары Советтары төҙөлөүе революцион халыҡтың ҙур еңеүе ине. Был ваҡиға Россия тарихында бығаса күрелмәгән ҙур һәм ҡыуаныслы ваҡиға булды.

Беренсе рус революцияһына ла ҙур өмөт бағлап, уның еңелеү фажиғәһен үҙ баштарынан кисергән башҡорт шағирҙарының күбеһе быны көтөлгән бәхетле киләсәктең алға килеүе итеп ҡабул иттеләр.

М.Ғафуриҙың «Хөрриәт иртәһе», «Ҡурҡмағыҙ», «Азатлыҡ хөрмәтенә», С.Ҡудаштың «Хөрриәт шәрәфенә», «Ирек таңында», Ш.Бабичтың «Тәмҫил киҫәге», «Хөрриәт бүләге», «Йәшәһен эшселәр», Я.Юмаевтың «Шат күңелдән», Б.Мирзановтың «Хөрриәт көндәрендә» шиғырҙары Февраль революцияһы еңеп сыҡҡандан һуң яҙылған, шатлыҡ тойғолары бөркөлөп торған тәүге шиғырҙар булды.

Ҙур шағир Ғафуриҙың был көндәрҙәге шатлыҡлы кисерештәре, үҙ күңеленә генә һыйыша алмай, урғылып урамға бәреп сыҡты һәм ҡыҙыл байраҡ күтәреп, азатлыҡ йырҙары йырлап килеүсе халыҡ тантанаһына барып ҡушылды:

Эй халыҡ шат! Һәммәһе уйнай, көлә,
Ҡаршынан балҡып ҡыҙыл байраҡ килә!..
Эшселәрҙең ирҙәре һәм ҡыҙҙары
Йырлайҙар берҙәм азатлыҡ йырҙарын...
Йырлайҙар, берҙәм былар шатлыҡ менән,
Береһен-бере ҡотлай азатлыҡ менән.
Бер ҡарайым был халыҡтың шатлығын,
Барса хәсрәт, ҡайғынан азатлығын;
Бер ҡарайым, шатланып, ал яҡҡа мин,
Елберләп килгән ҡыҙыл байраҡҡа мин.

*(«Хөрриәт иртәһе»)*

Ғафури революцияның еңеүе уңайы менән яҙған ошо тәүге шиғырында уҡ революцион халыҡ образын, тарихты хәрәкәт иттереүсе төп көс булған халыҡ мас-

салары образын тыуҙырҙы. Һәм шиғырҙың лирик геройы ла был массанан айырылып тормай, улар сафына баҫып, «Мин дә йырлайым шатлығымдан бергәләп» ти. Шиғырҙың еңелсә ритмик интонацияһы ла сайпылырға торған шатлыҡ тойғоларының көсөн һәм ҙурлығын раҫлай, уның дөйөм рухынан, бығау-сынйырҙарҙы өҙөп, елкәһенән быға тиклем баҫып килгән ауыр йөктө һелкеп ташлап, турайып баҫҡан кешенең иркен һулышы ишетелә.

Февраль революцияһы еңеп, батша тәхетенән төшөрөлгәс, Ғафури таш диуарҙарҙы ватҡан көслө эшселәргә, уларҙың хәләл ҡандарына мансылған ҡыҙыл байраҡҡа табынды. Конкрет революцион ваҡиғаларҙың көслө тәьҫирендә яҙылған «Ҡыҙыл байраҡ» одаһында был хөрлөк, тигеҙлек байрағының бөтә әләмдәрҙән юғары тороусы, ысын иман, ысын хәҡиҡәт байрағы икәнлеген ҙур поэтик оҫталыҡ менән асып бирҙе. Был ода Октябрь революцияһына тиклемге башҡорт һәм татар поэзияһында иң көслө поэтик әҫәрҙәрҙең береһе булды. Новаторҙарса ижад ителгән ошо шиғыр менән Ғафури революцияға тиклемге поэзияның юғары нөктәһенә күтәрелде һәм башҡорт поэзияһында яңы дәүерҙең битен асып ебәрҙе. Ә үҙе, шағир һәм гражданин булараҡ, ысын хәҡиҡәт, ысын азатлыҡ өсөн көрәшеүселәрҙең сафына тайпылышһыҙ аяҡ баҫты.

Ш.Бабич, С.Ҡудаш, Я.Юмаевтарҙың был дәүерҙә яҙылған тәүге шиғырҙарынан күренеүенсә, улар ҙа Февраль революцияһын ҙур шатлыҡ менән ҡаршылайҙар.

Ямалетдин Юмаев «Шат көндәлдән» шиғырында, был ҙур һәм шатлыҡлы ваҡиғаға ысын күңелдән ҡыуанып, «ҡара көстөң ауыр сынйырҙарынан» ысҡынған шәхестең рухи донъяһындағы һынылышты алғы планға ҡуйһа, С.Ҡудаш революцияның бөйөклөгөн мөмкин тиклем тулыраҡ итеп асып бирергә ынтыла. С.Ҡудаш «Ирек таңында» шиғырында кешелек донъяһында булған был ҙур ваҡиғаны нурланып атҡан яҙғы таңда ирек ҡояшының йомшаҡ нурҙарында тантана итеүсе тәбиғәт картиналары аша һынландырҙы.

Йор күңелле Бабич иһә «Тәмҫил киҫәге» шиғырында был үҙгәреште кинәйәле алым менән кәүҙәләндерҙе. Серегән диуарҙарҙың емерелеп, йыртҡыс батшаларҙың йөҙ түбән әйләнеп төшөүен күреп ҡыуанышҡан һәм

иҙән аҫтарынан күтәрелеп сығып, төрлө «орган, бюролар» һайлап, үҙ йорттарын төҙөргә йөрөгән йәнлектәр образында иҙелгән милләттәрҙе күҙ уңында тотто, революциянан һуң уларҙың һәр береһе ирекле йәшәргә тейешлегенә ишара яһаны. «Хөрриәт бүләге» тигән шиғырында үҙенең был фекерен асығыраҡ итеп әйтеп тә бирҙе:

Етерлек йырттылар йөҙөңдө,
Сереттеләр золмәттә үҙеңде,
Һин хәҙер Ватандың хөр улы,
Бынан һуң асыҡ тот күҙеңде.
Көн тыуҙы ҡараңғы Ватанға,
Юл бөттө халыҡтарҙы таларға.
Ватаның Россия — уртаҡ ил,
Кер татар, кер татар, ҡатарға!

С.Ҡудаш та «Хөрриәт шәрәфенә» шиғырында:

Ничә йөҙ йыл без изелдек, күрмәдек ай, яҡты таң,
Сөйләсен телләр ҡурыҡмай, сайратып былбылларын.
Ҡалмасын дер-дер килеп ҡурҡаҡ йәшәүләр, ҡайғылар
Ташласын татар, юғалтсын бар кебек зар-моңдарын[195], —

тип иң беренсе планға милли азатлыҡ мәсьәләһен килтереп ҡуйҙы. Иҙелгән милләт вәкилдәренең тауышы булараҡ, был тәбиғи ине. Шул уҡ ваҡытта рус демократик әҙәбиәтенең һәм революцион-демократик йүнәлештәге өлкән быуын шағирҙары Ғ.Туҡай, М.Ғафуриҙарҙың көслө йоғонтоһон кисергән Ш.Бабич менән С.Ҡудаш, буржуаз-демократик революция еңеп сыҡҡас, тик милли азатлыҡ мәсьәләләрен алға ҡуйыу менән генә туҡтап ҡалманылар. Бабич буржуаз милләтселәрҙең хәрәкәтенә ҡушылып китмәҫтән алдараҡ яҙылған «Йәшәһен эшселәр», «Байҙарға», «Буржуй», «Мөртәт социалистарға», «Эй, большевик» кеүек шиғырҙарында, донъяға баш булыусы буржуйҙарҙы фаш итеп, «бөтә донъя мөлкәтен» үҙ ҡулдары менән тыуҙырыусы эшселәрҙе яҡлап сыҡты, уларҙы, форсат барҙа, берлек тыуын ҡулға алып, үҙ хаҡтарын дауларға саҡырҙы.

---

[195] Тормыш, 1917, 16 март.

**Сәйфи Ҡудашҡа** ла буржуаз-демократик революцияның еңеп сығыуы һәм батшаның тәхеттән ҡолатылыуы ҙур илһам бирә. Унын ижады был осорҙа айырата активлашып китә. Ул Февраль менән Октябрь революциялары араһында ғына «Аҡ билеттар бәйете», «Азатлыҡ йырҙары» тигән китаптарын баҫтырып өлгөрә, 1918 йылда сыҡҡан «Татар теләге» тигән өсөнсө йыйынтығына ингән шиғырҙар ҙа, нигеҙҙә, ошо ике революция араһында яҙылған. Шулай уҡ «Тормыш», «Ауаз», «Башҡорт», «Алға» һәм башҡа газеталарҙа баҫылып сығып та был йыйынтыҡтарына инмәй ҡалған байтаҡ шиғырҙары бар.

Сәйфи Ҡудашта әҙәбиәткә бирелеү бик иртә уянһа ла, унын матбуғатҡа сыға башлауы 1914 йылға ҡарай. Үҙенең тәүге шиғырҙарында уҡ, Туҡай поэтик мәктәбенең бер шәкерте булараҡ, ул башлаған демократик поэзияны дауам иттерергә ынтыла.

«Ауыл йырҙары», «Ана-бына» (1915) шиғырҙарында, халыҡтың көлкөлө йырҙарына стилизация яһап, «дин вә мәғишәтселәрҙе», халыҡ аңын томалаусы реакцион муллаларҙы, ҡомһоҙ ишандарҙы ҡаты тәнҡит итә. «Йәш шағирҙың һүҙҙәрендә» (1916), остазы Ғ.Туҡай кеүек, «үҙ халҡының моңон һәм зарын һөйләп», бәхетле киләсәк өсөн көрәшеп йәшәргә һүҙ бирә. Был шиғырҙарында уҡ Ғ.Туҡай поэзияһына хас булған ритмика-интонацияларҙы һәм поэтик алымдарҙы ярайһы оҫта файҙалана, был күренеш йәш шағирҙың Туҡай менән рухи яҡынлығын раҫлап тора. Шулай уҡ С.Ҡудаш ижадының башланғыс осоронда уҡ, поэзияны халыҡҡа яҡынлаштырыу яғында булып, халыҡ йырҙары традицияларына мөрәжәғәт итә.

Февраль революцияһы осоронда, бигерәк тә унын тәүге көндәрендә яҙылған шиғырҙарында иң киң ҡулланылған алым булып контраст алымы торҙо тип әйтергә мөмкин. Заманалар алмашынған, иҫкелек емерелеп, яңының тыуған осоро өсөн был тәбиғи күренеш ине.

С.Ҡудаш та «Ауаз» тигән шиғырында яулап алынған азатлыҡты һәм шат көндәрҙе үткән ҡара көндәргә ҡаршы ҡуйып һүрәтләй:

Зәррәдәй[196] нур, яҡтылыҡ юҡ, дөм ҡараңғы төн иде,
Юҡ хәят, тик бар да әсир, мәхкүм[197] иде, тотҡын иде.
Бәйләнеп телләр, әйтә алмый эчдәге зар-моңларын,
Сыҡратып зинжир-боғаулар эшче ҡаһарман ҡулдарын.
Аһ орып, ҡан-йәш түгеп, ҡоллыҡда илнең ирләре
Чределәр зиндан эчендә, һәм таланды ерләре.
Айрылып йорт-ере, илеңдән чын ватан даһилары,
Хур булып, хәҡир булып үтде Себердә көнләре.

Шиғырҙа артабан «балҡытып донъя йөҙөн ап-аҡ вә нурлы таң» атыуы һүрәтләнә. Был символик таң образы «ҡоллоҡ бығауҙарын селпәрәмә» килтереүсе һәм «шайтан тәхеттәрен емереүсе» революция тулҡындары менән барып тоташа:

Шад күңелдән яңғырады сөенечле бер йәмле ауаз:
«Йәшәсен эшче халыҡ!..» Китде болыт, күкдә аяз[198].

Бөтә тауышҡа әйтелгән «Йәшәһен эшсе халыҡ!» тигән һүҙҙәр ҡоро декларация ғына түгел ине, әлбиттә. Шағир революция еңеп сыҡҡандың тәүге көндәрендә яҙылған «Ер», «Эшселәргә» тигән шиғырҙарында ла хеҙмәт халҡына ни дәрәжәлә яҡын торғанлығын асыҡ күрһәтте. Һәм, М.Ғафури кеүек үк, 1905—1907 йылдарҙағы революция осоронда «Урал» газетаһы, «Чүкеч», «Карчыға» журналдары биттәрендә киң таралған, ләкин реакция һәм һуғыш йылдарында туҡталып торған эшсе-крәҫтиән талаптарын сағылдырыусы революцион поэзияның һуғышсан традицияларын дауам иттерҙе.

Шул рәүешле, С.Ҡудаш илдә буржуаз-демократик революция еңгән осорҙа быға тиклем синфи иҙелеү аҫтында йәшәгән эшсе-крәҫтиәндәргә теләктәшлек итеүе, уларҙы үҙ хаҡтарын дауларға саҡырыуы менән, һис шикһеҙ, дөрөҫ йүнәлештә торҙо. Ләкин әле ул, башҡа бик күп интеллигенттар кеүек, буржуаз Ваҡытлы хөкүмәттең политикаһын аңлап еткермәй ине.

Буржуазия, власты үҙ ҡулына эләктереү менән, илдәге ике власлылыҡты бөтөрөү, үҙенең контрреволюцион диктатураһын урынлаштырыу өсөн көрәш йәйел-

[196] Зәррә —остоҡ, бөртөк.
[197] Мәхкүм — хөкөм ителгән.
[198] Сәйфи Ҡудаш. Азатлыҡ җырлары. — Уфа, 1917, 4—5-нсы биттәр.

дереп ебәрҙе. Ул илдәге революция тулҡынын баҫтырыу, халыҡтың иғтибарын ситкә тартыу өсөн, һуғышты «тамам еңеүгә» тиклем дауам иттереү политикаһын тотто. Эшселәрҙең экономик хәле элеккесә ҡала бирҙе, буржуазия аграр мәсьәләләрҙе хәл итеүҙе лә төрлө һылтауҙар менән кисектерә килде, иҙелгән халыҡтарға милли азатлыҡ бирелмәне. Был мәсьәләләрҙең барыһын да тик буржуаз-демократик революцияны социалистик революцияға табан үҫтереп, социалистик революцияның еңеп сығыуы ғына хәл итә ала ине.

Революцион пролетариаттың авангарды — В.И.Ленин етәкселегендәге большевиктар партияһы был осор буржуаз-демократик революцияны социалистик революцияға табан үҫтереү, социалистик революцияны әҙерләү буйынса киң хәрәкәт йәйелдереп ебәрҙе. Ошондай ҡатмарлы шарттарҙа халыҡты революцион теория менән ҡоралландырып, социалистик революцияның тактика мәсьәләләрен хәл итеүҙә В.И.Лениндың «Апрель тезистары», большевиктар партияһының VII Бөтә Россия (Апрель) конференцияһы мөһим роль уйнанылар. Был конференцияла большевиктар партияһының эшселәр һәм һалдаттар Советтарына мөнәсәбәте, Ваҡытлы хөкүмәткә һәм һуғышҡа ҡарата мөнәсәбәт, милли һәм башҡа мөһим мәсьәләләр ҡаралды. В.И.Лениндың туранан-тура етәкселегендә үткән Апрель конференцияһы ағымдағы хәлдәргә тәрән анализ яһаны һәм партияның яҡындағы бурыстарын асыҡланы. Партия был осорҙа һаман да империалистик йөҙөн юғалтмаған һуғышты туҡтатыуға һәм бөтә власты Советтар ҡулына яулап алыуға табан йүнәлеш тотто.

Әлбиттә, башҡорт шағирҙарының күбеһе илдәге политик шарттарға дөрөҫ баһа бирерлек юғарылыҡта түгел ине. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, демократик йүнәлештәге әҙиптәр империалистик һуғышҡа ҡаршы сығыш яһауҙары һәм эшсе-крәҫтиәндәрҙе үҙ хаҡтарын тулыһынса яҡлау өсөн көрәшкә саҡырыуҙары менән үҙҙәренән-үҙҙәре партия политикаһына яҡын килделәр.

Был осорҙа демократик йүнәлештәге башҡорт шағирҙары айырата империалистик һуғышҡа ҡаршы берҙәм фронт булып сығыш яһанылар. Һуғыш башланған көндән алып уға ҡаршы тороусы Ғафури, илгә хөрриәт таңы тыуғас та, һуғыштың һаман дауам иттерелеүенә айыҡ кеше башына һыймаған бер эш итеп ҡараны:

Бында хөрриәт ауазы ерҙе-күкте яңғырата,
Унда беҙҙең күп туғандар тилмереп телһеҙ ята.
...Ундағы беҙҙең туғандар туп ата бер-берећенә,
Ҡырыла унда ниндәй йәндәр, ҡандары ергә һеңә.
Ул туғандарҙың ҡулын сисәйек, улар булһын азат,
Ҡысҡырайыҡ бер юлы: «Бөтһөн һуғыш! Бөтһөн йыһад!»

*(«Бөтһөн империализм һугышы»)*

Һуғыштың башланыуын шомло бер символика менән сағылдырған Я.Юмаев та Февраль революцияһынан һуң яҙған «Һуғыш» шиғырында, реалистик позициянан яҡын килеп, һуғыштың кешелек тәбиғәтенә ят, мәғәнәһеҙ күренеш икәнен асып бирҙе һәм уға ҡаршы асыҡтан-асыҡ протест яһау юғарылығына күтәрелде.

С.Ҡудаштың «Аҡ билеттар бәйетендә» үк үҫеш алған был тема Февраль революцияһынан һуңғы осорҙағы ижадында айырата ҙур урын биләй һәм, Ваҡытлы хөкүмәттең политикаһына төшөнә барыу менән, билдәле бер эволюция кисерә. «Доға» шиғырында әле шағир һуғыштың туҡталыуын зарығып алланан көтһә, бынан һуң яҙылған «Ниңә?», «Сеү!», «Өс йыл» шиғырҙарында инде һуғышты асыҡтан-асыҡ кире ҡаға.

Ни өчен бетми сугыш: эшчегә ул нәрсәгә?
Буржуазлар бәхете өчен без суғышабыз нәрсәгә? —

ти ул «Ниңә?» шиғырында. Бында инде беҙ һуғыштың социаль айышына шаҡтай үтеп ингән һәм уға революция уңайы менән хәрәкәткә килгән киң халыҡ массалары позицияһынан тороп баһа биреүсе шағирҙың тауышын ишетәбеҙ.

Буржуаз Ваҡытлы хөкүмәт власҡа килгән көндәрендә, революцион халыҡ хәрәкәтенән ҡурҡып, үҙен халыҡ демократияһын кәүҙәләндереүсе хөкүмәт итеп танытырға теләһә лә, торған һайын уның реакцион йөҙө асыҡлана барҙы. Аҙаҡ килеп, ул июль, август айҙарында контрреволюцион хәрәкәтен асыҡтан-асыҡ йәйелдереп ебәрҙе. Был осорҙа Ваҡытлы хөкүмәт, властыы тулыһынса үҙ ҡулына алып, революцияны мөмкин тиклем тиҙерәк быуып ташларға һәм Россияла монархия урынлаштырырға ниәтләнде. Ул үҙенең маҡсатына ирешеү өсөн унһыҙ ҙа ҡаҡшаған экономиканы артабан бөлдөрөү юлын һайланы. Завод-фабрикалар ябылып, меңәрләгән эшселәр эшһеҙ ҡалдырылды, ҡиммәтселек, спе-

куляция көсәйҙе, аслыҡ, ялanғаслыҡ хөкөм һөрҙө. Революцияны былай ҙа быуып ташлау мөмкин булмағас, Ваҡытлы хөкүмәт, илдә хәрби диктатура урынлаштырырға булып, 25 августа генерал Корнилов етәкселегендә хәрби фетнә ойоштorҙо.

Донъяның был ыңғайға китеше, революцияның ҡаҙаныштарына ҡыуанып, халыҡты артабан үҙ хаҡтарын дауларға саҡырыусы шағирҙарҙа буржуаз Ваҡытлы хөкүмәткә, халыҡ азатлығына ҡул һоноусыларға ҡарата нәфрәт уятмай ҡалыуы мөмкин түгел ине. М.Ғафури, Д.Юлтый, С.Ҡудаштарҙың ижадында элек-электән килгән һуғышҡа ҡаршы протест яулап алынған азатлыҡты һәм революцияның артабанғы үҫешен быуырға ынтылыусы Ваҡытлы хөкүмәттең үҙенә ҡаршы ҡаты нәфрәт булып әүерелде. М.Ғафури «Хөрриәткә ҡаршы тороусыларға», «Аждаһа» шиғырҙарында «хөрриәт әһелдәрен» азатлыҡ дошмандарына ҡаршы хәл иткес көрәшкә саҡыра:

Ҡанлы байраҡтарҙы ҡабат ҡулға алайыҡ,
Ул яуыз дошманға ҡаршы ҡуҙғалайыҡ,
Хөрриәт йырҙарын йырлап барайыҡ, —
Әһеле хөрриәт, тағы ҡуҙғалығыҙ:
Баш күтәрмәксе була дошманыбыҙ!
Мәңгегә үлтерелһен ул ҙур аждаһа,
Баш күтәрмәҫлек булһын был донъяға,
Был халыҡтарға бирелһен ысын баһа, —
Әһеле хөрриәт, тағы ҡуҙғалығыҙ:
Баш күтәрмәксе була дошманыбыҙ!..

*(«Аждаһа»)*

Ваҡытлы хөкүмәттең, «Һуғышты еңеп сыҡҡансы алып барырға» тигән лозунг ташлап, һалдаттар араһындағы төрлө йыйылыштарҙы һәм һайлауҙарҙы тыйыуы, Февраль революцияһынан һуң татар телендә сығып килгән «Окоп тауышы» газетаһын «большевиктар агитацияһын алып бара» тип ябып ҡуйыуы, ғөмүмән, армияла батша заманындағы тәртиптәрҙе яңынан урынлаштырыуы һалдаттар араһындағы төрлө политик кампанияларҙа актив ҡатнашыусы Дауыт Юлтыйҙа ҙур нәфрәт уята. Ул ошо осорҙа яҙылған «Ләғнәт» шиғырында:

Күп юлдар йөрөнөм,
Күп илдәр күрҙем,

Күп һыуҙар кистем,
Шан, тигеҙһеҙлек!
Ҡан, өмөтһөҙлөк!
Йәндәр ҡыйыла,
Ҡандар ҡойола,
Бар йыһанына,
Ҙурҙар шанына
Ләғнәт уҡыйым,
Ләғнәт — барыһына, —

тип, яуызлыҡ һәм тигеҙһеҙлек менән тулған донъяға ҡаршы бунт күтәреп, ләғнәт уҡыһа, «Һин ҡайҙа?» шиғырында инде уның романтик геройы бәхет һәм иркенлек теләп осоусы ҡанаттарына таштар аҫылыуға ҡарамаҫтан:

Иркем — хөр ҡошом,
Ос һин киң юлға,
Ҡанат осонан
Һип нур күңелгә!
Мәғбудханабыҙ[199] —
Аллаһыҙ, сикһеҙ,
Алда йылтырай,
Етербеҙ шикһеҙ, —

тип азатлыҡ өсөн көрәш пафосы менән яна.

«Шағирҙың был протестары, — тип яҙа Ғ.Хөсәйенов, — империалистик һуғышты граждандар һуғышына әйләндереү өсөн большевистик көрәш идеяларына тиклем күтәрелеп етмәһә лә, уларҙа һалдат массаларының күпселек өлөшө лә хәҙер ошо хәҡиҡәт алдында тороуын аңлатҡан настроениеларҙың сағылышын тойорға мөмкин»[200].

Февраль революцияһы еңеп сыҡҡан көндәрҙә, «һыҡратып иҙгән бығау-сынйырҙар селпәрәмә килде», «донъяны нур ҡапланы» тигән С.Ҡудаш хәҙер:

Тынар микән донъя берәр заман,
Китәр микән өстән ҡалын золмәт,
Нурлар чәчеп, ак таң алланып?
Ҡайчан бетәр мескен фәҡирләрнең
Ачы хәсрәт, ҡайғы-моңлары?

---

[199] Мәғбудханабыҙ — табыныр йортобоҙ.

[200] Ғайса Хөсәйенов. Дауыт Юлтый: Тормошо һәм ижады, 50-се бит.

Бичаралар ҡайчан рәхәт йәшәр,
Тынычланып тормыш юллары?![201] —

тип зарлана, һуғышҡа ҡаршы протест булып яңғыраған «Өс йыл» шиғырындағы уй фекерен, аһ-зарҙарын ул «Аслыҡ» шиғырында дауам иттерә:

Ҡып-ҡызыл ҡан чыҡҡан күк йөзенә,
Ер өстендә ачлар ыңғыраша;
Аһ оралар меҫкен, ач-ғәрипләр,
Тол-йәтимләр өзелеп йығлаша[202].

Һуғыштың дауам итеүе, һәм илдә аслыҡ хөкөм һөрөүе, тол-етемдәрҙең, ғәриптәрҙең һәм ас-яланғастарҙың аһтары, әлбиттә, шағир йөрәге аша үтмәүе һәм уны төшөнкөлөккә этәрмәүе мөмкин түгел ине.

Әммә С.Ҡудаш был осор бөтөнләйе менән төшөнкөлөккә бирелеп ҡалманы. «Ахры заман», «Ахры заманға ғиләүә», «Хаиндарға» шиғырҙарында Ваҡытлы хөкүмәттең халыҡҡа ҡаршы йүнәлдерелгән реакцион политикаһын аяуһыҙ фаш итте. Өфөлә сыға башлаған большевистик «Алға» газетаһында баҫылған «Алға» шиғырында эшсе-крәҫтиәндәрҙе үҙҙәренең бәхетле киләсәген яулау өсөн яңынан көрәшкә күтәрелергә саҡырҙы:

Әй фәҡир халыҡ, аҡ көнөң алда,
Алда ер көтә, алда мир көтә...
Алда көч кәриһ[203] ерне селкетә,
Атлағың алға, иҡбалың[204] алда,
Алда сәғәдәт, алға да алға[205].

Шулай итеп, беҙ Февраль революцияһын ҙур шатлыҡ менән ҡаршылап, тәүге көндәрҙә уға «ысын азатлыҡ тыуыуы» итеп ҡараусы Ғафури, Юлтый, Ҡудаш һәм башҡа ҡайһы бер шағирҙарҙың, тора-бара Ваҡытлы хөкүмәттең политикаһына төшөнөп, һуғышҡа ҡаршы киҫкен протест яһауҙары, халыҡты ер, социаль азатлыҡ даулау өсөн артабан көрәшкә өндәүҙәре менән

---

[201] Тормыш, 1917, 25 август.
[202] Тормыш, 1917, 1 сентябрь.
[203] Көч кәриһ — ерәнес көс, реакцион көс.
[204] Иҡбал — бәхет, уңыш.
[205] Алға, 1917, 4 август, № 1.

дөйөм демократик позицияла тороп, берҙәм сығыш яһауҙарын асыҡ күреп үттек.

М.Ғафури, Д.Юлтыйҙар, был осор дөйөм демократик азатлыҡ талаптары менән генә сикләнеп ҡалмай, ижадтары һәм донъяға ҡараштары менән синфи азатлыҡ өсөн көрәш алып барыусы пролетариат позицияһына шаҡтай яҡын киләләр. Был уларҙың артабан Бөйөк Октябрь социалистик революцияһын икеләнеүһеҙ ҡабул итеүҙәрендә лә асыҡ күренә.

С.Ҡудаш менән Ш.Бабич, ижадтары менән баштан уҡ демократик йүнәлештә тороп, Февраль революцияһынан һуң да күп мәсьәләләр буйынса дөрөҫ юлда булһалар ҙа, Бөйөк Октябрь социалистик революцияһын һәм уның идеяларын ҡабул итеүгә ураў юлдар, хаталаныуҙар аша килделәр.

Билдәле булыуынса, XX быуат башында татар ваҡытлы матбуғат биттәрендә милләт, милли тел һәм милли культура тураһында туҡтауһыҙ бәхәстәр барҙы. Әлбиттә, татар буржуазияһы, үҙенең мөмкинлектәренән файҙаланып, был мәсьәләләрҙә инициативаны үҙ ҡулынан ысҡындырманы. Татар милли буржуазияһы экономик һәм культура үҫеше яғынан арттараҡ ҡалған башҡорт, ҡаҙаҡ кеүек халыҡтарҙы «татарҙан йотторОу» һәм шуның менән үҙ сиктәрен киңәйтеү маҡсатын да тотто.

Февраль революцияһынан һуң шуға ла татар буржуаз милләтселәре, «ерле мөхтәриәткә» ҡырҡа ҡаршы сығып (сөнки «ерле мөхтәриәт» уларҙың йоғонтоһо сфераһын территориаль яҡтан ныҡ сикләй ине), «милли вә мәдәни мөхтәриәт» төҙөү идеяһын алға һөрҙөләр. Һәм 22 июлдә Бөтә Россия мосолмандарының хәрби һәм дини съездарының берләшкән ултырышында эске Россия һәм Себер мосолмандарының «милли вә мәдәни мөхтәриәтен» иғлан иттеләр. Шул рәүешле татар милләтсел буржуазияһы «милли культура автономияһын» төҙөү юлы менән, бөтә эске Россия мосолмандарын үҙ ҡул аҫтына алып, күптәнге шовинистик хыялын тормошҡа ашырырға тырышты.

Сәйфи Ҡудаштың юғарыла күҙәтеү яһалған халыҡсан демократик ижадына ҡапма-ҡаршы характерҙа булған һәм нигеҙҙә «Татар теләге» тигән өсөнсө китабына тупланған милләтселек тойғоһо менән һуғарылған

шиғырҙарын да ана шул татар буржуаз милләтселегенең көслө йоғонтоһонан айырып ҡарап булмай.

Шулай итеп, был осорҙа С.Ҡудаштың ижады дөйөм демократик һәм милләтселек кеүек бер-берeһенә ҡапма-ҡаршы булған ике йүнәлештә үҫеш алғанлығы күренә. Шағир Бөйөк Октябрь социалистик революцияһын ошо хәлдә ҡаршы алды. Ә инде Октябрь хаҡлыҡтың буржуаз милләтселәр күтәргән «Йәшел байраҡ» яғында булмай, эшселәр синыфының көслө ҡулдары күтәргән һәм Ғафури дан йырлаған Ҡыҙыл байраҡ яғында икәнлеген асыҡ күрһәтте. Поэзияһының һау йүнәлешенән, дөйөм рухынан асыҡ күренеүенсә, «Ҡыҙыл байраҡ» алға һөргән идеялар С.Ҡудашҡа элек тә ят түгел ине, шуға ла ул артабанғы ижадында бына ошо хаҡлыҡ, тигеҙлек байрағы булған Ҡыҙыл байраҡты маяҡ итеп алды.

Февраль буржуаз-демократик революцияһы башҡорт халҡы араһында синфи ҡаршылыҡтарҙың көсәйгәндән-көсәйә барған осорона ғына түгел, бәлки милли-азатлыҡ хәрәкәтенең ҙур реаль көскә әүерелгән мәленә лә тура килде.

XX быуат башындағы социаль һәм милли иҙеүгә ҡаршы хәрәкәт, элекке антиколониаль сығыштарҙан айырмалы рәүештә, башҡорттар араһына капиталистик мөнәсәбәттәрҙең инде ярайһы уҡ үтеп инеүе менән тығыҙ бәйләнештә, башҡорт халҡының милләт булып формалаша башлау осоронда барҙы. Шуға ла 1905 йылғы революциянан һуң милли интеллигенция бермә-бер артты, башҡорттар араһында, үҙ милли әҙәби телен майҙанға сығарып, әҙәбиәтен, милли культураһын үҫтерергә тырышыусыларҙың да һаны арта, һәм был күренеш үҙенә бер хәрәкәт төҫөн ала. Был хәрәкәт батша хөкүмәтенең шовинистик политикаһына ғына түгел, пантюркизм һәм татар буржуаз милләтселегенә лә ҡаршы йүнәлдерелгәйне.

Әлбиттә, бөтә төр иҙеүҙәрҙән азат итеүҙе һәм һәр бер милләттең үҙ аллы үҫешенә юл асыуҙы социалистик революция ғына хәл итә ала ине. Башҡорт халҡының милли азатлығы ла, башҡорт крәҫтиәндәренең киләсәге лә бына ошо революцияның яҙмышы менән бәйләнгәйне.

Ләкин милли буржуазия Бөйөк Октябрь ҡаҙаныштарын үҙ мәнфәғәте өсөн файҙаланырға ынтылды. 1917

йылдың ноябрендә буржуаз милләтсе Зәки Вәлиди етәкселегендәге «Башҡорт мәркәз шураһы» Башҡортостанды «Автономиялы Башҡортостан» тип иғлан итте һәм көнсығыш райондарҙа үҙ хакимлығын тормошҡа ашыра башланы.

1918 йылда Башҡортостан территорияһында граждандар һуғышы йәйелеп китте. Был осор Вәлиди етәкселегендәге башҡорт хөкүмәте башҡорт халҡының был хәрәкәткә ылығып киткән өлөшөн, «милли хөрлөктө», «милли мөхтәриәтте» һаҡлайбыҙ тигән булып, буржуаз тәртиптәрҙе урынлаштырырға тырышты. Башҡорт һалдаттарының бер өлөшө, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән һәм айышына төшөнмәҫтән, Колчак һәм Дутов яғында булып сыҡты. Башҡорт халҡының синфи һәм милли мәнфәғәттәренә ҡапма-ҡаршы булған был хәрәкәткә буржуаз милләтселәр, шулай уҡ милли интеллигенцияның идея-политик позициялары тотороҡһоҙ булған бер өлөшөн дә йәлеп итә алдылар.

Эйе, әле яңыраҡ ҡына: «Бөтһөн инде: буржуаздар донъяға баш булмаһын! Бөтһөн инде: ярлылар мохтажяланғас йөрөмәһен!» («Байҙарға»), «Эшсе халыҡ йәшәһен, һөрһөн донъя сафаһын, берлек тыуын ҡулға алып, тигеҙ юлдар яһаһын!» («Йәшәһен эшселәр») тип йырлаған, пролетариат даһийы В.И.Ленин тураһында башҡорт-татар поэзияһында тәүге шиғырҙы яҙған Ш.Бабич был осорҙа үҙ поэзияһының идея йүнәлешенә хыянат итте: «милли мөхтәриәт», «милли азатлыҡ» тип һөрән һалыусы башҡорт буржуазияһының йырын йырланы, уның бөтә булмышын һәм ижадын бына ошо «милли мөхтәриәт» идеяһы солғап алды.

Ләкин уларҙың был осорҙағы ижадын, ғөмүмән, милли азатлыҡҡа, милли үҙаллылыҡҡа ынтылыштарын буржуаз милләтселәрҙең хәрәкәтенә бәйле конкрет осор менән генә сикләп ҡалып булмай. Эйе, уларҙың эскерһеҙ ынтылыштары буржуаз милләтселәрҙең бысрағы менән бысранды, ләкин был ынтылыштарҙың тамырҙары алыҫҡараҡ, башҡорт халҡының быуаттар буйы социаль һәм милли-колониаль иҙеүгә ҡаршы көрәш тарихына барып тоташҡайны.

Бабич ижадының был осорҙағы ошо һау яҡтарын күҙ уңында тотоп, Ә. Харисов: «Бабич үҙ тыуған иленә һәм халҡына ихлас бирелгән шағир булғанлыҡтан, бына шундай тәрән аҙашыуҙар, һаташыуҙар ваҡытында ла

уның лирикаһында кешене тәрән уйландыра һәм зауыҡландыра торған, ғорурландыра һәм дәртләндерә торған ҡыл өҙөлмәне, патриотизм мотивтары һүнмәне»[206], — тип яҙҙы.

Д.Юлтый, М.Ғафури, С.Яҡшығолов, Ф.Туйкин һәм башҡа башҡорт шағирҙары кеүек, Шәйехзада Бабич менән Хәбибулла Ғәбитов ижадтарының башланғыс осоронан уҡ башҡорт халыҡ поэзияһы традицияларына мөрәжәғәт иттеләр, был традицияларҙы ижади үҫтерә килделәр. Улар бигерәк тә оҙон йыр стилен һәм классик юғарылыҡҡа күтәрелгән ҡобайыр алымын иркен ҡулландылар. Халыҡ ижадындағы бай эстетик йөкмәтке һалынған традицион образдар һәм поэтик саралар был ике шағир ижадына бигерәк тә ошо һуңғы осорҙа дәррәү килеп инә. Ошоноң менән бергә тәбиғи рәүештә уларҙың теле лексик яҡтан ғәрәп-фарсы һүҙҙәренән әрселә, саф башҡорт телендә яҙылған айырым шиғырҙары тәү тапҡыр матбуғат битендә донъя күрә.

Был күренештәр бөтәһенән дә элек быға тиклем үҙаллылыҡҡа табан йылдам үҫеш кисереп тә, танылмай килгән башҡорт әҙәбиәтенә рәсми танылыу хоҡуғы яуларға тырышыуҙан килә ине.

Күп тә үтмәй, 1919 йылдың февралендә, башҡорт телендәге был башланғыстарға Бабичтың «Башҡорт халҡына көйлө хитап» тигән атаҡлы шиғыр-мөрәжәғәте килеп өҫтәлде. Был әҫәр, әле шаҡтай ҡаршылыҡлы булыуға ҡарамаҫтан, Бабичтың, тормошонда һәм ижадында ваҡытлыса булып үткән хаталаныуҙарҙан арынып, ысын азатлыҡ өсөн көрәшеүсе большевиктар партияһы яғына аяҡ баҫыуы, уның идеяларын тормошҡа ашырыу өсөн фиҙәҡәр көрәшкә тотоноу күренеше ине.

Шулай итеп, С.Ҡудаш, Ш.Бабич кеүек шағирҙар Февраль революцияһынан һуң ҙур идея-политик ҡаршылыҡтар аша үттеләр. Уларҙың был хаталарын буржуаз милләтселәрҙең хәрәкәттәре тағы ла тәрәнәйтеп ебәрҙе. Ләкин ижадтары һәм бөтә булмыштары менән халыҡ яғында торған был шағирҙар халыҡҡа ят һәм дошман булған яҡта бөтөнләйгә тороп ҡала алмайҙар ине. Граждандар һуғышының барышы һәм революцион

---

[206] Әхнәф Харисов. Әҙәби күренештәр, 62-се бит.

ысынбарлыҡ уларҙың күҙҙәрен асырға, хәҡиҡәттең ҡайһы яҡта икәнлеген аңларға ҙур ярҙам итте. Улар яңынан халыҡ яғына аяҡ баҫтылар һәм артабанғы ижадтарын һәм яҙмыштарын революция, халыҡ яҙмышы менән тығыҙ бәйләй алдылар.

* * *

XX быуат башындағы башҡорт поэзияһын өйрәнеү түбәндәге һығымталарға килтерә.

XX быуат башындағы Башҡортостандағы рухи тормош, Россиялағы беренсе буржуаз демократик революция тәьҫирендә, дөйөм йәнләнеү осоро кисерә. Был уяныу осоро халыҡтың быуаттар буйы азатлыҡ өсөн аяуһыҙ көрәше, үҙаллылыҡҡа ынтылышы менән тығыҙ бәйләнгән һәм шуның дауамы булып тора. Был йәнләнеүгә килтергән көстәрҙең иң олоһо — Россияла азатлыҡ хәрәкәтенең пролетар осоро башланыуында, социаль һәм милли азатлыҡ көрәшенә Коммунистар партияһы етәкселек итеүендә ине.

Башҡортостанға капиталистик мөнәсәбәттәр йылдам рәүештә үтеп инә барыуы менән бергә, 1905 йылғы революцияға тиклем үк халыҡ мәғарифы өлкәһендә һиҙелерлек йәнләнеү башланған була, ә инде 1905—1507 йылдарҙағы революция тәьҫирендә аң-белемгә, культураға ынтылыш, дөйөм милли характер алып, айырата көсәйеп китә. Был, берҙән, земстволар ҡарамағындағы рус-башҡорт мәктәптәре һәм мәҙрәсәләр селтәренең киңәйеүендә күренһә, икенсенән, мәҙрәсәләрҙәге уҡыу-уҡытыу программаларында донъяуи фәндәргә иғтибарҙың көсәйеүендә асыҡ күренә.

Был осорҙа шулай уҡ башҡорт халҡының ижтимағи-политик һәм милли аңын күтәреүгә булышлыҡ итеүсе төп факторҙарҙың береһе булып, 1905 йылғы революцияның бер ҡаҙанышы булараҡ килеп тыуған татар телендәге ваҡытлы матбуғат тора. Ваҡытлы матбуғат, берҙән, әҙәбиәткә килеүсе йәш көстәрҙе туплап, уларҙың әҫәрҙәрен уҡыусыларға еткереү йәһәтенән ҙур мөмкинлектәр асһа, икенсенән, айырата «Шура» журналы, «Ваҡыт», «Тормош» газеталары биттәрендә башҡорт халҡының тарихына, этнографияһына, көнкүрешенә арналған хеҙмәттәргә лә ҙур ғына урын бирелә. Башҡорт фольклоры әҫәрҙәрен йыйыу, өйрәнеүгә иғти-

бар ҙа бермә-бер көсәйә. Был органдарҙа йөкмәткеләре яғынан бер-береһенә ҡапма-ҡаршы характерҙа булып, төрлө ниәттән сығып яҙылыуҙарына ҡарамаҫтан, башҡорт халҡының яҙмышы мәсьәләләрен күтәреп сығыусы публицистикаға ла иғтибар көсәйә. Ә инде халыҡ яҙмышын үҙәккә ҡуйыусы публицистиканың килеп тыуыуы милли тормоштағы яңы осорҙоң башланыуына бәйләнгән.

Ижтимағи һәм милли тормоштағы яңы күренештәр менән бергә, әҙәбиәттең артабанғы үҫеш перспективаларын билдәләүсе яңы төрҙәрҙең, проза менән драматургияның, тәүге күренештәре барлыҡҡа килә. Айырата нәҫер, хикәйә һәм повесть жанрҙары сағыштырмаса киң тарала. Проза жанрҙарының был рәүешле йылдам үҫеш алыуына традицияларға бай булған рус әҙәбиәте һәм инде формалашып еткән татар әҙәбиәте ыңғай йоғонто яһай.

Шулай уҡ XX быуат башында дөйөм йәнләнеү уңайы менән башҡорттар араһында үҙ милли матбуғатын, милли яҙма һәм әҙәби телен тыуҙырыуға ынтылыштар ҙа була, ләкин төрлө сәбәптәр арҡаһында, был ынтылыштар тормошҡа ашмай ҡала.

XX быуат башындағы башҡорт поэзияһы уға тиклем булған яҙма һәм ауыҙ-тел поэзияһы традицияларына нигеҙләнеп үҫеш ала һәм яҡынса өс үҫеш этабы кисерә.

1905—1907 йылдарҙағы революция осоронда килеп тыуған поэзия беренсе этапҡа ҡарай. Уның йөкмәткеһе, бигерәк тә тәүге йылдарҙа, революцион-демократик мотивтарҙың көслө булыуы менән характерлана. Был йәһәттән большевистик «Урал» газетаһы, һул демократик йүнәлештәге «Чүкеч», «Карчыға» журналдары биттәрендә баҫылған эшсе-крәҫтиәндәрҙең көн үҙәгендәге талаптарын сағылдырыусы революцион рухтағы поэзия айырылып тора. Был поэзия татар-башҡорт эшсе-крәҫтиән массаһының тауышы булып килеп тыуа. Был төр поэзияны тыуҙырыуҙа башҡорттоң да, татарҙың да берҙәй ҡатнашлығы асыҡ, һәм был поэзия ике халыҡтың да синфи аңын уятыуға берҙәй хеҙмәт итә. Шуға ла был поэзия татар һәм башҡорт демократик интеллигенцияһының һәм эшсе-крәҫтиәндәренең интернациональ берҙәмлегенең кәүҙәләнеше итеп ҡарарға тейеш.

Ижадын мәғрифәтсе булып башлап ебәргән М. Ғафури поэзияһы ла был йылдарҙа революцион-демократик юғарылыҡҡа күтәрелә бара. Ләкин әле шағир мәғрифәтселек ҡараштарынан тулыһынса арынып бөтә алмай. Ғөмүмән, был заманда башҡорт поэзияһында, татар поэзияһынан айырмалы рәүештә, мәғрифәтселек идеялары өҫтөнлөк итә. Был С. Яҡшығолов, Д. Юлтый, Ғ.Хоҙаяровтарҙың башҡорттарҙы уяныуға, мәғрифәткә өндәүсе хитаптарынан да асыҡ күренеп тора. Әлбиттә, мәғрифәтселек поэзияһының дауам итеүе Башҡортостандың социаль-экономик хәленә, милли буржуазияның аяҡҡа баҫыуына, милли интеллигенцияның уяныуына тығыҙ бәйләнгән законлы бер күренеш ине.

Шулай уҡ был этапта үҙәк темаларҙың береһе — ер мәсьәләһе булды. Был туранан-тура башҡорт поэзияһының милли ерлегенә, халыҡтың социаль тормош шарттарына бәйләнгән.

Мәғрифәтселек идеяларын ер мәсьәләһенә тығыҙ бәйләп күтәреүе яғынан Сафуан Яҡшығолов ижады айырылып тора. Уның поэзияһы, нигеҙҙә, аяҡҡа баҫып килеүсе, ләкин «өлөштән мәхрүм ителгән» башҡорт буржуазияһының тауышы булып килеп тыуа. Ләкин шағир, мәғрифәтсе булараҡ, буржуаз рамкаларҙа ғына сикләнеп ҡалмай, дөйөм башҡорт халҡын, ярлыһын, байын айырып тормай, уяныуға, аң-белемгә эйә булырға саҡыра. Уның ижады башҡорт поэзияһының милли ерлеген нығытыуҙа үҙәк урында тороуы менән айырата әһәмиәтле.

Был беренсе этап поэзияһына публицистик тенденциозлыҡ хас, шулай уҡ унда дидактика, өгөт-нәсихәт алымы өҫтөнлөк итә. Тел яғынан ҡарағанда, был осор поэзияһы ғәрәп-фарсы, боронғо төрки һүҙҙәре менән шаҡтай сыбарланған. Рус әҙәбиәтенән өйрәнеү ҙә, нигеҙҙә, мәғрифәтселек реализмы принциптарынан сығып алып барыла. Иң күп тәржемә ителгән әҫәрҙәр И. А. Крылов мәҫәлдәре булыуы быға асыҡ миҫал булып тора.

1910—1914 йылдар поэзияһы икенсе этапҡа ҡарай. Был этап әлегә тиклем үҙәктә торған мәғрифәтселек иллюзияларынан арыныу, халыҡ бәхете өсөн көрәштең икенсе төрлө юлдарын эҙләү, икеләнеүҙәр, өмөтһөҙлөккә, күңел төшөнкөлөгөнә бирелеүҙәр менән характерлы. Был күренеш, һис шикһеҙ, ҡара реакция йылдары-

ның шауҡымы арҡаһында милли азатлыҡ өсөн көрәш ялҡыны һүрелә төшөү һәм шағирҙарҙың күбеһе илдәге яңы революцион күтәрелештән, дөйөм пролетариат көрәшенән ситтә тороуы менән анлатыла.

Буржуаз-демократик революция еңелгәндән һуң башланған реакция йылдары башҡорт поэзияһында ысынбарлыҡҡа оппозиция, киҫкен протест менән характерланған романтизмдың үҫеш алыуына килтерҙе. Романтизм ул — ҡатмарлы күренеш. Ысынбарлыҡҡа ризаһыҙлыҡ индивидуаль бунт формаһында ла, пассив формала ла булыуы мөмкин. Башҡорт поэзияһында ла ул шулай булды. М. Ғафури, Д. Юлтый кеүек, халыҡ массаларына яҡын тороусы шағирҙар ҙа, был осор ижтимағи тормоштан ситләшеп, ваҡыт-ваҡыт күңел төшөнкөлөгөнә бирелделәр, тынғылыҡ эҙләп тәбиғәт ҡосағына һыйындылар, эскерһеҙ сабый күңелен, саф мөхәббәтте идеаллаштырҙылар. Ләкин уларҙың ижтимағи пассивлығы шунан уҙып китмәне. Яңы революцион күтәрелеш йылдарында уларҙың романтик лирик геройы халыҡ бәхете өсөн актив көрәш позицияһына аяҡ баҫты.

Романтизмдың пассив тармағы айырата Я. Юмаев поэзияһының башланғыс осоронда ҡатмарлы характер алды. Ул, М. Ғафури, Д. Юлтыйҙар кеүек, тәбиғәт ҡосағына ташланыу, саф мөхәббәткә табыныу менән генә сикләнеп ҡалмай, суфый шағирҙарса, бар яҙмышын аллаға тапшырып, уның «тупһаһына» барып сәждә орҙо, үлемде, ҡәбер тынлығын идеаллаштырыуға тиклем барып етте. Артабан, яңы революцион күтәрелеш йылдарында, халыҡ хәрәкәтенең ыңғай йоғонтоһо тәьҫирендә Я. Юмаевтың романтизмы ла актив характер алды. Уның донъяға ҡарашының киңәйеүенә шулай уҡ А. С. Пушкин, М. Ю. Лермонтовтарҙы өйрәнеү менән бергә, Ғ. Тукай, М. Ғафури поэзияһы ла һиҙелерлек йоғонто яһағанлығы күренә.

Был этапта романтизм методы өҫтөнлөк иткән һүрәттә лә, мәғрифәтселек осоронда уҡ башланған тәнҡитле йүнәлеш, ғөмүмән, поэзияның реалистик йүнәлештә үҫеше лә туҡтап ҡалманы. Айырыуса Ғафури, Юлтыйҙарҙың ижадында халыҡсан демократик эстетика нығына барҙы, уларҙың актив романтизмы реализм менән аралашып килде һәм барған һайын реалистик йүнәлеш ала барҙы. Поэзияның халыҡҡа яҡынайыуы

Ғафури, Юлтый, Туйкиндарҙың халыҡ йырҙары традицияларына йышыраҡ мөрәжәғәт итеүендә лә күренде. Һөҙөмтәлә, профессиональ поэзияла яңы күренеш булараҡ, йыр жанры формалашты. Был йәһәттән Туйкиндың ижады айырылып торҙо. Ғафури, Юлтыйҙарҙың шиғырҙарында мәғрифәтселек осоронда өҫтөнлөк иткән «милләт» һүҙен «халыҡ» һүҙе алмаштырыуы ла поэзияның хеҙмәтсән халыҡ, ярлылар тормошона яҡыныраҡ килеү, халыҡсан демократик эстетиканың еңә барыу күренеше ине.

Художество кимәле яғынан был этап поэзияһы тәүгеһенән ыңғай яҡҡа айырылып тора. Майҙанға яңы сыҡҡан Д. Юлтый, Я. Юмаев, Ш. Бабич, Ғ. Иҫәнбирҙин кеүек шағирҙар үҙҙәренә тиклем булған поэзия өлгөһөндә, бигерәк тә Туҡай, Дәрдмәнд шиғырҙары үрнәгендә, тәрбиәләнгәнлеге күҙгә ташлана. Тәүге этап поэзияһынан айырмалы рәүештә, икенсе этапта рус классик поэзияһына мөнәсәбәт, унан өйрәнеү бөтәһенән дә элек Пушкин, Лермонтов кеүек шағирҙар исеме менән бәйле. Был йәһәттән Ғ. Иҫәнбирҙин менән Я. Юмаев ижадтары айырылып тора. Пушкин менән Лермонтов үрнәгендә Иҫәнбирҙин поэзияһында реалистик һүрәтләү, образлы фекерләү өҫтөнлөк алһа, Юмаев поэзияһында шәхестең рухи донъяһына психологик анализ тәрәнәйә төшә. Ғөмүмән, мәғрифәтселек рационализмынан һәм дидактиканан ҡотола барып, был осорҙа поэзия шәхестең эске донъяһына тәрәнерәк үтеп инә. Үтелгән этап поэзияһына хас «һуғышсан рух» бер аҙ ҡаҡшай төшһә лә, поэзия, сәнғәт булараҡ, яһалмалыҡтан, быуаттар буйы хөкөм һөргән дидактиканан үҙен азат итә. Унда замандың ҡатмарлы мәсьәләләре, синфи йәмғиәттәге иҙелеүсе шәхестең эске донъяһы тулыраҡ сағылыш ала. Дөйөм алғанда, был этап милли азатлыҡ хәрәкәтен синфи азатлыҡ хәрәкәте менән бергә ҡушыу юлындағы эҙләнеү этабы булып тора.

Империалистик һуғыш һәм ике революция араһындағы өсөнсө этап XX быуат башында ижад иткән башҡорт шағирҙары өсөн рухи һынау, рухи һынылыш йылдары булып тора.

Империалистик һуғыш башланып китеү менән, башҡорт шағирҙары яңынан күңел төшөнкөлөгөнә бирелделәр. Был төшөнкөлөк ҡайһы бер халыҡтан алыҫыраҡ торған шағирҙарҙы битарафлыҡҡа һәм ижадтан айы-

рыла барыуға алып килһә, Ф. Сөләймәнов, Б. Мирзанов кеүектәрҙең ижадында реакцион романтизм тәрәнәйә барҙы. Төшөнкөлөк демократик йүнәлештәге М. Ғафури, Д. Юлтый, Ш. Бабичтарҙың ижадына ла ҡағылды, ләкин уларҙың поэзияһы артабан һуғышҡа ҡаршы социаль протест юғарылығына күтәрелә барҙы.

Беренсе донъя һуғышына тиклем шағирҙарҙың күпселеге ил эсендәге хәл менән генә, үҙ халҡының яҙмышы өсөн борсолоу менән генә йәшәйҙәр ине. Һуғыш һәм уның социаль асылына төшөнөү уларҙы донъяға киңерәк күҙлектән ҡарарға өйрәтте. Һуғыштың бөтә ауырлыҡтарын үҙ елкәһендә һалдат булып татыған Д.Юлтый алдынғы фекерле эшселәр араһынан сыҡҡан һалдаттар, большевиктар менән аралашыу арҡаһында политик сынығыу мәктәбе үтә һәм үҙенең был осорҙағы ижады менән башҡорт поэзияһына һиҙелерлек өлөш индерә. Уның поэзияһы һуғыш картиналарын, һалдат массаларының дөйөм настроениеларын реалистик һүрәтләү менән генә сикләнеп ҡалмай, империалистик һуғыштың мәғәнәһен асып һала, уға ҡаршы актив протест булып яңғырай.

Тәжрибәле шағир М. Ғафуриҙың да донъяға ҡарашына был осор ҙур үҙгәреш килтерҙе. Ул быуаттар буйына халыҡты томалап килгән дини ҡанундарҙың нигеҙен ҡаҡшатты: алланың булыуын шик аҫтына ҡуйҙы. «Юҡтырһың да, алла!..» шиғырының донъяға сығыуы демократик көстәр менән дини-реакцион көстәр араһында быға тиклем үк йәшәп килгән ҡаршылыҡтарҙы тағы ла киҫкенләштереп, көсәйтеп ебәрҙе.

Күп тә үтмәй, Ғафуриҙың ижади ҡаһарманлығын «Әллә алла, әллә иблис...» шиғыры менән Ш.Бабич ҡабатланы. Бабич ижады, ғөмүмән, империалистик һуғыш йылдарында үҙенең өлгөрөү осорон кисерә тип әйтергә мөмкин. Бабич был осорҙа бер юлы тынғыһыҙ натуралы романтик та, үҙ халҡының аяныс тормошон һүрәтләп, уның киләсәге мәсьәләһен күтәреүсе реалист та, дини-схоластикаға, буржуаз йәмғиәттең ғәрип күренештәренә ҡаршы көрәшеүсе көслө сатирик та булып сығыш яһай. Поэзияһы художество камиле яғынан да революцияға тиклемге башҡорт әҙәбиәте тарихында мәғлүм бер камиллеккә күтәрелә.

Халыҡ ауыҙ-тел ижады традицияларын файҙаланыуҙың яңы этабы башлана. Д. Юлтый, Ш. Бабичтар, халыҡ

йырҙарына стилизация яһау менән генә сикләнеп ҡалмай, ауыҙ-тел поэзияһының эске рухына тәрәнерәк үтеп инәләр. Улар, мәҫәлән, халыҡ поэзияһындағы традицион образдарҙы ҡулланыуҙың яңы мөмкинлектәрен асалар. Ғөмүмән, поэзия халыҡ тормошона яҡыныраҡ килгән һайын, фольклор традициялары үҙҙәрен нығыраҡ һиҙҙерә. Һөҙөмтәлә, шағирҙарҙың теле халыҡ теле иҫәбенә байый, ғәрәп-фарсы лексикаһынан арына бара. Был осор поэзияла, яңы күренеш булараҡ, романтик характерҙағы тәүге поэмалар ижад ителә. Февраль революцияһын башҡорт шағирҙары ҙур ҡыуаныс менән ҡаршы алдылар. Ләкин, азатлыҡ хәрәкәтендә пролетариат гегемонияһын аңлау, Октябрь революцияһын ҡабул итеү мәсьәләһенә килгәндә, демократик йүнәлештәге шағирҙар ҙа берҙәй юғарылыҡта тора алманылар.

Ҙур тормош һәм ижад тәжрибәһе туплаған М.Ғафури менән большевиктарҙың көслө йоғонтоһон кисереүсе Д. Юлтый Бөйөк Октябрь революцияһын икеләнеүһеҙ ҡабул иттеләр. Бигерәк тә был осорҙа Ғафуриҙың ижады пролетариат хәрәкәтенә яҡын торҙо. Февраль революцияһынан һуң хәл иткес көрәшкә әҙерлек ваҡытында ул үҙенең «Ҡыҙыл байраҡ» шиғыры менән башҡорт һәм татар поэзияһында беренсе башлап иң юғары революцион аккордты бирҙе. Тыуасаҡ социалистик әҙәбиәттең тәүге ҡарлуғасы ине был әҫәр.

Билдәле булыуынса, XX быуат башы башҡорт поэзияһында үҙәк мәсьәләләрҙең береһе булып милли азатлыҡ мәсьәләһе торҙо. Һәм был мәсьәлә Февраль революцияһынан һуң да көн үҙәгенән төшөп ҡалманы, әлбиттә. Ул буржуаз-демократик азатлыҡ уңайы менән айырата көсәйеп китте. Синфи һәм милли азатлыҡ мәсьәләләрен бергә ҡушып хәл итеү юлдарын әле дөрөҫ аңламағанлыҡтан, Ш. Бабич, Х. Ғәбитов кеүек шағирҙар, шул осор ҡотороноп киткән буржуаз милләтселәрҙең хәрәкәтенә ҡушылып, ваҡытлыса булһа ла уларҙың тирмәненә һыу ҡойҙолар. Ләкин был ваҡытта ла уларҙың ижады бер яҡлы ғына булманы. Граждандар һуғышының һабаҡтары, Октябрь революцияһының һауыҡтырғыс атмосфераһы ижадтары менән халыҡҡа яҡын тороусы был шағирҙарға хаталарын аңларға ярҙам итте. Улар яңынан ысын азатлыҡ өсөн көрәшеүсе халыҡ яғына аяҡ баҫтылар.

Башҡорт әҙәбиәтенең артабанғы яҙмышы, уның үҙ аллы үҫеше туранан-тура Бөйөк Октябрь революцияһы менән бәйле булды. Революцияға тиклем үк үҙенә юл ярған башҡорт әҙәбиәте Октябрҙән һуң, башҡа милли әҙәбиәттәр һымаҡ уҡ, киң ҡолас менән, иркен тын алып үҫеп китте. Башҡорт әҙәбиәтенең донъя күләменә сыға барған бөгөнгөһө һәм яҡты киләсәге бар, ә уның башланышы үткән замандарҙа ята.

## АҢЛАТМАЛАР

### Революцион поэзия өлгөләре

**«Марсельеза».** СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты 1974 йылда ойошторған өсөнсө археографик экспедиция тарафынан (экспедиция составы В.И.Әхмәҙиев, А.Ғ.Ҡудашев, И.К.Бүләков) Башҡортостандың Бүздәк районы Ҡаҙаҡлар-Ҡобау ауылында Солтанова Мәрхәбәнән алынған. Ҡулъяҙма тулы көйөнсә һаҡланмаған, йыртылған, шуға күрә әҫәрҙең аҙағы юҡ. Билдәле булыуынса, 1905—1907 йылдарҙағы беренсе рус революцияһы осоронда РСДРП-ның Өфө, Ҡазан комитеттары тарафынан татар телендә прокламациялар, листовкалар таратыла, шулай уҡ был осорҙа рус эшселәре араһында популяр булған революцион йырҙар ҙа тәржемә ителә. Был «Марсельеза» шул осорҙа бер ни тиклем ерләштереп татарсаға тәржемә ителгән әҫәрҙең өҙөгө булһа кәрәк.

**«Һигеҙ сәғәт эш ваҡыты».** 1906 йылда Ырымбурҙа сығарылған демократик йүнәлештәге сатирик «Карчыга» журналының 2-се һанында баҫылған. Авторы күрһәтелмәгән.

**«Төрмәнән».** 1907 йылда Ырымбурҙа большевиктар тарафынан сығарылған «Урал» газетаһының 12 ғинуар һанында баҫылған.

**«Эшсе ауыҙынан».** М.А. имзаһы менән 1907 йылда Ырымбурҙа сыҡҡан демократик йүнәлештәге сатирик «Чүкеш» журналының 17-се һанында баҫылған.

**«Ер кәрәк».** «Ауыл кешеһе» псевдонимы менән «Карчыга» журналының 1907 йыл, 6-сы һанында баҫылған.

**«Күҙ йәштәре».** «Ҡайғылы» псевдонимы менән 1906 йылда «Карчыга» журналының 2-се һанында баҫылған.

**«Эшсе» шиғыры».** «Эшсе» псевдонимы менән Петербургта Икенсе Дәүләт Думаһына башҡорттар тарафынан һайланған депутат Кәлимулла Хәсәнов тарафынан сығарылған «Дума» газетаһының 1907 йыл, 16 май һанында баҫылған. «Дума» газетаһы Дәүләт Думаһындағы «Мосолман хеҙмәт группаһы» фракцияһының органы булған.

**«Бер крәҫтиәндең Думаға зары».** «Крәҫтиән» псевдонимы менән 1907 йылда «Дума» газетаһының 8 майҙа сыҡҡан 3-сө һанында баҫылған.

«Революцион поэзия өлгөләре» бүлегенә ингән шиғырҙар совет осоронда тәү башлап 1980 йылда СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты тарафынан сығарылған «Башҡорт әҙәбиәтендә жанрҙар системаһы» тигән мәҡәләләр йыйынтығына ҡушымта рәүешендә баҫылып сыҡҡандар (96—105-се биттәр).

## Сафиулла Рәхмәтуллин

Сафиулла Рәхмәтуллиндың шиғырҙарын 1974 йылда СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ойошторған археографик экспедиция отрядына (етәксеһе В.И.Әхмәҙиев) шағирҙың улы Шакир Сафиуллин тапшырған. Ҡулъяҙмалар Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ҡулъяҙмалар бүлегендә һаҡлана. Был ҡулъяҙмалар араһында Шакир Сафиуллиндың атаһы Рәхмәтуллиндың тормош юлы һәм уның 1905 йылғы революцияла ҡатнашып, төрмәлә ултырыуы хаҡында ентекле иҫтәлек тә бар, Сафиулла Рәхмәтуллиндың шиғырҙары тәү тапҡыр «Башҡорт әҙәбиәтендә жанрҙар системаһы» (Өфө, 1980) тигән мәҡәләләр йыйынтығына ҡушымта формаһында баҫылды (105—108-се биттәр).

## Сафуан Яҡшығолов

Сафуан Яҡшығоловтың XX быуат башында «Мөғәллим Солтангилде әфәнденең мәрҫиәсе» (Ҡазан, 1908), «Башҡорт хәлләре» (Стәрлетамаҡ, 1911), «Дим буйы» (Ҡазан, 1912) һәм «Күңел ялкынлары» (Өфө, 1916) ти-

гән китаптары баҫылып сыҡҡан. Әммә ул үҙенең шиғырҙарын ваҡытлы матбуғат биттәрендә бик һирәк баҫтырған. Шуға күрә әҫәрҙәренең яҙылыу ваҡытын китаптарының сыҡҡан йылдарынан самалап ҡына белергә мөмкин.

**«Яҙ килеүе».** Сафуан әл-Яппари псевдонимы менән большевистик «Урал» газетаһының 1907 йыл, 1 апрелдә сыҡҡан һанында баҫылған. Был шиғырын автор, бер аҙ үҙгәртеп, һуңынан «Дим буйы» китабына ла индергән. Шиғырҙың аҫтында яҙылыу датаһы 1905 йыл, октябрь икәнлеге күрһәтелгән. Бында «Урал» газетаһынан алынды.

**«Яҙғы таң», «Сулпан», «Ҡитға», «Ирткаэ вә инхитат тормоздары», «Йәшлек дәүере», «Башҡорт ағаларыма хитап», «Порт-Артурҙан», «Нисек өшкөрәләр», «Боронғо башҡорт сәхрәһе», «Ҡурай», «Ҡурайға ҡаршы»** шиғырҙары «Башҡорт хәлләре» китабынан.

**«Башҡорт хәлдәре», «Дим буйы», «Дим буйында яҙғы таң», «Күҙ йәше», «Башҡорт ҡыҙына», «Сирек быуатлыҡ үҙгәреш», «Донъя тәгәрмәсе», «Ағым һыуға ҡарап», «Йылан һәм һөлөк», «Ҡуяндар һәм баҡалар», «Ағас»** шиғырҙары «Дим буйы» йыйынтығынан; **«Йәм табам», «Таң ата», «Бығаулы фил», «Тыуыр көн донъяға был ибене инсан», «Айырған бер-береһенән бәндәләрҙе», «Көҙ көнө», «Һарғайған япраҡҡа ҡарап», «Ынйы бөртөгө һәм һыу эйәһе», «Тирмәнсе», «Төлкө менән Торна», «Ҡарт иргә бирелгән башҡорт ҡыҙының зары», «Йәш балаларға хитап», «Маймыл һәм күҙлек», «Тормош», «Шатлыҡ ни нәмәлә», «Һағынам», «Уҡыусыларыма»** шиғырҙары «Күңел ялкынлары» китабынан.

**«1917 йыл Үктәбр инҡилабының байрамы мөнәсәбәте илә»** — 1919 йылда «Башкортстан хәбәрләре» газетаһының 5 ноябрь һанында баҫылған.

**«Башҡорт ағаларыма хитап», «Нисек өшкөрәләр», «Шатлыҡ ни нәмәлә», «Ҡарт иргә бирелгән башҡорт ҡыҙының зары», «Ҡурайға ҡаршы», «Бығаулы фил», «Таң ата»** тигән шиғырҙары 1934 йылда Ғабдулла Амантайҙың 6-сы кластар өсөн сығарылған «Башҡорт әҙәбиәте. Дәреслек һәм хрестоматия» китабында баҫылғандар. **«Киләсәк яҙ», «Бығаулы фил», «Йәм табам», «Ҡарт иргә бирелгән башҡорт ҡыҙының зары», «Ынйы бөртөгө һәм һыу эйәһе»** шиғырҙары «Башҡорт

поэзияһы антологияһында» (Өфө, 1971) баҫылып сыҡҡан.

**«Яҙ килеүе»** тигән шиғыры СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы тарафынан сығарылған «Башҡорт әҙәбиәтендә жанрҙар системаһы» тигән ғилми мәҡәләләр йыйынтығына ҡушымта рәүешендә бирелгән (Өфө, 1980).

## Ғәлә Хоҙаяров

**«Башҡорт халҡына хитап».** Шиғыр 1910 йылда «Ваҡыт» газетаһында баҫыла.

**«Күҙ йәштәрем».** 1910 йылда «Ваҡыт» газетаһының 704-се һанында баҫылған.

**«Ҡайғы».** 1911 йылда «Шура» журналының 13-сө һанында баҫылып сыҡҡан.

**«Ҡәберлектә».** 1911 йылда «Шура» журналының 15-се һанында баҫылған.

**«Шағирҙарға», «Баҡсасының баҡсаһынан...».** 1911 йылда «Шура» журналының 16-сы һанында баҫылғандар.

**«Шикайәт».** 1912 йылда «Шура» журналының 13-сө һанында баҫылған.

**«Мәжлес».** 1912 йылда «Шура» журналының 13-сө һанында сыҡҡан.

**«Йәш мөхәббәт хәтирәһе»** — 1912 йылда «Шура» журналының 19-сы һанында баҫылып сыҡҡан.

**«Эс серемде бушатып...»** — 1914 йылда «Шура»ның 12-се һанында баҫылып сыҡҡан.

## Ямалетдин Юмаев

**«Киске юлдаш», «Хәят», «Ҡыҙ бала», «Күҙемә», «Күңел», «Сәждә», «Дәрт», «Әсәйем ҡәбере янында», «Ибне әҙәм», «Нәсихәт», «Бүре менән һарыҡ», «Ҡош һәм атыусы», «Дүрт ҡош», «Дуҫыма», «Дәрестән элек», «Тимә», «Яҙ көнөндә», «Ғашиҡ», «Ҡунаҡ», «Утынға барыусы», «Шәкерт», «Яңылыш яҙылған», «Фәҡирлек вә байлыҡ», «Тәбиғәт алдында», «Тәрәддед», «Сәхәр ваҡытында бер хыял», «Йәш ваҡытымдағы рәсемемә»** шиғырҙары 1913 йылда Ҡазанда баҫылып сыҡҡан «Жамалетдин Юмаев шигырьләре» тигән йыйынтығынан. Был шиғырҙарҙың байтағы шулай уҡ

тәү тапҡыр «Шура» журналы биттәрендә баҫылып сыҡҡан. **«Ҡыҙ бала»** шиғыры 1910 йылда «Шура»ның 22-се һанында, **«Бүре менән һарыҡ»** (1911, 1), **«Сәждә»** (1911, 7), **«Тәбиғәт алдында»** (1912, 21), **«Тимә»** (1912, 22) һандарында тәү башлап баҫылып сыҡҡандар. **«Хәят»** шиғыры тәү тапҡыр 1910 йылда Ырымбурҙа «Ваҡыт» нәшриәте тарафынан сығарылған «Баҫылмаған шиғырьләр» тигән коллектив йыйынтыҡта донъя күргән.

**«Дуҫыма», «Тәғзиә», «Йәш йөрәк», «Выждан», «Тоғролоҡ», «Болот», «Әйтсе, зинһар», «Мин», «Ҡитғаа», «Фәлсәфә түгел, мәсьәлә» «Дәрдмәндтең «Карап» шиғырына ғиләүә», «Әльбомга», «Әгәр мин ҡош булһам», «Шағир үлде», «Сабыйҙың зары», «Бер матурға», «Яҙ», «Ҡаҙаҡ ҡыҙына», «Йәш ҡыҙға», «Квартет», «Белмәйһең, аһ, белһәң...»** шиғырҙары 1915 йылда Ҡазанда баҫылып сыҡҡан «Әдәби шигырьләр» тигән йыйынтығында баҫылған. Быларҙан **«Выждан»** шиғыры тәү башлап 1913 йылда «Шура» журналының 24-се һанында, **«Тоғролоҡ»** шиғыры 1914 йылда шул уҡ журналдың 8-се һанында баҫылып сыҡҡандар. **«Болот»** шиғыры 1914 йылда «Йолдоз» газетаһының 9 август һанында тәү тапҡыр баҫылып сыҡҡан.

**«Мин яҙам, ләкин кешеләрҙән минең ғилемем түбән...».** 1915 йылда «Шура» журналының 5-се һанында баҫылып сыҡҡан.

**«Шулай булған электән бирле донъя...».** 1915 йылда «Шура» журналының 13-се һанында донъя күргән.

**«Күрҙе былбыл баҡсала йөрөгән сағында бер сәсәк...»** — 1916 йылда «Шура» журналының 5-се һанында баҫылған.

**«Дуҫтарға».** 1916 йылда «Шура»ның 6-сы һанында баҫылып сыҡҡан.

**«Яндырылған хат».** 1916 йылда «Сөйөмбикә» журналының 3-сө һанында, «Сәсәк» 19-сы һанында баҫылып сыҡҡандар.

**«Шат күңелдән».** Әҫәр Февраль революцияһынан һуң яҙылған. 1917 йылдың 7-се мартында «Тормош» газетаһында донъя күргән.

**«Һуғыш».** Был шиғыр Февраль революцияһынан һуң Ваҡытлы хөкүмәттең империалистик һуғышты дауам итеүенә протест йөҙөнән ижад ителгән. Әҫәр 1917

йылдың 25-се апрелендә «Тормош» газетаһында баҫылып сыҡҡан.

Я.Юмаевтың **«Мин яҙам», «Мин», «Әгәр мин ҡош булһам», «Бер матурға», «Альбомға»** (Лермонтовтан), **«Шағир үлде», «Шат күңелдән»** шиғырҙары «Башҡорт поэзияһы антологияһында» (Өфө, 1971) баҫылып сыҡтылар.

## Фазыл Туйкин

**«Йәмле йәй», «Донъя», «Ҡурай», «Ағиҙел», «Тыуған ил», «Һабансы ҡарт», «Урал тауына», «Ашҡаҙар» көйөнә», «Баламишкин көйөнә», «Башҡорт ҡатыны», «Тәфтиләү» көйөнә», «Ашҡаҙар», «Юлым», «Боронғо йырҙар»** шиғырҙары 1915 йылда Өфөлә «Шәреҡ» типографияһында баҫылып сыҡҡан «Нардуған» тигән йырҙар йыйынтығынан. Был шиғырҙар араһынан **«Йәмле йәй»** тигәне — 1912 йыл «Шура» журналының 16-сы һанында, **«Донъя»** — 17-се һанында, **«Ағиҙел»** — 19-сы һанында, **«Тыуған ил»** — 21-се һанында, **«Һабансы ҡарт»** 23-сө һанында тәү тапҡыр баҫылып сыҡҡандар.

**«Ысын кеше»** шиғыры тәү ҡабат ҡайҙа баҫылып сыҡҡанлығын асыҡлап булманы. Әҫәр Ғ.Амантайҙың 1934 йылда Өфөлә баҫылып сыҡҡан «Башҡорт әҙәбиәте. Дәреслек һәм хрестоматия» тигән китабынан.

Ф.Туйкиндың **«Йәмле йәй», «Ағиҙел», «Ысын кеше»** шиғырҙары Ғ.Амантайҙың «Башҡорт әҙәбиәте. Дәреслек һәм хрестоматия» (Өфө, 1934) китабында; **«Йәмле йәй», «Башҡорт ҡатыны», «Юлым»** шиғырҙары «Башҡорт поэзияһы антологияһында» (Өфө, 1971) баҫылып сыҡҡан.

## Ғиззетдин Иҫәнбирҙин

**«Мин вә мөхитем»** — 1912 йылда «Шура» журналының 4-се һанында, **«Егетлек»** — журналдың 1913 йылдағы 3-сө һанында, **«Ҡайҙа ул», «Ауыл йырҙары»** — 13-сө һанында, **«Үтте»** 19-сы һанында баҫылып сыҡҡандар.

**«Көндәрем»** — 1913 йылдың 27-се ноябрендә «Тормош» газетаһында баҫылып сыҡҡан.

**«Тормош», «Ҡаты көрәш», «Үтә көндәр...», «Ҡаты ямғырлы көн», «Шелтә», «Ҡышҡы юл», «Иғтираф», «Кәйефең ҡырыу», «Ғәләм ва мәшәҡәт», «Тәбиғәттә», «Йәйләү», «Ҡышҡы төндә», «Ҡышҡы бүлмәм», «Мин теләрмен», «Тыуған ил», «Ҡыҙыҡһыҙ үткән ғүмер», «Ауыл»** шиғырҙары 1914 йылда Өфөлә «Шәреҡ» типографияһында баҫылып сыҡҡан «Ғиззетдин Исәнбирдин шигырьларе» тигән йыйынтығынан.

**«Ныҡ хәтер»** — 1914 йылда «Шура» журналының 5-се һанында, **«Үкенес», «Беректе ҡул...»** — 1915 йылда шул уҡ журналдың 14-се һанында, **«Ҡитға»** 19-сы һанында баҫылып сыҡҡандар.

Ғ.Иҫәнбирҙиндың **«Тыуған ил», «Ауыл», «Мин теләрмен», «Ҡышҡы бүлмәм», «Ҡитға»** шиғырҙары «Башҡорт поэзияһы антологияһында» (Өфө, 1971) баҫылып сыҡты.

## Хәбибулла Ғәбитов

**«Ниңә был шәмдәр һүнә?»** 1914 йылдың 24 мартында яҙылған. Тәүҙә «Мөғәллим» журналында баҫылған. 1918 йылда Ырымбурҙа баҫылып сыҡҡан «Башкорт моңлары» тигән йыйынтыҡҡа ла ингән.

**«Тәбиғәткә».** Тәү тапҡыр 1914 йылда Х.Ғабид имзаһы менән «Мөғәллим» журналының 5-се һанында баҫылып сыҡҡан.

**«Ҡарға бутҡаһында...»** «Башкорт моңлары» китабында әҫәрҙең 1914 йылдың 13 февралендә яҙылыуы күрһәтелгән.

**«Етем ауыҙынан».** «Башкорт моңларынан».

**«Каруанһарай мәсетенә ҡарап».** Тәү тапҡыр 1916 йылда «Шура» журналының 3-сө һанында баҫылып сыҡҡан. Шиғырҙың аҫтында яҙылыу датаһы 1915 йылдың 4 июле икәнлеге ҡуйылған. Әҫәр Х.Ғабид имзаһы менән баҫылған. Шиғыр һуңынан, бер аҙ үҙгәртелеп, «Башкорт моңлары» китабына ла индерелгән.

**«Мәхбүс мөғәллим».** Әҫәр 1916 йылдың 17 мартында яҙылған. «Башкорт моңлары» йыйынтығынан.

**«Кейәүенән риза булмаған башҡорт ҡыҙының оҙатылғанда атаһы менән әйтешкән йырҙары».** «Башкорт моңлары» китабынан.

**«Әй, ҡара күҙ, эй, ҡәләм ҡаш...».** 1915 йылдың 13 декабрендә яҙылған.

**«Изге бәхетемде күрәм тип...»** Әҫәр «Башкорт моңлары» йыйынтығында баҫылған.

## Бәхтиәр Мирзанов

**«Байрам таңы».** 1916 йылдың 20 сентябрендә «Вакыт» газетаһында баҫылып сыкҡан.

**«Һинең өсөн».** 1914 йылда «Шура»ның 4-се һанында; **«Күңел йыуатыу»** — 7-се һанында; **«Күңелем тарихы»** — 19-сы һанында баҫылып сыкҡандар.

**«Күмелгән теләк».** 1915 йылда «Аң» журналының 20-се һанында, **«Әйҙә һыҙлан»** — 1916 йылда шул уҡ журналдың 8-се һанында донъя күргәндәр.

**«Тәләф йылдар».** 1916 йылда «Сөйөмбикә» журналының 12-се һанында, **«Тотҡон былбылым»** — 15-се һанында баҫылып сыкҡандар.

**«Әсәйем ҡәбере янында».** 1916 йылда «Аң» журналының 13-сө һанында баҫылып сыкҡан.

**«Хуш».** Февраль революцияһынан һуң яҙылған. 1917 йылдың 12-се апрелендә «Тормош» газетаһында донъя күргән.

**«Хөрриәт көндәрендә».** Февраль революцияһы уңайы менән яҙылған. 1917 йылда «Сөйөмбикә» журналының 16-сы һанында баҫылған.

**«Ен туйы».** 1915 йылда «Аң» журналының 14-се һанында баҫылып сыкҡан.

**«Илсе».** 1917 йылда «Аң» журналының 7-се һанында баҫылып сыкҡан.

## Кәшфи Кәрипов

**«Фронтҡа киткәндә»** шиғыры 1917 йылдың 19 сентябрендә «Кәшфи» псевдонимы менән «Тормош» газетаһында баҫылып сыкҡан. Башҡа шиғырҙары 1914 йылда Өфөлә баҫылып сыкҡан «Мөхәббәт шигырьләре» тигән йыйынтығында.

# БАШҠОРТ ПОЭЗИЯҺЫНДА ТРАДИЦИОН ОБРАЗДАР

Тамырҙары быуаттар төпкөлөнә барып тоташҡан башҡорт поэзияһы үҙ үҫешенең һәр этабында теге йәки был халыҡтың поэтик традицияһы менән тығыҙ бәйләнешкә ингән. Тәүге осорҙарҙа ул туғандаш төрки халыҡтарының һәм Көнсығыш поэзияһының ҙур йоғонтоһон кисерһә, яҡынса XIX быуаттың урталарынан алып рус поэзияһының бай традицияларын үҙләштерә башлай. XX быуаттың баштарында иһә башҡорт шағирҙарына рус поэзияһының йоғонтоһо һиҙелерлек күренешкә әйләнә.

Бөйөк Октябрь революцияһынан һуң башҡорт әҙәбиәте үҫешенең өр-яңы дәүере башлана. Социалистик ысынбарлыҡ шарттарында башҡорт әҙәбиәтенең дөйөм совет әҙәбиәте ғаиләһендә урын алыуы уның туғандаш халыҡтар әҙәбиәте менән ижади бәйләнешен нығыта. Хәҙерге дәүерҙә башҡорт яҙыусылары туғандаш әҙәбиәттәрҙең иң һәйбәт үрнәктәре менән генә түгел, бәлки рус теленә тәржемәләре аша донъя халыҡтары әҙәбиәттәренең иң юғары ҡаҙаныштары менән таныша, уларҙың ыңғай традицияларын үҙләштерә. Тимәк, хәҙерге башҡорт әҙәбиәте бай һәм тәрән йөкмәткеле әҙәби традицияларға нигеҙләнеп үҫә. Был уның идея-художество кимәлен күтәрергә, интернациональ пафосын көсәйтергә булышлыҡ итә. Шуның менән бергә башҡорт профессиональ әҙәбиәте, үҙенең тәүге аҙымдарынан башлап хәҙерге көнгәсә, үҙ милли ерлегенән — тәрән фәлсәфәүи йөкмәткеле эпик поэмаларҙан, публицистик пафосы менән айырылып торған ҡобайырҙарҙан, тематик яҡтан киң, тәрән йөкмәткеле йырҙарҙан һәм бәйеттәрҙән, әйтемдәрҙән һәм йомаҡтарҙан һут алыуын дауам иттерә.

«Халҡыбыҙ мәҡәл һәм әйтемдәргә шул тиклем бай булмаһа, мәҡәл менән «үреп» яҙылған ҡобайырҙар киң таралмаған булһа, кем белә, бәлки, Р.Ниғмәти, Ғ.Сәләм, М.Кәрим, Н.Нәжми, Х.Ғиләжев, Р.Ғарипов һымаҡ шағирҙарҙың метофористик ижады, тел төбө менән һүрәтләй белеү оҫталығы ул хәтлем үк юғары булмаҫ ине», — ти К.Әхмәтйәнов[207]. Тимәк, халыҡ ижады традициялары хәҙерге башҡорт поэзияһының идея-эстетик йөкмәткеһен, художество кимәлен, айырата милли үҙенсәлеген билдәләүсе төп күрһәткестәрҙең береһе булып тора.

Шуға күрә башҡорт совет әҙәбиәтенең интернациональ йөҙөн күп милләтле совет әҙәбиәтенең ыңғай йөғонтоһонан тыш ҡарау мөмкин булмаған кеүек, уның милли үҙаллылығын халыҡ ижады традицияларынан башҡа аңлатыу мөмкин түгел. Халыҡ ижадының яҙма әҙәбиәткә йоғонтоһо күп яҡлы һәм шаҡтай ҡатмарлы мәсьәләләрҙең береһе. Уҡыусылар иғтибарына тәҡдим ителгән был мәҡәләлә уның тик бер генә яғын — башҡорт халыҡ ижадында киң таралған традицион образдарҙың килеп тыуыуын, үҫешен һәм хәҙерге профессиональ поэзияла ни рәүешле үҙгәрештәргә дусар булыуын күҙәтеү маҡсат итеп ҡуйылды.

## Традицион образдарҙың килеп сығышына ҡарата

Художестволы әҙәбиәт — донъяны танып белеүҙең үҙенсәлекле бер төрө. Ошо яғы менән әҙәбиәт фәнгә яҡын килә. Ғалим да, художник та бер нәмә хаҡында һөйләйҙәр, тик береһе иҫбатлай, икенсеһе һүрәтләй, йәғни образдар аша күрһәтә, ти был хаҡта В.Г.Белинский. Бында бөйөк тәнҡитсе әҙәбиәттең донъяны танып белеү, ысынбарлыҡты эстетик яҡтан үҙләштереүҙең төп һыҙатын тотоп алған. Сөнки художник образдар аша фекер йөрөтә, ысынбарлыҡты образдар аша һүрәтләй. Ошо күптән билдәле булған концепция ысынбарлыҡты эстетик яҡтан үҙләштереүҙең нигеҙендә ята.

---

[207] Ким Әхмәтйәнов. Шиғриәт иленә сәйәхәт. — Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1967, 152-се бит.

Һүҙ сәнғәтенең ошо дөйөм һәм төп үҙенсәлеге — тормошто образдар аша кәүҙәләндереү үҙенсәлеген күҙ уңында тотмай тороп, традицион образдарҙың тәбиғәтенә үтеп инеү мөмкин түгел.

Бөгөн беҙ традицион образ тип йөрөткән күп кенә образдар әҙәбиәт тарихының таңында бөтөнләй традицион булмағандар. Улар бик оҙайлы юл үтеп, бик ҙур һынауҙар аша ғына традицион образ булып китә алғандар.

Һәр халыҡ донъяны эстетик яҡтан үҙләштерә башлаған дәүерҙәрҙә үҙен уратып алған ысынбарлыҡ: үҫемлектәр, хайуандар донъяһын, төрлө тәбиғи һәм ижтимағи күренештәрҙе урап үтә алмаған, шуға күрә ысынбарлыҡ халыҡ ижадының иң боронғо әҫәрҙәрендә үк ныҡ сағылыш алған. Ләкин әле ул осорҙарҙа кешеләр тәбиғәттең бөтә серҙәренә, төрлө көтөлмәгән хәлдәргә төшөнөп етә алмағандар, шуның арҡаһында сәмреғош, мәскәй, дейеү, ялмауыҙ кеүек мифик образдар килеп тыуған. Был образдар эпос, әкиәт, легенда кеүек жанрҙарҙа бик киң таралған һәм тотороҡло образдарға әйләнеп киткән. Халыҡ ижадының боронғо жанрҙарында был образдарҙың шауҡымы бик ҙур булған. Бына шулар нигеҙендә ат, торна кеүек ярым мифик, ярым реалистик образдар килеп тыуған булырға тейешле. Әлбиттә, был һуңғы образдар беҙҙең өсөн тулыһынса реалистик образ, ләкин улар халыҡ ижадында ҡулланыла башлағанда мифик йөкмәткегә эйә булғандар. Һәм бының шауҡымы хәҙерге көндә лә, бөгөнгө поэзияла ла бик ныҡ сағыла. Әгәр ҙә ат образына борондан мифик йөкмәтке һалынмаған булһа (алда күрербеҙ. — В.Ә.), халыҡ шағиры Мостай Кәримдең «Минең атым» тигән шиғыры икенсе төрлө хәл ителгән булыр ине.

Халыҡ ижадында, мифик һәм ярым мифик, ярым реалистик образдарҙан башҡа, реалистик образдар аҙ түгел. Бөгөнгө әҙәбиәткә халыҡ ижады аша килеп ингән: ҡыйғыр бөркөт, ҡарсыға, аҡ ҡарсыға, шоңҡар, тал, ҡайын, имән, ҡарағай, ҡылыс, уҡ-һаҙаҡ, һандуғас кеүек образдар, әлбиттә, халыҡ ижадында ла реалистик йөкмәткелә ҡулланыла башлағандар һәм эстетик йөкмәтке менән байытылғандар, йәки был образдарҙың эстетик йөкмәткеләре нығыраҡ асылған һәм улар эстетик байлыҡҡа әүерелгәндәр. «Мәҫәлән: аҡҡош, күгәрсен, ел, ай, һандуғас образдары, әҙәби контекста бу-

лыу-булмауына ҡарамаҫтан, эстетик байлыҡ булып торалар. Был образдар нигеҙендә һуңғараҡ төрлө фразеологик әйләнмәләр, метонимиялар, сағыштырыуҙар тыуа»[208], — тип яҙа тәнҡитсе Р.Бикмөхәмәтов был хаҡта.

Ни өсөн халыҡ ижадына образ булып һыйыр түгел, ә ат, сәпсек түгел, ә һандуғас, ерек түгел, ә ҡайын, имән, тал, ҡарағай килеп ингән тигән һорау тыуа. Был бик мөһим нәмә, сөнки ул халыҡтың донъяны эстетик танып белеүе менән ныҡ бәйләнгән. Халыҡ үҙе ҡулланған образдарҙың тәбиғәтенә, уларҙың эстетик сифаттарына төшөнә башлағас ҡына был образдар халыҡ ижадында сағыла башлауы мөмкин. Сөнки һәр бер образдың тәбиғәтенә ҙур эстетик йөкмәтке һалынған. Бөркөттөң йырткыслығы түгел, ә ҡыйыулығы, батырлығы, имәндең мәғрурлығы, ныҡлығы, һандуғастың моңлолоғо ҡыҙыҡһындырған, тап бына ошо сифаттар образдарҙың эстетик йөкмәткеһенә һалынғандар ҙа инде.

Һуңғы йылдарҙа әҙәбиәт фәненең үҫеше, йөкмәтке менән форманың асылына төшөнөү юлындағы уңыштар — традицион образдарҙың тәбиғәтенә тәрәнерәк төшөнөргә, традицион образдарҙың эволюцияһы аша ҙурыраҡ дөйөмләштереүҙәр яһарға мөмкинлек тыуҙыра. Традицион образ ул хәҙерге әҙәбиәт белемендә форма элементына ҡайтарылып ҡалдырыла. Ләкин ул эстетик йөкмәткегә эйә. Һәр бер форма, йәки форма элементы ҡасандыр художестволы йөкмәткегә эйә булған.

«Һәр бер художестволы форма, беҙҙең ҡарашса, — тип яҙалар Г.Д.Гачев менән В.В.Кожевников, — ҡатып, предметҡа әйләнеп ҡалған художестволы йөкмәтке ул.

Әҙәби әҫәрҙең хәҙер беҙ формаға ғына ҡайтарып ҡалдырған һәр үҙенсәлеге, һәр бер элементы ҡасандыр туранан-тура йөкмәткегә эйә булған»[209].

---

[208] Р.Бикмөхәмматов. Поэзиябезнең сулмас чәчәкләре. — Казан, 1960, 5-нче бит.

[209] Г.Д.Гачев, В.В.Кожевников. Содержательность литературных форм. — В кн.: Теория литературы, т. II. — М.: Наука, 1964, с.18.

Башҡорт поэзияһында киң таралып, бөгөнгө көндә лә үҙ баһаһын юғалтмаған ат, торна, Урал кеүек образдарҙың да яҙмышы тап бына шулай.

Беҙҙең әҙәбиәткә фольклор аша килеп ингән күп кенә образдар элек үҙҙәре һүрәтләү предметы булып торғандар, үҙҙәре генә тулы йөкмәткегә эйә булғандар.

Башҡорт поэзияһы традицион образдарға ифрат бай, ундағы образдар, ғәжәп үҙсәнлекле һәм төрлө яҡлы. Ул образдарҙың күпселеге милли нигеҙҙә килеп тыуғандар.

Традицион образдарҙың иң киң таралған һәм иң бай эстетик йөкмәткегә эйә булғаны Урал һәм ат образы. Башҡорт халыҡ ижадын Уралһыҙ, атһыҙ күҙ алдына килтереп тә булмай. Бынан меңәр йыл элек килеп кергән ат образы бөгөнгө көнгә тиклем үҙенең ярһыулығын, дәртен, тоғролоғон, изгелеген елдереп алып килгән.

Башҡорт халыҡ ижадында атҡа арналған, ат исемен йөрөткән «Аҡбуҙат», «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға» кеүек эпостар; «Алтын ҡойроҡ көмөш ял» кеүек әкиәттәр, «Ерән ҡашҡа», «Тура ат», «Күк дүнән», «Ҡара юрға», «Ҡола ат» кеүек йырҙар бар. Ат менән бәйләнгән әйтем, мәҡәлдәрҙең иҫәбе-һаны ла юҡ, ҡыҫҡаһы, ат образы башҡорт халыҡ ижадының бөтә туҡымаһына үтеп ингән.

Эйе, ат халыҡ ижадының боронғо жанрҙарында туранан-тура һүрәтләү предметы булған. Ат яҙмышы туған ил, ир-егет, батырлыҡ төшөнсәләре менән бәйле.

Аттың эпостарҙа һәм әкиәттәрҙә хатта ҡайһы бер йырҙарҙа («Ерән ҡашҡа» һ.б.) художестволы һүрәтләү предметы булыуына, үҙе йөкмәткегә эйә булыуына «Урал батыр» менән «Аҡбуҙат» эпостарынан бер ике өҙөк килтереп китеү бик уңайлы булыр. «Урал батыр» эпосында әле Аҡбуҙатҡа йүгән һалынмаған, ул ҡырағай. «Ҡараһа йылҡы өйөрө араһында:

Башы йүгән күрмәгән,
Һыртына эйәр теймәгән;
Ҡолағын беҙҙәй ҡаҙаған,
Ялын ҡыҙҙай тараған;
Ҡарсыға түш, тар бөйөр,
Еңел, текә тояҡлы;
Һарымһаҡтай аҫаулы,
Ҡыҫыр йылан тамаҡлы;

Урайы ҡуш, яңағы ас,
Ҡыйғыр бөркөт ҡабаҡлы,
Муйындары бер ҡолас,
Ҡыйғас ҡамыш ҡолаҡлы,
Алғыр бүре күҙендәй,
Күҙ бәбәген сылатыр;
Елһә ҡоштай елпенеп,
Артында саң уйнатыр
Аҡбуҙат тора ине, ти»[210].

«Урал батыр» эпосының дауамы һаналған «Аҡбуҙат»та атты һүрәтләүгә тағы ла ҙурыраҡ урын бирелә. Был тәбиғи, сөнки эпоста Аҡбуҙат мөһим урын тота.

Бына нисек һүрәтләнә Аҡбуҙат.

Шул һарайҙың эсендә:
Һыртына эйәр һалынған,
Эйәренең башына
Алмас ҡылыс тағылған;
Эйәренең ҡашы алтын,
Йүгәненең башы алтын,
Ҡолағын беҙҙәй ҡаҙаған,
Ялын ҡыҙҙай тараған;
Йүгереклеге һыналған,
Ҡуш йөрәкле яралған;
Аждаһа-йылан үҙәкле,
Башкүнәктәй танаулы;
Атҡолаҡтай иренле,
Һарымһаҡтай аҫаулы;
Ҡарсыға түш, тар бөйөр.
Еңел, текә тояҡлы;
Ҡуян күҙле, баҡыр күҙ,
Ҡыҫыр йылан тамаҡлы;
Урайы ҡуш, яңағы ас,
Ҡыйғыр бөркөт ҡабаҡлы;
Муйындары бер ҡолас,
Ҡыйғас ҡамыш ҡолаҡлы;
Текә баҫып, баш ташлап,
Йылғыр атлап бышҡырған;
Ҡолаҡтарын ҡайсылап,
Алан-йолан ҡаранған,
Алғыр бүре күҙендәй,
Күҙ бәбәген сылатҡан;
Ауыҙлыҡ сәйнәп, асыуҙан
Ауыҙҙарын күпсеткән;
Йәше уҙған ҡарттарҙы,
Менһә, йәп-йәш ир иткән;
Күргән кеше һоҡланып,

[210] Башҡорт халыҡ ижады, 2-се том. — Өфө, 1959, 14-се бит.

Күргән ерҙә таң ҡалған;
Елһә, ҡоштай елпенеп,
Артында саң уйнатҡан;
Осраған бер кешене
Хайран иткән, уйлатҡан;
Тояғы ергә теймәгән;
Ел дә ҡыуып етмәгән;
Өҫтөндәге батырын
Яуҙа ташлап китмәгән,
Аҡбуҙатты күреһең.[211]

Миҫалдарҙан күренеүенсә, ат образы үҙе тулы бер художестволы йөкмәткегә эйә булған. Ат образын шулай ентекле һүрәтләү «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға» эпостарында ла бар. Был башҡорт халыҡ ижадына ғына хас бер һыҙат. Һуңғы, 43 юлдан торған, ләкин бер һөйләмде тәшкил иткән, һүрәтләү кешенең практик тормошонда иң мөһим урын алыусы атҡа үҙе бер гимн тип әйтһәң дә хата булмаҫ. Башҡорт поэзияһында ат образының шул тиклем көслө бирелеүе, берҙән, мифология менән бәйләнһә, икенсенән, көнкүреш менән ныҡ бәйләнгән һәм эстетик образ юғарылығына күтәрелгән. Халыҡ поэзияһының һуңғараҡ барлыҡҡа килгән жанрҙарында ат образын шул тиклем ентекле һүрәтләү бик йыш түгел.

Был — донъяны эстетик танып белеүҙең үҫеше, эволюцияһы менән бәйле күренеш. Ләкин ат образы, традицион образ булараҡ, башҡорт поэзияһында артабан да ныҡ урын ала — ул эстетик йөкмәткеле образға әүерелә һәм халыҡтың эстетик зауҡына тығыҙ бәйләнгән образ, теге йәки был йырҙа иҫкә алынып кителһә лә, күҙ алдына эпостарҙа һүрәтләнгән килеш килеп баҫа. Ошо нигеҙҙән сығып, поэзияла электән үк йәшәп килгән күп кенә образдарҙың үҫешен, уның ниндәй эволюция кисергәнлеген күҙәтергә мөмкин.

Мәҫәлән, башҡорттар өсөн тыуған ил, тыуған ер йөкмәткеһе һалынған Урал образын ғына алып ҡарайыҡ. Урал, Ағиҙел образдарының халыҡ ижадында, артабан яҙма әҙәбиәттә киң урын алыуы осраҡлы хәл түгел. Был ике образға ла халыҡ тыуған ер, тыуған изге ил йөкмәткеһен һалған.

---

[211] Башҡорт халыҡ ижады. 1-се том. — Өфө, 1954, 81-се бит.

«Ай Уралым, Уралым» тигән ҡобайырға күҙ һалайыҡ.

«Ай Уралым, Уралым,
Уралып ятҡан Уралым,
Илгә дошман килгәндә,
Ышыҡ булған Уралым,
Ил һаҡлаған ҡоралым.
Ҡайнап-ҡайнап ҡабарып,
Ҡалҡып килгән болоттай,
Күҙ күремдән күренеп,
Ҙур япраҡлы ағастай,
Күгәреп ятҡан Уралтау.
Ботағы алтын алҡалай,
Япрағы көмөш тәңкәләй,
Һыны һылыу егеттәй,
Тамыры ташҡа ереккән
Ҡарағай, имән, ҡайынға, —
Бары ла һөйгән Уралтау[212].

Маҡтауға, Уралдың гүзәллеген, байлығын һүрәтләүгә, уның ата-бабаларҙың изге төйәге икәнлеген күрһәтеүгә маҡсат тотҡан был ҡобайыр ошо рәүешле 120 юлға һуҙылған. Ҡобайырҙың йөкмәткеһенә төшөнә барған һайын, Уралдың «тау» ғына түгел, «Барына ата, барына инә Уралым» икәнен беләһең. Был 120 юлдан торған ҡобайыр тик Уралды маҡтауға ғына ҡоролһа ла, унда бер ниндәй ҡабатлау юҡ, уның һәр юлы Уралдың яңы сифатын аса һәм Уралға халыҡ тарафынан һалынған ҙур һәйкәлдең ҡабатланмаҫ бер өлөшө булып тора.

Әле «Ай Уралым, Уралым» ҡобайырында Урал образы туранан-тура Тыуған ил образының синонимы икәнлеге төбәп үк әйтелмәһә, «Урал тигән илем бар» ҡобайырында:

...Урал тигән илем бар
Илем барҙа көнөм бар[213] —

тип әйтелә һәм Урал — тыуған ил, тыуған ер йөкмәткеһен йөрөткән образға әүерелә.

---

[212] Башҡорт халыҡ ижады. 1 ге том. — Өфө, 1954, 55—56-сы биттәр.

[213] Шунда уҡ, 58-се бит.

Ә инде тыуған ил, тыуған ер образы, уларҙың әҙәбиәттә хәл ителеше һәр ваҡыт патриотизм темаһы менән бәйләнә.

Башҡорт поэзияһында патриотизм темаһы шулай уҡ ир-егет, ат образы менән айырылғыһыҙ. Был образдар иһә башҡорт поэзияһында һәр ваҡыт игеҙәк туғандар кеүек бер-береһенә тығыҙ бәйләнгәндәр. Быны шулай икәнен башҡорт халыҡ ижады һәм уның көслө традицияларын дауам итеүсе яҙма поэзияның тарихы тулыһынса иҫбатлай.

Урал образы ҡобайырҙарҙан ҡала тарихи йырҙарҙа, тыуған ил темаһына арналған йырҙарҙа һәм йырҙарҙың башҡа төрҙәрендә, хатта мөхәббәт йырҙарында ла киң урын ала.

Миҫалдарҙан күренеүенсә, Урал образы элек туранан-тура һүрәтләү предметы булып торған һәм, ваҡыт үтеү менән, тыуған ил, тыуған ер йөкмәткеһе һалынған традицион образға әүерелгән. Беҙ был миҫалда ла традицион образдарҙың күбеһе үҙҙәренең ҡулланыла башлаған осоронда ҡатып ҡалған форма ғына түгел, ә тулы йөкмәткегә эйә булғанлығын тағы бер ҡабат раҫланыҡ.

Шуныһы ҡыҙыҡлы, халыҡ күңелендә тәрән урын алған образдар әҙәбиәттә генә түгел музыкала ла, хатта бейеүҙә лә киң урын тота, халыҡтың дөйөм культура ҡаҙанышына әүерелә һәм интернационал төҫ ала.

Хәҙерге әҙәбиәткә халыҡ ижадынан килеп ингән традицион образдар формаға ҡайтып ҡалһа ла, улар йөкмәтке, тема менән тығыҙ бәйләнештә. Традицион образ — йөкмәткеле форма ул. Улар донъяны эстетик танып белеү осороноң таңында килеп тыуғандар һәм ваҡытында үҙҙәре тулы һүрәтләү предметы булып йөрөгәндәр.

## Заман һынауы һәм тормош шауҡымы

Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы халыҡ тормошона тиңе булмаған үҙгәреш алып килде. Революциянан һуң күптән азатлыҡҡа һыуһаған башҡорт халҡының да экономик, политик һәм культура тормошонда ҙур үҙгәрештәр булды.

Быға тиклем замандың һәр бер ҙур ваҡиғаһын үҙендә сағылдырып килеүсе халыҡ ижады ла революция һынлы революцияны, яңы тормош шауҡымын сағылдырмай ҡала алмай ине. Шулай уҡ, халыҡ ижады элекке хәлендә үҙгәрешһеҙ генә үҫеүе лә мөмкин түгел ине. Халыҡ ижадының тарихына күҙ һалһаң, заман үҙгәреү менән ҡайһы бер жанрҙарҙың пассивлашыуын, ҡайһы бер жанрҙарҙың активлашыуын, яңы жанрҙар, яңы образдар тыуыуынан күрәһең.

Совет осоронда халыҡ ижадының иң актив һәм оператив жанрҙары — ҡыҫҡа йырҙар, таҡмаҡтар, әйтемдәр өҫтөнлөк итте, сөнки улар үҙҙәренең характеры менән публицистик поэзияға яҡын торалар.

Совет осоронда халыҡ ижадынан килгән традицион образдар ҙа бер урында ҡатып ҡалманы, улар ҡырҡа үҙгәрешкә дусар булды.

Ҡайһы бер ҡайғы-хәсрәт, бәхетһеҙлек, ауыр тормош, яңғыҙлыҡ менән бәйле булған образдар пассивлаша төштө, ҡайһы берҙәре бөтөнләй үк төшөп ҡалды. Шатлыҡ, мөхәббәт, бергәлек, күңелле тормош, бәхет менән бәйләнгән образдар өҫтөнлөк итә башланы. Эпитеттар, төҫ биҙәктәре лә үҙгәрешһеҙ ҡалманы. Йырҙарҙа: ҡыҙыл, ал, аҡ, алһыу кеүек төҫтәр киң ҡулланылыш тапты, ә ҡайғы менән бәйле булған ҡара, һары кеүек төҫтәр һирәгерәк ҡулланыла башланы.

Халыҡ ижадына яңы тормош шауҡымы менән ҡыҙыл байраҡ, ҡыҙыл флаг, ураҡ менән сүкеш кеүек яңы образдар килеп инде һәм улар традицион образға әйләнде. Партия, Ленин, коммунизм кеүек яңы темалар активлашты һәм халыҡ ижадында ҙур урын алды.

Совет осоронда иң ныҡ таралған традицион образдар: алма, гөл, сәскә, күгәрсен образдары. Был образдарҙың йөкмәткеһенә халыҡ: бәхетле тормош, туҡлыҡ, матурлыҡ, берҙәмлек мәғәнәләрен һалған.

Ҡашың да ҡара ғына,
Күҙең дә ҡара ғына,
Советский властарҙа
Үҙең дә алма ғына.
Алмағастың алмаһын
Эшсән халыҡ ашаһын,
Тура юлдан етәкләүсе —
Партиябыҙ йәшәһен.
Алмағастың алына,
Ҡоштар ҡунған талына,

Ленинизм алып бара,
Коммунизм таңына[214].

Был миҫалдарҙан күренеүенсә, алма образына бәхетле, етеш тормош мәғәнәләре һалынған. Икенсе куплетта юл образы килеп инә. Был образ совет осорондағы фольклорҙа бик киң таралған. Шуныһы ҡыҙыҡлы, юл образы һәр ваҡыт партия, Ленин, коммунизм менән бәйләнгән.

Алға тибеҙ, алға тибеҙ,
Алға маяҡ ҡуйылған.
Коммунизмға киләбеҙ
Ленин иптәш юлынан.
Тәҙрә астым, ҡояш сыҡты,
Ҡыҙыл нурҙар өләште,
Ленин бабай эшселәргә
Тура юлдар күрһәтте[215].

Совет осоро фольклорында күмәклек, берҙәмлек тойғоһо бик ныҡ өҫтөнлөк итә. Һәм күпселек йырҙарҙа был һыҙат күгәрсен образы аша бирелә.

Күгәрсендәр ергә төшә,
Бергәләп гөрләшергә.
Ленин бабай эшселәрҙе
Саҡырҙы берләшергә.
Аҡ күгәрсен дә уйнай,
Күк күгәрсен дә уйнай.
Совет булғас, донъя рәхәт,
Ҡыуанып күңел туймай.
Күгәрсендәр ергә төшә,
Бергәләп гөрләшергә,
Елбер-елбер ҡыҙыл байраҡ,
Саҡыра берләшергә[216].

Күпселек халыҡ йырҙарында тәүге ике юл йөкмәтке нагрузкаһын йөрөтмәй, тик һуңғы ике юлда ғына әйтәһе һүҙ әйтеп бирелә, ләкин совет осоро халыҡ йырҙарында был тәңгәлдә ҡырҡа үҙгәреш булды: традицион образдар күпселек тәүге юлдарҙа ҡулланыла һәм

---

[214] Башҡорт халыҡ ижады. 3-сө том. — Өфө, 1955, 63, 83, 89-сы биттәр.
[215] Шунда уҡ, 88, 99-сы биттәр.
[216] Башҡорт халыҡ ижады. 3-сө том. — Өфө, 1955, 88, 94, 98-се биттәр.

әйтәһе фекерҙең үтемлелеген көсәйтә, үҙҙәре үк йырҙағы бөтөн бер йөкмәткене тулыландырып килә. Мәҫәлән:

Ҡыҙарып сыҡҡан ҡояштың
Нуры төшә йылғаға,
Ленин бабабыҙ сығарҙы
Беҙҙе яҡты донъяға[217].

Күренеүенсә, тәүге ике юлдағы: «ҡояш», «нур» образдары Ленин һәм яҡты донъя менән тығыҙ бәйләнгән. Әйтеләһе фекер тәүге ике юлда уҡ төҫмөрләнеп ҡуйылған.

Совет осоро фольклорында Урал, ат, ир-егет кеүек традицион образдар ҙа халыҡ поэзияһынан ситтә ҡалманылар, әлбиттә. Борон-борондан килгән ат образы күпселек Ҡыҙыл Армия, революция, Ватан һуғышы темаларында өҫтөнлөк итә. Был тәбиғи. Халыҡ ижадында илде дошмандан һаҡлау һәр ваҡыт ат образы һәм ир-егет образы менән бәйләнгән.

Ә инде Урал образына килгәндә, совет осоро фольклорында бер ни тиклем үҙгәреш күрәбеҙ.

Халыҡ революциянан һуң Тыуған ил мәғәнәһен Урал образы менән генә сикләп ҡала алманы, Тыуған ил «Совет иле» төшөнсәһен алды. Ә Урал образы тыуып үҫкән ер мәғәнәһендә ҡулланыла башланы, ләкин үҙенең эстетик йөкмәткеһен юғалтманы. Артабан был образ яҙма әҙәбиәттә, бигерәк тә тарихи әҫәрҙәрҙә киң үҫеш алды.

Совет фольклорындағы образдар системаһында тағы шул нәмә күҙгә ташлана: халыҡ ижады яңы тормош картиналарын бик тиҙ үҙенә йәлеп итте, лексик яҡтан байыны, яңы образдар барлыҡҡа килде. Борондан килгән алма, гөл, күгәрсен, ат, имән, ҡояш, йондоҙ, юл кеүек образдар халыҡтың көр күңелен, азат хеҙмәтен сағылдырыуҙа ҙур урын тоттолар.

Был осорҙа яҙма әҙәбиәт менән халыҡ ижадының ике яҡлы бәйләнеше көсәйҙе. Фольклор — әҙәбиәткә, әҙәбиәт — фольклорға йоғонто яһаны. Әҙәбиәттәге көнсығыш һәм башҡа әҙәбиәттән килгән образдар ме-

---

[217] Шунда уҡ, 88-се бит.

нән фольклор, фольклорҙағы традицион образдар менән әҙәбиәт байыны.

Әҙәбиәттең халыҡ ижады аша килгән саф башҡорт образдарын үҙләштереүе, әҙәби телдең халыҡҡа яҡынайыуы, сит телдәр лексикаһынан таҙарыуы менән бергә барҙы.

Был күренештең эволюцияһын Дауыт Юлтый менән Шәйехзада Бабичтың ижады миҫалында бик асыҡ иҫбат итергә мөмкин.

Шәйехзада Бабич та, Дауыт Юлтый ҙа әҙәбиәткә көнсығыш поэзияһы аша килделәр. Уларҙың ижадының тәүге осоронда көнсығыштан килеп ингән образдар, шулай уҡ, ғәрәп-фарсы лексикаһы өҫтөнлөк итә. Дауыт Юлтыйҙың тәүге — «Башҡорт хәле» тигән шиғырында уҡ халыҡ ижадынан килеп ингән ат, арыҫлан кеүек образдар булһа ла, шиғыр, халыҡ яҙмышы темаһын күтәрһә лә, асылда ул көнсығыш традицияларына нигеҙләнеп яҙылған, унда халыҡҡа аңлашылмай торған ғәрәп-фарсы һүҙҙәре тулып ята. Бабичтың тәүге шиғырҙарында ғәрәп-фарсы лексикаһы тағы ла күберәк. Ләкин 1916 йылда яҙылған «Көтәм» шиғырында беҙ бөтөнләй икенсе хәлде күрәбеҙ.

Бабич был шиғырында башҡорт халҡының яҙмышы, уның үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге мәсьәләләрен күтәрә. Халыҡ яҙмышын, үткән тарихи юлын халыҡсан итеп һүрәтләү өсөн, халыҡ ижадын, халыҡтың бай тел сараларын, борондан килгән, халыҡ эстетикаһы менән бәйле булған традицион образдарҙы урап үтеү мөмкин түгел.

Йөрөгән саҡта башҡорт туғайҙарын,
Йәнем әллә ҡайҙа елкенә;
Ишеткәндә моңло ҡурайҙарын,
Йөрәгемә моңдар бөркөлә...
Янып-көйөп, бәғерем өҙгөләнеп,
Ләғнәт уҡыйым, кемгә — белмәйем,
«Килерме икән аҡ көн беҙгә лә?» — тип
Уралҡайға ҡарап илайым.
Күрәм: үҙ олпатын боҙмай һаҡлап,
Урал ята әкрен, тын ғына;
Ала шунда йәнде тынлыҡ ҡаплап,
Килә башлай тәмле уй ғына...

Килтерелгән өҙөктән күренеүенсә, Бабич был шиғырҙа ҡурай, Урал кеүек традицион образдарҙы ҡул-

ланған. Уның шиғырына традицион образдар яланғас көйө генә килеп инмәгәндәр. Шағирҙы халыҡ яҙмышы темаһына мөрәжәғәт итеү, халыҡ ижады образдарын ҡулланырға, 10-9 ижекле оҙон йыр үлсәүе менән яҙырға этәргән; икенсенән, шиғыр ғәрәп-фарсы лексикаһынан бөтөнләй азат ителгән, һығылмалы саф башҡорт теле менән яҙылған; өсөнсөнән, туғайҙарын, ҡурайҙарын, Уралҡайға тигән һүҙҙәрҙең ҡулланылышы тап халыҡ ижадындағыса; дүртенсенән, ырыҫ, олпатын, илайым кеүек тик башҡорт телендә генә булған һүҙҙәр менән поэтик лексика байытылған; бишенсенән, гүрестан, гөлөстан, ғәм, бәғер кеүек ғәрәп-фарсы телдәренән килеп ингән һүҙҙәр башҡорт халыҡ телендә киң таралып, «гражданлыҡ хоҡуғы алған» өсөн генә ҡулланылған, улар аңлатмаһыҙ-ниһеҙ бөтә кешегә аңлашылып тора.

Шул уҡ 1916 йылда яҙылған «Яҙғы йыр» шиғырында ла халыҡ йыры традицияһы көслө. Был шиғырҙа традицион «һандуғас» образы менән «былбыл» образы ла ҡулланыла.

Йырҙар яҙам тауҙың күкрәгендә,
Ҡөҙрәтле ел, аҡрын, иҫмәй тор,
Һандуғасҡай, наҙлым, ҡуй һайрама,
Һайрап йәш бәғеремде киҫмәй тор.
Иҫеңдәме, былбыл, үткән яҙҙа,
Һин һайраған ағас төбөндә,
Кем ине ул шунда ҡосағымда,
Ай балҡыған яҙҙың төнөндә?

Һандуғас менән былбыл бер ҡоштоң исемдәре булыуына ҡарамаҫтан, бер үк шиғырҙа икеһе лә ҡулланылған. Шиғырҙағы «һандуғасҡай» — образы башҡорт халыҡ ижадынан килеп ингәне күренеп тора, ә «былбыл» көнсығыш поэзияһы аша килеп ингән. Ә образ үҙенең тәбиғәте менән көнсығыш поэзияһында ла, башҡорт халыҡ ижадында ла бер үк мәғәнәләрҙә ҡулланыла. Тимәк, был образ бер нисә халыҡ өсөн дә уртаҡ. Ә инде уның шулай булыуы ҡыуаныслы хәл, сөнки бөтә халыҡтар ҙа донъяны эстетик танып белеүҙә бер нәмәгә — донъяның объектив матурлығын, гүзәллеген асыуға ынтыла. Ә объектив матурлыҡ образ тәбиғәте менән ныҡ бәйләнештә.

Ш.Бабич башҡорт халыҡ ижадынан килеп ингән традицион образдарҙы «Ҡурайҡайға», «Башҡортостан», «Салауат батыр» кеүек шиғырҙарында ла киң ҡулланған.

Аталып киткән өс шиғыр ҙа халыҡ яҙмышы менән бәйләнгән. «Ҡурайҡайға» шиғыры был яҡтан бигерәк тә ныҡ айырылып тора.

Һыҙҙырт, ҡурай, үткән ҡайғыларҙы,
Өҙҙөрт, ҡурай, йөрәккәй ҡылдарын;
Һиҙҙерт, ҡурай, ҡайнар тойғоларҙы,
Һөйҙөрт һөйләп башҡорт моңдарын.
Һөйлә Һаҡмар, Яйыҡ, Ашҡаҙарҙы,
Һөйлә йәмле Урал буйҙарын;
Һөйлә ожмах кеүек сахраларҙы,
Йәйелеп ятҡан йылҡы, ҡуйҙарын.

Был шиғырҙа традицион ҡурай образы менән халыҡ ижадының бөтә байлығы килеп ингән, ҡурай образы шиғырҙа композицион яҡтан ойоштороусы үҙәк образға әүерелгән. Ғөмүмән, традицион образдарҙың шиғырҙарҙы композицион яҡтан ойоштороусы үҙәк образ булып үçеше үҙе лә халыҡ ижады традицияһынан килә, ләкин әҙәбиәттә ул яңы баçҡысҡа күтәрелә, новаторҙарса яңғыраш таба.

Традицион образдарҙың шиғырҙы композицион яҡтан ойоштороуҙағы тотҡан урыны, Дауыт Юлтый ижадында ла ныҡ сағылған.

Дауыт Юлтый поэзияһында традицион образдар бик киң һәм төрлө аспектта ҡулланыла.

«Ерән атым» шиғырына күҙ һалайыҡ:

Әйҙә, саптар, осҡор ерән атым!
Һин бит минең ҡадир ҡанатым!
Ос, дөлдөлөм, ҡыçҡарт оҙон юлым,
Минут яһа ауыр сәғәтем!
Алтын тояҡҡайҙарың ҡыҙыу алдыр!
Һуҙылып ятҡан юлдар төрөлһөн!
Башҡайыңды сайҡап, ебәр кешнәп,
Йөрәгеңә дәрттәр өрөлһөн!
Ул көтәлер мине төндәр буйы,
Юлдан күҙен алмай, зар булып,
Һәр минуты — ауыр ай, йыл булып,
Һәр күренгән — ҡара тау булып.
Саптыр, осҡор атым, ос ҡанатым!
Зарыҡмаһын көтөп яңғыҙы,
Иламаһын, минең фәрештәмдең
Сыланмаһын йәшкә ал йөҙө...

Ат образы бында бер ҡарауға бөтөнләйе менән традицион ҡулланылған кеүек. Ләкин ныҡлабыраҡ, абайлабыраҡ уҡый төшһәң, бөтөнләй улай түгел. Ат образы был шиғырҙа лирик геройҙың эске кисерештәрен психологик анализлау өсөн ҡулланылған. Лирик геройҙың атҡа мөрәжәғәтендә бөтә эске донъяһы: һөйгәнен шул тиклем һағыныуы, уның янына атылыуы тәрән итеп әйтеп бирелгән.

Юлтый ижадында традицион образ булараҡ «батыр», «егет» образдары ла ҡулланыла. Был образдар халыҡ ижадындағыса Урал, ат образы, тыуған ил, патриотизм төшөнсәләре менән тығыҙ бәйләнгән.

«Урал егетенә», «Атлан батыр» кеүек шиғырҙарҙы ғына алып ҡарайыҡ: уларҙа халыҡ яҙмышы өсөн мөһим булған мәсьәлә күтәрелгән, шиғырҙарҙың үлсәме халыҡ йырыныҡы, теле халыҡсан:

Бөтә тарихына шаһит булған
Ил күкрәге — Уралтауың бар,
Дошмандарың ҡыҫһа йорт-ереңде,
Ҡаршы сығыр өсөн яуың бар.
Икһеҙ-сикһеҙ яткан урманың бар,
Ашҡаҙарың, Иҙел буйың бар,
Ҡурайың бар, һинең моңдарың бар
Әйҙә һыҙғырт, ниндәй көйөң бар!

*(«Урал егетенә»)*

Был шиғыр поэтик яҡтан өлгө булырлыҡ, ул шымалығы, лиризм һәм теленең һығылмалылығы менән айырылып тора. Ләкин әле «егет» образы пассив, шиғыр дидактикаға ҡоролған. Ә инде «Атлан, батыр» шиғыры, шулай уҡ дидактик характерҙа булһа ла, революцион пафос, патетика менән һуғарылған. Был шиғырҙа халыҡ бәхетен, революция ҡаҙаныштарын яҡлап яуға сыҡҡан батыр образы үҙәктә тора. Ләкин бында ла батыр образы ат образы, Тыуған ил образы менән тығыҙ бәйләнештә хәл итеРә. Шиғырҙа ҡобайырҙарҙан килгән публицистик пафос, күтәренке рух өҫтөнлөк итә.

Шағир бында әҫәргә юғары тон, юғары стиль формаһын биреү өсөн традицион образдар менән бергә асманға (күк, юғары урын) һәм ҡаанлыҡ (ханлыҡ) кеүек ғәрәп-фарсы һүҙҙәрен дә ҡулланған. Икенсе яҡлап ҡарағанда, бындай һүҙҙәрҙең ҡулланылыуы әле башҡорт әҙәби теленең нормалары ныҡлы урынлашып етмәү

менән аңлатыла. Д.Юлтыйҙың традицион образдарға яңы йөкмәтке һалырға ынтылышын «Образ. Традиция. Новаторлыҡ» тигән мәҡәләһендә Ә.Хәкимов та билдәләп үткән. Уның поэзияһындағы һандуғас һәм Сулпан образдарының эволюцияһын күҙәтеп, был образдарҙы шағир революцияға тиклемге поэзияһында бер төрлө ҡулланһа, революциянан һуң бөтөнләй яңы йөкмәтке һалыуын билдәләгән[218].

Шулай итеп, Шәйехзада Бабич менән Дауыт Юлтый ижады миҫалында беҙ башҡорт халыҡ ижадынан килеп ингән традицион образдарҙың әҙәбиәттә нисек ҡулланыла башлауын, был образдарҙың тема менән бәйле булыуын, уларҙың яҙма әҙәбиәткә килеп инеүе менән бергә поэзияның теле ғәрәп-фарсы лексикаһынан әрселәүен, телдең халыҡсан була барыуын, яҙма поэзияның халыҡ ижады өлгөләренә яҡынлашып ҡына ҡалмай, халыҡ ижадын үҙләштереү юлы менән новаторлыҡҡа ынтылыуын күҙәттек. Был күренештәр традицион образдарҙың халыҡ ижадынан профессиональ поэзияға үтеп инеүе һәм үҫешендәге мөһим бер этап булып тора.

## Милли образ — интернациональ йөкмәтке

Һәр замандың поэзияһы ниндәйҙер традицияларға нигеҙләнеп үҫә һәм конкрет осор өсөн генә хас булған яңы һыҙаттар менән байый. Тормоштағы объектив матурлыҡты, заман геройының рухи донъяһын тәрәнерәк асыу, шуның менән кешеләрҙә гүзәл тойғолар уятыу, уларҙы көрәшкә саҡырыу, тормоштоң матурлығын тойорға өйрәтеү — ысын поэзияның бурысы бына шунда булһа кәрәк. Йәғни поэзияның төп бурысы интернациональ характерҙа, һәм ысын поэзия бер ваҡытта ла бер халыҡтың ғына ҡаҙанышы булып ҡала алмай.

Һәр милләттең бөйөк шағиры бөтә донъя өсөн дә ҡәҙерле һәм яҡын: рустың милли шағирҙары Пушкин, Лермонтов, Есенин, Твардовский; немец халҡының шағирҙары Гете, Гейне; инглиз халҡының шағирҙары Бай-

---

[218] Әхиәр Хәкимов. Әҙәбиәт һәм заман. — Өфө, 1967, 125-се бит.

рон, Шекспир; төрөк шағиры Назым Хикмәт; авар шағиры Рәсүл Ғамзатов, татар шағирҙары Туҡай, Таҡташ, Йәлил, Туфан башҡорт уҡыусыһы өсөн яҡын булған кеүек, башҡорт халыҡ ижадының аҫыл традицияларын дауам итеүсе Мостай Кәримде лә башҡа халыҡтар үҙенеке итеп ҡабул итә. Ә бит аталып киткән һәр бер шағир иң тәүҙә үҙ халҡының шағиры, улар үҙ милләтенең ысынбарлығында, үҙ халҡының ижады традицияларында үҫеп сыҡҡан. Пушкинды рус ысынбарлығынан, рус халыҡ ижадынан башҡа күҙ алдына килтереп булмаған кеүек, Туҡайҙы татар халҡының ысынбарлығынан, татар халыҡ ижадынан башҡа күҙ алдына килтереү мөмкинме? Шул уҡ ваҡытта уларҙы бөтә донъя халҡы яратып уҡый. Тимәк, ысын поэзияла милли сикләнгәнлек юҡ, тик милли колорит ҡына бар. Милли колорит ул тышҡы ялтырауыҡ ҡына түгел, ә айырым бер халыҡтың донъяны эстетик танып белеүенең, эстетик гүзәллекте асырға ынтылышының — үҙ юлы. Был — һәр халыҡтың үҙенә хас психологияһы, көнкүреше, фекер йөрөтөү даирәһе, тарихи үткәне менән ныҡ бәйләнгән.

Мәсьәләгә ошо яҡлап килгән саҡта, башҡорт поэзияһында быуаттар буйы йәшәп килгән традицион образдарҙың бөгөнгө көндә новаторҙарса яңғырау сәбәбенең сере асыла булһа кәрәк.

Поэзия, ғөмүмән, әҙәбиәт донъяны образдар аша танып белә. Поэзия фекер йөрөтөүҙең образлы формаһы. Ләкин һәр бер образ традицияға әйләнеп китмәй, традицияға тик халыҡ тарафынан бер ваҡытта ла иҫкермәй торған эстетик йөкмәтке һалынған образдар ғына әүерелә, шул ваҡытта ғына теге йәки был халыҡ поэтик образды күңеленең түрендә йөрөтә. Ә инде яҙма поэзия традицион образдарҙы бер ваҡытта ла ҡатып ҡалған көйөнсә ҡулланмай, традицион образға элек һалған эстетик йөкмәтке яны сифаттар менән байытыла. Был яҡтан традицион образдар бик һығылмалы, һәр таланттың ижадында улар йәшәреү, яңырыу кисерәләр һәм интернациональ яңғыраш алалар. Бер халыҡ әҙәбиәтендәге традицион образдың икенсе халыҡ әҙәбиәтенә еңел күсеүе лә ошоноң менән аңлатылырға тейеш. Шуны әйтеп китергә кәрәк: бер халыҡ әҙәбиәтендәге традицион образдарҙың икенсе халыҡ әҙәбиәтенә күсеүе һәм, граждандлыҡ хоҡуғы алып, унда ерлек табыуы, артабан үҫтерелеүе өсөн бер нисә шарт булыр-

ға тейеш. Беренсенән, бының өсөн бик оҙайлы әҙәби бәйләнеш мөһим. Икенсенән, тәьҫир итеүсе әҙәбиәттән күсеүсе образдарға ҡабул итеүсе халыҡ тормошонда реаль шарттар булыуы шарт. Ләкин был осраҡтарҙа ла икенсе әҙәбиәттән күсеүсе теге йәки был традицион образ үҙгәрешһеҙ ҡала алмай, образға өҫтәлмә эстетик йөкмәткеләр һалына.

Татар тәнҡитсеһе Р.Бикмөхәмәтов «Поэзиябыҙҙың һулымаҫ сәскәләре» тигән хеҙмәтендә татар поэзияһына көнсығыш поэзияһынан килеп ингән традицион образдарға ла күҙәтеү үткәрә. Ул традицион образдарҙың ике планда ҡулланылыуын әйтеп үтә. Беренсенән, традицион образдар реалистик, предметлыҡ төшөнсәһендә ҡулланыла; икенсенән, шартлы рәүештә ҡулланыла. Ләкин, һис шикһеҙ, беренсеһенән икенсеһе үҫеп сыҡҡан. Традицион образдарҙы шулай ике планда ҡулланыу традицияһы хәҙерге поэзияла ла ныҡ һиҙелә.

Был тәңгәлдә шундай ҡыҙыҡлы күҙәтеү үткәрергә мөмкин. Традицион образ әгәр бөгөнгө көндә предметлыҡ мәғәнәһен тормошта юғалтмаһа, образ предмет төшөнсәһендә лә ҡулланыла. Әгәр традицион образ тормошта үҙенең активлығын юғалтып барыусы образ булһа, ул күберәк шартлы планда ҡулланыла. Әйтәйек, Ватан һуғышы йылдарында ҡылыс, ат образдары поэзияла ныҡ урын алды. Быға тулыһынса реалистик нигеҙ бар ине. Һәм был образдар предмет планында ла, символик планда ла ҡулланылды. Ә хәҙерге көндә ошо образдар күберәк шартлы планда ҡулланыла, ләкин эстетик йөкмәткене кәметмәй, тик уға яңы йәшәү бирә. Ғөмүмән, ҡылыс образына нәфрәт, үс, ҡыйыулыҡ төшөнсәләре һалынған һәм ул бөтә донъя әҙәбиәтендә лә ошо йөкмәткене йөрөтә. Берлин ҡалаһында Трептев паркындағы азат итеүсе совет һалдаты һәйкәленең бер ҡулында бала булһа, икенсе ҡулында — ҡылыс. Бында ҡылысҡа тағы бер өҫтәлмә йөкмәтке һалынған — ул тыныслыҡ һаҡлай. Ҡорал тыныслыҡ һаҡлай — беҙҙең заманға бик хас күренеш. Күпселек халыҡтарҙың әҙәбиәтендә таралған ҡылыстың ошо мәғәнәлә һынланыуы — ер йөҙө халыҡтарының донъяны эстетик танып белеүгә ынтылышының интернациональ характерҙа булыуын асыҡ сағылдыра.

Бөгөнгө башҡорт поэзияһында традицион образдарҙың киң ҡулланылыуына төрлө сәбәптәр бар. Иң бе-

ренсе сәбәп, минеңсә, шул: меңәр йыл буйы йәшәп килһәләр ҙә, әле күп кенә традицион образдар үҙҙәренең эстетик ҡиммәтен генә түгел, эстетик мөмкинлектәрен дә асып бөтмәгәндәр.

Икенсенән, традицион образдар халыҡтың эстетик зауҡы менән тығыҙ бәйләнгән, шуның арҡаһында, уҡыусыла бик тиҙ ассоциация тыуҙыра. Шағир, теге йәки был образды ҡулланып, ошо образ аша уҡыусыға әйтергә теләгән яңы фекерен тиҙерәк еткерә ала. Өсөнсөнән, традицион образдар һәр ваҡыт ҡатып ҡалған көйө ҡулланылмай, һәр бер шағир уны үҙенсә бирә, ошо образ аша яңы фекер әйтә; был образға яңы йөкмәтке һала. Бына ошо рәүешле традиция яңы кәүҙәләнеш ала. Бында традиция менән новаторлыҡтың диалектик бәйләнеше сағыла. Дүртенсенән, традицион образдар социалистик йөкмәткеле әҙәбиәттең милли колоритын биреүҙә мөһим урын тоталар. Әлбиттә, милли колорит мәсьәләһен тик традицион образдарға ғына ҡайтарып ҡалдырып булмай, милли колорит ҙур категория. Ул лирик геройҙың характерында ла, шағирҙың айырым милләт кешеһе булараҡ ысынбарлыҡты сағылдырыу манераһында ла, фекер йөрөтөүҙең тарихи үҫешендә лә сағыла, ә поэзиялағы традицион образдар — ошо атап киткән милли колорит үҙсәнлектәренең айырылғыһыҙ бер өлөшө, ул фекер йөрөтөүҙең, донъяны эстетик танып белеүҙең үҙсәнлекле формаһы.

Башҡорт поэзияһында традицион Урал, ат, ир-егет, шоңҡар, бөркөт, ҡылыс, уҡ-һаҙаҡ, ыласын, ҡарсыға, имән кеүек гүзәл образдар юҡҡа ғына киң таралмаған. Был образдар башҡорт халыҡ ижадында тарихи үткән менән бәйле булһа, бөгөнгө әҙәбиәттә халыҡтың үткәненә тарихи ҡараш, ҙур ихтирам һәм эстетик фекер йөрөтөүҙең үҙсәнлекле формаһы менән бәйләнгән.

Башҡорт поэзияһында халыҡ ижадынан килеп ингән ат образын ғына алып ҡарайыҡ. Ат образының эпостарҙа, легендаларҙа, әкиәттәрҙә, мәҡәлдәрҙә ир-егеттең ҡанаты, уның яҡын ярҙамсыһы, хатта кәңәшсеһе итеп һүрәтләнеүе беҙгә күптән мәғлүм, фольклор әҫәрҙәрен күҙәтеү шуны күрһәтә: ат образы борон-борондан героика, ир намыҫы, патриотизм кеүек тойғолар менән бәйле. Ат образы эпостарҙан, әкиәттәрҙән тарихи йырҙарға — Салауат тураһындағы йырҙарға, Салауат тураһындағы йырҙарҙан «Ҡаһым түрә»гә, унан

һуң граждандар һуғышы йылдарындағы Ҡыҙыл Армия хаҡындағы йырҙарға килеп инә, унан Ватан һуғышы тураһындағы йырҙарға күсә.

Ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр күрмәй
Ир-егеткәй менән ат башы, —

тип йырлана башҡорт халыҡ йырҙарының береһендә. Ат образы ниндәй генә әҫәрҙә бирелмәһен, беҙҙе ялыҡтырмай, киреһенсә, ул беҙҙең күңелгә яҡын. Башҡорт шағирҙарының ижадына күҙ һалып сыҡһаң, унда «атһыҙ шағирҙар» юҡ тип әйтерлек. Шуныһы ҡыҙыҡлы, һәр шағир был образды үҙенсә бирергә, ошо образ аша ниндәйҙер яңы фекер әйтергә тырыша. Ғ.Сәләмдең «Шоңҡар» поэмаһында Әхмәт, Бурылына өндәшеп:

Аҡ шоңҡарҙар булып османыҡмы
Был урында бөтә аранан,
Әйтсе, Бурыл, әйтсе, йәшәр өсөн
Ҡайһы һуҡмаҡ менән баралар? —

ти. Был юлдарҙан, тормош юлынан аҙашып, насар юлға төшкән Әхмәттең яңғыҙлыҡта ғазап сигеүен төҫмөрләргә мөмкин.

Уның таяныр кешеһе лә юҡ, шуға күрә Әхмәт үҙенең Бурылына эсендәге бөтә серҙәрен әйтеп бирә. Шағир юлдан яҙған геройының ғазап сигеүен, эске кисерештәрен Бурылға һөйләгән монологы аша асып биргән.

Әгәр автор Әхмәттең эске кисерештәрен, уның выждан ғазабын геройҙың уйланыуы формаһында бирһә, беҙ уның кисерештәрен ошо дәрәжәлә тәрән аңлай алмаҫ инек.

Ғ.Сәләмдең геройы:

Их, нишләйем, телең юҡ шул һинең...
Һөйләй алмайһың һин, Бурылым, —

тиһә, Мостай Кәримдең «Минең атым» шиғырында Аҡбуҙ лирик геройҙың төшөнә инә һәм телгә килә:

Өс ай инде
Ауыҙлыҡһыҙ минең йүгәнем,
Өс ай инде,
Аҡ күбеккә батып,

Яландарҙа яңғыҙ еләмен.
Өҙгөләне елдәр, хәтәр елдәр,
Һин ялыма үргән таҫманы.
Мин ант иттем туғайҙарға ҡарап,
Мин күлдәргә ҡарап ант иттем:
— Бер үҙеңә генә тоғро атмын,
Башҡаларҙы шуға ят иттем,
Һин һауыҡһаң ине.
Дуҫһыҙ ауыр,
Эҙләп килдем эсем бошҡанға;
Һинең ҡаның өсөн үс алырға
Атылаһы ине дошманға!
Өҙәңгемә һин һикереп баҫһаң,
Дәртем таша ине шул саҡта,
Күкрәгемә йөрәк һыймай ине,
Ә хәҙер һин минән йыраҡта...

Шул урында шиғыр икенсе боролош ала:

Ҡапыл ул юғалды...
Доктор, доктор, һауыҡтырсы мине,
Ауырырға хаҡым бармы ни?
Яландарҙа яңғыҙ елеп йөрөгән
Эйәрләнгән атым бар минең!..

Аҡбуҙҙың монологын уҡығанда, беҙ онотолоп, ниндәйҙер эпос, әкиәт донъяһына сумып киткәндәй булабыҙ. Ләкин был шиғырҙа әкиәттәрҙе ҡабатлау түгел, ә ярһып, дошмандан үс алыу өсөн сыҙамай госпиталдә ятыусы һалдаттың, совет һалдатының кисерештәре. Был кисерештәр шундай оҫта итеп бирелгән, хатта монологты һөйләүсенең Аҡбуҙ икәнен дә онотаһың, бында Тыуған илен ҡайнар һөйөүсе, дошмандан үс алырға теләүсе «күңелендә эйәрле йүгәнле ат ятҡан» ир-егеттең образы, уның уйланыуҙары, дәрте, күңеле күҙ алдына килеп баҫа.

Мостай Кәримдең «Ҡышҡы юлдан Аҡбуҙ килә» шиғырына күҙ һалайыҡ. Шуныһы ҡыҙыҡлы, был шиғырҙа ла аттың ҡушаматы Аҡбуҙ. Ләкин Аҡбуҙ образы был шиғырҙа бөтөнләй икенсе планда бирелгән.

Бына ҡышҡы буранлы юлдан Аҡбуҙат килә. Санала — бер үк замандың ике кешеһе: береһе — күсер егет, уның иҙеүе асыҡ, ҡара бүркен ҡырын һалып алған, ул ҡышҡы әсе елгә йөҙ менән ҡаршы бара; икенсеһе толоп кейгән, һәм ат еленә арҡа ҡуйып ултырған. Ул һикерткән бер һикәлтәне йөҙөн һытып һынап бара. Ә Аҡбуҙ ҡар туҙҙырып саба-елә:

«Һис туҡтамай ғүмер баҡый
Шулай елә заман аты.
Берәүҙәрҙең данын тейәп,
Берәүҙәрҙең — яманатын.
Эй, замандың ярһыу аты!
Елең бәрһә биттәремә,
Үкенмәмен был донъяға
Килгәнемә, киткәнемә».

Күреүебеҙсә, Аҡбуҙ — борондан килгән традицион образ — заман атына әйләнгән, ул аяуһыҙ ваҡыт төшөнсәһен дә үҙенең еле менән бергә алып килә.

Образ бер ҡарауҙа предмет төшөнсәһендә, икенсе ҡарауҙа символ — береһе икенсеһен тултыра ғына.

Шағирҙың композитор Хөсәйен Әхмәтов тарафынан музыкаға һалынған «Ғүмер тураһында баллада»һындағы йәшәү һәм үлем хаҡында уйланыуҙарында юҡҡа ғына йәшәү — бөтә ғүмер буйы бәйгеләрҙә сапҡан ат образы менән бәйләнмәгән. Бында ат яҙмышы менән ир-егет яҙмышының тарихи бәйләнеше яҡынлығы, уртаҡлығы тәрән сағылыш тапҡан.

Ә Назар Нәжмиҙең «Йыр тураһында баллада»һында һабантуйҙа ат саптырып килеүсе егеттең ҡулындағы ҡамсыһы — ҡылысҡа, һабантуй майҙанының — һуғыш майҙанына, тыныс тормоштоң, шулай көтмәгәндә һуғышҡа барып инеүе — традицион йолалар, традицион образдар аша новаторҙарса ижад һөҙөмтәһендә шундай оҫта итеп күрһәтелгән.

Ваҡыттың етеҙ хәрәкәтле ағышы ла, ат өҫтөндә елгән егет образы ла, бик тәбиғи булып, беҙҙең күҙ алдына килеп баҫа.

Осоп барған ваҡыт кеүек,
Ат өҫтөндә елеп-елеп,
Бәйгеләрҙән ут эсенә
Барып инде шулай егет.
Керҙе егет, керҙе ваҡыт,
Донъя керҙе шулай утҡа,
Эйәрле ат булып һуғыш
Ярһып инде һәр бер йортҡа.

Поэманы уҡығанда, беҙ ҡот осҡос сыуалыштар эсендә ат тояҡтары тауышын ишетәбеҙ. Поэмалағы еңел ритм, хәрәкәт ҡылымдары үҙе үк йән-фарман елеп килеүсе атты хәтерләтә, шуға ла Саптар һәм уға атланған егет һүрәтләнгән юлдарҙы тыныс ҡына уҡып булмай, был юлдар ташҡын һыу шикелле, үҙе менән

ашыҡтырып, һине алға әйҙәй. Әгәр ошо поэманан Саптарҙы алып ташлаһаң, поэма, һуғыш майҙанында атынан йығылып ҡалған егет кеүек, ҡанатһыҙ булып ҡалыр ине.

Башҡорт халыҡ ижадында һәм яҙма поэзияла үҫеш алған традицион образдарҙың береһе — торна образы. Торна борон-борондан башҡорттарҙа изге ҡош итеп һаналған, хатта мәжүсилек ваҡытында уға табыныр булғандар. Торна образы легендаларҙа, әйтемдәрҙә һәм халыҡ ижадының башҡа төрҙәрендә ныҡлап урын алған образ.

Бөгөнгө көндә киң таралған һоҡланғыс «Сыңрау торна» балеты боронғо легендаларға нигеҙләнеп яҙылған һәм, милли сәнғәттең ҙур ҡаҙанышы булып, уның үҫешендә мөһим урын алып тора. Шуныһы ҡыҙыҡлы, халыҡтың эстетик аңында ныҡ урын тотҡан образдар тик бер әҙәбиәттә йәки фольклорҙа ғына сағылмай. Бындай образдар музыкала ла, йыр, бейеүҙә лә ныҡ сағыла. Башҡорт халҡында ат тураһындағы йырҙарҙың киң таралыуы, уның музыкала ла сағылыш табыуы осраҡлы хәл түгел. Шағир Нәжип Иҙелбайҙың «Ел ерәнем»е композитор Заһир Исмәғилев музыкаһында ниндәй көслө яңғырай. Ә башҡорт халыҡ бейеүҙәрендә атта елеүҙе сағылдырған хәрәкәттәр осраҡлымы ни?!

«Торна тояҡ килтерә», «Торна ҡайтҡас ҡар тормаҫ», ти башҡорт халыҡ мәҡәле.

Традицион торна образы беҙҙең яҙма әҙәбиәттә лә киң таралған. Уны һәр шағир үҙенсә ҡуллана. Торна образын Мостай Кәримдең, Сәйфи Ҡудаштың, Рәми Ғариповтың, Рафаэль Сафиндың һәм башҡа шағирҙарҙың әҫәрҙәрендә осратырға мөмкин.

Рәми Ғариповтың «Торналар» шиғыры был яҡтан уңышлыларҙың береһе.

Халыҡта торна килеү — яҙ килеү менән, торна китеү көҙ килеү менән бәйләнгән. Шағир, ошо нигеҙҙән сығып, бегөнгө тормошто, көҙгө туҡлыҡ, муллыҡты, именлекте бик образлы итеп сағылдырған.

...Торройҡ-торройҡ, тиһәләр ҙә,
Тормаҫ инде торналар,
Алыҫ юлға сығыр өсөн,
Күктә кәңәш ҡоралар.
Ер үлсәгән таяҡ булып
Теҙелешкән торналар.

Юҡ, улар юҡҡа ғына былай теҙелешмәгәндәр икән:

Бригадирҙың шул таяғын
Алып китмәк булалар...
Алып китһә, килтерерҙәр
Тағы таяҡ-тырмалар.
Афәт кенә килтермәгеҙ,
Һау булығыҙ, торналар!..

Тәрәнерәк уйлаһаң, был шиғыр юмор ғына булып түгел, ә киләһе яҙҙар, именлек тураһында тәрән уйланыу булып ҡабул ителә.

Мостай Кәримдең «Торналар ҡайтҡанда» тигән шиғырында торналар образы бөтөнләй икенсе планда ҡулланылған.

Болот үтә. Ҡылдар өҙөлөп ҡала,
Иңрәп ҡуя көмөш торбалар —
Шул уҡ яҡтан, шул уҡ юлдан ҡайта,
Шул уҡ яҡтан, шул уҡ торналар,
Ә ниңә һуң иңрәй торбалар?
Килер яғы, юлы, эйе, шул уҡ,
Ләкин теүәл микән ҡоштары?
Ҡалғандыр сит илдә ятып, бәлки,
Ҡанаттары һынған дуҫтары...
Ай-һай, теүәл микән ҡоштары?
Иңрәй-иңрәй көмөш торбалар,
Кире ҡайтҡан саҡта торналар.

Беҙ был юлдарҙа тормоштоң туҡтауһыҙ ағышын да, үлем менән йәшәүҙе лә тоябыҙ. Ошо юлдар шат та, һағышлы моң булып та беҙҙең ҡолаҡҡа һарлығып ҡала. Тормош беҙгә нисектер моңһоу ҙа, матур ҙа булып күренә. Торналар сыңы хаҡында әйтелмәһә лә, беҙгә көмөш торбаларҙың иңрәүе торналар сыңы булып ишетелә. Шулай итеп, шағир беҙҙе тормош хаҡындағы ниндәйҙер ҙур хикәйәтте тыңларға әҙерләй. Ә артабан бөтә әҫәр ошо сихри моң эсендә ҡабул ителә.

Иңрәп ҡуя көмөш торбалар, —
Тыуған яҡҡа ҡайта торналар, —

тигән юлдарҙың ҡарт коммунистың тормош юлын һүрәтләгән юлдар араһында ара-тирә ҡабатланып тороуы әҫәрҙең эске моңон тағы көсәйтә төшә. Әгәр торналар булмаһа, беҙгә, бәлки, ҡарт коммунисты ерләү ҙә траур музыкаһын уйнап барыусы көмөш торбаларҙың иңрәүе

лә ишетелмәҫ ине, сөнки торна сыңдары легендалар, йырҙар аша беҙҙең көндәлдәргә күптән һеңгән һәм ҡәҙерле. Талантлы шағир быны яҡшы тойған һәм традицион торна образы уны ошо гүзәл әҫәрҙе тыуҙырырға, уны халыҡсан итеүҙә ҙур этәреш яһаған.

Килтерелгән миҫалдарҙан күреүебеҙсә, һәр бер шағир борондан килгән традицион образды үҙенсә, новаторҙарса ҡуллана һәм уның аша үҙенең әйтергә теләгән яңы фекерен, тәрән уй-тойғоларын аңлайышлы итеп әйтеп биреүгә өлгәшә. Традицион образды йәнләндереү, уға яңы һулыш биреү, шул уҡ ваҡытта һәр шағирҙың таланты, ижад мөмкинлектәре менән тығыҙ бәйләнгән.

## ПРОЗАБЫҘҘЫҢ ТӘҮГЕ АҘЫМДАРЫ

XX быуат башында, бигерәк тә 1905—1907 йылдарҙағы рус буржуаз-демократик революцияһы тулҡындары менән, халыҡтың ижтимағи-политик, милли үҙаңы уяныу, революцион көрәшкә тартылыу шарттарында башҡорт әҙәбиәте, шул иҫәптән уның прозаһы формалашыу дәүеренә инә. Замандың мөһим социаль-тарихи ваҡиғалары, халыҡтың көнкүреше, сәсмә әҫәрҙәрҙең идея-тематик йүнәлешен һәм проблематикаларын билдәләүгә һиҙелерлек йоғонто яһай башланы. Әгәр элегерәк халыҡ араһында баҫма йәки ҡулъяҙма көйө таралған проза әҫәрҙәрендә күберәк өгөт-нәсихәткә ҡоролған ярым дидактик мотивтар өҫтөнлөк алған булһа, хәҙер халыҡ яҙмышы, шәхес ирке, ер мәсьәләләре менән бәйләнешле темалар ҙа күренгеләй. Улар әле баштараҡ мәғрифәтселек идеялары менән үрелеберәк бирелде. XIX быуат аҙағындағы татар мәғрифәтселек прозаһы туплаған тәжрибәләргә таянып, Башҡортостан ысынбарлығында тәү башлап художестволы прозала мәғрифәтселек идеяларын Риза Фәхретдинов, Закир Һаҙый, Мәжит Ғафуриҙар күтәреп сыҡтылар. Һәм улар ижадтарының күп яҡтары менән башҡорт һәм татар халыҡтары өсөн дөйөм әһәмиәтле мәсьәләләрҙе алға һөрҙөләр, ике әҙәбиәткә лә берҙәй хеҙмәт иттеләр.

Р.Фәхретдинов «Сәлимә, йәки ғиффәт» (1899), «Әсмә, йәки ғәмәл вә яза» (1903), З.Һаҙый «Бәхетле ҡыҙ» (1903), «Бәхетһеҙ ҡыҙ» (1905), «Яңы әсхәбе ҡәһәф» (1908), «Йыһанша хәҙрәт» (1908) һәм башҡа әҫәрҙәрендә социаль йөҙө аныҡ булмаған абстракт яуызлыҡҡа, наҙанлыҡҡа ҡаршы сығып, кешелеклелек һәм мәғрифәтселекте алға һөрҙө. Мәғрифәткә өндәү, аң-белем таратыу юлы менән, кешеләрҙең холҡон төҙәтеп йәмғиәттә тигеҙһеҙлектәрҙе юҡ итергә мөмкин тип ҡара-

нылар. Улар күпселек әҫәрҙәренең ыңғай геройҙары итеп заманына күрә аңлы, мәғрифәтле, ҡәҙимселекте күрә алмаусы муллаларҙы һәм хәлфәләрҙе алдылар. Уларҙы, ярҙамсыл, изгелекле, киң күңелле кешеләр итеп, яуыз, наҙан муллалар, ишандар һәм культураһыҙ һаран байҙарға ҡаршы ҡуйып һүрәтләнеләр. Төп конфликт нигеҙҙә бына шулар араһында бара. Мәғрифәтле мулла йәки хәлфә, эстетик идеал юғарылығына күтәрелеп, ярлы-ябағаның һәм хоҡуҡһыҙ ҡатын-ҡыҙҙарҙың берҙән-бер яҡлаусылары итеп кәүҙәләндерелә. Ә инде алдынғы ҡарашлы муллалар менән «изгелекле» байҙарҙың килешеп эш итеүе, йәғни үҙҙәренең ғилем һәм байлыҡтарын халыҡты мәғрифәткә ылыҡтырыу эшенә йүнәлтеүҙәре, мәғрифәтсе яҙыусыларға йәмғиәт тормошондағы бөтә ҡаршылыҡтарҙы хәл итеү эшендә берҙән-бер юл булып күренә.

XX быуат башында әҙәбиәткә килгән Закир Һаҙый күпселек әҫәрҙәрен, Риза Фәхретдинов ижадындағы кеүек, Башҡортостан һәм башҡорт халҡының ысынбарлығына нигеҙләнеп яҙҙы. Ул үҙенең тәүге әҫәрҙәрендә үк, башҡорт ауылдарында быуаттар буйы хөкөм һөргән иҫке ғөрөф-ғәҙәттәрҙе тәнҡитләп, наҙан муллаларҙы, алдаҡсы ишандарҙы фаш итеп, әхлаҡ һәм тәрбиә мәсьәләләрен, мәғрифәтселек идеяларын күтәреп сыға. Йәш быуынға заманса тәрбиә биреү, халыҡты наҙанлыҡтан һәм томаналыҡтан арындырыу өсөн көрәш З.Һаҙый әҫәрҙәренең үҙәк проблемаһы булып тора. Шул ҡараштарҙан сығып, ул «Бәхетле ҡыҙ» тигән тәүге хикәйәһендә Ғәйшәнең бәхетле тормошон, ғилем һәм тәрбиә емеше итеп ҡарап, идеаллаштырыңҡырап һүрәтләһә, «Бәхетһеҙ ҡыҙ» хикәйәһендә, киреһенсә, Хәнифәнең фажиғәле яҙмышын тәрбиәһеҙлек һәм наҙанлыҡтың һөҙөмтәһе итеп күрһәтә. Был хикәйәләрендә автор заманы өсөн көнүҙәк мәсьәлә булып торған ҡатын-ҡыҙ азатлығы мәсьәләләрен мәғрифәтселек идеяларына тығыҙ бәйләнештә яҡтыртырға тырышты. Ғәйшә образы миҫалында ҡатын-ҡыҙҙың бәхете ғаиләләге тиң мөхәббәттә генә түгел, бәлки, аң-белемгә эйә булып, халыҡ өсөн файҙалы кеше булып етешеүҙә лә тигән фекер уҙғарҙы.

Башҡортостанға Ғәрәбстандан, Иран, Урта Азия аша үтеп ингән һәм XVIII—XIX быуаттарҙа киң тамыр йәйгән суфыйсылыҡ идеялары әле XX быуаттың баш-

тарында ла руханиҙарҙың хеҙмәтсән халыҡты алдау һәм иҙеү ҡоралы булыуҙан туҡтап ҡалмағайны. Башҡортостандың һәр төбәгендә тип әйтерлек меңәрләгән мөритте үҙ йоғонтоһонда тотоусы ишандар һәм уларҙың ҡуштандары XX быуат баштарында ла халыҡ араһында мәғрифәт нурының үтеп инеүенә, халыҡтың яңыса йәшәргә ынтылыуына ҙур тотҡарлыҡ яһайҙар ине.

Ошо шарттарҙа З.Һаҙый үҙенең «Яңы әсхәбе ҡәһеф», «Йыһанша хәҙрәт» тигән повестарында, иҫке тәртиптәргә йәбешеп ятҡан ишан мәҙрәсәләре һәм шәкерттәре тормошон киң һүрәтләп, уҡыусыға уларҙың замандан ни дәрәжәлә артта ҡалыуын күрһәтте; төрлө кирәмәттәр менән халыҡты алдап ятыусы ишандарҙы аяуһыҙ фаш итеп, уларҙы рухи һәм әхлаҡ яғынан ҡоралһыҙландырыу эшенә булышлыҡ итте. Шулай уҡ З.Һаҙыйҙың был беренсе революция тәьҫирендә яҙылған әҫәрҙәрендә, автор әле мәғрифәтселек ҡараштарында тороуға ҡарамаҫтан, иҫкелек менән яңылыҡтың үҙ-ара көрәшен һүрәтләүҙә тәнҡитле реализм яралғылары көсәйә барғанлығы асыҡ күренде.

Закир Һаҙый — ике туғандаш башҡорт һәм татар халҡының уртаҡ яҙыусыһы. Был, беренсенән, уның әҫәрҙәрендә күтәрелгән мәсьәләләрҙең ике халыҡ өсөн дә мөһим булыуында күренһә, икенсенән, яҙыусы, XIX быуат татар мәғрифәтселек прозаһының традицияларында тәрбиәләнеп, үҙенең әҫәрҙәрен башҡорттар менән татарҙар тығыҙ аралашып йәшәгән көнбайыш Башҡортостан ерлегендә ижад итте. Ул ике халыҡтың да характерын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, көнкүрешен яҡшы белеп, милли колоритлы итеп тасуирланы. Башҡорт менән татарҙың ғүмер-ғүмергә аралашып, дуҫ-туған булып йәшәүен тулы яҡтыртты.

З.Һаҙый шулай уҡ үҙенең әҫәрҙәрендә урындағы халыҡтың мәҡәл һәм әйтемдәренә, һөйләш үҙенсәлектәренә лә бик иғтибарлы. «Бәхетһеҙ ҡыҙ» хикәйәһендә, мәҫәлән, диалогтарҙа һәм персонаждарҙың телендә башҡорт теленең Дим һөйләшенә хас булған үҙенсәлекле яҡтарын да йәтеш индереп ебәрә.

Башҡорт прозаһының үҫешенә һиҙелерлек өлөш индергән мәғрифәтсе яҙыусыларҙан Р.Фәхретдинов менән З.Һаҙый үҙҙәренең әҫәрҙәрендә күтәрелгән проблемаларының уртаҡлығы яғынан да, хикәйәләү стилдәре ме-

нән дә бер-береһенә яҡын торалар. Улар художестволы әҙәбиәткә педагогик күҙлектән ҡарап, уға тәрбиәүи йөкмәтке һалыуҙы беренсе урынға ҡуйҙылар. Шуға күрә уларҙың әҫәрҙәрендә өгөт-нәсихәт алымы өҫтөнлөк итә. Был айырата публицистик сигенеүҙәр өлөштәрендә көслө.

Р.Фәхретдинов та, З.Һаҙый ҙа, социаль яуызлыҡтың асылына төшөнөүҙән һәм халыҡ массаларының тарихта тотҡан ролен аңлауҙан алыҫ булып, донъяны тик мәғрифәтселек ярҙамында үҙгәртеп ҡорорға мөмкин тигән ҡараштан сығып эш иттеләр. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, улар үҙҙәренең әҫәрҙәрендә, башҡорттар һәм татарҙар араһында хөкөм һөргән феодаль-патриархаль тәртиптәргә, дини хөрәфәттәрҙең һөҙөмтәһе булған рухи торғонлоҡҡа ҡаршы сығып, мәғрифәтселек идеяларын алға һөрөүҙәре, ҡатын-ҡыҙ азатлығы мәсьәләләрен күтәреүҙәре менән, тормоштағы прогрессив тенденцияларҙы сағылдырып, башҡорт прозаһының артабанғы үҫешенә ыңғай йоғонто яһанылар.

Башҡорт әҙәбиәтенә тәү башлап хеҙмәтсән халыҡ вәкилдәре образын, ярлылар менән кәмһетелгәндәр темаһын алып инеүе һәм халыҡсан-демократик йүнәлешкә юл ярыуы менән XX быуат башындағы прозала, поэзиялағы кеүек үк, үҙәк урында Мәжит Ғафури ижады торҙо.

Ул, 1902 йылда яҙылып, 1904 йылда баҫылып сыҡҡан «Фәҡирлек менән үткән тереклек» тигән тәүге хикәйәһендә үк ярлы халыҡ тормошона мөрәжәғәт итте. Был факт үҙе үк Ғафуриҙың мәғрифәтселеге демократик характерҙа икәнен һәм ижады ошо йүнәлештә үҫерен төҫмөрләтте. Шул уҡ ваҡытта Ғафуриға, төп геройҙары байҙар, муллалар һәм ишандар булған мәғрифәтселек прозаһының традицияларын инҡар итеп, әҙәбиәткә ябай халыҡ тормошон алып инеү бик еңел булмай. Был ҡаршылыҡ айырата уның тәүге хикәйәһендә күҙәтелә. Ул бында, Ниғмәтулла менән Сәрүиҙең ыҙғыш-талаш менән үткән ярлы тормошон көлкөлө хәлваҡиғалар аша күрһәтеп, беренсенән, етди тормош материалы менән һүрәтләү араһындағы ҡаршылыҡҡа осраһа, икенсенән, үҙ геройҙарына һауалыраҡ ҡарап, ярлыларҙың әхлаҡ яғынан түбән кимәлдә тороуҙарына баҫым яһаған. Сәрүиҙең, Ниғмәтулла үлгәс, ауыл ярлыһы Әхмәтғәлигә кейәүгә сығып, холоҡһоҙлоҡтары ар-

ҡаһында уның менән дә тыныша алмай, талашып айырылышыу эпизодында был икенсе етешһеҙлек айырата асыҡ күренә. Шуға күрә ярлылар тормошона арналған был тәүге әҫәрҙең социаль яңғырашы йомшара төшкән.

Ғафуриҙың бынан һуң яҙылған әҫәрҙәрендә оҫталығы күтәрелә, хикәйәләүендә реалистик йүнәлеш көсәйә барҙы. Ләкин мәғрифәтселек ҡараштарында торған яҙыусы ярлылыҡтың һәм хәйерселектең, тормош тигеҙһеҙлектәренең төп сәбәптәрен тулыһынса аңлап етә алмай ине. Ул, мәҫәлән, «Аслыҡ йыл йәки һатлыҡ ҡыҙ» (1905), «Үгәй балалар» (1907) тигән әҫәрҙәрендә изгелек менән яуызлыҡты бары дөйөм кешелек гуманизмы позицияһынан тороп ҡына яҡтыртты.

Ғафуриҙың дөйөм кешелек йәки абстракт гуманизм идеялары менән һуғарылған был хикәйәләрендә, ваҡиғалар, нигеҙҙә, айырым ғаилә тормошо эсендә сикләнеп, персонаждар мәғрифәтселек реализмы принциптарына ярашлы рәүештә тарыраҡ мөхиттә хәрәкәт итә ине. Ә бына «Ярлылар йәки өйҙәш ҡатын» (1907) повесында автор ғәйепте яуыз үгәй әсә йәки һаран байға ғына ауҙарып ҡалдырмай, ҡаланың ҡунаҡ булышып, кәйеф-сафа ҡороп йәшәгән байҙар донъяһына осраҡлы эш эҙләп, аслы-туҡлы көн күргән Шәрәфтәр кеүек йөҙәрләгән ярлылар донъяһына ҡаршы ҡуйып һүрәтләй. Байҙарҙың рәхимһеҙлеген, кешелекһеҙлеген ҡаты шелтәләй. Яҙыусы хәҙер ярлыларҙың күңел киңлегенә, бербереһенә ярҙамсыл, кешелекле булыуҙарына һоҡлана, уларҙың ауыр яҙмышына әсенә.

Ғафуриҙың «Ярлылар йәки өйҙәш ҡатын» повесы башҡорт прозаһының мәғрифәтселек реализмынан тәнҡитле реализмға табан боролош алыуын раҫлаусы тәүге әҫәрҙәрҙең береһе булды. 1905—1907 йылдарҙағы революцион хәрәкәт атмосфераһында яҙылған был повестан Ғафуриҙың байҙар мәрхәмәтенә ышанысы тамам юҡҡа сығыуы, уларға ҡаршы социаль асыу тойғоһо ҡабара барғанлығы күренә. «Яҙыусы был әҫәрендә, — ти Ғ.Рамазанов, повестың фашлаусы рухын һыҙыҡ өҫтөнә алып, социаль тигеҙһеҙлек донъяһына, уның серек моралене ҡаршы ҡырҡа протест менән сыҡты, ябай хеҙмәт кешеһенең саф күңеленә, ысын кешелеклегенә дан йырланы. Үҙенең гуманистик йүнәлеше һәм буржуаз моралдең битлеген йыртыуы менән М.Ғафуриҙың

был бәләкәй повесы Горький гуманизмына һәм уның фашлаусы әҫәрҙәренә яҡынлашты»[219].

Ҡара реакция һәм яңы революцион күтәрелеш йылдарында башҡорт прозаһына А.Таһиров, Ә.Таңғатаров, З.Өммәти, Ә.Иҫәнбирҙин, В.Солтанов, К.Туйкин, Ф.Вәлиев, Ғ.Рафиҡи кеүек бер төркөм йәштәр килә. 1905—1907 йылдарҙағы революция тулҡындары майҙанға алып сыҡҡан был демократик рухлы йәштәрҙең килеүе әҙәби процесты йәнләндереүгә, әҙәбиәттең тематикаһын, жанрҙарын төрләләндереүгә булышлыҡ итә. Уларҙың ижады мәғрифәтселек реализмы йүнәлешендә үҫә.

Мәғрифәтселек реализмы традицияларының башҡорт прозаһында Россиялағы беренсе революциянан һуң да дауам иттерелеүе Афзал Таһировтың «Һатылған ҡыҙҙар» (1908), «Мазлумалар» (1911), Кәбир Туйкиндың «Яман юлдаш» (1912), Вәсим Солтановтың «Аҡса тик ятмаһын» (1913) хикәйәләрендә һәм Зыя Өммәтиҙең «Аталарға ғибрәт, йәштәргә дәрес» (1910) повесында асыҡ күренә. Был әҫәрҙәрҙә, беренсенән, иҫке мәҙрәсә тәртиптәре, халыҡ тормошондағы феодаль-патриархаль ҡалдыҡтар һәм ғаиләләге ҡырағай ғөрөф-ғәҙәттәр аяуһыҙ тәнҡит ителһә, икенсенән, әхлаҡ һәм тәрбиә, ҡатын-ҡыҙ азатлығы, ирекле мөхәббәт мәсьәләләре мәғрифәтселек позицияһынан тороп яҡтыртылды.

Шул уҡ ваҡытта был әҫәрҙәрҙең төп геройы үҙ ҡул көсө менән көн күреүсе ябай халыҡ вәкилдәре булыуы менән айырылып тора. Әйтәйек, Р.Фәхретдиновтың «Әсмә» повесының төп героиняһы мулла ҡыҙы булһа, А.Таһировтың «Һатылған ҡыҙҙар» менән «Мазлумалар» хикәйәләренең төп героинялары ата-әсәләренән етем ҡалған ярлы балалары, йәғни А.Таһиров Р.Фәхретдинов әҫәрендә үк ҡуйылған ҡатын-ҡыҙ азатлығы мәсьәләләрен ябай халыҡ вәкилдәре тормошона нигеҙләнеп күтәрә, һәм уның был әҫәрҙәрендә буржуаз әхлаҡ нормаларын фаш итеүҙә социаль мотивтар өҫтөнлөк ала барғанлығы күренә. Әммә ҡайһы бер әҫәрҙәрҙә әле герой һайлауҙа З.Һаҙый менән Р.Фәхретдинов традициялары ла һиҙелеп ҡала. З.Өммәти, мәҫәлән, үҙенең повесында төп герой итеп наҙан, ҡанһыҙ Үлмәҫҡол байҙың

---

[219] Ғилемдар Рамазанов. Мәжит Ғафури ижады. — Өфө, 1965, 114—115-се биттәр.

улын һайлаһа, В.Солтановтың төп геройы — мулла малайы. Ләкин улар социаль сығыштары менән генә мулла һәм бай балалары, ә донъяға ҡараштары яғынан аталары менән араны өҙгәндәр. Улар, феодаль-патриархаль тәртиптәр менән киҫкен көрәштә буржуаз мөнәсәбәттәр өҫтөнлөк ала барған бер осорҙа, үҙҙәренә тормоштан ҡулайлы урын дауларға бил быуып сыҡҡан яңы типтар. Бына ошо яңы типтарҙың, йәғни милли буржуазияның, формалашыу процесын аҙмы-күпме күрһәтеүҙәре яғынан З.Өммәти менән В.Солтановтың әҫәрҙәрендә реалистик тенденциялар арта төшә. Әммә әҫәрҙәрҙәге ваҡиғалар һәм конфликт авторҙарҙың уҡыусыға әйтәһе төп фекерҙәренә иллюстрация булып тороуҙары яғынан улар мәғрифәтселек позицияһында тороп ҡалалар.

Зыя Өммәти үҙенең повесында, атаһы тарафынан ҡыйырһытылып, ауылын, ғаиләһен ташлап сығып киткән Биктаһирҙың, төрлө ҡаршылыҡтар аша үтеп булһа ла, Мәскәүҙә бухгалтерҙар курсын тамамлап, үҙ заманына күрә уҡымышлы кеше булып өлгөрөүен һүрәтләй; ауырлыҡ менән булһа ла уҡырға кәрәк, уҡыған кеше хур булмай тигән фекерҙе үткәрә. Кәбир Туйкин иһә «Яман юлдаш» тигән хикәйәһендә, әҫәрҙең төп геройы ауыл ярлыһы Ғалимдың юлдан яҙған иптәштәре арҡаһында бинахаҡтан төрмәгә эләгеүе хаҡында һөйләп, «ямандан йәйә буйы булһа ла йыраҡ тор» тигән халыҡ мәҡәлен раҫлай. Вәсим Солтанов «Аҡса тик ятмаһын» хикәйәһендә, тегенсе һөнәрен ташлап, сауҙаға тотонорға ниәтләнгән Һаҙыйҙың һәм уға ҡушылып мөғәллимлеген ташларға уйлаған Ҡасимдың сауҙа эшендә бик уңайһыҙ хәлдә тороп ҡалыуҙарын һүрәтләп, уларҙан әсе көлә. Йәғни В.Солтанов та, «һөнәрле һөнәре менән» тигән халыҡ мәҡәлен раҫлап, үҙ һөнәрҙәрен ташларға ниәтләнеүсе геройҙарын ҡаты шелтәләй. Күренеп тороуынса, был әҫәрҙәрҙәге әйтеләһе төп фекер дидактик йөкмәткеле халыҡ мәҡәлдәренә нигеҙләнеп, тормош материалдары уларға иллюстрация хеҙмәтен үтәгән. Әммә шул заманда йәмғиәт һәм халыҡ тормошонда булған етешһеҙлектәрҙе һәм прогрессив күренештәрҙе күпмелер реалистик картиналарҙа кәүҙәләндереүе яғынан был әҫәрҙәр ҙә башҡорт прозаһының мәғрифәтселек реализмынан тәнҡитле реализмға табан үҫеш тенденцияһын төҫмаллата.

Был йәһәттән Әхкәметдин Иҫәнбирҙинден ижады ла характерлы. Уның беҙгә «Үкенесле һөйөшөү, йәки Мансур менән Ғәлиә» (1911), «Тәссаф, йәки михнәтле кисәләр» (1913) тигән әҫәрҙәре билдәле. Тәүге повеста мәғрифәтселек идеялары өҫтөнлөк итә. Ул, мәғрифәтселәр кеүек, үҙ геройҙарын мәҙрәсә һәм ғаилә мөхите менән кәртәләп ҡуя ла ҡатын-ҡыҙ азатлығы, ирекле никах мәсьәләләрен шул даирәлә хәл итергә ынтыла. Иҫке мәҙрәсә тәртиптәрен Закир Һаҙый әҫәрҙәрендәгесә фаш итеп, тормоштан алыҫ булған уҡытыу-тәрбиә системаһына ҡырҡа ҡаршы сыға. Ә инде «Тәссаф, йәки михнәтле кисәләр» «романында» (әҫәрҙең жанрын яҙыусы үҙе шулай билдәләгән) мәғрифәтселек ҡараштарында тороусы автор позицияһы менән тормош материалы араһында билдәле бер ҡаршылыҡ барлығы күҙгә ташлана. Әҫәрҙең төп героиняһы Кәфиә үҙенең бай, мәғрифәтле, әхлаҡ яғынан идеаль юғарылыҡта тип әйтерлек торған ире Фатих мырҙаны, йәмһеҙ булғаны өсөн генә яратмай, ташлап сығып китә. Автор Кафиәнең был аҙымын «тереклек юлындағы һуғыш» тип атай. Әммә синфи йәмғиәт шарттарында был иренән киткән ҡатын үҙ яҙмышы өсөн актив көрәшкә булдыҡһыҙ булып сыға. Шуға күрә автор Кәфиәнең артабанғы яҙмышын үҙе лә күҙ алдына килтерә алмай һәм уны туғандарының тупһаһында төрлө ғибрәтле тамашаларға, ир менән ҡатындың ыҙғыш-талаштарын күрергә дусар итеп иренең яҡшы кеше икәнлеген иҫбатларға тырыша һәм героиняны ғазаплы кисерештәрҙән һуң кире ҡайтыу дәрәжәһенә килтереп еткерә. Йәғни автор героиняға үҙ ихтыярын таға һәм уны «тереклек юлындағы һуғыш» майҙанында сигенергә мәжбүр итә, тимәк, реализмдан ситләшә. Был факт башҡорт прозаһының мәғрифәтселек реализмынан тәнҡитле реализмға табан үҫеше шыма ғына бармауы хаҡында һөйләп тора.

Ҡара реакцияның аяуһыҙ һөжүме арҡаһында революция осоронда күтәрелгән хөрлөк, тигеҙлек лозунгыларының юҡҡа сығыуы, йәғни идеалдарҙың селпәрәмә килеүе, мәғрифәтселек һәм дөйөм кешелек гуманизмы позицияһында торған башҡорт яҙыусыларын, ижтимағи тормоштан ситләштереп, күңел төшөнкөлөгөнә килтерҙе. Ошо билдәһеҙлек һәм төшөнкөлөк атмосфераһында

яңы идеал табырға ынтылыштар әҙәбиәттә романтизмды ҡабартып ебәрҙе.

Башҡорт прозаһында романтизм яҙыусыларҙың тәбиғәт күрке, саф мөхәббәт менән йыуаныуҙарында, ысынбарлыҡта булмаған гармонияны һәм билдәһеҙ идеал сатҡыларын үткән тормоштан, халыҡ ижады әҫәрҙәренән һәм экзотиканан эҙләнеүҙәрендә асыҡ күренде.

Билдәле булыуынса, тәбиғәт менән мөхәббәт темаһы бер романтизм әҙәбиәте менән генә сикләнеп ҡалмай. Р.Фәхретдинов менән З.Һаҙый әҫәрҙәрендә лә мөхәббәт темаһының шаҡтай киң урын алыуын күреп уҙғайныҡ. Ләкин улар мөхәббәт темаһын, рационалистик ҡараштарҙан сығып, тиң хоҡуҡлы никах, бәхетле ғаилә ҡороу һәм ҡатын-ҡыҙ азатлығы мәсьәләләренә бәйләп сағылдырҙылар.

Мөхәббәт темаһы шулай уҡ М.Ғафуриҙың реакция йылдарында ижад иткән «Онотолған енәйәт, йәки үткәнде иҫкә төшөрөү» (1909), «Хәмиттең хәяты, йәки Ләйлә вә хәятым» (1910), «Зәйнәп сабыр иткәйне, ниһаят сабыр итә алманы» (1911) тигән әҫәрҙәрендә лә шаҡтай ҙур урын алып тора. Был әҫәрҙәрҙә яҙыусының мәғрифәтселек ҡараштары сағылып ҡалһа ла, уларҙа мөхәббәт темаһы реалистик юҫыҡта кәүҙәләнеш алды. Сөнки «Хәмиттең хәяты...» әҫәрендә айыҡ аҡыл, яҙыусының тормошҡа, милли мәсьәләләргә, дингә, тәбиғәткә ҡарашын билдәләүсе философик дөйөмләштереүҙәр өҫтөнлөк итеп, мөхәббәт темаһы социаль ысынбарлыҡ менән тығыҙ бәйләнештә асылһа, «Онотолған енәйәт...», «Зәйнәп сабыр иткәйне...» хикәйәләрендә автор реалистик позицияла тороп, саф мөхәббәттең буржуаз әхлаҡ нормалары менән һыйышып йәшәй алмауын, аяҡ аҫтына һалып тапалыуын һүрәтләп, синфи йәмғиәт шарттарында ҡатын-ҡыҙға ҡарата хөкөм һөргән буржуаз мещанлыҡ һәм патриархаль ҡараштарҙы фаш итте.

1912 йылда яҙылған «Мөхәббәт хаттарында» иһә тойғоларға байтаҡ урын бирелһә лә, Ғафури Саниха менән Нажиҙың мөхәббәт хаттарын уҡыусыға бер эталон кеүегерәк итеп тәҡдим итте. Геройҙарының ҡара-ҡаршы яҙышҡан хаттары аша өйләнергә теләгән кешендең һылыу булыуы ғына етмәй, ул уҡыған да, тәрбиәле лә, ата-әсәһе лә һәйбәт кешеләр булырға тейеш

тигән рационалистик ҡараш үткәреп, халыҡтың «мөхәббәттең күҙе һуҡыр» тигән мәҡәленә «һылыулыҡ менән һыу буйлап булмай», аҡылы ла, тәүфиғы ла булһын тигән мәҡәлен ҡаршы ҡуйҙы. Йәғни автор был әҫәрендә саф мөхәббәтте яҡлау менән бергә, иҫәп-хисапты ла күҙ уңынан ыскындырмай ине. Ә инде «Тәьҫорат» (1913) һәм шул уҡ осорҙа яҙылған «Серле бер мөхәббәттең тарихы» әҫәрҙәрендә беҙ социаль ысынбарлыҡтан азат булған идеаль мөхәббәт менән осрашабыҙ.

Ғафуриҙың был әҫәрҙәре, лирикаһында ла мөхәббәтте «был донъяның тәңреһе» итеп идеаллаштырған бер осорҙа ижад ителгән. «Тәьҫорат» нәҫерендә мөхәббәт тойғолары йәйге айлы төндөң илаһи нурына солғанған хозур тәбиғәт менән тулы гармонияла кәүҙәләндерелһә, «Серле бер мөхәббәттең тарихында» мөхәббәт, ғашиҡтарҙы уратып алған социаль мөхиткә, заманға һәм уның ҡанундарына ҡаршы ҡуйылып, бөтөн нәмәнән өҫтөн һәм юғары, буйһонмаусы ҡөҙрәтле көс итеп, ҡабартып бирелгән. Мөхәббәттең, шул рәүешле, социаль мөхиткә ҡаршы ҡуйылып, тәбиғәт гармонияһы менән ауаздаш итеп, интим хистәрҙең күпертеп биреләүендә, йәғни тойғоларҙың абсолют азатлыҡҡа ынтылыуында романтизмды билдәләүсе һыҙаттар ярылып ята. Бындай һыҙаттар шулай уҡ Фәйзи Вәлиевтың мөхәббәт темаһына яҙылған «Кәмәлә» тигән хикәйәһендә лә өҫтөнлөк итә.

Башҡорт әҙәбиәтендә романтизмдың үҫеше халыҡтың милли ынтылыштары, Россиялағы беренсе революция тулҡындары менән көсәйеп киткән милли азатлыҡ хәрәкәте менән дә тығыҙ бәйле ине. Мәғрифәтсе яҙыусылар аң-белем таратыу, халыҡтың культура кимәлен, һөнәрен күтәреү юлы менән милли алға китешкә ышанып ҡарайҙар ине. Әммә ҡара реакция йылдарында был ышаныстар ҡаҡшай төштө. Өҫтәүенә, Столыпиндың аграр политикаһы һөҙөмтәһендә, башҡорт ерҙәрен талау көсәйҙе. Тарихи үҫеш законсалыҡтарын аңламаған, халыҡтың киләсәгенә ышанысһыҙ ҡараған ҡайһы бер яҙыусыларҙы был күренештәр үткән тормошто идеаллаштырыуға этәрҙе.

Реакция һәм яңы революцион күтәрелеш йылдарында М.Ғафури, Ф.Туйкин, Ф.Вәлиев һәм башҡалар йыш

ҡына халыҡ ижады традицияларына мөрәжәғәт иттеләр, фольклор әҫәрҙәрен яҙып алып баҫтырып та сығарҙылар. Әҙәбиәттә романтизм методы көсәйә барған бер дәүерҙә, күрәһең, был яҙыусыларҙы иң элек халыҡ ижады әҫәрҙәрендәге гармония, үҙ идеалдарына яҡын булған ҡаһарманлыҡ һәм патриотизм рухы, тарихи оптимизм сатҡылары йәлеп иткән.

Билдәле булыуынса, XX быуат башында башҡорт яҙыусыларының байтағы үҙҙәренең хеҙмәт юлдарын Урта Азия, Себерҙә йәки Ҡаҙағстанда мөғәллим булып башлап ебәргәндәр. Бында улар урындағы халыҡтарҙың культураһы, ғөрөф-ғәҙәттәре, халыҡ ижады менән танышҡандар. Башҡорт әҙәбиәтендә тәү башлап ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, үзбәк һәм уйғыр халыҡтарының тормошона арналған художестволы әҫәрҙәрҙең һәм юлъяҙмаларҙың килеп тыуыуына был күренеш төп сәбәптәрҙең береһе булып торған. Шул уҡ ваҡытта, Ә.Таңғатаров, Ғ.Рафиҡи һ.б. ҡайһы бер әҫәрҙәрендә экзотика, сит халыҡтарҙың башҡорттар өсөн ят күренгән ғөрөф-ғәҙәттәре менән артыҡ мауығыу әҙәбиәттә романтик тенденцияның көсәйеүенә лә бәйле ине.

Кешенең рухи донъяһына, хис-тойғоларына ҙур иғтибар бирелеү сәбәпле, романтик йүнәлеш дөйөм башҡорт әҙәбиәтендә лирик башланғыстың көсәйеүенә килтерҙе. Прозала был йәһәттән Әхнәф Таңғатаровтың ижады айырылып торҙо. Нәҫер оҫтаһы Ә.Таңғатаровтың күпселек әҫәрҙәрен проза менән яҙылған лирик поэзия тип атарға мөмкин. Уның «Анама» (1910), «Тауҙарға ҡарағанда» (1912), «Ни ул?» (1913), «Өмөт алдында» (1914) һәм башҡа нәҫерҙәрендә эпик һүрәтләү түгел, ә лирик геройҙың болоҡһоу кисерештәрен, шул заман кешеһенең рухи донъяһын асып биреүгә ынтылыш өҫтөнлөк итә. Йәмғиәт менән шәхес араһында ҡаршылыҡтарҙың көсәйеүе, шәхестең йәмғиәттән ситләшә биреүе уның романтик әҫәрҙәрендә шаҡтай ҙур оҫталыҡ менән асылған. Яҙыусының лирик геройы бөтөнләй тип әйтерлек үҙ заманы менән йәшәмәй, ә берсә өмөтһеҙләнеп, берсә ашҡынып, кешелек донъяһында буласаҡ ниндәйҙер ҙур үҙгәреште көтә, түҙемһеҙлек менән шунда талпына.

Дөйөм алғанда, романтик йүнәлеш XX быуат башы башҡорт прозаһында һиҙелерлек эҙ ҡалдырҙы. Роман-

тизмдың үҫеш алыуы дөйөм әҙәбиәттә кешенең рухи донъяһына иғтибарҙы бермә-бер арттырҙы, прозала лиризмдың көсәйеүенә, һүрәтләү сараларының байыуына булышлыҡ итте.

Реализмдың тәнҡитле йүнәлешенә килгәндә, уның үҙаллылыҡ ала барыуын Ғафуриҙың «Ярлылар йәки өйҙәш ҡатын» әҫәре миҫалында күреп уҙғайныҡ. Ярлылар һәм кәмһетелгәндәргә теләктәшлек белдереп, буржуаз йәмғиәт тыуҙырған мещанлыҡты, һөрһөгән әхлаҡ нормаларын фаш итеүҙе ул артабан «Онотолған енәйәт...», «Зәйнәп сабыр иткәйне...» хикәйәләрендә дауам итте. «Иҫәпһеҙ байлыҡ» (1910) хикәйәһендә милли буржуазия вәкиле Хәбибулла Ихсанов образында капиталистик йәмғиәт тыуҙырған түбән йәнле, ҡомһоҙ типтарҙың береһен кәүҙәләндерҙе. Уның, ниндәй юлдар менән мал туплап, сауҙаға тотоноуын, алдашып һәм мутлашып байыуын, аҙаҡ килеп, эштәре хөртәйә башлағас, мөлкәтен ҡулдан ысҡындырмаҫ өсөн, ҡатыны исеменә күсертеп, банкротлыҡ иғлан итеүен эҙмә-эҙлекле һүрәтләп, байлыҡ өсөн теләһә ниндәй түбәнлектән дә тартынмаған буржуаз типтың әхлаҡ йөҙөн асып бирә.

Ас-яланғастар тормошон реалистик картиналарҙа һүрәтләүе менән В.Солтановтың 1911 йылда яҙылған «Астарға байрам» тигән хикәйәһе иғтибарға лайыҡлы. Был әҫәрҙә аслыҡ йылдың һалҡын ҡышында, байрам көндө һоранып булһа ла, тамаҡ туйҙырыу өмөтө менән ауылдан ҡалаға килгән 7-8 йәшлек малай менән әсәһенең — береһе урамда туңып, икенсеһе бер байҙың келәтендә астан үлеүҙәре йөрәк өшөткөс итеп хикәйәләнгән. Ф.И.Достоевский әҫәренең мотивтарын файҙаланып ижад иткән был хикәйәһендә Вәсим Солтанов прозалағы бер-береһенә хеҙмәте йәки бурысы буйынса бәйләнеше булмаған байҙар менән ярлыларҙы ҡаршы ҡуйыу ғәҙәтенән арынып, социаль ҡаршылыҡтарҙы конкретлаштыра төшкән.

Империалистик һуғыш йылдарында башҡорт прозаһында реалистик тенденция нығына барғанлығы күренә. Был осор прозаһында үҙәк темаларҙың береһе — империалистик һуғыш темаһы. Ғ.Рафиҡи, Ф.Вәлиев хикәйәләрендә һәм М.Ғафуриҙың «Һалдат ҡатыны Хәмиҙә» повесында империалистик һуғыштың хеҙмәтсән халыҡҡа аянысла юғалтыуҙарҙан, ҡайғы-хәсрәттән һәм

бөлгөнлөктән башҡа бер ни ҙә бирмәүе, уның хеҙмәтсән халыҡ массаларының мәнфәғәтенә ҡаршы булыуы реалистик кәүҙәләнеш алды.

Әҙәбиәттә реакция йылдарында һәм унан һуң үҙ аллы йүнәлеш булараҡ кәүҙәләнә барған романтизм реалистик метод менән тығыҙ мөнәсәбәткә инеп, прозала шәхестең рухи донъяһына иғтибарҙы йүнәлтеүгә, уны эмоциональ яҡтан байытыуға булышлыҡ итте.

XX быуат башында проза төрөнөң бәләкәй жанрҙарынан нәҫер, хикәйә һәм шулай уҡ повестың жанр үҙенсәлектәре асыҡлана барҙы. Шул уҡ ваҡытта әле жанр йөҙө асыҡланып өлгөрмәгән әҫәрҙәр ҙә аҙ булманы. Прозаның төп жанры — роман тыуып өлгөрмәне.

Йыйып әйткәндә, Россиялағы беренсе революция йылдары алдынан мәғрифәтселек идеяларын күтәреп майҙанға сыҡҡан башҡорт прозаһы ҡыҫҡа, ләкин тарихи ваҡиғаларға бай осорҙа, рус һәм татар әҙәбиәтенең ыңғай йоғонтоһон кисереп, реалистик проза булып формалашыу осорон кисерҙе.

## АҢЛАТМАЛАР

### Һаҙи Сәғҙи

«Бәхетһеҙҙәр» повесы 1911 йылда Өфөлә «Шәреҡ» нәшриәтендә баҫылып сыҡҡан.

### Кәбир Туйкин

«Яман юлдаш». Әҫәр 1912 йылда Ҡазанда китап итеп сығарылған.

### Фәйзи Вәлиев

«Урал буйҙары». Беренсе тапҡыр «Тормош» газетаһының 1914 йылдың 16 июль һанында баҫылған.

«Бер тин». 1914 йылдың 3 сентябрендә «Тормош» газетаһында баҫып сығарылған.

«Ирхан учитель», «Кәмәлә» әҫәрҙәре 1918 йылда Ҡазанда баҫылып сыҡҡан «Фәйзи хикәйәләре» тигән йыйынтыҡта.

## Әхнәф Таңғатаров

«Әсәйемә». Авторҙың матбуғатта күренгән был тәүге әҫәре «Шура» журналының 1910 йылғы 15-се һанында.

«Хоҙаяр хан баҡсаһындағы хыялым». «Шура» журналының 1911 йылғы 22-се һанында донъя күргән. Автор уны Кокандта уҡытыусы булып эшләгән ваҡытында яҙған.

«Тауҙарға ҡарағанда». Әҫәр Кокандта яҙылған һәм «Шура» журналында (1912, №7) баҫылған. 1934 йылда ул Ғ.Амантай төҙөгән 6-сы кластар өсөн «Башҡорт әҙәбиәте» тигән дәреслек-хрестоматияла урын алған.

«Ташландыҡ ҡәбер». Был әҫәр «Шура» журналының 1912 йылғы 21-се һанында баҫылып сыҡҡан.

«Көс юҡ». 1914 йылдың 11 сентябрендә «Тормош» газетаһында баҫылып сыҡҡан.

«Әҙәбиәт киҫәктәре». Нәҫер «Тормош» газетаһынан (1914 йыл, 21 ноябрь һаны).

«Өмөт алдында». Беренсе тапҡыр «Тормош» газетаһының 1914 йылғы 5 декабрь һанында баҫылған. Ул 1934 йылда Ғ.Амантай төҙөгән дәреслек-хрестоматияға («Башҡорт әҙәбиәте», 6-сы класс өсөн дәреслек) индерелгән.

«Мине дуҫ күргәндәргә». 1915 йылдың 1 март һанында «Тормош» газетаһында тәүләп баҫылған.

«Яҙғы һаташыу». «Тормош» газетаһында 1915 йылдың 22 апрель һанында баҫылған.

«Онотолдом». Нәҫер тәү тапҡыр «Тормош» газетаһында (1916 йыл, 24 декабрь) баҫылып сыҡҡан.

«Мине юғалтҡан иптәштәремә». Әҫәр «Тормош» газетаһында (1917 йыл, 24 август) баҫылған.

## Бәхтиәр Бәхтигәрәй улы

«Ер һатыу». Драма айырым китап итеп «Файҙа» нәшриәте тарафынан Ырымбурҙа 1915 йылда баҫтырылған.

## БАШҠОРТ МӘҒРИФӘТСЕЛЕК РЕАЛИЗМЫ ПРОЗАҺЫНЫҢ СТИЛЬ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

Йөкмәткеле форманың бөтә элементтарының берҙәмлегенән хасил булған стиль художестволы оҫталыҡ кимәлен билдәләүсе мөһим төшөнсәләрҙең береһе булып тора. Сөнки яҙыусы телдең һығылмалылығына ла, образлылығына ла, әҫәрҙең дөйөм ритмикаһына ла, фекер аныҡлығына ла стиль оҫталығы аша өлгәшә. Стиль тәү ҡарамаҡҡа әҫәрҙең теленә ҡайтып ҡалған кеүек күренһә лә, асылда, ул йөкмәткеле форманың бөтә элементтарында сағылыш ала, уларҙың берҙәмлеге менән идара итә. «Стиль — беҙҙең аңлауыбыҙса, — ти Я.Е.Эльсберг, — художниктың ижад индивидуаллеген һәм әҫәрҙең йөкмәткеле формаһының бөтә элементтарын (образдар системаһының үҙ-ара бәйләнешен, художестволы телмәрҙе, жанрҙы, композицияны, фабуланы, ритмды, интонацияны һ.б.) үҙ эсенә алыусы художестволы фекер формаһы ул»[220].

Әҫәрҙең йөкмәткеһе менән формаһы араһындағы диалектик бәйләнештең бер мөһим аспекты булған стилде шулай уҡ ижад методынан айырып ҡарап булмай. «Стилде анализламайынса художество методын тулыһынса күҙ алдына килтереп булмай, — ти Л.И.Тимофеев. — Сөнки метод төшөнсәһе үҙе стиль төшөнсәһе менән, уның индивидуаль, конкрет сағылышы менән нығ бәйләнгән... Методта художниктарҙы берләштереүсе дөйөм яҡтар кәүҙәләнһә, стилдә уларҙы бер-береһенән айырып тороусы индивидуаль һыҙаттар — шәх-

[220] Теория литературных стилей. Типология стилевого развития нового времени. М.: Наука, 1976, с. 8.

си тәжрибә, талант, яҙыу манераһы һ. б. сағылыш ала»[221].

Әҙәбиәт ғилемендә, Пушкин, Толстой, Горький, Шолохов кеүек ҙур таланттарҙың һәр береһе үҙе бер этап булып торған индивидуаль стилдәренән тыш, бер үк методҡа нигеҙләнгән стиль ағымдарын айырып ҡарау бар. Стиль ағымы йәки стиль тенденцияһы бер нисә яҙыусының ижадына хас булған күренештәрҙе үҙ эсенә ала.

Стилде өйрәнеү әҙәбиәт ғилеменең иң ауыр һәм ҡатмарлы өлкәләренең береһе. Берҙән, уның теоретик нигеҙҙәре ентекле эшләнмәгән булһа, икенсенән, конкрет тикшеренеү методтары тотороҡло түгел.

Башҡорт әҙәбиәте ғилеменә килгәндә, был өлкәлә махсус хеҙмәттәрҙе атап күрһәтеүе ҡыйын. Күренекле яҙыусылар ижадын өйрәнеүгә арналған монографик хеҙмәттәрҙә индивидуаль стиль мәсьәләһе ҡуйылһа ла, яҙыусының ни рәүешле яҙыуына ҡарағанда ни нәмә тураһында яҙыуы үҙәктәрәк тора. Айырым жанрҙарҙың үҫешен өйрәнеүгә арналған монографияларҙа стиль мәсьәләләре юлайҡан ғына ҡағылып үтелә.

Һуңғы йылдарҙа башҡорт әҙәбиәте тарихын өйрәнеүгә иғтибар көсәйеү менән әҙәбиәттең текстологик базаһы нығый төштө. Милли әҙәбиәттең ҙур бер сығанағы булған халыҡ ижады әҫәрҙәренең баҫылып сығыуы, революцияға тиклемге әҙәби мираҫты йыйыу һәм баҫтырып сығарыу буйынса башланған эштәр һис һүҙһеҙ башҡорт әҙәбиәтенең стилдәренә тарихи ҡараш ташлау һәм теге йәки был үҫеш этабындағы стиль ағымдарын билдәләү өсөн дә, ижад индивидуаллектәре ярылып ятҡан һүҙ оҫталарының стилен өйрәнеүгә лә мөмкинлектәр аса. Сөнки ижад индивидуаллеге айырылып торған һәр талантлы яҙыусының стиле, беренсе сиратта, милли әҙәби культура традицияларына нигеҙләнеп күтәрелә.

Шуның өсөн дә беҙ хәҙерге башҡорт әҙәбиәтенең стиль үҙенсәлектәрен, ундағы төрлө стиль ағымдарын өйрәнеүгә ныҡлап тотонор алдынан уның тамырҙарына, революцияға тиклемге әҙәби мираҫҡа мөрәжәғәт

---

[221] Тимофеев Л.И. Советская литература. Метод, стиль, поэтика. М.: Сов. писатель, 1964, с. 64.

итергә, ундағы стиль тенденцияларына, ижад индивидуаллеге менән әҙәбиәттә ҙур эҙ ҡалдырған һүҙ оҫталарының стиль үҙенсәлектәренә етди байҡау яһарға тейешбеҙ.

Революцияға тиклемге башҡорт әҙәбиәте иһә, үҙенең шаҡтай оҙайлы үҫеш юлында Көнсығыш классик һәм туғандаш төрки халыҡтары әҙәбиәтенең, халыҡ ижадының йоғонтоһонда үҫеш алып, XIX быуатта һәм XX быуат башында рус әҙәбиәтенең һиҙелерлек тәьҫирен кисерә. Халыҡ ижады менән рус әҙәбиәтенең йоғонтоһо яҙма әҙәбиәттең үҫешенә ыңғай яғы менән айырылып торһа, Көнсығыш әҙәбиәтенең йоғонтоһо шаҡтай ҡатмарлы мәсьәлә. Бында уның ыңғай яҡтарын кире яҡтарынан айырып ҡарау методологик характерҙағы мәсьәлә булараҡ килеп баҫа. Башҡорт әҙәбиәтенә Көнсығыш әҙәбиәтенең гуманистик традициялары ни дәрәжәлә йоғонто яһаған да, дини-идеалистик рухтағы өгөт-нәсихәтселек, суфыйсылыҡ әҙәбиәте ни рәүешле йоғонто яһағанлығын айырып күрһәтергә кәрәк.

XIX быуаттың икенсе яртыһында суфыйсылыҡ өҫтөнлөк итеүсе әҙәби йүнәлеш булыуҙан туҡтай. Был осорҙа Башҡортостанда капиталистик мөнәсәбәттәрҙең үҫеше менән бергә әҙәбиәттә мәғрифәтселек башланғыстары көсәйә. Мәғрифәтселек әҙәбиәте, милли әҙәбиәттә моронлап килгән реалистик башланғыстарға таянып, рус әҙәбиәтенә йүнәлеште көсәйтте.

Суфыйсылыҡтан реализмға табан һынылыш Аҡмулла поэзияһы аша үтә. Шағир әле дини идеологияның йоғонтоһонан арынып етмәһә лә, поэзияһында мәғрифәтселек идеяларын ҡайнар яҡлаусы булып сығыш яһай. Был һынылыш уның ижадының йөкмәткеһендә генә түгел, стилендә лә көслө сағылыш ала. Рухи торғонлоҡҡа — аң-белемде, иҫкелеккә — яңылыҡты, яуызлыҡҡа — яҡшылыҡты, наҙанлыҡҡа һәм тупаҫлыҡҡа — мәғрифәтлелекте ҡаршы ҡуйыу уның стилендә поэтик антитеза алымының быға са булмағанса көсәйеүенә һәм камиллашыуына килтерә. Башҡорт халҡының ҡобайыры һәм афористик ижады традицияларын, башҡорт, ҡаҙаҡ халыҡтарында киң таралған һәм үҙ заманы өсөн зирәклекте, поэтик оҫталыҡты һынау аренаһы булып торған әйтеш алымдарын киң файҙаланып, Аҡмулла поэзияны тағы юғарыраҡ күтәрә. Шиғри фекерләүҙәге тапҡырлыҡ, поэтик антитеза, ритмик төҙөклөк Аҡмулла поэ-

зияһының үҙенә генә хас стилен билдәләшә. Аҡмулла Көнсығыш поэтик традициялары менән халыҡтың афористик ижады традицияларын синтезлау аша үҙ индивидуаль стилен формалаштыра. Башҡорт әҙәбиәтенең стилдәрен өйрәнгәндә, Аҡмулла стиле һәм ул тыуҙырған стиль ағымы үҙе бер этап булараҡ ҡаралырға ла хаҡлы.

Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевҡа килгәндә, уның ижады күп яҡлы булыуы менән айырылып тора. Уның поэзияһындағы башҡорт халҡының уҙғаны, шул замандағы ауыр хәле, киләсәге тураһындағы уйҙары, публицистик мәҡәләләре, башҡорт халҡының тарихына һәм социаль экономик хәленә арналған ғилми хеҙмәттәренә ауаздаш. Шуға ла Өмөтбаев поэзияһына бошонҡолоҡ һәм әсенеү мотивтары хас. Ул башҡорт поэзияһында Көнсығыш һәм Көнбайыш поэзияһы традицияларын ҡауыштырырға ынтылыш яһаусы тәүге шағир. Ләкин үҙ поэтик индивидуаллеге тоноғораҡ булыу сәбәпле, ул быны тейешле юғарылыҡҡа күтәрә алманы. Уның поэзияһындағы стиль берҙәмлегенең булмауы, күҙгә бәрелеп торған сыбарлыҡ ошоноң менән бәйле.

Шул уҡ ваҡытта, стилдәре менән бер-береһенән айырылып тороуҙарына ҡарамаҫтан, Аҡмулла менән Өмөтбаев ижадтары идея-эстетик яҡтан үҙ-ара яҡын торалар. Был уларҙың мәғрифәтселек ҡараштарының уртаҡлығынан килә. Халыҡты томаналыҡҡа һәм ярлылыҡҡа дусар иткән социаль мөхиттең асылына үтеп инә алмаһалар ҙа, уларҙың эскерһеҙ ынтылыштары дөйөм халыҡ яҙмышы менән тығыҙ бәйле булды, ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы асыу-нәфрәттәре киҫкен тенденциоз характер алды һәм дөйөм ижадтарының ысынбарлыҡ менән килешмәүсән, айбарлы пафосын билдәләне. Ошоноң менән улар башҡорт әҙәбиәтендә мәғрифәтселек реализмының нығыныуына тос өлөш индерҙеләр, әҙәбиәткә үҙҙәренән һуңғараҡ килгән М.Ғафури, С.Яҡшығолов, Ш.Әминев һәм башҡаларҙың ижадына етди йоғонто яһанылар. М.Өмөтбаев йоғонтоһо, нигеҙҙә, идея-тематик характерҙа булып, С.Яҡшығолов менән Ш.Әминевтарҙың поэзияһында көсәйгән һәм тәрәнәйгән антиколониаль мотивтарҙа сағылыш алһа, М.Ғафури менән Ш.Әминев туранан-тура Аҡмулла традицияһынан үҫеп сыҡтылар. Айырата М.Ғафуриҙың тәүге осорҙағы поэзияһын Аҡмулла поэтик мәктәбенән айы-

рып ҡарап булмай. Аҡмулла стиле Ғафури поэзияһының ритм-интонацияһында ла, антитезаға һәм афоризмға ҡоролған поэтикаһында ла ярылып ята.

Шул уҡ ваҡытта 1905 йылғы революция тәьҫире менән мәғрифәтселек поэзияһының стилендә яңы тенденциялар күренә. Халыҡҡа туранан-тура мөрәжәғәт итеүсе ҡобайыр традицияларынан үҫеп сыҡҡан поэтик хитаптарҙың киң таралыуы, халыҡты үҙ хәле тураһында уйланырға, эшкә тотонорға өндәү һәм саҡырыу алымының көсәйеүе, публицистик пафослылыҡ 1905—1907 йылдарҙағы һәм унан һуңғы осорҙағы мәғрифәтселек поэзияһының төп стиль үҙенсәлеген билдәләй.

Шуныһы характерлы, мәғрифәтселек әҙәбиәтендә маҡсат һәм эстетик идеал берлеге ижад методының берлегенә килтергән кеүек, стилдә лә индивидуаллеккә ҡарағанда дөйөмлөк, уртаҡ яҡтар нығыраҡ күҙгә ташлана. Был тенденция поэзияла ғына түгел, прозала ла ярайһы уҡ көслө.

Эпистоляр, публицистик әҫәрҙәрҙән, хикмәтле хикәйәттәр, шәжәрәләр һәм фольклор сюжеттарынан үҫеп сыҡҡан ҡайһы бер сәсмә әҫәрҙәрҙән айырмалы рәүештә, башҡорт әҙәбиәтендә хәҙерге мәғәнәһендәге художестволы прозаның тыуыуы мәғрифәтселек осорона, конкрет алғанда, уҙған быуаттың һуңғы — XX быуаттың тәүге йылдарына тура килә. Тап бына ошо осорҙа Р.Фәхретдинов, З.Һаҙый, М.Ғафуриҙар халыҡ тормошон художестволы кәүҙәләндереүгә, шул заман кешеләренең образдарын тыуҙырыуға арналған хикәйә һәм повестарын ижад итәләр. Улар әҫәрҙәрендә М.Аҡмулла, М.Өмөтбаев ижадтарында һәм татар мәғрифәтселек прозаһында ҡуҙғатылған мәсьәләләрҙе артабан үҫтереп, халыҡтың аң-белемен, культураһын күтәреү, халыҡ араһында мәғрифәт орлоҡтарын сәсеү эшенә һиҙелерлек өлөш индерәләр. Был проза үҙенең йөкмәткеһе менән дә, жанр формалары менән дә яңы типта. Шуға ла, йәғни, яңы типтағы художестволы прозаның формалаша башлау осоро әҙәбиәттә мәғрифәтселек дәүеренә тап килеү сәбәпле, был осор прозаһында мәғрифәтселек прозаһына хас булған стиль үҙенсәлектәре менән бергә, ғөмүмән, художестволы прозаның формалаша башлау осорона хас булған стиль эҙләнеүҙәре аралашып барғанлығы күҙгә ташлана.

Билдәле булыуынса, башҡорт мәғрифәтселегe үҙенең йөкмәткеһе һәм йүнәлеше менән XVIII быуатта башланған һәм ҙур бер дәүерҙе алып торған Көнбайыш Европа һәм рус мәғрифәтселегенән ҡайтышыраҡ булды. Көнбайыш мәғрифәтселәре, Ф.Энгельс билдәләүенсә, феодаль йәмғиәттең идеологик, политик, юридик, дини нигеҙҙәрен — бөтәһен дә аҡыл хөкөмө алдына килтереп ҡуйһалар[222], башҡорт мәғрифәтселәре, нигеҙҙә, культура-ағартыу өлкәһенән ары китә алманылар. Башҡорт ерҙәренең таланыуына ҡаршы көрәштә антиколониаль мотивтар сағылыш алып, башҡорт мәғрифәтселәренең хәрәкәтенә бер ни тиклем политик төҫ бирһә лә, улар колониаль политиканың үҙен асыҡтан-асыҡ тәнҡит итергә батырсылыҡ итмәнеләр, бәлки төп ғәйепте ерҙәрен осһоҙ хаҡҡа һатыусы башҡорттарҙың үҙҙәренә ауҙарҙылар. Башҡорт мәғрифәтселәренең дингә мөнәсәбәте лә ҡайһы бер реформалар талап итеүҙән, динде үҙенең «асылына» ҡайтарырға, уны әхлаҡ төҙәтеү, аң-белем таратыу ҡоралына әйләндерергә тырышыуҙан уҙып китмәне. Шуға ла улар диндең социаль нигеҙен түгел, бәлки аң-белем таратыуға, донъяуи фәндәрҙе өйрәнеүгә, яңы типтағы мәҙрәсәләр асыуға ҡаршы тороусы ҡәҙимсе муллаларҙы һәм ишандарҙы тәнҡит иттеләр. Шул уҡ ваҡытта, башҡорт мәғрифәтселәре лә, Көнбайыш Европа мәғрифәтселәре һымаҡ уҡ, аҡыл һәм аң-белем көсөнә ҙур ышаныс бағланылар. Аң-белем таратыу, әхлаҡ камиллығына өлгәшеү, халыҡтың культура кимәлен күтәреү юлы менән ғәҙеллек һәм тигеҙлек принциптарына нигеҙләнгән бәхетле йәмғиәт төҙөргә мөмкин, тип ҡаранылар. Бына ошо ҡараштар башҡорт мәғрифәтселек әҙәбиәтенең идея-эстетик йөкмәткеһен билдәләне, уның методына һәм стиленә ҙур йоғонто яһаны.

Донъяға ҡараш, метод һәм стиль бер-береһенә тығыҙ бәйләнгән төшөнсәләр. Мәғрифәтселәрҙең донъяға ҡарашы кеше тураһында дини-идеалистик уйҙырмаларҙың емерелә башлауы, кеше яҙмыш ҡоло ғына булмай, үҙ яҙмышына үҙе хужа була ала, тигән материалистик ҡараштарҙың нығына барыуы менән билдәләнә.

---

[222] Маркс К. и Энгельс Ф. Соч. Изд. 2, т. 20, с. 16.

Ижад методы иһә әҫәрҙең конфликты характерында, образдар системаһында, эстетик идеал кәүҙәләнешендә конкрет сағылыш ала. Ә былар бөтәһе лә, беренсе сиратта, яҙыусының уй-хыялы һәм маҡсаты ни нәмәгә йүнәлдерелеүенә тығыҙ бәйләнгән. Был йәһәттән Закир Һаҙыйҙың «Бәхетле ҡыҙ» хикәйәһендәге Ғәббәс образына бәйләп әйткән түбәндәге һүҙҙәре, авторҙың үҙенең генә түгел, бәлки күпселек башҡорт мәғрифәтселәренең уртаҡ маҡсаттарын сағылдыра булһа кәрәк: «Ғәббәс иң әүәл насар холоҡтарҙың сәбәбен бөтөрөргә ижтиһад итеп, сәбәбе кәмегәс, насар холоҡтар ҙа кәмене. Насар холоҡтарҙың иң ҡеүәтле сәбәбе наҙанлыҡ илә ялҡаулыҡтыр. Сәбәбен бөтөрмәйенсә, насар холоҡтарҙы бөтөрөргә ижтиһад ҡылмаҡ — төбө тишелгән кәмәнең тишеген ҡапламайынса һыуын түгеп мәшәҡәтләнмәк кеүектер»[223]. Насар холоҡтарҙың һәм, мәғрифәтселәр уйлағанса, ошо холоҡ насарлығынан килеп сыҡҡан яуызлыҡтың һәм ярлылыҡтың сәбәптәрен ялҡаулыҡҡа һәм наҙанлыҡҡа ғына ҡайтарып ҡалдырыу мәғрифәтселәрҙе тәрбиә мәсьәләһен беренсе планға ҡуйырға этәргән. Ошонан сығып, мәғрифәтселек прозаһының сюжет һәм конфликт төйөндәре төйнәлгән, эстетик идеалдары тоҫмалланған. Конфликт иһә күпселек осраҡта әхлаҡ-этик характерҙа булып, бер яҡтан, алдынғы ҡарашлы муллалар, хәлфәләр, йомарт байҙар, икенсе яҡтан, наҙан муллалар, ишандар, һаран һәм яуыз байҙарҙың үҙ-ара бәрелешенә ҡайтып ҡала; йә булмаһа, кәмһетелгән ҡатын-ҡыҙ, үгәйһетелгән балалар менән изгелекһеҙ туған-тыумасалар, яуыз үгәй әсәләр, аҙғын ҡарсыҡтар тирәһендә төйөнләнә.

Мәғрифәтселәр үҙҙәренең персонаждарын конкрет социаль мөхит уратылышында, осор менән тығыҙ бәйләнештә һүрәтләйҙәр. Бының менән мәғрифәтсе реалистар кешенең шәхес булараҡ формалашыуында мөхиттең ҙур йоғонтоһо булғанлығын һыҙыҡ өҫтөнә алалар. Был уларҙың ижадында ысынбарлыҡҡа тәнҡитле ҡарашты көсәйтә, теге йәки был күренештең сәбәптәрен эҙләргә, асылына үтеп инергә этәрә. Шул уҡ ваҡытта улар «ижтимағи мөхит» төшөнсәһенә бик тар

---

[223] Һади З. Сайланма әсәрләр. Казан, 1957, 61-нче бит.

күҙлектән ҡарайҙар, уны дини-идеологик, әхлаҡ-этик һәм осорҙоң рухи тормошона, ғаилә һәм мәҙрәсәләге тәрбиә торошона ғына ҡайтарып ҡалдылар. Мәғрифәтселәр мөхит төшөнсәһенә йәмғиәттең социаль ҡоролошо менән билдәләнгән социаль-экономик мөнәсәбәттәрҙе индермәйҙәр. Өҫтәүенә мөхиткә социаль-экономик мөнәсәбәттәрҙең эҙемтәһе итеп түгел, бәлки кеше ихтыяры тарафынан булдырылған күренеш итеп ҡарайҙар[224]. Шул рәүешле, бында мәғрифәтселек реализмының төп ҡаҙанышы ла, уның тарихи сикләнгән булыуы ла асыҡ сағылыш ала.

Әҙәбиәткә, беренсе сиратта, тәрбиә сараһы итеп ҡарау мәғрифәтселек прозаһының берҙәм стиль ағымын барлыҡҡа килтергән. Был берҙәмлек хикәйәләү стилендә лә, әҫәрҙәрҙең композицияһында ла, төрлө әҙәби алымдарҙың күсәгилешлегендә лә күҙгә ташлана. Башҡорт мәғрифәтселек прозаһында Р.Фәхретдинов, З.Һаҙый, М.Ғафури әҫәрҙәрен берләштергән төп стиль үҙенсәлеге — уларҙың, үҙ әҫәрҙәрендәге тормош материалын уҡыусыға әйтәһе фекеренә, уҙғараһы идеяһына иллюстрация итеп алып, әҫәрҙәге хәл-ваҡиғаларға, геройҙарҙың эш-ҡылыҡтарына уғата актив мөнәсәбәттә тороп, һәр уңайы сыҡҡан һайын, объектив хикәйәләүҙе өҙөп, публицистик һәм лирик сигенеүҙәргә ҙур урын биреүҙәренә ҡайтып ҡала. Улар йә геройҙың эш-ҡылыҡтарына баһа биреү формаһын ала, йә тормош фәлсәфәһенә ҡорола.

Р.Фәхретдиновтың «Әсмә йәки ғәмәл вә яза» повесынан бер миҫал:

«Ғаббас мелла яшьлегендә гаять тә зирәк вә шат вә һәрнәрсәгә һәвәсле вә һәр шәй кулыннан килер ки мөстәгыйд (сәләтле) бер бала иде исә дә, зан иделдеге кадәр кәмаләт кәсеп идә алмадыгы хәлдә мәдрәсәдән чыгып имам улды...

Мәгълүмдер ки, дөнъяда бай балалары мал кадерен вә мөдәррис балалары гыйлем кадерен лазем мәртәбә белмәсләр. Ләкин боның өчен буйлә балалар гаепле улмай, бәлки бу шәйләрнең хөрмәтене белерлек рәвеш үзгә тәрбия идә алмадыклары вә буйлә тәрбияләргә

---

[224] Гуляев Н.А. Теория литературы. М.: Высш. школа, 1977, с. 213.

игътибар итмәдекләре өчен аталар гаепле улсалар кирәк»[225].

Риза Фәхретдинов шулай уҡ, уҡыусыға мәғлүмәт биреү маҡсатынан сығып, әҫәрҙәрендә башҡорт, татар һәм башҡа төрки халыҡтарҙың килеп сығышына, уларҙың тарихи уҙғанына, көнкүрешенә, ғөрөф-ғәҙәттәренә, экономикаһына ҡағылышлы ҡайтыштарҙы ла йыш ҡуллана. Был осраҡтарҙа автор ғалим булараҡ сығыш яһай. Ундай мәғлүмәттәр, сюжеттан тыш элементтар булһалар ҙа, әҫәрҙәренең ижтимағи яңғырашын көсәйтеп ебәрергә, тарихи фонды киңәйтергә булышлыҡ итәләр.

Закир Һаҙый әҫәрҙәренә килгәндә, лирик һәм публицистик сигенеүҙәр айырата уның тәүге әҫәрҙәрендә күп. Һуңғы — «Йыһанша хәҙрәт» повесында автор үҙ фекерен ыңғай геройҙарының монологик телмәрҙәрендә, диалогтарында бирә башлай. З.Һаҙыйҙың хәл-ваҡиғаларға активлығы объектив хикәйәләү өлөшөндә лә ярылып ята.

Шуныһы характерлы, З.Һаҙый, объектив хикәйәләү менән аралашып килгән, сигенеүҙәрҙән тыш, «Бәхетле ҡыҙ», «Бәхетһеҙ ҡыҙ» хикәйәләренең аҙағында, әҫәрҙәрҙә һүрәтләнгән хәл-ваҡиғаларҙан сығып, тәрән йөкмәткеле һығымталар ҙа яһай. Был һығымта-дөйөмләштереүҙәрҙә ул йәмәғәтселек алдына кисектергеһеҙ хәл ителергә тейешле проблемалар ҡуя, уларҙы хәл итеүгә бәйләнешле уй-фекерҙәре менән уртаҡлаша. Әлбиттә, художестволы әҙәбиәтте заман алдында өлгөрөп еткән мәсьәләләр тураһында иркен фекер алышыу майҙаны итеп файҙаланырға ынтылыу ихтыяжының объектив сәбәптәре лә булмай түгел. Был хәл, бер яҡтан, милли матбуғат органдарының булмауы менән бәйле күренеш ине.

М.Ғафури иһә үҙ әҫәрҙәрендә сәсмә рәүешле сигенеүҙәр менән генә сикләнмәй, әҫәрҙәренең эмоциональ тәьҫир итеү ҡеүәтен арттырыу өсөн, иң көсөргәнешле урындарҙа шиғырға ла мөрәжәғәт итә. «Аслыҡ йыл йәки һатлыҡ ҡыҙ» хикәйәһенән бер миҫал:

---

[225] Өҙөк «Татар мәғрифәтчелек әдәбияты» тигән китаптан алып килтерелде. Төҙөүсеһе һәм аңлатма биреүсеһе М.Х.Ғәйнуллин. Ҡазан, 1979, 312-се бит.

«Хәсби, йығлаған тауыш илә, ҡуйынынан бер аҙ икмәк сығарып, өскә бүлеп, бер киҫәген Мәрйәмгә, береһен Әсғәткә, береһен Ғәйшә абыстайға бирә. Был икмәктәрҙең һәр бер киҫәге бер алтын кеүек күренеүендә шөбһә юҡтыр. Бәндәнең бай, сихәт вә сәләмәт ваҡытындағы нә ҡәҙәре малы, дәүләте булһа ла, бер тинлек ҡәҙере булмайҙыр. Әммә тамам ғажиз улһа, ҡәлеб вә күңел башҡа була, бер лоҡма нәмә йәндән артыҡ ҡәҙерле-ҡәҙерле күренә, һәм шуның өсөн йәнде фиҙа итергә әҙер тора. Минең күңелемә был урында сараһыҙ шул шиғыр килде;

Нан кеүек ҡиммәт нәмә бармы икән был донъяла?
Йән кеүек ҡиммәтле нәмә нан өсөн булыр фида.
Бәғзеләр мәрйәнә һәм мохтаж түгел һәм алтынға,
Бәгзеләрҙе бер күмәскә мохтаж итмеш хоҙа.
Ҡалмаһа янында малың, дуҫ-ишең һинең биҙер,
Ни ата ҡалмаҫ, ни аға, ни ҡоҙағый, ни ҡоҙа...»[226]

Шуныһы характерлы: Ғафуриҙың тәүге — «Фәҡирлек менән үткән тереклек» хикәйәһе тулыһынса объектив хикәйәләү стилендә ижад ителгән. Был әҫәр, күрәһең, булған ваҡиғаларға нигеҙләнеп яҙылған, шуға ла унда натуралистик алым өҫтөнлөк итә, теле ғәрәп-фарсы һүҙҙәре менән сыбарланмаған. «Үгәй балалар» менән «Аслыҡ йыл йәки һатлыҡ ҡыҙ» хикәйәләре иһә Р.Фәхретдинов менән З.Һаҙыйҙың көслө йоғонтоһонда яҙылғандар. Беренсенән, был автор сигенеүҙәренең өҫтөнлөк алыуында күренһә, икенсенән, Ғафури, был ике хикәйәһендә кәрәккән-кәрәкмәгән урында ла ғәрәп-фарсы һүҙҙәрен ҡулланып, Р.Фәхретдинов менән З.Һаҙый әҫәрҙәренә хас «юғары стилгә» ынтылған. Яҙыусы артабан «Ярлылар йәки өйҙәш ҡатын» повесында «Фәҡирлек менән үткән тереклек» хикәйәһендә төҫмөрләнгән стилгә әйләнеп ҡайта. Әҫәрҙәрендә тәнҡитле реализм һыҙаттары көсәйеү менән бергә объектив хикәйәләү стиле баҙыҡлана бара. Романтик рухтағы нәҫерҙәр ижад итеү практикаһы, халыҡ ижады традицияларын үҙләштереү уның стилендә эмоциональ төҫмөрҙәрҙе арттыра һәм совет дәүерендәге прозаһында тулы кө-

---

[226] Ғафури Мәжит. Әҫәрҙәр. Дүрт томда. 2-се том. Өфө, 1978, 34—35-се биттәр.

сөнә инәсәк үҙ индивидуаль стиле нығына башлай. Асылда, Ғафури башҡорт прозаһында артабан үҫеш аласаҡ объектив хикәйәләү стиленең дә, автобиографизм менән эпистоляр стилдең дә матур ғына өлгөләрен бирә.

Объектив хикәйәләү менән автор һүҙҙәренең аралашып килеүе мәғрифәтселек прозаһының төп стиль үҙенсәлеге булып торһа ла, стиль эҙләнеүҙәре быға ғына ҡайтып ҡалманы, әлбиттә. Әҫәрҙәрендә ҡуйылған конфликттарҙың логик үҫешенән ситкә китеп, ыңғай геройҙарҙың еңеп сығыуын осраҡлы ваҡиғаларға, «бәхетле осраҡҡа» нигеҙләнеп кенә хәл итергә тырышыу тенденцияһы мәғрифәтселек реализмы әҫәрҙәренә хас булған дөйөм күренеш характерын ала барғанлығы ла күҙәтелә һәм был әҫәрҙәрҙең композицион ҡоролошона ла, тимәк, стиленә лә йоғонтоһоҙ ҡалмай.

Р.Фәхретдиновтың «Әсмә йәки ғәмәл вә яза» повесы бының классик өлгөһө булып тора. Әҫәрҙә, нигеҙҙә, бер үк персонаждар хәрәкәт итһә лә, уның сюжеты тормоштоң тәбиғи ағышына ярашлы рәүештә бер бөтөн итеп ҡоролмаған. Повесть композицион яҡтан ваҡваҡ ҡына бүлектәргә бүленгән. Һәр бүлек, асылда, үҙе бер хикмәтте хәтерләтә. Повестың башында Хикмәт хажи менән Ғәббәс мулла араһында конфликт төйөнләнә. Хикмәт хажи, ҡыҙына өйләнмәгән һәм үҙенә ҡаршы килеүе өсөн, Ғәббәстән үс алырға самалай. Муса тигән бер елғыуар бәндә Ғәббәс мулла исеменән халыҡҡа үтенес-хат яҙып, «мәсетебеҙ янды, ауылға мәсет һалабыҙ», тип, ҡала байҙарынан иғанә йыя. Ләкин аҡсаны фәхешханала урлата. Ялған хат Ғәббәс мулла исеменән яҙылғас, Хикмәт хажи был осраҡты Ғәббәскә ҡаршы файҙаланмаҡсы була. Конфликттың логик үҫешенән Ғәббәс үҙенең сафлығын һәм ғәйепһеҙлеген аҡлау өсөн көрәшергә тейеш икәнлеге күренеп торһа ла, автор был конфликтты бәрелешкә килтермәй: Ғәббәс мулла хаж сәфәренә сығып китә. Артабан Хикмәт хажи менән Мусаларҙың яҙмышы ла, Ғәббәс менән Әсмәнең яҙмышы ла айырым-айырым яҡтыртыла. Көнсығыш хикәйәттәре һәм дастандары традицияларына таянып, Р.Фәхретдинов повеста үҙ геройҙарының яҙмыштарын шаҡтай мажаралы итеп һүрәтләй. Геройҙарының исемдәрен алмаштырып, яҙмыштарын бутап бөтә. «Хаж сәфәрендә үлеп ҡалды», — тигән Ғәббәс мулла, төрлө

мажаралар аша әйләнеп ҡайтып, Юныс хәҙрәт булып Салих байҙың тәрбиәханаһында йөрөп ятыуы; «тиф ауырыуынан үлде», — тигән хәбәре таралған ҡыҙы Әсмәнең шул уҡ тәрбиәханалағы Зәйнәп булып сығыуы уҡыусыларҙы хайран ҡалдырырлыҡ. Өҫтәүенә, Әсмәнең сыҡҡан кейәүе — Ғәли хәлфә лә Әсмә, ата-әсәһенән етем ҡалып, Йософ бабайҙа торғанда осрашып ғашиҡ булышҡан шәкерт егете булып сыға.

Шуныһы характерлы, Р.Фәхретдинов персонаждарҙы «яманға» һәм «яҡшыға» төркөмләп, ямандарының эш-ҡылыҡтарын, характерҙарын ыңғайҙарына ҡарағанда ла ҡалҡыуыраҡ итеп күрһәтһә лә, уларҙы фаш итеү мәсьәләһенә килгәндә, яҙмыш хөкөмөнә ҡуя. «Ғәмәл вә яза» принцибына тоғро ҡалып, һәр кеше үҙе ҡылған эшенең емешен үҙе йыя: яуыздар — язаһын ала, яҡшылар — бәхет вә сәғәҙәткә ирешәләр, тигән ҡарашты уҙғара. Был идеяһы менән Р.Фәхретдинов «яуызлыҡҡа көс менән ҡаршы тормау» принцибын яҡлаусы «толстовщинаға» бик яҡын тора.

«Әсмә» повесын, бер яҡтан, мәғрифәтселек реализмы методында яҙылған тип раҫларға мөмкин. Быны тәрбиә мәсьәләләренең киҫкен ҡуйылышы, характерҙар формалашыуға мөхиттең көслө йоғонтоһо һыҙыҡ өҫтөнә алыныу менән аңлатып була.

Шул уҡ ваҡытта унда романтизмға хас сифаттар ҙа байтаҡ.

Конфликт төйөнләнеп еткәс кенә, бына-бына бәрелеш буласаҡ, тип торғанда, осраҡлылыҡ аша мәсьәләнең хәл ителеше З.Һаҙый әҫәрҙәрендә лә байтаҡ. «Бәхетле ҡыҙ» хикәйәһендә Ғәйшәне Сәлим мулла икенсе ҡатынлыҡҡа алырға ниәтләнеп, никах уҡытып, туй уҙғарып бөткәс кенә, Ғәйшә Сәлим мулланың оҫтабикәһе Ғаян абыстайҙың һөт ҡыҙы булыуы асыҡлана. Шуның арҡаһында ғына бер-береһенә ғашиҡ булған Ғәббәс менән Ғәйшә ҡауышыу бәхетенә ирешәләр. «Йыһанша хәҙрәт» повесындағы Фәхрелбанат та Йыһаншаның өсөнсө ҡатыны булыуҙан бәләкәй саҡтарында Хәсән менән йәрәшеп ҡуйыуҙары арҡаһында ғына ҡотолоп ҡала. Ыңғай геройҙарҙың социаль шарттар дусар иткән бәхетһеҙлектән йәки бәлә-ҡазанан осраҡлы рәүештә ҡотолоп ҡалыуы А.Таһировтың «Һатылған ҡыҙҙар» хикәйәһендә лә ҡабатлана. Ағалары тарафынан фәхешханаға һатылған ҡыҙҙар был йорттан ос-

раҡлы рәүештә генә ҡасып ҡотолалар һәм изге күңелле кешеләр ярҙамында ауылдарына әйләнеп ҡайталар. Был осраҡлылыҡтың тамыры, бер яҡлап, халыҡ ижады традицияларына, әкиәттәргә барып тоташһа, икенсе яҡтан, ул мәғрифәтселек әҙәбиәтенең идея-эстетик үҙенсәлеге менән бәйләнгән дөйөм типологик күренеш. «Геройҙарҙың яҙмышындағы көтөлмәгән боролоштар, — ти был хаҡта Н.А.Гуляев, — мәғрифәтселек әҙәбиәтенә хас дөйөм күренеш. «Әхлаҡлы» кешенең еңеүен тәьмин итеү өсөн, бында йыш ҡына ваҡиғаларҙың тәбиғи ағышы төрлө осраҡлылыҡ менән алмаштырыла»[227]. Был иһә мәғрифәтселәрҙең донъяға ҡарашы тарихи сикләнгән булып, улар үҙҙәре табынған ғәҙеллек һәм тигеҙлеккә нигеҙләнгән йәмғиәткә киҫкен, революцион көрәш аша түгел, бәлки әхлаҡ камиллаштырыу юлы менән килергә ынтылыуҙары менән аңлатыла.

Стилдә оҡшашлыҡҡа, йәғни берҙәм стиль ағымына ынтылыш дөйөм типологик характерҙағы оҡшашлыҡтарҙан тыш традицияларҙың күсәгилешлегендә лә кәүҙәләнеш алған. Был йәһәттән үҙенә тиклемге традицияларҙы концентрациялау яғынан да, үҙенән һуңғы яҙыусыларға ҙур йоғонто яһау яғынан да Р.Фәхретдинов прозаһы айырылып тора. Киң мәғлүмәтле, Көнсығыш әҙәбиәтен яҡшы белгән Р.Фәхретдинов үҙенең «Әсмә...» повесында байтаҡ башланғыстарға нигеҙ һалған. Башҡорт мәғрифәтселек прозаһына уның йоғонтоһо рус реалистик прозаһына Гоголдең «Шинел»енең йоғонтоһо дәрәжәһендә. Был йоғонто идея-тематикала ла, йөкмәткеле форма элементтарында ла сағыла. «Ғәмәл вә яза» концепцияһы, мәҫәлән, Р.Фәхретдиновтан А.Таһировҡа күсә. А.Таһировтың «Һатылған ҡыҙҙар»ында ла, «Мазлумалар» повесында ла яуыздар үҙ язаһын үҙҙәре табалар. «Әсмә...» повесының йоғонтоһо мәғрифәтселек прозаһының образдар системаһында ла күҙгә ташлана. «Әсмә...» повесындағы Бикбулат хәҙрәт халыҡҡа: «Дөнъя кумағыҙ! Бүген ашарығыҙға улса — иртәгә алла кәрим!.. Кем белер, бәлки бу сәғәттә әжәл килер»[228], — тип вәғәз ҡылһа, З.Һаҙыйҙың «Бәхетле

[227] Гуляев Н. А. Теория литературы. М.: Высшая школа, 1977, с. 214.

[228] Фәхретдинов Р. Әсмә... — Китапта: Татар мәғрифәтчелек әдәбияты, 340-сы бит.

ҡыҙ» хикәйәһендәге Сәлим мулла: «Дөнъя артынан йөрөмәгеҙ! Ахирәт өсөн тырышығыҙ, нәфел намаҙлары күп уҡығыҙ! Фәләнсә мең тәсбих әйтегеҙ! Суфилар кейеме кейегеҙ!»[229], — тип өгөтләй, З.Һаҙыйҙың «Бәхетһеҙ ҡыҙ»ындағы Вәлит хәҙрәт менән һуңғы повесындағы Йыһанша хәҙрәт тә Р.Фәхретдиновтың Бикбулат хәҙрәтенең юлын ҡыуыусылар. «Бәхетле ҡыҙ»-ҙағы Ғәббәс мулла менән «Йыһанша хәҙрәт»тәге Хәсән мулла иһә «Әсмә...»ләге эстетик идеал юғарылығына күтәрелгән Ғәббәс мулла менән Ғәли хәлфәнән үҫеп сыҡҡандар, тиерһең. Р.Фәхретдинов менән З.Һаҙыйҙың һәм М.Ғафуриҙың ҡатын-ҡыҙ образдарында ла оҡшаш һыҙаттар байтаҡ.

Былдарҙан тыш мәғрифәтселек прозаһына Р.Фәхретдиновтың көслө йоғонтоһо хатта Ғәббәс, Ғәйшә, Зәйнәп кеүек ыңғай геройҙарының исемдәре З.Һаҙый, М.Ғафури, А.Таһиров әҫәрҙәренә күсәгилеүендә лә асыҡ күренә. З.Һаҙыйҙың «Бәхетле ҡыҙ» хикәйәһендәге Ғәббәс менән Ғәйшә өлгөлө ир менән ҡатын булыуҙары яғынан да, әхлаҡ йәһәтенән юғары тороп, халыҡ бәхете өсөн хеҙмәт итеүҙәре менән дә «Әсмә...» повесындағы аҙаштарының варианттары кеүегерәк ҡабул ителә. М.Ғафури хикәйәләрендәге яҡшы күңелле әсә лә Ғәйшә исемле булыу тиктәҫтән түгел. Зәйнәпкә килгәндә, был исем Р.Фәхретдинов әҫәрендә Әсмәгә тағылған исем. Повеста Әсмә-Зәйнәп — ҡыйырһытылған етем ҡыҙ. Артабан был ҡыйырһытылған Зәйнәп менән беҙ М.Ғафуриҙың «Үгәй балалар», «Зәйнәп сабыр иткәйне...», А.Таһировтың «Мазлумалар» әҫәрҙәрендә лә осрашабыҙ. Был осраҡта З.Һаҙый, М.Ғафури, А.Таһировтарҙы эпигонлыҡта ғәйепләп булмай. Сөнки был күренештең тамырҙары Көнсығыш әҙәбиәтендә ята. «Фәрһад вә Ширин», «Йософ вә Зөләйха» һәм башҡа шундай киң билдәле сюжеттарға бер нисә авторҙың мөрәжәғәт итеүе — һәр береһе үҙенең «Йософ вә Зөләйха»һын йәки «Фәрһад вә Ширинен» ижад итеү традицияһының шауҡымы, күрәһең, беҙҙең мәғрифәтселек прозаһында ла үҙенсәлекле сағылыш алған.

Йәнә тағы етем ҡыҙҙарҙы, «ҡалалағы туғандарығыҙға алып барабыҙ», тип, алдатып алып китеүҙәр, ҡалаға

---

[229] З.Һаҙый. Күрһәтелгән китап, 56-сы бит.

барғас, аҙғын ҡарсыҡтар ярҙамында алдатып поездарға ултыртып оҙатыу кеүек дөйөм урындар ҙа Фәхретдиновтың «Әсмә» повесынан башлана. Был алымды беҙ Ғафуриҙың «Аслыҡ йыл йәки һатлыҡ ҡыҙ» әҫәрендә лә, А.Таһировтың «Һатылған ҡыҙҙар»ында ла осратабыҙ.

Күренеүенсә, Р.Фәхретдиновтың «Әсмә...» повесында моронлаған башланғыстарҙың бер яҙыусы — бер яғын, икенсе яҙыусы икенсе яғын дауам иттергән. Әммә был башланғыстарҙың үҫеше, тулайым алғанда, башҡорт мәғрифәтселек прозаһының стиль үҙенсәлектәрен берҙәм ағым тирәһенә туплауға килтергән. Ә инде стиль ағымының ҙурыраҡ бер индивидуаль стиль тирәһендә формалашыуы һәр заманға һәм һәр милли әҙәбиәткә хас күренеш булып тора.

Башҡорт прозаһының стиленә йоғонто яһаусы көслө традицияларҙың береһе халыҡ прозаһы — әкиәттәр, халыҡ араһында телдән-телгә күсеп йөрөгән ярым дини, ярым донъяуи йөкмәткеле хикәйәттәр, эпостар һәм легендалар булды. Прозаның формалашыу осоронда был хикәйәләү стиленә лә, сюжет һәм композицияға ла, хатта образдар системаһына ла йоғонто яһалғанлығы күҙәтелә. М.Ғафуриҙың «Үгәй балалар» хикәйәһендә өс баланы бер-бер артлы «теге донъяға» ебәреүсе үгәй әсә Латифаның образы әкиәттәрҙәге үгәй әсәләрҙең иң яуыз һәм мәкерле ҡылыҡтарының реаль кәүҙәләнеше кеүегерәк ҡабул ителә. З.Һаҙыйҙың «Яңы әсхәбе ҡәһәф» әҫәре лә боронғо дини легендаға оҡшатып яҙылған, шуға күрә бында автор әкиәт стилен киң ҡулланған. Сәфәрғәли менән Миңлешаһтың юлда осраған көтөүсе Тимербайҙы ла эйәртеп, «икәүҙән өсәү яҡшы», тигәндәй, өсәү булып китеүҙәре, әкиәт геройҙарына хас булғанса, бәхетте ҡайҙан эҙләргә үҙҙәре лә белмәй, юлда бер ҡарт мөритте осратып «Был Хыҙыр-Ильяс түгелме икән?» — тип, унан кәңәш алыуҙары һәм, уның кәңәше буйынса, Ташлыйылға мәҙрәсәһенә юл тотоуҙары ла әкиәт сюжеттарына бик яҡын тора. Ғафури хикәйәһендә әкиәт традицияһы стихиялыраҡ кәүҙәләнеш алһа, З.Һаҙый был алымға аңлы рәүештә мөрәжәғәт иткән һәм боронғо легендаларҙағы тау тишегенә оҡшаған мәҙрәсә тәртиптәрен фаш итеү өсөн оҫта файҙаланған. Шуға ла «Яңы әсхәбе ҡәһәф» хикәйәһендә әсе ирония өҫтөнлөк итә.

Йыйнап әйткәндә, объектив хикәйәләү менән автор сигенеүҙәренең аралашып килеү күренеше; ыңғай геройҙың яҙмышын хәл итеүҙә йәки конфликт төйөнөн сисеүҙә «бәхетле осраҡлылыҡ» алымының киң таралыуы; сюжет һәм композицияла, хикәйәләү алымдарында Көнсығыш әҙәбиәтенең, әкиәт менән хикәйәт традицияларының һиҙелерлек йоғонтоһо булыуы; образдар системаһында дауамлылыҡ, күсәгилешлелек тенденцияһының күҙәтелеүе һәм художество алымы булараҡ ҡайһы бер ҡалыплаша барған дөйөм урындарҙың хасил булыуы; бынан тыш лексикала — ғәрән-фарсы менән яҙма төрки теле һүҙҙәренә, һөйләм төҙөлөшөндә — ауыр конструкциялы китап теле синтаксисына йүнәлеш тотоу — башҡорт мәғрифәтселек прозаһында үҙенсәлекле стиль ағымын формалаштырған.

Шул уҡ ваҡытта 1905—1907 йылдарҙағы революция тәьҫирендә башҡорт мәғрифәтселәренең донъяға ҡарашында ҙур һынылыш дәүере башлана. М.Ғафури, З.Һаҙый, А.Таһировтарҙың ижадында мәғрифәтселек реализмынан тәнҡитле реализмға күсеү осорона хас булған яңы стиль тенденциялары беленә. З.Һаҙыйҙың «Яңы әсхәбе ҡәһәф», «Йыһанша хәҙрәт», А.Таһировтың «Мазлумалар», М.Ғафуриҙың «Ярлылар йәки өйҙәш ҡатын» әҫәрҙәрендә ҡәтғи тормош дөрөҫлөгө өҫтөнлөк ала. Был һынылыш мәғрифәтселек прозаһына хас булған, реалистик һүрәтләүҙе сикләүсе стиль традицияларының ҡайһы бер консерватив элементтарын инҡар итеүгә, сюжетта, композицияла, хикәйәләүҙә яңы йөкмәткегә ярашлы яңы формаларҙы эҙләүгә килтерә. Сюжет һәм композицияла тормоштоң тәбиғи ағышын кәүҙәләндереүгә ҡулайлы булған фабулалыҡҡа иғтибар көсәйә.

Был осор хикәйәләү стиле өлкәһендә интенсив эҙләнеү барғанлығы күҙәтелә. Ул һөйләүҙән — һүрәтләүгә күсергә ынтылыштарҙа ла; диалогтарҙы биреүҙә, тәүге осорҙа өҫтөнлөк алған сәхнә әҫәре формаһынан арынып, хәҙерге прозаға хас булған диалог формаларын үҙләштерә башлауҙа ла күренә. Шулай уҡ һөйләмдә һүҙҙәрҙең музыкаль яңғырашына, ритмикаға иғтибар көсәйә. Был күренеш айырата З.Һаҙый ижадына хас.

Мәғрифәтселектән тәнҡитле реализмға күсеү дәүерендә шулай уҡ тәбиғәт күренештәрен реалистик һүрәтләүгә, тәбиғәт күренештәрен кешенең рухи донъяһы

кисерештәре менән йәнәшә ҡуйырға ынтылыштар бер-мә-бер арта. А.Таһировтың «Мазлумалар» повесында хикәйәләү стилендә яңылыҡҡа ынтылыу айырата күҙгә ташлана. Әҫәрҙең стилендә билдәле бер иркенлек, эпиклыҡҡа ынтылыу күренә.

Әлбиттә, тәнҡитле реализм прозаһына хас булған стиль төҫмөрҙәре былар менән генә сикләнеп ҡалмай. Уларҙы М.Ғафури, З.Һаҙый, А.Таһировтарҙың, нигеҙҙә, мәғрифәтселек реализмына ҡараған әҫәрҙәрендә психологик анализға хас булған һүрәтләү алымдарының күренеүендә лә, А.Таһировта лирик монологтарҙың барлыҡҡа килеүендә һәм башҡаларҙа күҙәтергә мөмкин. Беҙҙең өсөн әлегә шуны асыҡлау мөһим: мәғрифәтселек осоро прозаһы милли художестволы проза үҫешендәге киҫкен һынылыш дәүеренә тап килде һәм, үҙенә тиклемге халыҡ ижады, яҙма проза, Көнсығыш әҙәбиәте традицияларын синтезлап, реалистик прозаның формалашыуына тотороҡло ерлек әҙерләне.

## ФӘННИ-ТЕХНИК ПРОГРЕСС ҺӘМ БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ

Ныҡ үҫкән социализм дәүерендә кешене уның үҙе тарафынан ижад ителгән «икенсе тәбиғәткә», йәғни техниканың ишәйеүе һәм ҡатмарланыуы, бының эҙемтәләре килтереп тыуҙырған яңы мөхиткә яраҡлаштырыу өсөн психофизиологик йәһәттән әҙерләнеү генә етмәй, шәхестең рухи һәм әхлаҡ яғынан гармоник үҫешенә лә ҙур иғтибар бирелә. Совет кешеһен коммунистик идеалдар юғарылығында тәрбиәләүҙә ижтимағи фәндәр менән бергә әҙәбиәткә һәм сәнғәткә быға са булмаған ҙур һәм яуаплы бурыс йөкмәтелә.

Фәнни-техник прогресс әҙәбиәткә, ғөмүмән, художестволы фекер үҫешенә ни рәүешле йоғонто яһай, был дәүерҙең әҙәбиәте нисек булырға тейеш? Ошондай мәсьәләләр һуңғы йылдарҙа әҙәби тәнҡиттә көнүҙәк мәсьәләләрҙән һанала.

«Беҙҙең тәнҡит 60-сы йылдарҙың аҙағында — етмешенсе йылдарҙың башында ҡыйыр-ҡыймаҫ, икеләненкерәп тотонған «ФТР темаһы», — тип яҙа Борис Анашенков, — хәҙерге көндә әҙәби һәм ижтимағи аң үҫешенең иң алғы һыҙығына баҫа, тиһәм, һис тә арттырыу булмаҫ.

Фәнни-техник революция, уның эҙемтәләре, кешегә тәьҫир итеүе, тимәк, уның әҙәбиәттә сағылышы тураһында яҙыусылар ҙа, китап уҡыусылар ҙа бәхәс итә, матбуғат биттәрендә фекер уртаҡлаша, сөнки «ФТР темаһы» теге йәки был темаға ҡарағанда фән менән сәнғәттең үҙ-ара бәйләнешенә, фәнни фекерләү менән художестволы фекерләүҙең бер-береһенә йоғонто яһашыуына булышлыҡ итә».[230]

---

[230] Борис Анашенков. Этот простой сложный человек. (Научно-техническая революция — социальный прогресс — литература). — М.: Сов. писатель, 1977, с. 5.

Эйе, был ҙур һәм ҡатмарлы проблема тирәһендә ҡупҡан бәхәстәр, берсә һүнеп, берсә ҡабынып, алтмышынсы йылдарҙың аҙаҡтарынан алып бөгөнгәсә дауам итә.

Был, бер яҡлап, ҡайһы бер техник интеллигенция вәкилдәренең, айырата физиктар менән математиктарҙың, художестволы әҙәбиәтте консерватизмда ғәйепләп, фәнни-техник фекер үҫешенә художество-эстетик фекер үҫешен ҡаршы ҡуйыуҙарында асыҡ сағылыш алһа, икенсе яҡлап, ауыл тематикаһында эшләүсе ҡайһы бер яҙыусылар үҙҙәренең әҫәрҙәрендә техника хакимлығы дәүеренә крәҫтиән тормошон ҡаршы ҡуйыуҙа, ауыл кешеһен, айырата крәҫтиәндәрҙе, милли традицияларҙы, тәбиғи кешелек сифаттарын һаҡлаусы берҙән-бер ҡатлам тип, ауыл тормошон идеаллаштырыңҡырап һүрәтләүҙә асыҡ күренде. Социалистик ысынбарлыҡҡа, дөйөм ижтимағи процесҡа тарихи ҡараштан алыҫ тороусы был ике йүнәлеш тә матбуғатта урынлы фаш ителде.

Беҙҙең әҙәбиәт — социалистик реализм әҙәбиәте, ул тормошто бөтә тулылығында, революцион үҫешендә сағылдырырға тейеш. Тимәк, ул илебеҙҙең экономикаһын үҫтереүҙе фәнни-техник прогресс ҡаҙаныштарына таянып үҙгәртеп ҡороу кеүек ҙур дәүерҙе сағылдырыуҙан, фән туранан-тура эшләп сығарыусы көскә әүерелә барған бер осорҙа, был революцион һикерештe тормошҡа ашырыусы алдынғы эшселәр синыфы вәкилдәренең, инженер-техник работниктарҙың, ғалимдарҙың героик хеҙмәтен, уларҙың тулы ҡанлы образдарын кәүҙәләндереүҙән ситтә ҡала алмай. Шуға күрә хәҙерге заманда эшселәр синыфы тормошона, производство темаһына арналған юғары художестволы әҫәрҙәр ижад итеү кәрәклеге быға тиклем булмаған дәрәжәлә көнүҙәк мәсьәлә итеп ҡуйыла.

Әлбиттә, «фәнни-техник прогресс һәм әҙәбиәт» тигән проблема ҙур һәм иң ҡатмарлы проблемаларҙың береһе. Был проблема, асылда, бер ниндәй тематик рамкаларға ла һыймай, сөнки ФТР кешелек йәмғиәте һәм культураһы үҫешендәге яңы бер дәүер. Шуға күрә уның хәҙерге ысынбарлыҡты сағылдырыуға арналған барлыҡ темаларға ла билдәле бер йоғонтоһо бар. ФТР шулай уҡ хәҙерге заман кешеһенең, шул иҫәптән художниктың, көнкүрешенә, психологияһына, тормошто

танып белеү процесына, рухи донъяһына ҙур йоғонто яһауы менән бер ҡатар, художестволы фекерләүгә, йәғни тормошто образлы кәүҙәләндереү манераһына көслө тәьҫир итә.

Әйтелгәндәрҙән сығып, «ФТР темаһы» беҙҙең башҡорт әҙәбиәтендә ни рәүешлерәк сағылыш ала һәм уның ниндәй үҙенсәлектәре бар?» тигән урынлы һорау тыуа. Әлбиттә, был һорауға ҙур булмаған бер мәҡәләлә тулы яуап биреү мөмкин түгел. Әммә хәҙерге башҡорт әҙәбиәте, айырата поэзияһы һәм прозаһы, был мәсьәлә тураһында ентекле һөйләшеү алып барырға мөмкинлек бирә.

Һүҙҙе поэзиянан башлайыҡ. Кешелек йәмғиәтендәге һәр бер яңы күренеш иң элек үҙенең эске өлгөрөү, әҙерлек осорон кисерә һәм ниндәйҙер ғәжәп ҙур бер ваҡиға булып тышҡа бәреп сыға. Фәнни-техник революция осоро тигән яңы дәүер ҙә, минеңсә, фән һәм техника өлкәһендә барған оҙайлы эҙләнеүҙәрҙең, тәүге еңеү тантанаһы булып, совет кешеһе — ер йөҙөндәге тәүге летчик-космонавт Юрий Гагариндың Йыһан киңлегенә сығыуынан һәм донъя халҡын таң ҡалдырыуынан башланды. Фән һәм техника өлкәһендәге был революцион һикереш теге йәки был фәнни асышҡа ғәҙәтләнә башлаған халыҡтың уй-хыялдарын тетрәтте.

Поэзия — һәр яңылыҡты иң алдан эләктереп алыусы, уға йылдам тауыш биреүсе жанр. Бына ошо тәүге осош поэзияла космос темаһының уғата йәнләнеп китеүенә ҙур этәреш яһаны. Сөнки был осош кеше аҡылының мөмкинлектәре ни дәрәжәлә ҙур, кеше үҙе ни дәрәжәлә бөйөк икәнлеген тағы бер ҡабат раҫланы. Бер талай шағирҙар был тарихи еңеүгә һоҡланыу һәм ғорурланыу тойғоһон белдерергә ашыҡһалар, ҡайһы берҙәре, был еңеүҙең философик асылына үтеп инергә тырыштылар. Кешенең мөһабәтлегенә, уның көсөнә ышаныс артты.

Халыҡ шағиры Мостай Кәримдең:

Диңгеҙ буйлап йүгерә бер малай.
Ялан тәпәй. Беҙҙең нәҫелдән.
Эҙҙәрендә йым-йым итә ваҡ таш,
Гүйә, ергә йондоҙ сәселгән.
Килә заман. Килә. Шул малайҙар
Ҡош юлына сәфәр сығырҙар.
Һәм йондоҙҙар, улар баҫҡан саҡта,
Ваҡ таш урынына шығырлар, —

тигән юлдары ла, бынан һуңғараҡ яҙылған «Кеше көслө» шиғыры ла кешенең Йыһан киңлегенә сығыуы, яңы дәүерҙең башланыуы тәьҫирендә ижад ителгән әҫәрҙәр булды. Әнғәм Атнабаев «Зәңгәр күккә ҡарап...» шиғырында ерҙең тартыу көсөн зәңгәр йондоҙҙарға ынтылыусы, ерҙең үҙенән дә көслө лирик геройының романтик ынтылыштарын кәүҙәләндерһә, һәр бер яңылыҡҡа һиҙгер һәм һаҡ күңелле Муса Ғәли «Ер ысҡынмаҫ минең ҡулымдан» шиғырында:

Йәшермәймен, була шундай сағым,
Шундай сағым була, гүйә, мин
Етегәндәргә йәнәш еләмен,
Шарға баҫып килгән айыу һымаҡ,
Йыһан буйлап бөйөк Ер шарымды
Тәгәрләтеп алып киләмен! —

тип яҙҙы.

Алтмышынсы йылдарҙа шағирҙар замандың етеҙ ағышына яуап бирерлек, дәүергә тиң торорлоҡ шиғырҙар ижад итеү өсөн өр-яңы формаларға, поэтик шартлылыҡҡа йышыраҡ мөрәжәғәт итә башланылар. Замандың көсөргәнешле ағышы, дәүер һулышы поэзияға төрлө яҡлап йоғонто яһаны, был поэтик образлылыҡтың яңырыуында ла, шиғырҙарҙың ритмикаһында ла сағылыш алды. Ғәләм, Планета, Орбита, Ваҡыт, Мәңгелек кеүек масштаблы образдар менән фекер йөрөтөү бермә-бер йышайҙы.

Тап бына ошо осорҙа үҙәк матбуғатта «физиктар» менән «лириктар» араһында ҡыҙыу-ҡыҙыу бәхәстәр башланды. «Физиктар» фәнни-техник прогресс заманында эмоциональ яҡты рационализм еңә, хәҙер Тургеневтың «барышнялары» заманы уҙҙы тип рационализмды яҡлап сыҡһалар һәм борон-борондан кешенең күңел донъяһына ҙур иғтибарлы булған әҙәбиәткә, уның мөмкинлектәренә икеләнеп ҡараһалар, «лириктар» заман кешеһенең тиңһеҙ байлығын — күңел донъяһын яҡлау һәм һаҡлау яғына баҫтылар.

Әҙәбиәттең һәм сәнғәттең кеше тормошонда тотҡан урынын, изге бурысын яҡлау һәм һаҡлау ғына түгел, уның ролен тағы ла юғарыраҡ күтәреү теләге был осорҙа айырата көсәйҙе. Рәми Ғарипов «Сәнғәт» тигән шиғырында кешелектең мәңгелек юлдашы һәм көрәштәше һүҙ сәнғәтенә мөрәжәғәт итеп:

Әй ҡыйыу һүҙ —
тере буяу,
саф моң!
Онотмайыҡ изге ҡаныңды.
Кешелектең саф намыҫы итеп
Күтәрәйек һинең даныңды.
Кеше
ғашиҡ бөгөн
бар донъяға,
Мөхәббәте һыймай йыһанға.
Йондоҙло тел кәрәк бөгөн уға,
Әй, ҡанат ҡуй,
заман,
илһамға! —

тип яҙҙы. Заманса фекер йөрөтөргә, «йондоҙло тел» менән ижад итергә ынтылыш М.Кәрим, Н.Нәжми, Р.Ғарипов, М.Ғәли, Ғ.Рамазанов, Ә.Атнабаев кеүек шағирҙарҙың ижадында ғына түгел, йәшерәк быуын шағирҙарҙан Р.Бикбаев, Т.Йосопов, Ә.Әхмәтҡужин, Р.Назаров, З.Шаһбазовтарҙың поэзияһында ла һиҙелерлек күренешкә әйләнде.

Ижады заманыбыҙҙың ярһыу һәм ҡабатланмаҫ бер күренеше булып майҙанға килгән Рәшит Назаров «Төнгө уйҙар» шиғырында үҙ ҡәләменә:

Яҙ һин, ҡәләм!
Күрсе бөтә ғәләм
Баҫып тора һинең осоңда!
Тирбәл генә — йыһан үҙе ҡубыр,
Тирбәл генә, дуҫым, һәм — шунда
Бар йондоҙо күктең,
Бар ҡояшы
Төшөп ҡуныр ҡағыҙ өҫтөнә...
Тыуһын өсөн биҙәк, яңы биҙәк,
Тирбәл әле, тирбәл кескенә! —

тип өндәшһә, хис-тойғоларға, йәғни мөхәббәткә кеше күңелендә урын аҙ, «беҙҙең тойғоларыбыҙ ярлылана», тип, лаф орорға яратыусылар менән полемикаға инеп, үҙенең урғып-ташып торған хис-тойғоларын тыя алмай:

Ҡосаҡлағым килә бар донъяны,
Осҡом килә йондоҙ эҙенән.
Айҙы аҡбур итеп,
һөйөүемде
Яҙғым килә сем-күк йөҙөнә, —

тип яҙҙы Әсхәл Әхмәтҡужин бер исемһеҙ шиғырында. Шул рәүешле кешенең йыһан киңлегенә сығыуы менән башланған фәнни-техник прогресс заманы поэтик фекерләүгә ҙур йоғонто яһауы, шағирҙар үҙ әҫәрҙәрен космик осоштар дәүеренә ярашлы поэтик саралар менән ижад итергә тотоноуҙары был осор поэзияның мөхәббәт кеүек иң боронғо темаларына тиклем үтеп инде.

Шул уҡ ваҡытта күп милләтле совет поэзияһында йыһанды үҙләштереү темаһына арналған шиғырҙар ғына түгел, поэмалар ҙа килеп тыуҙы. Муса Ғәлиҙең «Ҡояш еле» (1968) поэмаһы шундай әҫәрҙәрҙең береһе булды.

Был романтик поэма. Автор поэмаһын юҡҡа ғына тыуған ер, әсә, сал тарихты һаҡлаған тауҙар һәм ... ут образдарына мөрәжәғәт итеүҙән башламай. Бында, «иң боронғо» ут менән хәҙерге ут араһында эске бәйләнеште нығытып, автор бөгөнгө йыһан киңлегенә үтеп ингән ут-ҡеүәттең Шүлгән мәмерйәһендә кеше тормошона яҡтылыҡ һәм йылылыҡ биргән тәүге уттан башланыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала. Ғөмүмән, боронғоға ихтирам тойғоһоноң, тыуған ер тойғоһоноң һәм кешегә ғүмер бүләк итеүсе әсәгә мөхәббәт тойғоһоноң көслө булыуы М.Ғәли поэмаһының төп лейтмотивы булып тора. Кеше ҡеүәтләнә, йыһанды буйһондорорлоҡ көскә эйә була барған һайын ергә яҡыная бара, сөнки ул бар булмышы менән ерҙеке. Лирик герой шулай уҡ мөхәббәткә, ер ҡыҙының ҡайнар мөхәббәтенә табына. Октябрҙә яңы эраны, кешелектең азат таңын ҡаршылаған Аҡһаҡал алдында баш эйә, йыһанға осор алдынан уның фатихаһын ала:

Йыһанға тәү юл ярыусы итеп
Тоям мин Октябрь һалдатын,
Беләм шул уттарҙа сынығҡанын
Минең дә был осор ҡанаттың, —

ти. Поэмала шулай уҡ ваҡыт образы үҙәк образдарҙың береһе булып тора. Хәҙерге заманда ваҡыттың тығыҙланыуы, һәр секундына быуаттарҙы һыйҙыра алыу хаҡындағы фәлсәфәүи уйланыуҙар поэманың көсөргәнешен бермә-бер арттыра:

Әммә тетрәтермен һине, ваҡыт,
Кеше ғүмере түгел ирер шәм!

Күҙәнәктән йондоҙҙарға саҡлы
Миң атларға тейеш төшөнөп.
Шуға бәхете,
        йәш асыһы менән,
Ҡолауы һәм аяҡ баҫыуы менән
Ҡабатлана миндә кешелек!

Был юлдар тормошҡа диалектик ҡараш, тәрән тарихилыҡ тойғоһо менән һуғарылған, сөнки бөгөнгө кеше — ул быуындар сынйырының иң осондағы кеше, ул ваҡыт аяуһыҙлығын һәм рәхимһеҙлеген еңеп тормошто дауам иттерә, ваҡыт һәм арауыҡты еңеү тураһында хыяллана.

Старт!
Аҡбуҙаттай атылды карабым,
        утлы юл ярҙырып.
Минме киттем,
        Ерме осто,
Үҙемде ҡалдырып?!
Тик тойҙом секундтар эсендә
Ажар ут ҡайнауын,
Һәм өркөп был көстән ҡайҙалыр
        ваҡыттың тайғанын!

Лирик герой йыһан киңлегенә сыҡҡас, психофизиологик кисерештәрҙең ҡырҡа үҙгәреүен, донъя уға бөтөнләй яңыса асылыуын һүрәтләп кенә ҡалмай, уның Ергә һәм Тыуған илгә мөхәббәте тағы ла көсәйә. Ул инде Ерҙә ҡалған әсәһенә, аҡһаҡалға һөйгәненә йыһанды буйһондороусы кеше булып өндәшә, сал тарихҡа, Ерҙәге юғалған цивилизацияларға йыһан юғарылығынан баға. Йыһан киңлегендә гиҙеүсе лирик геройҙың ер тормошоноң именлеге тураһында ҡайғыртыуы ла тәбиғи, сөнки ул ергә совет кешеһе, гуманист булып ҡына түгел, йыртҡыс булып бағыусылар барлығын да иҫенән сығармай. Замандың был иң ҙур социаль-политик мәсьәләһенә лирик герой йыһан юғарылығынан тороп баһа бирә. Сөнки кеше үҙ ҡулындағы ут-ҡеүәтте кешелек донъяһының бәхете, уның хәүефһеҙлеге өсөн көрәшкә йүнәлдерелгәндә генә ысын ер кешеһе, ерҙең аҡыллы йән эйәһе булып ҡала ала. Был поэма ла, шағир һүҙҙәре менән әйткәндә: «Гуманитар фәндәр сүпкә сыға, техник фәндәр менә тәхеткә» (М.Кәримов) кеүек һүҙҙәр ҡуйырған, һүҙ сәнғәтенең мөмкинлектәренә икеләнеп ҡарауҙар йышая барған бер осорҙа, ошо бә-

хәстәргә бер яуап формаһындараҡ ижад ителде. Шуға ла М.Ғәли үҙенең әҫәрендә ФТР заманының иң алғы һыҙығына — йыһанды буйһондороу темаһына мөрәжәғәт итте һәм был теманы художестволы хәл итеүҙә социаль-әхлаҡ проблемаһын, ФТР заманы кешеһенең гармоник үҫеше мәсьәләһен беренсе планға сығарҙы, техник прогресс заманына тарихи-философик ҡараш ташларға ынтылды.

Поэма баҫылып сығыу менән әҙәби тәнҡиттә лә һәйбәт баһа алды. Ғ.Хөсәйенов «Поэтик йыһанға бер старт» тигән мәҡәләһендә әҫәргә тәрән анализ яһап, художестволы әҙәбиәт фәнни асыштарға йоғонто яһаған кеүек, был поэма фәндең поэзияға ыңғай йоғонтоһоноң бер үрнәге, ФТР заманына торошло әҫәр тип баһаланы.

ФТР, әлбиттә, йыһанды яулау менән генә сикләнеп ҡалмай. Ул тормоштоң һәр өлкәһенә: ҡалаға ла, ауылға ла, хеҙмәт процесына ла, кешенең йортона ла, рухи донъяһына ла үтеп инә. ФТР-ҙың кеше психологияһына, рухи донъяһына йоғонтоһо кешенең йыһанға тәү тапҡыр сығыуы ваҡиғаһы кеүек кинәт кенә түгел, сағыштырмаса яйлабыраҡ, һиҙҙермәйерәк тә бара. Был, социологтарҙың күҙәтеүҙәренсә, ҡала менән ауылдың үҙ-ара төрлө яҡлап яҡынайыуында ла, физик хеҙмәт менән аҡыл хеҙмәте араһында сиктәрҙең юйыла барыуында ла, массовый информация ҡорамалдарының ишәйеүе, кино, телевидениеның роле ҙурайыуҙа ла сағылыш ала.

Билдәле булыуынса, алтмышынсы йылдарҙа ауыл халҡының ҡалаға күпләп ағылыу осоро башланды. Фән һәм техника тантана иткән, көсөргәнешле тормош ҡайнаған ҡалаға килгән ауыл кешеһе, билдәле, ҡала тормошона еңел генә күнегеп китә алмай. Сөнки урбанизация көсәйә барған һайын ауыл кешеһенә ҡала шарттарына яраҡлашыу мәсьәләһе ҡатмарлана бара. Башҡорт поэзияһында, мәҫәлән, алтмышынсы йылдарҙың икенсе яртыһында һәм етмешенсе йылдарҙа, айырата йәш шағирҙарҙың ижадында, ауылды юҡһыныу, тәбиғәткә һыйыныу кеүек мотивтарҙың көсәйеп киткәнлеге күҙәтелә. Поэзиялағы был күренешкә бер яҡлы ғына ҡарарға ярамай, әлбиттә. Сөнки был осраҡта шағирҙарҙы ауыл идиллияһы ғына тартманы, күпселеге менән ауылдан сыҡҡан йәш шағирҙар ФТР-ҙың төрлө яҡ-

лап көслө йоғонтоһо арҡаһында кешеләр араһындағы ғәзәти бәйләнештәрзең ҡаҡшай төшөүенә, кеше күңеленең эмоциональ яҡтан ҡорғаҡһый башлауына ауыл кешеләренә хас булған тәбиғилекте, ихласлыҡты ҡаршы ҡуйырға тырыштылар. Һәр хәлдә Р.Бикбаев, Т.Йосопов, Ә.Әхмәтҡужин, И.Кинйәбулатов, Р.Шәкүровтарзың тыуған ауылға һәм тыуған ергә арналған шиғырзарында тыуған ауыл тәбиғилек һәм ихласлыҡ бишеге, сафлыҡ, изгелек төйәге булараҡ кәүзәләнеш алды. Шул уҡ ваҡытта поэзиялағы был мотивтарза ҡаланы ауылға ҡаршы ҡуйыу тенденцияһы тойолманы, киреһенсә, шағирзар ауылдың һәйбәт ғөрөф-ғәзәттәрен, ауыл кешеләренә хас булған ихласлыҡты ҡала шарттарында дауам иттереү кеүек мөһим проблеманы ҡеүәтләне. Ә был иһә хәзерге заманда ҡала менән ауылдың яҡынайыуы бер яҡлы ғына күренеш түгел, ҡала ауылға тәьҫир иткән кеүек, ауылдың да ҡалаға билдәле бер йоғонтоһо барлығы хаҡында һөйләй.

Фәнни-техник прогрестың кеше тормошона йоғонтоһо ҡатмарлы һәм нескә күренеш булған кеүек был процестың әзәбиәттә сағылышы ла бер яҡлы ғына түгел. Шуға ла ФТР-зың эземтәләре кеше психологияһына, әхлағына, рухи донъяһына ни рәүешле тәьҫир итеүен анализлау һәм әзәбиәттә сағылдырыу кеүек яуаплы эш языусынан интеллектуаль әзерлек, нескә күзәтеүсәнлек, һизгерлек һәм һәләт талап итә. ФТР һәм кеше проблемаһына арналған социологик тикшеренеүзәрзән, фән һәм техника өлкәһендәге яңы асыштарзан хәбәрзар булмаған языусы, әлбиттә, был проблеманы бөгөнгө юғарылыҡта күтәреп сыға алмай. «ФТР темаһы» М.Ғәли, Р.Ғарипов, Р.Бикбаев, Ә.Әхмәтҡужин кеүек интеллектуаль яҡтан әзерлекле шағирзарзың әҫәрзәрендә йышыраҡ күтәрелеүе быға асыҡ миҫал булып тора. Әсхәл Әхмәтҡужин «Тизлектәр» шиғырында:

Хатта инде ваҡыт үлсәүзәрен
Еткерәбез иң-иң ҡыҫҡаға:
Көндәр,
айзар... йәзрә кеүек оса,
Әйтерһең дә, йылдар ҡыҫҡара!

тип әйтә икән, быға бер зә ғәжәпләнерлек түгел. «Социологтарзың ентекләп иҫәпләп сығарыузарынса, — тип яза совет социологы Араб-Оғлы, — хәзерге эко-

номик яҡтан ныҡ үҫешкән илдәрҙә ғәҙәттәге «урта кеше» бер йыл эсендә быуат башында бөтә ғүмере буйы йөрөгәнгә ҡарағанда ла алыҫыраҡ юл үтә, ҙур-ҙур урындарҙа була, күберәк кеше менән аралаша, төрлө-төрлө тәьҫораттар һәм информациялар ала. Ә инде ғалимдарҙың, фәнни баҫмаларҙың, асыш һәм яңылыҡтарҙың 10—15 йыл эсендә ике тапҡыр артыу тенденцияһын иҫәпкә алғанда, хатта беҙҙең күҙ алдыбыҙҙа буласаҡ үҙгәрештәр рухын самалау ауыр: быуат аҙағына тиклем беҙҙең йылдам үҙгәрештәр менән тулы йылыбыҙ бер айға тиклем тығыҙланасаҡ»[231].

Заман ағышын һиҙгер тойоусы шағир шуға ла «Артмаһын тиҙлегем саманан» тип кенә йәшәргә теләмәй:

Замандың толпары бик етеҙ,
Йылдарҙы ул үтә көндән тиҙ...
Йөрәгем!
Ярһы!
Ян!
Саҡ осҡон —
Уй-хистәр бөркөлөп нур осһон! —

тип, үҙен-үҙе ашыҡтыра, ижадында замандың төҫ-биҙәктәрен, ярһыу һулышын сағылдырып ҡалырға ашҡына.

Һуңғы йылдарҙа ваҡыттың тығыҙланыуы, тормош ағышының көсәйеүе, көнкүрештең ҡалыплаша барыуы кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәргә кешенең күңел донъяһына ла ҙур йоғонто яһай. Билдәле был һынылышта ыңғай яҡтар күп булған кеүек, төрлө социологик тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, айырым зарарлы тенденциялар ҙа билдәләнә. Шуға күрә хәҙерге совет әҙәбиәтендә кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙең шартлылыҡҡа, иҫәп-хисапҡа ҡоролоу күренештәренә, әйбер ҡолона әйләнеүгә, күңел мещанлығына ҡаршы көрәш шаҡтай ҙур урын алып тора. Башҡорт яҙыусылары ла был мөһим проблеманан ситтә тормай. М.Кәрим, Н.Нәжми, М.Ғәли, Ғ.Рамазанов, Х.Ғиләжев, Т.Арслан, Р.Сафин, Р.Бикбаев, Ә.Атнабаев, М.Басыров, Т.Йосопов, Ә.Әхмәтҡужин һәм башҡаларҙың һуңғы йылдар-

[231] Өҙөк Борис Анашенковтың «Этот простой сложный человек» тигән китабынан алынды. — М., 1977, 238-се бит.

ҙа яҙылған шиғырҙарында кеше күңеленең сафлығын, ихласлыҡты һаҡларға тырышыу, күңел матурлығын йырлау үҙәк урында тора.

Был мәсьәлә, әлбиттә, күпселек шағирҙарҙың ижадында традицион формала хәл ителә. Әммә мәсьәләгә ФТР заманы үлсәме менән яҡын килеүсе шағирҙар ҙа юҡ түгел. Был йәһәттән Р.Бикбаевтың ижады айырылыбыраҡ тора. Уның кеше ярҙамына мохтажлығы йылдан-йыл арта барған тәбиғәттең, үҙәк өҙгөс ялбарыу тауышы булып ишетелгән «SOS», кешенең күңел донъяһы ярлыланыуға хәүефләнеү һәм борсолоу тойғоһо менән яҙылған «Йән серҙәшкә ҡайсаҡ шундай ас мин...» тигән шиғырҙары тап бына шундай, ФТР-ҙың тәбиғәткә һәм кешенең рухи донъяһына киҫкен йоғонтоһон тәрән тойоп ижад ителгән әҫәрҙәр булды.

Ғөмүмән, ФТР заманында тәбиғәтте һаҡлау кешелек донъяһы алдында торған иң ҙур һәм мөһим проблемаларҙың береһе булып тора. Сөнки ФТР, кешенең тәбиғәтте буйһондороу мөмкинлеген көсәйтеү менән бергә, һаҡһыҙ һәм самаһыҙ эш иткәндә, кеше менән тәбиғәт араһындағы гармонияны боҙоуы, кеше өсөн икмәктәй мөһим булған һауаның, һыуҙың ағыуланыуына алып килеүе ихтимал. Был күренеш айырата фәнни-техник прогресты, тәбиғәт менән иҫәпләшмәйенсә, ҡырағайҙарса тормошҡа ашырыусы капиталистик монополияларға хас.

Беҙҙә атмосфераны, һыу, урман байлыҡтарын, ғөмүмән, йәнле тәбиғәтте һаҡлау өсөн ил эсендә генә түгел, бәлки бөтә донъя күләмендә етди көрәш алып барыла. Атмосфераның һәм тәбиғәттең сафлығын һаҡлау буйынса һуңғы йылдарҙа өлгәшелгән бөтә донъя әһәмиәтендәге халыҡ-ара килешеүҙәр, илебеҙҙә тәбиғәтте һаҡлау тураһында СССР Юғары Советы Закондарын боҙоуға ҡаршы эҙмә-эҙлекле көрәш быға асыҡ миҫал булып тора.

Әлбиттә, был мөһим эштән әҙәбиәт тә ситтә тора алмай. Тәбиғәтте һаҡлау темаһы хәҙерге көндә башҡорт әҙәбиәтенең бөтә жанрҙарына үтеп инде. Хәҙерге көндә башҡорт поэзияһында был темаға яҙмаған бер генә шағирҙы ла осратып булмай.

Башҡорт прозаиктары ла «ФТР темаһына» тап бына ошо тәбиғәтте һаҡлау проблемаһы аша үтеп инә башланылар. Ҙур прозала был теманы, йәғни тәбиғәтте

һаҡлау проблемаһын, тәү башлап күтәреүсе Ноғман Мусин булды. Мин бында «Мәңгелек урман» романының икенсе китабын күҙ уңында тотам. Романдың беренсе китабында башҡорт урмандарын ҡырағайҙарса ҡырыусы милли байҙарға һәм рус промышленниктарына ҡаршы көрәш синфи көрәш проблемаһы менән тығыҙ бәйләнештә күтәрелһә, икенсе китапта хәҙерге фән һәм техника заманында тәбиғәтте һаҡлау, урман хужалығын, фән ҡаҙаныштарына таянып, ғилми нигеҙҙә комплекслы алып барыу үҙәк проблема булараҡ ҡуйыла. Яҙыусының төп уңышы шунда: ул кешенең тәбиғәткә мөнәсәбәтен рухи-әхлаҡ проблемаһы итеп ҡуя. Фәнни-техник прогресс заманында бының уғата киҫкен проблема икәнлеген һыҙыҡ өҫтөнә ала. Урман — ул ил, халыҡ байлығы, ләкин ул бөтмәҫ байлыҡ түгел. Урман ул материаль байлыҡ ҡына түгел, кешенең һәм башҡа йән эйәләренең йәшәү сығанағы. Урмандар аяуһыҙ ҡырыла икән, был һауаның насарланыуына ла, һыуҙарҙың кәмеүенә лә, үҫемлектәр донъяһындағы үҙ-ара мөнәсәбәттең, эске гармонияның емерелеүенә лә ҙур, һәләкәтле йоғонто яһай. Тәбиғәтте бындай һәләкәттән тик уға кешеләрсә мөнәсәбәт, ныҡлы фәнни нигеҙгә ҡоролған, культуралы мөнәсәбәт менән генә ҡотҡарып ҡалырға мөмкин. Романда Ғилман Төлкөсурин, урман хужалығы министры Моратов, вольер эшсеһе Ишмырҙа, райсовет председателе Юлдашбаев, бына ошоно тәрән аңлап, тәбиғәтте һаҡлау юлына аяҡ баҫҡан кешеләр. Романда персонаждарҙың характерҙары ер күрке тәбиғәткә, хайуандар донъяһына ниндәй мәнфәғәттәрҙән сығып ҡарауҙарында асыла. Әйтәйек, һунарсылар бригадаһының бригадиры Мырҙабай тәбиғәткә тик үҙенең шәхси мәнфәғәттәренән генә сығып ҡараһа һәм нисек булһа ла, ата-бабаларынан килгән ҡомһоҙлоҡ ғәҙәтен ҡыуып, байлыҡ туплау яғын ҡайырһа, леспромхоз директоры Козин урманды һаҡлау, үҫтереү, тәбиғәттәге эске гармонияны боҙоуға ҡаршы көрәшкә ҡарағанда, урман ҡырҡтырыу, таҡта ярҙырыу һ.б. шундай хужалыҡ пландарын үтәүҙе төп маҡсат итеп ҡуя. Ул урманды һаҡлау киләсәк быуын өсөн мөһим нәмә икәнлеген бөтә рухы менән аңлауҙан шаҡтай алыҫ. Хужалыҡ планын үтәп сығыу менән яҡшатланыу, үҙ карьераһын теләһә ниндәй юлдар менән булһа ла һаҡлап ҡалырға тырышыу — уның төп маҡсаты. Өҫтәүенә, ул бик хәй-

ләкәр кеше. Кәрәк ваҡытта, хужалыҡ итеү тәртиптәрен ҡырҡа боҙоп булһа ла, колхоздарға ярҙам итеп, район етәкселәре алдында абруйлы булып күренергә тырыша. Урман хужалығы министры Моратовтың Козин етәкселек иткән леспромхозды урман хужалығын комплекслы алып барыу эшен һынап ҡарау өсөн база итеп файҙаланырға теләүенә лә ул аҫтыртын рәүештә ҡаршы сығырға тырыша. Лесничий Ғилман Төлкөсуринды Моратов идеяларын яҡлап сыҡҡанлығы өсөн күрә алмай. Йәғни үҙенең ғәҙәтләнгән тормош ағышын, етәкселек итеү стилен боҙмаҫ, тыныс ҡына йәшәр өсөн юғарынан килгән яңылыҡты ла, түбәндән күтәрелгән инициативаны ла башта уҡ баҫып алырға тырыша. Йыл һайын йәшереп болан атып ашаған, урлап урман киҫкән Мырҙабайҙы штраф һалып йәки судҡа биреп аҡылға ултыртырға мөмкин булһа ла, Козин кеүек етәкселәр менән эште былай еңел генә хәл итеп булмай. Тәбиғәтте һаҡлау кеүек ауыр мәсьәләне хәл иткәндә тап бына шундай «етәкселәр» йәмғиәткә ҙур зыян килтерәләр, план артына йәшеренеп, кеше күңеленә һәм тәбиғәткә төҙәлмәҫлек яра һалалар. Производствоның тәбиғәтте ҡыҫтауы арта барған ФТР заманында Козин кеүек типтарҙың хужалыҡ менән етәкселек итергә теләктәре ҙур булһа ла, мораль хоҡуҡтары юҡ. Заман былай типтарға ҡаршы киҫкен көрәште талап итә. Минеңсә, яҙыусы романда үткәргән төп фекерҙәрҙең береһе ошонда.

Тәбиғәткә ҡарата ике төрлө ҡараш хәҙерге заманда ғына килеп тыуған нәмә түгел. Мырҙабайға потребителлек психологияһы олатаһы Уйылдан ҡарттарҙан йоғоп ҡалһа, Төлкөсуриндар — нәҫеле менән тәбиғәт яҡлы кешеләр. Ишмырҙа тәбиғәтте тәбиғәт балаһы булып яратһа, һәм быға ул ата-олаталарынан өйрәнһә, Ғилман ата-бабаларының һәйбәт традицияларын дауам итеү менән генә сикләнеп ҡалмай. Ғилман образында Н.Мусин күңеле менән халыҡтың изге ғөрөф-ғәҙәттәренә тоғро булып ҡалған, был изгелек фән һәм культура нуры менән нурланған яңы кешене — милли интеллигенция вәкилен кәүҙәләндерә. Ғөмүмән, ауылға фән һәм культура ҡаҙаныштарының һаман нығыраҡ үтеп инеүе, бөгөнгө ауыл халҡы ҙур рухи һынылыштар аша тәбиғилек менән культуралылыҡты синтезлауға табан барыуы романда ярайһы кәүҙәләнеш ала. Был мәсьәлә браконь-

ерҙарға ҡаршы көрәш ваҡытында һаҡһыҙлыҡ күрһәтеп, ғәйепһеҙҙән ете йыл ултырып ҡайтып та үҙенең тәбиғи кешелек сифаттарын һаҡлап ҡалған Ишмырҙа менән культуралы ғаиләлә тәрбиәләнгән һәм юғары белемле ҡала ҡыҙы Фәриҙәнең үҙ-ара мөнәсәбәттәрендә, бер-береһенә ғашиҡ булып, өйләнешеүҙәрендә лә художестволы кәүҙәләнеш ала.

Фәнни-техник прогресс заманында тәбиғәтте һаҡлау дәүләт әһәмиәтендәге мөһим проблема булараҡ ҡуйылыуы йәһәтенән Булат Рафиҡовтың «Тауҙарҙа ҡар иртә ята», Мәрйәм Бураҡаеваның «Шишмә» повестары һуңғы йылдарҙа ижад ителгән уңышлы әҫәрҙәр булды. Н.Мусиндың романында был проблема тәбиғәтте һаҡлауға туранан-тура ҡатнашлығы булған, тәбиғәтте һаҡлау төп бурыс булып торған урман хужалығы хеҙмәткәрҙәренең эшмәкәрлегенә бәйләнештә күтәрелһә, Б.Рафиҡов менән М.Бураҡаеваның әҫәрҙәрендә был мәсьәлә фәнни-техник прогресты туранан-тура тормошҡа ашырыусы тимер юл төҙөүселәр менән ГРЭС хеҙмәткәрҙәренең эш-ҡылыҡтары менән тығыҙ бәйләнештә ҡуйыла.

«Тауҙарҙа ҡар иртә ята» повесындағы Белорет — Ҡарлыман тимер юлы төҙөүселәрҙең Бөтә Союз удар комсомол штабы начальнигының урынбаҫары Геннадий Моргуновтың да, төҙөлөшкә эшкә килгән линия механигы Миҙхәт Байтуриндың да төп бурыстары тимер юл төҙөү. Улар дәүләт әһәмиәтендәге был тимер юлды раҫланған проект буйынса үҙ ваҡытында сафҡа индереү өсөн көрәшергә бурыслылар. Шуға күрә уларға төҙөлөш барышында урмандарҙың, тауҙарҙың юҡҡа сығыуына, төҙөлөш поезы начальнигы Картавин кеүек, тәбиғи бер эш итеп, ҡул һелтәп ҡарарға ла нигеҙ бар. Һәм повестың башында тимер юл үтәсәк ауылдарҙың халҡы Сейәтауҙы һаҡлап ҡалырға тырышып йөрөүҙәре уларға көлкө бер эш һымаҡ тойола. Тәбиғәткә ҡаршы рәхимһеҙлектең бер миҫалы итеп, Сейәтауҙы шартлатыу ваҡиғаһын күрһәтеү өсөн, балаларҙы йыйып алып килгән ауыл уҡытыусыһы Байтурин да тәүҙә уларға аҡылдан яҙған кеше булып күренә. Моргунов уҡытыусы Байтуриндың был эшен ерле халыҡты төҙөүселәргә ҡаршы ҡуйырға маташыуы тип ҡабул итә. Әммә Геннадий Моргунов та, Миҙхәт Байтурин да үҙҙәренең был хатаһын бик тиҙ аңлап алалар. Проекттан бер

аҙым да ситкә китергә теләмәгән Картавиндың оторо ҡаршылыҡ күрһәтеүенә ҡарамаҫтан, Геннадий Моргунов менән Миҙхәт Байтурин, ерле халыҡтың һүҙенә ҡолаҡ һалып, тәбиғәтте һаҡлау буйынса улар күтәреп сыҡҡан инициативаны яҡлау юлына баҫалар. Улар урындағы халыҡ менән тығыҙ мөнәсәбәткә инеп, тимер юл үтәсәк трасса буйынса сәйәхәткә сығалар, тирә-яҡтың тәбиғәтен ныҡлап өйрәнә башлайҙар. Тәбиғәт ҡомартҡыларын, минераль шишмәләрҙе һаҡлап алып ҡалыу өсөн төрлө ойошмаларға, етәксе органдарға мөрәжәғәт итәләр. Уҡытыусы Байтурин менән өсәүләп өлкә газетаһында тимер юл төҙөү һәм был районның тәбиғәтен һаҡлау, тәбиғи байлыҡтарын рациональ файҙаланыу мәсьәләһен күтәргән мәҡәлә менән сығыш яһайҙар. Был проблема буйынса фәнни-практик конференция ойоштороу инициативаһын башлап ебәрәләр. Шул рәүешле повеста тәбиғәтте һаҡлау тимер юл төҙөүселәрҙең алдында торған үҙәк проблемаларҙың береһенә әйләнә. Төп геройҙарҙың тәбиғәткә мөнәсәбәтендә рухи-әхлаҡ һәм граждәнлыҡ йөҙө асыҡлана. Повеста шулай уҡ Б.Рафиҡов тәбиғәтте һаҡлау мәсьәләһе шаҡтай ҡатмарлы, әле күп яҡтары менән хәл итеүҙе талап иткән проблема икәнлеген һыҙыҡ өҫтөнә ала. Повестағы түбәндәге өҙөктән дә был бик асыҡ аңлашыла:

«Моргунов, тимер юл үтәсәк урындарҙа тәбиғәтте һаҡлауға арналған фәнни кәңәшмәнең Белоретта буласағын, унда кемдәр киләсәген Картавинға әйтергәмеюҡмы, тип икеләнеп барҙы. Уҡытыусы Байтуриндың да унда доклад менән сығыш яһаясағына нисек ҡарар? Ғәҙәтенсә, туҙып китмәҫме?.. Эйе, тәбиғәтте һаҡлау, кешелек донъяһының башҡа эштәре кеүек, яйға һалынмаған шул, тип Геннадий уйҙарына икенсе йүнәлеш бирҙе. Оят эш башҡараһыңмы ни, ҡыҙарырға, йәбер һүҙҙәр ишетергә лә тура килә. Бына ошо хәл күптәрҙең күңелендә икеләнеү, ҡәнәғәтһеҙлек тойғоһо тыуҙыра ла инде. Шул кәртәне аша атлап сыҡмайынса, тәбиғәтте һаҡлау өлкәһендә ныҡлы алға китеш булмаясаҡ.

Шуныһы ғәрләндерә, тип уйланы Моргунов, теләһә кем беҙҙе техник прогресс дошмандары, эшкә аяҡ салыусылар тип атай ала, ә беҙ уларға тейешенсә отпор биреү урынына төрлө инстанцияларға аңлатмалар яҙырға, төрлөсә аҡланырға мәжбүр булабыҙ. Ил ҡеуәтен арттырыу менән бергә тыуған ерҙең матурлығын

да һаҡлап ҡалырға тырышыуыбыҙҙы күптәр күрергә теләмәй...»

Ғөмүмән, повеста Б.Рафиҡов геройҙарының рухи донъяһын, әхлаҡ йөҙөн һәм тормош позицияһын һүрәтләүҙә бөгөнгө заман, ФТР заманы күҙлегенән сығып эш итә. Ул етеҙ ағышлы, көсөргәнешле ФТР заманы килтереп тыуҙырған психологик атмосфераны шаҡтай оҫта кәүҙәләндерә. Повеста хәҙерге заман кешеһенең гармоник үҫеше, сәнғәттең тормош менән бәйләнеше, ҡала менән ауыл араһындағы үҙ-ара бәйләнештең көсәйеүе, быныӊ ыңғай һәм кире яҡтары кеүек мөһим мәсьәләләр ҙә художестволы кәүҙәләнеш ала.

Автор әҫәрҙә уҡытыусы Байтурин менән механик Байтуринды йәнәшә ҡуйып һүрәтләй. Әҫәрҙең аҙағында Миҙхәт Байтурин үҙенең аҙашының юлына баҫа һәм уның кеүек, биология факультетын тамамлап, бөтә тормошон тәбиғәтте һаҡлау эшенә бағышларға тигән ҡарарға килә. Тимәк, ҡала ауылға ғына түгел, ауыл да үҙенең тәбиғилеге, һәйбәт ғөрөф-ғәҙәттәре менән ҡала кешеһенә йоғонто яһай ала. Ләкин был мөһим проблема повеста тулыһынса, төрлө яҡлап хәл ителеп бөтмәй, тоҫмалланып ҡына ҡала. Миҙхәт Байтуриндың шундай ҡарарға килеүе уҡытыусы Байтуриндың йоғонтоһонанмы, әллә тәбиғәткә яҡынайыу, тәбиғәтте һаҡлау юлына баҫыу кешенең үҙендәге тәбиғи сифаттарҙы уятыуға һәм көсәйтеүгә килтерәме? Үкенескә ҡаршы, повеста бына ошо мөһим художество-эстетик проблема етерлек дәрәжәлә асылмай ҡала.

Повеста Сейәтауҙы шартлатҡанда инәһенән айырылып, бер сигнальщик тарафынан ҡотҡарып алып ҡалынған болан балаһы — Бәстәкәй образына ла ярайһы урын бирелә. Был образ әҫәрҙең идея-эстетик йөкмәткеһен асыуҙа, тәбиғәтте, уның гүзәллеген кәүҙәләндереүсе, шул уҡ ваҡытта кеше ярҙамына мохтаж образ булараҡ, мөһим урын тота.

Әгәр ҙә кеше үҙен уратып алған тәбиғәткә, уның йән эйәләренә иғтибарһыҙ, рәхимһеҙ булһа, беҙҙең тормошобоҙ ни дәрәжәлә ярлы булыр ине. Шуға ла автор әҫәрҙең аҙағында матурлыҡ символы Бәстәкәй менән уҡыусыны тағы бер ҡабат осраштыра. Ул тимер юлынан алыҫ булмаған ҡая башында бронзанан ҡойолған һын һымаҡ ҡымшанмай ҙа баҫып тора. Моргунов менән Байтурин уны танып, машиналарынан төшөп ҡа-

рап ҡалалар. Кеше тарафынан һаҡлап ҡалынған тәбиғәт балаһы, әйтерһең, үҙенең бөтә гүзәллеге, хужаларса, ҡурҡыуһыҙ баҫып торошо менән мәрхәмәтле кешеләргә рәхмәт әйтә...

Тәбиғәттең сафлығы һәм киләсәге өсөн көрәш фәнни-техник прогресс көсәйгән һайын ҡатмарлана барыуы, кешенең тәбиғәт алдында яуаплылығы артыуын замандың киҫкен проблемаһы итеп күтәреүе йәһәтенән М.Бураҡаеваның «Шишмә» повесын да авторҙың ғына түгел, дөйөм башҡорт әҙәбиәтенең уңышы итеп ҡарарға нигеҙ бар. М.Бураҡаева үҙенең тәүге «Һүнмәҫ нурҙар» повесында ла, ғалимдар тормошона ярайһы тәрән үтеп инеп, беҙҙең башҡорт әҙәбиәтендә бөтөнләй тип әйтерлек сағылыш алмаған өлкәгә шаҡтай уңышлы разведка яһағайны.

«Шишмә» повесы авторҙың тәүге повесынан проблеманың үткерлеге менән генә түгел, образдарҙың шаҡтай тулы кәүҙәләнеше, характерҙар үҫтерелешен психологик мотивировкалау нигеҙле булыуы менән айырылып тора. Повестың төп конфликты Ҡамышлы ГРЭС-ын яғыулыҡ менән тәьмин итеүсе мазут заводының ҡалдыҡ һыуҙарын тәрән ер ҡатламдарына ҡыуҙырыу практикаһына ҡаршы көрәш тирәһендә бара.

Ҡалдыҡ һыуҙарҙы ер ҡатламдарына ҡыуҙырыу саф һыу сығанаҡтары өсөн зарарлы булыуын фәнни әҙәбиәттән төпсөнөп белеп, был мәсьәләне беренсе булып быраулау мастеры Морат Арыҫланов күтәреп сыға. Ҡалдыҡ һыуҙарҙы ер аҫтына ҡыуҙырыу эше тап уның үҙ бригадаһына йөкләтелеүе, Морат үҙ ҡулы менән эшләгән эштең тәбиғәт һәм киләсәк быуын алдында төҙәтеп булмаҫлыҡ енәйәт икәнлеген тәрән кисереү конфликтты бермә-бер көсәйтә. Ул ҡалдыҡ һыуҙарҙы ер аҫтына ҡыуҙырыу Азадовский кеүек күренекле ғалимдарҙың тәҡдиме менән эшләнеүен, был өлкәлә әле фәндә ҡыҙыу-ҡыҙыу бәхәстәр барыуын да яҡшы аңлай. Әммә ҡалдыҡ һыуҙарҙың ҡасан да булһа ер өҫтөнә кире бәреп сығыу, саф һыуҙарҙы бысратыу ҡурҡынысы торғанлығы бәхәсһеҙ. Шуға күрә ул геолог Инна Азадовская менән мазут эшләү заводының баш инженеры Мансуровтарға ҡырҡа ҡаршы сыға, тәбиғи байлыҡтарҙы ныҡлы фәнни нигеҙҙә файҙаланыу идеяһын яҡлаусы ғалим Алмазовҡа хат яҙа, мәсьәләне партияның ҡала комитеты алдына ҡуя. Ғөмүмән, Морат

Арыҫланов бөгөнгө көн менән генә йәшәмәй, тәбиғәттең, тимәк, киләсәк быуындарҙың яҙмышы тураһында тәрән уйланыусы, актив граждандыҡ позицияһында тороусы яңы кеше булараҡ кәүҙәләнә. Уның йәш ғалим Инна Родионовна Азадовскаяға: «Мин тәбиғәтте — Әсә, ә фәнни-техник прогресты уның ир еткән Улы һымаҡ күҙ алдына килтерәм... Әйтерһең, Тәбиғәт-әсә Улын үҫтергән, буй еткергән, тәрбиәләгән дә хәҙер уның ҡулына ҡарап ҡалған. Ҡарыуы ҡайтҡан Әсә Улынан шәфҡәт көтә. Әлегә Әсә үҙе лә көслө, ләкин фәнни-техник прогресс һаман алға бара һәм ҡайһы саҡта аяуһыҙ ҙа», — тигән һүҙҙәрендә ҙур дөрөҫлөк бар. Сөнки бындай шарттарҙа тәбиғәтте вайымһыҙ кешеләр түгел, ә актив позицияла торған кешеләр генә һаҡлап алып ҡаласаҡ.

Повеста шулай уҡ төп проблемаға бәйләнешле рәүештә кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙең тәбиғилеген, эскерһеҙлекте, кешенең күңел матурлығын һаҡлау кеүек мөһим мәсьәлә ҡуйыла.

Әҫәрҙең «Шишмә» тип аталыуында ла тәрән мәғәнә бар. Беренсенән, бына бер нисә йыл элек шылтырап ағып ятҡан шишмәнең ҡороу, хатта уның урынынан ер аҫтына ҡыуҙырылған бысраҡ һыуҙың бәреп сығыу күренешен һүрәтләү менән автор ФТР заманында тәбиғәтте һаҡлау мәсьәләһе ни дәрәжәлә мөһим икәнлеген образлы кәүҙәләндерһә, икенсенән, Әминә Харисовна кеүек геройҙарҙың ошо шишмәгә бәйләнешле йәшлек хәтирәләренә әленән-әле әйләнеп ҡайтыуы, шишмәләй саф тәүге мөхәббәтенә тоғро ҡалыуы һ.б. яҙыусының кеше күңеленең сафлығын, халыҡтың быуаттар буйы туплана килгән һәйбәт йолаларын һаҡлау кәрәклеге тураһындағы уйҙарына барып тоташа. Был фекерен ул тыуған төйәгенең йәмһеҙләнә, халыҡтың ҡайһы бер ғәҙәттәре онотола барыуын тәрән кисергән, үҙендә халҡыбыҙҙың иң һәйбәт сифаттарын кәүҙәләндергән Ғимран ҡарт образы аша ла уҙғара. Әҫәрҙә авторҙың мөхәббәт темаһын романтик пландараҡ ҡуйырға ынтылыш яһауы ла ошоноң менән бәйле булһа кәрәк.

Был мәҡәләлә хәҙерге заманда көнүҙәк проблемаларҙың береһе булып торған фәнни-техник прогресс һәм әҙәбиәт тигән ҙур мәсьәләнең айырым яҡтары хаҡында ғына һүҙ йөрөтөлдө. Сөнки был ҙур, күп яҡлы проблеманы бер мәҡәләлә генә яҡтыртып бөтөү мөм-

кин түгел. Артабан яҙыусыларыбыҙ алдында фәнни-техник прогрестың беҙҙең тормошобоҙға, рухи донъябыҙға, көнкүрешебеҙгә ни рәүешле йоғонто яһауын тәрәнерәк анализлау, шунан сығып ыңғай яҡтарына булышлыҡ итеү, кире яҡтарынан аралау бурысы торһа, тәнҡитселәр алдында ФТР-ҙың дөйөм әҙәби процесҡа ни рәүешле тәьҫир итеүен, фәнни фекер үҫешенең художестволы, образлы фекер үҫеше менән ниндәй мөнәсәбәттә булыуы һ. б. шундай көнүҙәк мәсьәләләрҙе ентекле өйрәнеү бурысы тора.

## ӘҘӘБИ ТӘНҠИТТЕҢ МЕТОДОЛОГИЯҺЫ ҺӘМ МЕТОДИКАҺЫ МӘСЬӘЛӘЛӘРЕ

КПСС Үҙәк Комитеты, әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендә ленинсы политиканы эҙмә-эҙлекле үткәрә барып, совет әҙәбиәтен артабан үҫтереү тураһында даими хәстәрлек күрә. Әҙәбиәт һәм сәнғәттең хәҙерге дәүер алдында торған төп бурыстары КПСС-тың XXIV съезында тәрән яҡтыртылғайны. Партия Үҙәк Комитетының 1972 йылда ҡабул иткән «Әҙәби-сәнғәт тәнҡите тураһында»ғы Ҡарары был бурыстарҙы конкрет тормошҡа ашырыу юлында мөһим бер документҡа әйләнде.

«Тәнҡиттең бурысы, — тип һыҙыҡ өҫтөнә алына Ҡарарҙа, хәҙерге художество процесының күренештәренә, тенденцияларына һәм законсалыҡтарына тәрән анализ яһауҙан, ленинсы партиялыҡ һәм халыҡсанлыҡ принциптарын нығытыуҙы бөтә яҡлапярҙам итеүҙән, совет сәнғәтенең юғары идея-эстетика камиле өсөн көрәшеүҙән, буржуаз идеологияға ҡаршы эҙмә-эҙлекле сығыш яһауҙан тора. Әҙәби-сәнғәт тәнҡите художниктың идея кругозорын киңәйтеүгә һәм уның оҫталығын камиллаштырыуға булышлыҡ итергә тейеш. Марксистик-ленинсы эстетика традицияларын үҫтерә барып, совет әҙәби-сәнғәт тәнҡите идея яғынан баһаның теүәллеген, социаль анализ тәрәнлеген эстетик талапсанлыҡ, талантҡа, емешле ижади эҙләнеүҙәргә һаҡсыл мөнәсәбәт менән ҡушып алып барырға бурыслы»[232].

Был — тәнҡиттең йомшаҡлығынан килеп сыҡҡан бер яҡлы талап ҡына түгел ине, бының бер башы тәнҡит елкәһенә төшһә, үҙ сиратында әҙәби тәнҡит ошондай уҡ юғары талаптарҙы әҙәбиәткә ҡуйырға бурыслы.

[232] «Ағиҙел» журналы. 1972, 4-се һан, 4-5-се биттәр.

Сөнки тәнҡиттең төп маҡсаты әҙәбиәттең идея-эстетик кимәлен күтәреү өсөн көрәш, әҙәби тәнҡит әҙәбиәттең үҫешенә булышлыҡ итеү, уға йүнәлеш биреү менән бергә, көслө идеологик ҡорал булараҡ, алдынғы ижтимағи фекерҙе формалаштырыу эшенә ҙур өлөш индерә. Тәнҡитсе айырым әҫәр тураһында һүҙ йөрөтәме, йәки дөйөм әҙәби процесс тураһында һөйләйме, әҙәби әҫәрҙә иң элек идея-эстетик йөкмәткеһенә, совет кешеләрен коммунистик идеялдар юғарылығында тәрбиәләү эшенә индергән өлөшөнә ҡарап баһалай. «Теләһә ниндәй әҫәрҙең идея йүнәлеше, — тип әйтелә Л.И.Брежневтың КПСС-тың XXV съезында һөйләгән отчет докладында, — әлбиттә, уның ижтимағи әһәмиәтен баһалауҙың төп критерийы булды һәм булып ҡала»[233]. Шул уҡ ваҡытта тәнҡитсе замандың социаль-экономик мәсьәләләре, рухи тормошо, коммунистик әхлаҡ нормаларының көнүҙәк проблемаларын конкрет әҫәргә анализ биреү уңайы менән дә, айырым рәүештә лә күтәреп йәмәғәтселек хөкөмөнә ҡуя ала. Үкенескә ҡаршы, беҙҙең әҙәби тәнҡит әлегә бер яҡлыраҡ үҫеш ала килде. Беҙҙең тәнҡитселәр үҙҙәренең мәҡәләләрендә нигеҙҙә әҙәби әҫәр һәм унда күтәрелгән проблемалар, әҫәрҙең художество үҙенсәлектәре хаҡында ғына һүҙ йөрөтәләр. Тәнҡитсе тормошҡа үҙенең актив мөнәсәбәтен белдергән осраҡтарҙа ла, бындай «лирик сигенеүҙәр» теге йәки был әҫәрҙә ҡуйылған мәсьәләләрҙе яҡтыртыу уңайы менән генә яһала.

Ә инде тормошта өлгөрөп еткән, ләкин яҙыусылар үҙҙәренең әҫәрҙәрендә яҡтыртырға баҙмайыраҡ торған көнүҙәк проблемаларҙы күтәреп сыҡҡан һәм яҙыусыларҙы үҙ артынан әйҙәгән, киң йәмәғәтселек фекерен уятҡан мәҡәләләр беҙҙең тәнҡитселәр тарафынан бик һирәк яҙылалар. Был беҙҙең әҙәби тәнҡиттең тормош менән бәйләнеше йомшағыраҡ булыуы, тәнҡитселәр, нигеҙҙә, әҙәби материал менән генә сикләнеп, тормоштоң үҙен ентекле өйрәнмәүе хаҡында һөйләй. Тәнҡитсегә тормошто яҡшы белеү, тормоштағы ыңғай йәки зарарлы тенденцияларҙы тотоп алыу һәм шулар ха-

---

[233] Л.И.Брежнев. КПСС Үҙәк Комитетының отчеты, эске һәм тышҡы политика өлкәһендә партияның нәүбәттәге бурыстары. Өфө, 1976, 101-се бит.

ҡында иркен фекер йөрөтөү бөгөнгө әҙәби процесҡа тәрәнерәк үтеп инеү өсөн дә бик кәрәк нәмә. Сөнки тәнҡитсе художестволы әҙәбиәттә күтәрелгән төп проблемалар, әҙәбиәттең төп геройы булған бөгөнгө заман кешеһенең рухи донъяһындағы һынылыштар тураһында яҙыусы менән типә-тиң бәхәс итергә, әҫәрҙең уңышлы йәки уңышһыҙ яҡтары хаҡында һөйләгәндә, художестволылыҡ критерийҙарына таянып ҡына түгел, бәлки, үҙенең тормош тәжрибәһенә лә таянып һүҙ йөрөтөргә тейеш.

Һәләтле тәнҡитсе булып өлгөрөп етеү өсөн, тормошто яҡшы белеү бер шарт булһа, әҙәби әҙерлек, әҙәбиәт тарихын, теорияһын, марксистик-ленинса эстетика нигеҙҙәрен яҡшы белеү, улар хаҡында иркен фекер йөрөтөү, һәр мәсьәләгә үҙ ҡарашың булыу икенсе бер мөһим шарт булып тора. Әҙәби әҙерлек ул киң төшөнсә. Кеше нисек кенә тырыш һәм һәләтле булмаһын, кешелек донъяһы тыуҙырған әҙәби мираҫты үҙләштереп өлгөрә алмай. Быға бер нисә кеше ғүмере кәрәк булыр ине. Әммә тәнҡитсе үҙ халҡының әҙәби мираҫын һәм үҙ әҙәбиәте тығыҙ бәйләнешкә ингән туғандаш халыҡтар әҙәбиәтен, уларҙың ҡаҙаныштарын белмәй тороп, бөгөнгө әҙәби процесс тураһында нигеҙле фекер йөрөтә алмай. Шуның өсөн тәнҡитсе, замандан артта ҡалмайым тиһә, бөтә союз күләмендәге әҙәби процесты күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа, күп милләтле совет әҙәбиәтенең яңы ҡаҙаныштары, әҙәби-эстетик фекер үҫешендәге яңылыҡтар менән даими танышып барырға тейеш. Тәнҡитсенең дөйөм әҙәби әҙерлеге — милли әҙәбиәт күренештәрен киң контекста ҡарарға мөмкинлектәр аса, уның донъяға ҡарашын, әҙәби зауҡының кимәлен билдәләй. Шул уҡ ваҡытта беҙҙең заман махсуслашыу заманы икәнлеген дә оноторға ярамай. Был процесс әҙәбиәттә лә, әҙәби тәнҡит өлкәһендә лә бара. Хәҙерге көндә әҙәбиәтсе әҙәбиәттең теләһә ҡайһы мәсьәләһе хаҡында иркен фекер йөрөтөрлөк киң эрудициялы кеше булһа ла, ул дөйөм әҙәби процесты, бигерәк тә ил күләмендәге әҙәби процесты күҙәтеп барырға өлгөрә алмай. Сөнки хәҙер, берҙән, әҙәбиәт ҙурайһа, икенсенән, әҙәбиәт ғилемендә махсуслашыу көсәйеп, ул барған һайын тәрәнәйә һәм ҡатмарлана бара. Шуға күрә йәш тәнҡитсе, үҙенең әҙәби әҙерлеген һәм оҫталығын күтәреү өсөн, туҡтауһыҙ эшләү,

дөйөм әҙерлеген ныҡытыу менән бергә, баштан уҡ теге йәки был өлкәне һайлап алһа, шул рәүешле, әҙәбиәттең бер өлкәһен тәрәнерәк өйрәнеп, нигеҙҙә шул өлкәлә эшләһә, әҙәби-тәнҡит фекеренең үҫешенә ҙурыраҡ өлөш индерә ала. Беҙҙең әҙәбиәт ғилемендә был өлкәлә электән үк тәжрибә туплана килә. Илленсе йылдарҙың урталарына тиклем беҙҙең тәнҡитселәр, әҙәбиәттең бөтә жанрҙары тураһында ла яҙырға, дөйөм әҙәби процесты анализлап барырға тырышһалар, илленсе йылдарҙың икенсе яртыһынан әҙәбиәт ғилемендә һәм әҙәби тәнҡиттә специализация осоро башланды. Беҙҙең әҙәбиәт ғилемендә Ғ.Хөсәйенов, Ғ.Рамазанов, К.Әхмәтйәнов, Р.Бикбаевтар поэзияны, Ә.Вахитов, С.Сафуанов, Н.Зарипов, Р.Байымов, З.Нурғәлиндар прозаны, М.Ғәйнуллин, Ғ.Рамазанов, Һ.Сәйетовтар драматургияны өйрәнеү өлкәләрендә йәштәргә ҙур мәктәп булырҙай тәжрибә тупланылар. Бер жанрҙы өйрәнеү өлкәһендә даими эшләү, әҙәби тәнҡиттә бер жанр үҫешен ентекле күҙәтеп барыу әҙәбиәтсегә артабан күп йыллыҡ тикшеренеүҙәрен дөйөмләштереүгә ҙур мөмкинлек бирә. Бындай мөмкинлектәр әҙәбиәтсенең ижадын активлаштырыусы, уны алға әйҙәүсе мөһим бер фактор булып тора. Ғ.Хөсәйеновтың «Башҡорт поэзияһының үҫеү юлдары», М.Ғайнуллиндың «Ысынбарлыҡ. Конфликт. Характерҙар» тигән монографиялары уларҙың был өлкәләрҙә күп йыллыҡ хеҙмәттәренең һөҙөмтәһе булып килеп тыуҙылар. Әнүр Вахитов прозаның үҫешен өйрәнеүгә күп көс һалды. Юғарыла аталған монографиялар башҡорт әҙәбиәтенең төп жанрҙарының тарихи үҫешен тәүтапҡыр байҡап сығыусы хеҙмәт булыуҙары менән айырылып торалар. Хәҙер беҙҙең әҙәбиәт ғилеме үтелгән этапты ҡабатламай, йәғни теге йәки был әҙәби төрҙөң үҫеше мәсьәләләрен дөйөм тарихи планда өйрәнеүҙән теоретик һәм проблематик тикшеренеүҙәргә күсеү дәүерен кисерә. Рауил Бикбаевтың «Хәҙерге башҡорт поэзияһында философик лирика» тип аталған монографияһы, Ким Әхмәтйәновтың башҡорт поэзияһында образлылыҡтың үҫешен өйрәнеүгә арналған яңы хеҙмәте тап бына ошо яҡтары менән, мәсьәләне тарыраҡ алып проблематик һәм теоретик яҡтан тәрәнерәк итеп яҡтыртыуҙары менән уңышлылар.

Һуңғы йылдарҙа прозабыҙҙың айырым жанрҙары үҙенсәлектәрен һәм башҡа аспекттарын проблематик өйрәнеүгә арналған хеҙмәттәр ҙә тыуа башланы. Ғилемдар Рамазанов, мәҫәлән, «Башҡорт повесы» тигән монографияһында был жанрҙың үҫеше һәм формалашыуы мәсьәләләрен ентекле өйрәнеү менән бергә, уның эске тәбиғәтен теоретик яҡтан яҡтыртыуға ла ҙур өлөш индерҙе.

Роберт Байымовтың «Шаг в зрелость» тигән китабы ла шундай хеҙмәттәрҙең береһе. Тәнҡитсе был китабында утыҙынсы йылдар башҡорт прозаһында тарихилыҡ принцибының нығыныуы мәсьәләләрен ентекләп өйрәнгән. Был принциптың нығыныуы башҡорт әҙәбиәтендә социалистик реализм методының формалашыуында мөһим урын тотоуын билдәләгән.

Әҙәбиәт ғилемендә үҙ урынын тапҡан әҙерлекле тәнҡитселәрҙән шулай уҡ Рәиф Әмировты атап китеү урынлы булыр. Ул документаль жанрҙарҙы, очерктарҙы, иҫтәлектәрҙе һәм мемуарҙарҙы ентекләп өйрәнә. Был бик мөһим эш. Сөнки әҙәбиәт менән тормош араһында торған документаль жанрҙарҙа һәр замандың төп һыҙаттары кәүҙәләнә. Яҙыусылар тарафынан ижад ителгән очерктар һәм мемуарҙарҙа уларҙың тормошҡа актив мөнәсәбәттәре, ижтимағи һәм эстетик ҡараштары сағылыш ала. Документаль жанрҙар, айырата очерктар, шулай уҡ яҙыусыларға заман темаһын үҙләштереү юлында урап үткеһеҙ бер этап булып тора.

Шул уҡ ваҡытта беҙҙең проза тураһында теоретик һәм проблематик хеҙмәттәр бик аҙ яҙылыуын әйтеп үтергә кәрәк. Хикәйәләү оҫталығын, стиль үҙенсәлектәрен, традиция һәм яңылыҡ мәсьәләләрен күтәреп сығыусы махсус хеҙмәттәр бөтөнләй юҡ тип әйтерлек. Әлбиттә, көндәлек тәнҡиттә, күҙәтеү мәҡәләләрендә был мәсьәләләр тураһында һүҙ йөрөтөлә, әммә был мәҡәләләрҙәге һүҙ ыңғайында әйтелгән фекерҙәр, ҡыҙыҡлы күҙәтеүҙәр дөйөм фонда юғалып ҡалалар, әҙәби йәмғиәтселек араһында киң фекер уята алмайҙар. Һуңғы йылдарҙа беҙҙең әҙәбиәт ғилеменә Тимерғәле Килмөхәмәтов, Илдус Бүләков кеүек һәләтле йәштәр килде. Улар икеһе лә драматургия буйынса кандидатлыҡ диссертацияһы яҡланылар. И.Бүләков театр сәнғәтен дә яҡшы белә. Уның Башҡорт Академия драма театры, Сибай, Салауат ҡала театрҙары спектаклдәренә яҙған

рецензиялары драма әҫәрҙәрен постановкалары менән тығыҙ бәйләп анализларға һәләтле икәнлеген күрһәтеп тора. Т.Килмөхәмәтов драматургия белгесе булыу өҫтәүенә үҙе лә драма әҫәрҙәре яҙа. Ул үҙен М.Кәрим драмалары һәм трагедия жанры тураһындағы мәҡәләләре менән һәләтле тикшеренеүсе итеп танытты. Әммә улар үҙ мөмкинлектәрен тулыһынса асып еткермәйҙәр әле: белгестәр — һүлпәнлек, ә осраҡлы рецензенттар активлыҡ күрһәтә. Шуға күрә сәхнә әҫәрҙәрен баһалауҙа тотороҡлолоҡ юҡ, субъектив ҡараштарға ла юл ҡуйыла. Ҡайһы бер рецензияларҙа һүҙ спектакль тураһында барамы, әллә драма хаҡындамы икәнлеген айырып булмай. Әҙәбиәтсе иң элек әҙәби материалға — драма әҫәренә баһа бирһен ине. Ә драманың сәхнәлә кәүҙәләнешен баһалау театр белгестәре эше. Ләкин беҙҙә әлегә театраль тәнҡит профессиональ юғарылыҡта тормай. Унда схематизм, ҡалыплашҡан алымдар тулып ята. Шуға күрә беҙҙең сәхнәгә тормошсанлыҡ етешмәй. Ялған пафос, сентиментализм күренештәре йәшәп ята. Беҙҙең сәхнәлә артистарҙың байтағының телмәре халыҡ телмәренән художество көсө менән түгел, ә яһалма булыуы менән айырыла.

Драма әҫәренең, ғөмүмән, әҙәби әҫәрҙең ҡаҙанышын тик төрлө яҡлап анализлау юлы менән генә күрһәтергә мөмкин. Сөнки анализһыҙ баһа — дәлилһеҙ баһа. Әлбиттә анализ менән анализ араһында ла айырма юҡ түгел. Ҡайһы бер тәнҡитсе уртаса әйтерҙе лә бирелеп китеп анализлай ала, хатта шул юл менән әҫәрҙе бынамын тигән итеп күрһәтә. Әммә анализда дөйөм ҡабул ителгән тотороҡло система булмау сәбәпле, күп осраҡта әҫәрҙең йомшаҡ яҡтары асылмай ҡала. Шуның өсөн әҙәби әҫәрҙе анализлауҙың берҙәм методикаһы кәрәклеге мәсьәләһе килеп баҫа. Һәр әҫәрҙе баһалағанда тәнҡитсе бер нисә критерийҙы күҙ уңында тотһон ине.

Әйтәйек:

1. Әҫәрҙә күтәрелгән төп проблема ниҙән ғибәрәт, был проблема яңымы, әллә быға тиклем күтәрелгән мәсьәләме? Күтәрелгән булһа, ул башҡа яҙыусыларҙа нисек хәл ителгән? Был яҙыусы ниндәй яңылыҡтар өҫтәгән һәм нисек хәл итә.

2. Әҫәрҙәге конфликт мәсьәләһе. Конфликттың тормош менән нисбәте. Конфликттың сиселеше, хәл ителеше мәсьәләләре.

3. Төп персонаждар, уларҙың характерҙарының бирелеше, художество образы булараҡ кәүҙәләнеше, ыңғай һәм кире сифаттары. Яңы героймы был, әллә берәй әҙәби типтың варианты ғынамы? һ.б.

4. Әҫәрҙең художество ҡиммәте. Яҙыусы индивидуаллегенең кәүҙәләнеше. Тел һәм стиль мәсьәләләре. Образлылыҡ саралары. Алымдар төрлөлөгө, һүрәтләү манераһы, композицион үҙенсәлектәр һ.б.

Бына ошондай бер нисә аспекттан тороп ҡарамайынса, теге йәки был әҫәрҙең художество ҡиммәтен билдәләүе бик ҡыйын. Әлбиттә, һәр бер рецензияла әҫәрҙең бөтә компоненттары тураһында ентекле һөйләп тә булмай. Әммә тәнҡитсе әҫәргә дөйөм баһа биргәндә юғарыла күрһәтелгән мәсьәләләрҙән сығып эш итеү маҡсатҡа ярашлыраҡ булыуы шикһеҙ.

Ағымдағы әҙәби тәнҡиттә тотороҡло критерийҙарҙың булмауы, минеңсә, тәнҡиттең үҙ методикаһы ентекле өйрәнелмәүенә, уның жанр үҙенсәлектәрен асыҡлаусы хеҙмәттәрҙең булмауына ла бәйле булһа кәрәк. Шуға күрә бында әҙәби тәнҡиттең төп жанрҙары хаҡында үҙ ҡараштарым менән уртаҡлашып китһәм артыҡ булмаҫ тип уйлайым.

Әҙәби тәнҡиттең иң актив һәм оператив жанры — рецензия. Сөнки яҙыусының яңы сыҡҡан әҫәренә йәки йыйынтығына тәүге баһа рецензияларҙа бирелә. Рецензияла, ғәҙәттә, тәнҡитсе әҫәр тураһында үҙенең тәүге ҡарашын әйтә. Тәүге ҡараш, тәүге тәьҫир осраҡлыраҡ булыуы ла ихтимал. Ни өсөн тигәндә, рецензия әле әҫәр тураһында әҙәби йәмәғәтселек араһында тотороҡло фекер урынлашмаҫ борон һүҙ алып бара, күпселек осраҡта әҫәрҙә күҙгә бәрелеп торған етешһеҙлектәр йәки ҡаҙаныштар тураһында һүҙ йөрөтә. Шуға күрә яҙыусының яңы әҫәре тураһында тәүге һүҙҙе әйтеүсе рецензент алдында шаҡтай яуаплы бурыс тора: тәүге һүҙ объектив булырға тейеш. Әгәр тәнҡитсенең әҫәргә биргән баһаһы йә маҡтауға, йә етешһеҙлектәрен ҡабартып күрһәтеүгә генә ҡайтып ҡала икән, бындай рецензиялар, беренсенән, әҙәби йәмәғәтселек араһында ҙур ризаһыҙлыҡ тыуҙырһа, икенсенән, авторҙың артабанғы ижади үҫешенә зыян килтерә, өсөнсөнән, уҡыу-

сыға әҫәр тураһында дөрөҫ булмаған информация бирә.

Тәнҡитсе яңы әҫәргә баһа биргәндә иң элек әҙәбиәттең бөгөнгө кимәлен, уның бөгөнгө ҡаҙаныштарын күҙ уңында тоторға тейеш. Әлбиттә, теге йәки был яҙыусының һәр бер яңы әҫәре заман юғарылығына күтәрелеп етә алмауы мөмкин. Әммә был осраҡта ла художестволылыҡ талаптарын онотторға ярамай.

Һуңғы ваҡыттарҙа беҙҙә рецензиялар һирәгерәк яҙыла. Өлкән быуын яҙыусыларыбыҙҙың береһе һүҙ араһында: «Хәҙер китабың тураһында рецензия сыҡҡанын күреүҙән яңы китап сығарыу еңелерәк», — тип әйтеп һалғайны. Уның менән килешмәй мөмкин түгел.

Рецензия әҙәби тәнҡиттең иң бәләкәй төрө булһа ла, ул шаҡтай һығылмалы жанр. Бында рецензияларға хас булған дөйөм һыҙаттарҙы атап күрһәтеүе лә ҡыйын. Ҡайһы бер рецензиялар әҫәргә дөйөм баһа биреү менән сикләнһәләр, ҡайһы берҙәре проблемалы мәҡәләгә яҡын торалар. Ҡайһы бер рецензияларҙа әйтелгән фекерҙәр осраҡлы фекерҙәр, тәүге тәьҫирҙәр булып ҡына ҡалһалар, ҡайһы бер рецензиялар әҫәрҙе артабан өйрәнеүҙең нигеҙенә яталар. Яҙыусының яңы әҫәренә баһа биргәндә тәнҡитсе иң элек яҙыусының дөйөм ижадын күҙ уңында тоторға тейеш. Ошонан сығып, яңы әҫәрҙең яҙыусы ижадында тотҡан урынын билдәләргә бурыслы. Әгәр ҙә әҫәр яҙыусы ижадындағы бер күренеш булыу менән генә сикләнеп ҡалмай икән, уның теге йәки был жанр үҫешенә алып килгән яңылығын күрһәтергә, дөйөм әҙәби процеста тотҡан урынын билдәләргә тейеш.

Яҙыусы үҙ темаһын һайлауҙа ирекле булған кеүек, тәнҡитсе лә теге йәки был мәсьәләне күтәреүгә үҙ иркенән сығып яҡын килә. Шулай уҡ тәнҡитсе үҙ мәҡәләһенең йәки рецензияһының объекты итеп теләһә ниндәй авторҙың әҫәрен һайлап ала. Тик тәнҡитсе бер нәмәне онотмаһын ине: ул әҙәбиәттең бөгөнгөһө һәм киләсәге алдында бурыслы. Тәнҡитсе әҙәби фекерҙең үҫешенә, уның алға китешенә булышлыҡ итергә тейеш. Юғары художестволылыҡ, тормошсанлыҡ, халыҡсанлыҡ һәм партиялылыҡ — әҙәби әҫәрҙе баһалауҙа төп критерий булып ҡала. Әгәр тәнҡитсе ошо төп критерийҙарҙы күҙ уңынан ысҡындыра икән, уның субъек-

тивлыҡҡа йә булмаһа, тенденциозлыҡҡа бирелеүе ихтимал.

Һәр яңы китап баҫылып сыҡҡан мәлендә баһаланып ҡалыуы автор өсөн дә, әҙәби йәмәғәтселек өсөн дә күңеллерәк.

Рецензия йылдар үтеү менән үҙе әҙәби хәрәкәттең көҙгөһөнә әүерелә, әҙәбиәт тарихсыларының эшен еңеләйтә. Сөнки әҫәр тураһында яҙылған тәүге рецензиялар фекер уятыу менән бергә, әҫәргә шул заман әҙәби тәнҡитенең мөнәсәбәтен сағылдыралар, ә йылдар үткәс, ҡараштар үҙгәрә бара, һәр заман художество әҫәрен үҙенсә уҡый, үҙ заманы кимәленән тороп баһалай. Тәүге рецензиялар ваҡыт үтеү менән үҙҙәре тарихҡа әүерелеп, замандың ҡабатланмаҫ идея-эстетик ҡараштарын һаҡлап ҡалалар. Рецензиялар тураһында һөйләгәндә, тағы бер нәмәне әйтеп китке килә. Йәш тәнҡитселәр үҙ ижадын рецензияларҙан башлай. Рецензия жанрын үҙләштереп алыу йәштәргә тәнҡиткә килеү юлында урап үткеһеҙ бер шарт булып тора.

Әҙәби тәнҡиттең рецензияларҙан ҡала иң киң таралған төрҙәренең береһе — күҙәтеү мәҡәләләре. Күҙәтеү мәҡәләләренең яҡынса өс төрөн айырып күрһәтергә мөмкин.

1. Бер дәүерҙә айырым жанрҙың (прозаның, поэзияның йәки драматургияның) үҫешенә һәм торошона яһалған күҙәтеү. Бындай күҙәтеүҙәр теге йәки был әҙәби төрҙөң бер жанрының (хикәйәнең, комедияның, лириканың) торошон ғына өйрәнеүгә ҡайтып ҡалыуы ла, йәки прозаның, драматургия йәки поэзияның дөйөм торошон өйрәнеүгә лә бағышланыуы мөмкин. Беҙҙең әҙәби тәнҡит практикаһында ғәҙәттә айырым төрҙәрҙең йыллыҡ торошона күҙәтеү яһала. Шулай уҡ айырым жанрҙың йәки төрҙөң биш, ун йыллыҡ үҫешен эсенә алған күҙәтеүҙәр ҙә булыуы ихтимал. Был осраҡта күҙәтеү һәм әҫәрҙәргә баһа ғилми яҡтан шаҡтай тотороҡло характер ала. Күҙәтеүсе үҙенең мәҡәләһендә теоретик дөйөмләштереүҙәр, һығымталар яһауға ла киңерәк мөмкинлек менән файҙалана.

Йыллыҡ күҙәтеүҙәр беҙҙә һуңғы йылдарҙа даими рәүештә алып барыла һәм был күҙәтеүҙәр айырым жанрҙар буйынса яһала. Был йәһәттән Рауил Бикбаевтың поэзия буйынса, Әнүр Вахитов менән Роберт Байымовтың проза буйынса яһаған күҙәтеү мәҡәләләрен

атап үтергә кәрәк. Әммә драматургияға килгәндә, бындай йыллыҡ күҙәтеүҙәр системаға әйләнеп китә алмай әле. Әнғәм Атнабаевтың 1975 йылғы драматургия тураһындағы күҙәтеүе бик ҡыҙыҡлы булды булыуын. Уның ҡыҙыҡлылығы Атнабаевтың шуҡлығына ғына ҡайтып ҡалмай. Драматург бында, минеңсә, үҙенең был өлкәләге күп йыллыҡ тәжрибәһен асып һалды. Бындай бурысты Атнабаев кеүек танылған яҙыусыларға йышыраҡ йөкмәтергә кәрәк ине. Сөнки художниктың әҙәбиәткә ҡарашы тәнҡитсенекенән шаҡтай ныҡ айырыла һәм ундай сығыштар әҙәби процесҡа йәнлелек алып килә. Шулай уҡ беҙ әлегә балалар әҙәбиәтенең йыллыҡ торошона ла даими рәүештә күҙәтеү яһай алғаныбыҙ юҡ. Балалар әҙәбиәте — ул үҙе әҙәбиәт эсендәге әҙәбиәт. Уның прозаһы ла, поэзияһы ла, драматургияһы ла бар. Өҫтәүенә, балалар әҙәбиәте йәш айырмаларына ҡарап та бүленә. Ә беҙ, нигеҙҙә, ике-өс йылда дөйөм бер күҙәтеү менән сикләнәбеҙ. Был беҙҙең балалар әҙәбиәтендәге йәшәп ятҡан етешһеҙлектәрҙе тәрәндән асып һалырға мөмкинлек бирмәй.

Йыллыҡ күҙәтеүҙәр әҙәбиәттәге ҡаҙаныштарҙы һәм етешһеҙлектәрҙе асып биреүе менән бергә, дөйөм әҙәби процесты күҙ алдына килтереү, теге йәки был әҫәрҙең бөгөнгө әҙәбиәт тарихында тотҡан урыны билдәләү менән дә, ҡаҙаныштарҙы йәки етешһеҙлектәрҙе дөйөмләштереп бурыстар билдәләүе менән дә мөһим урын тоталар. Шуға күрә бындай күҙәтеүҙәргә беҙ ҙур иғтибар бирергә тейешбеҙ. Ул ғәҙәти күҙәтеү генә булып ҡалмаһын, әҙәбиәт тарихында, әҙәби тәнҡиттә үҙ урынын ныҡлы биләһен ине. Үҙ предметын белеп, әҙәби процесты тормош менән тығыҙ бәйләп яһалған күҙәтеүҙәр әҙәбиәттең артабанғы үҫешенә йоғонтоһоҙ ҡалмайҙар. Бында В.Г.Белинскийҙың «1847 йылғы рус әҙәбиәтенә ҡараш» тигән күҙәтеү мәҡәләһенең рус демократик әҙәбиәтендә тотҡан урынын иҫкә төшөрөп китеү ҙә етә. Башҡорт әҙәби тәнҡите тарихына килгәндә, Әхнәф Харисовтың 1946 йылдан алып 1954 йылға тиклем яһалған һәм һуңынан «Һуғыштан һуңғы әҙәби күренештәр» тигән баш аҫтында дөйөмләштерелгән, Ғайса Хөсәйеновтың илленсе йылдарҙың икенсе яртыһынан алып алтмышынсы йылдарға тиклем поэзия буйынса яһаған йыллыҡ күҙәтеүҙәре теоретик яҡтан тәрәнлеге,

ҙур зауыҡ һәм темперамент менән яһалыуҙары яғынан үрнәк булып торалар.

Күҙәтеүҙәр тураһында һөйләгәндә шуны әйтер инем: теге йәки был жанрға күҙәтеүҙәрҙе йылда тик бер кеше генә яһай башлаһа ла еләтеп киткеләй. Тәнҡитсе үҙенең тәжрибәһен тәүге күҙәтеүҙәрендә әйтеп бөтә лә, бушанып ҡалғылай. Шуға күрә, әҙәби-эстетик фекер яңырып торһон өсөн, йыллыҡ күҙәтеүҙәрҙең авторҙары алмашынып тороуы күңеллерәк. Бындай осраҡта бер жанрҙы өйрәнеүсе тәнҡитсегә икенсе жанр буйынса үҙ мөмкинлектәрен һанап ҡарарға юл асыла. Йыллыҡ күҙәтеүҙәрҙе ҡайһы ваҡыт шул жанрҙа ижад итеүсе яҙыусылар ҙа яһап ташлай. Һәм уларҙың күҙәтеүҙәре үҙ ижад практикаһын, тәжрибәһен ҡәләмдәштәре менән асыҡтан-асыҡ уртаҡлашыу формаһын ала. М.Ғәлиҙең 1975 йылғы поэзияға яһаған күҙәтеүе тап бына шундай күҙәтеүҙәрҙең береһе булды. Бындай күҙәтеүҙәр артабан яҙыусының эстетик ҡараштарын өйрәнеүселәргә ҡиммәтле материал булып хеҙмәт итә.

2. Күҙәтеү мәҡәләләренең икенсе бер төрө — тематик күҙәтеүҙәр, әйтәйек, «Башҡорт әҙәбиәтендә Бөйөк Ватан һуғышы темаһы», «Башҡорт поэзияһында В.И.Ленин образы», йәки «Башҡорт әҙәбиәтендә коллективлашыу темаһы» һ.б. Шундай күҙәтеүҙәрҙе тематик күҙәтеүҙәр тип йөрөтәләр. Бындай күҙәтеүҙәр шулай уҡ айырым жанр эсендәге материалға ғына таянып эшләнеүе лә мөмкин. Тәнҡитсе айырым осор менән сикләнеп ҡалыуы ла, дөйөм әҙәбиәткә күҙ ташлауы ла ихтимал. Ләкин автор теге йәки был теманың һуңғы осор әҙәбиәтендә яҡтыртылыуын өйрәнергә теләй икән, был теманың әҙәбиәттәге үҫеш тарихын күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа тейеш.

3. Әҙәби тәнҡит практикаһында әҙәбиәттең айырым бер дәүерҙәге дөйөм үҫешен үҙ эсенә алған күҙәтеүҙәр ҙә йыш була. Бындай күҙәтеүҙәр ғәҙәттә яҙыусыларҙың съездарында яһала. Шулай уҡ теге йәки был тарихи датаны байрам итеү уңайы менән дә яһалыуы мөмкин. Ғәҙәттә бындай күҙәтеүҙәрҙә әҙәбиәттәге күҙгә бәрелеп торған уңыштар менән дөйөм етешһеҙлектәр асып һалына. Әгәр ҙә бындай күҙәтеүҙәр докладсының үҙ тәжрибәһенә нигеҙләнеп, бер осорҙоң әҙәби хәрәкәтенә үҙ ҡарашы булараҡ яһала икән, улар әҙәби процеста үҙе бер күренеш характерын ала, әҙәбиәт үҫешенә һиҙе-

лерлек йоғонто яһау менән бергә, әҙәби эстетик фекер үҫешенә ҙур өлөш индерә. Халыҡ шағиры Мостай Кәримдең РСФСР һәм Башҡортостан яҙыусылары съездарында яһаған докладтары, мәҫәлән, осорҙоң әҙәби күренештәренә ҙур художник, аҡыл эйәһе булып ҡарауы һәм үҙ ижад тәжрибәһенә нигеҙләнеп яһалыуы менән айырылып торалар. Шуға ла улар яҙыусының һайланма әҫәрҙәрендә лайыҡлы урын алып, уның ижадының айырылмаҫ бер өлөшөнә әүерелделәр.

Әҙәби тәнҡиттә конкрет бер мәсьәләне алып тәрән итеп яҡтыртыуҙары менән проблемалы мәҡәләләр ҙур урын тоталар. Проблемалы мәҡәләләр яҙылыу методтары менән ике төрлө була. Факттан дөйөмләштереүгә килгән, йәғни индуктив методҡа ҡоролған мәҡәләләр һәм дөйөмдән фактҡа килгән, дөйөм бер теоретик ҡарашты, проблеманы факттар менән нығытҡан, йәғни — дедуктив методҡа ҡоролған мәҡәләләр. 1973 йылдың йәйендә «Совет Башҡортостаны» газетаһында бер үк проблемаға арналған ике мәҡәлә баҫылып сыҡҡайны. Уларҙың тәүгеһе — «Фәнни-техник прогресс һәм әҙәбиәт» (В.Әхмәҙиев) тип аталғаны дедуктив метод менән яҙылһа, «Фәнни-техник прогресс һәм поэтик фекерләү» тигәне (К.Әхмәтйәнов) индуктив метод менән яҙылғайны. Сөнки уның тәүгеһендә дөйөм методологик мәсьәләләр ҡуйылһа, икенсеһе ФТР-ҙың поэтик фекерләүгә йоғонтоһон конкрет беҙҙең әҙәбиәт миҫалынан сығып яҡтыртты. Әҙәби тәнҡит өсөн дедуктив метод та, индуктив метод та берҙәй кәрәкле. Тәнҡитсе социалистик реализм, партиялылыҡ халыҡсанлыҡ кеүек үҙәк мәсьәләләрҙе күтәрә икән күп осраҡта дөйөмдән фактҡа килә, әҙәбиәттәге күренештәрҙе теге йәки был теоретик мәсьәләгә мөнәсәбәтендә анализлай.

Индуктив методҡа ҡоролған мәҡәләләр тәнҡитсенең фактик материалға таянып дөйөмләштерелеүен, теге йәки был проблеманы факттан сығып ҡуйыуын талап итә. Шулай ҙа әҙәби тәнҡит практикаһында тик дедуктив методҡа ғына йәки киреһенсә индуктив методҡа ғына ҡоролған мәҡәләләрҙе атап күрһәтеүе ҡыйыныраҡ. Ғәҙәттә тәнҡитселәр бер үк мәҡәләһендә ике методҡа ла таяналар. Ә инде әҙәбиәт ғилеменә килгәндә, теоретик хеҙмәттәрҙә дедуктив, әҙәбиәт тарихына ҡараған хеҙмәттәрҙә индуктив метод өҫтөнлөк итә.

Яҙыусы эшмәкәрлеге хаҡында дөйөм бер ҡараш булдырыу һәм индивидуаль ижад йөҙөн асыҡлау яғынан әҙәби тәнҡиттә портреттар мөһим урын тоталар. Ижади портреттарҙа, әлбиттә, ижад йөҙө асыҡланып өлгөрмәгән яҙыусы тураһында яҙып булмай. Ижади портрет әҙәбиәттә үҙен раҫлаған яҙыусыға тәнҡиттең генә түгел, әҙәби йәмәғәтселектең баһаһы булараҡ яҙылырға тейеш. Әҙәби портреттар беҙҙә ғәҙәттә яҙыусының юбилейы уңайы менән яҙыла. Юбилей мәҡәләһендә тәнҡитсе яҙыусының ҡаҙаныштарын ҡалҡыуыраҡ итеп күрһәтә. Бының зыяны юҡ. Шул уҡ ваҡытта ижады сәскә атҡан яҙыусыларҙың юбилейҙары осоронда яҙылған портреттарында ла яҙыусыны популярлаштырыу маҡсатын ғына тотмайынса, уның мөмкинлектәренән сығып, етешһеҙлектәрен дә күрһәтеп китеү бер ҙә артыҡ булмай.

Әлегә беҙҙә йәшерәк, ләкин әҙәбиәттә үҙен ныҡлы раҫлаған яҙыусыларҙың ижади портреттары һирәгерәк яҙыла. Был беҙҙең әҙәби тәнҡиттең бер етешһеҙлеге тип әйтер инем. Сөнки ижад мөмкинлектәре ҙур булған талантлы йәштәрҙе киң йәмәғәтселек алдында күрһәтеп алыу, берҙән, яҙыусыға күңелле хәл булһа, икенсенән, тәнҡит уның ижадындағы көслө һәм йомшаҡ яҡтарҙы асып һалып, артабанғы ижадына дөрөҫ йүнәлеш бирә.

Ижади портреттарҙың бер нисә төрлөһө бар. Ҡайһы бер портреттарҙа тик ижад үҙенсәлектәре генә яҡтыртылһа, ҡайһы берҙәрендә ижад индивидуаллеге яҙыусының шәхесенә һәм тормош юлына тығыҙ бәйләнештә күрһәтелә. Әлбиттә, мәҡәләнең күләме мөмкинлек биргәндә, яҙыусы ижадын уның шәхесенән һәм дөйөм эшмәкәрлегенән айырып ҡарарға ярамай. Шул уҡ ваҡытта тормош юлы киң билдәле яҙыусының ижадына тәнҡитсе яңыса бер ҡараш үткәреүҙе генә маҡсат итеп ҡуя икән биографик факттарын урап үткәндә лә ярай.

Ижади портрет, күләм яғынан ҙур булмаһа ла, үҙенең формаһы менән яҙыусының ижады һәм тормош юлына арналған монографияларға тартым. Тик монографияларҙа анализдарға ҙур урын бирелһә, ижади портреттарҙа теге йәки был яҙыусы ижадының төп һыҙаттарына көслөрәк баҫым яһалып, анализға ҡарағанда дөйөмләштереү өҫтөнлөк алыңҡырай.

Үкенескә ҡаршы, беҙҙә әлегә әҙәбиәттә ныҡлы үҙ урыны булған һәләтле яҙыусылар тураһында журнал биттәрендә ижад йөҙөн тулыраҡ асып биреүсе ижади портреттар бирә барыу ғәҙәткә инмәгән. Бер нисә китабы сыҡҡан һәләтле йәштәр тураһында әйтеп тормаҫтан, бөгөнгө әҙәбиәтебеҙҙең төп көстәре булған прозаиктар Фәрит Иҫәнғолов, Ноғман Мусин, драматургтар Әсғәт Мирзаһитов, Әнғәм Атнабаев, шағирҙарҙан Рафаэль Сафин, Рәми Ғарипов, Марат Кәримов, Рауил Бикбаев һәм башҡалар үҙҙәренең ижады хаҡында тулы мәғлүмәт биреүсе ижади портреттар күрә алғандары юҡ әле. Минеңсә, уларҙың иллегә етеүен көтөп ятырға ярамай, сөнки был яҙыусыларҙың ижады хаҡында бер бөтөн мәғлүмәт әҙәбиәтселәр өсөн генә түгел, әҙәбиәт һөйөүселәр өсөн дә бик кәрәк нәмә.

Әҙәби тәнҡиттең төп объекты әҙәбиәт булып, ул дөйөм критерийҙар һәм теоретик ҡараштарҙан сығып эш итһә лә, тәнҡитсенең ижады ла индивидуаль ижад. Тәнҡитсенең индивидуаллеге ул тәрбиәләнгән әҙәби традицияларға, тормош тәжрибәһенә, шәхесенә һәм зауҡына бәйләнгән. Шулай уҡ әҙәби тәнҡиттә профессиональ оҫталыҡ, фекер йөрөтөү үҙенсәлеге лә мөһим урын тоталар: бер тәнҡитсе теоретик фекер йөрөтөүгә һәләтле булһа, икенсеһендә тарихилыҡ көслөрәк булыуы ихтимал, береһендә образлы фекер йөрөтөү ҡеүәһе көслө булһа, икенсеһенең стиле публицистик үткерлеге менән айырылып тора. Әммә тәнҡитсегә ижад индивидуаллегенә өлгәшеү яҙыусыға ҡарағанда ауырыраҡ, был ҙур тәжрибә, талант һәм ныҡышмалылыҡ талап иткән эш. Тәнҡит мәҡәләләре бөгөнгө заманда киң ҡатлам уҡыусыларға ла адреслана. Шуға күрә тәнҡит мәҡәләләре, тәнҡит булыу өҫтәүенә, мауыҡтырғыс һәм уңышлы булһын өсөн, тәнҡитсе үҙ ижадының йөҙө, үҙ эшенең профессиональ кимәле хаҡында даими ҡайғыртырға тейеш. Ғөмүмән алғанда, әҙәби тәнҡит дөйөм әҙәбиәт ғилеменең бер тармағы. Ул әҙәбиәт тарихынан һәм теорияһынан тыш үҫә алмай. Ә был йәһәттән беҙҙең шаҡтай ҙур ҡаҙаныштарыбыҙ бар. Әҙәбиәт ғилеменең теорияға һәм тарихҡа ҡараған тармаҡтары айырата һуңғы 15—20 йыл эсендә ныҡ үҫте. Әҙәбиәт тарихын өйрәнеүгә Ә.Харисов, Ғ.Хөсәйенов, Ғ.Рамазанов, М.Ғәйнуллин, Ә.Вахитов, С.Сафуановтар ҙур өлөш индерҙеләр. Әҙәбиәттең айырым жанр-

ҙары үҫешенең төрлө проблемаларын өйрәнеүгә лә иғтибар көсәйҙе. Был йәһәттән К.Әхмәтйәнов, Р.Бикбаев, Р.Байымов хеҙмәттәрен атап үтеү ҙә етә. Һуңғы йылдарҙа шулай уҡ әҙәби бәйләнештәрҙе өйрәнеү көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһе булып торҙо. Был өлкәлә айырата С.Сафуанов ҙур хеҙмәт күрһәтте.

Әҙәбиәтте күренекле таланттар тыуҙыра. Шуға күрә күренекле яҙыусыларыбыҙҙың ижади һәм тормош юлын яҡтыртыусы монографиялар ижад итеүгә лә ҙур иғтибар бирелә килә. Һуңғы дәүерҙә генә М.Ғафури, Д.Юлтый, С.Ҡудаш. Р.Ниғмәти, Һ.Дәүләтшина, И.Насыри, А.Карнай, С.Мифтахов, М.Кәрим, С.Агиш, Н.Нәжми, Ә.Бикчәнтәевтар тураһында монографияларҙың донъя күреүе шул хаҡта һөйләй.

1976 йылда Ә.Вахитовтың «Ижади портреттар» тигән китабы баҫылып сыҡты. Унда автор Д.Исламов, Х.Ғиләжев, Я.Хамматовтарҙың ижади портреттарын биргән. Уларҙы мин был яҙыусылар хаҡында ҙур булмаған монографиялар тип атар инем. Башҡорт телендә юғары уҡыу йорттары өсөн әҙәбиәт теорияһының булмауы йәш әҙәбиәтселәрҙе, филологтарҙы тәрбиәләүҙә ҙур бер етешһеҙлек булып тора ине. К.Әхмәтйәновтың Салауат Юлаев исемендәге премияға лайыҡ булған «Әҙәбиәт теорияһы» хәҙер әҙәбиәткә аяҡ баҫыусы йәштәрҙең уҡыу китабына әйләнде.

Күренеүенсә, хәҙер беҙҙең әҙәби тәнҡиттең тарихи-теоретик нигеҙе шаҡтай ныҡ. Бөгөнгө әҙәби күренештәр тураһында һүҙ йөрөткәндә, тәнҡит ошо тарихи-теоретик һәм методологик хеҙмәттәргә таянып эш итә.

## БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕНДӘ РЕАЛИЗМДЫҢ ФОРМАЛАШЫУ ЮЛДАРЫ

Идеологик көрәштең бөтә өлкәләрендә лә, шул иҫәптән әҙәбиәт менән сәнғәттә лә, прогрессив һәм реакцион көстәр араһында ҡапма-ҡаршылыҡ көсәйгәндән-көсәйә барған хәҙерге заман шарттарында күп милләтле совет әҙәбиәтенең берҙәм социалистик реализм әҙәбиәте булып формалашыу юлдарын тарихи-сағыштырма һәм типологик яҡтан өйрәнеү әҙәбиәт ғилеменең көнүҙәк мәсьәләләренән һанала, һәр бер милли әҙәбиәттә социалистик реализм методы формалашыуҙың дөйөм тарихи-теоретик һәм типологик мәсьәләләрен ентекле өйрәнгәндә уларҙың революцияға тиклемге үҫешендәге реалистик тенденцияларының милли сығанаҡтарын асыҡлап китмәй мөмкин түгел.

Реализмдың милли башланғыстары революцияға тиклемге башҡорт әҙәбиәтендә лә бөтөнләй ят күренеш булмаған.

С.Юлаев поэзияһында, мәҫәлән, реалистик тенденциялар шаҡтай көслө сағылыш алғанлығы күренә. Уның Тыуған ил, тыуған Урал һәм мөхәббәт тураһындағы лирикаһы донъяға реалистик ҡараш менән һуғарылғандар. Ә инде «Бүгәсәүгә ҡушылып, ир-батырға иш булып» тигән киң билдәле ҡобайыры социаль һәм милли иҙеүгә ҡаршы ялҡынлы көрәш ораны ул; был ҡобайырҙың һуғышсан пафосы формаһы һәм алымдары Р.Ниғмәтиҙең социалистик реализм әҙәбиәтенең бер өлгөһө булып торған «Үлтер, улым, фашисты!» поэмаһында дауам иттерелеү һәм үҫтерелеү факты үҙе генә лә уның реалистик әҫәр икәнлеген раҫлай. С.Юлаевтың был әҫәре реализмдың төп күрһәткестәрен билдәләүсе тарихилыҡ принцибы, донъяға тарихи күҙлектән ҡараш менән айырылып тора. Был әҫәрҙә шул за-

мандың төп ҡаршылыҡтары — Крәҫтиәндәр һуғышын килтереп тыуҙырыусы тарихи сәбәптәр кәүҙәләнеш алған. С.Юлаев үҙенең поэзияһында башҡорт халҡының бай ауыҙ-тел ижады менән төрки халыҡтарының яҙма поэзияһы традицияларын дауам иттергән. Яҙма поэзия традициялары Салауат поэзияһын индивидуаль һыҙаттар менән байытыуға килтерһә, халыҡ поэзияһының көслө йоғонтоһо уның әҫәрҙәренең халыҡсанлығын нығытҡан. С.Юлаев поэзияһының халыҡ ижады, айырата сәсәндәр поэзияһы менән генетик бәйләнеше уның реализмын билдәләүсе төп критерийҙарҙың береһе булып тора. Был йәһәттән С.Юлаев реализмы Яңырыу дәүере (эпоха Возрождения) реализмына яҡын тора.

«Яңырыу дәүере реализмының төп һыҙаты, — тип яҙа А.Самарин, — уның халыҡ ижады менән тығыҙ, генетик бәйләнешенән ғибәрәт; был бәйләнеш — тура-нан-тура бәйләнеш; ул сюжет, образ, темаларҙы үҙләштереүгә генә ҡайтып ҡалмай, бәлки телдә лә, художество сараларында ла, шиғыр системаһында ла асыҡ сағыла»[234].

Реалистик тенденциялар шулай уҡ Крәҫтиәндәр һуғышында ҡатнашыусылар араһында киң таралған ҡулъяҙма поэзияла ла күҙгә ташлана. Был тәбиғи, сөнки беҙ Салауат поэзияһында күҙгә бәрелеп торған реалистик тенденцияларҙы күрәбеҙ икән, был тенденция халыҡ күтәрелеше заманында килеп тыуған бөтә прогрессив поэзия өсөн хас күренеш булған.

XVIII быуаттың аҙаҡтарында XIX быуаттың беренсе яртыһында башҡорт халыҡ ижадында тарихи шәхестәр, ҡасҡындар һәм кантон начальниктары, 1812 йылғы Ватан һуғышы геройҙары тураһында тарихи йырҙар менән бәйеттәр үҫеш ала. Был тарихи йырҙар менән бәйеттәрҙә ысынбарлыҡ дөйөмләштереңкерәп кәүҙәләндерелһә, реалистик типиклаштырыу принциптарына хас булғанса, уларҙа айырым шәхестәрҙең образдары индивидуаллаштереп һүрәтләнгән. Абдулла ахун тураһындағы тарихи йырҙа, Моҡан кантон менән Тәфтиләү

[234] А.Самарин. К проблеме реализма в западноевропейских литературах эпохи Возрождения. «Проблемы реализма». М., 1959, 379-сы бит.

тураһындағы бәйеттәрҙә, мәҫәлән, беҙ был шәхестәрҙең реалистик образдарын төҫмөрләйбеҙ.

Шул уҡ ваҡытта тарихи йырҙар менән бәйеттәрҙә ыңғай образдарҙың индивидуаль һыҙаттары бик үк асыҡ кәүҙәләнмәй: уларҙа батырлыҡты һәм тоғролоҡто данлаусы «дөйөм урындар» өҫтөнлөк алыңҡырай. Тик халыҡтың йәненә тейгән һәм ҡанын эскән шәхестәр тураһындағы сатирик йырҙар менән бәйеттәрҙә генә был кешеләрҙең образдары бөтә кәмселектәре менән кәүҙәләнеш ала.

Халыҡ ижадындағы был реалистик башланғыстар, жанрҙарға бай, художестволы дөйөмләштереү саралары төрлөсә һәм төрлө кимәлдә булған ауыҙ-тел ижадының төп характерын билдәләмәһәләр ҙә, С.Юлаев поэзияһы кеүек үк, башҡорт әҙәбиәтендәге реалистик йүнәлештең милли ерлеген тәшкил итеүсе мөһим факттар итеп ҡаралырға хаҡлы.

Башҡорт әҙәбиәтендә реализмдың ижад методы булараҡ формалаша башлауы XIX быуаттың икенсе яртыһында Башҡортостанда капиталистик мөнәсәбәттәр үҫеш алып, милли буржуазияның аяҡҡа баҫыуы менән тығыҙ бәйле.

Башҡортостанда капиталистик мөнәсәбәттәрҙең үҫеше аяҡҡа баҫып килеүсе милли буржуазияның һәм демократик көстәрҙең феодаль-патриархаль ҡалдыҡтарға, дини фанатизмға ҡаршы киҫкен көрәш шарттарында бара. Шулай уҡ крепостной правоның бөтөрөлөүе менән, башҡорт ерҙәренә башҡа халыҡтарҙың ағылыуы сәбәпле, крайҙы колонизациялау тағы ла көсәйә төшә. Бына ошо социаль-экономик һәм тарихи-политик шарттар башҡорт мәғрифәтселегенең һәм мәғрифәтселек әҙәбиәтенең йүнәлешен һәм йөкмәткеһен билдәләйҙәр. Башҡорт мәғрифәтселек әҙәбиәтенең тыуыуына һәм формалашыуына үҙ милли традициялары менән бергә рус әҙәбиәте ҙур йоғонто яһай. Тәүге мәғрифәтселәр М.Бикчурин, С.Кукляшевтар XVIII быуат рус мәғрифәтселек әҙәбиәтенең традицияларына, айырата И.А.Крылов мәҫәлдәренә мөрәжәғәт итәләр,

XIX быуаттың икенсе яртыһындағы башҡорт мәғрифәтселек әҙәбиәтенең сағыу вәкилдәре М.Аҡмулла менән М.Өмөтбаевтар булды. Уларҙың ижады башҡорт әҙәбиәтенең идея йөкмәткеһен байытыуҙа ҙур урын тотто.

«Ялсығолдан алып Өмөтбаевҡаса, — тип яҙҙы Ә.И.Харисов, — әҙәби үҫеш ауыр юл үтте. Ул юлды «дини мистиканан — реаль тормошҡа табан» тип атап булыр ине. XIX быуаттың икенсе яртыһына тиклем әҙәбиәттә дини йүнәлеш өҫтөнлөк алып килһә, артабан инде — Аҡмулла менән Өмөтбаев поэзияһы аша үткәндә — был ике ҡапма-ҡаршы идеологик нисбәттә өҫтөнлөк донъяуи йүнәлешкә күсте, һәм шуның менән әҙәби ижадтың реализм нигеҙендә үҫеү перспективаһы асылды»[235].

М.Аҡмулла менән М.Өмөтбаевтың ижад практикаһында шулай уҡ башҡорт әҙәбиәтендә реализм ижад методы булараҡ формалаша башлай. Аҡмулла, феодаль иҫкелекте, наҙан һәм ҡомһоҙ муллаларҙы, һаран һәм ҡара эсле байҙарҙы ҡаты тәнҡитләп, кешелекһеҙ йәмғиәттең йөҙөн йыртыусы шағир булып сығыш яһаны. Ҡараңғылыҡта яфа сигеүсе башҡорт, ҡаҙаҡ, татар халыҡтарын мәғрифәткә ылыҡтырырға, культуралы итергә теләү уның поэзияһының төп пафосын билдәләне.

М.Өмөтбаев үҙ ижадында тәү башлап Европа һәм Көнсығыш традицияларын ҡауыштырыуға ынтылыш яһаны. М.Өмөтбаев ижадында беҙ реалистик тенденцияларҙы ла, романтизм күренештәрен дә осратабыҙ. Ул үҙенең өгөт-нәсихәткә ҡоролған шиғырҙарында Аҡмулла кеүек мәғрифәтсе шағир булып сығыш яһаны. Уның публицистик мәҡәләләре, юлъяҙмалары ла мәғрифәтселек тенденцияларын сағылдырҙы. Шул уҡ ваҡытта «Йомран иле», «Үткән ғүмер — ҡалған хәтер», «Шиҡәйәт» шиғырҙарында һәм «Ҡайыш илә Йүкә» мәҫәләндә М.Өмөтбаев мәғрифәтселек реализмы рамкаларында ғына сикләнеп ҡалмай. Был әҫәрҙәрендә ул киҫкен социаль мәсьәләләрҙе лә ҡуя алды. «Шиҡәйәт» шиғырында шағир, ҡасандыр урмандарға, мал-тыуарға бай башҡорт ерҙәренең ярлыланыуын һүрәтләп, һаҡ ҡына булһа ла, был хәлдең колониаль политиканың һөҙөмтәһе икәнлегенә ишара яһаны:

Аяҡлы мал тамам бөтә яҙҙы.
Ағастар аҡты, Әстрханға уҙҙы.

---

[235] Ә.Харисов. Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы. XVIII—XIX быуаттар. Өфө, 1965, 378-се бит.

Унының артынса осто ҡорт һәм әре.
Юҡ инде тау кеүек ағас тауары.
Был башҡорт урманы тамам киҫелгәс,
Сафинәләр (баржа — В. Ә.) тауарынан
һәм өҙөлгәс,
Фекерләп таптылар һәм башҡа шәйҙе:
Ҡара тал ҡайырын, ҡош һәм күкәйҙе.

Шул рәүешле, XIX быуат аҙағында башҡорт поэзияһында мәғрифәтселек идеялары өҫтөнлөк итеп, төп ижад методы булараҡ мәғрифәтселек реализмы нығыныуы менән бергә, М.Өмөтбаевтың айырым шиғырҙарында тәнҡитле реализм методының саткылары ла күренеп ҡалды. Шулай уҡ М.Өмөтбаев, А.С.Пушкиндың «Баҡсаһарай фонтаны» тигән романтик поэмаһын тәржемә иткән шағир. Унының үҙенең «Бер шәһәрҙә гүзәл күрҙем» тигән поэтик әҫәре лә Көнсығыш романтик поэмаларына тартым. Тимәк, М.Өмөтбаев, донъяға ҡарашы менән мәғрифәтсе булып ҡалған хәлдә лә, унының ижадында төрлө традициялар, төрлө ижад методтарының башланғысы бар тигән һүҙ. Был башланғыстар, һис һүҙһеҙ, XX быуат башы поэзияһының үҫешенә ыңғай йоғонто яһанылар.

Был осорҙа башҡорт прозаһында ла мәғрифәтселек реализмы формалаша бара. Был Закир Һаҙыйҙың повесть һәм хикәйәләрендә, Мәжит Ғафуриҙың тәүге прозаик әҫәрҙәрендә айырата асыҡ күренә. Мәғрифәтселек реализмында беренсе планға әхлаҡ-тәрбиә мәсьәләләре ҡуйылып, кешенең характеры формалашыуҙа средалың ҙур йоғонтоһо барлығы һыҙыҡ өҫтөнә алына. Ләкин среда төшөнсәһе бында ғаилә, мәктәп һәм шул осорҙоң рухи тормошо менән сикләнә. Ә инде шәхестең формалашыуына йәмғиәттең социаль-экономик ҡоролошо, тарихи-политик шарттарҙың төп фактор булыуын мәғрифәтселәр аңлап етә алмайҙар. Быны аңлау реализмдың икенсе баҫҡысы тәнҡитле реализм дәүерендә, әҙәбиәттең генә түгел, ижтимағи фекерҙең дә яңы кимәлгә күтәрелеүе менән тығыҙ бәйләнештә мөмкин була.

1905—1907 йылдарҙағы революция йылдарында халыҡ массаларының революцион көрәше йоғонтоһонда башҡорт әҙәбиәтендә һиҙелерлек йәнләнеү башлана. Был осор әҙәбиәттә мәғрифәтселек традициялары һаман дауам итһә лә, ул инде берҙән-бер ижад методы

булып ҡала алмай. Әҙәбиәттә халыҡсан-демократик, революцион идеялар ҙа көсәйә башлай. Демократик идеяларҙың көсәйеүенә большевиктар партияһының революцион пропагандаһы айырата ҙур йоғонто яһай. Сөнки был йылдарҙа Өфө, Ҡазан кеүек ҡалаларҙа татар телендә большевистик листовкалар баҫылып таратыла. 1907 йылда Ырымбурҙа большевистик «Урал» газетаһы сығарыла. Рус теленән татарсаға тәржемә ителеп, ҡулъяҙма хәлендә таратылған революцион йырҙар өлгөһөндә башҡорт һәм татарҙар араһында ла революцион-демократик йөкмәткеле поэзия үҫеш ала.

1905—1907 йылдарҙа әҙәбиәткә мәғрифәтсе булып аяҡ баҫҡан һәм буржуаз-демократик революция дәүеренә тиклем мәғрифәтселек иллюзиялары менән йәшәгән М.Ғафури ижадында ҙур һынылыш дәүере башлана. Ул «Ярлылар йәки өйҙәш ҡатын» повесы һәм айырым шиғырҙары менән революцион-демократик ҡараш юғарылығына күтәрелә. Быға тиклем яҙылған хикәйәләренән айырмалы рәүештә, М.Ғафури «Ярлылар йәки өйҙәш ҡатын» повесында бәхетле тормошҡа өлгәшеү өсөн теге йәки был кәңәштәр бирмәй, повеста уның бәхетле тормош тураһындағы хыялы хөкөм һөрөүсе ғәҙел булмаған йәмғиәткә, шул йәмғиәт тыуҙырған тормошҡа тәнҡитле ҡарашында күренә.

Ошондай уҡ һыҙаттар М.Ғафуриҙың тормош, мөхәббәт, үҙ милләтенең яҙмышы тураһында тәрән кисерештәр менән яҙылған философик йөкмәткеле «Хәмиттең хәяты...» (1912) повесында ла асыҡ күренә. Шуға ла, был әҫәрҙең тормошсанлығын һыҙыҡ өҫтөнә алып, Ғ.Туҡай уға ҙур баһа биргән, Хәмиттең тормошо беҙҙең күпселегебеҙҙең тормошон хәтерләтә тип, повестың реалистик дөйөмләштереү көсөнә хайран ҡалған.

Шул рәүешле, революцион һынылыштар дәүерендә башҡорт әҙәбиәтендә тәнҡитле реализм методы формалаша башлай.

Шул уҡ ваҡытта революция дәүерендә һәм ҡара реакция йылдарында әҙәбиәткә аяҡ баҫҡан күпселек йәш әҙәби көстәрҙең ижадында мәғрифәтселек традициялары дауам итә.

С.Яҡшығолов, Д.Юлтый, Ғ.Хоҙаяров, Ш.Әминев һ.б. шағирҙар, шул заман әҙәбиәтендә киң урын алған хитаптарында башҡорт халҡын уяныrға, культураға, аң-

белемгә эйә булырға саҡырып, «европаса донъя көтөү» формаларын яҡлап сығалар.

XX быуат башында, бигерәк тә Столыпиндың аграр реформаһынан һуң, башҡорт ерҙәренең ҡыҫылыуы һаман дауам итә. Был күренеш халыҡтың көнкүрешенә уғата ауыр эҙемтәләр алып килә. Шуға күрә «ер һатыу»ға ҡаршы көрәш был осор поэзияла ғына түгел, прозала ла, драматургияла ла, публицистикала ла көслө сағылыш ала һәм башҡорт мәғрифәтселек әҙәбиәтенең антиколониаль йүнәлештә булыуын билдәләй, уның социаль яңғырашын көсәйтә. Был йәһәттән С.Яҡшығолов, Ф.Туйкин, Ш.Әминевтарҙың поэзияһын, Б.Бәхтегәрәй улының «Ер һатыу» драмаһын һәм М.Буранғолов, Ғәбдрәшит Ғүмәриҙәрҙең публицистик мәҡәләләрен айырып күрһәтергә мөмкин.

А.Таһиров, Ә.Иҫәнбирҙин, З.Өммәти кеүек ҡара реакция һәм яңы революцион күтәрелеш йылдарында әҙәбиәткә килгән прозаиктар ҙа хикәйә һәм повестарында мәғрифәтселек идеяларын алға һөрҙөләр. Улар, үҙҙәренең әҫәрҙәрендә көнкүрештәге феодаль-патриархаль тәртиптәрҙе, мәҙрәсәләрҙәге иҫкесә уҡытыу системаларын ҡаты тәнҡит итеп, шәхес һәм ҡатын-ҡыҙ азатлығы кеүек мөһим мәсьәләләрҙе күтәреп сыҡтылар. Ләкин улар инде әҫәрҙәренә тормош материалын һәм геройҙарҙы һайлауҙа З.Һаҙыйҙан айырылып торалар. Уларҙың төп геройҙары — ярлы ғаиләнән сыҡҡан шәкерттәр, ҡатмарлы һәм ауыр тормош шарттарында халыҡҡа хеҙмәт итеү теләге менән яныусы интеллигенция вәкилдәре. Улар яңылыҡҡа ынтылыусы, бәхетле тормош тураһында яңысараҡ уйланыусы, артабан үҙ яҙмыштарын халыҡ бәхете өсөн көрәшкә алып барып бәйләйәсәк яңы типтар булараҡ күҙ алдына баҫалар, һәр хәлдә, уларҙың характерҙары үҫеше логикаһында шундай сифаттар төҫмөрләнә.

Йәш прозаиктарҙың хикәйәләү стилдәрендә, тормош-көнкүреш күренештәрен һүрәтләүҙә тәнҡитле реализмға хас сифаттар ҙа шәйләнеп ҡала, ләкин тормош материалын үҙҙәренең рациональ ҡараштарына иллюстрация формаһындараҡ файҙаланыуҙары менән А.Таһировтың «Мазлумалар», Ә.Иҫәнбирҙиндың «Үкенесле һөйөшеү йәки Мансур менән Ғәлиә» һәм З.Өммәтиҙең «Йәштәргә дәрес — аталарға ғибрәт» кеүек повесть һәм хикәйәләре мәғрифәтселек реализмы тра-

дицияларында ижад ителгән әҫәрҙәр иҫәбендә ҡалдылар.

Шул уҡ ваҡытта, ҡара реакция йылдарында мәғрифәтселек традициялары дауам итеү менән бергә, мәғрифәткә эйә булып ҡына халыҡты бәхетле итергә, тормошта ғәҙеллек һәм тигеҙлек урынлаштырырға мөмкин икән тигән иллюзияларға ышаныс та ҡаҡшай бара. Нигеҙҙә, ваҡ буржуаз интеллигенция һәм крәҫтиәндәр араһынан күтәрелеп сығып, пролетариат идеалдарын аңлау дәрәжәһенә етә алмаған яҙыусылар, мәғрифәтселек идеалдары ҡара реакция һөжүменә бәрелеп юҡҡа сыҡҡас, өмөтһөҙлөккә һәм күңел төшөнкөлөгөнә биреләләр. Был төшөнкөлөк дәүерендә М.Ғафури, Д.Юлтый кеүек шағирҙар, тормошта булмаған матурлыҡты һәм гармонияны тәбиғәттә күрергә теләп, тәбиғәт ҡосағына ташланһалар һәм саф мөхәббәт культын йырлаһалар, Я.Юмаев кешелеклелек һәм эскерһеҙлек сифаттарын тик сабыйҙар һәм ҡатын-ҡыҙҙар күңелендә генә күрергә ынтылды. С.Яҡшығолов менән Ф.Туйкин, буржуаз ысынбарлыҡты уҙған күсмә тормошҡа ҡаршы ҡуйып, иркен далаларҙа күсеп йөрөгән йәйләү тормошон һағынып һыҡтанылар. Ә инде халыҡ мәнфәғәттәренән алыҫ торған Ф.Сөләймәнов кеүек шағирҙар, буржуаз декадентлыҡ түбәнлегенә тәгәрәп, был фани донъянан ваз кистеләр һәм ҡәбер тынлығын идеаллаштырҙылар. Үткәнде идеаллаштырыу, кешенең рухи донъяһын, эске кисерештәрен һүрәтләү, фольклор сюжеттарына мөрәжәғәт итеү, тәбиғәт ҡосағына һыйыныу шулай уҡ прозала Ә.Таңғатаров менән М.Ғафури нәҫерҙәрендә, Ф.Сөләймәнов, Ғ.Рафиҡи, Ф.Вәлиев хикәйәләрендә лә сағылды. Реакция йылдарында башланған был күренештәр әҙәбиәттә мәғрифәтселек реализмы эстетикаһын романтизм эстетикаһы алмаштырыуы хаҡында һөйләй.

Башҡорт әҙәбиәтендә романтизм оҙайлы күренеш булып, ҙур традициялар тыуҙырып өлгөрмәһә лә, әҙәбиәттә һиҙелерлек эҙ ҡалдырҙы. Ул типологик яҡтан Көнбайыш һәм рус әҙәбиәттәрендәге романтизмға яҡын торҙо. XX быуат башында романтизмдың шулай уҡ пассив, реакцион йүнәлеше лә, актив, прогрессив йүнәлеше лә үҫеш алғанлығы күҙәтелә.

Яңы революцион күтәрелеш йылдарында М.Ғафури, Ә.Таңғатаров, Д.Юлтый һәм Я.Юмаевтарҙың романтиз-

мы аҡрынлап прогрессив характер ала барҙы. Шулай уҡ демократик йүнәлештәге был шағирҙарҙың әҫәрҙәрендә романтизм реалистик башланғыстар менән аралаша һәм реалистик йүнәлеш өҫтөнлөк ала башланы.

Беренсе донъя һуғышы йылдарында М.Ғафуриҙың һуғышҡа ҡаршы яҙылған шиғырҙарында, «Һалдат ҡатыны Хәмиҙә» повесында, Д.Юлтыйҙың фронт шиғырҙарында һәм Ғ.Ниязбаев менән Ғ.Ғүмәрскийҙың драмаларында тәнҡитле реализм методы өҫтөнлөк алыусы метод булараҡ нығына барҙы. Ләкин был осорҙа, киҫкен социаль бәрелештәр дәүерендә, башҡа йүнәлештәр ҙә шаҡтай көслө ине әле. Шуға күрә реалистик әҙәбиәттең еңеүе өсөн көрәш 20-се йылдарҙа ла дауам итте.

## Кескәйҙәрҙең оло донъяһы

Ата-бабаларыбыҙ баланы арбарҙай, уны мауыҡтырып һәм зауыҡландырып күңеленә изгелек орлоҡтарын сәсерҙәй әкиәттәр, бай тормош тәжрибәһенә нигеҙләнгән тапҡыр һүҙле, тәрән мәғәнәле мәҡәл һәм әйтемдәр, баланың зиһенен үҫтерерлек йомаҡтар ижад итеп ҡалдырһалар ҙа, Октябрь революцияһына тиклемге яҙма әҙәбиәтебеҙҙә балаларға тәғәйенләнгән әҫәрҙәр бик аҙ ине.

Шуға күрә М.Ғафури, Д.Юлтый, С.Ҡудаш, Т.Йәнәби, Б.Ишемғол, Ғ.Ғүмәр, Ғ.Амантай кеүек башҡорт совет әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусы яҙыусыларыбыҙ алдында, халыҡ ижады традицияларына һәм революцияға тиклемге башланғыстарға таянып, балалар әҙәбиәтен үҫтереү бурысы ла килеп баҫты.

Иҫкелек менән яңылыҡ араһындағы киҫкен көрәш атмосфераһында синфи дошмандарға ҡаршы әсе нәфрәт тойғоһо тәрбиәләү, совет ысынбарлығының гуманистик асылын раҫлау, йәш быуынды Октябрь революцияһының ҡаҙаныштарын яҡларҙай актив гражданин итеп тәрбиәләү мәсьәләләре егерменсе йылдар башында балалар әҙәбиәтенең дөйөм рухын билдәләне.

М.Ғафури «Ялсы», «Беҙ бәләкәй саҡтарҙа», «Хәҙер анһат ул, элек ҡыйын ине», Д.Юлтый «Бәләкәй Ҡотош» тигән хикәйәләрендә балаларҙы үткән ҡәһәрле тормош картиналары менән таныштырып, социалистик революцияның бөйөклөгөн тағы ла бер ҡабат һыҙыҡ өҫтөнә алһалар, Б.Ишемғол, Д.Юлтый, Ғ.Ғүмәр, Т.Йәнәби үҙҙәренең шиғырҙарында В.И.Ленинға, Коммунистар партияһына тоғролоҡ идеяларын алға һөрҙөләр. Октябрь революцияһының бөйөклөгө, В.И.Ленин һәм Тыуған ил тураһындағы, нигеҙҙә, ололар өсөн яҙылған публицистик рухтағы поэзияны өлкән йәштәге балалар

яратып уҡыһалар ҙа, егерменсе йылдарҙың тәүге яртыһында кесе йәштәге балалар үҙҙәренә тәғәйенләнгән әҫәрҙәргә ҙур ҡытлыҡ кисерә ине. Егерменсе йылдарҙың аҙаҡтары утыҙынсы йылдарҙың баштарында был өлкәлә йәнләнеү күренә башлай.

Б.Ишемғол «Пионер йырҙары» (1925), Ғ.Ғүмәр «Бер ҡыҙыл галстуктың күргәндәре» (1927) тигән шиғырҙар йыйынтыҡтарында башҡорт совет балалар поэзияһында тәүгеләрҙән булып пионерҙар тормошон яҡтыртыуға мөрәжәғәт иттеләр. Уларҙың был китаптары егерменсе йылдарҙағы пионерҙарҙың тормошон, уларҙың эскерһеҙ ынтылыштарын аҙмы-күпме сағылдыра алыуҙары менән әһәмиәтле.

Т.Йәнәбиҙең «Яҙ бүләге» (1928) менән Д.Юлтыйҙың «Сана шыуғанда» (1929) тигән шиғыр йыйынтыҡтары кесе йәштәге балалар тормошона яҡын булыуҙары һәм балаларҙың эстетик талаптарын күҙ уңында тотоп яҙылыуҙары менән айырылып торалар. Был йыйынтыҡтарҙа ауыл балаларының хеҙмәткә, уҡыуға мөнәсәбәте балалар һәм йәнле тәбиғәт темалары кәүҙәләнеш ала башланы.

Был осорҙа балалар поэзияһы өлкәһендә иң актив эшләгән шағирҙарҙың береһе Ғабдулла Амантай була. Ул «Бәләкәй дуҫтарға» (1928), «Тырыш Вәли» (1928), «Һыу буйында» (1930), «Сынаяҡ» (1931), «Йорт хайуандары» (1934), «Ала ҡарға әкиәте» (1935) кеүек китаптары менән башҡорт балалар поэзияһын үҫтереүгә ҙур өлөш индерә. Халыҡ ижадын йыйыусы һәм өйрәнеүсе талантлы ғалим балалар өсөн яҙғанда фольклор традицияларын уңышлы дауам иттереү менән бергә, К.Чуковский, С.Маршак кеүек рус совет балалар поэзияһы оҫталарының тәжрибәләренә лә мөрәжәғәт итә. Уның балалар өсөн яҙылған әҫәрҙәре, әле был осорҙа балалар әҙәбиәтенең үҙенсәлектәре һәм теоретик нигеҙҙәре хаҡында фәндә тотороҡло ҡараштар булмауына ҡарамаҫтан, юғары художестволылығы, халыҡсанлығы менән айырылып торалар.

Ғ.Амантайҙың балалар өсөн яҙған әҫәрҙәре егерменсе йылдарҙың аҙаҡтары һәм утыҙынсы йылдарҙың баштары өсөн үҙе бер күренеш булыуы шағирҙың талантына ла, донъя һәм рус әҙәбиәтен, уларҙың бай тәжрибәһен ижади үҙләштереү кимәленә күтәрелгән киң эрудициялы ғалим булыуына ла бәйле ине.

Сөнки егерменсе йылдарҙа башҡорт совет балалар әҙәбиәтенең үҫеше тигеҙ юлдарҙан ғына барманы. Был ҡаршылыҡтар йөкмәткелә лә, формала ла үҙен ныҡ һиҙҙерҙе. Поэзияла революцияға тиклемге мәғрифәтселек әҙәбиәтенә хас булған өгөт-нәсихәт биреү өҫтөнлөк алһа, прозала заман геройын һүрәтләүгә ҡарағанда үткән тормош материалына нигеҙләнгән темалар, ваҡиғаларҙы аңлатмалы һүрәтләү өҫтөнлөк алды.

Совет яҙыусыларының Беренсе Бөтә союз съезына тиклем балалар әҙәбиәтенең теоретик һәм ғилми-педагогик нигеҙҙәре тураһында берҙәм ҡараштар нығынып етмәгәйне әле. Бигерәк тә егерменсе йылдарҙың аҙаҡтарында үҙәк матбуғат биттәрендә балалар әҙәбиәте тураһында шаулы бәхәстәр булып ала. Вульгар социологтар, балалар әҙәбиәтен бөтөнләй яңыртыу линияһы үткәреү һылтауы менән, әҙәби мираҫты кире ҡағыуға, балалар әҙәбиәтенең тематикаһын сикләүгә барҙылар. 1927 йылда мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы тәрбиәләү буйынса булып үткән Өсөнсө Бөтә Россия съезында шулай уҡ балалар әҙәбиәтенән әкиәттәрҙе, хайуандар тураһындағы хикәйәләрҙе алып ташлау тураһында резолюция ҡабул ителә. Унда балаларға тик заман темаһына яҙылған әҫәрҙәрҙе генә тәҡдим итергә ҡушыла, яҙыусынан, уның фантазияһын сикләп, тормоштоң фотографик күсермәһен булдырыу ғына талап ителә.

Бындай теоретик яҡтан нигеҙһеҙ булған ҡараштар совет балалар әҙәбиәтенең үҫешенә байтаҡ зыян килтерҙе, рус совет әҙәбиәтенең Маршак, Чуковский кеүек оҫталарын, ваҡытлыса булһа ла, ситкә этәрҙе. Балалар әҙәбиәтендә, күңелле һәм мауыҡтырғыс әҫәрҙәргә юлды бикләп, яланғас схематизмға ҡоролған әҫәрҙәргә юл асты.

Шул ук ваҡытта, бөйөк пролетариат яҙыусыһы А.М.Горький, күренекле совет педагогтары Н.К.Крупская, А.С.Макаренколар рус революцион-демократтары В.Г.Белинский, Н.Г.Чернышевский, Н.А.Добролюбовтарҙың традицияларына таянып, балалар әҙәбиәте өлкәһендә вульгар социологтарға ҡаты отпор бирҙеләр, совет балалар әҙәбиәтенең ғилми-педагогик һәм теоретик мәсьәләләренә нигеҙ һалдылар.

Балалар әҙәбиәтенең тематикаһы хаҡында ҡыҙыу-ҡыҙыу бәхәстәр булған бер осорҙа, А.М.Горький менән А.С.Макаренко әҙәбиәтте тематик яҡтан сикләүҙәргә

ҡырҡа ҡаршы сығып, киреһенсә, балалар әҙәбиәтенең тематикаһын киңәйтеүҙе яҡлап сыҡтылар.

Совет яҙыусыларының Беренсе съезында талантлы балалар яҙыусыһы С.Маршак «Бәләкәйҙәргә ҙур әҙәбиәт тураһында» тигән тәрән йөкмәткеле доклад яһаны, унда рус совет балалар әҙәбиәтенең торошона баһа бирҙе. Совет балалар әҙәбиәтенең төп үҙенсәлектәренә баҫым яһап, уның алдында торған көнүҙәк проблемаларҙы асыҡланы. Беренсе съезда шулай уҡ А.М.Горький тәжрибәле яҙыусыларҙы балалар өсөн яҙыуҙан кәмһенмәҫкә, уға иң мөһим эштәрҙең береһе итеп ҡарарға саҡырҙы. М.Горький үҙенең докладында «һүҙ сәнғәтенең башы» булған фольклорға ҙур баһа бирҙе, уның тарихи әһәмиәтен асып һалды. Хеҙмәтсән халыҡтың һүҙ оҫталары тарафынан ижад ителеп, быуындан-быуынға рухи аманат булараҡ тапшырыла килгән фольклор әҫәрҙәрен йыйырға, унан өйрәнергә саҡырҙы. Балалар әҙәбиәтендә һоҡландырғыс эпик әҫәрҙәрҙең, әкиәттәрҙең, мәҡәл һәм йомаҡтарҙың традицияларына иғтибар бынан һуң бермә-бер артҡанлығы күҙәтелә.

Был утыҙынсы йылдарҙың икенсе яртыһында башҡорт балалар әҙәбиәтендә әкиәт жанрының, айырата шиғри әкиәттәрҙең йәнләнеп китеүендә һәм балаларҙың зауыҡтарына, заман талаптарына яуап бирерҙәй, идея-эстетик йөкмәткеләре совет ысынбарлығына тығыҙ бәйләнешле булған тиҫтәләрсә художестволы әкиәттәрҙең ижад ителеүендә лә асыҡ күренде.

Совет яҙыусыларының Беренсе съезы башҡорт яҙыусылары өсөн үҙе бер ижади мәктәп булды, бынан һуң туғандаш халыҡтарҙың яҙыусылары менән ижади бәйләнештәргә тағы ла киң юл асылды. Беренсе съездан һуң рус һәм башҡа туғандаш халыҡтарҙың балалар өсөн яҙылған әҫәрҙәрен башҡортсаға тәржемә итеүгә иғтибар көсәйҙе. Утыҙынсы йылдарҙа башҡорт балалары үҙ туған телендә рус классиктарынан Пушкин, Лермонтов, Тургенев, Толстой, Некрасов, Чеховтарҙың балалар өсөн яҙылған әкиәттәре, хикәйәләре һәм поэтик әҫәрҙәре менән таныштылар. Рус совет әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусы М.Горький, В.Маяковский, А.Фадеев, Н.Островский һәм рус совет балалар әҙәбиәтенең оҫталары С.Маршак, К.Чуковский, А.Гайдар, Л.Пантелеев, С.Михалков һәм башҡаларҙың әҫәрҙәрен тәржемә итеү ҙә башҡорт балалар әҙәбиәтенең үҫеше-

нә ыңғай йоғонто яһай, уның идея-эстетик кимәлен һәм тәрбиәүи ролен күтәрергә ғәйәт ҙур булышлыҡ итә.

Балалар әҙәбиәтенә ололар әҙәбиәте алдына ҡуйылған идея-эстетик талаптарҙан тыш, һәр тиҫтерҙең йәш үҙенсәлегенә ярашлы рәүештә, өҫтәлмә талаптар ҙа ҡуйыла. Яҙыусы иң элек нисә йәштәге балалар өсөн яҙылғанлығын күҙ уңында тоторға тейеш. Утыҙынсы йылдарҙа беҙҙең балалар әҙәбиәте ошо йәһәттән дә һиҙелерлек уңыштарға өлгәшә. Был осор һәр тиҫтерҙең үҙенә ярашлы рәүештә: мәктәпкәсә һәм кесе йәштәге мәктәп балалары өсөн шиғырҙар, йомаҡтар һәм әкиәттәр; урта һәм өлкән йәштәр өсөн проза жанрҙары — хикәйә һәм повестар үҫеш ала. Шулай итеп башҡорт балалар әҙәбиәтендә, йәш үҙенсәлегенең характерына ярашлы рәүештә, жанрҙарҙың ҡулайлашыу тенденцияһы башлана. Утыҙынсы йылдар балалар әҙәбиәтенән С.Ҡудаштың «Алтын асҡыс», «Урман әкиәте», Ғ.Амантайҙың «Ала ҡарға», Й.Гәрәйҙең «Суртан әмере буйынса», «Зирәк ҡуян», «Бәләнән нисек ҡотолдо көсөк», Ҡ.Даяндың «Эт нисек үҙенә хужа тапты», Х.Кәримдең «Ас бүре» тигән әкиәттәре, кесе йәштәгеләр өсөн яҙылған шиғырҙары һәм йомаҡтары, прозаик әҫәрҙәрҙән, Х.Мохтарҙың «Дауыл алдынан» тигән повесы, С.Ҡудаштың «Баярҙар бар саҡта» хикәйәһе, А.Карнайҙың «Турғай» тигән йыйынтығына тупланған романтик пафослы әҫәрҙәре башҡорт балалар әҙәбиәтенең алтын фондына инделәр.

Халыҡ-ара хәл шаҡтай ҡатмарлы бер осорҙа Ғ.Сәләм «Ҡыҙыл букет» балладаһы менән башҡорт балалар әҙәбиәтендә хәрби-патриотик теманы йәнләндереп ебәрҙе. Шулай уҡ Ғ.Сәләмдең «Республика иртәһе», Р.Ниғмәтиҙең «Йәмле Ағиҙел буйҙары» поэмалары, С.Кулибай, Б.Бикбай, Ә.Вәли, Ғ.Әмири, С.Ҡудаш, М.Хәй, М.Кәрим кеүек талантлы шағирҙарҙың патриотик шиғырҙары балаларҙа тыуған илгә мөхәббәт, дуҫлыҡ һәм интернационализм тойғоһон тәрбиәләүҙә ҙур роль уйнанылар.

Халыҡты еңеүгә рухландырыу, ил өҫтөнә килгән ауырлыҡтарҙы еңеп сығыу өсөн актив көрәшкә өндәү — Ватан һуғышы дәүерендәге совет әҙәбиәтенең төп бурысы булды.

Бөйөк Ватан һуғышы осоронда әҙәбиәттә фашист илбаҫарҙарына ҡарата асы нәфрәт, Тыуған илгә бирелгәнлек, патриотизм менән һуғарылған юғары публицистик рухтағы поэзия өҫтөнлөк итте. Был осорҙа Р.Ниғмәти, С.Ҡудаш, М.Кәрим, Б.Бикбай, М.Харис, Х.Кәрим, Ғ.Әмири һәм башҡаларҙың юғары патриотик шиғырҙары, «Үлтер, улым, фашисты», «Башҡортостан һүҙе», «Үлмәҫбай» кеүек киң билдәле поэмалар урта һәм өлкән йәштәге балаларҙың иң яратҡан әҫәрҙәре булды. Сөнки һуғыш дәүеренең поэзияһы күп яҡтары менән халыҡ ижадының героик традицияларын дауам иттерҙе, бөтә совет халҡының ҡаҡшамаҫ рухын сағылдырҙы.

Бөйөк Ватан һуғышы осоронда балалар әҙәбиәте лә үҫеүенән туҡтап ҡалманы. С.Агиш, Ғ.Ғүмәр, З.Биишеваның хикәйәләрендә, Р.Ниғмәти, С.Ҡудаштарҙың поэтик әҫәрҙәрендә совет балаларының тылдағы хеҙмәт героизмы, яу ҡырындағы батырлыҡтары аҙмы-күпме кәүҙәләнеш алды. Балалар әҙәбиәтендә халыҡтар дуҫлығының көсөн һәм бөйөк мәғәнәһен асыуға арналған әҫәрҙәр ҙә күренде.

Һуғыш осоро башҡорт балалар әҙәбиәтендә Р.Ниғмәтиҙең «Ҡыҙымдың һорауҙарына яуаптар» тигән поэмаһын, С.Агиштың һуғыш һәм тыл берҙәмлегенә, хеҙмәт темаһына арналған хикәйәләрен айырып күрһәтергә мөмкин.

Һуғыштан һуң балалар әҙәбиәтенең алдына ла совет халҡының оло яу ваҡытында күрһәткән ҡаһарманлығын, бөйөк еңеүҙең социаль-тарихи әһәмиәтен асырҙай, һуғыш дәүерендә халыҡтар дуҫлығының артабан нығыныуын күрһәтерҙәй әҫәрҙәр ижад итеү бурысы килеп баҫты. Әммә һуғыштан һуңғы тәүге биш йыл эсендә был темаларҙы тәрән итеп асырлыҡ әҫәрҙәр күренмәне. Ғөмүмән, һуғыштан һуң, илленсе йылдарҙың баштарына тиклем, балалар әҙәбиәтенең үҫеше үҙ ағышы менән барҙы. Был осорҙа Р.Ниғмәтиҙең «Киләсәккә сәйәхәт» поэмаһы ҡуйылған проблемаһының үткерлеге менән шаҡтай уңышлы әҫәр булды.

Әммә С.Кулибайҙың «Ҡоштар», З.Биишеваның «Йәнле хәрефтәр», Ғ.Әмириҙең «Кем көслө» кеүек шиғыр йыйынтыҡтары, С.Агиш, Ғ.Ғүмәр, Ә.Вәлиҙең хикәйәләре, айырым уңышлы яҡтары булыуға ҡарамаҫтан, балалар әҙәбиәтенә һынылыш алып килә алманылар.

Илленсе йылдарға тиклем беҙҙең балалар әҙәбиәтендә ҙур күләмле әҫәрҙәр бик аҙ ине. Илленсе йылдарҙа башҡорт балалар әҙәбиәтенең күләм һәм сифат яғынан үҫеше повесть жанрының ишәйеүендә күренде. Был жанрҙың йылдам үҫеш юлына сығыуы башҡорт балалар әҙәбиәтенең өлгөрөү дәүеренә аяҡ баҫыуы хаҡында һөйләй ине. Сөнки кесе йәштәге балаларҙы хикәйә, әкиәт, шиғыр кеүек жанрҙар ҡәнәғәтләндереп килһә, урта һәм өлкән йәштәгеләрҙе хикәйәләр генә ҡәнәғәтләндермәй, уларға көтөлмәгән ваҡиғалар менән тулы көсөргәнешле сюжетҡа ҡоролған повестар кәрәк. Повесть урта һәм өлкән йәштәге балаларҙың иң яратҡан жанры.

Илленсе йылдарҙың тәүге яртыһында К.Мәргәндең «Ҡариҙел», М.Кәримдең «Беҙҙең өйҙөң йәме», З.Биишеваның «Дуҫ булайыҡ» тигән уңышлы повестары баҫылып сыҡты. Һуңыраҡ бөгөнгө балалар әҙәбиәтенең төп көстәре Ә.Бикчәнтәев, Ф.Иҫәнғолов, Р.Ғабдрахмановтарҙың тәүге повестары донъя күрҙе. Был әҫәрҙәрҙә балаларҙы коммунистик рухта тәрбиәләү өсөн мөһим булған халыҡтар дуҫлығы, коллективизм, хеҙмәт темалары бай тормош материалына нигеҙләнеп күтәрелде.

Илленсе йылдарҙың урталарында балалар поэзияһында ла йәнләнеү осоро башланды. Поэзияға бала тәбиғәтенә яҡын торған, кесе йәштәге балалар психологияһын һәйбәт белгән К.Кинйәбулатова, Ф.Рәхимғоловалар ныҡлап аяҡ баҫты. Ш.Биҡҡол, М.Ғәли, Х.Ғиләжев, Ғ.Рамазановтарҙың балалар өсөн яҙылған шиғырҙары һәм поэмалары балалар поэзияһының тематикаһын байытты, жанрҙарын төрләндереүгә булышлыҡ итте. Халыҡтар дуҫлығы, тыныслыҡ өсөн көрәш темалары урта һәм өлкән йәштәргә тәғәйенләнгән поэзияла үҙәк темалар булып күтәрелде.

Шул уҡ ваҡытта был осорҙа беҙҙең балалар әҙәбиәте айырым етешһеҙлектәрҙән дә азат түгел ине. Был осор урта һәм өлкән йәштәгеләргә тәғәйенләнгән поэзия яланғас риториканан, декларативлыҡтан йонсоһа, проза, айырата хикәйә жанры конфликтһыҙлыҡ ауырыуынан ыҙаланы. Был етешһеҙлектәр шул замандағы әҙәби тәнҡиттә лә күрһәтелеп үтелде.

«Балалар өсөн яҙылған беҙҙең әҫәрҙәр, — тип яҙҙы З.Биишева, — күп ваҡыт берәй хәлде ябай һөйләп сығыуҙан уҙмайҙар. Уларҙа балаларҙы мауыҡтырғыс

ҡоролмай, тема ҡыҙыҡлы ситуациялар, ваҡиғалар, типик образдарҙың типик кисерештәре, поступкалары аша сиселмәй. Образдар асыҡ буяуҙар менән һүрәтләнмәй, ә автор улар тураһында ҡытыршы һәм сөсө тел, һалҡын ҡан менән үҙе һөйләй» («Әҙәби Башҡортостан, 1955, №6»).

Совет әҙәбиәте үҫеше тарихының хәҙерге осоро тип аталған дәүере егерме йылдан ашыу ваҡытты үҙ эсенә ала. Билдәле булыуынса, был һуңғы дәүер илленсе йылдарҙың икенсе яртыһынан КПСС-тың тарихи XX съезынан һуң башланды һәм был осор илебеҙҙең ижтимағи-политик, социаль-экономик, фән һәм культура йәһәтенән, ғөмүмән, төрлө яҡлап нык үҫешкән социализм дәүеренә аяҡ баҫыуы менән характерлана. Был дөйөм рухи күтәренкелек дәүерендә башҡорт совет әҙәбиәте, шул иҫәптән балалар әҙәбиәте, ҙур уңыштарға өлгәште.

Башҡорт балалар әҙәбиәтенең ошо һуңғы осорҙағы үҫешенә яҡынса ҡараш ташлағанда, уның жанрҙары төрлөләнә, тематикаһы артабан байый, художество кимәле камиллаша барғанлығы күренә. Ошо һуңғы дәүерҙә совет халҡы Бөйөк Октябрь революцияһының 50 һәм 60 йыллыҡтарын, СССР төҙөлөүҙең 50 йыллығын, В.И.Ленин тыуыуына 100 йыл тулыу юбилейын киң билдәләп үтте. Тарихи даталарҙы байрам итеү совет халҡының революция ҡаҙаныштарына тоғролоғон, уның үҙ-ара дуҫлығы һәм берҙәмлеге тағы ла нығый һәм көсәйә барыуын күрһәтте. Халҡыбыҙ оло юбилейҙарҙы байрам итеү уңайы менән үҙенең үткән юлына тағы ла бер әйләнеп ҡараны һәм, бөгөнгө юғарылыҡтан тороп, киләсәккә бурыстарын билдәләне.

Партиябыҙ һәм хөкүмәтебеҙ йәш быуынды тәрбиәләүҙә мөһим урын тотҡан балалар әҙәбиәте тураһында даими хәстәрлек күрә.

КПСС Үҙәк Комитеты һәм СССР Министрҙар Советы «Балалар әҙәбиәтен артабан үҫтереү саралары тураһында»ғы ҡарарында йәш быуынды коммунистик рухта тәрбиәләүҙә совет балалар әҙәбиәтенең ҙур урынын билдәләп үтеү менән бергә, яҙыусыларҙы совет халҡының героик үткәне, яу һәм хеҙмәт ҡаһарманлығы Ленин партияһы һәм комсомолы, В.И.Лениндың тормошо һәм эшмәкәрлеге хаҡында юғары художестволы әҫәрҙәр тыуҙырырға саҡырҙы.

Тәбиғи, В.И.Лениндың тыуыуына 100 йыл тулыу уңайы менән әҙәбиәттә юлбашсының тормошон һәм революцион эшмәкәрлеген кәүҙәләндереүгә ынтылыш көсәйҙе. Был осорҙа башҡорт ленинианаһына яңы әҫәрҙәр өҫтәлде. М.Ғәлиҙең, Р.Бикбаевтың юлбашсы тураһында уңышлы поэмалары баҫылып сыҡты. Бер төркөм шағирҙар күмәкләп «Ленин менән һөйләшеү» тигән поэма ижад иттеләр. Башҡорт шағирҙарының юлбашсы тураһындағы иң һәйбәт шиғырҙары балалар өсөн айырым йыйынтыҡ итеп баҫтырылып сығарылды.

Беҙҙең Башҡортостан халҡы В.И.Лениндың ике тапҡыр Өфөлә булып китеүе һәм урындағы революционерҙар менән бәйләнеш урынлаштырыуы, Бөйөк Октябрь социалистик революцияһынан һуң, Башҡорт автономиялы республикаһын төҙөүҙә туранан-тура ҡатнашыуы менән хаҡлы рәүештә ғорурлана. Әммә юлбашсы тормошондағы был тарихи ваҡиғалар әлегә беҙҙең әҙәбиәттә етерлек дәрәжәлә кәүҙәләндерелмәгән. Беҙҙең яҙыусылар был йәһәттән айырата балалар алдында бурыслы булып ҡалалар.

Әҙәбиәттә тарихи-революцион тема тип әйтәбеҙ икән — беҙ иң элек тарихи шәхестәрҙең, революционерҙарҙың, Граждандар һуғышы геройҙарының эшмәкәрлеген күҙ уңында тотабыҙ. Башҡортостанда В.И.Лениндың көрәштәштәре Н.К.Крупская, И.С.Якутов, Н.Д.Цюрупа кеүек күренекле революционерҙар йәшәгән. Уларҙың революцион эшмәкәрлеге Өфө һәм Башҡортостан менән тығыҙ бәйле. Һуңғы йылдарҙа шулай уҡ В.И.Лениндың Өфөлә булыуы менән бәйләнешле яңы документтар табылды, уның Әлшәйҙә булып китеүе раҫланды, тарихсылар хәҙерге көндә юлбашсының Бөрөлә, Иҫке Ҡыйышлы ауылында булыуын асыҡлау менән шөғөлләнәләр. Былар бөтәһе лә беҙҙең яҙыусыларыбыҙға тарихи-революцион темала ҡолас йәйеп эшләргә мөмкинлек бирә.

Революция һәм граждандар һуғышы башҡорт халҡы араһында күренекле революционерҙар тыуҙырған. Уларҙың тормошо, революцион эшмәкәрлеге хаҡында тарихи әҫәрҙәр ижад итеү башҡорт яҙыусыларының изге бурысы. Һуңғы йылдарҙа балалар поэзияһында был өлкәлә Ғ.Рамазанов актив эшләне. Уның Петроградты һаҡлауҙа ҡатнашҡан башҡорт атлыларына арналған «Байраҡ тураһында поэма»һын балалар йылы

ҡабул итте. Әҙәбиәтебеҙҙә шулай уҡ Ш.Хоҙайбирҙин, Б.Шәфиев, Ш.Фидаиҙар тураһында әҫәрҙәр тыуа башлауы күңелле хәл.

Әлбиттә, революция һәм Граждандар һуғышы темаһы тарихи шәхестәрҙең эшмәкәрлеге менән генә сикләнеп ҡалмай, азатлыҡ өсөн көрәш яуында исемдәре билдәле булмаған киң ҡатлам халыҡ массаһы вәкилдәре ҡатнашҡан. Шулай уҡ Башҡортостанда Граждандар һуғышы урап үткән ауылды табыуы ҡыйын. Был факт беҙҙең яҙыусыларыбыҙҙың ижад фантазияһына киң мөмкинлектәр аса. Шуға күрә хәҙерге көндә ҙур прозабыҙҙа был тема үҙәк темаларҙың береһе итеп күтәрелә. Балалар прозаһында ла Д.Юлтый, Х.Мохтарҙар исеме менән бәйле үҙ традицияларыбыҙ нығынып килә. Был традиция революцион көрәштә һәм Граждандар һуғышында ҡатнашҡан балаларҙың героик образдарын тыуҙырыуға ҡайтып ҡала. Ш.Насыров «Һыңар ҡолаҡ Хисами» хикәйәһендә, Р.Ғабдрахманов «Алыш», «Яҙғы рашҡы», В.Исхаҡов «Комиссар һеңлеһе» тигән повесында ошо традицияларҙы дауам иттерҙеләр. Ф.Иҫәнғоловтың «Ҡайҙа һеҙ, Питр малайҙары» тигән повесы был йәһәттән һуңғы йылдарҙың ҡаҙанышы булды. Повеста Граждандар һуғышы осоронда Петроградтан Өфө балалар йортона килгән етем балаларҙың тормошо, уларҙың башҡорт балалары менән дуҫлашыуы, был дуҫлыҡтың Граждандар һуғышы шарттарында нығыныуы мауыҡтырғыс, мажаралы ваҡиғалар аша һүрәтләнә.

Бөгөнгө менән тарихи үткән араһына күпер һалып, Граждандар һуғышы иҫтәлектәре менән бөгөнгө балалар тормошон оҫта бәйләүе яғынан Р.Ғабдрахмановтың «Биш батырҙың алты ейәне», Ф.Иҫәнғоловтың «Батырҙар утрауы» повестары алтмышынсы йылдар балалар прозаһында һиҙелерлек күренеш булғайны. 1973 йылда Кирәй Мәргәндең «Юйылған эҙҙәр» тигән мауыҡтырғыс повесы баҫылып сыҡты. Повестағы ваҡиғалар беҙҙең көндәрҙә бара. Йомран ауылы мәктәбенең ҡыҙыл эҙәрмәндәр отряды, үҙҙәренә лайыҡлы эш таба алмай ҡаңғырып йөрөгән бер мәлдә, быуындан-быуынға күсә килгән ырыу шәжәрәһенә барып юлығалар. Ләкин ҡыҙыл эҙәрмәндәр отрядының председателе Фаршат Имашевҡа шәжәрә күңелһеҙ яңылыҡ аса: шәжәрәлә унының олатаһы Ҡәнзәфәр Имашев исеме аҫтына «Ҡыҙылдар

тарафынан атылмыштыр» тип яҙылып ҡуйылған. Граждандар һуғышында ҡыҙыл комиссар булып йөрөгән һәм ревком йортонда кемдер тарафынан үлтерелеп ташланған олатаһының халыҡ дошманы булып сығыуына Фаршаттың ышанғыһы килмәй. Улар эҙләнеүҙе дауам итәләр. Малайҙарҙың эҙләнеүҙәре һөҙөмтәһеҙ ҡалмай. Ҡәнзәфәр Имашевты үлтереүсе лә, «ҡыҙылдар атып киткән» тип хәбәр таратыусы ла, үҙе аҡтар яғында йөрөп, ялған юл менән ҡыҙыл партизан танытмаһын алып ҡайтҡан Фәхретдин ҡарт булып сыға. Ул шәжәрәне күсереп яҙғанда Ҡәнзәфәр исеме аҫтына «ҡыҙылдар тарафанан атылмыштыр» тигән аңлатманы үҙенең бысраҡ эштәрен юйыу өсөн өҫтәп ҡуйған була. Шулай итеп, үҙе үлгәс булһа ла, Фәхретдин ҡарттың енәйәте фашлана, ҡыҙыл комиссарҙың ейәне Фаршат олатаһы исеменә төшкән ҡара тапты юйып ташлауға булышлыҡ итә. Күренеп торғанынса, К.Мәргән повеста һүҙҙе шәжәрәнән башлап ебәреп, уны Граждандар һуғышы һәм бөгөнгө менән оҫта итеп килтереп бәйләп, балалар мауығып уҡырлыҡ әҫәр тыуҙырған. Шуның менән бергә был повестың композицияһы һәм сюжеты Р.Ғабдрахманов һәм Ф.Иҫәнғоловтың атап кителгән повестарына яҡын тороуын һәм ошо факт әҫәрҙең оригиналь яңғырашына шаҡтай ҙур зыян килтереүен дә билдәләп үтергә кәрәк.

Бөгөнгө йәш быуынды совет патриотизмы рухында тәрбиәләүҙә балалар әҙәбиәтендә тарихи-революцион тема кеүек үк Бөйөк Ватан һуғышы темаһы — үҙәк темаларҙың береһе.

Һуғыш ауырлыҡтарын үҙ елкәһендә татыған фронтовик яҙыусыларыбыҙҙың ижадында был тема шаҡтай киң сағылыш алды. Беҙҙең әҙәбиәттә урта быуын яҙыусыларынан М.Кәрим, Н.Нәжми, Х.Ғиләжев, Х.Кәрим, Ғ.Әмири, Ғ.Рамазанов. Ә.Бикчәнтәев, Д.Исламов, М.Ғәли, Ш.Биҡҡолдарҙың ижадын Ватан һуғышы темаһынан башҡа күҙ алдына килтереүе ауыр. Әлбиттә, был фронтовик яҙыусыларыбыҙҙың күпселеге ололар өсөн ижад итә. Әммә Бөйөк Ватан һуғышы темаһына яҙылған уңышлы шиғыр һәм поэмаларҙы, прозаик һәм драматик әҫәрҙәрҙе балалар ҙа яратып уҡыйҙар. Балалар әҙәбиәтенә килгәндә, Бөйөк Ватан һуғышы темаһына иң актив яҙыусыларҙың береһе — Әнүәр Бикчәнтәев. Уның яҡташыбыҙ Александр Матросовтың подвигына

арналған «Бөркөт һауала үлә», һуғыш осоронда балаларҙың партизандар отрядында күрһәткән батырлыҡтарын кәүҙәләндергән «Нисә йәш һиңә, комиссар?», «Хушығыҙ, көмөш ямғырҙар» тигән повестары Бөтә союз балаларына киң билдәле. Ғөмүмән, Ә.Бикчәнтәев балалар әҙәбиәтендә иң уңышлы эшләгән яҙыусыларыбыҙҙың береһе. Уның һәр яңы әҫәре балаларға ҡыуаныс алып килә. Республика балалар китапханаһында уның әҫәрҙәре тураһында бик күп хаттар, отзывтар тупланған. Был хаттарҙан күренеүенсә, Ә.Бикчәнтәевтың балаларға оҡшамаған әҫәрҙәре, үҙҙәрен оҡшатырға теләмәгән ыңғай геройҙары юҡ. Яҙыусы беҙҙең балалар әҙәбиәтендә А.Гайдар традицияларын уңышлы үҫтерә. Уның әҫәрҙәренә сөсөләнеү, балаға бала итеп ҡарау хас түгел. Йәш геройҙары ололарса олпат, етди ҙә, шул ук ваҡытта балаларса эскерһеҙ образдар. Яҙыусы һәр әҫәрендә уҡыусыны китаптың тәүге битенән алып үҙенә йәлеп итерҙәй художестволы алымдар менән эш итә, бала уның китабын ҡулына ала икән уҡып бөтмәйенсә ташлай алмай.

Өлкән йәштәге балалар өсөн К.Кинйәбулатова Бөйөк Ватан һуғышында батырҙарса һәләк булған яҡташыбыҙ Маһипәрүәз Сакаева тураһында «Тереләргә әйтер һүҙ» тигән повесть яҙҙы. Китаптың йөкмәткеһенән күренеүенсә, яҙыусы Мәһипәрүәз тәрбиәләнеп үҫкән, уның донъяға ҡарашы формалашҡан мөхит, героиняның балалыҡ йылдары тураһында бай материал туплаған. Маһипәрүәздең батырлыҡтарын революцион традициялар, совет мәктәбенең тәрбиәүи роле менән бәйләү — повестың төп уңышы. Әммә повеста Маһипәрүәздең һуғыш яланында күрһәткән батырлыҡтары эпизодик характерҙа ғына сағылыш алған. Повеста ваҡиғалар бөтәһе лә Маһипәрүәздең тереләргә әйтер һүҙе — монологы формаһында һөйләтелә. Ләкин эпик һүрәтләүҙәр талап итеп торған героик йөкмәткене лирик монолог алымы менән бирергә тырышыу яҙыусының мөмкинлектәрен сикләгән булһа кәрәк. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ҡыйыу яҡташыбыҙға бер иҫтәлек булыу йәһәтенән, повестың балалар әҙәбиәте тарихында үҙ урыны бар.

Һуңғы йылдарҙа, шулай уҡ Ватан һуғышы осоронда, тылдағы балаларҙың тормошон, улар елкәһенә төшкән ауырлыҡтарҙы, балаларҙың һәм үҫмерҙәрҙең хеҙмәт ба-

тырлыҡтарын һүрәтләүгә арналған байтаҡ яңы әҫәрҙәр тыуҙы. Был теманы һуғыш дәүерендә үк «Минең өс айым» әҫәре менән С.Агиш башлап ебәргәйне. Һуңғы йылдарҙа Р.Ғабдрахмановтың «Ҡышҡы һалҡын көндәрҙә», Р.Низамовтың «Ят кешеләр», К.Кинйәбулатованың «Атай тауышы», Й.Солтановтың «Таң нурҙары», Н.Мусиндың «Һуғыш уйын түгел», F.Шәриповтың «Атайҙар яуҙа саҡта», Ф.Иҫәнғоловтың «Урман ситендәге имәндәр» повестары һәм тиҫтәләрсә хикәйәләр ижад ителде.

Тәбиғи, был әҫәрҙәр тематик яҡтан бер-береһенә бик яҡын торалар. Уларҙа тормоштан килгән уртаҡ мотивтар, оҡшаш хәл-ваҡиғалар ҙа юҡ түгел. Был етешһеҙлек, әлбиттә, тормош материалы етерлек дәрәжәлә анализламай, ижад процесында хәтирәләр стихияһына бирелеүҙән дә килә торғандыр. Әммә быңдай ҡабатлауҙар һуңғы йылдарҙағы балалар прозаһында йышая барыуы темаға бөгөнгө юғарылыҡтан ҡараштың етерлек дәрәжәлә булмауы менән дә бәйле.

Был сериянан Ф.Иҫәнғоловтың «Урман ситендәге имәндәр» повесы уҙған яу йылдары менән бөгөнгө тормошто бәйләп, уҙғанға бөгөнгө юғарылыҡтан баһа бирергә ынтылыуы менән айырылып тора. Яҙыусы повеста тормошто ябай һүрәтләү, ваҡиғаларҙы һөйләп биреү менән генә сикләнмәй, балалыҡ һәм йәшлек йылдары һуғыш осорона тура килеп, бәләкәйҙән тормош ауырлығын үҙ елкәһендә татыған бер быуындың яҙмышы, тормоштағы урынына ҡағылышлы фәлсәфәүи дөйөмләштереүҙәр яһай. Ғәрәсәтле яу йылдарында, быуындары ҡатмаҫ борон көсәнеп, ил өҫтөнә төшкән ауырлыҡты күтәрешкән, шуға күрә ғәҙәттәгенән иртәрәк ҡартайған был быуынды яҙыусы урман ситендәге имәндәр менән сағыштыра.

Ғөмүмән, балалар өсөн яҙылған әҫәрҙәр ҙур тормоштан айырылмайынса, шул ҙур тормош, тарихи ваҡиғалар фонында яҙылһа ғына уңышҡа ирешә. Әгәр ҙә сюжет нигеҙенә тик балалар араһындағы мөнәсәбәттәр генә алына икән, быңдай әҫәрҙәр күпселектә уңышһыҙлыҡҡа осрай. Беҙҙең башҡорт балалар прозаһындағы «Бәләкәй Ҡотош», «Дауыл алдынан», «Дуҫ булайыҡ», «Беҙҙең өйҙөң йәме», «Мажаралы юл», «Ҙур оркестр», «Нисә йәш һиңә, комиссар?», «Урман ситендәге имәндәр» кеүек әҫәрҙәрҙең уңышы, уларҙың төп геройҙары балалар булһа ла, ваҡиғалар ҙур тормоштоң уратылы-

шында, уның айырылмаҫ бер өлөшө итеп кәүҙәләндереүендә.

Һуңғы йылдарҙа ғаилә һәм хәҙерге мәктәп, пионерҙар тормошона арналған, туранан-тура тәрбиә мәсьәләләре күтәрелгән повестар ҙа тыуа башланы.

Р.Ғабдрахмановтың 1974 йылда баҫылып сыҡҡан «Тал бөрөһө» тигән повесы шундай әҫәрҙәрҙең береһе.

Повесть хәҙерге мәктәп тормошон, уҡыусылар менән уҡытыусылар, педагогик коллектив менән ата-әсәләр араһындағы нескә мөнәсәбәттәрҙе һүрәтләй. Әҫәрҙең төп идея-эстетик йөкмәткеһе балаларҙа дуҫлыҡ һәм туғанлыҡ, гуманизм һәм интернационализм тойғоларын тәрбиәләү. Әҫәрҙең был төп идея йөкмәткеһен асыу өсөн яҙыусы етди тормош материалына мөрәжәғәт иткән. Повестың төп конфликты атаһы Чехословакиялағы реакцион көстәрҙең фетнәһен баҫтырыуҙа батырҙарса һәләк булыуы ҡайғыһынан бөгөлөп төшкән 4-се класс уҡыусыһы Вәсиләне уҡыуҙа һәм тормошта аяҡҡа баҫтырыу өсөн көрәш, был көрәштә уҡытыусылар коллективы, ҡыҙҙың класташтары, ата-әсәләр араһындағы килеп тыуған мөнәсәбәттәрҙән һәм ҡаршылыҡтарҙан ғибәрәт.

Яҙыусы, тәрбиә мәсьәләһенә төрлөһө төрлөсә ҡарап, һәр береһе үҙенсә хаталанған Тәхиә, Мәфтуха, Заман кеүек ата-әсәләрҙең характерҙарына шаҡтай уңышлы анализ яһаған кеүек, Ырыҫбай ҡарт, Вәсиләнең әсәһе Гөлйөҙөм, уҡытыусы Ғәҙилә, уҡыусылар Вәсилә, Наза, Күркәм, Ғәзиздәрҙең күңел диалектикаһын да ҙур оҫталыҡ менән сағылдыра алыуға өлгәшкән.

Повеста уҡытыусы Ғәҙилә Вәлиевнаның балаларҙа ысын дуҫлыҡ һәм туғанлыҡ тойғоларын тәрбиәләүҙә Вәсиләнең атаһы Аҡъегет ағайҙың күрһәткән батырлығын ғына түгел, уның көндәлек дәфтәрен, дуҫлыҡ тураһында үҙ тәжрибәһенә таянып ижад иткән мәҡәлдәрен һәм хикмәттәрен дә уңышлы файҙаланыуы, Чехословакия пионерҙары менән хатлашыу, улардан посылка менән Аҡъегет ағайҙың ҡаны тамған тупраҡ һәм гөл орлоҡтары алыу ваҡиғалары, дуҫлыҡтың көсөнә арналған дружина сборы, дуҫлыҡ гөлдәрен сәсеү картиналары — бөтәһе лә бер мәктәп уҡытыусылары араһындағы дуҫлыҡты һәм берҙәмлекте нығытыу маҡсаты менән генә сикләнеп ҡалмай, әҫәрҙең социаль яңғырашын көсәйтә

һәм ҙур идея — интернациональ дуҫлыҡ идеяһын асыуға ярҙам итә.

Былар повестың уңышлы яҡтары. Әммә Р.Ғабдрахманов повестың аҙағында сама тойғоһон юғалтып, әҫәрҙе бер аҙ яһалмараҡ тамамлап ҡуйған. Сөнки Аҡъегеттең Чехословакияла үлеп ҡалыуы аҡланһа ла, Вәсиләнең әсәһе, унан һуң тағы өләсәһе кеүек кеше Йомартбикә әбейҙең үлеме художестволы яҡтан аҡланмай. Бында инде автор сюжет ҡороуҙа трафарет алымға юлыҡҡан, әҫәрҙәге ваҡиғаларҙың көсөргәнешлелеген бер-бер артлы килгән үлем эҙемтәләренә генә бәйләп, еңел юлға баҫҡан. Был күренеш һәйбәт повестың идея-эстетик йөкмәткеһенә шаҡтай ҙур зыян килтергән.

Һуңғы йылдарҙа башҡорт балалар әҙәбиәтендә тыуған ергә, тәбиғәткә, халыҡтарыбыҙҙың һәйбәт традицияларына мөхәббәт тәрбиәләүсе әҫәрҙәр ҙә йышыраҡ күренә башланы.

Туған тәбиғәтте, уның ҡырағай ҡош-ҡорттарын һаҡлау Н.Мусиндың балалар өсөн яҙылған әҫәрҙәренең төп проблемаһы булып тора. Урман тормошон, хайуандар донъяһын яҡшы белгән яҙыусы балаларға урмансылар, һунарсылар тормошоноң мауыҡтырғыс яҡтарын оҫта итеп һөйләй ҙә белә. Уның һуңғы йылдарҙа баҫылып сыҡҡан «Беҙ — ауылдаш малайҙар», «Аҡ юл һиңә» тигән китаптарына тупланған хикәйә һәм повестары һәм «Зәңгәрһыу хикәйәләре», «Атайымдың ос һәнәге» кеүек әҫәрҙәре иң элек ошо яғы менән отошло.

Ш.Янбаевтың «Ерем — ете ҡат», «Туған моңдар» тигән повестары ла хәҙерге ауыл балалары тормошон кәүҙәләндерә. Авторҙың «Туған моңдар» повесы балалар әҙәбиәтендә сәнғәттең халыҡ тормошо, халыҡ ижады традициялары менән тығыҙ бәйләнеше мәсьәләһе ҡуйылыуы һәм уңышлы хәл ителеше менән үҙе бер күренеш булып тора. Ш.Янбаев повестарында бала күңелен арбаған нәмә — яҙыусының характерҙарҙы колоритлы итеп бирә белеүендә. Уның йәш геройҙары эскерһеҙлеге, балаларға хас шуҡлыҡтары,ололары — тормошсан, колоритлы характерҙар булыуы менән айырылып торалар. Ш.Янбаев повестарында балалар менәнололар араһындағы мөнәсәбәттәр ҙә тәбиғи һәм тормошсан. Уның хикәйәләү стиле талғын, теле халыҡсан һәм юғары художестволы.

Шул уҡ ваҡытта балалар прозаһында хәҙерге заман темаһына тотонған яҙыусылар социаль яңғырашлы, етди конфликт таба алмай йонсоуҙары ла күҙгә ташлана.

Балалар прозаһында сюжет ике баланың ыҙғышыуынан башланып, уларҙың ололар ҡатнашлығы йәки теге йәки был тормош һынауы үткәс, дуҫлашыуы менән тамамланған әҫәрҙәр хәҙерге әҙәбиәткә яңылыҡ өҫтәй алмай.

Әлбиттә, балалар әҙәбиәтендә конфликт мәсьәләһе — иң ауыр мәсьәләләрҙең береһе. Ләкин хәҙерге мөғжизәле заманда тормошсан конфликттар ҙа, балалар әҙәбиәтендә күтәрерлек мөһим проблемалар ҙа аҙ түгел. «Балалар» әҙәбиәте «ололар» әҙәбиәтенән ни нәмә хаҡында яҙылыуға ҡарап түгел, бәлки, нисек, ни рәүешле яҙылыуға ҡарап айырыла», — тигән А.С.Макаренко. (Әҫәрҙәр, 7 том, 186 бит.) Тимәк, балалар әҙәбиәтенең мөмкинлектәре ололар әҙәбиәтенән бер ҙә кәм түгел, тик әҫәрҙең темаһы, унда ҡуйылған проблема балаларға аңлайышлы алымдар, еңел тел менән сиселергә тейеш.

Хәҙерге көндә беҙҙең балалар әҙәбиәте быуындар алмашыныу ауырлыҡтарын да кисерә. Алтмышынсы йылдарҙа балалар прозаһына аяҡ баҫҡан Р.Сәғәҙиев, Ә.Хәмәтдинова, Д.Бүләков, Х.Түләкәев, Ә.Бикҡоловтарҙың тәүге хикәйә китаптары кесе йәштәге балалар өсөн был жанрҙың йәнләнеүенә килтергәйне. Әммә был йәштәрҙең күбеһе хәҙер балалар, мәктәп тормошонан алыҫ торалар. Шуға күрә улар әлегә, нигеҙҙә, бер тирәлә тапаналар. Газета һәм журналдарҙа, китап нәшриәтендә балалар прозаһына, айырата хикәйәләргә талаптарҙың йомшаҡ булыуы һәләтле һәм йәш авторҙарҙы еңел юлға ла баҫтырыуына күҙ йомоп ҡарарға ярамай. Сөнки хәҙерге көндә әҙәбиәткә килеүсе йәштәр әҙәби яҡтан шаҡтай әҙерлекле быуын, уларға оҫталыҡ етешмәй, тип әйтеүе ҡыйын. Киреһенсә, хәҙерге көндә «шымарып алыу» ҡурҡынысы көслөрәк. Яҙыусы «шымарып» алдымы, уның әҫәренә бер яҡлап та тел тейҙереп булмай, әммә әҫәр баланың күңеленә ятмай ҙа ҡуя. Ундай әҫәрҙәр йә бик схематик әҫәр булып сыға, йә элек уҡығанды хәтерләтә. Һуңғы йылдарҙа балалар матбуғаты биттәрендә бына шундай йәш авторҙарҙың һәләтенән түбән булған байтаҡ хикәйәләр донья күрҙе. Балаларға ҡанат ҡуйырҙай романтика, сюжет

көсөргәнеше, тормошсан конфликттар етешмәй беҙҙең бөгөнгө хикәйәләргә. Беҙҙең балалар прозаһы һуңғы йылдарға тиклем бер яҡлыраҡ үҫеп килде. Беҙҙә мауыҡтырғас сюжетҡа ҡоролған мажаралы әҫәрҙәр, фәнни-фантастика, фәнни-популяр әҙәбиәт бөтөнләй юҡ дәрәжәһендә ине. Һуңғы осорҙа бындай төр әҫәрҙәр ҙә күренә башланы. Ф.Лоҡмановтың «Ер аҫтында ай ярым» тигән мажаралы повесы, К.Хәмитовтың «Серле сигналдар эҙенән» тигән фәнни-фантастик, геолог Д.Бураҡаевтың «Серҙәр донъяһына сәйәхәт», «Аждаһа күле» тигән фәнни-популяр әҫәрҙәре баҫылып сыҡты. Д.Бураҡаевтың «Аждаһа күле» тигән китабындағы «Теш матдәһе» тигән фәнни-фантастик хикәйәһе авторҙың был өлкәлә уңышлы эшләй алыуы хаҡында һөйләй. 1978 йылда «Пионер» журналы биттәрендә Б.Рафиҡовтың «Лоулла» исемле фәнни-фантастик әҫәре донъя күрҙе. Был факттар башҡорт балалар әҙәбиәтендә лә фәнни-фантастика формалашып килеүен күрһәтә.

Балалар әҙәбиәтендә әкиәт — төп жанрҙарҙың береһе. Ләкин халыҡ әкиәттәрендәге фантазия тормошҡа ашырылған бөгөнгө көндә, балаларҙың күңелен арбарҙай әкиәт ижад итеү бик еңел эш түгел. Башҡорт халыҡ ижады әкиәттәргә бик бай. Хәҙерге көндә Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты фольклорсылары тарафынан әҙерләнгән дүрт томлыҡ халыҡ әкиәттәренең өс китабы баҫылып сыҡты. Был дүрт томға халыҡ күңелендә быуаттар буйы һаҡланып, шымартыла һәм камиллаша килгән әкиәттәр тупланған. Шуға күрә әҙәби әкиәт яҙыусы автор иң элек ошо ҙур мираҫты күҙ уңында тоторға тейеш. Уның аҡка ҡара менән яҙған әкиәте халыҡ әкиәттәренә берәй нәмә өҫтәйме, уҡыусыға ниндәй яңы фекер, ғибрәт бирә? Әгәр ҙә ошо һорауҙарға ыңғай яуап бирә алмай икән, тел, стиль йәһәтенән халыҡ әкиәттәренән күпкә түбән икән — был жанрға тотоноуҙың кәрәге юҡ. Беҙҙең башҡорт балалар әҙәбиәтендә әкиәт жанры үҫешенең үҙ тарихы бар. Әкиәт айырата утыҙынсы йылдарҙа йәнләнеү осорон кисерә. Илленсе йылдарҙа Ж.Кейекбаев үҙенең «Урман әкиәттәре» менән әҙәби әкиәт жанрын яңы баҫҡысҡа күтәрә. Һуңғы йылдарҙа Риф Мөхәмәтовтың байтаҡ әкиәте баҫылып сыҡты. Уның әкиәттәренең күпселеге юғары талаптарға яуап бирерлек, йөкмәткеһе яғынан да, тел, стиль йәһәтенән дә халыҡ әкиәттәренән кәм түгел.

Р. Мөхәмәтовтың бөгөнгө заман тураһында ла уңышлы әкиәттәре бар, автор артабан да ошо йүнәлеште көсәйтә төшһә ине тигән фекер тыуа.

1974 йылда йәш яҙыусы Ә. Әһлиуллиндың «Беҙ урманда йәшәйбеҙ» тигән әкиәттәр йыйынтығы сыҡты. Автор үҙенең әкиәттәрендә хайуандар һәм йәнле тәбиғәт донъяһындағы ҡайһы бер күренештәрҙе балаларға әкиәт алымы менән һөйләп биреүҙе маҡсат итеп ҡуйған. Ләкин китаптағы күпселек әкиәттәргә дөйөмләштереү етешмәй. Уларҙа схема бар, әммә әкиәтте әкиәт итерҙәй төп шарт — художестволы фекер юҡ. Утыҙынсы йылдарҙа шиғри әкиәттәр ижад итергә С.Ҡудаш, Й. Гәрәй, С. Исмәғиловтар күп көс һалған. Улар үҙҙәренең әкиәттәрендә халыҡ тормошондағы Октябрь революцияһы кеүек ҙур тарихи-социаль көрәштәрҙе сағылдырҙылар. Һуңғы дәүерҙә был жанрҙа Шәриф Биҡкол актив эшләне. Ул, нигеҙҙә, урта йәштәге мәктәп балалары өсөн ижад итте. Ш. Биҡкол үҙенең шиғри әкиәттәрендә, халыҡ ижады традицияларына таянып, әхлаҡ-тәрбиәүи мәсьәләләрҙе күтәрҙе. Уның әкиәттәре — тел һәм стиль яғынан юғары художестволы, тәрән мәғәнәле. Ләкин һуңғы ике-өс йыл эсендә шиғри әкиәттәр бик аҙ ижад ителде. Был күренеш хәҙерге әкиәт алдында яңы мәсьәләләр килеп тыуыуы менән бәйле булһа кәрәк.

Ғөмүмән, әҙәби әкиәттәр беҙҙең әҙәбиәт ғилемендә лә ентекле өйрәнелмәгән, уның үҙ проблемалары, үҙ ҡыйынлыҡтары бар. Был мәсьәлә махсус һөйләшеүҙе талап итеүсе мәсьәләләрҙең береһе булып ҡала. Сөнки юҡ-юҡ та матбуғат биттәрендә хәҙерге космос замандында әкиәттәрҙең кәрәге ҡаламы, юҡмы тигән мәсьәләлә бәхәстәр булып тора. Әкиәттең тылсымлы көсө осор балаҫтарҙа йәки ҡанатлы толпарҙарҙа түгел, бәлки, уның тәрән гуманистик йөкмәткеһендә, оптимизм менән һуғарылған булыуында һәм бала күңеленә бәләкәйҙән изгелек орлоҡтарын сәсеүендә.

Һуңғы йылдарға тиклем беҙҙең балалар драматургияһы иң артта ҡалған төрҙәрҙең береһе булып килде. Балалар өсөн махсус драма әҫәрҙәренең аҙ булыуы сәбәпле, мәктәптәрҙәге драма түңәрәктәре, нигеҙҙә, ололар өсөн яҙылған пьесаларҙы файҙаланды. Был — беҙҙә балалар драматургияһы бөтөнләй юҡ тигән һүҙ түгел. Ш. Биҡкол, И. Абдуллин, Н. Хафизовтарҙың бер

актлы пьесалары мәктәп драма түңәрәктәренең репертуарында ныҡлы урын алды. Һуңғы йылдарҙа ҙурыраҡ күләмле, Граждандар, Ватан һуғышы кеүек ҙур темаларға яҙылған драма әҫәрҙәре лә тыуа башланы. Ш. Бикҡолдоң «Һыҙылып таңдар атҡанда», Х.Ғиләжевтың «Ил балаһы», Ә. Бикчәнтәевтың «Йәшендәр ярһыған таң» драмалары темаларының актуаллеге менән генә түгел, күтәргән проблемаларының мөһимлеге, художество кимәлдәре менән дә бөгөнгө талаптарға яуап бирерлек әҫәрҙәр. Ә. Бикчәнтәевтың «Йәшендәр ярһыған таң» пьесаһы Башҡорт академия драма театрында ҡуйылғайны. Х. Ғиләжевтың «Ил балаһы» рус драма театрында уңышлы бара. Әлбиттә, был пьесалар иң элек йәш тамашасылар, үҫмерҙәр өсөн яҙылған. Әммә беҙҙә махсус йәш тамашасылар театрының булмауы сәбәпле, был әҫәрҙәрҙе академия театры сәхнәләштерергә мәжбүр булған. Йәғни балалар драматургияһының үҫеше өсөн тәүшарттарҙың береһе — йәш тамашасылар театрын ойоштороу мәсьәләһе Башҡортостан ижади йәмәғәтселегенең алдында торған мөһим бурыстарҙың береһе булып ҡала бирә.

Һуңғы йылдарҙа беҙҙең балалар поэзияһы ла күләм һәм сифат яғынан үҫте. Хәҙерге көндә балалар поэзияһы өлкәһендә эшләүсе Й. Гәрәй, Ш. Бикҡол, М. Ғәли, Ғ. Рамазанов, К. Кинйәбулатова, Ф. Рәхимғолова, А. Игебаев, Ш. Бикҡолов һымаҡ тәжрибәле шағирҙар менән бергә С. Әлибаев, Р. Шаммас, Ф. Мөхәмәтйәнов, С. Муллабаев, Ә. Вахитова, Б. Ноғоманов, М. Дилмөхәмәтов, Ғ. Дәүләтов, Х. Түләкәев, М. Сиражи, Г. Юнысова, Р. Шәкүров, Р. Тимершин, А. Хәлим, Ә. Әхмәтҡужин кеүек йәш шағирҙар бар. Һуңғы осорҙа беҙҙә айырата мәктәпкәсә һәм кесе йәштәге мәктәп балаларына тәғәйенләнгән поэзия йәнләнде. Балалар поэзияһына әҙәби яҡтан әҙерлекле йәш көстәрҙең килеүе поэтик формаларҙы төрлөләндереүгә, балалар шиғырының йөкмәткеһен һәм формаһын байытыуға этәрҙе.

Башҡортостан китап нәшриәте КПСС Үҙәк Комитетының балалар әҙәбиәтен үҫтереү саралары тураһындағы ҡарарын тормошҡа ашырыу эшенә актив ҡушылып, һуңғы йылдарҙа балалар өсөн китап сығарыу эшенә ҙур иғтибар бирә башланы. Беҙҙең нәшриәттә хәҙер айырата мәктәпкәсә йәштәге балаларға тәғәйенләнгән китаптар яҡшы сыға. Был күңелле хәл.

Китап нәшриәте шулай уҡ балалар әҙәбиәтен үҫтереүгә һиҙелерлек өлөш индергән айырым шағирҙарҙың ҙурыраҡ күләмле һайланма йыйынтыҡтарын баҫтырып сығарыуҙы ғәҙәткә индереп бара. Етмешенсе йылдарҙың баштарында К.Кинйәбулатованың һәм Ф. Рәхимғолованың балалар өсөн һайланма йыйынтыҡтары донъя күргәйне. 1974 йылда Шәриф Биҡҡол, Абдулхаҡ Игебаев, Шакир Биҡҡоловтың шундай йыйынтыҡтары баҫылып сыҡты.

Шәриф Биҡҡол — балалар поэзияһында иң актив эшләүсе, уның үҫешенә шаҡтай ҙур өлөш индереүсе шағирҙарҙың береһе. Ул, нигеҙҙә, урта йәштәгеләр өсөн ижад итә. «Ҡунаҡ ҡыҙы» тип аталған һайланма йыйынтыҡтан күренеүенсә, ул балалар поэзияһында йыр, поэма, әкиәт жанрҙарын байытыуға күп көс һалған. Шулай ҙа уның ижад индивидуаллеге һәм һәләте поэма жанрында тулыраҡ асылған. Уның поэмалары, нигеҙҙә, урта йәштәге балаларға тәғәйенләнгән. Ә урта йәштәр балалыҡ дәүеренең иң ауыр осоро, был осорҙа, балалар характер формалашыу ауырлығын кисерәләр. Шағирҙың поэмаларының төп геройҙары ла бына ошо урта йәштәге балалар. Ш. Биҡҡол поэмаларын үҙ уҡыусыларының иғтибарын йәлеп итерҙәй, көсөргәнешле һәм мауыҡтырғыс сюжетҡа ҡора белә, сюжет көсөргәнеше һәм урта йәштәгеләрҙең зауыҡтарын, рухи талаптарын һиҙгер тойоп эш итеү — поэмаларҙың тәьҫир итеү көсөн бермә-бер арттыра. Ә А. Игебаевтың «Ҡайҙа һайрай һандуғасҡай?» тигән йыйынтығы ла, нигеҙҙә, уңышлы китап. Уның балалар өсөн яҙылған шиғырҙарында лирик ағым көслө. Шағирҙың лирик геройы тыуған ергә, тәбиғәткә ғашиҡ. Йәш быуынды матурлыҡ, тыуған ергә, тәбиғәткә һоҡланыу һәм һоҡландырыу аша тәрбиәләүгә ынтылыш А. Игебаевтың балалар өсөн яҙған шиғырҙарының төп үҙенсәлеге булһа кәрәк.

Шакир Биҡҡолов күренекле рус балалар шағирҙары С. Маршак, С. Михалков һәм башҡаларҙың байтаҡ шиғырҙарын башҡорт теленә тәржемә итеп баҫтырғайны. «Ҡыҙыл ҡар яуғас» тигән китабындағы «Алтын сәғәт», «Поста торғанда», «Ҡалас» кеүек уңышлы шиғырҙары уға классик поэзиянан өйрәнеү ыңғай йоғонто яһағанлығы хаҡында һөйләп тора. Ш. Биҡҡолов, нигеҙҙә, кесе йәштәге мәктәп балалары өсөн яҙа. Ул һәр шиғырында үҙ уҡыусыларына аңлайышлы алымдар та-

бырға тырыша. Кесе йәштәге балаларға хәрби-патриотик һәм хеҙмәт темаһы кеүек етди темаларға шиғыр яҙыуы бик еңел түгел. Ш. Бикҡоловтың оҫталығы тап бына ошо темаларҙы кескәйҙәргә еңел һәм аңлайышлы, мауыҡтырғыс итеп аса белеүҙә.

Йәштәрҙән Г. Юнысованың «Яҙ хаҡында әкиәт», «Тылсымлы бүләк», Р.Тимершиндың «Беренсе ҡар» тигән китаптарын да балалар йылы ҡаршыланы. Г.Юнысованың «Тылсымлы бүләк» тигән йыйынтығы һуңғы йылдарҙа балалар поэзияһының ҙур ҡаҙанышы булды. Был йыйынтыҡта һәләтле шағирәнең ижад йөҙө тулыһынса сағылыш алған. Йыйынтыҡта тупланған шиғырҙар һәм әкиәттәр форма төрлөлөгө йәһәтенән дә, тематикаһының төрлө булыуы менән дә айырылып торалар. Китап композицион яҡтан оҫта рәүештә, балалар психологияһына ярашлы итеп төҙөлгән.

Беҙҙә балалар әҙәбиәтен пропагандалау тейешле кимәлгә ҡуйылмаған кеүек, (ә был бик мөһим мәсьәлә) яҙыусылар менән балалар араһындағы туранан-тура бәйләнеш тә етерлек дәрәжәлә түгел. Кем ул хәҙерге уҡыусы? Беҙҙең яҙыусылар, минеңсә, бөгөнгө уҡыусының интеллектуаль кимәле, уның эстетик талаптары хаҡында бик аҙ беләләр. Күпселек яҙыусылар әҫәр яҙғанда балалыҡ тураһында үҙ тәжрибәһенән сығып эш итәләр. Ләкин тормош яңырыу, фән һәм техниканың йылдам үҫеше менән бергә балалар ҙа үҫәләр. Улар аҡыл йәһәтенән бынан 10—15 йыл элегерәкке балаларҙан шаҡтай иртә өлгөрәләр. Мәғариф системаһы ошоно иҫәпкә алып, күптән инде үҙенең эшен үҙгәртеп ҡороу менән шөғөлләнә. Хәҙер әгәр ата-әсә үҙ балаһы менән яңынан «беренсе класҡа» ултырмай икән, икенсе, өсөнсө кластарҙа балаһының сискән мәсьәләләрен сисә алмай. Сөнки уҡыусылар хәҙер беренсе класта уҡ билдәһеҙ һандар менән эш итәләр. Шуның өҫтәүенә, беҙ йәшәгән заман информациялар өйөрмәһе заманы: матбуғат, радио, телевидение, кино, театр һәм урам баланы информациялар өйөрмәһендә өйрөлтә. Информацияның көсәйеүе әҙәбиәт һәм сәнғәт алдына яңы бурыстар ҡуя.

Әҙәбиәт, әлбиттә, ябай эшкәртелгән информация ғына түгел. Ул иң элек баланың аң-белеме үҫеше, эмоциональ донъяһы араһындағы гармонияны булдырыу өсөн көрәшергә тейеш. Был бурысты юғары художест-

волы әҫәрҙәр генә башҡара ала. Беҙҙең хәҙерге балалар әҙәбиәтендә уғата йомшаҡ булған әҫәрҙәрҙе осратыуы ҡыйын. Ундай йомшаҡ әҫәрҙәргә юл бикле, бер ниндәй әһәмиәте булмаған әҫәрҙәрҙе редакторҙар ҙа, редколлегиялар ҙа үткәрмәйҙәр. Әммә был беҙҙе тынысландырырға тейеш түгел. Сөнки беҙҙең хәҙерге балалар әҙәбиәте тәү ҡарашҡа бер нәмәһенә лә «бәйләнерлек» булмаған әҫәрҙәр менән тулы. Хәҙер беҙҙең төп бурысыбыҙ бына ошо уртасалыҡҡа, йәғни руссалап әйткәндә, посредственносҡа һәм «серост»ҡа ҡаршы йүнәлдерелергә тейеш.

Беҙ фәнни-техник революция заманында йәшәйбеҙ. Фәндең һәм техниканың йылдам үҫеше, уның көндәлек тормошобоҙға нығыраҡ үтеп инә барыуы — балаларҙа йәштән үк техника заманына ярашлы, шул техника менән идара итерлек, техник прогресты артабан дауам итерлек кешеләр итеп тәрбиәләүҙе талап итә. ФТР беҙҙә капиталистик илдәрҙәге шикелле тәбиғәтте аяуһыҙ рәүештә ярлыландырыуға, кешене техниканың ихтыярһыҙ ҡоло итеүгә алып бармай. Фәнни-техник прогресс социалистик системаның бөтә өҫтөнлөктәрен файҙаланып, дөйөм йәмғиәттең үҫешенә ҙур йоғонто яһай, шәхестең рухи яҡтан да, физик яҡтан да камиллашыуына ҙур мөмкинлектәр аса.

Кешенең рухи донъяһын байытыу, уның гармоник үҫешен тәьмин итеү эшендә айырата әҙәбиәт һәм сәнғәттең роле ҙур. Был йәһәттән балалар әҙәбиәте алдында ла ҙур бурыстар тора. Беҙҙең кескәйҙәр әҙәбиәте балаларҙы техникаға ҡаршы ҡуйырға ла, шулай уҡ, тик техника менән генә мауыҡтырып, йәнле тәбиғәттән айырырға ла тейеш түгел. Беҙҙең балалар әҙәбиәте хәҙерге заманда тәбиғәткә тағы ла яҡыныраҡ килергә, балаларға йәшеллек донъяһы, ҡоштар, хайуандар тураһында мауыҡтырғыс әҫәрҙәр тыуҙырырға, тәбиғәт менән кеше араһындағы гармонияны һаҡлау өсөн баланы кесе йәштән үк әҙерләй башларға тейеш. Тәбиғәт ул материаль байлыҡ ҡына түгел, кешенең йәшәү мөхите, кеше күңелен мәңге иркәләүсе бөтмәҫ-төкәнмәҫ рухи байлыҡ та. Тәбиғәт йәмһеҙләнә икән беҙҙең рухи тормошобоҙ ҙа ярлылана. Беҙҙең балалар тәбиғәтте яратҡан кеүек уны һаҡларға ла кесе йәштән өйрәнергә тейештәр.

Балалар әҙәбиәтендә хеҙмәт темаһы — балаларҙа хеҙмәткә мөхәббәт тәрбиәләү — үҙәк проблемаларҙың береһе. Был тәңгәлдә заман беҙҙең алға яңы бурыстар ҡуя. Хәҙерге көндә ауыл мәктәбен тамамлап сыҡҡан һәр бала мотлаҡ ҡалаға китергә ынтыла. Уҡырға инә алмағаны ла ҡабат әйләнеп ҡайтырға тырышмай. Был фәнни-техник прогресс заманы өсөн, бер яҡтан, тәбиғи күренеш. Әммә бында ла саманан аштырып ебәрергә ярамай: бер нисә йыл эсендә ауыл бөтөнләй ҡарттарға ҡалып, ауыл хужалығында эшсе ҡулдарға ҙур ҡытлыҡ килеп тыуыуы ихтимал. Шуға күрә илдең тамағын туйҙырыусы крәҫтиән хеҙмәтенә мөхәббәт тәрбиәләү әҙәбиәттә көнүҙәк бурыстарҙың береһе булып тора. Был мәсьәлә — хәҙерге көндә ҡатмарлы социаль психологик мәсьәләләрҙең береһе. Уның тамырҙары шаҡтай алыҫта ята. Ҡаланы ауылға, физик хеҙмәтте аҡыл хеҙмәтенә ҡаршы ҡуйып, һуңғыларын тәүгеләренән өҫтөн итеп ҡарау — былар синфи йәмғиәттең тәбиғәте менән бәйле булған, иҫкергән ҡараштар. Социалистик йәмғиәт һәр кешегә үҙ маҡсаттарына ирешеү — теләһә агроном, теләһә инженер, теләһә уҡытыусы булыу өсөн тулы мөмкинлектәр асты. Шулай уҡ һәр шәхестең яҡшыға, юғарыға ынтылыуы ла тәбиғи күренеш. Шуға күрә беҙ, һәр балаға урта белем биреп, уның үҙ һәләтен тулыһынса күрһәтергә мөмкинлек асыу менән бергә, баланы: «Насар уҡыһаң, көтөүсе булырһың, тракторист булырһың...» — тип түгел, бәлки юғары культуралы игенсе һәм малсы булыу өсөн яҡшы уҡырға кәрәк, тип тәрбиәләргә тейешбеҙ. Бала ерҙең ысын хужаһы булып, иген игеүҙән, көтөү-көтөү мал үрсетеүҙән кәмһенмәҫкә, киреһенсә, был хеҙмәт менән ғорурланырға тейеш. Был тәңгәлдә беҙ тормоштан артта ҡалабыҙ шикелле. Хәҙерге көндәрҙә ауыл мәктәптәрендә йәйҙәрен производство бригадаларын ойоштороу эше киң йәйелдерелгән. Улар айырым участкаларҙа эшләп мул уңыш үҫтерәләр. Ләкин беҙҙең әҙәбиәттә был һәйбәт башланғыс тураһында бер әҫәр ҙә яҙылғаны юҡ әле. Былар хәҙерге балалар әҙәбиәте алдында торған мөһим мәсьәләләр.

* * *

Ғөмүмән, башҡорт балалар әҙәбиәтенең үҫеше дөйөм әҙәби процесс менән тығыҙ бәйләнештә бара. Ул

үҙенең үткән юлында осорҙан-осорға яңы әҫәрҙәр менән байый барғанлығы, оло әҙәбиәт менән бергә заман алдында торған мөһим проблемаларҙы хәл итеүгә үҙ өлөшөн индерә килгәнлеге күҙәтелә. Башҡорт совет балалар әҙәбиәте шулай уҡ ҙур тәжрибәле рус һәм башҡа туғандаш халыҡтар әҙәбиәтенең ыңғай йоғонтоһон кисерҙе. Хәҙерге көндә беҙҙең балалар әҙәбиәтенең күҙгә күренеп торған уңыштары бар. Әйтәйек, утыҙынсы йылдарҙа Башҡортостан нәшриәте балалар өсөн баҫып сығарған китаптарҙың яртыһынан күбе тәржемә әҙәбиәте булһа, хәҙерге көндә М.Кәрим, С.Ҡудаш, Ә.Бикчәнтәев, З.Биишева, С.Агиш, Ж.Кейекбаев, К.Кинйәбулатова, Ш.Бикҡол. Ф.Иҫәнғолов, М.Ғәли кеүек яҙыусыларыбыҙҙың балалар өсөн яҙылған әҫәрҙәре рус, украин, ҡаҙаҡ, татар, ҡырғыҙ, төркмән, эстон һәм башҡа халыҡтарҙың балаларына билдәле. 1978 йылда халыҡ шағиры Мостай Кәрим «Детгиз» нәшриәте тарафынан үҫмерҙәр өсөн сығарылған «Жду вестей» тигән шиғырҙар йыйынтығы өсөн Ганс Христиан Андерсен исемендәге халыҡ-ара премия жюриһының Почетлы дипломы менән бүләкләнеүе беҙҙең балалар әҙәбиәтенең иң аҫыл өлгөләре донъя күләменә сыға барыуын раҫлай. Был фактттар башҡорт балалар әҙәбиәтенең идея-эстетик кимәле йылдан-йыл күтәрелә, ул күп милләтле совет балалар әҙәбиәте сафында үҙенең лайыҡлы урынын биләй барыуы хаҡында һөйләй.

# ӘҘӘБИ ПОРТРЕТТАР

## Һаҙи Сәғҙи

Һаҙи Сәғҙи (Мөхәммәтһаҙи Ғәйнан улы Сәғҙиев) 1883 йылдың 25 мартында Өфө губернаһы Златоуст өйәҙе Мырҙалар волосының (хәҙер Башҡорт АССР-ының Салауат районы) Таймый ауылында донъяға килә. Уның атаһы, Таймый ауылының бер мәхәлләһендә мулла булып тороу менән бергә, ауылда мәҙрәсә асып, балалар уҡытыуға ла ҙур иғтибар биргән. Ғәйнан хәҙрәттең ике ҡатыны булған. Оло ҡатыны Ғәйниә — Түбән Ҡыйғы ауылынан, кесе ҡатыны Сафия Йүрүҙән буйы башҡорт ауылы Мәхмүттән төшкән. Күренекле әҙәбиәт ғалимы, профессор Ғабдрахман Сәғҙи (1889—1956) бына ошо Ғәйнан хәҙрәттең оло ҡатынынан тыуған бала булһа, Мөхәммәтһаҙи кесе ҡатыны Сафияның улы була.

Һаҙи Сәғҙи үҙ ауылында атаһының мәҙрәсәһендә уҡый, унан һуң Ырымбур мәҙрәсәһен тамамлай. 1902 йылда атаһы вафат булғас, уның урынына Таймый ауылының бер мәхәлләһенә муллалыҡҡа тәғәйенләнә. 1905—1907 йылдарҙағы Россиялағы беренсе революция тулҡындары Таймый ауылын да урап үтмәй.

Һаҙи Сәғҙи был йылдарҙа Ырымбур, Ҡазан һәм Өфөлә сыҡҡан милли газета һәм журналдарҙы, революцияның көслө йоғонтоһонда йәнләнеп киткән татар һәм башҡорт әҙәбиәтен уҡырға һәүәҫләнеп китә. Һөҙөмтәлә ул тормошҡа яңыса ҡарай башлай. 1909 йылда муллалығынан баш тартып, Дыуандағы ике класлы училищеға уҡырға барып инә. Рус телен яҡшылап өйрәнә башлағас, А.С.Пушкин, М.Ю.Лермонтов, И.А.Гончаров,

Л.Н.Толстой кеүек күренекле рус яҙыусыларының әҫәрҙәре менән таныша. Училищены тамамлағас, ул үҙенең бөтә көсөн ауыл халҡының культураһын, аң-белемен күтәреү эшенә бирә. 1915 йылда Таймый ауылында төбәк китапханаһы астырыуға өлгәшеп, ҡатыны Кәримә менән был китапхана эшен юлға һалыша. Һаҙи Сәғҙиҙең тырышлығы һәм туранан-тура ҡатнашлығы менән 1916—1917 уҡыу йылдарында Таймыйҙа ике класлы училище асыла. Был училище шул тирәләге Ҡыйғы, Өлкөндө, Ләмәҙ-Тамаҡ, Арҡауыл, Мәхмүт кеүек ауыл йәштәренең белем усағына әүерелә. Һаҙи Сәғҙи был училищела әсә теле һәм әҙәбиәте буйынса уҡытыусы булып эшләй, һуңынан күренекле ғалим дәрәжәһенә өлгәшкән Вәкил Ғирфанов, Ғатаулла Камалетдинов, республикабыҙҙың күренекле уҡытыусылары Мөкәрәмә Сәғҙиева, Сәлимә Ғирфанова, Әлтәф Вәлиевтар тәү башлап ошо училищела белем алалар.

Билдәле булыуынса, ул замандарҙа яңылыҡ өсөн көрәш шаҡтай ауыр шарттарҙа бара. Һ.Сәғҙиҙең, дин юлынан тайпылып, донъяуи фәндәрҙе уҡытыу эшенә тотоноп китеүен һәм был эшкә үҙе кеүек алдынғы ҡарашлы йәштәрҙе ылыҡтырыуын айырата ҡара груһсы муллалар күрә алмайҙар, халыҡты уның йоғонтоһонан айырыу өсөн, мәсет мөнбәрҙәрен дә, аш мәжлестәрен дә файҙаланалар, уның хаҡында төрлө хәбәр тараталар, дәһрилектә ғәйепләйҙәр.

Ләкин быуат башындағы социаль һәм милли азатлыҡ хәрәкәтенең көслө йоғонтоһонда ярлылар һәм кәмһетелгәндәрҙең бәхете өсөн көрәш юлына баҫҡан Һ.Сәғҙи үҙ юлынан тайшанмай, ауылдың алдынғы ҡарашлы йәштәренә таянып, халыҡтың аң-белемен күтәреү эшен дауам иттерә. Ауылдың алдынғы, революцион ҡарашлы кешеләре менән байҙар араһындағы көрәш Граждандар һуғышы йылдарында айырата киҫкен төҫ ала. Әҙиптең ҡыҙы журналист Мәрйәм Сәғҙиеваның иҫтәлектәренән күренеүенсә, 1918 йылда Арҡауылдағы һәнәк һуғышы ваҡытында Һ.Сәғҙиҙең шәкерттәре Халиҡ Мөхәмәтшин, Зәбих Бәғдәсәров һәм башҡа революция яҡлы кешеләрҙе һәнәкселәр терелә́й ергә күмәләр. Һаҙи Сәғҙиҙе ҡулға алып, ябып ҡуялар. Аҡтар уны Һикеяҙ төрмәһенән Арҡауылға атырға оҙаталар. Һ.Сәғ-

ҙи был үлем язаһынан Таймый ауылы халҡының яҡлауы арҡаһында ғына ҡотолоп ҡала[236].

Төбәк аҡтарҙан таҙартылып, Совет власы урынлаштырылғас, Һ.Сәғҙи Златоуст өйәҙе халыҡ мәғарифы бүлегендә инспектор булып эшләй. 1920—1921 уҡыу йылында Златоуст педтехникумында татар-башҡорт бүлеге асыла. Һ.Сәғҙи, был техникумдың директоры урынбаҫары булараҡ, шул тирәләге ауыл йәштәрен уҡыуға ылыҡтырыу, ярлы балаларына материаль ярҙам күрһәтеү буйынса байттаҡ эштәр башҡара.

1924 йылда Һ.Сәғҙи ғаиләһе менән Өфөгә күсеп килә һәм бер үк ваҡытта Өфө кооператив техникумында, музыка училищеһында, 3-сө һанлы икенсе баҫҡыс хеҙмәт мәктәбендә уҡытыусы булып эшләй. Ул был осорҙа Өфөлә ислам диненең реакцион асылын фаш итеү маҡсатында ойошторолған фәнни-атеистик кисәләрҙә, диспуттарҙа актив ҡатнаша. 1928 йылда Өфөлә «Дәһри» журналы сыға башлағас, уның редакцияһында эшләй, диндең реакцион нигеҙҙәрен асыуға арналған атеистик йөкмәткеле мәҡәләләр менән сығыш яһай.

Һаҙи Сәғҙи 1933 йылдың ғинуарында вафат була.

Һ.Сәғҙиҙең әҙәби эшмәкәрлегенә килгәндә, ул революцияға тиклемге башҡорт әҙәбиәте тарихында, нигеҙҙә, бер әҫәре — 1909 йылда яҙылып, Өфөлә 1911 йылда баҫылып сыҡҡан «Бәхетһеҙҙәр» тигән реалистик повесы менән билдәле. Бынан тыш уның 1911 йылда «Шура» журналының 17-се һанында батша хөкүмәтенең колониаль политикаһы һөҙөмтәһендә башҡорт ерҙәренең аяуһыҙ таланыуына әсенеп яҙылған «Ер һатыуҙың ғаҡлиәте» тигән хикәйәһе баҫылып сыға. Әҙип шулай уҡ Атауи, Сабир псевдонимдары менән революцияға тиклем дә, унан һуң да ваҡытлы матбуғат биттәрендә халыҡ мәғарифы һәм культура тормошона арналған мәҡәләләр менән йыш ҡына сығыш яһай, тәржемә эштәре менән дә шөғөлләнә. 1926 йылда атаҡлы испан драматургы Лопе де Веганың «Фуенте овехуна» («Һарыҡ шишмәһе») тигән драмаһын тәржемә итә. Был пьеса егерменсе йылдарҙа Башҡорт дәүләт драма театрында ҡуйыла.

---

[236] Сәғҙиева Мәрйәм. Яңы дәүер таңында, «Ағиҙел», 1967, №9.

«Бәхетһеҙҙәр» повесы автобиографик әҫәр. Уның нигеҙендә авторҙың үҙ башынан уҙған ваҡиғалар, 1905—1907 йылдарҙағы революция йоғонтоһонда күҙе асылып, рухи донъяһында һәм тормошонда булып үткән киҫкен һынылыштар ята. Ошо яғы менән «Бәхетһеҙҙәр» повесы М.Ғафуриҙың шул уҡ йылдарҙа яҙылып, 1911 йылда донъя күргән «Хәмиттең хәяты, йәки Ләйлә вә хәятым» тигән повесына яҡын тора. Әммә был яҡынлыҡ әҙәби йоғонтонан килгән яҡынлыҡ түгел. Ул шул осорҙағы милли интеллигенция араһында типик күренешкә әйләнә барған рухи һынылыштар, яҙмыштар уртаҡлығынан килеп сыҡҡан типологик яҡынлыҡ. Ғафуриҙың әҫәрендәге төп герой Хәмит, дини-схоластик тәрбиәнең ҡорбаны булараҡ, үҙен иҙеүсе мөхиттән ваз кисһә һәм, яңы тормош өсөн көрәшкә көс таба алмай, зарығып йәшәргә мәжбүр булһа, «Бәхетһеҙҙәр» повесының төп геройы Мөхтәр — актив тәбиғәтле герой.

Иҫке мәҙрәсәлә атаһы юлын ҡыуып, мулла булырға әҙерләнгән, ауылына ҡайтып был маҡсатына ирешкәс, артабан ишан булып исем таратырға, тирә-яҡ халҡын үҙенә ҡаратырға хыялланған Мөхтәрҙең 1905—1907 йылдарҙағы революцион хәрәкәт йоғонтоһонда демонстратив рәүештә муллалыҡтан баш тартыуы һәм, халыҡҡа хеҙмәт итеүгә яраҡлы кеше булыу өсөн, рус ауылына китеп, русса уҡырға тотоноуы ул заманда ифрат ҡыйыу бер аҙым була. Алдынғы рус әҙәбиәтенең ыңғай йоғонтоһонда реалистик традицияларҙы үҙләштергән әҙип әҫәрҙең төп геройы Мөхтәрҙең яңы кеше булып формалашыуын уны уратып алған социаль мөхит менән тығыҙ бәйләнештә һүрәтләй. Повеста яҙыусы кеше көсө менән байып ятҡан ҡомһоҙ байҙар менән муллаларға кәмһетелгән һәм хәйерселеккә дусар ителгән ауыл ярлыларын, үҙ ғүмерҙәрен халыҡ араһында аң-белем таратыуға арналған демократик рухтағы милли интеллигенция вәкилдәрен ҡаршы ҡуйып кәүҙәләндерә. Шул рәүешле, синфи антогонистик йәмғиәт шарттарында выжданлы һәм намыҫлы кешеләрҙең бәхетһеҙ булып, ҡомһоҙ һәм намыҫһыҙ әҙәмдәрҙең рәхәт йәшәүен асып бирә.

Повесть художество эшләнеше менән дә шул замандағы өгөт-нәсихәткә һәм схематизмға ҡоролған проза әҫәрҙәренән юғары тора. Әҫәрҙең төп геройҙары Мөхтәр менән Сәғиҙә образдары тулы ҡанлы реалистик

образдар булараҡ кәүҙәләнә. Автор геройҙарының рухи донъяһын, эске кисерештәрен һүрәтләүгә лә ярайһы ҙур урын бирә һәм быны өсөн психологик анализ алымдарын оҫта файҙалана. Ғөмүмән, «Бәхетһеҙҙәр» повесы үҙенең реалистик дөйөмләштереү көсө менән дә, XX быуат башында милли интеллигенция вәкилдәре араһында барған рухи һынылыштарҙы дөрөҫ сағылдырыуы һәм ундағы революцион-демократик башланғыстарҙы ҡайнар яҡлауы менән дә революцияға тиклемге башҡорт прозаһында лайыҡлы урындарҙың береһен биләй.

## Булат Ишемғол ижады

Балалыҡ һәм үҫмер йылдары быуат башындағы ҙур социаль-политик һынылыштар дәүеренә тура килеп, кесе йәштәренән халыҡтың аһ-зарҙарын ишетергә, ҡайғы-хәсрәт йырҙары менән бергә Туҡай, Ғафури кеүек демократик шағирҙарҙың поэзияһын күңелдәренә һеңдереп, шулар йоғонтоһонда, алда ниндәйҙер билдәһеҙ өмөт саткыларын шәйләп, үҙҙәре лә ҡәләмгә тотонған, әммә аҡ көнгә илтеүсе тура юлды күрә алмай йонсоп, тормоштоң аяуһыҙ ҡаршылыҡтары алдында ҡаушап, юғалып ҡалырға мәжбүр булған, һәм, Бөйөк Октябрҙән һуң ғына ижадтары күкрәп сәскә атырға тулы мөмкинлектәр асылып, башҡорт совет әҙәбиәтенең нигеҙ таштарын һалышыу бәхетенә ирешкән һәләтле яҙыусыларыбыҙҙың береһе Булат Ишемғол булды.

Булат Ишемғол (Ғабдрахман Закир улы Ғабдрахманов) 1900 йылдың мартында Башҡортостандың хәҙерге Ейәнсура районы Яңы Себенле ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килә. (Уның атаһы Закир Яңы Себенле ауылына хәҙерге Ырымбур өлкәһе Ҡыуандыҡ районына ҡараған Мөхәммәтйәр тигән башҡорт ауылынан күсеп килгән. Әсәһе Башҡортостандың хәҙерге Хәйбулла районына ҡараған Аҡъяр ауылында тыуып үҫкән башҡорт ҡыҙы булған). Ун дүрт йән эйәһенән торған ишле ғаиләлә буласаҡ шағир, бер яҡтан, аслыҡ-яланғаслыҡтың ҡыҫымын бик иртә татый башлаһа, икенсе яҡтан, ғаиләлә һәм мәҙрәсәлә хөкөм һөргән дини ғөрөф-ғәҙәттәрҙең күңел болғандырғыс атмосфераһын һулап үҫергә мәжбүр була. Шул уҡ ваҡытта,

айырата 1905 йылдан һуң, башҡорттар араһында көсәйә барған мәғрифәтселек хәрәкәтенең тулҡындары Яңы Себенле ауылын да урап үтмәй. 1905 йылдарҙан һуң йәнләнеп киткән татар һәм башҡорт әҙәбиәтен, газета-журналдарҙы уҡып «күҙе асыла» башлаған Булат, ауыл мәҙрәсәһен тамамлағас, уҡыуын артабан дауам иттереү өсөн, атаһынан ҡасып булһа ла Ырымбур ҡалаһына юл тота. Ләкин уға үҙенең бер йылға яҡын ғүмерен Ырымбурҙың мәҙрәсәләрендә түгел, ә татар байҙарының ашханаларында һәм йөн йыуыу фабрикаларында хеҙмәтсе булып үткәрергә, капиталистик иҙеүҙең нәмә икәнен үҙ елкәһендә татып ҡарарға тура килә.

1916 йылдың көҙөндә Булат Ишемғол, Өфөгә килеп, «Ғалиә» мәҙрәсәһенә уҡырға инмәксе була. Ләкин уны бында ла бик һалҡын ҡаршы алалар. «Уның беренсе әҙерлек курсында уҙған ете ай ғүмер, — тип яҙа ул, — бай балаларының ҡалған аштары, хәҙерге шағир Сәйфи Ҡудаштың ауылдан килгән икмәктәре менән тамаҡ туйҙырыу, донъянан зарланып шиғыр яҙыу менән үтте. Мин «йәшерен шағирлыҡ»тан сығырға уйланым, 1917 йылдың апрелендә, Өфөлә, «Өмөт сәскәләре» тигән йыйынтыҡ төҙөп, «Брадәрән Кәримовтар»ға барҙым. Көрьән, Һәфтиәк, иман шарты һатып миллион һумдар файҙа иткән татар байы иң тәүҙә баштан-аяҡ минең үҙемә, унан өҫтән генә оригиналға ҡараны ла: Һине берәү ҙә белмәй, китабың үтмәҫ, баҫмайбыҙ, — тине. Ғабдулла Туҡай, Сәғит Рәмиев, Нәжип Думауи, Сәғит Сүнчәләй кеүек мәшһүр кеше була алмауым өсөн үҙемде әрләп, Өфөнән Ырымбурға, Ырымбурҙан кире ауылға ҡайттым... «Ғүмер юлында» кеүек төшөнкөлөктөң иң юғары баҫҡысына барып еткән шиғырҙы тыуҙырған ун ете йәшлек «шағирҙы» ҡәбер яғаһына килтереп терәгән дәүер шуның менән бөттө».

Булат Ишемғол Бөйөк Октябрь революцияһын тыуған ауылында ҡаршылай. Революциянан һуң Башҡортостанда Граждандар һуғышы йәйелеп китеүе, Колчак ғәскәрҙәренең ҡылған вәхшилектәренең шаһиты булыу бер аҙға битараф булып ҡалған Булаттың күҙен астыра һәм уны тайпылышһыҙ рәүештә революция ҡаҙаныштарын яҡлау өсөн көрәшселәр сафына баҫтыра. 1919 йылда ул коммунистар партияһы сафына инә һәм, биографияһынан асыҡ билдәле булыуынса, ғүмеренең аҙа-

ғына тиклем актив партия һалдаты булып ҡала. Башҡортостанда совет власы урынлаштырыу, илде аяҡҡа баҫтырыу һәм нығытыу, колхоз һәм совхоздар төҙөү һәм культура революцияһын тормошҡа ашырыу йылдарында ул, комсомол һәм партия өлкә комитетында яуаплы работник булып, партия политикаһын уҙғарыу өсөн көрәштең алғы сафында бара. «Башҡортостан» гәзетаһы, «Октябрь», «Дәһри» журналдарының редакторы булып эшләй. Башҡортостан Яҙыусылар союзы ойошторолғас, уның етәкселәренең береһе була.

Булат Ишемғол тәүге шиғырҙарын яҙып, әҙәбиәт майҙанына сығырға ынтылыш яһаған 1915—1916 йылдар революцияға тиклемге башҡорт һәм татар әҙәбиәттәрендә синфи айырымланыу тенденцияһы шаҡтай көсәйгән бер осор ине. Бер яҡтан Мәжит Ғафури, Дауыт Юлтый кеүек демократик йүнәлештәге шағирҙар, империалистик һуғыштың социаль асылына һаман тәрәнерәк үтеп инеп, хеҙмәтсән халыҡ массаларының уй-теләктәрен сағылдырырға ынтылһалар, икенсе яҡтан, әҙәбиәттә реакцион романтизм йүнәлеше көсәйеп китә, ҡара реакция йылдарында уҡ башланған күңел төшөнкөлөгө, уҙған замандарҙы идеаллаштырыу, пәйғәмбәрҙәр һәм башҡа шундай «изге заттар» культына табыныу поэзияла һиҙелерлек урын ала. Әле тормошта үҙ урынын табырға өлгөрмәгән, аң-белем алыуға бәйләнешле тәүге хыялдары селпәрәмә килгән Булат Ишемғол да, тәбиғи, ижадының тәүге осоронда «әсе хәсрәт йырҙарын» йырларға мәжбүр була. Әммә уның төшөнкөлөк менән һуғарылған тәүге шиғырҙарында уҡ бөтөнләй донъянан биҙгән кешенең түгел, бәлки, «ҡара төндә» «ҡара урманда» «яңғыҙ» аҙашып ҡалып та, «яҡты көнгә» илтеүсе тура юлды табыуҙан өмөтөн өҙмәгән, сыҙамлы һәм көслө лирик геройҙың образы төҫмөрләнә.

Барырмын мин алға, һис туҡтамам,
Аяҡтарым хәлһеҙ йөрөгәнсе,
Күҙләрмен мин өмөт, юлда ҡалмам,
Һөйәктәрем ятып серегәнсе, —

ти шағир 1916 йылда яҙылған тәүге шиғырҙарының береһендә.

Тап бына шуға ла «ҡалын күкрәк менән тау аҡтарырға» ең һыҙғанып сыҡҡан шағир көрәш баррикада-

һының аръяғында тороп ҡалмай, Октябрь революцияһынан һуң халыҡ бәхете өсөн актив көрәш позицияһына аяҡ баҫа. Ләкин совет власының яҙмышын хәл иткән Граждандар һуғышы йылдарында Булат Ишемғолға Октябрь ҡаҙаныштарын поэтик һүҙ менән түгел, ҡорал менән яҡларға тура килә һәм ул 1921 йылдан башлап ҡына, яңынан ҡәләмгә тотона.

Уның ижадындағы был өҙөклөк, беренсенән, замандың көсөргәнешле, әҙәби ижад менән шөғөлләнергә форсаттың аҙ булыуы менән аңлатылһа, икенсенән, был тотҡарлыҡ революция һынлы ҙур тарихи һынылышты художестволы кәүҙәләндереү сараларын таба алмай бер аҙға баҙап ҡалыуы менән бәйле була. Тап бына шуға ла 1921 йылда «Йәш йөрәк» газетаһында баҫылып сыҡҡан «Ҡыҙыл сәскәләр», «Шәфҡәт моңо» тигән абстракт романтик характерҙағы нәҫерҙәрендә автор Октябрь революцияһын, XX быуат башы әҙәбиәтенең киңәйәле алымдарына нигеҙләнеп, символик образдар аша кәүҙәләндерергә тырыша. «Шәфҡәт моңо» тигән нәҫерендә революция ваҡытында эшсе-крәҫтиәндәр «шәфҡәт» етәкселегендә генә еңеп сыҡты, тигән фекер уҙғара. 1921 йылғы аслыҡта әлеге «шәфҡәт» тағы күтәрелеп сыға һәм туҡтарҙан астарға мәрхәмәт һорай. Билдәле, революцион ысынбарлыҡты символик образдар аша дөйөм кешелек гуманизмы позицияһынан тороп һынландырырға ынтылған, әммә революцион көрәштең асылынан шаҡтай алыҫ торған был әҫәрҙәр заман талаптарына яуап бирә алмай ине. Көрәш ҡаҙанында ҡайнаған актив йәмәғәт эшмәкәре Булат Ишемғол артабан был етешһеҙлектәрҙән яйлап ҡотола бара. Шиғырҙарында һәм нәҫерҙәрендә революцияға тиклемге поэтик арсеналда ҡалған һүрәтләү саралары, художество алымдары үҙен ныҡ һиҙҙерһә лә, ул егерменсе йылдарҙың баштарында уҡ реаль тормошҡа табан ҙур боролош яһай. 1923 йылда ижад ителгән «Вәғәҙәм-антым», «Ер ҡыҙына», «Ал сәләмемде...», «Һабансы йыры» һ.б. шиғырҙарында, «Бүләк әҙерлә, күгәрсенем!», «Йырла, һылыу ҡыҙ!», «Китегеҙ юлдан, йәштәр армияһы килә», «Ике бүләк» тигән нәҫерҙәрендә һәм «Партизан» поэмаһында яңы тормош ҡороусы заман геройының героик образы үҙәктә тора. Иҫкелеккә ҡаршы көрәш, яңы тормоштоң еңеүсән пафосын данлау, бөйөк Ленин идеяларына тоғролоҡ егерменсе йылдарҙың тәү-

ге яртыһында уҡ Булат Ишемғол ижадының төп мотивтарына әйләнә. Яҙыусы үҙенең ҙур булмаған прозаик әҫәрҙәрендә һәм шиғырҙарында ҡоллоҡ бығауҙарын өҙөп турайып баҫҡан азат кешенең мөһабәт образын кәүҙәләндереүгә ынтыла.

Әлбиттә, әлегә был яңы кеше образы дөйөмләштерелгән образ, унда айырым кешегә хас булған индивидуаль һыҙаттарҙы күреп булмай. Сөнки был заманда яҙыусыларҙың иғтибар үҙәгендә кешенең шәхси тормошо йәки рухи донъяһы түгел, бәлки, ил һәм халыҡ партия алдындағы изге бурысы тора. «Революцияның ҡораллы көрәшендәге героизм, — тип яҙа Дауыт Юлтый Булат Ишемғол ижады тураһындағы бер мәҡәләһендә, — сәнғәттә үҙенең айырым бер буяуын тыуҙырҙы. Бында шәхси тормош юҡ. Ул көрәш менән йотолған. Революция энтузиазмы, хәрби коммунизм осорона ғына хас булған аскетизм — бына был ике һыҙат ул көндәрҙең характерлы һыҙаттары ине... Булаттың юғарыла күрһәтелгән «Октябрь» шиғыры һәм шул дәүер тарихына бәйле булған башҡа әҫәрҙәре ана шул рух менән һуғарылғандар». («Октябрь», 1931, 2-3-сө һан.)

Бөтә булмышы һәм рухы менән Тыуған илгә бирелгәнлек, коммунистик идеалдарға тоғролоҡ, үҙен яңы тормош ҡороусы хеҙмәтсән халыҡтың айырылғыһыҙ бер өлөшө итеп тойоу Булат Ишемғолдоң «Йырҙарым» (1924) шиғырында айырата көслө сағылыш алған. Күсмә йәйләү тормошон, патриархаль үткәнде һағыныусы бер талай шағирҙарға асы нәфрәт тойғоһо менән һуғарылған был әҫәрендә шағир:

Йырҙарымды яҙам мин ил өсөн,
Таң елдәре, һиңә йырым юҡ.
Моңдарымды түгәм мин ил өсөн,
Күк йондоҙо, һиңә моңом юҡ.
Ҡәләм менән ергә юлдар һыҙам,
Һыҙыҡтарым — ярлы юлдары.
Аҙашҡандар, тинтәк йәндәр өсөн
Һауаларға һыҙған юлым юҡ.
Бар йырҙарым — йөрәк тибрәүҙәре,
Йөрәгемдең таҙа ҡандары.
.......................................
Йәнем, даным минең — яңы тормош,
Ҡаным — шул тормоштоң тамсыһы,
Кәүҙәм — эштең ҡалын стенаһы,
Бәғрем — уның байрам таңсыһы, —

тип, үҙенең көрәш һәм ижад программаһын асып һала.

Шул рәүешле, шағир, башҡорт совет әҙәбиәтенең идея-эстетик сафлығы өсөн етди көрәш барған бер осорҙа, үҙенең тормошсан ижады менән әҙәбиәттә партиялылыҡ һәм халыҡсанлыҡ принциптарын ҡайнар яҡлап сыға.

Булат Ишемғолдоң егерменсе йылдарҙағы ижадында Коммунистар партияһына, уның юлбашсыһы В.И.Ленинға арналған әҫәрҙәр үҙәк урында тора. Шағир әле яңыраҡ ҡына шаулап уҙып киткән Граждандар һуғышы ваҡиғаларына мөрәжәғәт итәме, йәки илдең йәш быуыны пионерҙар, комсомолдар тураһында йырлаймы — уның уй-хыялдары Ленин идеялдары менән нурланған, илдең бәхетле киләсәге өсөн ялҡынлы көрәш пафосы менән һуғарылған булыуын тояһың. «Баш эйҙек», «Ас битеңде, тарих», «Беҙ сәсәбеҙ шаулап Ленин нурын», «Тағы ла киттек алға, көрәшкә», «Ул» шиғырҙарында һәм «Мәңгелек мөхәббәт» тигән нәҫерендә иһә шағир бөйөк Лениндың үлемһеҙ эшенә дан йырлай, ул төҙөгән партияның тоғро һалдаты, көрәшсеһе булыуға бөтә йөрәктән ҡыуана.

Булат Ишемғол егерменсе йылдарҙа уҡ йәшлек йырсыһы, комсомол шағиры булараҡ танылыу ала. 1925 йылда ике китабы бер ыңғай донъя күреп, береһе — «Пионер йырҙары», икенсеһе — «Комсомол йырҙары» тип аталыуы уҡ шағирҙың ижадында илдең йәш төҙөүселәре — пионерҙар менән комсомолдар тормошо ҙур урын алып тороуын күрһәтә. Шағир был йыйынтыҡтарына ингән «Беренсе май букеты», «Яңы тормош килсендә», «Комсомолдар килә», «Коммуна күкрәгендә», «Комсомол, теҙел сафҡа!» шиғырҙарында егерменсе йылдар комсомолияһының еңеүсән аҙымдарын данлай, уларҙың хеҙмәт энтузиазмын, тын ауылдарҙа клубтар асып, гөрләтеп комсомол туйҙарын уҙғарып, яңы тормош ҡороуҙарын һүрәтләй.

Булат Ишемғол бөтә булмышы менән интернациональ рухлы шағир, халыҡтар дуҫлығы йырсыһы. Быға уның «Ил йөрәге» Мәскәү тураһындағы шиғырҙар шәлкеме, «Забастовка», «Дуҫлыҡ» тигән шиғырҙары асыҡ миҫал булып тора. «Дуҫлыҡ» шиғырында ул:

Әй, шағир һин! Ҡана сығарып һал,
Бармы дуҫлығыңдың паспорты?
Милләте кем уның, йә әйтеп бир —
Русмы, татармы, әллә башҡортмо? —

тип ҡуйылған урынһыҙ һорауға:

— Минең дуҫлыҡ тыуҙы илем менән,
Уның менән үҫте, ҙурайҙы,
Илем менән парлап япраҡ ярҙы,
Уның менән бергә ирәйҙе...
Илем менән тыуған дуҫлығымды
Йөрәгем менән күтәреп барам мин.
Әй, дуҫлығым! Һинең даның өсөн
Көслө ялҡындарҙа янырмын! —

ти, Октябрь менән бергә тыуған дуҫлыҡтың утлы окоптарҙа сыныҡҡанлығын, хеҙмәт һәм көрәш ялҡындарында күкрәп сәскә атҡанлығын раҫлай.

Егерменсе йылдарҙа Булат Ишемғол ижады тематик яҡтан төрләнәнеү менән бергә, ул поэтика өлкәһендә лә һиҙелерлек уңыштарға өлгәште. Яңы социалистик ысынбарлыҡты ул яңыса поэтик алымдар менән кәүҙәләндерергә ынтылды. Замандың көсөргәнешле һулышы, ауылдарҙың һәм ҡалаларҙың өр-яңынан тыуыуы, кеше күңелендәге һынылыштар уның шиғырҙарының һәм нәҫерҙәренең ритмикаһында ла кәүҙәләнеш алды.

«Электрик сыбығы — һәр бер тамырым, башым — динамо, ҡәләмдәрем — пулемет, һүҙем — пуля, шунан атам иҫке донъяны» кеүек сағыштырыуҙар, һөйләү теленә яҡын ритмик интонациялар, яңы йөкмәткене яңы поэтик формаларҙа кәүҙәләндерергә ынтылыштың айырым күренештәре булып килеп тыуғанлығы бәхәсһеҙ.

Егерменсе йылдарҙа, айырата әҙәбиәттә вульгар социологизм өҫтөнлөк алған осорҙарҙа шәхестең, рухи донъяһына, интим тойғоларына иғтибар итеү күренештәре, хатта шағирҙың «мин» тип үҙ исеменән һөйләүе тәнҡитселәр тарафынан ҙур етешһеҙлек итеп күрһәтелә, ә шағир индивидуализмда ғәйепләнә ине. Шулай булыуына ҡарамаҫтан, егерменсе йылдарҙың икенсе яртыһында башҡорт әҙәбиәтендә, шул иҫәптән Булат Ишемғол ижадында, әҙәбиәтте «кешеләштереү» тенденцияһы шаҡтай көсәйә. Кешенең рухи донъяһына иғтибар Булат Ишемғолдоң лирик йылылыҡ, киң тасуири алымдар менән яҙылған «Бүләк әҙерлә, ҡәҙерлем!», «Йырла, һылыу ҡыҙ», «Уны һағынғанда», «Ҡояш нурҙары аҫтында», «Мәңгелек мөхәббәт» нәҫерҙәрендә үк һиҙелерлек урын ала башлай һәм тәбиғәт лирикаһына ҡараған шиғырҙарында артабан көсәйә барғанлығы күҙәтелә.

«Булат үҙенең тәбиғәте менән, — тип яҙа Шиһап Шәһәр, ошоларҙы күҙ уңында тотоп, — ғәйәт дәрәжәлә һиҙгер һәм етеҙ әҙип. Унның әҫәрҙәрен уҡыған саҡта, ул әҫәрҙәрҙең ҙур тәьҫирҙәр аҫтында, ысын йөрәктән яҙылғанлыҡтары әллә ҡайҙан күренеп тора. Ул — көслө ҡәләм эйәһе. Унның теле асыҡлыҡ, ябайлыҡ, тантаналыҡ менән айырыла. Ул үҙенә бер төрлө лирик жанрҙар бирә. Унның поэзияһының төп нөктәһе үҙенең йөрәген кәүҙәләндереүҙән тора».

Билдәле булыуынса, яңы тормош укладының нығыныуы синфи дошмандар, реакцион дин әһелдәре, кулактар һәм мещандар менән киҫкен көрәш шарттарында барҙы. Был дәүерҙә яҙыусылар алдында тормоштағы һәр яңылыҡты күтәреп алыу, уны пропагандалау кеүек мөһим бурыстар менән бергә, совет ҡоролошона аҫтыртын рәүештә көрәш алып барыусыларҙың социаль йөҙөн асып һалыу һәм битлектәрен йыртып, фаш итеү көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһе булып торҙо.

Актив йәмәғәт эшмәкәре Булат Ишемғол ошондай шарттарҙа әҙәбиәттең иң үткер ҡоралы — сатираны заман юғарылығына күтәреүсе талантлы әҙиптәрҙең береһе булып танылаа. Ул үҙенең «Беҙ һуңынан ҡарарбыҙ әле», «Шайтандар штабында», «Сабир мулланың ҡәберҙән яҙған хаты», «Договорлы намаҙ», «Мәсхәрәләнгән ҡаҙ» һ.б. фельетондары, сатирик хикәйәләр, шиғырҙары һәм йырҙары менән егерменсе йылдарҙа Өфө Диниә назараты тирәһендә тупланып, үҙҙәренең съездарын үткәреүсе, дини журналдар, «Иман шарты», «Эфтиәк» баҫтырып таратыусы һәм аҫтыртын рәүештә совет власына аяҡ салырға тырышыусы реакцион дин әһелдәренә ҡаршы киҫкен көрәш позицияһына баҫа. Булат Ишемғол был әҫәрҙәрендә, дин әһелдәренең комик образдарын кәүҙәләндереп, уларҙың тарҡалған әхлаҡ йөҙөн, мутлыҡтарын һәм хәйләләрен асып биреү менән генә сикләнеп ҡалмай, конкрет миҫалдарға таянып, халыҡты быуаттар буйы иҙеү ҡоралы булып килгән диндең социаль асылын да фаш иткән. Яҙыусы, дингә ҡаршы көрәштә дини әҙәбиәттән килгән образдарҙы, традицион алымдарҙы оҫта файҙаланған кеүек, халыҡ йырҙары, таҡмаҡтар, йомаҡтар һәм мәҡәлдәрҙең традицияларын да киң ҡулланған. Был уның әҫәрҙәре халыҡлашып китеүгә һәм урындарҙа дингә ҡаршы пропаганда эшен йәнләндереүгә ҙур булышлыҡ иткән.

Булат Ишемғол утыҙынсы йылдарҙа ижадының төрлө яҡлап ныҡлап өлгөрөп етеү дәүеренә аяҡ баҫа. Шағир был осорҙа «Бурлыҡ», «Тракторсы Айһылыу», «Юлдар», «Ейәнсура», «Йыр башы» тигән поэмаларын ижад итә. Булат Ишемғолдоң был поэмаларында Совет Башҡортостанының индустриаль республикаға әйләнеүе, ауылдарҙа коллективлашыу һәм колхоз-совхоздарҙы нығытыу өсөн киҫкен көрәш картиналары киң кәүҙәләнеш ала.

«Бурлыҡ» поэмаһында автор уғрылыҡ кеүек алама ғәҙәттең синфи йәмғиәттә заруративн килеп тыуыуын һәм совет шарттарында ундай күренештәргә социаль сәбәптәрҙең юҡ ителеүен ышандырырлыҡ поэтик саралар менән асып бирһә һәм үткер публицистик алымдарҙы ҡулланып, бурлыҡ һәм ҡороҡҡослоҡ менән шөғөлләнеүсе синфи дошмандарҙың йөҙөн йыртыуҙы маҡсат итеп ҡуйһа, коллективлашыу осороноң поэтик эпосы юғарылығына күтәрелгән «Тракторсы Айһылыу» поэмаһында киң эпик һүрәтләү алымдарына мөрәжәғәт итә.

«Тракторсы Айһылыу» поэмаһы йөкмәткеһе менән дә, художестволы эшләнеше яғынан да Булат Ишемғол ижадының ғына түгел, утыҙынсы йылдарҙың тәүге яртыһында бөтә башҡорт поэзияһының үҫешен билдәләүсе иң уңышлы әҫәр булды. Поэмала автор күмәк тормоштоң, колхоз ҡоролошоноң еңеп сығыуын, кешеләр араһында яңы социалистик мөнәсәбәттәрҙең нығыныуын Дауыт ауылында коллективлашыу өсөн көрәш картиналары аша һынландыра. Поэманың төп геройҙары — элекке батрак менән уның ҡыҙы Айһылыу. Әҫәрҙең тәүге өлөшөндә автор төп иғтибарҙы Нурый ҡарт образына йүнәлтеп, уның колхоз төҙөлгәс кенә турайып баҫыуын, үҙен ысын кеше итеп тоя башлауын һүрәтләүгә йүнәлдерһә, икенсе өлөшөндә, иғтибар үҙәгендә, Айһылыу образы тора. Әҫәрҙә автор коллективлашыу осоронда ауыл халҡының икегә бүленеүен, колхоз тураһында һәр яҡ үҙенсә фекер йөрөтөүен, крәҫтиәндәр араһындағы икеләнеүҙәрҙе, шик-шөбһәләрҙе ҙур оҫталыҡ менән кәүҙәләндереүгә өлгәшә. Тракторсылар курсына киткән Айһылыу, кулактарҙың уның хаҡында төрлө ғәйбәт таратыуҙарына үс иткәндәй, трактор менән ҡайтып төшөүе бөтә ауыл халҡын тетрәтә. Ауыл урамынан руле артында ҡарт батрактың ҡыҙы Айһы-

лыу ултырған тракторҙың ер һелкетеп үтеп китеүе колхоз ҡоролошоноң, яңы тормоштоң еңеү маршы булып яңғырай.

Шағирҙың көҙгө уңыш йыйыу ваҡытында колхоз баҫыуынан репортаж формаһында яҙылған «Ейәнсура» поэмаһы ла тематикаһы менән «Тракторсы Айһылыу» поэмаһына яҡын тора. Помполит Әхмәтовҡа арналған был поэмаһында автор, колхоз ҡоролошоноң, азат хеҙмәттең тантанаһын, комсомолдарҙың хеҙмәт энтузиазмын һүрәтләү менән бергә, партия работнигының образын тыуҙырыуға бер ынтылыш яһаған.

Ленин комсомолының 15 йыллығына бағышланған «Юлдар» поэмаһы менән «Йыр башы» әҫәре тематик яҡтан да, композицион ҡоролоштары йәһәтенән дә бер-береһенә яҡын торалар. Был поэмаларында Булат Ишемғол Өфө—Ишембай тимер юлы төҙөлөшө, Ишембай нефть яҡтылығын үҙләштереү кеүек республикабыҙҙың индустриаль тарихындағы тәүге еңеүҙәрҙе Салауат яуҙары, Граждандар һуғышы һәм совет власын урынлаштырыу өсөн киҫкен көрәш ваҡиғаларына лирик һәм публицистик сигенеүҙәр алымы менән аралаштырып һүрәтләй. Бының менән автор бәхетле тормоштоң оҙайлы көрәш арҡылы, ут һәм ҡан йотоп яуланыуын тағы ла бер ҡабат һыҙыҡ өҫтөнә ала. Был әҫәрҙәрҙә социалистик реализм методының төп принциптарының береһе — тарихилыҡ принцибының тәрәнәйә һәм нығый барғанлығы күренә. Тап бына шуға ла Булат Ишемғолдоң эпик һәм лиро-эпик поэмалары артабанғы башҡорт поэзияһының үҫешенә һиҙелерлек йоғонто яһанылар, Ғ.Сәләмдең «Шоңҡар», «Республика иртәһе», Р.Ниғмәтиҙең «Йәмле Ағиҙел буйҙары» кеүек әҫәрҙәренең килеп тыуыуына ерлек әҙерләнеләр.

Булат Ишемғол башҡорт совет прозаһының: нәҫер, фельетон, хикәйә кеүек бәләкәй формаларының үҫешенә лә үҙ өлөшөн индерҙе. Яҙыусы үҙенең прозаик әҫәрҙәрендә лә поэзияһындағы кеүек осорҙоң көнүҙәк проблемаларына мөрәжәғәт иткән. Әйтелеп үтелгәненсә, уның фельетондарында һәм сатирик хикәйәләрендә дингә ҡаршы көрәш үҙәк урында торһа, лирик йылылыҡ менән яҙылған нәҫерҙәре, очерктары һәм хикәйәләрендә кешеләр араһындағы яңы мөнәсәбәттәрҙе, заман тыуҙырған яңы типтарҙы кәүҙәләндерә. Б.Ишемғолдоң проза әҫәрҙәре, заманға ярашлы рәүештә, кон-

траст алымдарға, көсөргәнешле конфликттарға ҡоролғандар. Бына «Ике бүләк» тигән бәләкәй генә нәҫерен алып ҡарайыҡ. Был нәҫер Арғаяш кантоны Солтанай ауылы комсомолкаларының «Ҡыҙыл флотҡа Урал ҡыҙҙарынан бүләк» тип яҙылған тәмәке янсыҡтары, ҡулъяулыҡтар ебәреү уңайы менән яҙылған. Автор был нәҫерҙә, бәләкәй генә факттан сығып, ҙур дөйөмләштереүҙәр яһай, совет кешеләре араһындағы яңы, эскерһеҙ мөнәсәбәттәрҙең башланғысын күрә: «Был — бүләк, ысын мәғәнәһе менән бүләк. Зыялы туташтарҙың, эштән сығып бөткән мырҙа ҡыҙҙарының, эшһеҙлектә майына сыҙаша алмай ҡырҡ ергә һикереп, һикһән урынға баҫып йөрөгән бай ҡыҙҙарының, үҙҙәренең намыҫтары бәрәбәренә офицерҙарҙан, юнкер әфәнделәрҙән, бай-бетсәләрҙән алған бүләктәргә ҡарағанда миң тапҡыр ҡәҙерле бүләк. Пролетариат һеҙҙең кеүек намыҫ менән дә, йәриәләр менән дә, алтындар менән дә бүләкләшмәй ул. Уның иң ҡәҙерле бер бүләге бар, ул да булһа — уның йөрәге», — ти.

Булат Ишемғолдоң нәҫерҙәре араһында уҡыусыға туранан-тура мөрәжәғәт итеү, уны өндәү һәм саҡырыу формаһында яҙылғандары ла, үҙенең рухи донъяһын, тормошҡа актив мөнәсәбәтен белдереү формаһында ижад ителгәндәре лә бар. Дөйөм алғанда, яҙыусы үҙенең нәҫерҙәре менән башҡорт совет прозаһында лирик йүнәлеште башлап ебәреүселәрҙең береһе булды.

Яҙыусының хикәйәләренә килгәндә, уларҙы тематик яҡтан икегә бүлеп ҡарарға мөмкин. «Байрам таңы», «Күк ат», «Ҡан», «Язар» кеүек бер төркөм — иҫтәлектәргә тартым әҫәрҙәрендә автор нигеҙҙә үк башынан үткән Граждандар һуғышы ваҡиғаларын кәүҙәләндерһә, «Делегатка», «Ил балалары», «Биктимер», «Газетаға яҙғандар бит», «Фатих Галин» тигән хикәйәләрендә Октябрь революцияһы тыуҙырған яңы кешенең реалистик образын һынландыра. Был хикәйәләр ваҡиғаларҙың әле һыуынып бөтмәгән, эҫе мәлендә яҙылыуҙары, яҙыусының ысынбарлыҡҡа тәрән үтеп инеүе һәм осоро өсөн көнүҙәк проблемалы булыуҙары менән айырылып торалар. Яҙыусы заман темаһына яҙылған хикәйәләрендә революцияға тиклем иҙелеп, кәмһетелеп килгән Гөлъямал кеүек ҡатын-ҡыҙҙарҙа, Биктимер, Фатих кеүек элекке батрактарҙа актив граждандлыҡ тойғоһо уяны-

уын һәм уларҙың яңы тормош өсөн көрәштең алғы һыҙығына баҫыуын күрһәтеүҙе иғтибар үҙәгенә ҡуйған. Был хикәйәләр тормошсан булыуҙары менән художестволы очеркка тартым булһалар, ауылдарҙа совет власы урынлаштырыу өсөн көрәш, коллективлашыу кеүек оло ваҡиғаларҙы эсенә алыуҙары менән ҙур күләмле әҫәрҙәргә яҡын торалар, сөнки уларҙың нигеҙендә повесть һәм романдарға торошло тормош материалы ята. Был иһә ҙур тормош тәжрибәһе туплаған яҙыусының ижад эволюцияһы киң полотнолы әҫәрҙәр тыуҙырыуға табан йүнәлеш алыуы хаҡында һөйләй. Ләкин, ижадының тамам өлгөрөп еткән бер дәүерендә ғүмеренең ҡапыл өҙөлөп ҡалыуы сәбәпле, яҙыусыға үҙ пландарын тулыһынса тормошҡа ашырырға насип булманы. Шулай булыуына ҡарамаҫтан, актив йәмәғәт эшмәкәре, талантлы яҙыусы Булат Ишемғол ижады башҡорт совет әҙәбиәте тарихында лайыҡлы урын биләй, «Тракторсы Айһылыу», «Юлдар», «Йыр башы» кеүек иң һәйбәт әҫәрҙәре, заман һынауын үтеп, әҙәби мираҫыбыҙҙың үлемһеҙ байлығына әйләнделәр.

## Күңел ҡапҡаларын асыусы

«Бөтәһе лә һуңлап килде миңә» тигән киң билдәле йырҙың авторы, талантлы шағир һәм драматург Назар Нәжми ижады тураһында бер һүҙ әйтергә тип ҡулыма ҡәләм алғас, нисектер, мәҡәләмде башлай алмай ултырғанда, күңелемә үҙенән-үҙе шундай шиғыр юлдары килде:

Йылғаларҙың урғып ҡалҡҡаны бар —
Ҡалҡыу менән ҡайнап аҡҡаны;
Йылғаларҙың ергә батҡаны бар,
Батҡандың бар бәреп сыҡҡаны!..
Йылғаларҙың тыуған ер һутҡайын
Бар үҙенә наҙлап һурғаны,
Бик ашыҡмай ғына аға-аға,
Ярҙарына тула барғаны,
Ғәйрәтләнеп алғас, үҙ иркенә
Башҡа ағымдарҙы борғаны...
Таланттар ҙа тәбиғәткә оҡшаш:
Тап йылғалар инде торғаны...

Эйе, Назар Нәжмиҙең дә ижад юлы миңә бәрәкәтле ер ҡуйынынан яйлап ҡына ҡалҡып сыҡҡан, үҙенә юл ярып аҡҡан һайын ҡеүәтләнә һәм киңәйә барған тулы һыулы йылға яҙмышын хәтерләтә. Сөнки шағирҙың тәрән йөкмәткеле һәм күп яҡлы ижад юлына байҡау яһағанда, уның оҫталығы шиғырҙан шиғырға камиллаша, таланты китаптан китапҡа асыла, шиғриәттә һәм драматургияла ижад индивидуаллеге йылдан-йыл асыҡлана, күркәмләнә һәм баҙыҡлана барғанлығы күренә.

Күпме ҡапҡа астым... Ә йыр, йыр, тип
Нисә йылдар инде янам мин.
Кеше күңеленең ҡапҡаларын
Ғүмерем буйы ҡағам, ҡағам мин, —

ти шағир «Ҡапҡалар» тигән атаҡлы поэмаһында. Кеше күңеленең ҡапҡаларын ҡағыу, уға үтеп инеп, изге тойғолар, илаһи хистәр уятыу, кешегә тормошто һөйөргә, ерҙәге матурлыҡ һәм изгелек хаҡына теләһә ниндәй ауырлыҡтарҙы еңеп сығырға булышлыҡ итеү Назар Нәжми ижадының идея-эстетик асылын, граждандлыҡ пафосын билдәләй.

Шағирҙың тыуған ил, тыуған ер, халыҡ рухы, туған тел һәм туған моң тураһындағы уйланыуҙары һуңғы йылдарҙа ижад ителгән «Иблес» һәм «Урал» тигән поэмаларына барып тоташа. Был ике поэмала ла Н.Нәжми тыуған иленән айырылған кешеләрҙең аяныс фажиғәһен асып бирә. Кеше үҙенең тыуған илендә генә ысын кеше. Тыуған иленән айырылған кеше — ҡанаты ҡайырылған ҡош, тамырҙары ерҙән йолҡонған ағас хәлендә. Шуға күрә «Иблес» поэмаһында, дини фанатизм ҡоло булараҡ, совет ҡоролошон яратмай, илде ташлап китеп, иблескә әйләнгән, сит ерҙәрҙә бөтә ғаиләһенән яҙған, хатта тыуған ил тураһында һүҙ сығарғаны өсөн, һуңғы улы Мәхмүтте үҙ ҡулдары менән үлтергән Әхмәттә лә ғүмеренең һуңғы көндәрендә тыуған ил тойғоһо уяна: тыуған ерҙән килгән бер ус мәтрүшкәгә ул үҙенең утлы күҙ йәштәрен тамыҙырға мәжбүр була. Әхмәттә тыуған ил тойғоһон бер ус мәтрүшкә уятып, уның фажиғәһен тәрәнәйтһә, «Урал» поэмаһы персонажының рухи фажиғәһе тағы ла тәрәнерәк: һуғыш ваҡытында, ҡурҡаҡлығы арҡаһында илгә хыянат итеп, ситтә тороп ҡалған бер әҙәм ғүмер буйы үҙенең тыуған

ерен, халыҡ моңон онота алмай ғазаплана. Халыҡ моңо шулай уҡ «Иблес» поэмаһында ла үҙәк урында тора. Иренә эйәреп сығып китергә мәжбүр булған Бибикамалдың татар телендәге моңло йырҙары, хатта, юлда донъяға килеп, Ғәрәбстанда үҫкән улы Мәхмүттә лә тыуған ил тойғоһо уята!.. Шул уҡ ваҡытта был ике әҫәрҙең дә идея-эстетик йөкмәткеһе илдән айырылған осраҡлы кешеләрҙең шәхси фажиғәһен күрһәтеүгә генә ҡайтып ҡалмай, әлбиттә. Был ике поэманың дөйөм пафосы тыуған ил тойғоһоноң, халыҡ рухының, халыҡ моңоноң йәшәүсән һәм еңеүсән көсөн дә раҫлай.

Н.Нәжми шиғриәте — уғата кешелекле шиғриәт. Шағирҙың гуманистик ҡараштары айырата Бөйөк Ватан һуғышы темаһына яҙылған шиғыр һәм поэмаларында көслө сағылыш ала. Уның был темаға арналған тиҫтәләрсә шиғырҙарынан, «Әсә», «Ҡайындар», «Йыр тураһында баллада», «Күлдәк» кеүек киң билдәле поэмаларынан күренеүенсә, һуғыш — ул халыҡҡа афәт килтереүсе, кешеләрҙең матур хыялдарын емереүсе, миллионлаған кешеләрҙең ғүмерен өҙөүсе оло фажиғә. Һуғыш һәләкәттәрен тәрән кисереү аша тормоштоң еңеү көсөн раҫлау Н.Нәжми поэмаларының ғына түгел, «Ҡайын», «Миләш», «Иртә төшкән ҡар», «Ҡайтманығыҙ тыуған ерҙәргә», «Байраҡ менән һөйләшеү» кеүек шиғырҙарының да эске драматизмын көсәйтә. Билдәле булыуынса, поэма, жанр булараҡ, тормоштоң иң көсөргәнешле һәм юғары мәлдәрен сағылдыра. Н.Нәжмиҙең һуғыш тураһындағы поэмаларына килгәндә, был көсөргәнеш, эске драматизм икеләтә көслө. Беренсенән, уның һуғыш тураһындағы поэмаларындағы көсөргәнешлекте һуғыш ысынбарлығы үҙе көсәйтһә, икенсенән, был көсөргәнеш шағирҙың күпселек осраҡта һуғыштың фажиғәләренә баҫым яһауында киҫкенләшә. Әммә шуныһы мөһим: шағир үҙенең әҫәрҙәрендә һуғыш фажиғәләренә баҫым яһауҙы үҙмаҡсат итеп ҡуймай, бәлки быны менән кешелектең йәшәү көсөн, тормоштоң еңеүсән пафосын раҫлай. «Ҡайындар» балладаһында, улы Ҡәйүмдең үлем хәбәрен ишетеү менән, «ҡайынлы өй — ҡайғылы өй» тигән бер боронғо һүҙгә ышанып, йәнасыуҙан, өй алдындағы ҡайындарҙы ҡырҡып ташлаған ата образында һуғыштың фажиғәһе реаль кәүҙәләнеш алһа, балладаның тормошто раҫлау көсө ҡырҡылған ҡайын төптәренән яҙын үрсеп сыҡҡан

үҫентеләр образында символик кәүҙәләнеш ала. Тәрән психологик кисерештәр менән тулы «Күлдәк» поэмаһында тормоштоң дауамлылығы биш йәшендә атаһының фронтта үлгәнлеген дә белмәй күлдәк туйы уҙғарып ҡыуанған Ансаф образында сағыла. «Йыр тураһында баллада»ла яу ҡырында ятып ҡалған шағир-һалдаттың ғүмерен уның йыры дауам иттерә:

Ята шағир үлән өҫтөндә,
Үләндәрҙе һыйпап иҫә ел.
Эй ғүмерҙең һуңғы сәғәте!..
Оса ваҡыт,
    оса йыр
        оса Ер.

«Оса ваҡыт...» һуғыш дәүереме, тыныс көндәрме, береһенә лә ҡарамай, туҡтауһыҙ осҡан ваҡыт тураһында уйланыуҙар, аяуһыҙ ваҡыт ағышының һәр минутын шиғриәткә әүерелдереп, ярһыу заман һулышын мәңгеләштерергә ынтылыш Н.Нәжми поэзияһының драматик көсөргәнешлеген арттыра. Был, әлбиттә, шағирҙың ваҡыт образына йыш мөрәжәғәт итеүенә генә ҡайтып ҡалмай. Иң мөһиме — шағир уҙғандарға поэтик экскурс яһаһынмы, киләсәк тураһында уйланһынмы ваҡыт аяуһыҙлығын еңергә, уға ҡаршы торорға тырыша. Был уның шиғриәтендә берсә моңһоу һағыш булып ишетелһә («Асылмайса ҡалды миндә Күпме сәскә бөрөләре. Уянманы хистәремдең Тереләрҙән тереләре». «Ҡарҙар яуа»), берсә тормоштоң дауамлылығын, кеше хеҙмәтенең бөйөклөгөн, үлемһеҙлеген раҫлаусы философик әҫәрҙәрендә күркәм сағылыш ала.

Шағир ижадында үҙенең ҡәләмдәштәренә, һүҙ, сәнғәт оҫталарына арналған әҫәрҙәр байтаҡ. Н.Нәжми шулай уҡ, шиғриәт тураһында уйланғанда, Пушкин, Лермонтов, Есенин, Туҡай кеүек бөйөк шәхестәргә йыш мөрәжәғәт итә. Был, берҙән, уның ижади бәйләнештәрен, поэзияһы һутланған поэтик традицияларҙы асыҡларға мөмкинлек бирһә, икенсенән, уның шағирҙар тураһындағы шиғырҙары һәм «Шағир һәм шаһ» поэмаһы шағир һәм халыҡ, шағир һам заман, талант һәм уның үлемһеҙлеге кеүек темаларҙы тәрән яҡтыртыуы менән бөгөнгө башҡорт поэзияһының интеллектуаль кимәлен дә күтәрә. Был тема шулай уҡ шағирҙың ваҡыт, заман,

йәшәү мәғәнәһе тураһындағы уйланыуҙарына барып тоташа.

Һәр нәмәлә шиғыр ята,
Әгәр тоя, күрә белһәң,
Күргәнеңде йөрәгеңдә
Шиғыр итеп һөҙә белһәң, —

ти Н.Нәжми үҙенең бер исемһеҙ шиғырында. Был юлдар үҙҙәре үк шағир ижадының тематикаһы ни тиклем киң булыуын, шағир үҙ күңелен борсоған йәки илһам осҡоно ҡабыҙған һәр күренеш, тойғо һәм хәтирәләр тураһында шиғыр яҙа алыуы хаҡында һөйләп тора.

Шағир «Илаған ат тураһында шиғыр» яҙамы, әллә ҡартайған эт менән һөйләшәме («Һаумы, Бобик»), «Һыйыр тураһында йыр» йырлаймы — ни нәмә хаҡында ғына яҙмаһын, тормош материалын үҙ күңеле аша «һөҙөп» үткәрә, үҙенең күңел диалектикаһын аса.

Үҙенең интим һәм философик лирикаһы менән кешенең күңел күҙәнәктәренә тәрән үтеп ингән кеүек, шағир шаулы заманыбыҙҙың йөрәк тибешен дә һиҙгер тоя, тоя ғына түгел — бөтә ауырлыҡтарын шағир булараҡ та, гражданин булараҡ та үҙ иңенә күтәрешә.

Заман беҙгә бөтәһен дә бирә,
Һәм ул беҙҙе ала үҙенә.
Беҙҙән тора заман. Беҙ төҙөгән
Заман бит ул беҙҙән төҙөлә, —

ти ул «Яҙ көнөндә һөйләшеү» тигән шиғырында. Был шиғыр, минеңсә, шағирҙың 1944 йылда яҙған «Партияға инеү» тигән шиғырының логик дауамы булып тора. 1944 йылда яу яланында партияға инеп, шунда уҡ һөжүмгә киткән фронтовик шағир бына егерме йыл уҙғас, 1964 йылда, егерме йәшлек егетте партияға алыуҙа ҡатнаша һәм уйҙары менән алыҫ уҙғандарҙы байҡай, байҡап ҡына ҡалмай, үҙенең коммунист булып үткән егерме йыллыҡ ғүмеренә отчет бирә. Әммә шағир үҙ быуынының героик эштәре менән генә күкрәк ҡаҡмай, үҙе тыуған йылдарҙа уҡ коммунист булып, илдә Совет власын урынлаштырған өлкән быуын алдында баш эйә:

Коммунист һәм кеше тигән бөйөк,
Бөйөк исем менән һуларға
Әгәр миңә мөмкин булған икән —
Бурыслымын ана шуларға, —

ти, йәш коммунисты ошо бөйөк традицияларға тоғро булырға саҡыра. Донъя яҙмышын үҙ ҡулында тотоусы коммунистар эстафетаһы, быуындар алмашыныуы тураһында тулҡынландырғыс кисерештәр, борсолоуҙар менән тулы был шиғырын шағир йәш быуынға ҙур ышаныс тойғоһо менән тамамлай:

Урамда яҙ... Таҫма-таҫма булып,
Йөрәгемә инә яҙ нуры, —

тигән һуңғы юлдар был ышаныс тойғоһон тағы ла нығыта төшә. Шағирҙың «Байраҡ менән һөйләшеү» шиғыры ла үҙенең эске рухы менән «Яҙ көнөндә һөйләшеү» шиғырына яҡын тора. Музейҙа торған Еңеү байрағы менән әңгәмә-бәхәс формаһына ҡоролған был шиғыр — еңеү өсөн түккән хәләл ҡан, һәләк булған ҡорбандар, иҫән ҡалған ветерандар тураһында уйланыу-хәтирә һуғыш ветерандарының йәш быуынға аманаты булараҡ ҡабул ителә.

Һуғыш фажиғәләрен үҙ йөрәге аша уҙғарған шағир ядро һуғышы ҡурҡынысы килеп баҫҡан хәҙерге заманда тыныс ҡына йәшәй алмай. Ул, һуғыш тураһында яҙамы, әллә тыныс хеҙмәт кешеһенә дан йырлаймы, донъялар именлеге тураһында ҡайғырта. Тап бына шуға ла Н.Нәжмиҙең бишектәге бала, сәңгелдәктә ятҡан балалай ғәзиз Ер яҙмышы хаҡына тыныслыҡ өсөн көрәш ораны, поэтик набат булып яңғыраған «Йоҡлаған бала янында» тигән поэмаһы ғына түгел, һуғышҡа ҡағылышлы булған бөтә поэзияһы тыныслыҡ өсөн көрәш идеяһы менән һуғарылған.

Н.Нәжми бар булмышы менән ергә ереккән шағир. Ул тыуған ерҙең гүзәл тәбиғәтенә генә түгел, ер ҡотон ҡулдарында тотоусы ер улдарына ла ғашиҡ. «Дуҫ тураһында ун бер йыр» поэмаһындағы Ғилуан тап шундай кешеләрҙең береһе. Ул, фронтта үҙенең һыңар ҡулын, яратҡан ҡатынын юғалтып ҡайтыуына ҡарамаҫтан, юғалтыуҙар алдында баш эймәгән, ауырлыҡтарҙы ыһ та итмәй күтәрә белгән, тормошто ла тап халыҡса яратҡан ер улы. Ул, ғүмер буйы көтөү көтөп малдар үрсетһә лә, үҙ хеҙмәтенә дан да, маҡтау ҙа көтмәй, тик үҙ эшен эшләй бирә. Поэманың ауылдағы егерме бер шишмә тураһында инеш менән башланыуы ла юҡҡа ғына түгел: шағир халыҡтың сафлығын, уның йолаҡанундарын һаҡлаусы Ғилуан образында ла ана шун-

дай ҡоромаҫ шишмәләрҙәй урғып торған халыҡ рухын кәүҙәләндерә.

Шағир ижадының граждандлыҡ пафосы айырата 60—70-се йылдарҙа көсәйҙе. Был йылдарҙа ул үҙенең поэзияһында совет патриотизмы, халыҡтар дуҫлығы, кешенең заман һәм ил алдындағы яуаплылығы кеүек мөһим проблемаларҙы юғары шиғриәт кимәленә күтәрҙе. Шағир ижадының төрлө яҡтан өлгөрөп етеүе һәм баҙыҡланыуы айырата Салауат Юлаев исемендәге премияға лайыҡ булған «Ҡарҙар яуа» (1971), «Көтмәгәндә» (1975) һәм «Тарафтар» (1981) тигән йыйынтыҡтарында асыҡ күренде.

Н.Нәжми — башҡорт совет драматургияһын үҫтереүгә һиҙелерлек өлөш индергән һәләтле драматург булараҡ та танылған әҙип. Уның «Яҙғы йыр», «Хуш, Хәйрүш!», «Саҡырылмаған ҡунаҡ», «Күршеләргә ҡунаҡ килгән», «Гармунсы дуҫ», «Ҡыңғыраулы дуға» тигән әҫәрҙәре буйынса ҡуйылған спектаклдәр республикабыҙҙың театр сәхнәләрендә ҙур уңыш ҡаҙанды. Автор, драматург булараҡ, ике йүнәлештә ижад итә. Уның «Яҙғы йыр», «Гармунсы дуҫ» кеүек драмаларына күтәренке рух, ҡанатлы йәшлек романтикаһы хас булһа, «Саҡырылмаған ҡунаҡ», «Күршеләргә ҡунаҡ килгән», «Ҡыңғыраулы дуға» әҫәрҙәрендә автор хәҙерге замандағы әхлаҡ-этик мәсьәләләргә баҫым яһай һәм айырым кешеләрҙең холоҡ-ҡылыҡтарындағы вайымһыҙлыҡ, битарафлыҡ, ике йөҙлөлөк, көнсөллөк кеүек кире яҡтарҙы ғына түгел, иң мөһиме — хәҙерге заманда тамырҙарын шаҡтай ныҡ йәйә башлаған әйбер ҡоллоғона, рухи мещанлыҡҡа ҡаршы сыға, уларҙы фаш итә.

Ғөмүмән, Назар Нәжми үҙенең сағыу таланты менән дөйөм башҡорт әҙәбиәтен, айырата уның поэтик жанрҙарын үҫтереүгә, сағыу образдарға, ихлас тойғоларға һәм тәрән фекерҙәргә бай шиғырҙары, йырҙары һәм поэмалары менән башҡорт шиғырының поэтикаһын байытыуға ҙур өлөш индерҙе.

1982 йылда шағир «Дуҫты саҡырыу», «Һулыш», «Тарафтар» тигән поэтик йыйынтыҡтары өсөн РСФСР-ҙың М.Горький исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ булды. Был ҙур баһа уның ижады күптән инде бер башҡорт әҙәбиәтенең генә түгел, ә күп милләтле Бөтә Союз әҙәбиәтенең ҡаҙанышы юғарылығына күтәрелеүе хаҡында һөйләй.

## Шағирҙың граждандлыҡ йөҙө

Поэзиябыҙҙың хәҙерге идея-эстетик кимәле, заманса яңғырашы һәм граждандлыҡ пафосы тураһында һүҙ йөрөтөлһә, танылған шағирҙарыбыҙ менән бергә йәшерәк быуындан, хаҡлы рәүештә, Рауил Бикбаев поэзияһы үҙәккә ҡуйыла.

«Хәҙер, — тип яҙа Ғ.Хөсәйенов, — Р.Бикбаевтың кешелек донъяһын, заманыбыҙҙы борсоған һәм уйландырған мөһим проблемаларға ҡағылышлы ялҡынлы шиғырҙарынан, экспрессив һүрәтләү сараларынан тыш, бөгөнгө поэзиябыҙҙың ҡаҙаныштарын, алдағы үҫеш перспективаларын күҙ алдына килтереү мөмкин түгел»[237].

Күренекле әҙәбиәтсенең был һүҙҙәрендә оло хәҡиҡәт бар. Рауил Бикбаев алтмышынсы йылдарҙа поэзияға аяҡ баҫҡан шағирҙар араһында ижадының емешле булыуы менән дә, поэтик һүҙенең олпатлығы, граждандлыҡ тауышының баҙыҡ, тематикаһының киң булыуы яғынан да айырылып тора. Уның «Дала офоҡтары» тигән тәүге китабы 1964 йылда донъя күргәйне. Бынан һуң бер-бер артлы «Ҡош юлы» (1967), «Автобиография» (1969), «Лирика» (1971), «Ғүмер уртаһы» (1976), «Һөйөнсө» (1979) тигән йыйынтыҡтары баҫылып сыҡты. 1978 йылда Мәскәүҙә рус телендә донъя күргән «Поющие скалы» тигән шиғырҙар йыйынтығы үҙәк матбуғатта юғары баһа алды. Ошо ваҡыт эсендә ул һәләтле әҙәбиәт ғалимы булып өлгөрөп етте. Башҡорт әҙәбиәт ғилемен «Хәҙерге башҡорт поэмаһының ҡайһы бер жанр үҙенсәлектәре» (1968), «Хәҙерге башҡорт поэзияһында философик лирика» (1973), «Замандың поэтик йылъяҙмаһы» (1980) тигән монографик хеҙмәттәре менән байытты; газета һәм журнал биттәрендә ул бөгөнгө әҙәби процесҡа арналған әҙәби-тәнҡит мәҡәләләре менән дә актив сығыш яһай.

Төплө ғилми әҙерлек, киң эрудиция уның поэтик офоҡтары киңәйеүенә, оҫталығының йәһәтерәк камиллашыуына ҙур булышлыҡ итте. Һәр шағирҙың ижад юлында уны киң донъяға алып сыҡҡан һәм уға халыҡ

[237] Хәҙерге заман һәм башҡорт әҙәбиәте. — Мәҡәләләр йыйынтығы. — Өфө, 1977, 10-сы бит.

тарафынан танылыу алып килгән әҫәре була. Р.Бикбаевтың шундай әҫәре, минеңсә, «Вокзал» поэмаһы булды. Шағир «Вокзал» поэмаһында, тәү башлап, оло тормош материалына мөрәжәғәт итте. Ошо әҫәре менән шағир балалыҡ осорҙары дәһшәтле дәүергә тура килгән бер быуындың яҙмышында ғына түгел, ире яуға киткәндә тыумай ҙа ҡалған улын армияға оҙатыусы ҡатын образында ла ҡәһәрле һуғыштың халыҡ күңеленә һалған аяныслы яраларҙы асты.

Әҫәр — жанры буйынса лирик поэма. Әммә уның композицион яҡтан вокзал образы тирәһендә оҫта ойошторолоуы — дәһшәтле яу йылдарын да, бөгөнгө тормош шау-шыуын да шағир күңеле аша асырға ҙур мөмкинлек биргән. Поэмала әсә образы тетрәткес драматик образ булып кәүҙәләнһә, вокзал аша уҙған донъя шауын үҙ йөрәге аша уҙғарыусы лирик герой образы тәрән психологизм менән һуғарылған. Поэмала шағир күңеле, бер яҡтан, күпте күргән шаулы вокзалды үҙ итһә лә, икенсе яҡтан, уның менән бәхәсләшә:

> Вокзал кеүек, күпте күреү — бәхет,
> Ғәмһеҙ булыу—үлем шағирға, —

ти, ғәмһеҙ күҙәтеүсе булып ҡына йәшәргә теләмәй, тормошҡа үҙенең актив мөнәсәбәтен белдерә. Әҫәрҙә, ғөмүмән, шағирҙың тормоштағы урыны, изге бурыстары тураһында етди мәсьәләләр ҡуйыла:

> Төндә тертләп торған әсә менән
> Минең йөрәк бергә тертләһә,
> Кешеләрҙең кескәй хәсрәте лә
> Күңелемде китһә, этләһә,
> Башҡаларҙың шатлыҡ-ҡайғыларын
> Үҙенеке итһә яҙмышым —
> Шунда ғына,
> Шунда ғына табылыр
> Әйтер һүҙем,
> Йырлар тауышым.

Был юлдар шағирҙың тәүге поэтик декларацияһы булып яңғырай.

Шағир тәүге китабында үҙ алдына ҡуйған был изге бурысҡа тоғро булды. Уның поэтик оҫталығы шиғырҙан шиғырға, китаптан китапҡа үҫә һәм камиллаша барҙы. Тәүге китапта айырата «Вокзал» поэмаһында

башланған мотивтар артабанғы ижадында киңәйә, тәрәнәйә төштө.

«Бәхетле булһа ла, бәхетһеҙ булһа ла, — ти халыҡ шағиры М.Кәрим, — беҙҙең бала сағыбыҙ оҙон-оҙаҡ йылдар буйынса артыбыҙҙан эйәреп килә».

Сабый ваҡыттары һуғыш дәүеренә тап килеп, әсәләренең һағышлы моңдарын, ҡайғы-хәсрәттәрен тыңлап үҫкән быуынды ла шул йылдарҙың ауыр хәтирәләре, онотолмаҫ бала саҡтары һәр саҡ оҙатып йөрөй.

«Вокзал» поэмаһында башланған Ватан һуғышы темаһы бына шуға ла, атаһы яуҙан ауыр яра менән ҡайтып ауған һәм еңеү көндәрендә вафат булған Р.Бикбаев ижадында үҙәк темаларҙың береһе булып торалар.

Р.Бикбаев «Почтальон малай», «Аҙашҡан бала саҡ», «Апайҙарым» шиғырҙарында үҙ быуынының һуғыш хәтирәләре менән иләҫләнгән күңел кисерештәрен сағылдыра:

Киткәндәргә мөлдөрәшеп баҡтыҡ,
Тотоношоп әсәй еңенә.
Таштай көйәнтәләр булып төштө
Һуғыш сабый ҡыҙҙар иңенә.
Буш буралы ҡара яҙҙар менән,
Ахры, үтә иртә таныштыҡ.
...Кисерегеҙ сабый таңдарымдан
Һығылып килеп тамған һағышты, —

ти шағир «Апайҙарым» шиғырында.

Эйе, был балалыҡтың вайымһыҙ саҡтарын, мәҙәкле уйындарын һағыныу түгел, ә һуғыш бала күңеленә уйып һалып киткән уңалмаҫ яраларҙан һыҙланыу. Шағирҙың үҙ һүҙҙәре менән әйткәндә, «туптар тауышынан һиҫкәнеп ташлап киткән бала саҡ»ты юҡһыныу. Был юҡһыныу тойғоһо һуғыш темаһына бәйләнешле бер шиғырҙан икенсеһенә күсә һәм тәрәнәйә барып, Бөйөк Еңеүҙең 30 йыллығын байрам итеү алдынан яҙылған «Эҙләйем» шиғырында бөтә халыҡ яҙмышына ҡағылышлы киҫкен социаль яңғыраш дәрәжәһенә күтәрелде. Сөнки Бөйөк Еңеү байрамының 30 йыллығы алдынан партиябыҙ һәм хөкүмәтебеҙ яуҙа һәләк булған батырҙарҙың исемен мәңгеләштереү, һуғыш йылдарында етем ҡалған әсәләргә һәм балаларға даими ярҙам итеү буйынса ҙур эштәр башҡарҙы. Шулай уҡ халҡыбыҙ был көндәрҙә еңеү тантанаһын байрам итеү хәстәре

менән генә йәшәмәне, ауыр фажиғәле һуғыштың уңалмаҫ яраларын да аҡтарҙы. Күптәр һуғышта һәләк булған аталарының, улдарының, ирҙәренең ҡәберҙәрен эҙләне, билдәһеҙ юғалғандарҙың эҙен табырға, хәҡиҡәтте асыҡларға тырыштылар, һуғыш ирҙе — ҡатындан, атаны улдан айырып ҡына ҡалманы, баланы — әсәнән, әсәне балаларынан айырҙы. Бик күп ғаиләләр тарҡалышып, бер-береһен юғалттылар. Ләкин улар осрашыу, табышыу һәм күрешеүҙән өмөттәрен өҙмәнеләр. Еңеү байрамының 30 йыллығы алдынан радио, телевидение һәм ваҡытлы матбуғат биттәрендә бер-береһен эҙләү тураһында иғландар, хаттар айырата күп булды. Р.Бикбаев, бына ошо массовый күренеште, халыҡ һағышын, халыҡ хәстәрен үҙ йөрәгендә ҡайнатып, «Эҙләйем» шиғырын ижад итте. Был шиғыр — формаһы яғынан да, йөкмәткеһе менән дә ҡабатланмаҫ әҫәр. Һәләкәттәрҙе, һуғыш фажиғәләрен иҫтән сығармаҫҡа саҡырыу шиғырҙың төп лейтмотивы булып тора.

Нисәнсе ҡат ҡабына ла гөлтләп
Төндәремде тоҡандырып китә
«Маяҡ» тулҡынында бюллетень,
Йыһандарға ташып һағыштары,
Туғандарын эҙләй мең етем.
Минең йөрәк шул етемдәр менән,
Тиҫтерҙәрем менән бер бөтөн.

Шиғыр ошо юлдар менән башлана ла артабан стенографик яҙма һымаҡ туғандарын, яҡындарын эҙләүселәр тураһында мәғлүмәттәр теҙелеп китә. Шиғырға килеп ингән был документаль алым әҫәрҙең тәьҫир көсөн тағы ла ҡеүәтләп ебәрә. Шул меңәрләгән эҙләүселәргә шағирҙың үҙ тауышы ла барып ҡушыла.

Мин —
Бикбаев Рауил Төхфәт улы —
1938-се йылғы,
Эҙләйем:
Сабый саҡтың зәңгәр шарҙарын,
Ырғып арымаҫ ап-аҡ туптарын,
Мин уларҙы мәңге күргәнем юҡ.
Бала сағым менән һикереп уйнар
Шарҙарымды, туптарымды
Шартлатҡанда һуғыш туптары,
һуғыш уттары,
Тик береһе ситкә янтайып
Ҡалғандыр ҙа

Һаман донъя буйлап тәгәрләйҙер,
Күккә һикереп мине күҙләйҙер,
Эҙләйем...

Атаһын, әсәһен, игеҙәк туғандарын эҙләүселәрҙең радио аша инде нисәнсе ҡат бөтә илгә ишетелгән ялбарыулы тауыштарына килеп ҡушылған был юлдар тәү ҡарашҡа сәйерерәк булып тойолһалар ҙа, улар бөтөн бер быуындың балалыҡ бәхетен емереүсе фашист илбаҫарҙарына оло нәфрәт булып яңғырайҙар. Шағир күңеле кителеп ҡалған үҙ бала сағын ғына юҡһыныу менән сикләнеп ҡалмай, Ленинград блокадаһында һыуыҡтан һәм аслыҡтан интегеп үлгән тиҫтерҙәрен дә, Белоруссияның көйгән тупрағында нәфрәт менән тулышҡан тамыр кеүек ер аҫтындағы өң-өйҙәрҙә йәшәгән сабыйҙарҙы ла юҡһына... Ҡырҡ биш өйлө тыуған ауылынан китеп ҡайта алмаған ҡырҡ биш ирҙе, улай ғына ла түгел, был һуғышта һәләк булған егерме миллион туғандарын эҙләй, шуларҙы юҡһынып болоҡһой. Шиғырҙа әленән-әле ҡабатланып торған «Эҙләйем, эҙләйем» рефрены һуғышҡа ҡаршы әсе нәфрәткә, быуындарҙан быуындарға күсәсәк көслө набатҡа әйләнә. Эйе, һуғыш шағирға атаһының үлем хәбәрен әсәһенән йәшергән почтальон малай булып та («Почтальон малай»), ыжғыр һыуыҡтарҙа мәке уйыусы яралы һалдат булып та («Мәке уйыусы»), бөгөн дә төңөлмәй улын көтөп алйыған әсә булып та («Сал сәс»), «хафалы моң» булып та эйәреп йөрөй, күңелен болоҡһота, уға тынғы бирмәй. Шуға ла «Туғыҙынсы май», «Фронтовиктар табынында», «Йондоҙло йорт», «Еңеү көнөндә тынлыҡ минуты» һ.б. шиғырҙарында, һуғыш фажиғәләрен кисереү тәрәнәйә барыуы менән бергә, был тема тыныслыҡ өсөн көрәш, халыҡ һәм тыуған ил алдында намыҫ сафлығы кеүек бөгөнгө көн проблемалары менән тығыҙ бәйләнештә күтәрелә. Шағир бөгөнгөгә һуғыштағы ҡаһарманлыҡ юғарылығынан ҡарарға саҡыра. «Йондоҙло йорт» шиғырында:

Һандыҡ төбөндәге һарғылт хаттар,
Эленеп торған һарғылт һүрәттәр...
Сабыйлыҡта күҙҙәремә ҡарап,
Сабырлыҡҡа улар өйрәткән.
Шул һалдаттар миңә күпме йортта
Өнһөҙ-тынһыҙ һаман ҡарайҙар.
Сафлыҡ, ихласлыҡты, намыҫымды
Һынай төҫлө ошо ағайҙар, —

ти шағир. Яуҙа батырҙарса һәләк булған һалдаттарҙы сафлыҡ һәм намыҫлылыҡ өлгөһө итеп күтәрә, «йондоҙҙарҙы ғорур балҡытҡан» йорттарҙың нигеҙенә оло ихтирам менән баш эйә.

«Эҙләйем» шиғырында:

Ҡайһы саҡта ваҡлыҡ, йылан булып,
Шыуышҡанда намыҫ үренә,
Шул тауыштар беҙгә шыбырлайҙар:
«Нишләйһегеҙ?
Эх һеҙ, тереләр...»
Ни хаҡыбыҙ быны оноторға?
Йөрәгемдә ярһыу ҡан барҙа,
Мин барыһын тейеш хәтерләргә,
Мин барыһын тейеш барларға, —

ти шағир. Шул рәүешле, һуғыш темаһын күтәреү уңайы менән шағир бөгөнгө көн һәм киләсәк алдында яуаплылыҡ, выждан сафлығы, тоғролоҡ һәм намыҫ кеүек көнүҙәк әхлаҡ проблемаларын алға ҡуя.

Оло яуҙа батырҙарса ҡорбан булып ятып ҡалған һалдаттарҙың һәм данлы еңеү яулап ҡайтҡан батырҙарҙың эшенә тоғролоҡ «Туғыҙынсы май» һәм «Фронтовиктар табынында» шиғырҙарында айырата көслө. Шағир өсөн билдәһеҙ һалдат ҡәбере өҫтөндә янған мәңгелек ут — һуғыш тураһында бер иҫтәлек кенә түгел, ә «эҫе тыны булып шаһиттарҙың ерҙән бәреп сыҡҡан» тере ялҡын.

Мәңгелек ут,
Ҡыҙыл сәскә итеп,
Йөрәгемде һалам янына.
Юл юғалтһам — алда һин маяҡһың,
Өшөһәм, ялҡын алам ҡаныма.
Миңә ҡунған тормош ваҡлыҡтары
Янып осһон һинең усаҡта.
Муйыныма урап ялҡыныңды,
Пионерҙай торам мин һаҡта.

«Туғыҙынсы май» шиғырынан килтерелгән был өҙөккә аңлатма биреп тороуҙың кәрәге юҡ һымаҡ. Бында шаһиттар рухына тоғролоҡ бөтә тулылығында әйтеп бирелгән. Ошо ерҙә шиғырға нөктә ҡуйырға ла мөмкин булыр ине. Әммә шағир уны көтөлмәгәнсә бороп ебәрә, ут образы поэтик фекерҙе ҡатмарлы ассоциатив образлылыҡҡа этәрә:

Ниңә әле ҡапыл хәтерләнем
Сабый саҡтарымды,
Усты өтөп барған ҡурмасты? —

ти ул хафаланып һәм был хафа юҡҡа ғына түгел, сөнки:

Мәңгелек ут!
Һиңә ҡаҙан аҫып, йомро баштар
Сабыйҙарҙы бөгөн ҡурмаҡсы.

Шул рәүешле, шиғырға тыныслыҡ өсөн көрәш темаһы көтөлмәгәнсә килеп инә һәм көсөргәнешле яңғыраш ала. Һуғыш темаһының донъя именлеге өсөн көрәш темаһы менән органик берлегенән килеп тыуған был поэтик көсөргәнеш, тойғолар драматизмы «Еңеү көндә тынлыҡ минутында» шиғырында тағы ла киҫкенерәк:

Изге шәфҡәт һорап шаһиттарға,
Тереләргә тыныс таң юрап,
Йөрәгемдә тынлыҡ минуты
Оран кеүек тора яңғырап.

Сөнки шағир өсөн еңеү көндәрендә һуғыш ҡорбандарын иҫкә ала торған тынлыҡ минуты, — изге хәтерләү мәле булыу менән бергә, кешелек донъяһын бындай фажиғәләрҙән киҫәтеү минуты ла ул.

Күренеп тороуынса, Ватан һуғышы темаһы Р.Бикбаев поэзияһында үҙәк темаларҙың береһе булып тора. Шағир был мөһим теманы үҙ тормош практикаһына таянып аса. Был һуғыштың халыҡҡа килтергән фажиғәләренә, уңалмаҫ яраларына баҫым яһап, кешеләрҙе бындай фажиғәләр ҡабатланмаһын өсөн аң булырға саҡыра. Был мөһим теманы совет патриотизмы, ата-бабаларҙың һуғышсан традицияларына тоғролоҡ, әхлаҡ-этик мәсьәләләр менән тығыҙ бәйләнештә күтәрә.

* * *

Тыуған ергә мөхәббәт тойғоһо кешенең иң изге тойғоларынан. Ошо мөҡәддәс кисерештең көсөнән күп шағирҙарҙың теле асылған. Был тема — Рауил Бикбаев поэзияһында төп темаларҙың береһе. Байтаҡ әҫәрҙә-

рендә шағир уны шаҡтай үҙенсәлекле яҡтырта. Был үҙенсәлек, йыйып ҡына әйткәндә, шәхестең тыуған ергә, тыуған илгә мөхәббәтен халыҡ яҙмышы менән тығыҙ бәйләүенә, тыуған ер яҙмышына ла, халыҡ яҙмышына ла тарихи диалектик ҡараштың көслө булыуына ҡайтып ҡала.

Шағир тыуған ергә арналған тәүге «Уралыма», «Донъя бигерәк сәйер...», «Сит бер кеше һымаҡ тыныс ҡына...» шиғырҙарында уҡ тыуған ерҙең тәбиғәтенә, тау йылғаларына бер биҙәк итеп кенә ҡарамай, тыуған ер хаҡында уға тиңдәш олпат фекер йөрөтөргә ынтыла, уның мөһабәтлеге һәм мәғрурлығы алдында баш эйә:

Уйсан саҡтарымды күрһәң әгәр,
Әйтмә, ҡайғыра, тип, был бәндә,
Мин баш эйәм ҡайғыларҙан түгел,
Үҙ еремде өҙөлөп һөйгәнгә.

Сөнки мәғрур Урал — көн күргән төйәк кенә түгел, ата-бабаларҙың тире һәм ҡаны һеңгән, әсәй-өләсәйҙәрҙең шатлыҡтарҙан, ҡайғыларҙан төйнәлгән күҙ йәштәре тамған ғәзиз, изге ер. Шуға ла шағир үҙен тыуған ере, туған тәбиғәте менән бер бөтөн итеп күргеһе килә:

Шишмәләрең минең йөрәк аша
Сылтыр-сылтыр ағып үтәләр.
Йөрәгемә, гүйә, ҡаным түгел,
Шул шишмәләр йәшәү илтәләр.

Шуныһы характерлы: «Дала офоҡтары» менән «Ҡош юлы» йыйынтыҡтарына ингән тыуған ер тураһындағы өс шиғыр ҙа халыҡ ижадында Тыуған илде кәүҙәләндергән Урал образына тығыҙ бәйләнгән. Туған Уралға ереккәнлек «Донъя бигерәк сәйер...» тип башланған шиғырҙа айырата көслө:

Елдәр!
Һеҙгә минең үтенес бар,
Тыңламайса уны үтмәгеҙ:
Мине, зинһар, туҙан көйөнсә лә
Уралымдан алып китмәгеҙ.

Был бик тәбиғи тойғо, сөнки беҙҙең халыҡта үҙенең тыуып үҫкән, ата-бабаларының ҡаны һәм рухы һеңгән

изге тыуған ер ҡуйынында ятыу борон-борондан үҙе бер оло бәхет һаналған.

Р.Бикбаев 1962—1965 йылдарҙа «Каруанһарай» тигән лиро-эпик поэмаһын ижад итте. Уның был поэмаһы халҡыбыҙҙың драматизм һәм фажиғәләр менән тулы революцияға тиклемге аяныслы яҙмышы хаҡындағы тәүге әҫәре булды.

Тарихи әҙәбиәттә «башҡорт халҡының алданған өмөтө» тип баһаланған Каруанһарай ваҡиғалары үҙ заманында уҡ халыҡтың аһ-зары булып йырҙарға күскән, легендалар тыуҙырған. Революцияға тиклемге поэзияла уҡ Каруанһарайҙы халыҡҡа кире ҡайтарыу өсөн көрәш милли һәм социаль азатлыҡ өсөн көрәш темаһына тығыҙ бәйләнгән. Каруанһарайҙың үҙ варисҭарына Бөйөк Октябрь революцияһынан һуң, В.И.Ленин декреты менән генә кире ҡайтарылыуы, үҙе үк күп нәмә хаҡында һөйләй.

Поэма билдәле күләмдә халыҡ ижады традицияларына нигеҙләнгән. Әҫәрҙә, бер яҡтан, башҡорт халҡының аң-белемгә, культураға ынтылышы сағылһа, икенсе яҡтан, батша самодержавиеһының халыҡты социаль һәм милли яҡтан иҙеп кенә ҡалмай, «башҡорт һөйәгенә ултырған» Каруанһарайҙы тартып алып, крайҙы колонизациялауҙы көсәйтеп ебәреүе менән халыҡты оятһыҙ рәүештә алдауы, кәмһетеүе һәм мыҫҡыл итеүе һыҙыҡ өҫтөнә алына. Ләкин халыҡ ни тиклем генә ҡыҫылмаһын, поэмала башҡорт ерҙәрен тартып алыуҙарға ҡаршы күтәрелгән балаларҙы һүрәтләүҙә лә, Зәйнәп менән Аҡъюлдың фажиғәле саф мөхәббәтенең еңелмәҫ рухын кәүҙәләндереүҙә лә халыҡтың күҙе асыла, синфи һәм милли аңы көсәйә барыуы сағыла.

Был тарихи ваҡиғаларға нигеҙләнгән ҙур күләмле поэмала айырым етешһеҙлектәр ҙә юҡ түгел. Бохара сауҙагәрҙәренең Зәйнәпте урлап алып китеүе ваҡиғалары, мәҫәлән, әҫәрҙе төп конфликттан ситләштерә биреп ҡуйған. Автор поэманы ижад итеү барышында күрһәтеп үтелгән ҡаршылыҡтарға осраһа ла, халыҡ яҙмышы хаҡындағы ҙур күләмле әҫәр өҫтөндә оҙайлы эшләү уға бер мәктәп була. Иң мөһиме — шағирҙа халыҡ тормошона тарихи ҡараш тойғоһо көсәйә, поэтик оҫталығы күтәрелә. Шуныһы характерлы: Р.Бикбаев, революцияға тиклем башҡорт халҡы ни тиклем яфа сикмәһен һәм иҙелмәһен, ул меҫкен булмаған, рухи яҡтан

иҙеүселәрҙән юғары, өҫтөн булып ҡалған тигән фекерҙе ҡеүәтләй.

Халҡым! Һиңә нисек һаран тарих
Данды былай йомарт өләшкән?
Ҡанһыраған көйө, ни көс табып,
Еңеп сыҡтың тиңһеҙ көрәштән?
Ҡуш ҡул булып, һине быуған саҡта,
Рус батшаһы, башҡорт тарханы,
Был донъяның ниндәй мөғжизәһе
Һәләкәттән һине һаҡланы?
Әйтегеҙсе, тауҙар! Һеҙ шаһит бит,
Улдарығыҙ, яуҙан ҡайтҡанда,
Әсәһенә сабый һыйынғандай,
Түшегеҙгә килеп ятҡандар.
Улар бары серем итә кеүек,
Ҡорал тотҡан көйө ҡулдары.
...Тауҙар тынған. Әйтерһең дә, улар,
Әсә кеүек, уятырға ҡыймай улдарын.
Урал тынған, тыйнаҡ әсә һымаҡ,
Улдарының һаҡлай йоҡоһон.
Үҙе һаман, алыҫтарға ҡарап,
Әллә кемде көтә юҡһынып.
Йылдар йыйырсыҡлап киткән башын
Күтәргән ул ҡайһылай юғары.
Офоҡ аша үрелеп, эҙләй кеүек
Ситтә ятып ҡалған улдарын.

«Кеше өс нәмәгә табынырға тейеш: иленең уҙғанына, уның бөгөнгөһө һәм тыуыр киләсәгенә. Әүәлге менән киләсәк — кешелектең ике ҡанаты. Мин баш өҫтөмдәге ҡояшҡа ғына ҡыҙынып йәшәмәйем. Шәфәҡ моңһоулығы ла, һыҙылып ҡына атҡан таңдың яҡтылығы ла миңә берҙәй ҡәҙерле».

Ғ.Сәләм исемендәге республика комсомол премияһына лайыҡ булған «Автобиография» китабын асып ебәреүсе был бәләкәй генә инеш Р.Бикбаевтың ижад программаһы һымаҡ ҡабул ителә.

«Әүәлге менән киләсәк — кешелектең ике ҡанаты». Тимәк, үҙ яҙмышын халыҡ яҙмышы менән бергә бәйләгән шағирҙың автобиографияһы ла үҙе тыуған йылдан ғына башланмай. «Арнау» шиғырында шағир «Тыуған йылың ҡайһы?» тигән һорауға, «халҡым тыуған йыл» тип яуап бирә икән, ул халҡының бөтә тарихи уҙғанын, яралары, шатлыҡтары һәм ҡайғылары менән бергә, үҙ йөрәге аша үткәреүенә ишара яһай:

Яҙмышынан уның уҙмышым юҡ.
Ярам — яралары.

Күҙе менән күреп айырам ерҙең
Ағын, ҡараларын.
Аллалары минең аллам булыр,
Иманы — иманым.
Илдең йәнендәге йәншишмәгә
Туйманым инанып.

«Илдең йәнендәге йәншишмә» — ул халыҡтың быуаттар буйы сыныға һәм нығына килгән рухи көсө. Сөнки «замандар, аллалар алышынған», «батша тәхетенән ләхетенә шылған», ә халыҡ алышынмаған, үҙенең ғорур «башын тик яҡтыға борған».

Кешелектең бер ҡанаты булған уҙған тормошто, халыҡтың тарихи үткәнен поэтиклаштырыуға ынтылыш Р.Бикбаевҡа әүәлге менән ябай мауығыу ғына түгел.

Шағир «Уҡ» шиғырында:

Боронғонан алыҫлашҡан һайын,
Яҡыныраҡ миңә уҙғандар, —

ти икән, ул иң элек тарихи уҙғандың прогрессив тенденцияларын, уның һабаҡтарын күҙ уңында тота. Шуға ла үҙенең ижадында тарихи үткәндең ҡалҡыу һәм көсөргәнешле мәлдәренә — халыҡтың азатлыҡ өсөн көрәш яуҙарына мөрәжәғәт итә. «Иҫке тыуҙы туҙҙырып, ҡыҙыл әләм» биргән, «тәсбих тартҡан ҡулдарға ҡағыҙ, ҡәләм» тотторған, халыҡтың «телгеләнгән» телен терелткән, «һүлегән, бөлгән» илен ир иткән Октябрь революцияһына дан йырлай («Революция»).

В.И.Лениндың тыуыуына йөҙ йыл тулыу хөрмәтенә шағир 1970 йылда «Йырлы ҡаялар» тигән поэмаһын ижад итте. Әҫәр идея-тематикаһы менән, бер яҡтан, Б.Бикбайҙың «Ер», Р.Ниғмәтиҙең «Осҡондан ялҡын», М.Ғәлиҙең «Ағиҙел йыры» поэмаларының традицияларын үҫтерһә, икенсе яҡтан, Р.Бикбаев был поэмаһы менән, үҙ ижад программаһына ярашлы рәүештә, туған халҡының азатлыҡ өсөн көрәшеү тарихын поэтик кәүҙәләндереү юлында яңы аҙым яһаны.

Шағир «Йырлы ҡаялар» поэмаһында хоҡуҡһыҙ башҡорт халҡының бәхетле, азат тормош тураһында быуаттар буйы һүнмәй туплана килгән өмөт-хыялдары, XX быуат башында бөтә Рәсәй хеҙмәтсәндәренең һәм иҙелгән халыҡтарының юлбашсыһы В.И.Ленин идеяларында реаль кәүҙәләнеш алып, Бөйөк Октябрь револю-

цияһы һөҙөмтәһендә генә тормошҡа ашыуын күрһәтеү кеүек оло идея-эстетик маҡсат ҡуйған.

Әлбиттә, поэма жанры өсөн был шаҡтай ауыр һәм ҡатмарлы проблема. Өҫтәүенә, В.И.Лениндың Башҡортостандағы революцион эшмәкәрлеге, Совет Башҡортостанын ойоштороуға туранан-тура етәкселеге хаҡында байтаҡ әҫәрҙәр ижад ителгән. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, «Йырлы ҡаялар» йөкмәткеһе менән дә, формаһы яғынан да башҡорт ленинианаһында үҙе бер күренеш булды.

Шағир поэманың үҙәгенә ике төп образды: пролетариат юлбашсыһы В.И.Ленин һәм Башҡортостан образын ҡуйған.

Әҫәр Башҡортостан, берҙән, сал тарихҡа шаһит булған, ата-бабаларҙың аманаттарын күкрәгенә уйып яҙған «йырлы ҡаялар» образында символик кәүҙәләнеш алһа, икенсенән, В.И.Ленин һәм уның көрәштәштәренең Өфөләге революцион эшмәкәрлегенә бәйле рәүештә конкрет сағылыш тапҡан. Поэмала Башҡортостан образы, тәбиғи, башҡорт халҡының тарихи яҙмышы мәсьәләһе менән тығыҙ бәйләнештә кәүҙәләндерелә. Әҫәрҙәге «йырлы ҡаялар», уның ғорурлығы халыҡ рухына, уның бөйөклөгөнә образлы бер ишара булып та тора.

Поэма «батырҙарҙың уй-моңон», ата-балаларҙың изге «аманатын» «күкрәгенә уйып», «яурынына сая ҡош ҡундырып» баҫып торған сал Урал тауҙары — «йырлы ҡаялар» үҙ тирәһенә тағы ҡор йыйнауын һүрәтләү менән асылып китә һәм шул уҡ «йырлы ҡаялар»ҙың йәшәреүенә, унда бөгөн бөйөк Ленин идеяларының тантана итеүенә ҡыуаныс йыры булып тамамлана. Был композицион алым шағирға башҡорт халҡының бәхетле бөгөнгөһөн һәм яҡты киләсәк яҙмышын хәл итеүҙә даһи Лениндың тарихи ролен ҡалҡыу итеп һынландырыуға мөмкинлек биргән. Поэмала В.И.Ленин образын кәүҙәләндереүгә ҙур урын бирелгән. Әҫәрҙең төп уңышы ла даһи образының Башҡортостан ысынбарлығына тығыҙ бәйләнештә кәүҙәләнеүендә. Поэмала В.И.Лениндың тәү тапҡыр башҡорт еренә аяҡ баҫыуы уҡ халыҡтың азатлыҡ өсөн көрәш тарихында оло бер һынылыш икәнлеге һыҙыҡ өҫтөнә алына. «Урал! Сөйәлләнгән яурыныңа ҡунғаны юҡ бындай бөркөттөң!» — ти шағир. Сөнки йәш Ульянов Башҡортостанға азатлыҡ өсөн кө-

рәштең яңы дәүере, ҡайнар һулышы булып аяҡ баҫа. Ул Өфө, Златоуст, Һатҡы эшселәренең йөрәгендә революция осҡондарын баҙлатып ебәрә:

Башҡорт тупрағында ырыу артты —
Революция тоҡомо.
Талмуттарҙы улар сүпкә атты,
Батша манифесын утҡа яҡты,
Маркс манифесын уҡыны.

Поэмала В.И.Ленин халыҡ тормошона тарихи-материалистик ҡараштан тороп бағыусы көслө аҡыл эйәһе булып кәүҙәләнә. Билдәле булыуынса, В.И.Ленин Себерҙә һөргөндә саҡта тамамлаған «Россияла капитализмдың үҫеше» тигән тәүге хеҙмәттәренең береһендә үк «колониаль политиканың ҡот осҡос бер өлөшө»нә әүерелгән Башҡортостан тураһында әсенеп телгә ала. Шағир ошо документаль фактты поэмаға оҫта итеп индереп ебәргән. Был алым әҫәрҙең тарихи нигеҙен нығыта төшкән һәм даһи образын һынландырыуға йәнле бер һыҙат өҫтәлгән:

Белде Ильич: Башҡортостан тәнен
Буй көйәләр һырып алғанын,
Буй көйәләр үткән урындарҙа
Буш өйәҙҙәр тороп ҡалғанын.
Африканан мең ҡат ҡанһыҙыраҡ
Таланғанын башҡорт иленең...

Әммә ере таланған, үҙе бөлгән булһа ла, халыҡтың рухы һүнмәгән. Халыҡ үҙ бәхете өсөн яңынан көрәшкә күтәреләсәгенә Владимир Ильич тәрән ышана. Был ышаныс унда, «баҫҡан саҡта осҡон осороп», һал өҫтөндә бейеп килгән башҡортто осратҡас, тағы ла нығына:

Владимир уға ҡул болғаны,
Тик һоҡланыу — уйсан күҙҙәрҙә:
«Юҡ, был халыҡ — һыртын һуҡһалар ҙа,
Телен ҡырҡһалар ҙа — теҙләнмәҫ!
Ҡолағына Ҡөрьән тығыу менән,
Итеп булмай илде һаңғырау.
Ерен-һыуын алһалар ҙа тартып,
Моңон һаҡлап ҡалған йәше-ҡарты.
Йәшәй башҡорт һаман,
Килер заман:
Ошо ҡурай моңо

Революцияның
Симфонияһында яңғырар».

Шул уҡ ваҡытта Р.Бикбаев В.И.Лениндың бөйөк эшен XX быуат башы кеүек айырым хронологик рамкалар менән генә сикләп ҡуймай. Даһи эшенең үлемһеҙлеге, тарихи роле тураһында һүҙ йөрөткәндә, бөгөнгө заман юғарылығынан тороп баһалай, В.Маяковский, Р.Ниғмәти традицияларын уңышлы дауам иттереп, лирик алға китеүҙәргә һәм лирик сигенеүҙәргә, философик һәм публицистик уйланыуҙарға ҙур урын бирә.

Дөйөм алғанда, «Йырлы ҡаялар» поэмаһы менән Р.Бикбаев үҙ ижад офоҡтарын ғына түгел, башҡорт ленинианаһының офоҡтарын да киңәйтте. Быға тиклем Ленин тураһындағы башҡорт поэмаларында башҡорт халҡы Морат («Осҡондан ялҡын»), Сәлмән («Ағиҙел йыры») кеүек айырым шәхестәрҙең образдарында дөйөмләштереп бирелһә, «Йырлы ҡаялар»ҙа шағир юлбашсы һәм халыҡ проблемаһын асыуҙа яңы поэтик алымдар ҡулланды. Башҡортостанды һәм башҡорт халҡын кәүҙәләндереүсе «йырлы ҡаялар» кеүек шартлы-романтик образдар хаҡында ҡабатлап әйтеп тормаҫтан, автор В.И.Лениндың Башҡортостанға һәм башҡорт халҡына булған аталарса хәстәрлеген юлбашсы һәм халыҡ планында киңерәк яҡтыртыуға ынтылыш яһаны.

* * *

«Йырлы ҡаялар» менән бер үк йыл эсендә шағир «Күк әрем» поэмаһын ижад итте. Драматик киҫерештәр менән тулы булған был романтик йүнәлештәге лирик поэмала шағир, ата нигеҙе, тыуған төйәк образдарына тығыҙ бәйләнештә, халыҡ хәтерендә уңалмаҫ яра булып һыҙлап торған һуғыш һәләкәттәрен тағы бер ҡабат үҙ күңеле аша уҙғарҙы.

«Күк әрем» — лирик поэма. Унда шағирҙың шәхси тормошона, биографияһына ҡағылышлы тетрәткес тормош картиналары, әрнеткес күңел хәтирәләре тәрән сағылыш алған. «Күк әрем», — тип яҙа М.Минһажетдинов әҫәрҙең жанр үҙенсәлектәре хаҡында, — тәү ҡарамаҡҡа лирик геройҙың эске монолог-хикәйәһенә ҡоролған кеүек булһа ла, ул эске йөкмәткеһе йәһәтенән Ер-әсә менән лирик геройҙың диалогынан ғибәрәт, ша-

ғир йөрәге, уның ярһыу таланты тыуған ерҙе һәм уның конкрет күренештәрен терелтә, уларҙы үҙ хистәренең шаһиты һәм баһалаусыһы яһай, улар менән әңгәмә — диалог алып бара. Был диалог көсөргәнешле драматизм менән һуғарылған; мәле менән ул трагик бөтөнлөк, урыны менән ялҡынлы публицистика кимәлендә, ҡайһы саҡта ул нескә лирикаға мансыла, ә айырым урындарҙа эпик киңлек буйлап йәйелә»[238].

Һүҙ юҡ, һәләтле тәнҡитсе бында лирик поэманың үҙенсәлектәрен бик оҫта тотоп алған. «Тыуған йортһоҙ тыуған ауылы»на ҡайтып төшкән лирик геройҙың күңел кисерештәре «өйөм таштар» ғына ятып ҡалған атай нигеҙенә бәйләнешле хәтирәләрҙә киҫкен драматик көсөргәнеш менән асылһа, даланың мәңгелек бер төҫөн, уның әрһеҙ һәм түҙем кешеләрен кәүҙәләндергән күк әрем образына бәйләнешле урындарҙа донъяға тарихи ҡараш, философик тәрәнлек өҫтөнлөк ала. Поэма шулай уҡ шағир күңелен ярып үткән эске конфликтҡа ҡоролған.

...Шаулап торған йорттан уба ҡалған,
Бер өйөм таш ята убала,
Һыуыттығыҙ тыуған нигеҙҙе, тип
Әйтер ине микән атайым.
Ауыр тупраҡҡайын еңеләйтергә
Атайыма нимә әйтәйем?
Тыуған өйөм! Нигеҙеңде ҡоротоп,
Мин ебәрҙем әллә ҡотоңдо?
Ялҡын өҫтәй алмай һүндерҙемме
Быуат буйы янған утыңды?

Ер-һыуын ерһеп, тыуған ауылын һағынып ҡайтҡан лирик геройҙы, урынында таштар ғына ятып ҡалған тыуған йорт нигеҙенә килеп баҫҡас, ошондай борсоулы уйҙар, әрнеткес һорауҙар солғап ала. Сөнки борон-борондан халыҡта изге бер йола бар — ул ата-баба нигеҙенә тоғролоҡ. Улан ата нигеҙен ҡоротмаҫҡа, тормошто шул нигеҙҙә дауам итергә тейеш. Ата нигеҙен ташлау ирлек түгел — ғәрлек! Лирик герой быны яҡшы аңлай һәм тәрән кисерә. Был кисерештәр тәрәнәйгән

[238] Марат Минһажетдинов. Поэмаларға бер ҡараш. // Әҙәбиәт, фольклор һәм әҙәби мираҫ. 1-се китап. — Өфө, 1975, 60-сы бит.

һайын, поэмала атай нигеҙе һәм тыуған төйәк образы ҡалҡыуыраҡ булып күтәрелә бара. Лирик геройҙы яҙмыш ауылдашы Ғабдулла Амантай, яҡташы Дауыт Юлтыйҙарҙың изге юлына юлыҡтырған. Ул ошо юлда атай-олатайҙарының йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәҫлек юғарылыҡҡа күтәрелгән. Ләкин уға аҡһаҡалдар аҡылы һеңгән, олаталарының ҡулынан нурланған тыуған тупраҡ изге һәм ғәзиз булып ҡала:

Ҡайттым тағы —  
Йөрәктәге ҡандың  
Элеккеләй ярһып ташҡаны.  
Атай ҡулын тойҙом,  
Һыйпағанда  
Нигеҙемдең эҫе таштарын.  
Тыуған нигеҙем!  
Ҡалмағанда түҙем,  
Ошо таштарыңа тотонам.  
Көндәремде ялҡын итеп яғам,  
Һүрелмәһен тиеп уҡынаң.

Шул рәүешле, берҙән, лирик герой, ҡайҙа ғына булмаһын, тыуған төйәгенә тоғро ҡалып, уны үҙенең күңел түрендә йөрөтһә, икенсенән, тыуған нигеҙ тыуған ер, тыуған ил менән тығыҙ бәйле булыуын һәм һәр кешелә Тыуған ил тыуған нигеҙенән башланыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала:

Ошо тамырҙарҙан күтәрелеп,  
Ил түбәһе күккә тиңәйҙе.  
Һыуытманыҡ тыуған нигеҙҙәрҙе  
Тик ул нигеҙ ниндәй тәрәнәйҙе,  
Тик ул нигеҙ ниндәй киңәйҙе!

Әйтергә кәрәк, поэмала үҙәккә ҡуйылған «ата нигеҙе» мәсьәләһе быының менән генә хәл ителһә, әҫәрҙең идея-эстетик йөкмәткеһе ярлылана төшөр ине. Сөнки ата нигеҙен ташлап китһәк тә, ата юлынан айырылманыҡ, шул уҡ нигеҙҙең уттарынан осҡон алып, яңы нигеҙҙә тормош уты тоҡандырҙыҡ тигән фекер шағирҙың шәхси яҙмышына ни тиклем яҡын булмаһын, «тыуған төйәк» мәсьәләһе шул көйө тороп ҡалһа, әҫәр уҡыусы күңелендә йылы тәьҫир ҡалдыра алмаҫ ине.

Шуға ла шағир ауылдаштарының, боронғонан ҡалған зәң-йолаларға тоғро булып, атайҙар нигеҙенә яңы йорттар һалыуын күтәренке поэтик рух менән һүрәт-

ләй. Тимәк, ҡәһәрле һуғыш, ҡайһы берәүҙәрҙең нигеҙен туҙҙырып, балаларын ситкә таратһа ла, тормоштоң төп нигеҙен ҡаҡшата алмаған: тамырҙары быуаттарға тоташҡан был нигеҙҙә тынғыһыҙ тормош ҡайнай...

Поэманың күк әрем образына бәйләнешле икенсе һыҙығы беренсеһе менән айырылғыһыҙ булып үрелгән. Әҫәрҙең:

Артылыуым булды һуңғы һыртҡа —
Алда Соран ята күгәреп.
Ялан сәскәләре араһынан
Мин һындырып алдым күк әрем, —

тип башланып китеүе үк дала төҫө булған әрһеҙ күк әрем образына һалынған йөкмәткенең тәрәнлегенә бер ишара булараҡ күңелгә һеңеп ҡала. Шуға ла поэмала күк әрем дала биҙәге, уның төҫө һәм еҫе булып ҡына түгел, бәлки шул далала көтөү көткән, иген иккән халыҡтың тоҙло тирен, ер-һыуы өсөн ҡойған хәләл ҡанын һәм асы күҙ йәшен, йәғни шул дала яҙмышын үҙ ҡулында тотҡан түҙемле һәм ғорур халыҡтың үҙен кәүҙәләндереүсе тәрән йөкмәткеле образға әйләнә.

Шулай итеп, «Күк әрем» поэмаһында шағир, үҙ ижад концепцияһына тоғро ҡалып, тыуған ер һәм халыҡ яҙмышы проблемаларын хәҙерге заман юғарылығынан тороп, ауылдың киләсәге һәм туған тәбиғәттең яҙмышы кеүек көнүҙәк мәсьәләләр менән тығыҙ бәйләнештә күтәрҙе. Әҫәр үҙенең художество теүәллеге, образдарының тормошсанлығы һәм халыҡсанлығы менән етмешенсе йылдар башында ижад ителгән лирик поэмалар араһында иң уңышлыларҙың береһе булараҡ әҙәбиәтебеҙҙә лайыҡлы урын алды.

Тарихи фекер йөрөтөү Р.Бикбаевҡа иң элек бөгөнгө ҡаҙаныштарға тарих һабаҡтарынан сығып баһа биреү һәм киләсәкте кисәге менән бөгөнгөнөң эҙмә-эҙлекле дауамы итеп күҙаллау өсөн кәрәк. Шағирҙың бөтә булмышына хас был принцип уның ижад концепцияһын билдәләй. Шул уҡ ваҡытта бер шағир ҙа, хатта тарихи романдар ижад итеүсе яҙыусы ла тарихсыны алмаштыра алмай. Сөнки шағир ижадында халыҡ тарихы хронологик эҙмә-эҙлелектә кәүҙәләнеш алыуы мөмкин түгел. Бөгөн ул Ватан һуғышы темаһына мөрәжәғәт итә икән, иртәгә уны Крәҫтиәндәр һуғышы герой-

ҙарының батырлыҡтары йәки Октябрь революцияһының ҡаһармандары ҡыҙыҡһындырыуы ихтимал. Әммә ул теге йәки был тарихи теманы ҡасан ғына күтәреп сыҡмаһын, тарихилыҡ уға тормошто: уҙған-бөгөнгө-киләсәк төшөнсәләренән торған өс ваҡыт үлсәмендә ҡапма-ҡаршылыҡтар бәрелешендәге һәм берҙәмлегендәге тынғыһыҙ хәрәкәт, береһе икенсеһенән яралған йәки икенсеһе беренсеһенән кире ҡаҡҡан эҙмә-эҙлекле тере процесс итеп һынландырыу өсөн кәрәк.

Тарихи үткәнгә иғтибарҙың көслө булыуы осраҡлы бер романтик мауығыу ғына булып ҡалмай, ентекле ижад принцибына әүерелеүе шағирҙың «Кеше йылы» тигән поэтик циклына тупланған «Инеш», «Мөсәл ярым ғүмер», «Ер һәм диңгеҙ», «Кеше йылы» һ.б. әҫәрҙәрендә айырым-асыҡ сағылыш алғанлығы күренә:

Быуаттарҙың хазинаһын
Иңгә күтәрәм.
Артҡа тартмай мине тарих,
Өҫкә күтәрә,
Алға этәрә.
Артҡа һөйрәмәй ул тарих,
Гел алға ҡыуа.
Уҙғандарҙан ғәйрәт алып,
Туҙғандарҙан ғибрәт алып,
Заман бил быуа.

Тимәк, замандың оло йөгөн үҙ елкәһендә йөкмәп барған кеше тарихҡа ҡул һелтәп ҡарай алмай, киләсәккә уның юлы тарих һабаҡтары аша уҙа. Шуға ла «Кеше йылы» циклына «Инеш» шиғырында дөйөмләштерелгән Кеше образын кәүҙәләндереүсе лирик герой мәңгелектән мәңгелеккә елеүсе Ваҡыт ағымының уртаһында тороп:

Ҡулдарымда бына минең
Мәл һәм мәңгелек,
Көндәрҙең туҡтаған сағы,
Сапҡаны елеп,
Дауылда йыртылған тирмә,
Мәрмәр манара,
Яңы бөрөләнгән шатлыҡ,
Яланғас яра —
Уйылһын ине барыһы
Ошо йырыма.
Ялтлаһын ине тик бер мәл
Кеше йылынан, —

ти. Кеше ғүмере мәңгелек кеүек осһоҙ-ҡырыйһыҙ ваҡыт төшөнсәһенең бер мәле генә. Ләкин кешенең аҡыл һәм зиһене ошо бер мәл эсендә, мәңгелектең уҙған ваҡытында, киләсәген дә байҡарға һәләтле. Яуҙа «йыртылған тирмәләр, кеше һөйәктәренә ултырған «мәрмәр манара»лар, «яланғас яра»ларҙың уңалып шатлыҡ бөрөһө булып шытып сығыуҙары — бөтәһе лә тарихи уҙғандың тере кәүҙәләнеше булып килеп баҫа, кеше «ғүмер» тигән бер мәл эсендә шул уҙғандың һабаҡтарына таянып киләсәккә юл яра, мәңгелекте дауам иттерә.

1772—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы ваҡиғаларын кәүҙәләндереүгә арналған «Мөсәл ярым ғүмер» поэмаһы менән «Ер һәм диңгеҙ» тигән баллада тематик яҡтан ғына түгел, идея-эстетик йөкмәткеһе менән дә бер-береһенә яҡын торалар.

«Мөсәл ярым ғүмер» — Салауат яуында ҡатнашҡан ун һигеҙ йәшлек билдәһеҙ шағир тураһында тарихи-романтик поэма. Шағирҙың крәҫтиәндәр һуғышын килтереп тыуҙырған сәбәптәргә һәм уның эҙемтәләренә үҙ баһаһында тарихи дөрөҫлөк һәм тарихи ҡараш ярылып ята. Шулай уҡ Р.Бикбаев, билдәһеҙ шағир образын реалләштереү өсөн, Крәҫтиәндәр һуғышында ҡатнашыусы башҡорттар араһынан батша властары тарафынан тентеп алынған һәм хәҙерге көнгәсә һаҡланып ҡалған оригиналь поэтик әҫәрҙәрҙән өҙөктәрҙе оҫта файҙаланып, шунан этәреш ала. Былар поэманың тарихи нигеҙен нығыта. Билдәһеҙ шағир образын тыуҙырғанда автор иһә ун һигеҙ йәшлек көрәшсе һәм шағир рухына ярашлы романтик буяуҙар менән эш итә.

Поэмала ваҡиғалар кино таҫмаһындағыса бик йәһәт алмашына. Ҡулына ҡәләм алып һөйгәненә хат яҙып ултырған егет, яуға күтәрелгәс, ҡәләмен ҡылысҡа алмаштыра. Шиғри һүҙе лә мөхәббәт лирикаһынан яуға өндәүсе сәсәндәр оранына әйләнә. Ҡанлы бәрелештәр. Яраланыу. Тотҡонлоҡҡа дусар булыу. Тентеүҙәр, язалауҙар, һөргөндәр... Артабан әҫәрҙә ҡул-аяҡтары бығауланған, теште‌ре ҡырылған һәм теле ҡырҡылған, ләкин уй-хыялдары азат көйө ҡалған билдәһеҙ шағирҙың монологы бирелә. Көрәшсе шағирҙың был монологы халыҡтың хаҡ эше ҡасан булһа ла бер еңеп сығасағына ҙур ышаныс, тарихи оптимизм рухы менән һуғарыла.

Поэманың финалында шағир исемдәре тарихҡа билдәле булмаған, әммә азатлыҡ өсөн көрәш яуҙарында Салауаттай аҫыл ирҙәр менән шул уҡ тупраҡҡа ал ҡандарын тамыҙған билдәһеҙ ир-егеттәргә быуаттар аша өндәшә:

Эй, билдәһеҙ егет!
Тау-даламдың
Күкрәгенә һеңгән йыры һин.
Мин сал таштар аша устарыңдың,
Иренеңдең тоям йылыһын.
................................................
Эй, билдәһеҙ егет!
Төндө телеп,
Һин һаман да алға елерҙәй.
Мөсәл ярым ғүмерең
Уралымда
Умырзая булып елберләй.

Билдәһеҙ азатлыҡ ҡорбандарына арналған был мәҙхиә бөгөнгө тормоштоң еңеүсән рухын раҫлаусы «әсәләрҙең итәктәре тулы — бала, Уралтауҙың итәктәре тулы — батыр» тигән көслө аккорд менән тамамлана.

Салауатҡа арналған «Ер һәм Диңгеҙ» балладаһында тарихи хәҡиҡәтте раҫлаусы был мотивтар тағы ла көсәйә төшә. Һәм:

Улар һеҙҙе ат ҡойроғона таҡты —
Һеҙ уларҙы тарих ҡойроғона таҡтығыҙ.
Улар, ҡәһәр булып, ергә шиңде,
Ә һеҙ, шәһәр булып, ерҙән ҡалҡтығыҙ, —

тигән юлдар уҙғандарға сал тарихтың үҙ баһаһы, быуаттар аша килеп еткән йөрәк тауышы булып яңғырай.

Тәнҡитсе Әхиәр Хәкимов Р.Бикбаевтың «Автобиография» тигән шиғырҙар китабына яҙған рецензияһында, шағирҙың поэзияһында «тарихи тойғо»ноң көслө булыуын һәм был сифат «уның ижадына милли психологик ерлек» биреүен билдәләү менән бергә, «шағир тарихтың диалектикаһына ҡарағанда романтикаһынан нығыраҡ рухлана. Шул арҡала еренең, халҡының ҡатмарлы юлын социаль-синфи күҙлектән тикшереү етеңкерәмәй әле»[239] тигән шелтә лә белдергәйне. Һүҙ юҡ,

[239] Әхиәр Хәкимов. Артылаһы арҡалар алдында. — «Ағиҙел», 1971, № 1, 90-сы бит.

«Автобиография» китабындағы халыҡтың уҙған тормошон сағылдырған ҡайһы бер шиғырҙар шундайыраҡ тойғо ҡалдыра. Ләкин шағир «халҡым» тип әйтә икән, быға синыфтарға бүленмәгән бер бөтөн этник төшөнсә итеп кенә ҡарау дөрөҫ булмаҫ ине. Сөнки ауыҙ-тел ижадында уҡ «халыҡ» һүҙенә социаль мәғәнә һалынған. Шулай уҡ шағир колониаль һәм милли иҙеүгә ҡаршы күтәрелгән азатлыҡ яуҙары тураһында һүҙ йөрөтә икән, социаль ҡаршылыҡтарҙы күҙ уңынан ысҡындыра, тип әйтеп булмай. Шул уҡ ваҡытта уҙған тормошто һүрәтләүгә арналған поэма кеүек ҙурыраҡ күләмле шиғри әҫәрҙәрҙә синфи ҡаршылыҡтарҙы күрһәтмәй урап үтеү мөмкин түгел. Быға Р.Бикбаевтың «Автобиография» китабынан алдараҡ донъя күргән «Каруанһарай» поэмаһы уҡ асыҡ миҫал булып тора: поэманың төп конфликты ҡапма-ҡаршы синыфтар һәм социаль көстәр бәрелешенән ғибәрәт.

Шулай булыуына ҡарамаҫтан, шағирға Ә.Хәкимовтың тәнҡит һүҙе ыңғай тәьҫир иткәнлеге күренә. Һуңғы йылдарҙа ижад ителгән «Йырлы ҡаялар», «Мөсәл ярым ғүмер» поэмаларында һәм халыҡтың үткән тормошон поэтик кәүҙәләндереүгә арналған шиғырҙарында синфи-социаль мотивтар айырата көслө.

Ә.Хәкимов юғарыла күрһәтелгән мәҡәләһендә шулай уҡ Р.Бикбаев ижадына интернациональ тематиканың етешмәүен билдәләп уҙғайны.

Әлбиттә, шағир ижадында тематик киңлек үҙенәнүҙе генә барлыҡҡа килмәй. Поэтик һүҙҙең бәҫен белгән шағир үҙе күреп белмәгән ерҙәр, үҙ йөрәге аша кисермәгән тойғолар тураһында яҙа алмай. Р.Бикбаев һуңғы йылдарҙа Сыуашстан, Татарстан, Украина һәм Ҡаҙағстан кеүек туғандаш республикаларҙа уҙғарылған әҙәбиәт аҙналыҡтарында булды. Башҡортостан делегацияһы составындағы Болгарияла уҙғарылған Бөтә донъя йәштәре фестивалендә ҡатнашты. Юлдар һәм осрашыуҙар шағир күңелендә эҙһеҙ ҡалманы. «Тарас тауында», «Кукушкино» һәм Болгария тураһындағы шиғырҙар шәлкеме ошо юл сәфәрҙәренең һәм осрашыуҙарҙың тәьҫирендә ижад ителде. Ләкин интернациональ дуҫлыҡ һәм туғанлыҡ рухы менән һуғарылған бындай шиғырҙарҙа ла Р.Бикбаев үҙе булып ҡала белә: экзотика йәки халыҡты характерлаусы тышҡы биҙәктәр менән артыҡ мауыҡмай, нигеҙҙә, туғандаш халыҡтар-

ҙың бөгөнгөһөнә тарихи ҡараш ташлай, Балкан тауҙарында ла туған Уралы менән уртаҡ һыҙаттарҙы күрергә тырыша. Был йәһәттән Болгар шәлкемендәге «Күк сәскәләр» шиғыры характерлы. Болгар халҡына азатлыҡ алып килеүсе совет һалдаттарының ҡәберендә, Уралда үҫкән күк сәскәләрҙең иштәрен күреп, шағирҙың күңеле тертләп китә. Шағир, ошо күк сәскәләр образына бәйләп, болгар һәм совет халҡының яуҙарҙа һыналған оло дуҫлыҡ тамырҙарына ишара итә. Шиғыр болгар халҡына бәхетле тормош, иленә именлек теләгән тәрән мәғәнәле юлдар менән ослана:

Болгар ере! Китәм инде һинән,
Күк сәскәләр кеүек йыр алып,
Йорт-ҡураңа афәт-сүп инмәһен,
Яттар аяғына уралып.
Биттәреңә бары йылы еле
Ҡағылып торһон алыҫ яҡтарҙың.
Тояҡтары һиңә сәскә һипһен
Ҡунаҡ тейәп килгән аттарҙың.

Һуңғы йылдарҙа Р.Бикбаев шулай уҡ «Сонгми», «Таң ҡыҙы», «Цунами» кеүек бөгөнгө политик лириканың үрнәге булырҙай ҡыйыу һәм көслө публицистик рухлы шиғырҙар ижад итте. Был шиғырҙарында шағир «азат донъя», «шәхес азатлығы» тип боғаҙ йыртыусы, асылда азатлыҡ өсөн көрәшеүсе Анджела Дэвис кеүек «ҡара тәнле ғорур аҡҡош»тарҙы төрмәләргә ырғытыусы, сабый балаларҙы утҡа атыусы капитал донъяһын, ундағы реакцион көстәрҙе фаш итә. Бөгөнгө «Азат Америка»ның ике йөҙлөлөгөн ҡабатланмаҫ поэтик оҫталыҡ менән асып бирә:

«Азат Америка»
Азатлыҡҡа,
Халыҡ намыҫына
Төкөрә генә:
Бер аяғы менән
айға баҫҡан,
Бер аяғы менән —
сабый күкрәгенә.

*«Сонгми»*

Шулай итеп, тыуған ер, халыҡ, ил яҙмышы һәм донъя именлеге кеүек көнүҙәк мәсьәләләр үҙәккә ҡу-

йылып, тәрән поэтик сағылыш алыуы, илдең һәм халҡыбыҙҙың уҙғаны менән бөгөнгөһө тығыҙ бәйләнештә тарихи диалектик күҙлектән тороп яҡтыртылыуы Рауил Бикбаев ижадының граждანлыҡ йөҙөн билдәләүсе төп үҙенсәлек икәнлеген күреп үттек.

Ләкин Р.Бикбаев ижады тематик яҡтан да, күтәргән идея-эстетик проблемалары йәһәтенән дә юғарыла ҡарап үтелгәндәр менән генә сикләнмәй. Ваҡыт һәм заман, донъяның ҡатмарлы күренештәре, кешенең тормоштағы урыны, йәшәүҙең мәғәнәһе, замандаштың ил, халыҡ алдындағы яуаплылығы кеүек мөһим мәсьәләләрҙе күтәргән философик йүнәлештәге тормошсан лирикаһынан, бөгөнгө көндә көнүҙәк проблема булып торған кеше һәм тәбиғәт араһындағы гармонияны һаҡлауға саҡырыусы шиғырҙарынан, лирик геройҙың ҡатмарлы һәм бай күңел донъяһын асыусы ихлас әҫәрҙәренән һәм мөхәббәт лирикаһынан тыш Р.Бикбаев поэзияһын тулыһынса күҙ алдына баҫтырыу мөмкин түгел.

Р.Бикбаев, үҙ һүҙҙәре менән әйткәндә, «бер көнөнә быуаттарҙы һыйҙырып» йәшәргә ынтылыусы актив тәбиғәтле шағир. Шуға күрә уның поэзияһы кеше күңеленең иң нескә нюанстарын сағылдырған яғымлы лириканы ла, донъя масштабындағы оло проблемаларҙы күтәреүсе публицистиканы ла үҙ эсенә ала.

Р.Бикбаев лирикаһының ышандырыу көсө — шағирҙың тормоштағы ҡаршылыҡтарға, ауырлыҡтарға күҙ йоммай етди ҡарай, баһалай белеү оҫталығында.

Тормош бормалы-бормалы,
Үтеүе уйын түгел.
Юлдар борғоланғанда ла,
Борғаланмайыҡ, күңел.
Упҡындарҙа күпер булып
Ҡалһа ине йылдарым,
Тура күңелдәр турайта
Ерҙең урау юлдарын, —

ти, шағир исемһеҙ бер шиғырында. Бында шағирҙың тормошҡа ҡарашы, йәшәү һәм ижад принцибы кәүҙәләнә.

Р.Бикбаевтың философик лирикаһында Ваҡыт һәм кеше ғүмере тураһында уйланыуҙар шаҡтай ҙур урын алып тора. Кеше ғүмеренең сикләнгән булыуы менән аяуһыҙ Ваҡыт араһындағы ҡаршылыҡ, был ҡаршылыҡ-

ты еңергә ынтылыу — «Урал батыр» эпосынан алып бөгөнгөсә дауам иткән һәм артабан да дауам итәсәк мәңгелек проблема ул. Әҙәбиәт тарихынан билдәле булыуынса, донъяның фанилығы, ҡайһы бер шағирҙарҙы төшөнкөлөккә этәреп, тормошҡа ҡул һелтәп ҡарауға килтерһә, ҡайһы берҙәрен яҡты донъяның «ләззәт вә тәмдәренән» мөмкин тиклем мулыраҡ ауыҙ итеп ҡалыу принцибын алға һөрөүгә килтергән.

Р.Бикбаевтың актив лирик геройы иһә Ғаләм өсөн «күҙ асып, күҙ йомоуҙан да ҡыҫҡа» ғүмере эсендә «упҡындарға күпер булып» ятырлыҡ ҙур эштәр эшләп ҡалыу теләге менән яна. Ваҡыт аяуһыҙ — ул был тормоштоң ауыр йөгөн күтәреп килгәндең дә, йөкһөҙ көйө юртаҡлап барғандың да бер саҡ «муйынын бөгөп» үтә. Шуға күрә кеше, Ваҡыт ауырлығына ҡаршы тороп, кешелек донъяһының йөгөн еңеләйтергә теләһә, тик ауырҙы күтәрергә тейеш. «Ауырлыҡты еңеләйткең килһә, тик ауырҙы күтәр», — ти шағир.

Аяуһыҙ Ваҡыт шағирға тынғы бирмәй, уны һәр ваҡыт албырғатып, ашыҡтырып тора:

Мин ашығам — донъя ҡабалана,
Эй еләбеҙ
Тигеҙ юлдан, үрҙән, ураүҙан.
Алдарыма сығып ҡаршы ала
Бөтмәҫ хафа, таныш һораүҙар:
Сыҡ ышыҡтан!
Һинең ығышлыҡтан
Ҡайырылмаһын кеше ғүмере.
Тиҙерәк бул!
Ғәмһеҙ үткән минут
Аҫыл төндәреңде емерер.

«Мин ашығам — донъя ҡабалана» тигән шиғырҙан алынған был өҙөктән күренеүенсә, Ваҡыт шағир өсөн абстракт философик категория түгел. Шағир Ваҡыт тураһында һүҙ йөрөтә икән — иң элек кеше ғүмеренең мәғәнәһе, кешенең киләсәк быуындар өсөн, кешелек донъяһы өсөн ҡылған һәм ҡыласаҡ эше, йәғни кеше тормошоноң гуманистик асылы тураһында уйлана.

Шағирҙың туҡтауһыҙ үҙгәреп, яңырып һәм болоҡһоп торған күңел диалектикаһын сағылдырыусы «Тыптын ғына тәүге ҡарҙар яуа...», «Ағиҙелдә сайҡалышып аға...», «Уҙғандарым менән бер яңғыҙым...», «Тирәгемә ҡоштар ҡайтып ҡуна...», «Яҙғы таңда кирелеп бил яҙ-

ғанда...» кеүек лирик уйланыуҙары Ваҡыт һәм ғүмер тураһындағы философик шиғырҙарына яҡын торалар. Асылда был шиғырҙарында ла шағир, тәбиғәттең яҙғы, көҙгө һ.б. мәлдәренә бәйләп, үҙ ғүмеренең уҙғаны һәм киләсәге тураһында образлы фекер йөрөтә. Тәүге ҡарҙар менән аралашып осҡан һуңғы япраҡтар уның күңеленә моңһоулыҡ һалып китһәләр, яҙғы бөрөләрҙең шартлау тауыштарын ишетеп, шағир күңеле илһам һәм дәрт менән мөлдөрәмә тула.

Көнөм әле сасҡау, әле томра;
Айым йә аҡ ҡалҡан, йә ураҡ.
Донъя миңә көн дә яңыса балҡый,
Уның менән мин дә яңырам.

*«Тирәгемә ҡоштар ҡайтып ҡуна…»*

Шағир күңеленең берсә күтәрелеп, берсә моңһоуланып, туҡтауһыҙ төрләнеүе һәм хәрәкәттә булыуы һис тә тотанаҡһыҙлыҡтан түгел, бәлки тормоштағы хәл-ваҡиғаларға, үҙгәрештәргә кешенең актив мөнәсәбәтенән, саялығынан килә.

Ул әле — яралы болан,
Әле — урғып аҡҡан йыр,
Әле — сыуаҡ күк көмбәҙе,
Әле — тетрәп ятҡан ер,
Ул бер мәлде — иң йәш бала,
Бер мәлде — иң ҡарт бабай.
Бер ҡараһаң, аңламаҫлыҡ,
Бер ҡараһаң — бик ябай, —

ти, шағир үҙенең күңеле тураһында, үҙе лә ғәжәпкә ҡалып. Әгәр ҙә шағир күңеле шулай һиҙгер һәм хәрәкәтсән булмаһа, ул кешенең шатлығын да үҙ йөрәге аша ҡайнатып сығара алмаҫ ине, ижадтан ғына түгел, тормоштан да һыуыныр ине...

Тормошто шул рәүешле ҡапма-ҡаршылыҡтар көрәше һәм берҙәмлеге итеп ҡарау Р.Бикбаевтың поэзияһында шаҡтай ҙур урын алған мөхәббәт лирикаһына ла хас. «Белмәйҙәр, һөйөклөң менән көйөклө көн дә татлы», — ти ул «Күҙемде бәйләне һөйөү...» тигән бер шиғырында, сөнки мөхәббәттең ғазаптарын кисермәгән кеше ләззәттең дә ҡәҙерен белмәҫ ине. Әйтергә кәрәк, Р.Бикбаевтың поэзияһы тәрән йөкмәткеле булған кеүек, уның формаһы ла бик үҙенсәлекле. Ул поэзияға

билдәле бер шағирҙың йәки халыҡ ижадының стихиялы йоғонтоһона бирелеп түгел, ә дөйөм поэтик культура традицияларына нигеҙләнеп аяҡ баҫты. Шуға күрә уның поэзияһында теге йәки был традицияның сағылышын айырып ҡына күрһәтеп тә булмай. Ул үҙ ижадында көнбайыш һәм рус поэзияһынан килгән ирекле шиғыр системаһы менән көнсығыштың классикаһына һәм халыҡ ижадына нигеҙләнгән башҡорт шиғыры традицияларын уңышлы ҡуша белә. Шулай уҡ образдар системаһында ла бер ниндәй ҙә сикләнеү күренмәй: уның поэзияһына халыҡ ижадынан килгән традицион образдар ҙа, хәҙерге ФТР заманы тыуҙырған яңы образдар ҙа берҙәй хас. Быларҙың бөтәһен дә Р.Бикбаев конкрет әҫәренең идея-эстетик йөкмәткеһенә буйһондора. Шағир поэтик образдар менән иркен һәм оҫта эш итә, образдарҙы ҡатмарлы һәм көтөлмәгән ассоциативлыҡҡа ҡора белә. Уның шиғырҙарында образлы фекер аналитик фекер менән үрелеп килә. Ғөмүмән, Р.Бикбаев поэзияһында бөгөнгө заманға һәм уҙғанға анализ көслө. Дөйөм алғанда, Рауил Бикбаев үҙ тиҫтерҙәре араһында ижадының күләме менән генә түгел, художество кимәле менән дә алғы һыҙыҡта атлай. Ул туҡтауһыҙ эҙләнеүсән, үҫештәге шағир.

«Бөгөнгө кеше — уҙған менән киләсәкте тоташтырыусы күпер... Тарих быуындарҙың ҡаршылығы формаһында түгел, уларҙың рухи эстафетаһы формаһында үҫә», — ти Р.Бикбаев «Хәҙерге башҡорт поэзияһында философик лирика»[240] тигән хеҙмәтендә.

Шағир заманыбыҙға ауаздаш яңғырашлы, киң масштаблы поэзияһы менән быуаттар буйы тапшырыла килгән ошо рухи эстафетаны уңышлы дауам иттерә.

## Яҡты таңдар йырсыһы

Тау башҡорттары араһында быуындан быуынға күсә килгән бер ғәҙәт бар: һәр ауылдың, һәр төбәктең йыйылып күңел аса торған ятраҡан бер тауы була. Тәбиғәттең гүзәл ҡомартҡыларына ғәжәп бай булған Ишем-

---

[240] «Башҡорт әҙәбиәтендә жанрҙар проблемаһы». — Өфө, 1973, 261-се бит.

бай — Маҡар яҡтарында ниндәй генә тауҙар юҡ һуң! Әммә был тирәнең халҡы, элек-электән, йәмле Ағиҙел йылғаһының уң яғында, япа-яңғыҙ кәбән һымаҡ, күкрәк киреп ултырған мөһабәт Торатауҙы үҙ иткән. Элек-электән бында ҙур-ҙур ырыу-ара йыйындар, бәйгеләр, һабантуйҙары уҙғарылған. Яҙғы байрамдарҙа Торатауға ҡырҡар-иллешәр саҡрымдағы ауылдарҙың халҡы йыйылған. Торатау ололарҙың кәңәш ҡорор, сәсәндәрҙең һүҙ көрәштерер, йәштәрҙең көс һынашыр, егеттәр — ҡыҙ, ҡыҙҙар егет күҙләр урыны булған. Бындай байрамдарҙа Торатау буйҙары уйын-көлкө, йыр-моң менән шаулап торор булған...

Алсаҡ күңелле йырсы-шағир Яҡуп Ҡолмойға бына ошо данлыҡлы Торатау ҡуйынына һыйынып ҡына ултырған Ҡанаҡай ауылында тыуып үҫеү бәхете тейгән.

Ҡанаҡайҙың бер осо Торатау итәгендә булһа, икенсе осо таллы-муйыллы туғайҙар араһынан ағып ятҡан саф һыулы Һәләүек ярына барып терәлә. Яҙҙарын Һәләүек туғайҙарында талдан талға ҡунып һандуғастар һайрай, ҡарт тирәктәрендә дәртләнеп кәкүк саҡыра. Өс йәше тулыр-тулмаҫтан әсәһенән етем ҡалып, ҡаты ҡуллы ата ҡарамағында үҫергә тура килгән шағирҙың гонаһһыҙ күҙ йәштәре лә, тәүге хәләл тире лә ошо ергә тама, ошо ерҙә уның тәүге мөхәббәт тойғоһо уяна, тәүге йыры ҡанатлана:

Усҡа алһам Һәләүегем һыуын,
Айҙың үҙен күрәм усымда:
Әллә айҙы тотоп ҡыуандым мин,
Әллә тулҡындарға уралдым мин,
Тәүге йырым тыуҙы ошонда...

Буласаҡ шағирҙа әҙәбиәткә мөхәббәт бик иртә уяна. Әхмәр, Ҡанаҡай тирәләрендә оҫта һунарсы булыуы менән дан тотҡан Хәйрулла ҡарт кинйә улы Яҡупты нисек кенә үҙе һымаҡ һунарсы итергә тырышып ҡарамаһын, яңы дәүер һулышын һиҙгер тойоусы малай уҡырға, белем алырға ынтыла. Кесе йәштән бирелеп Туҡай, Ғафури, Юлтый, Таҡташ шиғырҙарын уҡый, ауылындағы бәйетсе Алтын ҡарттың әйткән бәйеттәрен йотлоғоп тыңлай, үҙе лә шуның кеүек бәйетсе булырға самалай.

Күрше Урман-Бишҡаҙаҡ ауылындағы крәҫтиән йәштәре мәктәбен тамамлап, Стәрлетамаҡ педагогия техни-

кумында уҡып йөрөгән йылдарында Я.Ҡолмой поэзия менән ныҡлап шөғөлләнә башлай. Был осорҙа техникумда әҙәбиәт уҡытыусыһы булып эшләгән Ҡадир Даян буласаҡ шағирҙың асылырға торған бөрө кеүек шиғриәт тулы күңеленә ҡанат ҡуйыусы һәм ижадына йүнәлеш биреүсе тәүге шағир була. Буласаҡ шағирҙың тәүге «Һау булығыҙ, ҡоштар» тигән шиғыры 1936 йылда «Йәш төҙөүсе» газетаһында баҫылып сыға. 1937 йылда Өфөгә килеп, «Ленинсы» газетаһында эшләп йөрөгән йылдарында, йәш шағирҙың ижады активлаша төшә. Ул Р.Ниғмәти, Ғ.Сәләм, Б.Бикбай кеүек күренекле шағирҙар менән аралаша, уларҙың ижад йоғонтоһон кисерә. Уның шиғырҙары был йылдарҙа «Пионер», «Октябрь» журналдарында һәм өлкә газеталары биттәрендә әленән-әле баҫылып тора. 1940 йылда шағирҙың «Аҙым» тигән тәүге китабы донъя күрә.

Йәшлек романтикаһы, совет патриотизмы тойғоһо менән һуғарылған был тәүге йыйынтыҡта уҡ Яҡуп Ҡолмойҙоң ижад индивидуаллеге төҫмөрләнә башлай. Шағир үҙенең поэзияһында тормош матурлығын, совет кешеләренең күңел күркәмлеген, ихласлығын йырларға ынтыла. Китаптың лирик геройы тыуған ергә, Ватанға тоғролоғо, мөхәббәттә ихласлығы менән күңелде биләй.

Шул уҡ ваҡытта әлегә йәш шағирҙың иллюстративлыҡтан һәм риториканан да арынып бөтә алмағанлығы күҙгә ташлана. Шағирҙа әлегә тормошҡа диалектик ҡараштың да самалыраҡ икәнлеге күренә.

«Был саҡтарҙа, — тип яҙа ул үҙенең шул осорҙағы ижады хаҡында, — әлбиттә, дан һәм маҡтау шиғырҙары өҫтөнлөк итте тиһәм, хата булмаҫ тип уйлайым. Әле беренсе шиғырҙары матбуғатта сыҡҡан минең кеүек йәш авторҙарға, хатта тәжрибәле шағирҙарға ла, уның еле аҙ ҡағылманы. Ләкин, шуныһы һәйбәт, ул шиғырҙар поэтик эшләнеше яғынан йомшаҡ булһалар ҙа, керһеҙ, саф йөрәкле егеттәрҙең һәм ҡыҙҙарҙың әҫәрҙәре ине. Бына ошо сафлыҡ инде Бөйөк Ватан һуғышында беҙҙең быуындың еңелмәҫ көсөн раҫланы»[241].

Бөйөк Ватан һуғышы башланған көндәрҙә шағир Ҡыҙыл Армия сафында хеҙмәт иткән була. Һәм шағир

---

[241] Яҡуп Ҡолмой. Һайланма әҫәрҙәр. — Өфө, 1968, 9—10-сы биттәр.

һуғыштың тәүге көндәрендә үк толпар атына атланып ил яҙмышы хәл ителер оло яу майҙанына барып инә:

Вузда уҡырға ла өлгөрмәнек,
Сығып етмәгәйне мыйыҡ та,
Ояһынан осҡан бөркөттәрҙәй,
Ҡанат кирҙек утлы һуғышта.
Беҙгә иң беренсе дәрес булды
Көслө канонада тауышы:
Атайҙарҙан эстафета булып,
Беҙгә күсте Ватан яҙмышы, —

тип хәтерләй шағир был хаҡта үҙенең бер шиғырында.

Ҡыйыу кавалерист Яҡуп Ҡолмой үҙенең толпары менән Көнбайыш фронтында, баш ҡалабыҙ Мәскәүҙе һаҡлау өсөн барған аяуһыҙ алыштарҙа ҡатнаша. Ҡаты бәрелештәрҙең береһендә ауыр яралана.

Яҡуп Ҡолмойҙоң һуғыш яландарында «эйәр соҥҡаһына һалып» яҙылған шиғырҙары дошманға асы нәфрәт тойғоһо менән һуғарыла, шағирҙың һуғыш осорондағы поэзияһының үҙенсәлеге шунда: бында лирик герой менән шағир шәхесе бер бөтөн. Ә уның лирик геройы иһә, ҡанатлы толпарға атланып, илен һәм халҡын ҡурсалаған эпос ҡаһармандарын хәтерләтә. Ул был осорҙағы поэзияһында йыш ҡына халыҡ ижадындағы традицион образдарға мөрәжәғәт итә, уның лирик геройы үҙен дошманға үс һәм нәфрәт менән яныусы туған Уралының тоғро бер вәкиле итеп хис итә:

Мин һуғышта һинең көсөң итеп,
Көмөш ҡылысыңды күтәрәм.
Атың менән еләм, дошман тетрәй,
Асыуың итеп ҡылыс һелтәһәм, —

ти шағир («Һине һөйәм, Урал», 1943) шиғырында.

Шағир Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ижад ителгән «Хаттар һөйләй» (1943), «Яуҙа сыныҡҡан йәшлек» (1944) поэмаларында һәм ихлас күңелдән, көслө патриотик рух менән яҙылған шиғырҙарында совет халҡының ҡаҡшамаҫ дуҫлығын, уның еңелмәҫ көсөн раҫланы:

Бер тетрәне,
бер күкрәне
торған ер,

Бер ярылды,
        бер ҡаҙылды
                талған ер,
Ләкин талмай,
        йәшәү яулап,
                ғүмергә,
Кеше торҙо
        Сталинград ерендә, —

тип яҙҙы коммунист шағир 1943 йылда.

«Хаттар һөйләй» (1943), «Яуҙарҙа сыныҡҡан йәшлек» (1944) поэмаларының Ватан һуғышы осоро башҡорт поэзияһында үҙ урыны бар. Был әҫәрҙәр, беренсенән, ут эсендә йөрөгән һалдат шағир тарафынан дәһшәтле яу яландарының көслө тәьҫирендә яҙылыуҙары менән ҡиммәтле булһа, икенсенән, уларҙа совет халҡының яуҙарҙа сыныҡҡан дуҫлығы һәм патриотизм тойғоһо еңеүгә әйҙәүсе көс булараҡ кәүҙәләнеш ала.

«Хаттар һөйләй» поэмаһы эпостоляр формала ижад ителгән. Бер ауылда тыуып үҫеп, яуға киткән Сәйфүш менән Талиптың хаттарында оло яу ҡырында йөрөгән совет һалдаттарының эскерһеҙ тойғолары, тыуып үҫкән ауылдарына, Тыуған илгә ҡайнар һөйөү хистәре поэтик кәүҙәләнеш ала. Талип Сәйфүшкә яҙған һәр хатын юҡҡа ғына Һәләүек буйҙарында үткән балалыҡ һәм йәшлек йылдарын хәтерләүҙән башламай, Һәләүек буйҙары, ҡартлас Урал уға яу ҡырҙарында һәр ваҡыт ғәйрәт һәм һүнмәҫ рух бирә:

Үҙ төйәген һөйгән башҡорт халҡы,
Уралым, тип янған тыумыштан.
Салауаттай батыр улдар биреп,
Бер саҡ баш тартмаған һуғыштан.
Бына бөгөн илгә ҡайғы килгәс,
Ерҙе көйҙөргәндә ут, туптар,
Уралтау сафлығын бысратмаҫҡа,
Тағы ат эйәрләй башҡорттар.

Бына ошо мәғрур Уралға, ата-олатайҙарҙың намыҫына тап төшөрмәҫкә саҡырыу поэманың төп мотивтарының береһе булып яңғырай. Шағир Тыуған ил төшөнсәһе һәр кешенең үҙе тыуып үҫкән ауылынан, һыулаған һыуынан, төйәк иткән тауҙарынан башланыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала. Я.Ҡолмойҙоң, ҡулына ҡылыс тотоп, толпар атта дошмандарға ҡаршы яуға атлыҡҡан яу батыры күп яҡтары менән башҡорт халҡының эпос батыр-

ҙарына яҡын тора. Тап шуға ла уның яуҙа ауып ҡалған батырын толпар аты «Шинель елкәһенән тешләп» торғоҙа, батыр егет «ҡылыс болғап», бер үҙе «йөҙ үлемгә» ҡаршы бара.

«Яуҙарҙа сыныҡҡан йәшлек» поэмаһында Я.Ҡолмой — бер танк экипажы дүрт егет — дүртеһе дүрт милләт вәкилдәре: рус, башҡорт, украин, белорус егеттәренең яуҙарҙа сыныҡҡан дуҫлығына һәм батырлығына дан йырлай. Поэмала төп иғтибар совет һалдаттарының ҡаҡшамаҫ рухын, батырлыҡҡа илткән дуҫлыҡ һәм патриотизм тойғоһоноң тәрәнлеген кәүҙәләндереүгә йүнәлтелгән. Шулай ҙа был поэма, тәүгеһенә ҡарағанда, художестволы эшләнеше яғынан байтаҡҡа ҡайтыш. Был — әҫәрҙең фабулалы сюжетҡа ҡоролоуында ла, геройҙарҙың яу ҡырындағы ҡаһарманлығын һүрәтләгәндә тапалған эпитеттар, яланғас лозунгыларҙы йыш ҡулланыуында ла ярайһы ныҡ һиҙелә.

Бөйөк Ватан һуғышынан һуң Я.Ҡолмой Мәскәүҙә ВЛКСМ Үҙәк Комитеты эргәһендәге ике йыллыҡ Үҙәк комсомол мәктәбендә уҡый. Уны уңышлы тамамлап ҡайтҡас, республика газеталарында эшләүен дауам итә. Газета биттәрендә көндәлек темаларға очерктар, мәҡәләләр менән сығыш яһай.

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа Я.Ҡолмой ижадының яңы дәүере башлана. Был осорҙа уның ижады тематик яҡтан төрләнә һәм киңәйә бара. Ләкин шағир тәүҙәрәк дәүерҙең философик тәрәнлегенә ҡарағанда, патетик юғарылығына иғтибарҙы нығыраҡ бирә. Шул уҡ ваҡытта ул поэтик оҫталыҡҡа өлгәшеү юлында туҡтауһыҙ эҙләнә. Ниһайәт, илленсе йылдарҙың икенсе яртыһында уның поэтик талантының өр-яңы мөмкинлектәре асыла.

Был осор уның, бер яҡлап, граждандлыҡ лирикаһы яңыса яңғыраш алһа, икенсе яҡлап, тәбиғәт һәм интим лирикаһы хис һәм тойғоларға байый.

Шағирҙың граждандлыҡ лирикаһында тыуған илгә мөхәббәт, бөйөк Ленин, Коммунистар партияһы эшенә, революцион традицияларға тоғролоҡ үҙәк мотивҡа әүерелә. Шағир «Ленин» (1938), «Ленин һәйкәле янында» (1956), «Ленин йәшәй йөрәктә» (1961), «Мәңге тере» (1970), «Ленин броневикта» (1977) кеүек шиғырҙарында һәм йырҙарында юлбашсы идеяларының ҡаҡшамаҫ көсөнә һәм үлемһеҙлегенә дан йырлай, башҡорт

совет поэзияһында бөйөк Лениндың монументаль образын кәүҙәләндереү кеүек ҙур һәм яуаплы эшкә үҙ өлөшөн индерә.

Я.Ҡолмойҙоң граждандлыҡ лирикаһында асыҡ маҡсаты бар: ул ҡанлы көрәш менән яуланған бөгөнгө бәхетле тормошто данлау, халҡыбыҙға азатлыҡ алып килгән Октябрҙе, Коммунистар партияһын ололоҡлау. Быға «Нева ярында» тигән шиғырҙар циклы, «Тиңләр инем», «Октябрь», «Туған партия», «Коммунистик хеҙмәт», «Ҡарт коммунистҡа» кеүек әҫәрҙәре асыҡ миҫал була ала:

Ленин тотҡан көрәш байрағында
Ергә йәшәү килгән яңынан.
Кеше илһам алған балҡып атҡан
Октябрҙең яҡты таңынан.
Бына шул таң хәҙер һәр иртәлә
Бәхет булып ялмай йөҙҙәрҙе...
Ҡоштарға ул серле моң өләшә,
Ысыҡ булып үбә гөлдәрҙе.
Ер йәшәрә кеүек, шул алһыу таң
Көмөш таҫмаларын ҡойғанда,
Ә һин мең мәртәбә ҡыуанаһың,
Хеҙмәтеңдең йәмен тойғанда.

*«Октябрь таңы»*

Фронтовик шағирҙың һуңғы дәүерҙәге ижадында шулай уҡ тыныслыҡ өсөн көрәш һәм Бөйөк Ватан һуғышы темалары шаҡтай ҙур урын алып тора. Был темаларҙы шағир, нигеҙҙә, бер-береһенә тығыҙ бәйләнештә күтәрә.

Шағир тыныс тормош күркен аяҙ, яҡты таң образдары, ғөмүмән, яҡты образдар менән һынландыра. Һуңғы йылдарҙа баҫылып сыҡҡан «Күңел күрке» (1971), «Яҡты таңдар» (1975) һәм 1978 йылда донъя күргән «Күңелем ҡылдары» йыйынтыҡтарына тупланған күпселек әҫәрҙәр, айырата етмешенсе йылдарҙа ижад ителгәндәре, замандаштарыбыҙҙың күңел матурлығына, тормош күркенә оло ҡыуаныс тойғоһо менән һуғарылғандар.

Әммә был күҙгә бәрелеп торған сағыу яҡтылыҡ шағирҙың тормошто тик яҡты яҡтан ғына күреүе тигән һүҙ түгел, шағир ошо аяҙ таңдарҙа уҙғандың аяныслы яҡтарын, һуғыш фажиғәләрен, уның халыҡ күңеленә уйып һалып киткән тәрән яраларын да иҫенән сығар-

май. А.Матросовтың үлмәç батырлығы хаҡындағы «Беҙҙең ҡала егете» поэмаһында, «Башҡорт гвардеецтары», «Беҙ Мәскәүҙе һаҡланыҡ» тигән йырҙарында һәм Ленинградты һаҡлаусыларға арналған «Туғыҙ йөҙ» тигән шиғырында Ватан һуғышындағы героиканы данлаһа, «Ҡайын да мин», «Толпар», «Ҡултыҡ таяҡлы ағай», «Ҡул сабыу» кеүек шиғырҙарында һуғыштың фажиғәләрен һәм драматик эҙемтәләрен тәрән кисерә.

Шуныһы һәйбәт, шағир был әçәрҙәрендә һуғыштың фажиғәләренә баçым яһау менән генә сикләнмәй, иң элек бөгөнгө тантаналы тормош уҙған героик яу йылдарының ҡаҙанышы икәнлеген раçлай.

Яҡуп Ҡолмойҙоң поэзияһы хис һәм тойғоларға бай, ғәжәп кешелекле поэзия. Шағирҙың кеселеклеге һәм кешелеклеге мөхәббәт лирикаһында ла, атаһына, әсәһенә, балаларына һәм шулай уҡ М.Ғафури, Ғ.Сәләм, Р.Ниғмәти, Б.Бикбай, С.Кулибай, Х.Кәрим кеүек өлкән быуын шағирҙарына һәм башҡа культура эшмәкәрҙәренә арналған шиғырҙарында ла асыҡ күренә, сөнки кешелеклек ул абстракт төшөнсә түгел, ул иң элек кешенең үҙ яҡындарына ихтирамынан һәм эскерһеҙ мөнәсәбәтенән башлана.

Я.Ҡолмойҙоң һуңғы йылдарҙағы ижадында тормоштоң мәғәнәһе, йәшәү йәме, кеше һәм тәбиғәт, мөхәббәт тураһындағы сонеттары айырым урынды алып тора. Шағир, беҙҙең башҡорт поэзияһында һирәк күренеш булған һәм фекер менән тойғоларҙың синтезын талап иткән был ыҡсым поэтик жанрҙы йәнләндереп, утыҙынсы йылдарҙа М.Хәй башлаған традицияларҙы уңышлы дауам итә.

Шағирҙың күңел йомартлығы балалар өсөн яҙылған шиғырҙарында, әкиәт һәм поэмаларында ла үҙенсәлекле сағылыш ала. Уның «Ғүмер сәскәләре» (1964), «Бәләкәй Батыр» (1970) тигән китаптарын кескәйҙәр яратып уҡыйҙар. Я.Ҡолмойҙоң балалар өсөн яҙылған әçәрҙәре теленең халыҡсанлығы, мауыҡтырғыс сюжетҡа ҡоролоуҙары менән айырылып тора. Әйтергә кәрәк, шағирҙың был өлкәлә әлегә асылаСаҡ ҙур мөмкинлектәре бар.

Я.Ҡолмой оҙаҡ йылдар Башҡортостан радиоһында әҙәби тапшырыуҙар бүлегенең редакторы булып эшләне. Был осорҙа ул, оçта журналист булараҡ, бик күп әҙәби һәм музыкаль тапшырыуҙар ойоштороҙо, компо-

зиторҙар, артистар ижадын пропагандалау эшенә ҙур көс һалды. Уның танылған яҙыусылар, композиторҙар, артистар тураһындағы радиоочерктарын радио тыңлаусылар яратып ҡабул итте.

Билдәле булыуынса, әҙәбиәткә бөтә ғүмерен бағышлаған яҙыусы йәки шағирҙың таланты айырым бер өлкәлә йәки айырым бер жанрҙа тулыраҡ асыла. Яҡуп Ҡолмой илленсе йылдарҙан алып йыр жанрында актив эшләй башланы. Һәм һуңғы йылдарҙағы башҡорт совет йыр сәнғәтенең үҫешен Яҡуп Ҡолмой текстарына яҙылған йырҙарһыҙ күҙ алдына килтереп булмай. Уның йырҙары тематик яҡтан бик бай һәм поэтик эшләнештәре йәһәтенән үҙенсәлекле, халыҡсан булыуҙары менән айырылып торалар. Шағир башҡорт поэзияһында йыр жанрын, халыҡ ижады стихияһынан, халыҡ йырҙарын стилизациялауҙан арындырып, уны профессиональ кимәлгә күтәреү эшенә ҙур өлөш индерҙе. Әлбиттә, быны шағир халыҡ йырҙары традицияларын бөтөнләй инҡар итә икән тип аңларға ярамай: Я.Ҡолмой асылда үҙ йырҙарында халыҡтың йыр традициялары менән профессиональ поэзияны синтезлау юғарылығына күтәрелде. Хәҙерге көнгә йырсы-шағирҙың алтмышлап йыры музыкаға һалынған.

Уның әҫәрҙәренә яҙылған «Былбылым», «Көтөүсе йыры», «Һалдат йыры», «Томбойоҡ бүләк итмә», «Әгәр көтһәң» кеүек йырҙары күптән халыҡлашып китһәләр, «Ленин йәшәй йөрәктә», «Туған партия», «Урал егете», «Коммунистик хеҙмәт», «Нефтселәр маршы», «Йырым һиңә, баш ҡалам» кеүек патриотик йырҙары һәм канталары заманыбыҙҙың ҡеүәтле рухы булып яңғырай.

Хәҙерге көндә бер концерт та, хатта бер мәжлес тә «Былбылым» йыры башҡарылмай үтмәһә, уның «Һалдат йыры» бөгөн һаҡта торған һалдаттар менән бергә хеҙмәт тә итә. Ә «Көтөүсе йыры»на килгәндә, был йыры менән Я.Ҡолмой синфи йәмғиәт шарттарында кәмһетелеп киленгән көтөүсе һөнәренең бөгөнгө көндә яңы социаль йөкмәткегә эйә булыуын ҙур поэтик оҫталыҡ менән асып бирҙе, көтөүсе һөнәренең хәҙер иң популяр, маҡтаулы һөнәргә әүерелеүенә туранан-тура булышлыҡ итте. Был факт иһә шағирҙың бөгөнгө тормошҡа тәрән үтеп инеүе, үҙ ижады менән уға ыңғай йоғонто яһауы хаҡында һөйләй.

«Йыр кешенең күңелен йәшәртә, тормошон йәмләй», тиҙәр. Йырсы-шағир Яҡуп Ҡолмойға алтмыш йәш тулып уҙып китһә лә, уның күңеле һаман да алсаҡ, йәш һәм шаян булыуы ла, бәлки, ошоға бәйлелер. Был уның ижадында үҙәк темаларҙың береһе булып торған мөхәббәт лирикаһының һуңғы йылдарҙа тағы ла йәнләнә, тәрәнәйә төшөүендә айырата асыҡ күренә. Шуныһы ғәжәп, Я.Ҡолмой мөхәббәт лирикаһында һәр ваҡыт йәш булып ҡала белә, уның лирик геройы һөйгәне алдында үҙен йәш елкенсәк кеүек хис итә. Эйе, олоғайғас та күңелең менән йәш булып ҡалыу һирәк кешеләрҙең өлөшөнә төшкән бәхет.

Шуға ла ул донъяға яҡты йөҙө менән баға, кешеләргә яғымлы, йылы һүҙе менән өндәшә.

Тағы бер йәй үтте. Августың мин
Һуңғы көнө менән хушлашам,
Ерҙең өҫтөн һарғылт төҫкә манған
Көҙгө ҡояш менән дуҫлашам.
Артта ҡалды йылы биргән йәйем,
Йәшлегемдәй кире ҡайтмаҫ ул.
Ләкин көҙгө һалҡын йөрәгемдең
Ҡайнарлығын баҫа алмаҫ ул.
Алтын япраҡтарҙы келәм иткән
Дим буйынан һүҙһеҙ атлап үтәм,
Күңелемдә уйҙар эркелә.
Хеҙмәтемдең ынйыларын көтәм,
Ғүмер ебен әкренләп һүтәм,
Ниндәй яҡты икән был донъя! —

ти шағир һуңғы йылдарҙа яҙған бер сонетында. Был бер ни тиклем моңһоулыҡ, августың һуңғы көнөндәй яҡты һағыш менән һуғарылған шиғырҙа автор үҙ ғүмеренең көҙө етеүгә ишара иткәнлеге лә күренеп тора. Ләкин ул бойоҡмай, «Ниндәй яҡты икән был донъя!» — ти. Һәм был һүҙҙәрҙең раҫлығына ышанмай булдыра алмайһың, сөнки уны яуҙар үткән, сәсенә сал төшкән, тормоштоң асыһын-сөсөһөн татып белгән шағир әйтә.

## Тылсымлы ҡәләм көсө

Ошо көндәрҙә етмеш йәшен тултырған өлкән быуын яҙыусыларыбыҙҙың береһе Нәжиб Иҙелбай ижады тураһында яҙырға тип ҡулыма ҡәләм алғас, минең хә-

теремә бер рус тәнҡитсеһенең: «Хәҙерге рус поэзияһында уҡыусы күңеленә бер шиғырың түгел, һис юғында, бер шиғыр юлың менән инеп ҡалаһың икән — һин шағир!» — тигән һүҙҙәре килде. Эйе, әҙәбиәткә ҡырҡ йылдан ашыу хеҙмәт итеп килгән Нәжиб Иҙелбай ҙа минең күңелемдә генә түгел, бәлки бөтә башҡорт халҡының күңелендә, иң элек «Ел, ерәнем» тигән ҡанатлы йырҙың авторы булараҡ, тәрән урын алған йырсы-шағир, тиһәм, һис тә арттырыу булмаҫ. Талантлы композитор Заһир Исмәғилевте ижадҡа илһамландырған был йыр, Бөйөк Ватан һуғышының башынан аҙағына тиклем ҡаһарман яугир булып, утлы-һөрөмлө, ҡарлы-туҙанлы яу юлдарын үткән шағирҙың шәхси кисерештәрен генә түгел, 1812 йылғы Ватан һуғышы дәүеренең йырҙары «Любезники-любизар», «Байыҡ» кеүек, халҡыбыҙҙың типик кисерештәрен, илебеҙ тормошондағы героик бер дәүерҙең ҡабатланмаҫ моң-аһәңен, ҡаҡшамаҫ рухи ҡеүәтен сағылдыра.

1912 йылдың 12 мартында ҡаяларында бөркөт саңҡытҡан, буйҙарында ҡурай сыңлатҡан мәғрур Ирәндек тауының ҡуйынына һыйынып ултырған Иҙелбай ауылында (хәҙерге Баймаҡ районы) донъяға килгән Н.Иҙелбайҙың ижады, иң элек, халҡыбыҙҙың бай ауыҙтел шиғриәтенә нигеҙләнһә, икенсенән, буласаҡ шағир үҫмер йылдарында уҡ үҙ күңелендә морон төртә башлаған поэтик ҡошсоҡҡа ҡанат ҡуйырҙай изге кешеләргә тап була. Шуларҙың береһе күренекле драматург Мирхәйҙәр Фәйзи булһа, икенсеһе — «Ҡыҙыл Баймаҡ» газетаһы эргәһендә әҙәби түңәрәк ойоштороп, тәүге әҙәби һәм журналистик һабаҡтар биреүсе танылған драматург Сәғит Мифтахов була. Һуңғараҡ, Аҡ диңгеҙ — Балтик каналы төҙөлөшөндә төрки телле халыҡтар өсөн сығарылған «Канал ударниктары» газетаһы редакцияһында эшләп йөрөгәндә, Н.Иҙелбай Максим Горький менән осрашыу бәхетенә лә ирешә. Ул үҙенең автобиографияһында: «Иң ҡыйын, әммә маҡтаулы эш — әҙәби ижад юлына аяҡ баҫа алыуым өсөн мин бөтәһенән элек Алексей Максимович Горькийға бурыслы...» — тип хәтерләй.

Н.Иҙелбай әҙәби ижад менән 1937—1938 йылдарҙа, Башҡортостан китап нәшриәтендә редактор булып эшләгән сағында, ныҡлап шөғөлләнә башлай. Ул ижадының башланғыс осоронда уҡ, поэзия өлкәһендә эшләүе

менән бергә, художестволы тәржемә менән дә шөғөлләнә. Н.Островскийҙың «Дауылда тыуғандар» романын, Т.Шевченконың «Тополь» тигән поэмаһын тәржемә итеп баҫтырып сығара. Үҙенең тәүге шиғырҙар йыйынтығын туплап нәшриәткә тапшыра.

«Күк шинель» тигән тәүге китабы тик 1946 йылда ғына донъя күрә. Һигеҙ йыл буйы һалдат булып, шуның дүрт йылы Бөйөк Ватан һуғышына тура килеп, был дәһшәтле һуғыштың башынан аҙағына тиклем яу ҡырҙарында ил өсөн ҡан ҡойған шағирҙың китабына, нигеҙҙә, окоп шарттарында яҙылған шиғырҙары һәм йырҙары туплана.

Мәскәү, тинек, Тыуған илебеҙ,
Мәскәү, тинек, беҙҙең ғүмеребеҙ,
Мәскәү, тинек, беҙҙең еңеүебеҙ,
Мәскәү, тинек, яҡты көнөбөҙ! —

ти Мәскәү эргәһендәге хәл иткес алыштарҙа ҡатнашҡан шағир «Мәскәүҙе һаҡлағанда» (1945) тигән шиғырында. Ғөмүмән, илдең яҙмышы хәл ителгән дәһшәтле һуғыш яланында үҙен тыуған ерҙе һаҡларға аяҡ баҫҡан совет халҡының айырылмаҫ бер өлөшө итеп тойоу, еңеүгә тәрән ышаныс Н.Иҙелбайҙың фронтта яҙған шиғырҙарының дөйөм пафосын, халыҡсанлығын билдәләй. Шағирҙың ошо тәүге китабына яҙған рецензияһында уның поэзияһының халыҡсан рухлы булыуын Баязит Бикбай ҙа билдәләп үткән. «Уның шиғырҙары, — тип яҙған ул, — күбеһенсә еңел, уйынсалаулы халыҡ йырҙарына яҡын стилдә яҙылғандар. Был — һәйбәт сифат. Кольцов менән Никитинды шағир иткән төп сифаттарҙың ҙурҙары ана шулар. Әгәр Н.Иҙелбай, улар кеүек үк халыҡ рухына эйә булһа, тәжрибәһен арттыра барһа, һис шикһеҙ, уңышҡа ирешәсәк».

Артабан донъя күргән «Ел, ерәнем» (1958), «Йырым, һиңә булһын» (1970), «Еңеү иртәһе» (1981) тигән поэтик китаптарынан күренеүенсә, «Ел, ерәнем», «Тыуған ауылым», «Көтәм, һине», «Сирень сәскәләре» һәм башҡа тиҫтәләрсә йырҙары халыҡ йырына әүерелеп киткән икән — быйың өсөн Н.Иҙелбай, бер яҡтан, халыҡ ижадына бурыслы булһа, икенсе яҡтан, популяр рус совет йырҙарына бурыслы. Автор был уңышҡа бына ошо ике традицияны бергә ҡуша алыу һәм шул ике

башланғысты үҙ таланты аша уҙғарыу, заман кешеһенең рухи талаптарын һиҙгер тоя һәм сағылдыра алыу аша өлгәшә.

Н.Иҙелбай поэзияһы тематик яҡтан бай ғына. Тыуған илгә мөхәббәт, тыуған ер тойғоһоноң көслө булыуы, халыҡтар дуҫлығы темаһы, хеҙмәт кешеһенә ихтирам уның йырҙарында ла, шиғыр һәм поэмаларында ла яҡшы сағылыш таба. Биш йәшендә әсәһенән, унан атаһынан етем ҡалып, үҫмер йылдарҙан уҡ тормоштоң әсеһен-сөсөһөн татып үҫкән, фашист илбаҫарҙарына ҡаршы һуғыштарҙа ордендар менән бергә күкрәгендә ауыр яралар ҙа алып ҡайтҡан шағир, айырата һуңғы йылдарҙа, бөгөнгө бәхетле тормоштоң ҡәҙерен белеүсе, уны йәне-тәне менән һаҡларға тырышыусы өлкән быуын кешеһе булып сығыш яһай. Шиғриәте жанрҙар йәһәтенән шаҡтай бай булған кеүек, поэтик алымдарының төрлө булыуы менән дә айырылып тора. Шулай ҙа Н.Иҙелбайҙың поэтик һәләте ике нәмәлә — йыр жанрында һәм фәлсәфәүи йөкмәткеле ике, дүрт, һигеҙ юллыҡ парсаларында тулыраҡ сағылыш алған. Парсаларында тапҡыр һүҙле, сәсән телле аҡһаҡал булып сығыш яһай, ҙур тарихи ваҡиғалар, оло байрамдар оҫоронда халыҡҡа поэтик һүҙ менән мөрәжәғәт итеү, йә булмаһа, Тыуған илгә, Ленин партияһына рәхмәт тойғоһон тап халыҡса итеп еткерергә ынтылыу — Нәжиб Иҙелбай ижадының төп үҙенсәлектәренең береһе ул. Уның төрлө йылдарҙа яҙылған «Һин — именлек терәге», «Рәхмәт һүҙе», «Балҡы һаман, Башҡортостан», «Мин үҙемде күрҙем Ленин күҙҙәрендә» кеүек шиғырҙары тап бына ошо яҡтары менән айырылып тора.

Н.Иҙелбай — драматургия өлкәһендә лә үҙ ҡәләмен һынап ҡараған әҙип. Ул, нигеҙҙә, бер шаршаулы пьесалар авторы буларак билдәле. Уның «Бер шаршаулы пьесалар» (1961) тигән йыйынтығына ингән «Көтөлмәгән ҡунаҡ» комедияһын, «Ҡара эттең бәләһе — аҡ эткә» пьесаһын художество үҙешмәкәр драма түңәрәктәре йылы ҡабул итте. «Көтөлмәгән ҡунаҡ» әҫәре буйынса ҡуйылған телевизион спектакль дә тамашасылар тарафынан һәйбәт баһа алды.

Шулай ҙа Нәжиб Иҙелбайҙың әҙәби эшмәкәрлегенең иң ҙур һәм емешле өлөшө художестволы тәржемә өлкәһенә ҡайтып ҡала. Ул — сит ил, рус һәм башҡа туғандаш әҙәбиәттәрҙең классиктарының әҫәрҙәрен баш-

ҡорт теленә тәржемә итеп, халҡыбыҙҙың рухи культураһын күтәреү эшенә ҙур өлөш индергән оҫта тәржемәселәрҙең береһе. Нәжиб Иҙелбай тәржемәһендә башҡорт уҡыусылары Н.Гоголь, А.Островский, С.Т.Аксаков, В.Короленко, П.Ершов, Джек Лондон, А.Чехов, М.Горький, Н.Островский, П.Бажов, С.Бабаевский, М.Бубеннов, А.Гайдар, А.Арбузов, Н.Погодин, С.Михалков һәм башҡа күренекле әҙиптәрҙең хикәйәләре, повестары, романдары, драмалары һәм поэтик әҫәрҙәре менән таныштылар. Һуңғы йылдарҙа яҙыусы ҡаҙаҡ әҙәбиәтенең классигы Мөхтәр Әүәзовтың ҙур күләмле «Абай юлы» эпопеяһын тәржемә итеп, баҫтырып сығарыуға айырата күп көс һалды. Күренекле ҡырғыҙ яҙыусыһы Сыңғыҙ Айытматов әҫәрҙәрен дә башҡорт телендә оригиналдағыса яңғыратыусы Нәжиб Иҙелбай булды. Күренеүенсә, яҙыусының тәржемә өлкәһендәге ныҡышмалы эшмәкәрлеге үҙе бер тикшеренеүҙе талап итеүсе бер өлкә. Шуныһы мөһим: Н.Иҙелбайҙың тәржемәләре — юғары художестволы тәржемә. Тап бына шуға ла, художестволы тәржемә тураһында һүҙ сыҡҡан һайын, Н.Иҙелбай өлгө итеп ҡуйыла килә. «Был иптәштең тәржемәләре шул тиклем шыма, дөрөҫ, әҙәби булалар, уларҙың тәржемә икәне һис тә һиҙелмәй. Әйтерһең, үткер телле оригиналь әҫәр. Был тәржемә оҫтаһынан күп кеше өйрәнә ала. «Тәржемә ҡалай була?» — тип һорағанда: «Тәржемә Иҙелбайса була!» — тип әйтеп була», — ти Йософ Гәрәй. («Тел культураһы», «Совет Башҡортостаны», 1969, 19 сентябрь.) Тимәк, Н.Иҙелбай тәржемә өлкәһендә үҙе бер мәктәп тыуҙырыу дәрәжәһенә ирешкән яҙыусы тигән һүҙ был!

Һүҙҙе йомғаҡлар алдынан, яҙыусының автобиографик ҡулъяҙмаһында сағылыш алған мөһим бер деталгә иғтибар итке килә. Октябрь революцияһынан һуң, совет мәктәптәре асылып, ярлы балаларына ла аң-белем алырға мөмкинлектәр тыуғас, ғүмер буйы ҡул көсө менән йәшәп янтая башлаған атаһы Сафиулла ҡарт улы Нәжибте мәктәпкә оҙатҡанда: «Инде улымды уҡытасаҡмын. Мин уның ҡәләм көсө менән йәшәүен теләйем», — тигән. Әлбиттә, был һүҙҙәрҙе Сафиулла ҡарт улының яҙыусы булып китәсәгенә иҫәп тотоп әйткәндер, тип фараз итеп булмай. Әммә шуныһы мөһим: ул үҙенең улы заманға лайыҡлы аң-белемгә эйә булыуын теләгән. Әлбиттә, Н.Иҙелбайға, тылсымлы «ҡәләм көсө

менән» йәшәй башлағанға тиклем, балта тотоп урман киҫергә лә, көрәк тотоп ер соҡорға ла, станок артына баҫып тимер эшкәртергә лә, ҡулына ҡорал алып илде дошмандан һаҡларға ла тура килә. Тик тормоштоң әсеһен-сөсөһөн кисереп, эшсе, крәҫтиән һәм һалдат хеҙмәтен үҙ елкәһендә байтаҡ йылдар буйы татып ҡарау буласаҡ яҙыусыға һис тә зыян итмәй. Тап бына шуға ла уның әҫәрҙәрендә донъяның тотҡаһы булған хеҙмәт кешеһе үҙәк урында тора. Яҙыусы етмеш йәшен тултырғанда ла үҙ ҡәләменең көсөн дөйөм халыҡ мәнфәғәтенә хеҙмәт иттерергә ынтыла. Тимәк, Сафиулла ҡарт улына бик һәйбәт киләсәк юраған!

*1982 йыл*

## Бәхетле балалыҡ, ғорур әсәлек йырсыһы

Фәүзиә апай Рәхимғолованың ижады менән ярайһы уҡ таныш булып, уның хаҡында яҙып сыҡҡаным, үҙе менән осрашып торғаным, шиғыр кисәләрендә, трибунаға ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына күтәрелеп, яғымлы, талғын ғына тауыш менән шиғырҙар уҡығанын ишеткәнем булһа ла, баҫалҡы тәбиғәтле шағирә менән яҡындан аралашҡаным юҡ ине. Кешеләр юлда таныша, тигәндәй, 1978 йылдың йәй аҙаҡтарында миңә Фәүзиә апай менән бер аҙна буйы Күгәрсен районында әҙәби осрашыуҙарҙа ҡатнашырға тура килде. Тап бына ошо юл сәфәрендә Фәүзиә апай миңә оло йөрәкле, кешелекле кеше булараҡ та, шағирә булараҡ та өр-яңы сифаттары менән асылып китте.

Ул тәүге шиғырҙарын уҡыуы булды, бығаса беҙҙе ятһыныңҡырап ултырған һауынсыларҙың йөҙҙәре яҡтырып китте, улар шағирәнең һәр шиғырын берҙәм ҡул сабыуҙар менән ҡаршы алдылар. Фәүзиә апай иһә тамашасыларға бик тиҙ ҡулайлашып алды булһа кәрәк: берсә хәстәрлекле һәм һиҙгер йөрәкле әсә образына керҙе; берсә, донъя йөгөн үҙ елкәһендә татыған апайҙарҙың эс-бауырына үтеп-инеп, һуғыш йылдарының фажиғәләре, сыҙамлыҡ һәм батырлыҡ тураһында поэтик хикәйәттәр бәйән итте; берсә үҙ таланты иң юғары сағылыш тапҡан — балаларға тәғәйенләнгән шиғырҙарына күсте. Был мәлдәрҙә инде әле генә донъя йөгөн

күтәреп янтая барған өлкән йәштәге ҡатын ҡиәфәтендә сығыш яһап торған шағирә кинәт һигеҙ-туғыҙ йәшлек балаға әүерелде. Бына ошо әүерелә белеү, әҫәрҙәрен уҡығанда ғына түгел, ижад иткәндә лә бер рухи тороштан икенсеһенә күсә алыу һәм шул уҡ ваҡытта үҙе булып ҡала белеү — Фәүзиә Рәхимғолованың поэтик талантын билдәләүсе төп сифаттарҙың береһе булһа кәрәк.

Уның тәбиғәтендә бер ниндәй ҡыланыу ҙа, тамашасыға оҡшарға тырышып ярамһаҡланыу ҙа булманы, ә йөрәктән сыҡҡан ихлас һүҙ, саф һәм ҡайнар тойғолар һәр кемдең күңелендә урын алды. Оло йәшкәсә ихласлыҡты һәм күңел сафлығын һаҡлай алыу, тормошҡа балаларса ғашиҡ булып, балаларса эскерһеҙ ҡала алыу, әлбиттә, һәр кемдең өлөшөнә төшкән көмөш түгел. Ә бит шағирәнең балалыҡ йылдары тураһында уйлап ҡараһаң йәки автобиографик характерҙағы «Ҡыҙыл яулыҡ», «Партизан ҡыҙы» тигән әҫәрҙәре менән танышып сыҡһаң, 1921 йылда, ҡот осҡос аслыҡ йылында, донъяға килгән, өҫтәүенә, халыҡ дошмандары тарафынан үлтерелгән атаһының йөҙөн дә күрә алмаған, бер йәшендә үкһеҙ етем ҡалып, үгәй өләсәһе һәм олатаһы ҡулында көн күрергә мәжбүр булған шағирәнең балалыҡ йылдарынан, күңел йылытырҙай сыуаҡлы көндәргә ҡарағанда, өшәндергес көндәр күберәк ҡалған...

Бәхеткә күрә, яҙмыш буласаҡ шағирәне бер яҡтан йәберләһә лә, икенсе яҡтан үҙенең мәрхәмәтенән дә мәхрүм итмәгән. Атаһы ҡан ҡойоп яулашҡан совет власы кескәй Фәүзиәне үҙ хәстәрлегенән ситтә ҡалдырмаған. Үгәй өләсәһе, ете йәшлек Фәүзиәне бай бисәләренең балаларын бәүеттереп, үҙ тамағын үҙе туйҙырырға ҡушһа, Янрус ауылының партячейкаһы, уны яҙмыш тырнағынан йолоп алып, совет мәктәбенә аяҡ баҫтыра, өҫтөн-башын бөтәйтеп, ҡулына ҡағыҙ-ҡәләм тоттора. Тап бына шуға ла шағирә «Уйҙарымды бүлә күрмәгеҙ» тигән шиғырында:

> Наҙлы гөлдәй, иркә үҫтем мин,
> Етем, тиеп әйтә күрмәгеҙ, —

тип киҫәтеп ҡуя икән, быны һис тә ҡыланыу тип уйларға ярамай. Был шиғырҙың тел төбөндә шағирәнең йомарт күңелле ауылдаштарына, Янрус ауылында совет

власын урынлаштырыусы тәүге коммунистарға, етем ҡыҙға рабфак, институт ишектәрен асып белем алырға һәм яҙыусы дәрәжәһенә күтәрелергә киң юлдар һыҙған Ленин партияһына ҙур рәхмәт тойғоһо ята:

Йортом булды тәүге интернат,
Ҡалманым мин яңғыҙ урамда,
Ул саҡ күпме ҡарар сығарҙы
Партячейка минең турамда.
Йылы бишмәт, күлдәк кейҙерҙе,
Бала итеп мине ул ҡарар,
Ҡанат ҡуйып, күккә мендерҙе
Ҡалай итеп мине ул ҡарар...
Нур йүргәккә төрөп бәүеткән
Һандуғаслы, тыуған ергенәм!
Эй, партиям! Ғәзиз илгенәм!
Атам-әсәм минең бергенәм!
Күңелкәйен күмеп наҙ менән
Сабыйыңды нисек ҙурланың!
Шуға ла бит ҡайнар хисемде
Мин йыр итеп бөгөн йырланым...

Ф.Рәхимғолова — үҙенең утыҙ йылдан ашыу ижад ғүмере эсендә егермеләп китап сығарып, киң ҡатлам әҙәбиәт һөйөүселәрҙең ихтирамын һәм мөхәббәтен яулап алған әҙибәләрҙең береһе. Егермеләп китаптың ун алтыһы балаларға тәғәйенләнгән. Был тәбиғи, сөнки Ф.Рәхимғолова — балалар өсөн ижад итеүҙе үҙенең төп эше, гражданлыҡ бурысы итеп һанаусы, рухы менән дә, булмышы менән дә балаларға иң яҡын торған, эскерһеҙ бала тәбиғәтле шағирә. Уның «Яҡын дуҫ» (1952), «Гел алға» (1954), «Март ҡояшы» (1959), «Зәйнәптең йыры» (1960), «Хуш киләһең» (1962), «Үҫкән ҡыҙҙар» (1964), «Яҙыу таныған кеше» (1968), «Тамсылар йырлай» (1971), «Елә зәңгәр автобус» (1975), «Һин кем ҡыҙы?» (1977), «Йөҙ юл» (1981) кеүек балалар өсөн яҙылған шиғыр йыйынтыҡтары башҡорт балалар поэзияһының художество кимәлен һәм тәрбиәүи ролен күтәреү эшенә ҙур булышлыҡ итте. Уның шиғриәтенең төп темаһы — бәхетле балалыҡ, төп геройҙары — шат йөҙ менән донъяға бағыусы, көр күңелле, шаян һәм шуҡ малайҙар менән ҡыҙҙар.

Байтаҡ йылдар мәктәптә уҡытыусы булып эшләгән, өҫтәүенә, үҙе лә өс бала тәрбиәләп үҫтергән шағирә төрлө йәштәге балаларҙың психологияһын яҡшы белә, уларға өгөт-нәсихәт биреүҙең дә, шаян һәм тыңлауһыҙ-

ҙарын еңелсә шелтәләүҙең дә үтемле юлдарын таба. Бына, мәҫәлән, «Трә-лә-ләй» шиғырындағы шуҡ малайҙы ғына күҙ алдына баҫтырайыҡ:

Молодец малай! — тиеп
Маҡтанылар баҡсала.
Трә-лә-ләй, трә-лә-ләй,
Маҡтанылар баҡсала.
Бер кемгә лә һуҡманым,
Аяҡ салып йыҡманым...
Трә-лә-ләй, трә-лә-ләй,
Хәҙер бер кем әрләмәй!

Балалар араһында үҙ-ара һәйбәт мөнәсәбәт, дуҫлыҡ һәм иптәшлек, коллективлыҡ тойғоһо тәрбиәләү, уларҙы Тыуған илде, тәбиғәтте яратырға өйрәтеү Ф.Рәхимғолова шиғырҙарының төп идея-эстетик йөкмәткеһен билдәләй. Шағирә балалар өсөн яҙылған шиғырҙарында һүҙ оҫтаһы ла, тәжрибәле педагог та булып сығыш яһай. Уның шиғырҙарының тел төбөндә һәр ваҡыт кескәй уҡыусыға теге йәки был тәрбиә биреү ниәте ята. Тик автор үҙ фекерен өгөт-нәсихәт түгел, ә оҫта поэтик саралар, образлы тел аша еткерә. Автор — балалар өсөн яҙылған шиғырҙарының теленә, поэтик эшләнешенә ҙур иғтибар итеүсе һүҙ оҫтаһы. Уның шиғырҙары тел һәм стиль йәһәтенән тәү ҡарамаҡҡа бик ябай күренә, ә ул — оҫталыҡ аша ғына өлгәшелгән художестволы ябайлыҡ. Бында халыҡ ижады менән профессиональ поэзияның синтезы индивидуаль кәүҙәләнеш таба. Белинский һүҙҙәре менән әйткәндә, быға талантлы, «балалар яҙыусыһы булып тыуған» әҙиптәр генә өлгәшә ала.

Ф.Рәхимғолованың балаларға бик яҡын тороуы, уларҙың эстетик талаптарын һәйбәт белеүе тағы шунда асыҡ күренә: ул бер ваҡытта ла бала күңеле ятмаҫтай темаға тотонмай, ә тотонһа — йәнле образдар, яҡты буяуҙар менән эш итә. Уның шиғырҙарында йәнлелек, хәрәкәт көслө. Шул йәнләндереүгә өлгәшеү өсөн шағирә уңышлы ритмик-интонацион сараларҙы, эске, аралаш, йәнәш рифмаларҙы, өноҡшаш һүҙҙәрҙе, ымлыҡтарҙы киң ҡуллана. Шуға ла уның шиғырҙары йөкмәткеһе менән балаларҙың күңелен арбап, формаһы менән үҙенән-үҙе йырлап тора.

Тормошто күҙәтеүсән, балалар донъяһын, холоҡ-ҡылыҡтарын яҡшы белгән яҙыусы балалар прозаһы өлкәһендә лә уңышлы эшләп килә. Уның «Ҡыҙыл яулыҡ» (1962), «Илгиҙәр» (1969), «Серле орлоҡтар» (1979) тигән китаптарына тупланған хикәйә һәм повестары әхләҡ-тәрбиә мәсьәләләренең үткер ҡуйылышы менән айырылып тора. Әйтергә кәрәк, Ф.Рәхимғолованың балалар өсөн яҙған хикәйә һәм повестарында сюжет көсөргәнешлеге, мажаралылыҡ түгел, бәлки ваҡиғаларҙың тормошсанлығы, ғәҙәтилек өҫтөнлөк ала. Автор проза әҫәрҙәрендә үҙенең төп иғтибарын балаларҙа характер формалашыу мәсьәләләренә йүнәлтә. Поэзияһында ул, нигеҙҙә, шағирә-художник булараҡ кәүҙәләнһә, прозаһында яҙыусы-педагог алғы планға сыға. Әммә ихласлыҡ, балалар араһындағы типик ҡаршылыҡтарҙы оҫта тотоп алыу һәләте, көтөлмәгәнсә тамамланыш хикәйәләренең уҡымлылығын һәм тәьҫир итеү көсөн бермә-бер көсәйтә.

Ф.Рәхимғолова үҙенең төп эше — балалар әҙәбиәтен үҫтереүгә һәм байытыуға арымай-талмай хеҙмәт итеүе менән бергә һуңғы ун-ун биш йыл эсендә ололар өсөн дә актив яҙыша, прозала ла, поэзияла ла үҙ тауышын көслөрәк ишеттерә башланы.

Ололар өсөн яҙылған прозаик әҫәрҙәре «Юлдаштар» тигән йыйынтығында 1971 йылда донъя күргәйне. Бынан һуң ваҡытлы матбуғат биттәрендә, айырата «Башҡортостан ҡыҙы» журналында тиҫтәләрсә хикәйәләре, ҡатын-ҡыҙҙар тураһында һәйбәт-һәйбәт очерктары, әхлаҡ-этик проблемаһына арналған үтемле мәҡәләләре донъя күрҙе.

Яҙыусының күпселек хикәйәләре тормошто, үҙе аралашҡан һәм осраҡҡан кешеләрҙең характерҙарын ентекле өйрәнеүҙәренең һөҙөмтәһе булараҡ ижад ителгән. Сөнки уларҙа авторҙың үҙ характеры, кешеләргә ҡарата изгелекле, эскерһеҙ мөнәсәбәте ярылып ята. «Юлдаштар» йыйынтығына ингән «Гөлйемеш», «Культуралы кеше», «Юлдаштар», «Ышаныс», «Кеше — ҡауын түгел» кеүек хикәйәләрендәге новеллизм, йәғни көтөлмәгәнсә тамамланыш та, яҙыусының ысынбарлыҡты ҡабул итеү манераһына, ихласлығына тығыҙ бәйле. Шуға ла уның байтаҡ хикәйәләрендә тәү ҡарамаҡҡа бик ябай, күҙгә бәрелеп тормаған персонаждар уғата ярҙамсыл, киң күңелле кешеләр булһа, киреһенсә, тәү

ҡарамаҡҡа уғата яҡшы «культуралы» булып күренгән әҙәмдәр ике йөҙлө йәки алдаҡсы, ваҡ йәнле бәндәләр булып сыға. Яҙыусының проза әҫәрҙәрендә ап-асыҡ идея-эстетик концепция бар: ул үҙенең хикәйәләрендә ыңғай геройҙарының күңел матурлығына һәм кешелеклегенә баҫым яһай, шуға ла уның геройҙары үҙҙәренең әхлаҡ өҫтөнлөгө, күңел матурлығы менән көрәштә һәр ваҡыт еңеп сығалар.

Ф.Рәхимғолованың поэзияһына килгәндә, уның ихлас лирикаһы үҙенең рухи донъяһын, прозаһында һәм балалар өсөн яҙылған шиғырҙарында әйтелеп бөтөлмәгән уй-кисерештәрен тулыраҡ сағылдырыу менән генә сикләнмәй. «Тыуған ер», «Уйҙарымды бүлә күрмәгеҙ» тигән йыйынтыҡтарына тупланған һәм әленән-әле матбуғат биттәрендә сығып торған шиғырҙары авторҙың үҙенең генә түгел, егерменсе йылдарҙа донъяға килеп, тормошҡа ҡыуаныс менән бағырға, азат илдең көрәш романтикаһы менән йәшәргә өйрәнгән һәм шул рухи ныҡлыҡ менән Бөйөк Ватан һуғышын ҡаршылаған, уның бөтә ауырлыҡтарын үҙ елкәләрендә күтәрешкән, һуғыш фажиғаләре, кире ҡайтмаҫ юғалтыуҙар, өҙөлгән тәүге мөхәббәт хәтирәһе булып күңелдәренә уйылып ҡалған быуындың уртаҡ уй-хистәрен, яҡты һағыштарын сағылдыра.

Әммә автор уҙған фажиғәләр өсөн йәш түгеп, тормошҡа битараф ҡарап ултырыусыларҙан түгел. Ул тормоштағы мәңгелек хәрәкәтте, яҡшылыҡтың һәм изгелектең тантанаһын нығыраҡ, сағыуыраҡ тоя. Шуға ла уның лирик геройы тормошҡа мөкиббән ғашиҡ, балалай саф күңелле кеше булып ҡала, поэзияһында сағыу төҫтәр, мажор тондар өҫтөнлөк итә, лирикаһынан сафлыҡ һәм ихласлыҡ бөркөлөп тора. Шағирә үҙенең Тыуған илгә ҡайнар мөхәббәтен, патриотизм тойғоларын бәхетле балалыҡҡа һәм әсәлеккә маҡтау йыры аша сағылдыра, тормошҡа мөхәббәте шаулап аҡҡан йылғаларға, ҡайнап урғылған ҡар һыуҙарына, яҙғы урман шауҙарына барып урала. Поэзияһында мөхәббәт лирикаһы ла шаҡтай ҙур урын алып тора. Беҙ унда тыштан тыныс, эстән дөрләп китергә торған ҡайнар йөрәкле лирик герой менән осрашабыҙ. Уның мөхәббәт лирикаһында һуғыш арҡаһында өҙөлөп ҡалған тәүге һөйөүҙең яҡты һағышы ла, үҙенең өлөшөнә төшкән көмө-

шөнөң ҡәҙерен белеү тойғоһо, уға тоғролоҡ та үҙенсәлекле кәүҙәләнеш алған.

Ғөмүмән, ихлас ҡәләм эйәһе Фәүзиә Рәхимғолова үҙенең юбилейын (уға 60 йәш тулды) ижади уңыштар менән ҡаршылай. Бәхетле балалыҡ һәм ғорур әсәлек йырсыһына ижади ҡаҙаныштар, илһам һәм һаулыҡ юлдаш булһын!

*1981 йыл*

## Яҙыусының күңел тәҙрәләре

Бөгөн илле йәше тулған Йыһат Солтанов — үҫмер йылдары ғәрәсәтле һуғыш дәүеренә тап килеп, балалыҡтан бик иртә айырылған, 12—13 йәштәрендә яуға киткән ир-егеттәрҙе алмаштырып, ат урынына үгеҙ, һыйыр егеп иген иккән, ҡарт әсәләр менән тол ҡатындарҙың йөрәк түрҙәренән һығылып сыҡҡан нәфрәт ҡатыш һағыш йырҙарын тыңлап, уларҙың күҙ йәштәрен һөртөп үҫкән быуындың бер вәкиле. Был быуынды тормош бик иркәләмәне. Уларҙың ҡай берәүҙәрен ата-әсәһенән бик иртә айырһа, ҡай берәүҙәрен мәктәптә иркенләп белем алыуҙан мәхрүм итте. Атаһы һуғышҡа тиклем үк вафат булып, әсәһенең берҙән-бер терәге булып ҡалған Йыһатҡа ла тормош йөгөн бик иртә артмаҡларға, 13—14 йәшенән, мәктәп парталарынан айырылып, билде биштән быуып колхозда иген игергә, үҫеп егет булғас, хәрби флотта хеҙмәт иткән саҡта, үлемдең күҙенә тура ҡарап, Балтик диңгеҙен һуғыш ваҡытында фашистар ҡороп ҡалдырған миналарҙан таҙартырға тура килә. Шул уҡ ваҡытта бәләкәйҙән уҡыуға ҡомар булған Йыһат үҙ алдына унынсы класты, унан һуң ситтән тороп юғары уҡыу йортон тамамлай.

Тап бына шуға ла тормоштоң әсеһен-сөсөһөн бик иртә татып белгән Йыһат Солтановтың шиғырҙарында беҙ үҙ быуынының тормош тәжрибәһен туплаған тайшанмаҫ рухлы, баҙыҡ лирик герой менән осрашабыҙ. Ул бөтә булмышы менән тыуған еренә ереккән, йәнетәне менән халҡына тамырланған.

Мин халҡыма тәрән тамыр йәйҙем,<br>Һөлөк кеүек түгел имергә.

Тамыр йәйҙем, уның төпкөлөнән
Йәнһыу алып уға бирергә, —

ти шағир «Илемә» тигән шиғырында.

Эйе, Йыһат Солтановтың лирик геройы Урал битләүендәге йөҙ йәшәр имән кеүек тамырҙары менән тыуған ергә ереккән. Әммә ул үҙ төбәгенә ни тиклем ерекмәһен һәм тыуған ер моңон күңеленә һеңдермәһен, үҙ төбәгенән ары донъяны күрә алмаған тар ҡарашлы, сикләнгән бер әҙәм түгел! Ул үҙ еренә һәм халҡына тоғро булып ҡала белгән кеүек, замандың иркен һулышы менән һулай, алыҫ офоҡтарға кирелеп ҡарай ҙа белә. Тап бына шуға ла «Уралыма» тигән шиғырында:

Һине йырлау, һинең өсөн үлеү —
Ҡалыр һымаҡ һаман шул көйсә,
Ләкин Урал аша офоҡ күрмәү
Яңы түгел инде, минеңсә, —

ти. Йәғни ул туған Уралына тоғро ҡалған хәлдә лә, хәҙер инде тыуған ер төшөнсәһенең офоҡтары ни тиклем киңәйгәнлеген һәм уның алдында яуаплылыҡ тойғоһо ла шул тиклем артҡанлығын бик яҡшы аңлай.

Йыһат Солтанов рухы менән публицистик шағир. Ул тормош айышын, заманалар ағышын һиҙгер тоя. Тоя ғына түгел, тәрән кисерә. Тап бына шуға ла уның ижадында быуындар яҙмышы, быуындар эстафетаһы үҙәк урындарҙың береһен биләй. Мин, был яҡтан килгәндә, Йыһат Солтановты рухилыҡ һаҡсыһы, бөгөнгө ҡаршылыҡлы һәм ҡатмарлы заманда кешенең күңел донъяһын әрсәләүсе яҙыусыларҙың береһе, тип икеләнмәйенсә әйтер инем. Сөнки уның «Ҡотлобикә», «Алыҫ-алыҫҡа», «Ҡояшлы ҡая» тигән хикәйә һәм повестары тап бына ошо яҡтары — кешенең кешелеклеге өсөн көрәш мәсьәләһенең үткер ҡуйылышы менән айырылып торалар.

Йыһат Солтановтың прозала үҙенең баҙыҡ индивидуаль стиле төҫмөрләнә. Асылда уның хикәйә һәм повестарындағы ыңғай геройҙар рухы менән поэзияһындағы лирик герой характерына яҡын торалар. Яҙыусының ыңғай геройҙары ил һәм халыҡ эшен үҙ мәнфәғәттәренән өҫтөн ҡуйыусы, юғары рухлы, халҡыбыҙҙың иң яҡшы сифаттарын кәүҙәләндереүсе: тыштан баҫалҡы, әммә күңелендә изгелек һәм фиҙаҡәрлек

утын йөрөтөүсе кешеләр. «Ҡотлобикә» хикәйәһендәге Ҡытлыбикә, «Алыҫ-алыҫҡа» әҫәрендәге Мәғруфкамал әбей менән ейәне Салауат, «Ҡояшлы ҡая» повесындағы Тимур — тап бына шундай халҡыбыҙҙың изге рухын һаҡлаусы, киң күңелле, күркәм образдар.

Ырымбур өлкәһенең Һараҡташ районында, йәйҙәрен аҡ ҡылғанға күмелгән, ҡыштарын йәйәүле бурандарҙың төбәге булған Сәнкем-Һунарсы ауылында тыуып-үҫкән Й.Солтановтың ижадында хәҙерге замандың мөһим проблемаларының береһе булып торған тәбиғәтте һаҡлау темаһы ла үҙәк темаларҙың береһе булып тора. Был тәбиғи, сөнки Й.Солтанов бала саҡтан уҡ яңғыҙ ағасты ла оло урмандай күреп, ҡамғаҡтар тәгәрләгән сая дала күкрәгендә йәшел урман үҫтереү хыялы менән йәшәгән. Шуға ла 1957 йылда «Пионер» журналында баҫылып сыҡҡан «Урман бабай» хикәйәһендә үк күтәрелгән тәбиғәтте һаҡлау проблемаһын ул бөгөнгө көндә лә уңышлы дауам иттерә. Яҙыусы «Урман», «Алыҫ-алыҫҡа» тигән уңышлы хикәйәләрендә был мөһим мәсьәләнең әхлаҡ-этик юҫыҡтарына баҫым яһай һәм кешенең тәбиғәткә мөнәсәбәтен уның кешелеклеген билдәләүсе ҙур проблема юғарылығына күтәрә.

Й.Солтановтың проза өлкәһендәге ижади эшмәкәрлеге хаҡында һүҙ йөрөткәндә, уның һуңғы йылдарҙа ҙур күләмле әҫәрҙәр өҫтөндә эшләүен дә әйтеп китеү урынлы булыр. Ул күптән түгел «Йәдкәр» исемле ҙур күләмле роман яҙып бөтөп «Ағиҙел» журналына тапшырҙы. Жанры буйынса «роман-эссе» тип билдәләнгән был әҫәрҙә Коммунистар партияһының аҡыллы етәкселеге аҫтында башҡорт совет интеллигенцияһының тыуыуы һәм нығыныуы заманыбыҙҙың киҫкен ваҡиғалары ағышында байҡала. Автор бында халыҡ ижады хазиналарына ла, фәнни асыштарға ла иркен таяна, художестволы хикәйәләү туҡымаһы документалистика, публицистика саралары менән үрелеп бирелә. Романда шәхси яҙмыштар коллезияһы халыҡтың тарихи хәтере һәм кешелек намыҫы проблемаһы менән тығыҙ бәйләнештә сиселә.

Й.Солтанов, үҙ ижадында хәрби-патриотик темаға ныҡ иғтибар итеүсе әҙиптәрҙең береһе. Был йәһәттән уның матбуғат биттәрендә донъя күргән хикәйә һәм повестары, шиғыр, поэмалары һәм очерктарынан тыш, туранан-тура башҡорт кавалерия дивизияһының һу-

ғышсан юлын һүрәтләүсе документалистикаға ла үҙ өлөшөн индереүен билдәләп үтергә кәрәк. Яҙыусы, мәҫәлән, башҡорт атлы дивизияһының политбүлек начальнигы С.Р.Ҡадировтың фронт яҙмаларын әҙерләп сығарыуҙа туранан-тура ҡатнашты; унның генерал Шайморатов тураһындағы «Урал бөркөтө» тигән повесы Й.Солтановтың әҙәби яҙмаһында донья күрҙе. Әҫәрҙе яҙыр алдынан Й.Солтановтың легендар атлы дивизияның боевой маршруты буйлап сәйәхәт итеүе, Ростов өлкәһендә, Украинала булып, башҡорт яугирҙары эскән һыуҙарҙан ауыҙ итеүе һәм улар тураһындағы иҫтәлекле урындар менән танышыуы «Урал бөркөтө» повесының художество кимәлен күтәреүгә бермә-бер булышлыҡ иткән.

Йыһат Солтанов ижадының бер ҡанаты рухилыҡ булһа, икенсе ҡанаты — тарихилыҡ. Сөнки ул бөгөнгөгә уҙған тарих һабаҡтары аша ҡарап баһа бирә, уҙған һәм бөгөнгөнән сығып киләсәкте төҫмөрләй. Кешеләрҙе синфи һәм рухи уяулыҡҡа, һиҙгерлеккә саҡырыу унның поэзияһының төп пафосын билдәләй: «Кешеләрҙең ҡайнар йөрәктәре аша үтә бөгөн Баррикада», — ти, шуға ла ул «Баррикада» тигән шиғырында. Йөрәк аша уҙған баррикада ябай ғына төшөнсә түгел: бында синфилыҡ менән рухилыҡ бергә береккән.

Йыһат Солтанов үҙ ижадының төп йүнәлешен таба алмай ары һуғылып, бире һуғылып йөрөгән әҙип түгел. Унның поэзияһы менән прозаһы ғына түгел, публицистикаһы менән тарихи яҙмалары ла уҙған дәүерҙәргә, халыҡтың азатлыҡ өсөн көрәш тарихына, ата-бабаларҙың героик эшенә оло ихтирам тойғоһо менән һуғарылған. Шағир «Шәжәрә» тигән поэмаһында үҙенең алыҫ ейәндәренә:

Беҙ ҡалабыҙ ҡояш аралында
Октябрь һәм Ватан яуының.
Беҙгә тиклем, беҙҙән һуңғыларҙы
Күтәрә был ике яуырын.
Үткәндәрһеҙ килер көткәндәр юҡ:
Беҙҙең тамыр һеҙҙә йәшәрә;
Бөрөләрҙе ярып, сәскә атһын
Олатайҙар һуҙған Шәжәрә! —

тип юҡтан ғына өндәшмәй. Сөнки киҫкен көрәш менән яулап алынған бөгөнгө матур тормошҡа ла, килә-

сәккә лә тарих һабаҡтары аша ҡарарға ынтылыш — уның бөтә ижад концепцияһын билдәләй. Шағирҙың «Шәжәрәһе» лә ғәҙәттәге ырыу шәжәрәһе түгел. Ул быуаттан быуатҡа ялғанып тармаҡлана барған, тармаҡланған һайын тамырҙарын тәрәнерәк ебәргән халыҡ яҙмышы, башҡорт халҡының бөйөк рус халҡы һәм башҡа туғандаш халыҡтар менән бергә азатлыҡ өсөн көрәш тарихы булараҡ поэтик кәүҙәләнеш ала. Әммә шағир бында тарихҡа иллюстрация биреү менән мауыҡмай, ә ил яҙмышын үҙ «күңел тәҙрәләре» аша яҡтыртып, халыҡтың рухи шәжәрәһен дә балҡыта. Халыҡтың рухи шәжәрәһе, әлбиттә, хәҙерге заманда ғына башланмаған, уның тамырҙары быуаттар төпкөләндә, ысынлап та, «Урал батыр» шәжәрәһендә ята. Был шәжәрә бөгөнгө көндә күп һанлы һүҙ оҫталары тарафынан уңышлы дауам иттерелә. Ә Й.Солтановтың ижады — бына ошо ҙур һәм ҡеүәтле рухи ағымдың айырылмаҫ бер өлөшө, йәғни шәжәрәнең тере бер тармағы. Сөнки әҙиптең тыуған халҡына әйтер үҙ һүҙе бар:

Мин ҡулыма хәләл ҡәләм алдым,
Көнгә манып, төнгә яҙырға,
Ялҡын менән тулы йөрәк тибә,
Илем өсөн дөрләп янырға, —

ти шағир үҙенең бер шиғырында. Быға беҙ ышанабыҙ. Сөнки илле йәше тулыу көнөнә ете китабы донъя күргән яҙыусының изге ниәте — халҡыбыҙға әйтер һүҙе — шиғыр, поэма, хикәйә, повесть һәм роман булып йылдан-йыл ҡыйыуыраҡ һәм асығыраҡ ишетелә.

*1982 йыл*

## Шағир табынған йондоҙҙар

Шиғриәт һөйөүселәргә илленсе йылдарҙың аҙаҡтарынан алып ваҡытлы матбуғат биттәрендә баҫыла килгән шиғырҙары, балалар тарафынан һәйбәт ҡаршы алынған «Йыл бабай һәм сәғәттәр», «Йыл бабайҙың дүрт ҡыҙы» һәм ололарға тәғәйенләнгән «Аҡ таңдарым» тигән китаптары менән яҡшы таныш булған Барый Ноғомановтың «Етегән йондоҙ» тигән яңы шиғырҙар йыйынтығы донъя күрҙе. Шағирҙың был йыйынты-

ғына, нигеҙҙә, һуңғы йылдарҙа ижад ителгән шиғырҙары тупланған. Әйтергә кәрәк, китап тәүгеләренән күләменең ҙурлығы, йөкмәткеһенең һәлмәклеге менән дә айырылып тора. Тап бына шуға ла был йыйынтыҡ уның поэзиялағы урынын нығытыу менән бергә шағирҙың ижад йөҙө тураһында айырым фекер йөрөтөргә лә тулы мөмкинлек бирә.

Һәр шағирҙы, уға тәбиғәт тарафынан бирелгән һәләтен уятып ебәрерҙәй, тәү тойғо ҡулына башлап ҡәләм алырға мәжбүр итә. Берәүҙәрҙең тәү тойғолары мөхәббәттән ҡабынһа, икенселәренең тәбиғәткә, тормош күркәмлегенә маҡтау йыры булып бөрөләнә. Әммә, Б.Ноғомановтың шиғырҙарының дөйөм рухынан асыҡ күренеп тороуынса, уны шиғыр яҙырға этәргән тәү тойғо һуғыштағы атаһының үлем хәбәрен ишетеүҙән тетрәү көсө, ете бала менән тол ҡалған әсәһенең үкһеҙ күҙ йәштәрен күреп әрнеү тойғоһо булғандыр тиһәм, һис тә хаталанмам. Билдәле, әле ул ваҡытта был әрнеү һәм нәфрәт тойғоһо алты йәшлек малай күңеленән шиғыр булып ҡағыҙға төшөргә өлгөрмәгән. Әммә был тетрәткес ваҡиға буласаҡ шағирҙың күңеленә юйылмаҫ эҙ һалып, артабан уның шиғриәтенең төп пафосын билдәләүҙә ҙур урын тотҡанлығы шикһеҙ. Тап бына шуға ла Б.Ноғоманов поэзияһында Бөйөк Ватан һуғышы темаһы, уның фажиғаларын тәрән кисереү, героикаһын данлау, ата-бабаларҙың традицияларына тоғролоҡ үҙәктә тора. «Аҡ таңдарым» йыйынтығында был тема «Толомдар» тигән балладаһында һәм «Петрищево ауылында уйланыуҙар» тигән шиғырында героик-романтик планда кәүҙәләнеш алһа, «Етегән йондоҙ» китабындағы шиғырҙарҙа, бер яҡтан, һуғыштың фажиғәле эҙемтәләренә, төҙәлмәҫ яраларына иғтибар көсәйһә, икенсе яҡтан, был һуғышта совет халҡының күрһәткән ҡаһарманлығын данлауға, һуғыш ҡорбандарының иҫтәлектәрен мәңгеләштереү, ата-бабаларҙың һуғышсан традицияларына тоғролоҡ мәсьәләләре совет патриотизмы темаһы менән айырылғыһыҙ бәйләнештә күтәрелеүе күренә.

Билдәле булыуынса, Бөйөк Ватан һуғышы ҡорбандары иҫтәлегенә Мәскәүҙә, Кремль эргәһендә, билдәһеҙ һалдат иҫтәлегенә тоҡандырылған мәңгелек ут, яуҙа һәләк булған меңәрләгән һалдаттарҙың үлемһеҙлеген символлаштырыусы образ булараҡ, бик күп шағирҙарҙы

шиғри уйланыуҙарға этәрҙе. Хәҙерге башҡорт поэзияһында ғына ла был темаға арналған тиҫтәләгән шиғыр бар, сөнки был символик ут образында халыҡтың һуғыш ҡорбандарына ихтирамы ла, улар тормошоноң дауамы ла, ҡаһарманлыҡ та кәүҙәләнеш алған. Б.Ноғомановтың «Тере сәскә» шиғыры ла бына ошо мәңгелек ут хаҡында. Билдәле, был күп шағирҙар мөрәжәғәт итеп, бынамын тигән әҫәрҙәр ижад ителгән теманы үҙенсә асыу, образдың потенциаль мөмкинлеген үҙенсә кәүҙәләндереү ҙур оҫталыҡ талап итә, сөнки һәр шиғри һүҙ яңы һүҙ булырға тейеш. Б.Ноғоманов өсөн мәңгелек ут, бер яҡлап, «илем йөрәгендә мәңге яныр хәтер усағы» булһа, икенсе яҡлап, «мәңгелек ут үҙе — ер ҡуйынынан ярып сыҡҡан тере бер сәскә». Бында был әйтелгәнде тарҡатып аңлатып тороуҙың кәрәге юҡ: «Мәңгелек ут — мәңге яныр хәтер усағы» тигән юлдар һуғыш ҡорбандарының яҡты иҫтәлеген мәңгеләштереү идеяһын нығытһа, унын «тере бер сәскә» булыуы бөгөнгө матур тормоштоң ҡаты яуҙарҙа яуланыуына образлы бер ишара. Һуғыштың халыҡ күңелендә ҡалған төҙәлмәҫ яралары «Иҫке йорт», «Әсәйемдең алтын туйында» шиғырҙарында ла тормошсан картиналарҙа тетрәткес итеп кәүҙәләндерелә. «Иҫке йорт»та ире фронтта үлеп ҡалған бер йәтим әбейҙең ире һалып киткән иҫке йортон һүткәндәге драматик кисерештәре кәүҙәләнеш алһа, «Әсәйемдең алтын туйында» шиғырында шағир ете балаһын яңғыҙ үҫтергән әсәнең яуҙа ятып ҡалған ире менән ҡауышҡан көнгә илле йыл тулыу байрамын — алтын туйын уҙғарыуын ҙур эмоциональ кисерештәр аша сағылдыра. Бына алтын туйға бөтә балалар, хатта ейәндәр ҙә килеп бөткән, өҫтәлдә һыйхөрмәт әҙер, тик әсә эргәһендәге ултырғыс ҡына буш, «табынды ла үҙ йәмдәре менән башлау кәрәк», әммә:

Әсәй әйтте: «Сабыр бул, улым!»
Ер һелкенде мәллә шул минутта,
тертләп ҡуйҙым,
йәш бөрсөгө әсәй күҙендә.
Етем-төртөм көйө әллә күпме
ғүмер уҙҙы,
ҡуҙ йотҡандай шуға үҙем дә.
Йәш түгел ул,
әсәй күҙҙәрендә
ике ынйы
күңел ҡабырсығы үҫтергән;

атай ҡайтһа,
бер һибелер, тиеп,
йылдар буйы
алтын туйға һаҡлап еткергән, —

ти шағир. Күңелдең аҫтын-өҫкә әйләндерерлек бындай психологик ситуацияларҙы уйлап сығарыу мөмкин түгел. Был шағирҙың үҙ биографияһы, туранан-тура үҙенең тормошо һәм кисерештәренең поэтик сағылышы. Бына шуға ла шиғыр бер кемде лә битараф ҡалдырмай.

Һуғыш халыҡ хәтерендә күңел яралары булып ҡына дауам итмәй, беҙҙең арала түштәренә орден колодкалары таҡҡан ветерандар, аяҡһыҙ йәки ҡулһыҙ ҡайтҡан, тән яралары һаман һыҙлауынан туҡтамаған һуғыш инвалидтары ла бар. Әммә улар һыҙланһалар ҙа һыҡтамайҙар. Б.Ноғоманов «Һаумыһығыҙ!» шиғырында шундай бер яугир образын тыуҙырған. Ул яугир кешеләр менән ҡул ҡыҫып күрешеүҙән мәхрүм, шуға күрә «һаумыһығыҙ» тигәндә, «тик һикертеп ҡуя ҡулбашын». Тик уның үҙ һаулығы түгел, иң элек донъялар именлеге борсой:

Шул килеш тә «Һаумын!» тиер инем,
Тик именлек булһа донъяла, —

ти. Шиғырҙың аҙағында шағир бөтә кешелек донъяһына өндәшеп:

— Һаумыһығыҙ!..
Әй, кешелек, һиңә
Ҡәтғи бөгөн минең талабым:
«Һаумы» һүҙе генә булһын ине
Алты материктың яуабы, —

тигән хаҡлы талап ҡуя.

Йыйынтыҡҡа автор армия сафында хеҙмәт иткән саҡта яҙылған шиғырҙарының бер шәлкемен дә индергән. Элегерәк яҙылһалар ҙа улар китаптың дөйөм фонынан һерәйеп сығып тормайҙар. Сөнки был шиғырҙарҙа быуындар эстафетаһы кәүҙәләнә, улар бөтәһе лә атаһы яуҙа ятып ҡалған лирик геройҙың күңел диалектикаһын, аталар васыятына тоғролоғон нығыта. Ә инде бөгөн армияла хеҙмәт итеп йөрөгән улы Юлайға арнал-

ған «Улыма хат» шиғыры илгә, аталар традицияһына тоғролоҡтоң ҡаҡшамаçлығын раçлай.

Унынсы класты тамамлағас, комсомол путевкаһы менән барып төҙөлөштә эшләгән, унан, Совет Армияһында хеҙмәт итеп ҡайтып, юғары белем алғас, уҡытыусы, журналист булып эшләгән, йәғни, һәр ваҡыт тормош менән тығыҙ бәйләнештә йәшәгән шағирҙың ижадында гигант төҙөлөштәр романтикаһы ла («Белорет—Шишмә», «Палаткала йәшәп үткәрһәм дә») ауыл кешеһенең борондан килгән изге хеҙмәтен ҙурлау мотивтары ла көслө. Бөгөнгө ҡайнап торған ауыл шағир өсөн тынлыҡ ҡосағы түгел, ул уның уҙғандары хаҡында ла, киләсәге хаҡында ла уйлана. Йыйынтыҡтағы «Тыуған ерем», «Булһын өсөн ҡәҙерле», «Ҡурай моңо», «Икмәк», «Ҡунаҡбай», «Ауылым байрам ҡаршылай», «Аҙашым» кеүек шиғырҙарының дөйөм пафосы юғарыла әйтелгәндәрҙе раçларҙай сағыу миçал булып торалар.

Йыйынтыҡта байтаҡ шиғырҙар йәшлек һәм мөхәббәт темаһына арналған. Был шиғырҙарҙа үçмер саҡтың шуҡлыҡтары ла, елкендергес тәүге мөхәббәт тойғолары ла лирик геройҙың йәшлеге уҙған тыуған яғы, тәбиғәт темаһы менән тығыҙ бәйләнештә асыла. Авторҙың тыйнаҡ һәм эскерһеҙ мөхәббәт лирикаһы үҙ күңел диалектикаһын, интим тойғоларын ғына асып һалмай, уҡыусы күңелендә игеҙәк хәтирәләр, уй-тойғолар уята. Йыйынтыҡтағы «Фаягөлөм», «Йылдар үткәс», «Беләһеңме, һылыу», «Күҙҙәреңдә», «Бүләгем» тап бына шундай ихлас шиғырҙар.

Шиғриәтте шиғриәт итеүсе мәңгелек тойғоларҙың береһе кешелеклек һәм кеселеклек тойғоһо. Б.Ноғоманов та үҙ шиғриәтенең бер ҡылында тап бына ошо мотивтарҙы сиртә:

Ҡыҙыл сәскәләр, нурланып,
Өçтәлемде йәмләне.
Бер көн ҡағылдым — һаҡһыҙлыҡ!
Ҡағылдым да... йәлләнем.
Ҡып-ҡыҙыл тамсы шикелле
Сәскәләр тамды, тамды...
Тамсы түгел, көйрәп, улар
Тере ҡуҙ булып янды.
Һаҡ ҡына йыям усыма —
Өтә әйтерһең, ялҡын...
Һаҡһыҙлыҡтан һуң аңлайбыҙ
Ҡайсаҡ матурлыҡ хаҡын, —

ти шағир бер исемһеҙ шиғырында. Йыйынтыҡта былдай лирик миниатюралар байтаҡ.

Йыйынтыҡ «Ете нәҫел — ете нәҫер» тигән лиро-эпик әҫәр менән тамамлана. Был әҫәр жанры яғынан да, йөкмәткеһе менән дә үҙенсәлекле. Айырым-айырым ете шиғри нәҫерҙән торған был әҫәр башҡорт халҡының азатлыҡ өсөн көрәш юлдарын, уның драматик һәм героик мәлдәрен эҙмә-эҙлекле кәүҙәләндереүсе рухи шәжәрәгә лә тартым. Шағир әҫәрҙә быуындар эстафетаһын үҙәккә ҡуя, хеҙмәтсән халыҡтың азатлыҡ һәм бәхет өсөн көрәштә нығынған изге традицияларын ҡалҡыу итеп күрһәтә. Тәү ҡарамаҡҡа һәр береһе үҙаллы шиғырҙарҙың хронологик тәртиптә бирелеүе шағирға тарих хәрәкәтен поэтик күҙаллауға мөмкинлек биргән. Ғөмүмән, был әҫәр Б.Ноғомановтың поэтик форма өлкәһендә лә туҡтауһыҙ эҙләнеүен, ижадының йөкмәткеһе тәрәнәйә барыуын раҫлаусы әҫәр булараҡ ҡабул ителә.

Шул уҡ ваҡытта йыйынтыҡта шағирҙың үҙ мөмкинлектәренән түбәнерәк яҙылған шиғырҙар ҙа осрай. Ҡайһы бер шиғырҙарҙа теге йәки был шағирҙың йоғонтоһо стихияһынан ҡотола алмау ҙа һиҙелеп ҡала. Китапты асып ебәреүсе «...Мин — баҡсасы» тип башланған шиғырҙы, мәҫәлән, шағирҙың үҙ ижад баҡсаһында һутланып үҫкән шиғыр тип әйтеп булмай. Шағирға артабан шиғриәтенең аһәңлеген, музыкаль яңғырашын көсәйтеү, йәғни поэтикаһын төрләндереү һәм байытыу тураһында ла етдиерәк уйланаһы урындар бар.

Әммә иң мөһиме шул: шағирҙың был йыйынтығы уның шиғриәте тормош менән, бөгөнгө заман менән тығыҙ бәйләнгәнлеген, поэтик оҫталығы күтәрелә, индивидуаль ижад йөҙө асыҡлана, гражданлыҡ яңғырашы көсәйә барыуын күрһәтә.

## Шиғриәткә тоғролоҡ

Кеше күңелен арбарҙай яғымлы лирикаһы, айбарлы гражданлыҡ пафосы, патриотизм рухы менән һуғарылған публицистик шиғырҙары, балалар өсөн яҙылған мауыҡтырғыс китаптары һәм рус балалар әҙәбиәте классиктарынан оҫта тәржемәләре менән әҙәбиәт һөйөүсе-

ләрҙең иғтибарын барған һайын үҙенә нығыраҡ йәлеп иткән Шакир Бикҡолов ижады хәҙерге башҡорт әҙәбиәтендә һиҙелерлек урын алып тора.

Шакир Сәлим улы Бикҡолов 1932 йылдың 15 ғинуарында Башҡортостандың Урал аръяғында — Ирәндек, Ҡырҡты кеүек мөһабәт тауҙары, Ҡыҙыл, Һаҡмар һымаҡ шарлап аҡҡан йылғалары, ялтырап ятҡан күлдәре менән сәсәндәрҙең һәм йырсыларҙың теленән төшмәгән гүзәл тәбиғәтле Әбйәлил районының Хәлил ауылында тыуа.

Тәүге шиғырҙары матбуғат биттәрендә институтта уҡыған йылдарында уҡ күренгеләһә лә, поэтик ижад менән ныҡлап шөғөлләнә башлауы 1955—1957 йылдарҙа, Совет Армияһы сафтарында хеҙмәт иткән дәүеренә тура килә. Был тәбиғи, сөнки армия йәш шағирға һалдат һурпаһын эсереп, һоро шинель кейергә генә түгел, бәлки, ҡулына ҡорал тотоп һаҡҡа баҫырға, Тыуған илде һалдат булып һөйөргә һәм һаҡлай белергә лә өйрәтә. «Имән», «Полк байрағы» (1956) кеүек шиғырҙарында беҙ ҡайнар йөрәкле патриот, кәрәк булһа, Тыуған ил өсөн үҙен ҡорбан итергә әҙер торған лирик герой менән осрашабыҙ:

Тура килһә, был байраҡты
Мин дә алырмын ҡулға.
Йөрәк ҡаным тамһа-тамыр,
Тап төшөрмәмен уға.

Шағирҙың «Әсә күңеле» тигән тәүге йыйынтығы 1960 йылда донъя күрә. Унда тупланған шиғырҙар араһында әле поэтик яҡтан йомшағыраҡ әҫәрҙәр байтаҡ булыуына ҡарамаҫтан, ижадында артабан үҫеш аласаҡ ысын шиғри һыҙаттар ҙа айырым-асыҡ төҫмөрләнә башлай. Иң мөһиме — был йыйынтыҡтан Ш.Бикҡоловтың поэзияһы, халыҡҡа әйтер уй-хистәре күпте күреп, күп кисергән тыуған ергә, уның тарихи уҙғанына нигеҙләнгәне асыҡ билдәләнә.

Тыуған ерем, ҡуйыныңда ятҡан
Улдарыңдың изге ҡәберен
Күрмәһәм мин, аңлап бөтмәҫ инем
Бөгөнгөңдөң данын, ҡәҙерен,
Һинең өсөн, һинең иркең өсөн
Ерҙә барған күпме ҡан ҡойош.

Оло быуындарҙың шул ҡанынан
Шытып сыҡҡан беҙҙең был тормош, —

ти автор китапты асып ебәреүсе «Тыуған еремә» тигән шиғырында. Йәғни, ул бөгөнгө азат һәм бәхетле тормошто ата-бабаларҙың ҡаны менән яуланған изге мираҫы, аманаты итеп ҡарай. Тап бына шуға ла ата-бабаларҙың данлы традицияларына тоғролоҡ, улар яулап алған бәхетле тормошто тағы ла матурлау өсөн актив көрәш Шакир Бикҡолов поэзияһының арҡа һөйәгенә әйләнә.

Артабан шағир бер-бер артлы донъя күргән «Ерем яҡтыһы» (1965), «Тамырҙарым» (1970), «Япраҡтар шауы» (1980), «Һиңә әйтер һүҙем» (1981) тигән шиғыр йыйынтыҡтарында тәүге китабында билдәләнгән идея-эстетик концепцияһын уңышлы дауам иттерә. Шуныһы характерлы: донъяға ҡарашы армия сафында сыныҡҡан шағир үҙен һәр ваҡыт Тыуған илдең тоғро һалдаты итеп тоя, шағирҙың халыҡ алдындағы оло бурысын Ватанға тоғро ант биргән һалдат бурысына тиңләй:

Ике донъя — ике идея
Осрашҡанда бөгөн йөҙгә-йөҙ,
Бел, шиғырым, дошманыңа ҡаршы
Йәҙрә булһын һинең һәр бер һүҙ.
Йәшәмә һин арзан ләззәт булып,
Ҡыланма һин кемдер алдында;
Һин — һалдатһың, һинең урын бөгөн
Ҙур көрәштең алғы сафында.

*«Шиғырыма»*

«Рухым — күпер» әҫәрендәге лирик геройы уҙғандарҙы киләсәккә тоташтырыусы рухи сылбырҙың бер быуыны булараҡ кәүҙәләнеш ала:

Үткән менән киләсәкте тоташтырып
Йәшәп киләм, рухым минең — алтын күпер...

Шул уҡ ваҡытта уның лирик геройы уҙғандарҙы идеаллаштырыусы, ундағы ямандан яҡшыны айыра белмәгән зат түгел.

Ҡара уйҙар, ҡара ниәт, ҡара маҡсат
Йәшеренеп, минең аша үтә алмаҫ, —

ти ул шул уҡ шиғырында. Ерҙә сафлыҡ, хәҡиҡәт һәм дөрөҫлөк өсөн көрәштә йәнен фиҙа ҡылырға әҙер торған шағирҙың һөйөүе һәм нәфрәте лә илдең оло яҙмышы, коммунистик идеалдарҙың тантанаһы өсөн фиҙаҡәр көрәш идеяларынан үҫеп сыҡҡанлығы күренә:

Уйҙарыма һис тә тынғы бирмәй
Был донъяның оло яҙмышы.

*«Һөйөүем һәм нәфрәтем»*

Кешенең кешелеклеге, рухи һаулығы һәм әхлаҡ-этик камиллығы өсөн көрәш кеүек бер ваҡытта ла үҙенең үткерлеген һәм әһәмиәтен юғалтмаған мәңгелек проблемалар тураһында уйланыу шулай уҡ уның ижадының үҙәк идея-эстетик концепцияларының береһе булып тора. Өйөрөнә алдан юл башлап осҡан батыр ҡош тураһында яҙамы («Батыр ҡош») йәки тау-таштар араһынан үҙенә юл ярыусы шишмә хаҡында йырлаймы («Шишмә»), иң элек халыҡ эше өсөн үҙен аямаған кешеләрҙе күҙ уңында тота. Был мөһим идея-эстетик концепция «Кеше тураһында уйланыуҙар», «Материя, эйе, мәңгелек ул», «Исемем», «Еңелеү һәм еңеү» һ.б. шиғырҙарында кеше һәм гражданлыҡ тойғоһо, үҙенең тормоштағы урыны тураһында уйланыуҙары формаһында сағылһа, «Өндәшмәү», «Беҙ бәләкәй кеше», «Осрашыу» кеүек әҫәрҙәрендә рухи ярлылыҡты һәм мещанлыҡ индивидуализмын фашлау аша асыла. Ш.Бикҡоловтың күпселек шиғырҙары бәхәскә, аныҡ гражданлыҡ позицияһын, социалистик гуманизм һәм коммунистик принципиаллекте яҡлауға һәм раҫлауға ҡоролған. Ул үҙенең поэзияһы менән уҡыусыны активлыҡҡа өндәй.

Ижадында шаҡтай урын алып торған сатирик шиғырҙарында ла автор битарафлыҡ, бюрократизм, минминлек һ.б. шундай кәмселектәрҙе актив гражданлыҡ позицияһынан тороп ҡамсылай.

Шакир Бикҡолов ижадының тағы бер мөһим яғы шунда: уның поэзияһы Башҡортостан, уның һоҡландырғыс тәбиғәте, кешеләре, башҡорт халҡының уҙғаны һәм бөгөнгөһө менән бәйле. Ул үҙенең байтаҡ шиғырҙарында милли ғорурлыҡ тойғоһо менән халыҡтар дуҫлығы темаһын тығыҙ берҙәмлектә яҡтыртырға ынтыла.

«Ағиҙел» шиғырында, башҡорт халҡының күп милләтле совет халҡының берҙәм ғаиләһендә үҙ милли йөҙөн һаҡлап, рухи камиллыҡҡа өлгәшеүен, дөйөм совет халҡы тигән ҙур төшөнсәнең органик бер өлөшөнә әүерелеүен ҙур йылғаларға ҡеүәт биреүсе Ағиҙел образында кәүҙәләндерә. «Белеш», «Бер бөртөк шырпы» шиғырҙарында һәм «Һалдат мөхәббәте» поэмаһында иһә башҡорт халҡының рус халҡы менән быуаттар буйы нығына килгән дуҫлығы тормошсан ваҡиғаларҙа конкрет сағылыш ала.

«Япраҡтар шауы», «Һиңә әйтер һүҙем» тигән һуңғы йылдарҙа баҫылып сыҡҡан китаптарынан асыҡ күренеүенсә, Ш.Бикҡолов тәбиғәт һәм мөхәббәт лирикаһы өлкәһендә лә уңышлы ижад итә. Шағир туҡтауһыҙ үҙгәреп торған тәбиғәткә, уның төрлө мәлдәренә һиҙгер. Яҙғы яңырыу, көҙгө моңһоулыҡ, хуш еҫле йәй, буранлы ҡыш — быларҙың бөтәһен дә үҙ итә, һәр миҙгел уның күңеленә үҙ төҫөн, үҙ моңон һеңдергән.

Мөхәббәт лирикаһына килгәндә, тәүге йыйынтыҡтарына ингән шиғырҙарында йәштәрсә шаянлыҡ, шуҡлыҡ өҫтөнлөк алһа, һуңғы йылдарҙағы шиғырҙарына тойғолар драматизмы хас.

Рус һәм донъя классик поэзияһы менән яҡындан таныш, киң мәғлүмәтле шағирҙың заман айышы һәм кешенең тормоштағы урыны тураһындағы философик лирикаһы ла фекер яғынан тәрәнәйә, хис-тойғолары тәбиғиләнә барғанлығы күренә: «Япраҡтар шауы» тигән китабының бер бүлеген «Матурлыҡ һәм батырлыҡ» тип юҡҡа ғына атамаған. Был уның эстетик идеалы, актив гражданлыҡ позицияһы менән тығыҙ бәйле, сөнки кеше күңеленең матурлығын, рухи ҡаһарманлыҡты данлау уның дөйөм ижадына хас күренеш. Шағир был бөйөк төшөнсәләргә поэзияһы менән дә, булмышы менән дә тоғро булып ҡала. Әлбиттә, был әле уның ижадында бөтәһе лә ал да гөл тигән һүҙ түгел. Үҙенең күп һанлы мәҡәләләрендә һәм рецензияларында поэтик һүҙгә талапсан авторға артабан үҙ поэзияһының аһәңлеге, айырым шиғырҙарында күҙгә ташланған яланғас риториканан ҡотолоу тураһында етди уйланаһы урындар ҙа юҡ түгел. Шуныһы ҡыуаныслы: һуңғы йыйынтыҡтарынан күренеүенсә, шағир туҡтауһыҙ үҫеш кисерә, тура мәғәнәле публицистиканан «тел төбө» менән

яҙылған шиғырҙарға, кинәйәлеккә күсә барыуы быға асыҡ миҫал булып тора.

Шакир Биҡколов — башҡорт совет балалар поэзияһын үҫтереүгә һиҙелерлек өлөш индергән шағирҙарҙың береһе. Уның «Көмөш тауыштар» (1967), «Ҡыҙыл ҡар яуғас» (1974) тигән китаптарын кескәй уҡыусылар һәм әҙәби йәмәғәтселек йылы ҡабул итте. Балалар өсөн яҙылған шиғырҙары тупланған «Разноцветный ветер» тигән китабы, Мәскәүҙә «Детская литература» нәшриәтендә рус телендә баҫылып сығып, үҙәк матбуғатта һәйбәт баһа алды. Был тәбиғи, сөнки Ш.Биҡколов балалар поэзияһына тотонор алдынан халҡыбыҙҙың ауыҙтел ижадын яҡшы өйрәнеү менән бергә, К.Чуковский, С.Маршак, С.Михалков, П.Воронько кеүек балалар поэзияһының классиктары әҫәрҙәрен башҡорт теленә уңышлы тәржемә итте. Тап бына шуға ла уның балалар өсөн яҙылған шиғырҙарында ҙур һәм бай ике традицияның көслө йоғонтоһо, синтезланыуы күҙгә ташлана.

Үҙенең илле йәшлеген Шакир Биҡколов ижады яңы офоҡтарға күтәрелә барған бер мәлендә ҡаршылай. Уға яңы поэтик үрҙәр яулау юлында илһам һәм һаулыҡ-сәләмәтлек юлдаш булһын.

*1982 йыл*

## Йомарт күңелле әҙип

Башҡорт совет һүҙ сәнғәтенең, айырата балалар әҙәбиәтенең үҫешенә ҙур өлөш индергән танылған яҙыусыбыҙ Рәйес Ғабдрахманов әҙәбиәткә ҙур тормош тәжрибәһе туплап, байтаҡ йылдар ижади эҙләнеүҙәр юлы үтеп, аяҡ баҫҡан талантлы әҙиптәрҙең береһе.

Октябрь революцияһы еңеп, Башҡортостанда Граждандар һуғышы ҡыҙа барған бер осорҙа донъяға килгән яҙыусының бала һәм үҫмер йылдары илебеҙҙәге киҫкен үҙгәрештәр, тормоштоң һәр өлкәһендә барған революцион яңырыу дәүеренә тап килә. Илебеҙ тормошондағы ошо яңырыуҙы, яңының көсөргәнешле көрәш шарттарында тыуыуын буласаҡ яҙыусыға үҙ күҙҙәре менән күреп, үҙ йөрәге аша үткәрергә тура килә.

«Мин был ерҙә, — ти яҙыусы, үҙенең туған яҡтары хаҡында һөйләгәндә, — бер тапҡыр ғына түгел, ә өс

тапҡыр тыуҙым. Бында мине беренсе тапҡыр әсәм донъяға килтерҙе. Икенсе тапҡыр мин бында уҡытыусы, журналист булып хеҙмәт юлымды башланым, тәү ҡабат хеҙмәт шатлығын татыным. Өсөнсө тапҡыр мин бында яҙыусы булып тыуҙым. Ошо Сәрмәсән буйҙарының яғымлы тәбиғәте, ер-һыуы, унда булып үткән шаулы тарихи ваҡиғалар һәм уның ауыр, ҡатмарлы яҙмышлы кешеләре тураһында уйланыуҙар мине яҙыусы итте».

Эйе, Туҡай, Ғафури шиғырҙарына мөкиббән китеп, уларҙы яттан һөйләп йөрөгән зирәк уҡыусы туған ауылы Күсәрбай мәктәбендә уҡып йөрөгән йылдарында уҡ тәүге әҫәрҙәрен ижад итә.

1935 йылда, Өфөгә килеп, рабфакҡа уҡырға ингәс, уның әҙәбиәткә мөхәббәте тағы ла көсәйә, бында уҡыған йылдарында тәүге шиғырҙары донъя күрә. Рабфакты тамамлап тыуған яҡтарында уҡытыусы, унан һуң республика газеталарында әҙәби сотрудник булып эшләгән йылдарында Рәйес Ғабдрахманов әҙәбиәт менән етди шөғөлләнә башлай.

Әммә Бөйөк Ватан һуғышы башланып киткәс, Рәйес Ғабдрахмановҡа, хеҙмәт армияһы сафына баҫып, ауыр шарттарҙа оборона промышленносында эшләргә һәм байтаҡ йылдар актив әҙәби ижадтан айырылып торорға тура килә.

Һуғыштан һуң Рәйес Ғабдрахманов «Ҡыҙыл таң» газетаһында эшләй, газетаның көндәлек талаптарынан сығып, көнүҙәк темаларға мәҡәләләр, очерктар яҙа. Очерк өлкәһендә байтаҡ тәжрибә туплағас, үҙенең һәләтен хикәйә жанрында һынап ҡарамаҡсы була. Шулай итеп, 1951 йылда уның «Яңы билдәләр» тигән тәүге китабы донъя күрә. Әҙәби йәмәғәтселек тарафынан йылы ҡаршыланған был китаптағы тәүге хикәйәләрҙән үк яҙыусының артабанғы ижадында үҫеш аласаҡ идея-эстетик концепциялар тоҫмаллана башлай.

Кешенең кәмселектәренә баҫым яһап, уны ҡабартып йәки ҡурҡытып тәрбиәләп булмай. Кешене дөрөҫ юлға баҫтырыу өсөн ундағы кешелеклек сифаттарын уятырҙай тәьҫир итеү сараларын таба белергә, ямանлыҡты яҡшылыҡ миҫалында тәрбиәләргә кәрәк. Яҙыусының «Яңы билдәләр» хикәйәһендә тоҫмалланған был педагогик ҡарашы артабан ижадының гуманистик асы-

лын билдәләүсе төп концепцияларының береһенә әйләнә.

Үҙенең был ҡарашын Рәйес Ғабдрахманов балалар өсөн яҙылған хикәйәләрендә, «Өс аҙымдан — Камчатка», «Көрәнкәй», «Йәйләүҙә» һәм ололарға тәғәйенләнгән «Ҡаңғылдашып ҡаҙҙар киткәндә» повестарында эҙмә-эҙлекле үҫтерә һәм байыта бара.

Рәйес Ғабдрахманов, илленсе йылдарҙың урталарынан алып бөгөнгәсә, беҙҙең балалар әҙәбиәтендә иң актив эшләп килгән яҙыусыларҙың береһе. Шуға күрә уны хаҡлы рәүештә балалар яҙыусыһы тип йөрөтәләр.

Шул уҡ ваҡытта, бай тормош тәжрибәһе туплаған, тормошто, кешеләрҙең рухи донъяһын һәм психологияһын яҡшы белгән яҙыусы ололар өсөн яҙылған «Ҡаңғылдашып ҡаҙҙар киткәндә», «Мөхәббәтте йөрәк йөрөтә», «Төш алдынан» тигән уңышлы повестары һәм үҙәккә әхлаҡ-этик тәрбиә мәсьәләләре ҡуйылып, стиль һәм алымдар төрлөлөгө яғынан айырылып торған хикәйәләре менән уҡыусыларҙың тәрән ихтирамын яуланы.

Рәйес Ғабдрахмановтың дөйөм ижадына сюжет көсөргәнешлеге, ваҡиғалар һәм кисерештәр драматизмы хас. Үҙәккә әхлаҡ тәрбиәһе мәсьәләләрен ҡуйыу сәбәпле, яҙыусы үҙ персонаждарын ҙур тормош һынауҙары аша үткәрергә ярата, уларҙың алдына яңынан-яңы ҡаршылыҡтар ҡуйып, шул ҡаршылыҡтар менән көрәштә үҙ геройҙарының ихтыяр көсөн сынҡтыра, шул рәүешле, ул кешелә быға тиклем йәшеренеп ятҡан кешелеклек сифаттарын асырға тырыша. Шуға күрә ул ижад иткән образдар араһында беҙ художестволы асыш юғарылығына күтәрелгән, ҡабатланмаҫ типтар менән осрашабыҙ.

«Ҡаңғылдашып ҡаҙҙар киткәндә» повесындағы Сәүәних образы быға асыҡ миҫал. Ул ун өс йәшендә етем ҡалып, баҙарҙа ит сабыусы булып эшләүсе Хөснулла бабаһының ҡомһоҙлоғо арҡаһында төрмәгә эләгеп, тамам юлдан яҙа, енәйәт өҫтөнә енәйәт эшләп, ярты ғүмерен тотҡонлоҡта уҙғара, ҡурҡыныс рецидивисҡа әйләнә. Повеста ошондай юлдан яҙған кешеләрҙе ҡайтанан тәрбиәләү кеүек ауыр һәм етди проблема күтәрелә. Яҙыусы был осраҡта, кеше ниндәй генә түбәнлектәргә төшмәһен, унда кешелеклек саткылары һүнеп бөтмәй, аҙғындың кешелек тойғоларын уятыу өсөн уға кешеләрсә мөнәсәбәт кәрәк, тигән ҡараштан сығып эш итә.

Милиция начальнигы Вахитов, склад мөдире Айтуғанов кеүек кеше яҙмышы тураһында ихлас күңелдән ҡайғыртыусы коммунистар булмаһа, бәлки Сәүәнихты тормош төпкөлөнән тартып сығарыу мөмкин дә булмаҫ ине. Повеста Вахитов, Айтуғанов һәм ябай ҡатындар Венера менән Зәйтүнәләрҙең Сәүәнихтың яҙмышы өсөн көрәше беҙҙең социалистик ысынбарлыҡтың кешегә ҡарата ни дәрәжәлә иғтибарлы булыуын асыҡ кәүҙәләндерә. Тап бына ошо яғы менән был повесть үткер социаль яңғырашлы әҫәр булды, киң ҡатлам уҡыусыларҙың күңелен яуланы.

Рәйес Ғабдрахманов күпселек хикәйә һәм повестарында тормош тарафынан бер аҙ ҡыйырһытылған, күңелдәре кителгән, бәхетһеҙлеккә осраған кешеләрҙең яҙмышын һүрәтләргә, шундай кешеләрҙең күңелендәге күҙгә бәрелеп тормаған матурлыҡты асырға, уларҙың рухи ныҡлығын, йә булмаһа, рухи һауығыуын күрһәтергә ярата.

Ошо йәһәттән «Түш алдынан» повесындағы, ҡатмарлы тормош һынауҙары үтергә мәжбүр булып та, ауыр шарттарҙа үҙенең намыҫын һәм кешелеген һаҡлап ҡала алған Аҫылғужа Байрамғолов образы ҙур иғтибарға лайыҡ. Ошо образ менән автор намыҫлы, үҙ илен һәм халҡын яратҡан кеше ниндәй генә шарттарға тарымаһын, ысын кеше булып ҡала ала тигән ҙур фекерҙе ҡеүәтләне. Был әҫәр шулай уҡ намыҫ һәм выждан мәсьәләһенең яңыса ҡуйылышы, хәл ителеше менән алтмышынсы йылдар прозаһында үҙе бер күренеш булды.

Рәйес Ғабдрахманов ижадында мәңгелек темаларҙың береһе — мөхәббәт темаһы ла үҙенсәлекле яҡтыртылыуы менән айырылып тора. Яҙыусы киң ҡатлам уҡыусылар араһында ҡайнар отклик уятҡан «Мөхәббәтте йөрәк йөрөтә» повесында, «Студент ялға ҡайтты», «Күҙ ҡараһы» һәм башҡа хикәйәләрендә ҙур тормош һынауҙарын еңеп сыҡҡан мөхәббәт кенә ысын мөхәббәт, һөйөүҙең ғазаптарын күтәрә алмаған кеше ысын мөхәббәткә лайыҡ түгел, тигән фекерҙе үткәрҙе.

Яҙыусының дөйөм ижадына тормошсанлыҡ һәм халыҡсанлыҡ хас. Ул айырата ауыл халҡының тормошон, ауыл кешеләренең психологияһын яҡшы белә. Уның күҙәтеүсәнлеге, тормоштағы типик күренештәрҙе оҫта тотоп ала белеүе сатирик һәм юмористик әҫәрҙәрендә

лә ярылып ята. Иң мөһиме — яҙыусы үҙенең сатирик әҫәрҙәре өсөн тормоштағы, кешеләрҙең холоҡ-ҡылыҡтарындағы типик күренештәрҙе оҫта тотоп ала һәм был етешһеҙлектәрҙе асыуҙа төрлө алымдар ҡулланып, тормошсан итеп фашлауға өлгәшә ала. Яҙыусының «Һуҡыр эсәк», «Бригадир ҡатыны», «Әсҡәпъямал мажаралары», «Ярыҡ барабан», «Урланған йән» һәм башҡа сатирик әҫәрҙәрендәге кәүҙәләнгән персонаждар художестволы дөйөмләштереү йәһәтенән сатирик тип юғарылығында булыуҙары менән уңышлылар. Рәйес Ғабдрахманов был тәңгәлдә бөгөнгө әҙәбиәттә Сәғит Агиш, Сәләх Кулибай традицияларын уңышлы дауам итә.

Әйтеп үтеүебеҙсә, Рәйес Ғабдрахманов ижадының күпселек өлөшө балалар әҙәбиәтенә ҡарай. Уның балалар өсөн яҙылған әҫәрҙәре лә тематик яҡтан киңлеге, художество алымдарының төрлөлөктәре менән айырылып торалар. Йәш уҡыусылар әгәр, «Биш батырҙың алты ейәне» повесын уҡып, коммунистарҙың революцион эшмәкәрлектәренең шаңдауы менән танышһа, «Яҙғы рашҡы» повесынан, «Ҡыҙыл разведчик» һәм «Арғымаҡ» хикәйәләренән Башҡортостандағы Граждандар һуғышы ваҡиғаларын төҫмөрләй ала. Автобиографик характерҙағы «Тәүге ҡыңғырау» повесында егерменсе йылдарҙа ауылда совет власын нығытыу, иҫкелеккә ҡаршы киҫкен көрәш шарттарында тәүге совет мәктәптәрен нигеҙләү кеүек ваҡиғалар кәүҙәләнеш алһа, «Алыш», «Көрәнкәй» әҫәрҙәрендә коллективлашыу темаһы колоритлы сағылыш ала.

Был повестарҙа балаларҙың тормошо ололарҙың эш-ҡылыҡтарынан айырылғыһыҙ рәүештә киҫкен синфи көрәш шарттарында күрһәтелә. Кескәй геройҙар илдәге ҙур ваҡиғалар эсендә ҡайнап йәшәйҙәр. Улар яңылыҡҡа ынтылыуҙары, халыҡ эше өсөн фиҙаҡәрлектәре менән айырылып торалар. «Алыш» повесындағы Барый, «Яҙғы рашҡы»лағы Ғибаҙулла халыҡ бәхете өсөн көрәшеүселәрҙең сафына баҫалар. Киҫкен синфи көрәштә батырҙарса һәләк булып ҡалһалар ҙа, уларҙың һәләкәте бөгөнгө балаларҙа ҡыҙғаныу тойғоһо ғына түгел, ә бәхетле тормош өсөн ҡорбан булған шундай ҡаһармандарға оло ихтирам, ғорурлыҡ та уята.

Яҙыусының күпселек әҫәрҙәре бөгөнгө балалар тормошон һүрәтләүгә арналған, уларҙа әхлаҡ-тәрбиә мәсьәләләре ҡуйыла. Һәр бер тиҫтерҙең психологияһын

яҡшы белгән әҙип урта йәштәрҙәге балаларҙа йыш осрай торған маҡтансылыҡ, көнсөллөк, эгоизм кеүек алама ғәҙәттәрҙе еңелсә шелтәләп, балаларҙа киң күңеллелек, иптәшлек, коллективизм тойғоларын тәрбиәләүҙе маҡсат итеп ҡуя. «Ал тышлы дәфтәр», «Саңғыла» кеүек тәүге хикәйәләренән алып һуңғы йылдарҙа ижад ителгәндәренә тиклем балаларҙы ыңғай герой миҫалында тәрбиәләү принцибынан сығып эш итә. Шуныһы мөһим, Рәйес Ғабдрахманов үҙенең хикәйәләрендә, ҡоро өгөт-нәсихәтселеккә бирелмәйенсә, балаларҙың насар ғәҙәттәрен йәки ҡылған хаталарын тормоштоң үҙе тарафынан оҫта итеп фашлатыу юлдарын һайлай. Был алым әҫәрҙең балаларға тәьҫир итеү көсөн бермә-бер арттыра.

Рәйес Ғабдрахманов — балаларҙы ҡыҙыҡһындырырҙай, уларҙың романтик ынтылыштарына ҡанат ҡуйырҙай мажаралы әҫәрҙәр ижад итеүҙә лә танылған һүҙ оҫтаһы. Яҙыусы самаһыҙ шаштырыуҙар, ысынбарлыҡта булмаған уйҙырмалар менән мауыҡмай, мажараларҙың тормошсанлығына ирешергә тырыша. Балалар араһында киң популярлыҡ ҡаҙанған «Мажаралы юл», «Аҡсарлаҡ», «Өс аҙымдан — Камчатка» тигән повестары бына шундайҙар.

Уның йәш геройҙары иң элек үҙҙәре алдына билдәле бер маҡсат ҡуя. Ошо маҡсатҡа ирешеү юлында персонаждар араһында фекер ҡаршылыҡтары, конфликттар килеп тыуа, асыҡ маҡсатҡа берҙәм ынтылыш балаларҙа берҙәмлек тойғоһо тәрбиәләй, уларҙың характерҙарындағы ыңғай сифаттарҙы нығытыуға булышлыҡ итә. Өлкән геройҙары ла балаларға өгөт-нәсихәт биреүсе йәки автор ихтыярын кәүҙәләндереүсе шартлы образ ғына түгел. Уларҙың характерҙары, эш-ҡылыҡтары тормоштағыса тәбиғи кәүҙәләндерелә. Бына «Көрәнкәй» повесындағы урта хәлле крәҫтиән Мөхәммәт ағай образын ғына алып ҡарайыҡ. Ул совет власы йылдарында ғына ер алып, мал-тыуар үрсетеп әҙәм рәтенә инген һәм үҙенең шул хәлен нығытыу өсөн мөкиббән киткән крәҫтиән. Колхозға инеү тураһында ул уйлап та ҡарамай, бер атты ике итеп, бер йәпле һабанды ике төрәнлегә әйләндереп байыу, күршеһе Ғәбкәбирҙең танауына сиртеү тураһында ғына уйлай. Әммә ул нисек кенә яңғыҙаҡ тормошон алға ебәрергә тырышып ҡарамаһын, бөтәһе лә ул уйлағанса барып сыҡ-

май. Тормош үҙенекен итә: яңғыҙаҡ хужалыҡтың ауыр йөгөн тартып ҡаңғырған Мөхәммәт ағай, күҙ терәп торған һуңғы аты Көрәнкәй ҙә ятып үлгәс, колхозға инергә мәжбүр була. Был повесында Рәйес Ғабдрахманов урта хәлле крәҫтиәндең колхозға инеү темаһына үҙенсә яҡын килгән. Повеста Мөхәммәт ағайға бер кем дә баҫым яһамай һәм уны колхозға инергә артыҡ ҡыҫтаусы ла юҡ. Әммә Мөхәммәткә күмәк хужалыҡтың яңғыҙаҡ хужалыҡтан өҫтөнлөгөн тормош үҙе күрһәтә. Шул рәүешле, яҙыусы социаль-экономик шарттарҙың яңырыуы крәҫтиән психологияһындағы ваҡ буржуаз иллюзияларға ни дәрәжәлә көслө удар яһауын һәм уны һынылышҡа килтереүен ҙур оҫталыҡ менән көүҙәләндереүгә өлгәшкән.

Әҫәрҙә, ҡолон ваҡытынан алып егәрлек ат булып еткәнсе, дуҫ малайҙар Рәзиф менән Фәтхиҙең күҙ алдында үҫкән Көрәнкәй образы бирелә. Был образ ололар менән балалар донъяһын тығыҙ бәйләп тороуы менән дә, яңғыҙаҡ хужалыҡта хәлдән тайған Мөхәммәт ағайҙың образын тулыландырыуы яғынан да уңышлы образ. Һыу һөлөгө кеүек Көрәнкәйҙең тай ваҡытынан алып баҫа егелеүе, яңғыҙаҡ хужалыҡтың ауыр йөгөн тартып, янып үлеүе, Мөхәммәт ағай тотҡан юлдың киләсәге сикләнгән булыуын образлы кәүҙәләндерә, әҫәрҙең художестволы дөйөмләштереү көсөн бермә-бер арттыра. Шуға ла яҙыусының бындай әҫәрҙәре балаларҙы ғына түгел, ололарҙы ла берҙәй зауыҡландыра, сөнки уларҙа тормош үҙенең бөтә тулылығында һәм ҡатмарлылығында күҙ алдына баҫтырыла.

Балалар әҙәбиәте ололар әҙәбиәтенән йәш үҙенсәлектәрен иҫәптә тотоу менән генә айырылмай. Балалар яҙыусыһы, оҫта художник булыу менән бергә, аҡыллы һәм түҙемле педагог та булырға тейеш. Рәйес Ғабдрахманов бына ошо ике һәйбәт сифатты бер үҙендә туплаған яҙыусыларҙың береһе.

Ул тәрбиә эшенә төрлө яҡлап яҡын килеп, балалар өсөн яҙған әҫәрҙәрендә, заман ағышын һиҙгер тойоп, дөйөм тәрбиә эшенә етди йоғонто яһарҙай мөһим проблемалар күтәргән яҙыусы. Уның мәктәп һәм ғаилә, уҡытыусылар һәм ата-әсәләр мөнәсәбәтенә, пионер, комсомол ойошмалары тормошона арналған әҫәрҙәре балалар араһында ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уҡыла. «Киләсәк—1» экипажы», «Аҡ томандар артында», «Тал бө-

рөһө», «Тәүге буран», «Йәйләүҙә» повестарында яҙыусы бөгөнгө тәрбиә мәсьәләләренә етди үтеп инеп, «ауыр холоҡло» балаларҙы тәрбиәләү, уларҙы насар йоғонтоларҙан аралау, балаларҙа туған тәбиғәткә мөхәббәт, ата-бабаларҙың данлы традицияларына тоғролоҡ, совет патриотизмы һәм интернациональ дуҫлыҡ тойғоларын тәрбиәләү кеүек проблемалар күтәреп сыҡты.

Р.Ғабдрахманов ижады тематик яҡтан төрлө булған кеүек, яҙыусы сюжет һәм композиция ҡороуҙа ла төрлө художество алымдары ҡуллана. Уның повестары һәм хикәйәләре араһында «Тал бөрөһө», «Көрәнкәй», «Алыш» кеүек фабулаға ҡоролғандары ла, «Ҡаңғылдашып ҡаҙҙар киткәндә», «Төш алдынан», «Мөхәббәтте йөрәк йөрөтә» кеүек юлъяҙмалар, хәтерләүҙәр һәм очеркка тартым алымдарҙы ҡулланып, ҡатмарлы сюжетҡа ҡоролғандары ла бар.

«Аҡсарлаҡ», «Биш батырҙың алты ейәне» повестарында автор бөгөнгө менән Граждандар һуғышы һәм революцияға тиклемге ваҡиғаларҙың шаңдауын оҫта итеп үреп хикәйәләү алымына ирешкән. Балаларҙың теге йәки был маҡсат менән сәйәхәткә сығыуы («Мажаралы юл», «Өс аҙымдан — Камчатка»), ниндәйҙер мөһим эште башҡарыу өсөн команда йәки экипаж ойоштороуҙары яҙыусының ятаҡан алымдарынан һанала. Шул уҡ ваҡытта Р.Ғабдрахмановтың ҡайһы бер табыштары, уңышлы алымдары менән артыҡ мауығып киткән һәм үҙен-үҙе ҡабатлай башлаған осраҡтары ла юҡ түгел. Яҙыусының ижад практикаһында осраған бындай етешһеҙлектәр тураһында әҙәби тәнҡиттә етди һүҙ әйтеүселәр ҙә булманы түгел. Бындай урынлы тәнҡит һүҙҙәренә ул иғтибарһыҙ ҡалманы. Яҙыусы һуңғы йылдарҙа ижад ителгән әҫәрҙәрендә балалар тормошон тәбиғи шарттарҙа һүрәтләү, сюжеттың һәм конфликттарҙың тормошсанлығын, художестволылығын көсәйтеү өлкәһендә уңышлы аҙымдар яһаны. Етмешенсе йылдарҙа ижад ителгән «Тәүге буран», «Йәйләүҙә», «Яҙғы рашҡы» әҫәрҙәре быға асыҡ миҫал булып тора.

1978 йылда республикабыҙҙың йәмәғәтселеге яҙыусының 60 йәшлеҡ юбилейын киң билдәләп үтте. Ошо уңай менән уға республикабыҙ хөкүмәте «Башҡортостандың атҡаҙанған культура работнигы» тигән почетлы исем бирҙе. Яҙыусы был маҡтаулы исемде әҙәбиәткә 40 йылдан ашыу фиҙаҡәр хеҙмәте менән яулап алды.

Ул ошо ҡырҡ йыллыҡ ижад ғүмере эсендә ике тиҫтәләп повесть, йөҙләгән хикәйә, пьесалар, әкиәттәр, очерктар, фельетондар ижад итте. Быныӊ өҫтәүенә, оҙаҡ йылдар буйы «Һәнәк» журналыныӊ бүлек мөдире булып эшләү дәүерендә үткер ҡәләмле йәш журналистар әҙерләүгә даими иғтибар бирҙе. Иӊ мөһиме — Р.Ғабдрахманов балалар әҙәбиәтен үҫтереүгә ҙур өлөш индереү менән бергә балалар әҙәбиәтенә аяҡ баҫыусы йәш яҙыусыларҙы тәрбиәләү эшенә яҡындан ҡатнаша. Хәҙерге балалар прозаһында эшләүсе йәш яҙыусыларҙыӊ байтағы уныӊ кәӊәшенә генә түгел, бай ижад тәжрибәһенә лә таяна.

*1978 йыл*

## Ижади өлгөрөү юлында

Әҙәби тәнҡит әҙәбиәт ғилеменеӊ оператив төрө. Ул осорҙоӊ әҙәби процесын яҡтыртып, әҙәбиәттәге уӊышлы яҡтарҙы барлап, етешһеҙлектәрен күрһәтеп дөйөм әҙәби тормошҡа актив йоғонто яһай.

КПСС Үҙәк Комитетыныӊ әҙәби-художестволы тәнҡите тураһындағы ҡарарынан һуӊ, әҙәбиәт ғилеменеӊ был төрө тағы ла йәнләнә төштө. Әҙәби тәнҡит художестволы әҙәбиәттеӊ партиялылығы, халыҡсанлығы, әҙәби оҫталыҡ мәсьәләләренә иғтибарҙы көсәйтеү менән бергә, совет халҡыныӊ ижтимағи фекере үҫешенә ыӊғай йоғонто яһап, уҡыусыларҙа юғары эстетик зауыҡ тәрбиәләүгә булышлыҡ итә, тормоштоӊ үҙенә лә ҡыйыуыраҡ үтеп инә башланы.

Был тарихи ҡарарҙан һуӊ башҡорт совет әҙәби тәнҡите лә һиҙелерлек йәнләнеү кисерҙе. Өлкән быуын тәнҡитселәре активлаша төштө, тәнҡиткә әҙерлекле йәш көстәр килде.

Һуӊғы йылдарҙа йәштәрҙән әҙәби тәнҡит өлкәһендә иӊ актив эшләүселәрҙән Роберт Байымов булды. Ул, яҙыусылар союзыныӊ ижади секцияларында, редколлегияларҙыӊ эшендә актив ҡатнашып, теге йәки был яҙыусыныӊ яӊы әҫәрен тейешле художество кимәленә еткереү эшенә булышлыҡ итеүе менән бергә, матбуғат биттәрендә әҙәбиәттеӊ көнүҙәк мәсьәләләренә арналған әҙәби-тәнҡит мәҡәләләре менән дә йыш сығыш яһаны.

1977 йылда Башҡортостан китап нәшриәте уның «Ижади биҙәктәр» тигән мәҡәләләр йыйынтығын баҫтырып сығарҙы. Йыйынтыҡҡа тәнҡитсенең хәҙерге әҙәби процесҡа һәм айырым яҙыусыларҙың ижадын өйрәнеүгә арналған ике тиҫтәгә яҡын әҙәби-тәнҡит мәҡәләһе тупланған. Уларҙың күпселеге үҙ ваҡытында газета һәм журнал биттәрендә баҫылып сыҡҡайны. Әммә автор уларҙың байтағын яңынан ҡарап сыҡҡан, яңы факттар, ҡыҙыҡлы күҙәтеүҙәр менән байытҡан.

Йыйынтыҡҡа тупланған мәҡәләләрҙең күпселеге бөгөнгө прозаның үҫешен күҙәтеүгә арналған. Әйтергә кәрәк, йыйынтыҡтағы мәҡәләләр күләмдәре, яҙылыу оҫталыҡтары, ҡуйылған проблемалары менән төрлөләр. Әммә ошо төрлө характерҙағы мәҡәләләрҙә Р.Байымовтың тәнҡитсе булараҡ үҙ ижад манераһы, художестволы ижадҡа үҙ концепцияһы асыҡ күренә. Тәнҡитсе һәр әҫәрҙе ысынбарлыҡ менән тығыҙ бәйләп өйрәнеүгә ынтыла, әҫәрҙәрҙәге ваҡиғаларҙың һәм характерҙарҙың художество үҫтерелеше логикаһына етди иғтибар итеп, художестволы әҫәрҙең тормошсанлығын әҙәбиәттең төп критерийҙарының береһе итеп ҡарай.

Йыйынтыҡтағы З.Биишева ижадына арналған «Трилогия һәм тарих», Ф.Иҫәнғолов хаҡындағы «Тарихҡа тарихи ҡараш» тигән мәҡәләләр ошо яҡтары менән айырылып торалар. Был мәҡәләләрендә автор тарихи әҫәрҙәрҙә тарихилыҡ принцибының ни дәрәжәлә һаҡланыуы мәсьәләһен дә күтәргән. Был бик мөһим нәмә, сөнки уҙған замандарҙы кәүҙәләндереүгә арналған әҫәрҙәрҙә дөрөҫ тарихи атмосфераны тыуҙырыу һәм художестволы образдарҙың характерҙарын шул замандағыса асып биреү яҙыусынан талант ҡына түгел, бәлки уҙғанға тарихсы булараҡ ҡарай белеүҙе лә талап итә. Тәнҡитсе З.Биишева менән Ф.Иҫәнғоловтарҙың тарихи темаға яҙылған романдарындағы характерҙар үҫешенә тарихи ҡараштан сығып анализ яһау менән генә сикләнеп ҡалмай, бәлки был романдарҙағы тормош-көнкүреш деталдәренең тарихи дөрөҫлөгөнә лә ҙур иғтибар иткән.

Әммә бында тәнҡитсе саманан аштырыңҡырап ебәргән урындар ҙа юҡ түгел. Мәҫәлән, «Яҡтыға» трилогияһын анализлағанда 13—14 йәшлек Емештең «микробтар» һәм «микроскоп» тураһындағы төшөнсәләр менән фекер йөрөтә алыуына шикләнеп ҡарай: «Уйлаһаң,

«микроскоп», бигерәк тә «ҙур аудитория алдында лекция һөйләгән профессор» шикелле төшөнсәләрҙе «Бибисара абыстай ендәре» менән хыялланыусы 13—14 йәшлек ул заман ауыл ҡыҙы түгел, шул уҡ үҙешмәкәр уҡытыусы Иштуған үҙе белә инеме икән?» — ти. Миненсә, белеүе бик ихтимал. Сөнки XX быуат башында тәбиғәт фәндәре ҡаҙаныштарын татар телендә пропагандалауға ҙур иғтибар бирелә. Был хаҡта айырым брошюралар, журнал биттәрендә махсус мәҡәләләр баҫылып сыға. Хатта микроптар шул заман поэзияһына образ булараҡ та килеп инә. Тимәк З.Биишева үҙенең автобиографик характерҙағы әҫәренә бындай төшөнсәләрҙе индерә икән, белеп индерә тигән һүҙ. Был тик бер генә миҫал, ҡыҙғанысҡа ҡаршы яҙыусылар менән бындай урынһыҙ бәхәстәр юҡ-юҡ та осрап тора.

Йыйынтыҡҡа тупланған мәҡәләләрҙең төп үҙенсәлектәренең береһе яҙыусыларҙың ижад манераларына һәм хикәйәләү стилдәренә иғтибарҙың көслө булыуында күренә. Был йәһәттән Рәйес Низамов ижадына арналған «Ижад аты — юл саты», Н.Мусин прозаһы хаҡындағы «Һөнәр үҙенсәлеге һәм характер айышы» тигән мәҡәләләр тулылыҡтары һәм анализдарҙың ентекле булыуҙары менән айырылып торалар.

«Ижад аты — юл саты» мәҡәләһендә тәнҡитсе Р.Низамовтың ижад манераһын шаҡтай уңышлы яҡтырта. Автор быны яҙыусының, нигеҙҙә, бер-ике тема өлкәһендә эшләп, шул темаларҙы төрлө яҡлап асыуға, тәрәнәйтергә ынтылышын да күрә. Шулай уҡ Р.Низамовтың хикәйәләү стиленә поэзияға хас булған образлылыҡ һәм лиризм, кинәйәлек, фәлсәфәүи алым хас булыуын билдәләй. Бер тема тирәһендә эшләү Р.Низамов әҫәрҙәренең ҡайһы бер персонаждарында уртаҡ һыҙаттарҙы барлыҡҡа килтереүен дә күрһәтеп үтә. Быныһы инде яҙыусы файҙаһына хәл ителмәй, Р.Байымов был күренеште етди кәмселек итеп ҡарай. Әммә шуныһы мөһим — тәнҡитсе Р.Низамовтың хәҙерге ауыл тормошон кәүҙәләндереүгә арналған әҫәрҙәрен заман проблемаларына тығыҙ бәйләнештә анализлай. Яҙыусының тормошҡа актив позицияла булыуын билдәләй. Художестволы ижадтың тормошто һынландырып ҡына ҡалмай, уға актив тәьҫир итеүен һыҙыҡ өҫтөнә ала. Был, әлбиттә, күп йылдар журналист булып эшләп, байтаҡ тормош тәжрибәһе туплаған яҙыусының айырым

әҫәрҙәрендә художестволы очеркка тартым алымдарҙың булыуынан да килә торғандыр.

Н.Мусин ижадына арналған «Һөнәр үҙенсәлеге һәм характер айышы» тигән мәҡәлә проблемалы булыуы менән отошло. Бында тәнҡитсе Н.Мусин прозаһының айырым аспекттарына шаҡтай ныҡ үтеп ингән. Уның ижадына хас булған стиль үҙенсәлектәрен, характерҙар тыуҙырыу манераһын асыҡлаған. Н.Мусин әҫәрҙәренең тормошсанлығына, тәбиғилегенә баҫым яһаған. Уның ижадында мөһим урын тотҡан тәбиғәт проблемаһының айышына үтеп инергә тырышҡан. Тәбиғәт, тәнҡитсе раҫлауынса, Н.Мусин ижадында ижади проблема ғына түгел, «ижади стиль үҙенсәлеге, характерҙар биҙәге лә». Икенсе мөһим проблема Н.Мусиндың геройҙарының характерҙары үҙ һөнәрҙәренә тығыҙ мөнәсәбәттә асылыуын, һөнәр — характерға, характер — һөнәргә тығыҙ бәйле булыуын билдәләүҙә асыҡ күренә.

Йыйынтыҡтағы «Ижадтағы бер һыҙат», «Үҙенсәлекле жанр» тигән мәҡәләләр ҙә тәнҡиттән ситтәрәк ҡала килгән сатира һәм юморҙың хәҙерге үҫеш тенденцияларын асыҡлауға ынтылышы менән ҡыҙыҡлы. Уларҙа С.Кулибайҙың, А.Ғирфановтың сатирик һәм юмористик әҫәрҙәренә уңышлы анализ яһалған. Мәҡәләләрҙән күренеүенсә, С.Кулибайҙың да, А.Ғирфановтың да тормоштағы һәм кешеләр характерҙарындағы етешһеҙлектәрҙән үҙҙәренсә көлөү һәм фашлау манералары бар.

Билдәле булыуынса, был төр әҙәбиәттең жанрҙары: шиғыр, хикәйә, юмореска һәм фельетондарҙан уҙып китә алғаны юҡ ине. Сатира һәм юморҙа даими эшләүсе А.Ғирфанов, был традицияны емереүгә баҙнат итеп, «Дан туртаһы» һәм «Ут һыҙығында» тигән ике өлөштән торған повесть ижад итте. «Үҙенсәлекле жанр» тигән мәҡәләлә ошо әҫәргә ентекле анализ яһалған, А.Ғирфановтың Ибрахан кеүек бөгөнгө сатирик типтарҙы кәүҙәләндереүҙәге уңыштарын һәм ҡыйынлыҡтарын билдәләгән.

Йыйынтыҡҡа тупланған мәҡәләләрҙең дөйөм йөкмәткеһенән күренеүенсә, Р.Байымов үҙенең тәнҡит мәҡәләләрен заман талаптарынан сығып бөгөнгө тормош проблемалары менән тығыҙ бәйләргә, бөгөнгө ысынбарлыҡҡа үтеп инергә тырыша.

«Хәҙерге әҙәбиәттә ауыл темаһы» тигән мәҡәләһе, мәҫәлән, тематик күҙәтеүҙәргә генә ҡайтып ҡалмай.

Тәнҡитсе был мәҡәләһендә бөгөнгө ауылда барған социаль һәм рухи процестарға ярайһы ныҡ үтеп инеп, яҙыусыларҙың иғтибарын шуларға йүнәлтергә тырышҡан. Бында тәнҡитсе, әҙәбиәт рамкаларынан аша сығып, тормоштоң үҙе хаҡында уйлана. Был сифат уның «Әҙәбиәттә эшселәр темаһы» тигән мәҡәләһенә лә хас.

Шул уҡ ваҡытта концепциялылыҡ һәм проблемалылыҡ тейешле дәрәжәгә еткерелмәгән, дөйөм күҙәтеүҙәргә ҡайтып ҡалған мәҡәләләр ҙә юҡ түгел. «Өлгөрөү аҙымдары», «Ике роман — ике йүнәлеш», «Һуҡмаҡтар оло юлға илтә», «Ныҡышмалылыҡ» кеүек мәҡәләләрҙең, мәҫәлән, төп фекерен тотоп алыуы ҡыйыныраҡ. Әлбиттә, тәнҡит мәҡәләләрендәге проблемаларға асҡыс конкрет әҫәрҙең, айырым яҙыусы ижадының йөкмәткеһендә ята, йәғни проблемалары һай булған әҫәрҙәрҙән проблема сығарыуы ауыр. Ләкин был сәбәп тәнҡитсене аҡламай, сөнки һәйбәт зауыҡлы һәм әҙерлекле тәнҡитсе, ашыҡмайыраҡ эш иткәндә, һәр яҙыусы ижадына тейешле асҡысты таба алыр ине.

«Йылдар тыуҙырған йырҙар» тигән бүлексәлә фронтовик шағирҙар Х.Ғиләжев, Х.Кәрим, Ғ.Рамазановтарҙың ижад эволюцияһы күҙәтелә. Тәнҡитсе был күренекле шағирҙарҙың ижад йөҙҙәрен, нигеҙҙә, дөрөҫ яҡтырта. Ләкин Х.Кәрим хаҡындағы «Ғүмер юлын үтеү — тауға менеү...» тигән мәҡәләнән башҡаларында яңы ҡараш, күтәрелгән асыштар күренмәй. Өҫтәүенә, Р.Байымов «Замана тауышы» тигән Ғ.Рамазанов поэзияһы хаҡындағы мәҡәләһендә үҙен-үҙе ҡабатлай, сөнки мәҡәләнең тәүге өлөшөндә шағирҙың ижадына дөйөм характеристика бирелә лә, аҙағы «Заман еле» тигән китапҡа яҙылған рецензия менән тамамланып ҡуйыла.

Шулай уҡ йыйынтыҡтың «Ижади портреттар» бүлексәһендәге дөйөм бер етешһеҙлекте лә урап үтеп булмай. Сөнки был бүлеккә ингән З.Биишева, Ф.Иҫәнғолов, Я.Вәлиев, И.Ғиззәтуллин тураһындағы мәҡәләләрҙә был яҙыусыларҙың ижад манералары дөрөҫ тотоп алынһа ла, ижади портрет булараҡ уларға тулылыҡ етешмәй, улар фрагментар характерындараҡ яҙылғандар. Күрһәтелгән яҙыусыларҙың ижад эволюциялары ентекле һәм системалы итеп асып бирелмәгән.

Билдәләнгән кәмселектәренә ҡарамаҫтан, йыйынтыҡ Р.Байымовтың тәнҡитсе булараҡ йылдам формалашы-

уын раҫлай. Китап әҙәбиәт һөйөүселәрҙең зауҡын тәрбиәләүгә һәм дөйөм әҙәби процесты йәнләндереүгә һиҙелерлек өлөш индерәсәк.

## Шағирҙың поэтик ораны

Поэтик һүҙгә талапсан, сағыу һәм күркәм образлылыҡҡа ынтылыусы, ярһыу һәм тынғыһыҙ тәбиғәтле шағир Әсхәл Әхмәтҡужиндың «Һыбай сыҡтым» (1968) тигән тәүге китабын уҡ шиғриәт һөйөүселәр яратып ҡабул иткәйне. Шағир бынан һуң кескәйҙәр өсөн «Бәрәскәй», ололар өсөн «Бәйге» тигән шиғыр йыйынтыҡтары менән сығыш яһаны.

Әйтергә кәрәк, тәүге китабы менән үҙенә ҙур өмөт бағлатып өлгөргән шағирҙың «Бәйге» китабы әҙәби йәмәғәтселек тарафынан һалҡынлыраҡ ҡаршы алынды. Был китап хаҡында тәнҡитселәр ҙә өндәшмәй ҡалыуҙы хуп күрҙеләр. Эйе, «Бәйге»лә тәүге китаптан һуң бер аҙ күңеле бушанып ҡалған шағир үҙенең ижади эҙләнеүҙәр дәүерендә яҙылған шиғырҙарын туплағайны. Унда заман һыҙаттары ярылып ятҡан, ихлас күңелдән яҙылған шиғырҙар булған кеүек, форма өлкәһендә эҙләнеүҙәрҙең һөҙөмтәһе булараҡ килеп тыуған осраҡлы әйберҙәр ҙә юҡ түгел. Был айырата уның, ҡатмарлы образлылыҡҡа ынтылып, әйтәһе фекеренең ҡатлы-ҡатлы образдар артында тоноҡланып ҡалған бер талай шиғырҙарында асыҡ күренде. Әммә «Бәйге» китабында ла шағир ижади үҫештән туҡтап ҡалманы, әлбиттә. Уның донъяны образлы һынландырыр оҫталығы камиллаша, һүҙгә талапсанлығы үҫә барҙы. «Бәйге», «Тиҙлектәр» кеүек шиғырҙарында, хәҙерге фәнни-техник революция заманына хас булған һынылыштарҙы һиҙгер тотоп алып, замандың етеҙ ағышын, ваҡыт төшөнсәһенең «ҡыҫҡарыуын» ҙур оҫталыҡ менән сағылдырҙы. «Мәңгелек ут» одаһы Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булып ҡалған яугирҙарға ысын мәғәнәһендә поэтик һәйкәл юғарылығына күтәрелде. Шулай уҡ тормош фәлсәфәһенә нигеҙләнгән әйтештәре лә поэзияла үҙенсә яңылыҡ булды.

Бына, ниһайәт, беҙҙең алдыбыҙҙа шағирҙың «Оран» тигән яңы йыйынтығы. Был йыйынтыҡ Ә.Әхмәтҡужиндың ижады һуңғы йылдарҙа тематик яҡтан да, идея-

эстетик йөкмәткеһе йәһәтенән дә үҫә, баҙыҡлана барыуы хаҡында һөйләй. Йыйынтыҡта тупланған яңы шиғырҙарҙа авторҙың тәүге китабында уҡ билдәләнгән төп мотивтар көсәйә һәм тәрәнәйә барған кеүек, ижадында бығаса булмаған яңы мотивтар ҙа күҙгә ташлана.

Был яңылыҡ шағирҙың сираттағы йыйынтығында гражданлыҡ лирикаһының баҙыҡлана, совет патриотизмы тойғоһоноң көсәйә барыуында һәм туған халҡының уҙғанына, бөгөнгөһөнә тарихи ҡараштың нығына төшөүендә асыҡ күренә.

Халҡым — диңгеҙ, ә диңгеҙҙә
Мин зәңгәр тулҡын бары.
Мин бер тулҡын, халҡым — диңгеҙ,
Дәү диңгеҙ — өнөмдәге,
Сал тарихҡа сумған түгел —
Салт аяҙ көнөмдәге, —

ти шағир романтик күтәренкелек менән яҙылған «Диңгеҙ» шиғырында.

Йыйынтыҡтың үҙәгендә торған «Диңгеҙ» шәлкеменә ингән «Диңгеҙ», «Йөрәктау», «Салауат» шиғырҙарында туған халҡының тарихи уҙғанына, социаль һәм милли азатлыҡ өсөн көрәш яуҙарына мөрәжәғәт итеп, «Хатта донья дауҙарына башын эймәгән» халҡына дан йырлаһа һәм үҙе шул халыҡтың улы булыуы менән хаҡлы ғорурланһа, «Яҡты яҙмышым» тигән лирик поэмаһында халҡыбыҙҙы яҡты көнгә алып сыҡҡан Коммунистар партияһы үҙәктә тора. Лирик йылылыҡ һәм ихлас күңелдән яҙылған был поэмала автор, Октябрь революцияһы, Граждандар һуғышы, Совет Башҡортостанының төҙөлөүе, Ватан һуғышы кеүек мөһим тарихи ваҡиғаларҙы үҙ йөрәге аша уҙғарып, бөгөнгө бәхетле тормоштоң тантанаһы өсөн көрәштә Коммунистар партияһының етәксе ролен кәүҙәләндерергә ынтылған. Ил һәм туған халҡы яҙмышын олатаһы, Граждандар һуғышында совет власын яҡлап һуғышҡан атаһы, аҙаҡ килеп, үҙенең яҡты яҙмышы менән тығыҙ бәйләнештә һүрәтләүгә өлгәшеү поэманың социаль яңғырашын көсәйткән.

Әммә әлегә әҫәр, дөйөм башҡорт поэзияһы өлгәшкән кимәлдән сығып ҡарағанда, поэма жанрының үҫешендә һиҙелерлек уңыш, тип әйтеп булмай. Поэма — поэма булыуға ҡарағанда оҙон шиғырға тартым.

Унда коммунистар партияһына ҡарата әйтелгән: «Һин — тормошом минең, яҙым, ҡышым; һин — булмышым, айым, ҡояшым» кеүек шалтырауыҡ һүҙҙәр ҙә байтаҡ. Поэманы поэма итерҙәй художество деталдәре, конкрет тормош картиналары ла етерлек дәрәжәлә түгел. Шулай булыуына ҡарамаҫтан, шағирҙың етди социаль яңғырашлы темаға мөрәжәғәт итеүе, ижадында халыҡ тормошона тарихи ҡараштың көсәйә барыуы хуплауға лайыҡлы ыңғай күренеш, уның ижад биографияһындағы яңы аҙым икәнлеге бәхәсһеҙ.

Шағир ижадында граждандлыҡ мотивтарының көсәйә барыуы «Төнгө Урал», «Тыныслыҡ йыры», «Оран», «Хиросима таштары» киноһын ҡарағас» кеүек тормош именлеге, донъялар һиллеге тураһында тәрән борсолоу менән яҙылған шиғырҙарында айырата асыҡ сағылыш ала.

Эй, кешелек! Ас һин күҙеңде,
Сабыр булма, булма түҙемле —
Дәһшәттәрҙән һаҡла үҙеңде!
Эй, кешелек!
Ғәййәр, һиҙгер бул —
Һәр хәүефтең үҙен иҙер бул!
Һиҙгер бул! —

тип, кешелек донъяһына поэтик оран ташлаған шағир үҙ-үҙенә лә аяуһыҙ. Бөгөнгө тыныс тормоштоң тантанаһы, киләсәк быуындарҙың бәхете өсөн ул үҙ йөрәген заман һандалына һалырға ла әҙер.

Иртән миңә тормош әйтмәҫ өсөн:
«Һин йәшәнең, — тиеп, — наҙланып», —
Бөгөн бына заман һандалына
Йөрәгемде һалам баҙлатып! —

ти «Көрәш» тигән шиғырында. Тормошто өс ваҡыт үлсәмендә: уҙған-бөгөнгө-киләсәктең эҙмә-эҙлекле бәйләнешендә күҙаллау «Уҡ» шиғырында ла тәрән фәлсәфәүи планда асып бирелгән. Йыйынтыҡҡа тупланған шиғырҙарҙан күренеүенсә, Ә.Әхмәткужиндың поэтик таланты тыуған ергә һәм тыуған төйәгенә арналған шиғырҙарында, мөхәббәт һәм тәбиғәт лирикаһында тулыраҡ та, сағыуыраҡ та асылған. «Әбйәлилдең айлы ҡыштары», «Ҡайтыу», «Тыуған ҡырҙарымда», «Ҡыҙылым», «Тыуған яғым», «Таң уяна», «Һин икәнһең, ерем, ҡә-

ҙерем» шиғырҙарында шағир Урал аръяғының гүзәл тәбиғәтен, уның ҡарлы-буранлы ҡыштарын, шау сәскәле йәйҙәрен, емешле көҙҙәрен сағыу һәм яҡты образдар аша кәүҙәләндерә. Шағир был шиғырҙарында тыуған яғының тулы һынын, төҫ-биҙәктәрен бер бөтөн поэтик күренеш итеп күҙ алдына баҫтырып ҡына ҡалмай, уның шиғырҙарынан тәбиғәттәге мәңгелек хәрәкәтте лә тояһың. Образдарҙың йәнлелегенә шағир көтөлмәгәнсә сағыштырыуҙар, сағыштырылған күренештәрҙең мәғәнәүи йәки тышҡы бәйләнештәре аша ирешә.

Күктә болот ҡунһа, болоҡһомам —
Шат булырым, рәхмәт уҡырым:
Бойҙайҙарҙың быуын быуыр сағы,
Йыллыҡ түлен йыя ер-ҡырым...
Әллә шуға, мәлен белгән кеүек,
Болот ҡайта елен тирттереп, —
Көтөү-көтөү ҡайтып, ер туйғансы,
Ыуыҙ һөтөн тора һиптереп.

Шул рәүешле, шағир, болоттарҙы елен тирттереп ҡайтҡан һыйыр көтөүе, тамсыларҙы имсәктәрҙән һиптереп торған ыуыҙ һөтө менән оҫта сағыштырып, бәрәкәтле ергә ваҡытында яуған шифалы ямғырҙың ҡабатланмаҫ образын тыуҙырыуға өлгәшкән.

Ә.Әхмәтҡужиндың шиғырҙарынан уның тыуған яҡтары, берсә, ыуыҙ һөтөндәй йылы ямғырҙа һуғарылған йәм-йәшел баҫыуҙар булып күҙ алдына баҫһа, берсә, ул һөттәй аҡ томанға урала, берсә, алтын ҡояш нурҙарына мансыла. Ҡырҡты, Урал тауҙары тыуған ерҙең сал тарихының тере шаһиттары булып кәүҙәләнһә, сылтырап аҡҡан саф һыулы тау йылғалары, зәңгәр нурға сумып, тулҡынып ятҡан шаян күлдәре, яҙҙарын, ҡояш нурҙарына ҡарап, шартлап асылған бөрөләр тыуған ерҙең шиңмәҫ көс-ҡеүәтен, мәңгелек йәшәү һәләтен раҫлайҙар.

Шағир тәбиғәт менән тәбиғәт телендә һөйләшә белгән кеүек, тәбиғәтте йәнләндереүгә һәм кешеләштереүгә лә һәләтле:

Ҡырҡтытау — ҡыйғыртау —
Атымдың яурыны —
Аттан да төшөрмәй
Ҡыҫты ла түшенә,
Өндәште: «Арыумы?»

Туҙғыған сал сәстәй
Ҡаянан һыу сәсрәй...
Яулыҡҡа — йәшелгә
Шул сәсте йәшергән
Һин мәллә ул, әсәй? —

ти шағир «Ҡайтыу» шиғырында. Бында тыуған яҡтарын һағынып ҡайтып килгән лирик геройҙың күңел торошо тулыһынса кәүҙәләнеш алған. Сөнки тыуған еренең, атаһы менән әсәһенең яҡты образдары уның күңеленә, бала саҡтан уҡ, бер-береһенән айырып алғыһыҙ булып урынлашып ҡалған.

Шағирҙың ихласлығы, тыуған ергә арналған шиғырҙарындағы кеүек үк, мөхәббәт лирикаһында ла асыҡ сағыла. Уның мөхәббәт лирикаһына эскерһеҙлек һәм бер ҡатлылыҡ хас. Уның шиғырҙарында беҙ, аҡылдан шашып, күҙенә аҡ-ҡара күренмәй ғашиҡ булған лирик герой менән осрашабыҙ. Лирик геройҙың мөхәббәт тойғоларынан иҫереп, Мәжнүн хәлендә ҡалған мәлдәрен дә, «Һағыныуым етте һарғайыуға», тип өҙгөләнгән, үҙ-үҙенә торор урын тапмаған саҡтарын да күрәбеҙ.

Бар йыһанды һағыш солғап алды,
Ер менән күк һары, йәй һары...
Был донъяны тәүге шат төҫөнә
Ҡайтарыр көс —
Һиндә ни бары! —

ти шағир «Һағыныу» шиғырында. Минеңсә, был юлдарҙың аҫтына һағыныу ғазаптарын кисергән бер ғашиҡ та ҡул ҡуйыуҙан баш тартмаҫ ине. Сөнки шағир уғата шәхси кисерештәрҙе сағылдырғанда ла бөтә кешеләрҙең типик уй-тойғоларын асып биреүгә өлгәшкән. Шағирҙың йыйынтыҡҡа тупланған шиғырҙары араһында кеше һәм тәбиғәт темаһына ҡараған әҫәрҙәр ҙә байтаҡ. Уларҙың «Ямғыр яумағанда», «Ямғыр яуғанда», «Томанда», «Тәүге иртә» кеүек бер төркөмөндә автор, тәбиғәт күренештәрен рәссамдарса оҫта һүрәтләп кенә ҡалмай, тәбиғәт һәм кешенең күңел донъяһы араһындағы эске гармонияны асып бирһә, «Күңел офоҡтары» шәлкеменә тупланған «Болоттар», «Йондоҙҙар», «Бурандар» һәм «Сыуаҡтар» тигән шиғырҙарында кешенең күңел донъяһы, уның ҡанундары тураһында фәлсәфәүи фекер йөрөтә. Тик шуныһы бер аҙ күңелде ҡырып ҡуя:

«Күңел офоҡтары» шәлкемендәге шиғырҙарҙа авторҙың үҙ шәхесе, үҙ кисерештәре күренмәй:

Сөм күктәрҙең йылы сыуаҡтары
Ябай ғына серҙе аңлата:
Ал ҡояшҡа ҡуша көндәр көлә,
Аҡ ай менән бергә таң ата.

Күңелдәрҙең йырлы сыуаҡтары
Эйә бит ул бүтән ҡөҙрәткә:
Ай-ҡояш та янмай баш осонда —
Йәйғор көлөп тора йөрәктә, —

ти Ә.Әхмәтҡужин «Сыуаҡтар» шиғырында. Кемгә нисектер, әммә, минеңсә, был шиғыр уҡыусыны тулҡынландырырлыҡ хис һәм тойғоларҙан мәхрүм, сөнки автор бында һалҡын күҙәтсе, кеше күңеле менән тәбиғәт араһындағы айырманы аңлатыусы битараф бер зат булараҡ кәүҙәләнә. Шуға күрә шиғыр күңелгә лә ятмай, фәһем дә бирмәй. Ә.Әхмәтҡужиндың был шәлкемендә лә байтаҡ шиғырҙарына хас булған Көнсығыш классик шиғриәтенең йоғонтоһо һиҙелеп ҡала ҡалыуын. Ләкин был осраҡта авторҙың логик фекере йәғни фәлсәфәһе поэтик юғарылыҡҡа күтәрелеп етә алмаған.

Ә.Әхмәтҡужиндың ижадында шағир һәм халыҡ, шағирҙың тормоштағы урыны мәсьәләһенә ҡағылышлы шиғырҙар байтаҡ. Был — традицион тема. Ләкин һәр замандың шағиры уны үҙ осоро талаптарынан сығып күтәрә. Бында шағирҙың поэтик декларацияларына туҡталып тормаҫтан (ә улар етерлек!), Н.Нәжмигә арналған «Шағир» һәм «Бөркөттәр» шиғырҙарына ҡарата бер-ике ауыҙ һүҙ әйтеп китке килә. Тәүге шиғыр Н.Нәжмиҙең «Шағир һәм шаһ» тигән поэмаһы тәьҫирендә яҙылған. Был шиғырҙа Ә.Әхмәтҡужин шағирҙың тормоштағы урынын, шағир һүҙенең шаһтар данынан бөйөк, үлемһеҙ булыуын үҙенсә тағы бер ҡабат раҫлай раҫлауын. Ләкин шиғырҙағы:

Икеһен дә халыҡ тыуҙырған да
Икеһен дә данлап күтәргән,
Сәсән телле иргә, ғәҙел шаһҡа
Мөхәббәте булған киң, тәрән, —

тигән фекер менән һис тә килешеп булмай. Бында шаһтарға халыҡ ҡарашы дөрөҫ сағылмаған: халыҡ бер

ваҡытта ла шаһтарҙы данлап күтәрмәгән, сөнки тарихта бер шаһ та халыҡ мәнфәғәтен түгел, ә иҙеүсе синыф мәнфәғәтен яҡлаған. «Бөркөттәр» шиғырында автор хыял һәм рух бөйөклөгө, тормоштоң ҡанатлы романтикаһы тураһында йырламаҡсы булған. Асылда иһә материал байлыҡтарҙы тыуҙырыусы һәм донъя ҡотон үҙ ҡулында тотоусы ябай хеҙмәт халҡын, «ергә ҡарап» йәшәүселәрҙе тик «ҡояшҡа ҡарап» йәшәүсе астрономдар, космонавтар һәм... шағирҙарға ҡаршы ҡуйыу килеп сыҡҡан. «Уйнап һөйләһәң дә — уйлап һөйлә» — ти халыҡ. Был хәҡиҡәтте ҡара ерҙең ҡара икмәген ашап үҫкән шағир бер ваҡыт та иҫтән сығарырға тейеш түгел.

Әлбиттә, был күрһәтелгән етешһеҙлектәр авторҙың алабарманлығынан килеп сыҡҡан осраҡлы нәмәләр. Йыйынтыҡтың дөйөм фонында улар күҙгә бәрелеп тә тормай. Дөйөм алғанда «Оран» йыйынтығына тупланған шиғырҙар Ә.Әхмәтҡужиндың поэтик офоҡтары киңәйә барыуын раҫлай. Иң мөһиме — шағир донъяға киңерәк күҙлектән баға, уның поэзияһынан авторҙың граждансылыҡ өлгөрөүе, заман, халыҡ алдында яуаплылыҡ тойғоһо көсәйә барғанлығы күренә. Шулай ҙа, китаптың һуңғы битен япҡанда, шағир, артабан, өлгәшелгәндәр менән генә сикләнеп ҡалмай, үҙ әҫәрҙәренең тормошсанлығы, хис, тойғоларының халыҡсанлығы тураһында етдиерәк уйланһа, ижады заман талаптарына тағы ла тулыраҡ яуап бирер ине, тигән урынлы теләк тә уяна.

## Күренекле ғалим-филолог Әхнәф Харисовтың ижады һәм тормош юлы

Фән донъяһына утыҙынсы йылдарҙың аҙаҡтарында аяҡ баҫып, ҡырҡ йылдан ашыу башҡорт филологияһын үҫтереүгә хеҙмәт иткән күренекле ғалим-филолог Әхнәф Харисов күп яҡлы һәм бай ғилми мираҫ ҡалдырҙы.

Филология фәндәре өлкәһендә киң мәғлүмәтле ғалимдың ижад биографияһы башҡорт тел белеменең, фольклористикаһының, әҙәбиәт теорияһы һәм әҙәби тәнҡитенең үҫеше менән айырылғыһыҙ бәйле булды. Ғалим үҙ ижадының иң өлгөрөп еткән дәүерен халҡы-

быҙҙың Октябрь революцияһына тиклемге әҙәбиәте тарихын өйрәнеү кеүек ҡатмарлы һәм яуаплы эшкә бағышланы, был өлкәлә күтәрелмәгән сиҙәмде күтәреп, уғаса бәхәсле була килгән башҡорт халҡының яҙма әҙәби мираҫы мәсьәләһен ыңғай хәл итеүгә булышлыҡ итте, шуның менән башҡорт әҙәбиәт ғилемендәге өр-яңы этапты башлап ебәрҙе.

Әхнәф Ибраһим улы Харисов 1914 йылдың 2 июнендә Башҡортостандың хәҙерге Балтас районы Имән ауылында тыуған. Башланғыс белемде үҙ ауылында алып, артабан Балтаста крәҫтиән йәштәре мәктәбендә уҡыған. Буласаҡ ғалимдың ғилми эшкә һәләтлеге Башҡорт дәүләт педагогия институтының башҡорт теле һәм әҙәбиәте бүлегендә уҡыған саҡтарында уҡ күренә башлай. Тап бына шуға ла, 1935 йылда институтты уңышлы тамамлағас, уны шунда уҡ уҡытыусы итеп эшкә ҡалдыралар. Ул бында эшләгән йылдарында тел ғилеме менән мауығып шөғөлләнә башлай. 1937 йылда уның күренекле шағир Ҡадир Даян менән берґәләп яҙылған «Стилистика. V—VII кластар өсөн дәреслек» тигән тәүге хеҙмәте донъя күрә. Артабан дүрт тапҡыр ҡабатлап баҫылған был китап байтаҡ йылдар стилистика буйынса уҡыусылар өсөн генә түгел, бәлки студенттар өсөн дә берҙән-бер ҡулланма булып тора һәм башҡорт әҙәби телен камиллаштырыуға билдәле бер йоғонто яһай.

Ә.Харисов институтта ике йыл уҡытыусы булып эшләгәндән һуң, 1941 йылда Мәскәүҙә тел ғилеме буйынса аспирантура тамамлай һәм, башҡорттарҙан беренсе булараҡ, филология фәндәре кандидаты дәрәжәһенә диссертация яҡлай. Башҡорт телендә ҡылым төрҙәре категорияһын өйрәнеүгә арналған был диссертацияһын ул 1944 йылда рус телендә айырым китап итеп баҫтырып сығара. Башҡорт тел ғилеменең иң ҡатмарлы мәсьәләләренең береһенә арналған был хеҙмәттең төп положениелары артабан мәктәптәрҙә тотороҡло дәреслектәр төҙөүгә булышлыҡ итә.

Әхнәф Харисов фән донъяһына аяҡ баҫҡан осор башҡорт теле һәм әҙәбиәте ғилемдәре яңы формалашып килгән бер осор була. Тап бына шуға ла ул осорҙа күтәрелеп сыҡҡан башҡорт филологтары үҙҙәренең ғилми эшмәкәрлеген төрлө өлкәләрҙә һынап ҡарайҙар. Был күренеш, беренсенән, мәктәптәрҙә һәм юғары уҡыу йорттарында башҡорт теле һәм әҙәбиәте

буйынса тотороҡло дәреслектәрҙең булмауы, былдай дәреслектәргә һәм ғилми хеҙмәттәргә ихтыяждың ҙурлығы, ә милли кадрҙарҙың аҙлығы менән аңлатылһа, икенсенән, тел ғилеменә лә нигеҙҙә үҙҙәренең ижад юлын йә яҙыусы, йә тәнҡитсе булараҡ башлап ебәргән әҙәбиәтселәрҙең тотонорға мәжбүр булыуынан килеп сыҡҡан тәбиғи күренеш була. Был ижадын яҙыусы булып башлап ебәргән күренекле тюрколог Ж.Кейекбаев миҫалында ла, утыҙынсы йылдарҙың урталарында уҡ әҙәбиәт буйынса нигеҙле мәҡәләләр менән сығыш яһап та, тел ғилеменән кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлаған һәм артабан ғилми эшмәкәрлеген әҙәбиәт тарихын өйрәнеүгә арнаған Әмир Чаныш миҫалында ла асыҡ күренә. 1939 йылда уҡ «Октябрь» (хәҙерге «Ағиҙел») журналы биттәрендә «Пушкин әҫәрҙәрендә башҡорт халҡы», «Тәржемә әҫәрҙәренең теле» кеүек төплө мәҡәләләр менән сығыш яһаған Әхнәф Харисовта ла, аспирантурала тел ғилеме буйынса махсус әҙерлек үтеүенә ҡарамаҫтан, әҙәбиәт ғилеменә ынтылыш көслөрәк булып сыға. Ул артабан тел ғилеменән бөтөнләй үк ситләшмәй, әҙәби тел культураһы, орфография һ.б. тел мәсьәләләре буйынса айырым мәҡәләләр менән әленән-әле сығыш яһаһа ла, ҡырҡынсы йылдарҙың урталарынан алып унда әҙәбиәт ғилеменә ынтылыш көсәйә.

1944 йылда уның башҡорт әҙәбиәте һәм халыҡ ижады факттарына нигеҙләнеп яҙылған «Әҙәбиәт теорияһы» баҫылып сыға. 1947 йылда тулыландырып яңынан баҫылған был китап оҙаҡ йылдар буйы әҙәбиәткә килеүсе ижади йәш көстәргә төп ҡулланма булып хеҙмәт итә. Хәҙерге киң билдәле әҙәбиәтселәрҙән Ғ.Хөсәйеновтан алып, яңы «Әҙәбиәт теорияһының» авторы Ким Әхмәтйәновҡаса, әҙәбиәт теорияһы буйынса тәүге төшөнсәләрҙе Ә.Харисовтың шул китабынан алалар. «Әхнәф Харистың «Әҙәбиәт теорияһы», Ҡадир Даян менән икеһенең «Стилистика» тигән ҡулланма дәреслектәрен ҡат-ҡат уҡырға һәүәҫләндем. Асылда ошо йоҡа ғына, әммә тос йөкмәткеле, ылыҡтырғыс ике китап миңә әҙәбиәт ғилеменең тәү ишектәрен асты»[242], — ти был хаҡта Ғ.Хөсәйенов.

---

[242] Хөсәйенов Ғайса. Заман. Әҙәбиәт. Әҙип. — Өфө, 1978, 13-сө бит.

Ә.Харисов талантарға иғтибарлы, әҙәби процестың төп йүнәлештәрен һиҙгер тотоп алыусан, нескә зауыҡлы тәнҡитсе ине. Уның әҙәби тәнҡит өлкәһендәге эшмәкәрлеге айырата 1948—1951 йылдарҙа, Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының председателе булып эшләгән йылдарында активлашып китә. Был осорҙа, беренсенән, уға «Башҡорт әҙәби тәнҡитендәге антипатриотик күренештәргә ҡаршы» (1949) кеүек мәҡәләләрендә әҙәби тәнҡитте утыҙынсы йылдарҙан тороп ҡалған вульгар-социологик ҡараштарҙан һәм субъективизмдан арындырыу өсөн киҫкен көрәш алып барырға тура килһә, икенсенән, әҫәрҙәргә тематик анализ менән сикләнеүсе бер яҡлы тәнҡит мәҡәләләрен инҡар итеп, идея-эстетик анализды бергә ҡушырға, художество оҫталығы мәсьәләләрен күтәреп сығырға тура килә. Уның был йылдарҙа яҙылған «Шағирҙың тауышы» (Х.Кәрим ижады тураһында), «Сәғит Агиштың ике повесы», «Бикчәнтәй новеллалары» һ.б. мәҡәләләре тап бына ошо яғы — художество оҫталығы мәсьәләләре беренсе планға ҡуйылыуы, анализдың һығылмалы булыуҙары менән уңыш ҡаҙана. Шул уҡ ваҡытта Ә.Харисов был йылдарҙа башҡорт совет әҙәбиәтенең үҫеү юлдарын өйрәнеүгә ныҡлап тотоноп китә, «Утыҙ йыл эсендә башҡорт совет әҙәбиәте» (1949), «Башҡорт совет драматургияһының торошо һәм бурыстары» (1949) кеүек ҙур күләмле күҙәтеү мәҡәләләре менән сығыш яһай. Ғалимдың «Утыҙ йыл эсендә башҡорт совет әҙәбиәте» һәм һуңғараҡ яҙылған «Һуғыштан һуңғы осорҙа башҡорт әҙәбиәте» (1955) тигән мәҡәләләре башҡорт совет әҙәбиәтенең үҫеш тәжрибәһен йомғаҡлаусы тәүге хеҙмәт булараҡ әҙәбиәт ғилеме үҫешенә лә, йәнле әҙәби процесҡа ла ыңғай йоғонто яһай. Сөнки Ә.Харисовтың был мәҡәләләре әҙәби үҫештәге ыңғай яҡтарын һәм етешһеҙлектәрҙе дөрөҫ методологик нигеҙҙә асып биреүҙәре, әҙәби факттар заман талаптарынан сығып дөрөҫ баһаланыуҙары менән айырылып тора.

Әхнәф Харисов илленсе йылдарҙың баштарында элек үҙе эшләп киткән ғилми учреждениеға — СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына әйләнеп ҡайта. Тәүҙә өлкән ғилми сотрудник, унан һуң ун йыл буйы институт директоры булып эшләй, 1964 йылдан алып, ғүмеренең һуңғы көндәренәсә, ошо уҡ институтта ғилми эш-

тәр буйынса директор урынбаҫары вазифаһын башҡара. Ә.Харисов директор булып эшләгән йылдарҙа, институт әҙерлекле ғилми кадрҙар яғынан да, фундаменталь хеҙмәттәр барлыҡҡа килеүе йәһәтенән дә ысын мәғәнәһендә академик институтҡа әйләнә. Был йылдарҙа ғалим фәнни-ойоштороу, ғилми кадрҙар әҙерләү кеүек мөһим эштәргә етәкселек итеү менән бергә башҡорт халыҡ ижадын һәм яҙма әҙәбиәт тарихын өйрәнеү өлкәһендә ҙур ғилми тикшеренеү эштәре алып барҙы.

Башҡорт халҡының бай ауыҙ-тел ижады айырым рус ғалимдары, М.Өмөтбаев, Ф.Туйкин кеүек башҡорттар араһынан сыҡҡан ҡайһы бер кешеләр тарафынан революцияға тиклем үк йыйыла, аҙ-маҙ баҫтырылып сығарыла килһә лә, уны йыйыу һәм системалаштырыу эше Октябрҙән һуң ғына киң ҡолас алып китә. Әммә илленсе йылдарға тиклем, айырым әкиәттәр, мәҡәлдәр һ.б. йыйынтыҡтарҙы иҫәпкә алмағанда, халҡыбыҙҙың поэтик ҡомартҡыһын ентекле өйрәнеп баҫтырып сығарыу эшенә форсат теймәй килде. Ә.Харисов, бына ошо мөһим эште юлға һалып, 1954—1959 йылдарҙа «Башҡорт халыҡ ижады» тигән өс томлыҡ баҫманың тәүге ике томын баҫтырып сығарҙы. Етмешенсе йылдарҙың баштарына тиклем юғары уҡыу йорттарында башҡорт халыҡ ижады курсы буйынса хрестоматия ла, дәреслек тә хеҙмәтен үтәп килгән был баҫмалар башҡорт фольклористикаһының совет осорондағы тәүге ҙур ҡаҙанышы булды. Ә.Харисовтың был томдарға яҙған баш һүҙҙәрендәге эпик поэмалар, йырҙар, бәйеттәр, мәҡәлдәр һәм әкиәттәр тураһындағы фекерҙәре был жанрҙар тураһында тәүге һүҙ булыуы йәһәтенән дә, халыҡ ижадының тәбиғәтен, поэтикаһын шаҡтай тәрән асып биреүе яғынан да хәҙерге көнгәсә ғилми әһәмиәттәрен юғалтмағандар.

Алтмышынсы йылдарҙың аҙаҡтарында СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты менән республикабыҙҙың юғары уҡыу йорттары фольклорсылары тарафынан күп томлыҡ «Башҡорт халыҡ ижады» баҫмалары әҙерләнә һәм баҫтырып сығарыла башланы. Был ҙур һәм яуаплы эш менән дә профессор Әхнәф Харисов ғилми етәкселек итте, томдарҙың структураһын һәм ғилми яҡтан әҙерләү принциптарын эшләне, М.Минһажетдинов ме-

нән берлектә әкиәттәргә арналған ике томын төҙөүҙә һәм баш һүҙ яҙыуҙа ҡатнашты, бер нисә томдың махсус редакторы булды. Быларҙан тыш ғалим «Урал батыр», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» кеүек эпик әҫәрҙәрҙең айырым баҫмаларын әҙерләп сығарҙы; Мәскәүҙә «СССР халыҡтары эпосы» серияһында башҡорт халыҡ эпостарының ғилми баҫмаһын рус телендә әҙерләп сығарыу эшендә лә туранан-тура ҡатнашты. Ғөмүмән, башҡорт фольклористикаһының һуңғы йылдарҙағы үҫеше Ә.Харисовтың ғилми эшмәкәрлеге менән бәйле булды.

Бөтә Союз күләмендә киң билдәлелек алып «Библиотека всемирной литературы» баҫмаһына индерелгән «Урал батыр» кеүек гениаль әҫәрҙәр ижад итергә һәләтле булған башҡорт халҡының революцияға тиклемге яҙма әҙәбиәте хаҡында егерменсе йылдарҙан башлап алтмышынсы йылдарға тиклем, берсә ҡабынып, берсә һүнеп, туҡтауһыҙ бәхәс барҙы.

Берәүҙәр, башҡорттарҙың революцияға тиклем үк артыҡ бай һәм тәрән йөкмәткеле булмаһа ла, яҙма әҙәбиәте булған тигән ҡараште тороп, әҙәби мираҫтың айырым өлгөләрен баҫтырып сығарырға, мәктәп һәм юғары уҡыу йорттары программаларына был әҙәбиәтте өйрәнеүҙе индерергә тырышһалар, икенсе бер уҙғанға нигилистик ҡараште тороусылар, Октябрь революцияһына тиклем башҡорт халҡы тома наҙан халыҡ булған һәм уның яҙма әҙәбиәте булмаған тигән бер ниндәй нигеҙһеҙ ҡарашты ҡуйыртып, был өлкәләге һәр башланғысты бик тиҙ баҫып ҡалдырырға, әҙәби мираҫты өйрәнеүгә батырсылыҡ итеүселәрҙең башына һуғырға, уға теләһә ниндәй ярлык тағып, ғәйепләргә тырышалар. Әлбиттә, был бәхәстәрҙе кире ҡаҡҡыһыҙ факттарға нигеҙләнеп, уҙғандың әҙәби мираҫын марксистик-ленинсыл методологияға таянып өйрәнеү һәм баһалау юлы менән хәл итергә мөмкин ине. Алтмышынсы йылдарҙың баштарында бына ошо ҙур проблеманы хәл итергә башлап тотоноусы Әхнәф Харисов булды. Ниһайәт, ныҡышмалы эҙләнеүҙәрҙең уңышлы һөҙөмтәһе булараҡ, 1965 йылда уның «Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы. XVIII—XIX быуат» тигән монографияһы баҫылып сыҡты.

Киң мәғлүмәтле ғалим үҙенең был монографияһында быға тиклем бәхәсле була килгән: башҡорттарҙың

революцияға тиклемге яҙма әҙәби теле; башҡорт демократик әҙәбиәтенең үҫешенә рус культураһының йоғонтоһо; Көнсығыштан һәм Урта Азиянан үтеп ингән әҙәби ҡомартҡыларҙың йәшәү һәм таралыу формаһы, уларҙың традицияларының үҫтерелеше; башҡорт халҡының революцияға тиклемге әҙәби мираҫы, ике составлы булып, халыҡ ижадынан һәм әҙәбиәттән тороуын; XIX быуаттың икенсе яртыһына тиклем Урал-Волга буйындағы яҙма әҙәбиәттең байтағы әле милли һыҙаттар асыҡ сағылмау сәбәпле башҡорт һәм татар халыҡтарының уртаҡ мираҫы булыуын, шул уҡ ваҡытта XVIII быуаттың аҙағында уҡ С.Юлаев ижады миҫалында башҡорт милли яҙма әҙәбиәтенең үҙ йөҙө формалаша башлауын бай фактик материалдарға таянып иҫбат итте.

Башҡорт халҡының Октябрь революцияһына тиклемге яҙма әҙәби мираҫын өйрәнеүселәр алдында шаҡтай ҡатмарлы һәм нескә мәсьәләләрҙең береһе булып, миллилек менән синфилыҡ мәсьәләһен дөрөҫ аңлатыу тора. Сөнки тәүҙә төрки, унан һуң татар әҙәби телендә үҫеш алған әҙәбиәт ни яғы менән башҡорт халҡына ҡарай тигән һорауға, бигерәк тә әҙәбиәттә әле милли үҙаң сағыла башламаған дәүерҙәрҙә, бик еңел генә яуап табыу мөмкин түгел. Бының өҫтәүенә XVIII—XIX быуаттарҙа, айырата дини-схоластик йөкмәткеле суфыйсылыҡ әҙәбиәтендә миллилек бөтөнләй тип әйтерлек сағылыш алмаған. Сөнки был төр әҙәбиәттең төп маҡсаты, киң халыҡ массаларының мәнфәғәттәренән бөтөнләй алыҫ булып, ислам динен пропагандалауға ҡайтып ҡалған. Етмәһә, XIX быуаттың аҙаҡтарында дөйөм төркиселек хәрәкәте — пантюркизм йәйелеп китһә, XX быуат башында ҡоторонған татар буржуаз милләтселеге башҡорт халҡы араһында милли үҙаңдың үҫешенә билдәле бер тотҡарлыҡ яһаған. Тап бына шуға ла Ә.Харисов, уҙған мираҫты өйрәнеүҙә һәм баһалауҙа тарихилыҡ принцибына таянып, һәр осорҙоң әҙәбиәтен конкрет социаль-тарихи шарттарҙың емеше итеп баһалаған. Әҙәбиәттең миллилеген билдәләгәндә лә, миллилек төшөнсәһенең тарихи үҫешен, ундағы ҡапма-ҡаршы тенденцияларҙы күҙ уңында тотҡан. Башҡортостан шарттарында йәшәп ижад иткән теге йәки был әҙиптең ижадын (милли сығышын да иҫәпкә алып) башҡорт халҡының әҙәби мираҫы итеп ҡараған хәл-

дә — быны ул йә әҙиптең ижадында дөйөм мосолманлыҡтан йәки дини мотивтарҙан башҡа бер ни ҙә юҡлығынан сығып, йә башҡорт халҡының социаль-тарихи тормошона бәйләнешле факттарҙың аҙмы-күпме булыуына таянып аңлатҡан. Шул уҡ ваҡытта ғалим һәр яҙыусының ижадына анығ социаль баһа биргән, ундағы ыңғай һәм реакцион йүнәлештәрҙе билдәләгән.

Ә.Харисовтың был монографияһы баҫылып сығыу менән республика матбуғатында ла, үҙәк матбуғатта ла киң отклик тыуҙырҙы. «Был хеҙмәт, — тип яҙҙы Мәскәү ғалимы Р.Бикмөхәмметов, — әҙәбиәтте тарих менән, ижтимағи көрәш менән, тормош тәжрибәһе менән күп яҡлы бәйләнештәрҙә ҡарарға, әҙәбиәттең үҙенә генә хас үҙенсәлектәрен, законсалыҡтарын асып бирергә өйрәтә. Был хеҙмәт республикаларҙа әҙәбиәт ғилеме өлгөрөп еткәнлеген, ғалимдарҙың, үҙәктәге кеүек үк, күп төрлө милли материалды, төрлө-төрлө әҙәби ағымдарҙы эсенә алыусы киң концепциялар ҡорорға, социалистик реализм әҙәбиәтенә оҙайлы дәүерҙәрҙе эсенә алған донъя художество ағымын килтереп тоташтырырға һәләтле икәнлеген күрһәтә»[243]. Ғалим 1966 йылда ошо ҙур тема буйынса докторлыҡ диссертацияһы яҡлап филология фәндәре докторы тигән ғилми дәрәжәгә лайыҡ булды. Был иһә киң ғилми йәмәғәтселектең башҡорт халҡының революцияға тиклемге әҙәби мираҫын да таныуы ине.

Ғалимдың башҡорт халҡының әҙәби мираҫын өйрәнеү һәм уның айырым өлгөләрен баҫтырып сығарыу буйынса эшләгән эштәре был монография менән генә сикләнмәй, әлбиттә. Өлгәшелгәндәр менән сикләнеп ҡалмаҫҡа, туҡтауһыҙ эҙләнергә яратыусан ғалим, төп хеҙмәтен яҙған ваҡытта асыҡланмай, йәки табылмай ҡалған материалдарҙы табып, улар хаҡында «Ағиҙел» журналы биттәрендә әленән-әле мәҡәләләр баҫтырып торҙо, ғилми сессияларҙа, конференцияларҙа сығыш яһаны. Монографияның русса баҫмаһын әҙерләгәндә байтаҡ яңы материалдар, факттар менән байытты. Ул шулай уҡ әҙәби мираҫты текстологик яҡтан әҙерләп баҫтырып сығарыу эшенә лә яҡындан тороп ҡатнашты.

---

[243] Вопросы литературы. 1966, № 7, с.197.

Халыҡ ижады томдарынан тыш, Ш.Бабич әҫәрҙәрен әҙерләп донъяға сығарҙы, «Башҡорт поэзияһы антологияһы»ның (1971) революцияға тиклемге осорон әҙерләне, ғүмеренең һуңғы йылдарында, ҡаты ауырыу хәлендә булыуына ҡарамаҫтан, «XX быуат башында башҡорт әҙәбиәте» тигән ике томлыҡ хрестоматияны әҙерләү менән етәкселек итеүселәрҙең береһе булды; Ш.Бабичтың «Китабеннас» тигән киң билдәле әҫәренә иҫкәрмәләр яҙыу өҫтөндә эшләне.

Ә.Харисовтың ғилми эшмәкәрлеге мәктәп һәм юғары уҡыу йорттарының ихтыяждары менән тығыҙ бәйле булды. Башҡорт мәктәптәре өсөн ул юғарыла телгә алынған «Стилистика», «Әҙәбиәт теорияһы» кеүек дәреслектәрҙән тыш, өсөнсө, һигеҙенсе, туғыҙынсы кластар өсөн «Туған тел» һәм «Башҡорт әҙәбиәте» дәреслектәренең, хрестоматияларының авторҙарының береһе булды; «Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы» китабы иһә, үҙенең баҫылып сыҡҡан көнөнән алып бөгөнгәсә, юғары уҡыу йорттарында революцияға тиклемге башҡорт әҙәбиәте тарихы буйынса төп ҡулланма дәреслек булып йөрөй.

Тел ғилеме буйынса Мәскәүҙә һәйбәт әҙерлек үткән ғалим һуңғы йылдарҙа, нигеҙҙә, фольклористика һәм әҙәбиәт тарихы буйынса эшләһә лә, тел ғилеменән дә бөтөнләй айырылмай, 1948 йылда баҫылып сыҡҡан «Русса-башҡортса һүҙлек»те төҙөүҙә һәм редакторлауҙа ҡатнаша, төрлө йылдарҙа яҙылған «Тәржемә теле хаҡында» (1939), «Әйләндерелгән китап биттәренән» (1956), «Башҡорт поэзияһының русса тәржемәләре» (1951), «Газета теленең юғары культураһы өсөн» (1950), «Әҙәби һөйләү теленә ҡарата» (1962) кеүек мәҡәләләрендә художестволы тәржемә теле, тел культураһы мәсьәләләрен күтәрә. Оҙаҡ йылдар Башҡорт АССР-ы Юғары Советы Президиумы эргәһендәге Терминология комиссияһының председателе булараҡ, ғилми һәм ижтимағи-политик терминологияны камиллаштырыу эшенә ҙур иғтибар итә; илленсе йылдарҙың аҙаҡтарында «Совет Башҡортостаны» газетаһы биттәрендә башҡорт теленең орфографияһы буйынса барған бәхәстәрҙе дөйөмләштереп, «Яңы орфография проблемалары» тигән ҙур күләмле мәҡәлә менән сығыш яһай, шуныһы мөһим: ғалимдың бында индергән тәҡдимдә-

ренең күпселеге хәҙерге яңы орфографияның нигеҙенә һалына.

Ә.Харисов бөтә булмышы менән интернациональ рухлы ғалим ине. Уның 1939 йылда баҫылып сыҡҡан «Пушкин әҫәрҙәрендә башҡорт халҡы» тигән мәҡәләһенән алып төп хеҙмәте «Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы» китабына тиклем булған бөтә ижады халыҡтар дуҫлығы пафосы менән һуғарылған. Украина яҙыусылары ижадына арналған «Башҡортостан күге аҫтында», СССР яҙыусыларының Өсөнсө съезы тәьҫораттары аҫтында яҙылған «Сирень сәскә атҡанда», үзбәк әҙәбиәтенә арналған «Гөлостан ерендә», татар-башҡорт әҙәбиәттәре дуҫлығын данлаусы «Беҙ Ҡазанға килдек» тигән мәҡәләләрендә ғалим СССР халыҡтарының дуҫлыҡ һәм туғанлыҡ бәйләнештәрен әҙәби бәйләнештәр миҫалында махсус рәүештә яҡтыртһа, «Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы» китабында рус һәм Көнсығыш әҙәбиәттәренең башҡорт милли әҙәбиәтен үҫтереүгә ыңғай йоғонтоһон күрһәтеп, халыҡтарҙың элек-электән дуҫлыҡҡа һәм туғанлыҡҡа, бер-береһе менән, татар халҡының бөйөк шағиры Туҡай әйтмешләй, «тел, лөғәт, әхлаҡ алмашып» йәшәргә ынтылышын һыҙыҡ өҫтөнә алған.

Әхнәф Харисов ижады тураһында яҙыусыларҙың һәр береһе тип әйтерлек уның хеҙмәттәренең теле һәм стиле мауыҡтырғыс, образлы булыуын билдәләйҙәр. Был тәбиғи, сөнки Ә.Харисов үҙ һәләтен проза өлкәһендә лә һынап ҡараған, 1944 йылда донъя күргән «Тормош яңынан башлана» тигән йыйынтығына тупланған хикәйәләре, «Һәнәк» журналы биттәрендә баҫылып сыҡҡан фельетондары, юморескалары менән ул үҙен оҫта ҡәләмле юморист итеп танытты. Тап бына шуға ла ул үҙенең хеҙмәттәрен художестволы прозаға хас булған образлы тел менән, уҡымлы һәм үтемле итеп яҙыу өлгөһөн күрһәтте.

Ижади эшмәкәрлек менән бергә Әхнәф Харисов республикабыҙҙың ижтимағи тормошонда ла актив ҡатнашты. Бер нисә йыл буйынса Азия һәм Африка илдәре берҙәмлегенең Совет комитеты ағзаһы булды. «Белем» йәмғиәтенең Өфө ҡала бүлексәһенә етәкселек итте, Тыныслыҡ комитетының Башҡортостан бүлексәһе ағзаһы булды. Ҡырҡынсы йылдарҙан алып Башҡортостан Яҙыусылар союзы эшмәкәрлегендә актив ҡатнаш-

ты, төрлө йылдарҙа «Ағиҙел», «Һәнәк», «Урал» журналдарының редколлегия ағзаһы булды. 1944 йылдан алып, КПСС ағзаһы булған Ә. Харисов 1968 йылда, СССР Фәндәр Академияһының Башҡортостан филиалы ойошторолғас, бер нисә йыл партком секретары вазифаһын башҡарҙы, филиалдың институттарын етәксе кадрҙар менән нығытыу, коммунистарҙың авангард ролен күтәреү эшенә ҙур булышлыҡ итте. Квалификациялы ғилми кадрҙар әҙерләү өлкәһендә айырата ул Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ҙур эш алып барҙы, хәҙер инде танылып өлгөргән бер нисә әҙәбиәтсенең кандидатлыҡ диссертацияларының ғилми етәксеһе булды.

Оҙаҡ йылдар ғилми-ойоштороу эше менән ғилми-тикшеренеү эштәрен бергә алып барыу, һуңғы йылдарҙа үҙенең ғилми ҡараштарын раҫлау өсөн ныҡышмалы көрәш, эштә үҙ-үҙенә аяуһыҙлыҡ, әлбиттә, уның һаулығына тиҫкәре йоғонто яһамай ҡалманы. Ә.И.Харисов оҙаҡ һәм ҡаты ауырыуҙан һуң 1977 йылдың 15 майында вафат булды.

Әхнәф Харисовтың ғилми эшмәкәрлеген хөкүмәтебеҙ юғары баһаланы. Уға 1957 йылда Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре тигән маҡтаулы исем бирелде, ғалим «Октябрь революцияһы», «Почет Билдәһе» ордендары һәм миҙалдар менән наградланды. Иң мөһиме — ғалим башҡорт әҙәбиәте ғилемендә үҙе бер мәктәп нигеҙләп ҡалдырҙы: хәҙерге көндә башҡорт әҙәбиәтенең Октябрь революцияһына тиклемге тарихын байҡаусыларҙың һаны артҡандан-арта бара. Улар профессор Ә.И.Харисов башлаған изге һәм ауыр эште уңышлы дауам иттерәләр.

## Йософ Гәрәй

Егерменсе йылдарҙың урталарында илебеҙ тормошонда барған ҙур социаль-тарихи һәм культура экономик үҙгәрештәр менән илһамланып ҡулына ҡәләм алған Йософ Гәрәй, илле йылдан ашыу ижад ғүмерендә башҡорт совет балалар әҙәбиәтен, поэзияһын, документаль прозаһын, художестволы публицистикаһын һәм әҙәби тәнҡитен үҫтереүгә арымай-талмай хеҙмәт итеүсе, эшһөйәр әҙиптәребеҙҙең береһе булып танылды.

1904 йылдың 20 мартында республикабыҙҙың хәҙерге Шаран районына ҡараған Баҙғыя ауылында урта хәлле крәҫтиән ғаиләһендә тыуып-үҫкән яҙыусыға бала саҡтарында революцияға тиклемге крәҫтиән тормошоноң ауырлыҡтарын да татып ҡарарға тура килә: «Һигеҙ йәштән, — тип яҙа ул, — өлкәндәр менән рәттән ураҡ урыу, ашлыҡ һуғыу кеүек эштәр башҡарылды. Ун берун ике йәштән, ағай һалдатҡа киткәс, һабансы, тырмасы, бесән сабыусы булдым».

Һуңғараҡ шағир үҙенең бала сағын «Күмәс» тигән шиғырында шулай хәтерләй:

Мейес башында өшөп ултыра инек,
Астан, ҡатҡан икмәк кимереп,
Ҡараңғыла талып, нәҙек үҫкән
Яңғыҙ, зәғиф үлән шикелле.
Ҡояш нурын мәңге үткәрмәне
Ергә батҡан һыңар күҙгәнәк.
Яҡшы йортто төштә күрә инек,
Кис ултырып әкиәт һөйләһәк.
Иҫтә, атай аҡтыҡ ярты душын
«Навечно»ға һатты кулакка.
Шаран баҙарынан өс-дүрт ҡаҙаҡ
Күмәс алып ҡайтты шул саҡта.
Беҙ һуңынан душты һатҡан көндө,
Ҡара икмәкте ла һағындыҡ.
Ер иҙәнгә төшөп уйнаманы
Ҡояш нурын тотто ҡарындыҡ.

Шул уҡ ваҡытта, 1905 йылғы революциянан һуң, иҙелгән милләттәрҙең аң-белемгә һәм культураға ынтылыуы көсәйә барған бер дәүерҙә, мәғрифәт нуры Ибраһим ҡарт йортон да урап үтмәй. Зирәклеге менән айырылып торған улы Йософҡа ул заманса белем биреү хәстәрлеген күрә. Йософ Гәрәй башланғыс белемде үҙ ауылында ала. Бынан һуң, Шаранда «ике класлы» мәктәпте уңышлы тамамлағас, атаһы уны Бәләбәй уҡытыусылар семинарияһына урынлаштыра.

Буласаҡ яҙыусы хеҙмәт юлын 1923 йылда Саҡмағош районының Иҫке Ҡалмаш ауылында уҡытыусы булып башлап ебәрә. Шул уҡ йылдарҙа республика газеталары биттәрендә уның ауыл тормошон, культура һәм мәғариф эштәрен яҡтыртыуға арналған мәҡәләләре күренә башлай. «Башҡортостан», «Яңы ауыл» газеталары биттәрендә донъя күргән очерктарында һәм мәҡәлә-

рендә йәш автор шул заман ауылы алдында торған көнүҙәк мәсьәләләрҙе күтәреп сыға.

1925—1926 йылдарҙа Й. Гәрәй Өфөлә Башпединститутта уҡый. Был йылдарҙа уға башҡорт әҙәбиәте һәм яҙыусылар менән яҡындан тороп танышырға ҙур мөмкинлектәр асыла. Ул институт эргәһендә, шулай уҡ ҡала күләмендә ойошторолған әҙәбиәт түңәрәктәрендә актив ҡатнаша. Бында Т.Йәнәби, Д.Юлтый. Ғ.Амантай һәм башҡа әҙиптәр менән аралаша, үҙенең тәүге шиғырҙарын ижад итә.

Йософ Гәрәйҙең шиғырҙары матбуғат биттәрендә 1925 йылда күренә башлай. 1930 йылда Йософ Гәрәй халыҡ мәғариф комиссариатының Бәләбәй кантоны инспекторы булып эшләй, унан Башҡортостан халыҡ мәғариф комиссариатына эшкә күсерелә. Был йылдарҙа ул үҙенең «Тимер» тигән поэмаһын яҙа. Синфи йәмғиәт шарттарында кәмһетелеп һәм иҙелеп, империалистик һуғышта ғәрипләнеп ҡалған ауыл ярлыһының Октябрҙән һуң актив булып китеүен һүрәтләүгә арналған был поэма 1932 йылда айырым китап булып баҫылып сыға.

Оҙаҡ йылдар буйы мәктәптәрҙә уҡытыусы булып, унан һуң мәғариф өлкәһендә эшләп ҙур тәжрибә туплаған яҙыусы утыҙынсы йылдарҙан алып балалар әҙәбиәтен үҫтереүгә ҙур иғтибар бирә. Балаларҙың рухи талаптарын, холоҡ һәм ҡылыҡтарын яҡшы белгән Ғ.Амантай, Ғ.Сәләм, М.Хәй кеүек һүҙ оҫталары менән бергәләп, башҡорт балалар әҙәбиәтенең тематикаһын киңәйтеүҙә, уны яланғас өгөт-нәсихәтселектән, риториканан арындырыуҙа уңышлы аҙымдар яһай. Был өлкәлә ул ҙур тәжрибәле рус классик әҙәбиәтенән өйрәнә. Башҡорт теленә Пушкин, Маршак, Горький, Фурманов, Чехов һәм башҡа классиктарҙың әҫәрҙәрен тәржемә итә. Йософ Гәрәйҙең балалар өсөн төрлө йылдарҙа баҫылып сыҡҡан ике тиҫтәләп китаптары араһында мауыҡтырғыс сюжетлы әкиәттәр ҙә, йомаҡтар ҙа, ҙур тормош тәжрибәһен туплаған мәҡәл, әйтемдәр ҙә бар. Төрлө йылдарҙа яҙылып, бер нисә тапҡыр донъя күргән «Быҙау-губернатор», «Зирәк ҡуян», «Өйрәнде нисек өрөргә көсөк?», «Был таҙ ысын таҙ икән» тигән әкиәттәре балаларҙың иң яратҡан әҫәрҙәре иҫәбендә.

1937—1939 йылдарҙа Й.Гәрәй Башҡортостан Яҙыусылар союзының яуаплы секретары булып эшләй. Әҙәби процесҡа йүнәлеш биреү, әҙәбиәткә йәш көстәрҙе

ылыҡтырыу кеүек ойоштороу эштәрен алып бара. Ғ.Сәләм, Б.Бикбай, С.Ҡудаш, Р.Ниғмәти, М.Хәй, Х.Кәрим, Ғ.Әмири, М.Тажи кеүек күренекле шағирҙарҙың берҙәм хорында И.Гәрәй поэзияһының тауышы ла шаҡтай көр ишетелә. Ул үҙенең көнүҙәк темаларға яҙылған шиғырҙарында совет кешеләренең социализм төҙөүҙәге фиҙаҡәр хеҙмәтенә дан йырлай. «Алтын тамыр үреп, баҡыр ябынып, көмөш кейенеп ятҡан ҙур Урал» ҡуйынында күкрәп сәскә атыусы Совет Башҡортостанының мөһабәт образын тыуҙырырға интыла:

Урал!
Йырсы өсөн йөрәк була,
Көс алалар унан батырҙар.
Бында Салауаттың уғы үҫкән,
Колчак яуын ҡырған партизан.
Бында бөгөн ҡаяларҙы күсереп,
Йылғаларҙың бороп ағышын,
Йөрәк йырынан да матур итеп,
Күтәрәләр яңы тормошто.
Һәр бер ташҡа баҫып ҡалҡа тормош,
Һәр гектарҙа тыуа ҙур йәшәү,
Цехта тыуған коммунизм килә,
Һәр йөрәктә, өйҙә көрәшә.
Ошо еңер коммунизм ҡалҡҡан
Легендар ҡарт Урал иңендә
Ҡыйғыр Шоңҡар кеүек халыҡ йәшәй.
Башҡортостан тиҙәр иленә.
Был ил үҙе татыу, ҙур семьяла
Дан ҡаҙанғандарҙың береһе.
Халыҡтар төрмәһен шартлатҡастын
Ленин иптәш төҙөгән был илде.
Индустрия атлай яланында,
Финляндиянан бай ул урманға;
Бында ҡара тупраҡ майҙай йомшаҡ,
Баҫыуында иген — дуғанан,
Һыуҙар — яҡты, лимонадтан татлы,
Швейцариянан байыраҡ күренештәр,
Иҙел ялтырай Чапай ҡылысындай
Күлдәр ята терегөмөштәй.
...............................................
Был ил бөгөн, көнгә балҡытып,
Болотҡа элә Ленин байрағын,
Талпыныусы байраҡ булып гөрләй
Уның тыуыу көнө байрамы.

Йософ Гәрәй «Башҡортостан» тигән был шиғырҙы республикабыҙҙың егерме йыллыҡ юбилейына арнап яҙған. Шиғыр яҙылыуға ҡырҡ йыл ваҡыт үтеп китһә

лә, был әҫәр быйыл алтмыш йыллыҡ юбилейын билдәләүсе республикабыҙға дан йыры булып яңғырай.

1940—1958 йылдарҙа ул Ҡаҙағстанда һәм Тажикстанда ҙур төҙөлөштәрҙә эшләй. Илленсе йылдарҙың аҙаҡтарында яҙыусы, Өфөгә ҡайтып, яңынан әҙәбиәт майҙанына аяҡ баҫа һәм ижад ғүмеренең икенсе йәшлеген кисерә. Уның был һуңғы йылдарҙағы поэзияһында ҙур тормош тәжрибәһе туплаған актив лирик геройҙың тауышы ишетелә. Ул поэзияла заман, киләсәк, халыҡтар яҙмышы тураһында бөтә булмышы менән ҡайғыртыусы публицист булып та, бөгөнгөгә һәм киләсәккә тарих һабаҡтары күҙлегенән ҡараусы философ булып та сығыш яһай. «Ленин тураһында уйҙар», «Дүшәнбе», «Эй, Йүрүҙән буйҙары», «Өфөгә», «Бөйөк ҡомартҡы» кеүек шиғырҙары һәм шиғырҙар шәлкемдәре шағирҙың поэтик мөмкинлектәренең туҡтауһыҙ асыла барыуы хаҡында һөйләй.

Шағир балалар әҙәбиәте өлкәһендә лә элеккесә дәртләнеп эшләй, бәләкәй дуҫтарын үҙенең яңынан-яңы шиғырҙары, әкиәттәре һәм йомаҡтары менән ҡыуандыра.

1966 йылда яҙыусының «Банат Батырова» тигән ҙур документаль повесы баҫылып сыҡты. Уҡыусылар һәм әҙәби йәмәғәтселек тарафынан йылы ҡабул ителгән был әҫәр башҡорт документаль прозаһының алтмышынсы йылдарҙағы ҙур ҡаҙанышы булды. Унда тормош төпкөлөнән күтәрелгән данлыҡлы сөгөлдөрсө, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары араһынан тәүге Социалистик Хеҙмәт Геройы Банат Батырованың тулы образы тыуҙырыла. Автор тормош факттарының асылына төрлө яҡлап тәрән үтеп инеүе, башҡорт ауылының үткәнен, халыҡтың ғөрөф-ғәҙәттәрен яҡшы белеүе һәм айырым кешеләрҙең яҙмышында типик һыҙаттарҙы дөрөҫ төҫмөрләй алыуы арҡаһында, повесть документаль әҫәр булып ҡалған хәлдә лә, күп яҡтары менән дөйөмләштерелгән художестволы әҫәр юғарылығына күтәрелә. «Яҙыусы хәл-ваҡиғаларҙы күпме генә теүәл һәм булғанынса бирмәһен, — тип яҙа ундағы күпселек ваҡиғаларҙың шаһиты профессор Ғ. Хөсәйенов, — әлеге повестың шундай көслө яғы бар: бында Үтәгән ауылының үҫеш юлында, ауылдаштарымдың яҙмыштарында күп ауылдарға, крәҫтиәндәрҙең күпселегенең яҙмышына хас

булған уртаҡ яҡтар ҙа асыла. Банат Батырованың ас-лыҡ-яланғаслыҡтан мул тормошта, ҙур бәхеткә ирешкән оҙон һәм данлы тормош юлында башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының уртаҡ яҙмыштары ла тамсыла сағылған ҡояш һымаҡ күренә».

Йософ Гәрәй беҙҙең әҙәбиәттә, өлкән быуын замандаштары Д.Юлтый, С.Ҡудаш, Ғ.Амантай, Ғ.Сәләм, М.Хәйҙәр кеүек, халыҡ ижады, тел ғилеме, әҙәбиәт теорияһы буйынса киң мәғлүмәтле әҙип булыуы менән айырылып тора.

Яҙыусы утыҙынсы йылдарҙа уҡ, әҙәби ижад менән бергә, милли мәктәптәр өсөн стабиль дәреслектәр, методик ҡулланмалар төҙөүгә ҙур көс һала. Башҡорт әҙәби теленең орфографияһын камиллаштырыу һәм орфографик һүҙлеген төҙөү эшенә лә өлөш индерә.

1971 йылда яҙыусы-ғалимдың «Был һүҙҙәр ҡайҙан килә?» тигән мәҡәләләр йыйынтығы баҫылып сыҡты. Әҙәби тел культураһы һәм башҡорт теленең ономастикаһына арналған был фәнни-популяр китап киң ҡатлам уҡыусыларҙа һәм ғилми йәмәғәтселектә ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Яҙыусының юғары культуралы әҙип булыуы халыҡ ижадында, уҙғандың әҙәби мираҫына ҙур ихтирам менән ҡарап, уларҙы йыйып баҫтырыу һәм пропагандалау эшенә даими иғтибар итеүендә лә асыҡ күренә.

Яҙыусы һуңғы йылдарҙа газета һәм журнал биттәрендә ер-һыуҙы, йәнле тәбиғәтте һаҡлауға һәм әхлаҡ-тәрбиә проблемаларына арналған тәрән йөкмәткеле публицистик мәҡәләләр менән сығыш яһай. Уларҙа әҙиптең тормошҡа ни дәрәжәлә яҡын тороуы, актив граждандлыҡ позицияһы тағы ла күркәмерәк сағылыш алды.

«Һәр яҙыусының «ғүмер китабы» була, тиҙәр. Мин дә етмеш биш йәшем тулыуға, ярты ғүмеремде бағышлаған «Аҡай» тигән шиғри романыма, поэзия секцияһында тикшергәндән һуң эшләп сығып, нөктә ҡуйырға ниәтләнәм. «Аҡай»ҙың донъяға сыҡҡанын күрә алһам, үҙемде иң бәхетле кешеләрҙән һанар инем», — ти Йософ Гәрәй.

Яҙыусыны етмеш биш йәше тулыу менән ҡайнар ҡотлап, ошо ижади пландарын тормошҡа ашырыу юлында һаулыҡ, сәләмәтлек теләйбеҙ.

## Дуҫлыҡ, туғанлыҡ эҙәрмәне

Художестволы һүҙ сәнғәтенә, уның ижадсыларына мөхәббәт һәм ҙур ихтирам тойғоһо менән һуғарылған тәнҡит мәҡәләләре, айырым яҙыусыларҙың ижадын барлауға һәм ентекле өйрәнеүгә арналған монографиялары, башҡорт әҙәбиәтенең тарихын, әҙәби бәйләнештәрен яҡтыртҡан тиҫтәләрсә ғилми хеҙмәттәре менән илленсе йылдарҙың аҙаҡтарынан алып әҙәби процеста ҡайнап, уның эшен йәнләндереүгә актив ҡатнашып килгән тәнҡитсе һәм әҙәбиәт ғалимы Суфиян Сафуановҡа илле йәш тулды.

Балалыҡ осоро утыҙынсы йылдарға — Совет әҙәбиәтенең киң ҡолас менән үҫеш юлына сыҡҡан дәүергә тап килгән Суфиянда әҙәбиәт менән мауығыу бик иртә башлана. Отҡор һәм зирәк уҡыусы ауыл мәктәбендә саҡта уҡ Туҡай, Ғафури, Таҡташ шиғырҙарын яттан бела, башҡорт һәм татар яҙыусыларының әҫәрҙәрен йотлоғоп уҡый, шулар йоғонтоһонда үҙе лә әҙәби ижад менән «шаяра» башлай. Һәр бер йәш автор кеүек, тәүҙә шиғырҙар яҙа, шуларҙың ҡайһы берҙәре Ҡандра районының «Ҡыҙыл байраҡ» исемле газетаһында баҫылып та сыға. Артабан үҙ һәләтен хикәйә жанрында һынап ҡарай.

Ҡазанда, пединститутта уҡып йөрөгән йылдарында, уның хикәйәләре Татарстандың йәштәр газетаһы биттәрендә, ҡайһы бер тематик йыйынтыҡтарҙа һәм «Үсеү юлы» альманахында баҫылып сығалар. Әммә әҙәбиәткә талапсан йәш авторҙы үҙ әҫәрҙәре ҡәнәғәтләндереп етмәй һәм ул илленсе йылдарҙың урталарынан тулыһынса әҙәби тәнҡит һәм әҙәбиәт ғилеме өлкәһендә эшләүгә күсә.

С.Сафуановтың ижади эшмәкәрлеге 1957 йылда, Ҡазанда аспирантура тамамлап, СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ғилми хеҙмәткәр булып эшләй башлағас, йәнләнеп китә. Ул көндәлек әҙәби тәнҡит менән актив шөғөлләнеү менән бергә башҡорт прозаһын өйрәнеү һәм әҙәби мираҫтың быға саҡлы билдәһеҙ булып ҡала килгән ҡомартҡыларын эҙләп табыу, хәҙерге уҡыусыларға еткереү өлкәһендә бирелеп эшләй.

1960 йылда, бер үк ваҡытта тиерлек, ул үҙенең «Али Карнай. Тормошо һәм ижады» тигән монографик

хеҙмәтен һәм төрлө газета-журнал биттәренән, архивтарҙан, кешеләр ҡулында һаҡланып ҡалған яҙмаларҙан туплап, Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булып ҡалған йәш башҡорт шағирҙарының «Йыр сафта ҡала» тигән йыйынтығын баҫтырып сығара.

Күренеүенсә, икеһе ике төрлө китап. Ләкин улар әҙәбиәтсенең эҙләнеүсән характерын асыу яғынан бербереһенә бик яҡын торалар. Эҙләнеү, быға тиклем күмелеп ятҡан факттарҙы асыҡлау, ғөмүмән, әҙәби факттарға ихтирам һәм тоғролоҡ С.Сафуановтың ғилми йөҙөн билдәләүсе төп сифаттарҙың береһе булып тора. Күренекле прозаик Али Карнай ижады хаҡында уға тиклем үк байтаҡ яҙылыуына ҡарамаҫтан, әлегә яҙыусының ижад эволюцияһы, бигерәк тә күп яҡлы журналистик эшмәкәрлеге ентекле өйрәнелмәгәйне. С.Сафуанов А.Карнай тураһындағы монографияны яҙыр алдынан, иң элек яҙыусының тулы биографияһын асыҡлай, ул эшләгән һәм яҙышҡан газета-журнал биттәрен аҡтарып, быға тиклем билдәле булмаған хикәйәләрен, мәҡәләләрен һәм очерктарын туплай. Был уға күренекле яҙыусының граждандлыҡ йөҙөн шаҡтай тулы кәүҙәләндереүгә мөмкинлек биргән кеүек, ижад лабораторияһына тәрән үтеп инеп, әҙәби мираҫына тулы анализ яһарға мөмкинлек бирә. Монографияла С.Сафуанов башҡорт әҙәбиәтендә социалистик реализм методын формалаштырыуға лайыҡлы өлөш индергән А.Карнайҙың ҡәтғи тормош реализмы менән революцион романтика алымын синтезлауға нигеҙләнгән индивидуаль стилен, яңы тормоштоң еңеүсән пафосын раҫлауға йүнәлтелгән ижад концепцияһын асыҡлай. Һөҙөмтәлә Карнай тураһындағы китап әҙәби тәнҡиттә һәйбәт баһа ала, автор, ошо монография нигеҙендә яҙылған диссертацияһын уңышлы яҡлап, филология фәндәре кандидаты тигән ғилми дәрәжәгә лайыҡ була.

Али Карнай ижадын өйрәнеү уңайы менән тупланған ыңғай тәжрибәһен С.Сафуанов артабан күренекле башҡорт яҙыусыһы Әнүәр Бикчәнтәев һәм татар совет яҙыусыһы Ибраһим Ғази ижадтарын яҡтыртыуға арналған монографияларында уңышлы файҙалана.

А.Карнай тураһындағы китапта яҙыусының тормош юлы баҫма сығанаҡтарға нигеҙләнеп яҡтыртылһа, Ә.Бикчәнтәев, И.Ғази тураһындағы монографияларҙа автор был яҙыусылар менән туранан-тура осрашып,

ижади аралашып йөрөгән саҡтарҙа тупланған факттарҙы ла киң ҡуллана. Шуға күрә был һуңғы монографияларҙа, уҡыусы яҙыусыларҙың ижад йөҙө менән генә танышып ҡалмай, Ә.Бикчәнтәев менән И.Ғазиҙың үҙ һындарын да шаҡтай тулы күҙ алдына баҫтыра ала.

Быға са донъя күрә алмай йылдар буйы архивтарҙа ятҡан йәки үҙ ваҡытында баҫылып сығып та төрлө сәбәптәр арҡаһында хәҙерге уҡыусыға билдәһеҙ ҡала килгән әҫәрҙәрҙе баҫтырып сығарыу һәм пропагандалау һәр әҙәбиәт ғалимының намыҫ эше һанала. С.Сафуанов, ваҡытһыҙ һәләк булған шағирҙарҙың ижадын йыйып баҫтырып сығарыу менән башлаған изге эшкә тоғро ҡалып, хәҙерге көнгәсә был өлкәлә эҙләнеүҙәрен дауам иттерә.

Күренекле яҙыусы Ғ.Хәйриҙең, егерменсе йылдарҙың аҙаҡтарында уҡ ижад ителеп, ҡырҡ йыл буйы донъя күрә алмай ятҡан «Боролош» романын донъяға сығарып, был әҫәр хаҡында төплө ғилми фекер әйтеүе менән дә С.Сафуанов күп һанлы уҡыусыларҙың рәхмәтен яулағайны. «Тырышҡан — таба, ташҡа ҡаҙаҡ ҡаға» тигәндәй, Д.Юлтыйҙың «Ҡан» романының икенсе китабын табып баҫтырып сығарыу бәхете лә уға тура килде. Күренекле балалар яҙыусыһы Х.Мохтарҙың «Зөһрә» повесы ла С.Сафуановтың тырышлығы арҡаһында тәүге ҡат донъя күрҙе. Быларҙан тыш ғалим яҙыусыларҙың биографияларын асыҡлау, теге йәки был яҙыусының ижадында аҡ тап булып торған урындарҙы бөтөрөү өлкәһендә туҡтауһыҙ эҙләнеүҙәр алып бара.

Ошо йыйыу, табыу, уҡыусыға еткереү эше уның әҙәбиәт тарихын өйрәнеүгә арналған хеҙмәттәренең йөкмәткеһен тулыландырыуға һәм байытыуға ҙур булышлыҡ итә.

С.Сафуанов 1967 йылда Өфөлә башҡорт телендә, 1977 йылда Мәскәүҙә, «Наука» нәшриәтендә, рус телендә баҫылып сыҡҡан «Башҡорт совет әҙәбиәте тарихы»ның төп авторҙарының береһе булараҡ, үҙенең табыштарын был хеҙмәттең «Утыҙынсы йылдар прозаһы», «Һуғыш осоро әҙәбиәте», «Һуғыштан һуңғы йылдар прозаһы» һ.б. бүлектәрен яҙғанда киң файҙаланғайны. Хәҙерге көндә башҡорт әҙәбиәтенең биш томлыҡ тарихын яҙыу өҫтөндә эшләгәндә лә яңынан-яңы әҙәби факттарҙы асыҡлай, тынғыһыҙ эҙләнеүен дауам иттерә. Әҙәби мираҫҡа, уның күренекле вәкилдәренең ижады-

на ихтирам уның Ғ.Хәйри, А.Карнай, Һ.Дәүләтшина, А.Таһиров, Д.Юлтый, Ғ.Ғүмәр, С.Агиш һ.б. күп яҙыусыларҙың ижады тураһындағы журнал мәҡәләләрендә лә ярылып ята.

Һәр ғалимдың ижади эшмәкәрлеге тураһында һүҙ йөрөткәндә, ғәҙәттә, уның теге йәки был фәнде үҫтереүгә индергән төп эше иғтибар үҙәгенә ҡуйыла. Ошо йәһәттән ҡарағанда, ике йөҙгә яҡын ғилми хеҙмәттең авторы С.Сафуанов та беҙҙең күҙ алдыбыҙға иң элек башҡорт әҙәбиәтенең башҡа туғандаш әҙәбиәттәр менән тарихи һәм ижади бәйләнештәре мәсьәләләрен өйрәнеүгә күп көс һалған, дуҫлыҡ, туғанлыҡ тамырҙарын юллаусы эҙәрмән рухлы әҙип булараҡ килеп баҫа.

Был ҙур эште ғалим башҡорт һәм татар әҙәбиәттәренең бәйләнешен, туғанлыҡ тамырҙарын өйрәнеүҙән башлай. Туймазы районы Бикмәт ауылында Әйле башҡорттары ғаиләһендә тыуып-үҫкән, Ҡазан педагогия институтында һәм аспирантураһында белем алған С. Сафуанов ике әҙәбиәтте лә яҡшы белә, улар араһындағы ҡәрҙәшлекте нығыраҡ тоя. Бына шул уны ошо өлкәлә эҙләнеүҙәргә этәрә. «Башҡортостан — татар әҙәбиәтендә» (1964), «Туҡай һәм башҡорт әҙәбиәте» (1966) тигән журнал мәҡәләләре өҫтөндә эшләү уны артабан был өлкәлә етдиерәк эштәргә илһамландыра. Ул 1966 йылда Башҡортостан китап нәшриәтендә «Туҡай Башҡортостанда» тигән иҫтәлектәр һәм мәҡәләләр йыйынтығы төҙөп баҫтырып сығара. Тикшеренеүҙәр йылдан-йыл киңәйә, ҡыҙыҡһыныуҙар арта бара. Тикшеренеүҙәр барышында унда башҡорт әҙәбиәтенең бер татар һәм рус әҙәбиәте менән генә түгел, илебеҙҙәге бик күп әҙәбиәттәр менән тығыҙ бәйләнештә үҫеүен, был бәйләнештәрҙең төрҙәрен һәм кимәлен ентекле өйрәнеү теләгән уята. Мәскәү, Киев, Алма-Ата, Ташкент, Ҡазан, Вильнюс, Чебоксар, Ижевск, Ереван һ.б. күп ҡалаларҙың архивтарында ҡаҙыныу уға бик күп яңы материалдар туплarға мөмкинлек бирә. Был йылдарҙа ул ысын мәғәнәһендә сәмле эҙәрмәнгә әйләнә. Һөҙөмтәлә — рус-башҡорт, украин-башҡорт, ҡаҙаҡ-башҡорт, белорус-башҡорт, үзбәк-башҡорт, литва-башҡорт, сыуаш-башҡорт һ.б. әҙәби бәйләнештәре тураһындағы мәҡәләләр барлыҡҡа килә. Улар «Ағиҙел» журналы биттәрендә, айырым йыйынтыҡтарҙа, туғандаш республикабыҙҙың ваҡытлы матбуғаты биттәрендә донъя күрә-

ләр. Һуңғараҡ был эҙләнеүҙәрен һәм күҙәтеүҙәрен С.Сафуанов «Дуҫлыҡ, туғанлыҡ сәхифәләре» тигән монографияһында дөйөмләштерә. Был китап 1976 йылда Өфөлә башҡорт телендә, 1979 йылда Мәскәүҙә, «Наука» нәшриәтендә, рус телендә донъя күрҙе.

Билдәле булыуынса, әҙәбиәт ғилемендә әҙәбиәттәр араһындағы идея-тематик һәм эстетик яҡтан булған уртаҡлыҡтарҙы йәки яҡынлыҡтарҙы ике типҡа: социаль-тарихи шарттар яҡынлығына нигеҙләнгән типологик һәм үҙ-ара тығыҙ аралашыу һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән контактлы бәйләнештәргә бүлеп йөрөтәләр.

Үҙенең тыуыу көндәренән алып, башҡа туғандаш әҙәбиәттәр менән тығыҙ идея-эстетик бәйләнештә йәшәгән башҡорт совет әҙәбиәтенең иң элек контактлы бәйләнешен асыҡламай тороп, уның социаль-тарихи шарттар уртаҡлығы һөҙөмтәһендә килеп тыуған типологик оҡшашлыҡ мәсьәләләрен асыҡлау ауыр булыр ине. Шуға ла С.Сафуанов, монографияһының төп бурысы итеп, беренсе сиратта, башҡорт совет әҙәбиәтенең контактлы бәйләнештәрен, үҙ-ара ярҙамлашыуҙар һәм аралашыуҙар һөҙөмтәһендә өлгәшелгән уңыштарын асыҡлау мәсьәләһен ҡуйҙы, ул илебеҙҙәге күп кенә ҡалаларында әҙәбиәт мәсьәләләренә арналған Бөтә Союз һәм региональ форумдарҙа сығыштар яһай.

Башҡорт совет әҙәбиәтенең күп яҡлы бәйләнештәрен бай фактик материалға нигеҙләнеп яҡтыртҡан был хеҙмәтте уҡыусылар ҙа, ғилми йәмәғәтселек тә йылы ҡаршыланы. Китаптың башҡортса һәм русса баҫмалары хаҡында башҡорт, рус, татар, ҡаҙаҡ һ.б. телдәрҙә тиҫтәләрсә ыңғай рецензиялар баҫылып сыҡты. Халыҡтар дуҫлығын һәм ҡаҡшамаҫ рухи берҙәмлеген раҫлаусы был китап туғандаш халыҡтарҙың бәйләнештәрен тағы ла нығытыу эшенә хеҙмәт итеү менән бергә, әҙәби бәйләнештәрҙе артабан ентекле өйрәнеү эшенә киң юлдар асты, башҡорт совет әҙәбиәтен һәм әҙәбиәт ғилемен Бөтә Союз аренаһына сығарыу эшенә ҙур булышлыҡ итте.

Ғөмүмән, С.Сафуанов башҡорт әҙәбиәтен Бөтә Союз аренаһында танытыуға ҙур көс һала. М.Горький исемендәге донъя әҙәбиәте институты тарафынан сығарылған 6 томлыҡ «История Советской многонациональной литературы» тигән ҙур хеҙмәттә ул башҡорт совет әҙәбиәтенең һуғыштан һуңғы йылдарына арналған бү-

лекте яҙҙы. «Большая Советская энциклопедия», «Краткая литературная энциклопедия»ларҙа ла башҡорт әҙәбиәтенә арналған материалдарҙың күбеһен ул әҙерләне. Уның башҡорт әҙәбиәте һәм уның бәйләнештәре хаҡындағы мәҡәләләре Киевта, Алма-Атала, Минскиҙа, Ереванда, Ташкентта, Ҡазанда, Чебоксарҙа, Нөкөстә баҫылып сыҡты.

С.Сафуанов быйыл донъя күргән «Хаҡлыҡ әҙәбиәте, дуҫлыҡ әҙәбиәте» тигән китабында ла үҙенең төп темаһын дауам иттерә. «Дуҫлыҡ, туғанлыҡ сәхифәләре»ндә ижади бәйләнештәр бөтөн бер процесс буларак күрһәтелгән булһа, бынныһында шуның айырым-айырым теоретик мәсьәләләре (интернационаллек һәм миллилек һ.б.), айырым яҙыусылар ижадындағы сағылышы (М.Ғафури, Р.Ниғмәти), башҡорт әҙәбиәтенең интернациональ асылы, башҡа әҙәбиәттәрҙең күренекле вәкилдәренең башҡорт әҙәбиәтенә йоғонтоһо (Толстой, Чехов, Горький, Шолохов, Туҡай), башҡорт әҙәбиәтенең украин, ҡаҙаҡ, үзбәк, литва һәм башҡа әҙәбиәттәр менән йәнле бәйләнештәре конкрет факттарға нигеҙләнеп яҡтыртыла. Һуңғы йылдарҙа ғалим етди ғилми тикшеренеү эштәре өҫтөндә эшләү менән бергә илебеҙҙең төрлө ҡалаларының китапханаларында һәм архивтарында ултырып тупланған фактик материалдың библиографияһын баҫтырып сығарыу буйынса ла ҙур тырышлыҡ күрһәтте. Һөҙөмтәлә ике китаптан торған «Башҡорт әҙәбиәтенең туғандаш әҙәбиәттәр менән бәйләнеше» тигән ҙур библиографик хеҙмәттең беренсе киҫәге донъя күрҙе. 6500-ҙән ашыу исемлекте туплаған библиографик ҡулланма әҙәби бәйләнештәр өлкәһендә артабан эшләйәсәк ғалимдарға киң юл аса.

Күренеүенсә, әҙип үҙенең илле йәшлеген шаҡтай ҙур хеҙмәт емештәре, күп яҡлы ғилми асыштар һәм табыштар менән ҡаршылай. Әммә ул эшләгәндәр менән ҡәнәғәтләнеп, арҡаны ҡалын китаптарға терәп, еңелелпе генә эшләп, һәүетемсә йәшәп ятыусылар затынан түгел. Әҙип һаман да юлда. Эш өҫтөндә.

Ғ.Хәйри тураһында монография тамамлап килә, әҙәбиәт тарихының күп кенә бүлектәрен яҙа, балалар әҙәбиәтен өйрәнеү өҫтөндә эшләй. Хәҙерге әҙәби процесҡа йүнәлеш биреү, әҙәбиәтте пропагандалау эшенә күп көс һала.

Быларҙан тыш, С.Сафуанов йәмғиәт эштәрендә актив ҡатнаша. Бер нисә тапҡыр СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Тарих, тел, әҙәбиәт институтының партия ойошмаһы секретары вазифаһын башҡарҙы. 15 йылдан ашыу республиканың «Белем» йәмғиәтенең әҙәбиәт-сәнғәтте пропагандалау буйынса Ғилми-методик Советының председателе булып тора; Башҡортостан Яҙыусылар союзының тәнҡит секцияһының эшендә актив ҡатнаша.

Ғөмүмән, әҙиптең илле йыллыҡ юбилейы төрлө яҡлап өлгөрөп еткән ваҡытына тура килде. Ул әле беҙҙең әҙәбиәт ғилемен яңынан-яңы ғилми хеҙмәттәр, өрәңы асыштар һәм табыштар менән ҡыуандырасаҡ. Ҡәләмдәш дуҫҡа ныҡлы һаулыҡ, ижади уңыштар теләйек.

*1981 йыл*

## Ғалим үткән юл

Элекке Стәрлебаш мәҙрәсәһенең хәлфәләренән кемдәлер һаҡланып ҡалған боронғо ҡулъяҙма һәм баҫма китаптар артынан командировкаға китергә йыйынып йөрөй инек. Институттың иң оло ғилми сотрудниктарының береһе Афзал Ҡудаш, был ҡыҙыҡлы командировкала үҙенең дә ҡатнаша алмауына үкенес белдереп, оҙата сыҡҡанда:

— Һеҙгә Стәрлебаш мәҙрәсәһенең тарихы мәғлүм, унда башҡорт шағирҙары Шәмсетдин Зәки, Ғәли Соҡоройҙарҙың хәлфә булып тороуҙарын да, Мифтахетдин Аҡмулланың шул мәҙрәсәлә уҡыуы хаҡында ла беләһегеҙ. Шуға күрә, айырата ҡулъяҙма китаптарға иғтибарлы булығыҙ. Уларҙа беҙҙең әҙәбиәт тарихы өсөн мөһим материалдар булыуы бик мөмкин, — тип, урынлы кәңәштәр биргәйне. Шулай уҡ Стәрлебаш мәҙрәсәһендә 1913 йылда Көнсығышты өйрәнеүсе академик В.В.Бартольдтың булып китеүе, мәҙрәсәнең һәм Ғәли менән Хәбибулла хәлфәләрҙең шәхси китапханаһында бынан 300 хатта 500 йыл элек яҙылған ҡулъяҙма китаптар менән танышып хайран ҡалыуы хаҡында ла һөйләгәйне ул.

Китаптарын беҙҙең институтҡа васыят итеп, ошо йылдың апрель айында ғына вафат булған Айдабулов Әптрахман тап ана шул китапханаһы менән академик В.В.Бартольд танышып киткән Ғәли Шлатайҙың улы булып сығыуы Афзал ағайҙы тағы ла ҡанатландырып ебәрҙе.

Бына хәҙер бер нисә аҙна инде Афзал ағай институттың ғилми-техник работнигы, боронғо ҡулъяҙмаларҙы һәйбәт таныусы Барый Ғәниев менән бергә ана шул Стәрлебаштан алып ҡайтылған китаптарҙы тәртипкә килтереү менән мәшғүл.

— Тәбиғи, был ғәрәп, фарсы, төрки телдәрендә яҙылған йөҙҙән ашыу китаптың күпселеге ислам дине тәғлимәттәренә һәм уларға аңлатмалар биреүгә ҡайтып ҡала. Ләкин үҙ заманында Башҡортостандағы иң абруйлы был мәҙрәсәлә шәкерттәргә донъяуи фәндәрҙән дә мәғлүмәт бирелгән. Ҡулъяҙмалар һәм баҫма китаптар араһында, мәҫәлән, ғәрәп философияһы, донъя тарихы, логика, геометрия, физика, география һәм астрономия фәндәре буйынса әҙәбиәттең булыуы быға асыҡ миҫал булып тора. Ҡулъяҙмалар араһында башҡорт яҙма әҙәбиәте тарихын артабан өйрәнеүгә кәрәкле материалдарҙың осрауы ла беҙҙең өсөн айырата ҡыуаныслы, — ти Афзал Ғәлләмович.

— Әлегә беҙҙең бурыс, — тип дауам итә ул һүҙен, — был китаптарҙың аңлатмалы каталогын төҙөп, уларҙы ғилми китапханаға тапшырыу, ә артабан ошо ҡомартҡылар араһынан әҙәбиәтселәр генә түгел, тарихсылар ҙа, философтар ҙа, телселәр ҙә үҙҙәренә кәрәкле материал табасаҡтар. Былары киләсәк эше...

Әлбиттә, был әҙәбиәт ғилеменә утыҙынсы йылдарҙың баштарында уҡ килеп, ҡырҡ йылдан ашыу ғүмерен башҡорт әҙәбиәтен өйрәнеүгә бағышлап, ошоғаса әҙәбиәт тарихына, башҡорт әҙәбиәтен мәктәптәрҙә өйрәнеүгә арналған һәм башҡа характерҙарҙағы йөҙҙән ашыу ғилми хеҙмәттең авторы Афзал Ҡудаштың ижады тормошондағы көндәлек бер эпизод ҡына.

... Йәмле Дим буйында, Шишмә районының Келәш ауылында 1912 йылдың 21 октябрендә тыуып, балалыҡ һәм үҫмер йылдары ошо ауылда үткән Афзал Ҡудаш та, Октябрь революцияһына тиклем үк, шағир булып танылған Сәйфи Ҡудаш кеүек, үҙенең ижад юлын шиғырҙар яҙыу менән башлап ебәрә. Уның бер нисә ши-

ғыры матбуғат битендә баҫылып та сыға. Ләкин 1932 йылда, Баязит Бикбайҙың «Үтеп барған көндәр» тигән китабына тәүге рецензияһы баҫылып сыҡҡандан һуң, Афзал Ҡудаштың ижади эшмәкәрлеге әҙәби тәнҡит һәм әҙәбиәт тарихын өйрәнеүгә арнала.

Афзал Ғәлләмовичтың әҙәби-тәнҡит һәм ғилми эшмәкәрлеге, Башҡорт педагогия институтын тамамлап, Ҡазанда әҙәбиәт буйынса аспирантурала уҡыған йылдарында айырата активлашып китә.

Ул 1936 йылда аспирантураны тамамлап, Өфөгә, хәҙерге көндә СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалына ҡараған Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына эшкә ҡайта. Шул ваҡыттарҙан алып бөгөнгәсә Афзал Ҡудаштың ғилми һәм йәмғиәт эшмәкәрлеге ошо институт менән бәйләнә.

Шулай уҡ 1936—1955 йылдарҙа ғалим Башҡортостан дәүләт педагогия институтында башҡорт һәм татар әҙәбиәте, фольклор буйынса лекциялар уҡый.

Билдәле булыуынса, Афзал Ҡудаш ныҡлап ғилми эшкә тотоноп киткән осорҙарҙа, йәғни утыҙынсы йылдарҙың аҙаҡтарында әҙәбиәт тә, тыуып ҡына килгән әҙәбиәт ғилеме лә ҡытлыҡ кисерә ине. Был сәбәптәр Афзал Ҡудашты эшләп ятҡан кандидатлыҡ диссертацияһын мәжбүри ташлатып, бөтөнләй тип әйтерлек дәреслектәрһеҙ тороп ҡалған мәктәптәргә башҡорт әҙәбиәте буйынса яңы дәреслектәр яҙыу эшенә тотондора. Афзал Ҡудаш ошо йылдарҙа башҡорт мәктәптәренең өсөнсө класы өсөн уҡыу китабы, һигеҙенсе класы өсөн әҙәбиәт буйынса дәреслек яҙа, 8—10 кластар өсөн башҡорт әҙәбиәтенән программалар төҙөй. Уның был хеҙмәттәре йылдан-йыл төҙәтелеп һәм киңәйтелеп бер нисә тапҡыр баҫылып сыға. Ҡырҡынсы һәм илленсе йылдарҙың уҡыусыларына Афзал Ғәлләмович иң элек үҙенең ошо дәреслектәре, уҡыу әсбаптары менән таныла.

Афзал Ҡудаш, хәрби хеҙмәткә яраҡлы булмауы сәбәпле, Ватан һуғышында ҡатнаша алмай.

Был йылдарҙа Тел һәм әҙәбиәт институты (әле ул осорҙарҙа тарих секторҙары булмай) үҙенең эшен — башҡорт халҡының хәрби-патриотик традицияларының фольклорҙа һәм әҙәбиәттә сағылышын күрһәтеп, халыҡтың рухын күтәреү кеүек изге эшкә йүнәлдерә. Ошо маҡсаттан сығып, А.Ҡудаш «Граждандар һуғышы геройы Шәһит Хоҙайбирҙин», «Башҡорт халыҡ ижа-

дында халыҡ батырҙары», «Ғ.Сәләм ижадында антифашистик мотивтар», «Мәжит Ғафури — Ҡыҙыл армия йырсыһы» тигән актуаль мәҡәләләре һәм брошюралары менән сығыш яһай. Шулай уҡ был йылдарҙа «Мәжит Ғафуриҙың революцияға тиклемге прозаһы» тигән темаға диссертация яҙып, уны 1946 йылда Мәскәү дәүләт университетының ғилми советында уңышлы яҡлай һәм башҡорт әҙәбиәте буйынса тәүгеләрҙән булып филология фәндәре кандидаты тигән ғилми дәрәжә алыуға өлгәшә.

Шулар менән бергә А.Ҡудаш был осорҙарҙа Тел һәм әҙәбиәт институтында бер нисә йыл сектор мөдире, директор урынбаҫары, директор вазифаларын башҡара.

Һуңғы йылдарҙа А.Ҡудаш башлыса революцияға тиклемге башҡорт әҙәбиәтен өйрәнеүгә материалдар туплау, төрлө характерҙағы библиографиялар төҙөү эше менән шөғөлләнде.

Башҡорт әҙәбиәтен өйрәнеүселәр өсөн уңайлы һәм ҡиммәтле ҡулланма булыу яғынан былар араһында уның институтта ҡулъяҙма хәлендә һаҡланған «XX быуат башында татар стилендәге газета-журналдарҙа баҫылған, башҡорт әҙәбиәтенә, фольклорына һәм теленә бәйләнгән материалдарҙың аннотациялы библиографияһы» һәм Р.Бикбаев менән берлектә төҙөлөп 1969 йылда баҫылып сыҡҡан «Башҡорт әҙәбиәте һәм әҙәбиәт ғилеменән библиография» тигән хеҙмәттәре айырым урында тора.

Фән донъяһында һәр бер ғалимдың теге йәки был фәнгә индергән үҙ өлөшө була. Һәм ғалим иң элек ана шуның менән баһалана. Әҙәбиәт ғилемендә бер ғалим теге йәки был әҙәби күренештең закондылыҡтарын асыу һәм тигеҙләү бәхетенә ирешеп, шуның менән фәндә үҙ һүҙен әйтһә, икенсе береһе теге йәки был тарихи фактты тәү тапҡыр асыу, шуның тураһында тәүбашлап һүҙ әйтеүе менән баһалана.

Афзал Ҡудаштың дөйөм эшмәкәрлегенә баһа биргәндә, беҙ уның бына ошо икенсе типҡа ҡараған ғалим икәнлеген һыҙыҡ өҫтөнә алыр инек. Был тәбиғи ҙә. Сөнки Афзал Ҡудаш иң элек әҙәбиәт тарихын, бигерәк тә уның революцияға тиклемге осорон өйрәнде. Ә инде башҡорт әҙәбиәтенең революцияға тиклемге осоро буйынса әлеге көнгә саҡлы материал туплау эше дауам

итә. Был йәһәттән Афзал Ғәлләмовичтың юғарыла әйтелгән һәм әйтелмәгән күп һандағы хеҙмәттәренән тыш, хәҙерге көндә тамамланыу алдында торған «Башҡортостанда милли матбуғат. 1906—1929» тигән хеҙмәтен айырыбыраҡ күрһәтеп китергә кәрәк. Был ҙур хеҙмәтендә автор күрһәтелгән йылдар эсендә Башҡортостанда һәм башҡорттар йәшәгән башҡа өлкәләрҙә ғәрәп графикаһында сыҡҡан, башҡорт халҡының тарихына, культураһына туранан-тура ҡағылышлы булған 121 газета һәм журналға аңлатма бирә. Һәр органдың социаль-политик йүнәлешен, йөкмәткеһен билдәләй. Уларҙа кемдәр редактор булыуын, кемдәр ҡатнашыуын, ниндәй әҫәрҙәр баҫылыуын һәм башҡа мөһим яҡтарҙы асыҡлай, ҡыҫҡаһы, һәр бер органдың ғилми биографияһын тыуҙыра.

Был хеҙмәт Башҡортостанда милли матбуғат менән әҙәбиәт тарихын өйрәнеү эшенә ғалим тарафынан индерелгән иң ҙур өлөш ул, баһалап бөткөһөҙ хеҙмәт ул тип икеләнмәй әйтә алабыҙ. Сөнки бындай эште эшләү өсөн кешеһе кәрәк.

Ошо көндәрҙә филология фәндәре кандидаты Афзал Ҡудашҡа 60 йәш, ғилми эшмәкәрлегенә 40 йыл тулды. Был датаны СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғилми йәмәғәтселеге хөрмәт менән билдәләп үтте.

Ләкин Афзал Ғәлләмович әле ҙур ижад дәрте менән яна.

— «XX быуат башы башҡорт әҙәбиәте» тигән ҙур коллектив теманы тамамлап, үҙемдең 40 йыл буйы йыйған материалымды халыҡҡа биреп бөтмәйенсә ялға китмәйем әле, — ти ул.

Уңыш һәм шатлыҡтар теләйек.

*1972 йыл*

## ТАБЫШТАР ЮЛҒА САҠЫРА

### 6-сы археографик экспедиция көндәлегенән

6-сы археографик экспедицияны 1976 йылдың июнь айында Башҡортостандың Шишмә, Дәүләкән, Әлшәй, Миәкә райондары ауылдарында үткәреү билдәләнде. Экспедицияның максаты — башҡорт халҡының әҙәбиәтенә, тарихына һәм фольклорына ҡараған ҡулъяҙма һәм баҫма китаптар туплау. Өйрәнеләсәк райондарҙа революцияға тиклемге культура һәм мәғариф эшенең торошон билдәләү.

Экспедиция отрядының начальнигы В.И.Әхмәҙиев, ағзалары К.Ә.Әхмәтйәнов, Ә.Х.Вилданов һәм шофер Р.Т.Аллағоловтар.

Экспедиция юлға сығыр алдынан отряд менән ентекле әңгәмә үткәрелде. Өйрәнеләсәк райондарҙың уҙған тарихынан сығып, конкрет бурыстар ҡуйылды. Был райондарҙа революцияға тиклем Утыҙ Имәни, Мифтахетдин Аҡмулла, Сафуан Яҡшығолов кеүек киң билдәле шағирҙар йәшәгән. Уларҙың тормош юлына, ижадына ҡағылышлы материалдарҙы туплау экспедицияның төп бурыстарының береһе булып тора. Шулай уҡ Башҡортостандың был үҙәк райондарында революцияға тиклем мәҙрәсәләр селтәре лә киң таралған булған. Тимәк, боронғо яҙма ҡомартҡылар, Көнсығыштан үтеп ингән ҡулъяҙмалар һаҡланыуы ихтимал. Быларҙы табыу һәм һаҡлап алып ҡалыу сараһын күреү — экспедицияның маҡсатына ярашлы ҙур бурыс. Экспедиция халыҡ ижады әҫәрҙәрен йыйыуҙы төп маҡсат итеп ҡуймаһа ла, быға тиклем билдәле булмаған фольклор ҡомартҡыларына иғтибар итергә һәм яҙып алырға тейешлеге билдәләнде.

Экспедиция эшкә тотонор алдынан шулай уҡ халыҡ араһында эшләү методикаһы буйынса инструктаж үткәрелде. Көндәлек экспедиция ағзаларының дөйөм күҙәтеүҙәренә һәм полевой дневниктарындағы яҙмаларына нигеҙләнә.

* * *

1 июнь.

Экспедиция үҙенең төп эшен Шишмә районының Ар ауылынан башлап ебәрҙе. Ауыл шаҡтай ҙур, «Родина» колхозының үҙәге шунда урынлашҡан. Ҡайһы бер ойоштороу эштәрен башҡарғас, ауылдың оло, боронғоса уҡымышлы кешеләрен һорашып, эшкә тотондоҡ...

* * *

2 июнь.

...Беҙ Келәштә саҡта уҡ Бәрсеүәнбашта муллалар, боронғо китап һаҡлаусы ҡарттар күп булыуы хаҡында ишеткәйнек. Шуға күрә беҙ был ауылға ҙур өмөт бағлап килдек.

Эште «мәсет башын өйрәнеү»ҙән башларға булдыҡ. Сөнки хәҙерге һаҡланып ҡалған мәсет баштары буш булмай. Туймазы районы Егәтәк мәсетенең башынан да беҙ байтаҡ материал алғайныҡ. Бәрсеүәнбаш мәсете лә буш булманы. Ауылдың муллаһы беҙгә шикләнеберәк ҡараны. Тәүҙә «асҡыс миндә юҡ, Мөтәвәлиҙә» тип хәйләләне. Мөтәвәли тигәндәре ҡарышып торманы, мәсеттең асҡысын нигеҙ ташы аҫтынан (йәшереп ҡуйған урыны) барып алды ла мәсеткә алып инде. Әхәт Вилданов менән беҙ мәсеттең башында һаҡланған баҫма һәм ҡулъяҙма китаптарҙы түбәнгә төшөрөп өйрәнеп сыҡтыҡ. Үҙебеҙгә яраҡлы булғандарын айырып алдыҡ. Китаптар бик туҙған. Сөнки уларҙы йүнләп һаҡлаусы булмаған. Ҡулъяҙмалар араһында дини әйберҙәр ҙә, әҙәби әҫәрҙәр ҙә бар. Беҙ уларҙың әҙәбилеген әлегә шиғыр менән яҙылыуына ҡарап ҡына билдәләнек.

Мәсетте ҡарап, китаптарын алып сыҡҡас, айырым йорттарға инеп ҡараныҡ. Халыҡ бик асылып барманы. Ололар динде ныҡ тоталар. Китаптарҙы мәсет башына илттек, тиҙәр. «Беҙ мәсет башын ҡараныҡ», — тигәс,

«мәсеттең аҫтында ла китап күп», — тинеләр. Мәсетте ҡарап тороусы ҡартыбыҙ әллә ҡайҙа китеп олаҡҡан. Шуны эҙләп, 2 сәғәттәй ваҡытыбыҙ үтте. Тапҡас: «Бабай, мәсеттең аҫтында ла китаптар бар, тип әйтәләр бит, әйҙә, бер килгәндә ҡарап китәйек», — тип өндәштек. Ҡарт баш тартманы. Ләкин мәсет аҫты ташландыҡ, утын склады ғына булып сыҡты...

...Төштән һуң Ҡара Яҡуп ауылында эшләнек. Был ауылда элегерәк ҡулъяҙма һәм баҫма китаптар күп булған. Ләкин һуңғы осорҙа иғтибар итеүсе һәм һаҡлаусы булмаған. Шулай ҙа Ҡара Яҡупта беҙ байтаҡ яҙма документтар, ҡулъяҙма китап өҙөктәре һәм баҫма китаптар таптыҡ. Халыҡ эскерһеҙ: бар нәмәһен йәшермәй күрһәтеп торҙо. Ауыл — бик боронғо башҡорт ауылы. Сафиуллин Сәғиҙулла бабай: «Элек Өфө крепосын ошонда һалырға йыйынғандар. Ләкин, һыу юлынан алыҫыраҡ булғас, һалмағандар, ана, анауы тау «Ҡала тауы» тип атала. Ҡаҙып ҡараһаң, әле лә нигеҙ таштары сыға», — тип һөйләне.

* * *

3 июнь.

Был көндө эш Әмин ауылынан башланды. Ауыл бик ҙур, тау буйлап һуҙылып ултырған. Эште мәктәптән башланыҡ. Оло кешеләр хаҡында мәғлүмәт алғас, беҙҙе уҡытыусы Рәүеф Сәйфуллин оҙатып йөрөнө. Ул режиссер Вәзих Сәйфуллиндың ике туған энеһе булып сыҡты. Уларҙың олатаһы уҡымышлы кеше булған. Беҙ уның ҙур бер ҡулъяҙмаһын алып киттек. Шиғыр менән яҙылған бер ҡиссаға оҡшай. Әлегә асыҡлап булманы. Ғаббасова Хәҙисә әбейҙән дә ике ҡулъяҙма алдыҡ. Уның «Йософ-Зөләйха», «Баҡырған» һәм башҡа китаптары ла бар ине. Ғөмүмән, Әмин ауылы беҙгә бай ғына материал бирҙе. Халыҡ алсаҡ, киң күңелле.

* * *

5 июнь.

...Ибраһим ауылы маршрутка инмәгән ауылдарҙың береһе ине. Ләкин беҙ унда булып китергә ниәтләнек. Ауыл советында бер нисә ҡарттың исемлеген алып, ауыл советы секретары оҙатыуында йөрөргә сыҡтыҡ,

Һаҙиев Рәхмәтулла Ғәбделвәкил улы — 1900 йылда тыуған ҡартта булдыҡ. Үҙенең китаптарын бик ихлас күрһәтте. Дини китаптар ине: Ҡөрьән, Тәфсир, Әфтиәк һ.б. Бер бик һәйбәт һаҡланған ҡулъяҙма алдыҡ. Был ҡарт беҙҙе тағы бер-ике кешегә алып барҙы. «Беҙҙең исемлекте ауыл советында әйтеп биргәндәр, мине йөрөтөргә ҡуштылар», — тип аҡланды ул үҙенең ауылдаштарынан. Беҙ эштең бөтөнләй улай түгел икәнлеген аңлатып бирҙек. Әммә ҡарттар бик тиҫкәре һәм йомоҡ булып сыҡтылар. «Ҡөрьәндән башҡа бер ни ҙә юҡ», — тип әйтеүҙән уҙманылар...

... «Утыҙ Имәни кеүек шағирҙарҙы белмәйһегеҙме?» — тип һорағас, был бабай беҙгә: «Уны башҡорт яҡтары Мерәҫ ауылдары яҡшы белә. Улар мәжүскә яҡын халыҡ ине. Намаҙҙың да фарызын ғына уҡыныдар», — тип әйтеп һалды. Тимәк, был ауылда дин донъяуи йөкмәткеле әҙәбиәткә лә урын бирмәгән.

Ибраһимдан күрше ауыл Бәйкәйгә индек. Унда Мөғәллим исемле ҡартта булдыҡ. Малайҙары беҙҙең шәхесебеҙ менән ҡыҙыҡһынды. Ни эшләйһең, документтарҙы күрһәтмәһәк тә, институттан алған махсус хатты күрһәтергә тура килде.

«Мин, — ти береһе, — ишеткәйнем, что ҡайһы бер кешеләр иҫке китаптарҙы йыйып һатыу итәләр, тип, — шуға һорайым», — тине. Ысынлап та, бындай шикле кешеләрҙең эҙҙәре әленән-әле күренеп тора. Был хаҡта беҙ Ар ауылында ла, Келәштә лә, Иҫке Мусала ла ишеттек. Урта Азиянан кемдәрҙер китап йыйыу менән шөғөлләнә икән. Иҫке Муса ауылының муллаһы Абдрахманов Лотфой Лотфорахман улы ундай кешеләрҙең береһе менән Өфө Диниә назаратында осрашыуын һөйләне. «Беҙҙең Ташкентта ҡулъяҙмаларҙы өйрәнеү эше яҡшыраҡ тора», — тип аңлатты ул үҙенең китап йыйыуын, ти...

* * *

6 июнь.

Иҫке Ябалаҡлы ауылында булдыҡ. Ауылда бер нисә кешелә булып, баҫма китаптарын ҡараныҡ. Вилданов Йәғәфәр Вилдан улы (1893) ауылда иң оло кешеләрҙең береһе. Уның ике төргәк баҫма китабы бар. Ләкин күбеһе дини. Үҙе бик йырсы ҡарт. Мин унан өс йыр

яҙып алдым. Ҡарт йырҙы һүҙҙәренән айырмай, йырлап яҙҙыра. «Бынан ун йыл элек килһәгеҙ, исмаһам, һәйбәт итеп йырлап ишеттерер инем», — ти. Ауылдың тарихына ҡағылышлы легендалар һөйләне. Үҙҙәрен, Ирәндек буйынан күсеп килгәнбеҙ, — тине. Бында күсеп килгәндә, Миһран ҡарттың 500 йылҡы малы булған, бик бай булған, — тине. Зыятдин Шипаевтың шәхесен асыҡлау буйынса ла эш алып барылды. Булатов Миңлебай ҡарт (1909) Зыятдин ҡартта аҫрау булып торған. З. Шипаев 1930 йылда раскулачивать ителеп, 1940 йылдарҙа 10 йыл йөрөп ҡайтҡан һәм һуғыш сығыр алдынан Урта Азияға сығып китеп вафат булған...

...Ябалаҡлы зыяраты шаҡтай боронғо. Беҙ уның ҡәбер таштарын фотоға төшөрөп алдыҡ. Унда яҙыу урынына тамға ҡуйылған таштар күп. Бындай күренеш менән беҙ тәү тапҡыр осраштыҡ. Таштарҙың ҡайһы берҙәрендә ғәрәпсә яҙмалар ҙа бар. Шулай булһа ла, уларында ла тамға. Күрәһең, меңле башҡорттары, ғәрәп яҙмаһы ингәнгә тиклем үк, тамға яҙыу менән файҙаланғандар һәм уның традицияһы оҙаҡ йылдар ғәрәп яҙмаһы менән бергә дауам иткән. Иҫке Ябалаҡлы элек Димдең икенсе яғында булған. Беҙгә ундағы ҡәберлекте ҡарарға тура килмәне. Хәҙерге Иҫке Ябалаҡлыла 1824 йыл менән даталанған таштар бар...

* * *

7 июнь.

Был көндө беҙ Түбәнге, Урта, Юғары Хәжәт ауылдарында булдыҡ. Унан, Димдең икенсе яғына сығып, Суҡраҡлы, Әлбай ауылдары аша Дәүләкәнгә ҡарай юл тоттоҡ...

...Юғары Хәжәт башҡа Хәжәттәрҙең сығанаҡ ауылы. Ауыл Димгә яҡын ғына урында, бик матур ергә ултырған. Урамдары ла, йорттары ла төҙөк. Боронғо культураға ла иғтибар бында көслөрәк булғанлығы күренә.

Вәлиев Фәтҡулла Ғәбделғәзиз улы (1886) — ауылдың оло кешеһе. Туҡһан йәштә булыуға ҡарамаҫтан, үҙе теремек, ныҡ һаҡланған ҡарт. Беҙ барып ингәндә, һаҡал-мыйыҡтарын борсоп, ҡырынып ултыра ине. Ҡулдары ҡалтырамай. Бәкене бик тилбер тота. Ул әбейе менән бергә үҙенең бөтә китаптарын күрһәтте. Унда һаҡланған китаптарҙың күбеһе Өфөлә «Ғәлиә» мәҙрә-

сәһендә уҡыған Атауллин Ғәйфулланан тороп ҡалған. Улар араһында Р.Фәхретдинов, З.Камали, Ф.Кәрими әҫәрҙәре бар. Китаптарҙың асыҡ урындарына төрлө хәл-ваҡиғалар теркәлеп барған. Был китаптарҙы бабай беҙгә бүләк итеп биреп ебәрҙе...

* * *

1 июль.

...Туҡһанбай ауылы — Мифтахетдин Аҡмулланың тыуған ауылы. Унда беҙ туранан-тура Бәҙретдинов Хәбетдин бабайға барҙыҡ. Алтмышынсы йылдарҙа унда Рәшит Шәкүров та булып киткән, унан һуң тағы ике кеше булған. Аҡмулла шиғырҙарын алып киткәндәр. Шулай ҙа беҙгә лә өлөш тейҙе. Рәшит Шәкүров килеп киткәндә, бабай Аҡмулланың атаһына яҙған хатының ике генә юлын белгән булһа, хәҙер был хаттың күсермәһе тулыһынса бар. Беҙ ул хатты 1974 йылда Ҡаңлы-Төркәйҙә тапҡайныҡ. Бабай был хатҡа Үзбәкстанда барып юлыҡҡан. Туҡһанбайҙан Үзбәкстанға күсеп киткән кешеләрҙә һаҡланған булған был хат һ. б. шиғырҙар. Ләкин был хаттың оригиналы Үзбәкстанда — Фирғәнә өлкәһе, Алтыораҡ районы, Файзабад ауыл советы, Жилгород тигән поселокта тороп ҡалған. Сөнки Хәбетдин бабай 6 йыл шунда йәшәп ҡайтҡан һуңғы йылдарҙа. «Көҙгә тағы китәм», — тип ултыра. Бабай үҙҙәренең ырыуын Күл иле меңдәре, ти...

СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының 8-се археографик экспедицияһы көндәлеге.

Экспедиция Башҡортостандың Баймаҡ, Әбйәлил райондарының ауылдарында уҙғарылды. 25 майҙан 19 июнгә тиклем. 1977 йыл. Экспедиция составы: Әхмәҙиев В.И. — отряд начальнигы, Вилданов Ә.Х., Ғәләүетдинов И.Г. — ғилми хеҙмәткәрҙәр, Аллағолов Р.Т. — шофер.

* * *

25 май.

Сәғәт көндөҙгө 11-ҙә 30 минутта, институт эргәһенән тейәлеп, юлға сыҡтыҡ. Үҙәк баҙарҙа туҡтап, ваҡ-төйәк

алдыҡ. Унан һуң «Театр» кафеһында төшләктә ашап, сәғәт 12-ләрҙә алыҫ юл алдыҡ. Был көн юл һәйбәт үтте. 300 саҡрым самаһы юл үтеп Күгәрсен районының Сәйетҡол (Әбсәләм) ауылына килеп еттек. Бында Ә.Х.Вилдановтың яҡындарына (проф. Ғ.Ғ.Сәйетбатталовтың аталарына) төшөп ҡунып киттек. Бик алсаҡ кешеләр, һәйбәт ҡабул итеп, аш-һыуы менән йомарт бүлештеләр.

Зыяраттарына барып ҡәбер таштарын ҡарап йөрөнөк. 1840 йылдарға ҡараған һәйбәт таштар бар. Ауыл йәмле Оло Эйек буйына ултырған.

* * *

26 май.

Был көн юл бик ауыр булды. Урал тауҙары аша үттек.

Һүрәм йылғаһы буйына туҡтап ял иттек. Киске сәғәт 5-тәрҙә Баймаҡ районының Йомаш ауылына килеп еттек. Ауыл советы председателе Байегетов Мөхәммәт Сәйфетдин улы беҙҙе бик йылы ҡаршыланы, Һаҡмар буйынан йәмле бер урынға килтереп урынлаштырҙы.

Был ауыл районда алдынғы һаналған «Һаҡмар» колхозының үҙәге икән. Мөхәммәт ағай үҙ ҡулында булмаһа ла, колхоздың байлығына таянып, беҙгә кәрәкле аҙыҡ-түлек яҙҙырып алыу ауыр булмаҫ, тип, үҙе тәҡдим итте. Бындай йомартлыҡҡа беҙҙең күңел күтәрелеп китте. «Бына нисек бит Баймаҡтар, үҙҙәре үк беҙҙең кәрәк-яраҡты белеп, ярҙам ҡулы һуҙырға торалар», — тип ҡыуаныштыҡ беҙ. Егеттәр, дәртләнеп китеп, балыҡ тоторға йәбеште. Төрлө юлдар менән 2 килолай балыҡ тотолдо. Серәкәй бик күп ине. Төнөн беребеҙ ҙә рәтләп йоҡлай алманыҡ. Әйләнеп-тулғанып яттыҡ, йоҡлай ғына башлаһаң, тызылдап серәкәй килеп ҡуна, өҫтәүенә, спальный мешокка күнегеп булмай йонсотто. Шулай итеп, беҙҙең отряд тулыһынса полевой шарттарҙа йәшәй башланы.

* * *

27 май.

Эште Юлыҡ ауылынан башлап ебәрҙек. Был ауыл — тарихи шәхестәрҙең тормош юлына бәйләнеш-

ле тарихи ауылдарҙың береһе. Унда миллионер Закир һәм Шакир Рәмиевтар тыуып үҫкән. Бында татар драматургы Мирхәйҙәр Фәйзи йәшәгән. Революция йылдарында Бабич булып киткән. Тома йәтим тороп ҡалған Хәбибулла Ғәбитов, күрше Әбделкәрим ауылынан килеп ошонда малайлыҡта йөрөгән, мәҙрәсәһендә белем алған.

Шуға күрә беҙ был ауылды ентекләп өйрәнергә булдыҡ. Әлбиттә, бында элегерәк ҡулъяҙмалар ҙа, баҫма китаптар ҙа күп булған. Ауылда таштан һалған ҙур мәсеттең бинаһы манараһы-ние менән әле лә мөһабәт булып ултыра. Бынан бер нисә йыл ғына элегерәк уның башында китаптар бик күп булған. Беҙ, бәлки, әле лә барҙыр, тип унда менеп ҡараныҡ, әммә унда — күгәрсен... Башҡа бер ни ҙә булмай сыҡты. Ауылдың муллаһы булып йөрөгән, бик күп китаптар һаҡлаған бер мулла бынан бер нисә йыл элек вафат булған. Шулай ҙа өй башында китаптары һуңғы көндәргәсә һаҡланған булған. Быны белеп ҡалып, төрлө һәптәндәр туҙҙырып таратып алып бөтөргәндәр. Хәҙерге көндә ул өй бикле тора ине. Унда йәшәгән ҡатын колхоз һыйырҙары менән йәйләүгә киткән. Шулай итеп, беҙ уның өйөн тикшереп ҡарай алманыҡ. Шулай ҙа унда китап булыуы бик ихтимал, тинеләр. Мулланың ҡыҙы Хәлиҙә мәктәптә башҡорт әҙәбиәте уҡыта. Ул: «Әгәр китаптар булһа, үҙем ҡарап алып ҡуйырмын», — тип тороп ҡалды.

Исмәғилов Нурислам Ғибаҙулла улынан (1905) ике ҡулъяҙма алдыҡ. Баҫма дини китаптары байтаҡ ине. Ҡулъяҙманың береһе — ғәрәп теле сарфы, икенсеһе — ике-өс битлек ҡағыҙ. Унда «Суда үҫкән камышларның...» тип башланған шиғырҙың бер варианты бар.

Әбүбәкеров Ғүмәр бабай (1894) — ауылдың иң оло ҡарты. Уның байтаҡ баҫма китабы бар ине. Ҡулъяҙмаларын Ҡазандан килеп алғылап киткәндәр. Бында, М.Фәйзи ижады буйынса диссертация яҙыу өсөн материал эҙләп, Муса Мөләков килеп сыҡҡан. Китаптар ҙа алып киткән. Драматургтың Юлыҡтағы тормошо хаҡында тулы мәғлүмәт туплаған. Ғүмәр бабай өс һуғыш ветераны: Беренсе империалистик һуғышта, унан Граждандар һуғышында һәм Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан, һүҙгә оҫта, һөйләргә ярата. Сәй эсереп, һүҙгә ойотоп ебәрҙе. Был яҡтарҙағы Граждандар һуғышы ва-

ҡиғаларын яҡшы белә. Ләкин дөйөм билдәле тарихи ваҡиғаларҙы һөйләү менән ялҡыта. Үҙенең күргән-белгәндәре шул дөйөмдөң эсендә күмелеп ҡала.

Юлыҡтан беҙ Әбделкәрим ауылына килдек. Был — Хәбибулла Ғәбитовтың тыуған ауылы. Шағирҙы бик аҙҙар хәтерләй, сөнки уның балалығы Юлыҡ ауылында үткән. Бында беҙ Моратов Хәбир Рәхимйән улында (1898) Түңгәүер ырыуына ҡараған бер шәжәрәгә тап булдыҡ. Шәжәрәне бабай бирмәне. Ишмөхәммәт Ғәләүетдинов шәжәрәнең боронғо өлөшөн күсереп алды. Шулай уҡ бабай беҙгә ике баҫма китап бүләк итте. Тағы бер нисә йортта булдыҡ, кәрәкле әйберҙәр осраманы.

Төштән һуң Йомаш ауылында эшләнек. Бында Иҫәнов Сәфиулла Хафиз улы (1903) тигән бик үҙенсәлекле ғалим һәм художник менән осраштыҡ. Ул ысын мәғәнәһендә халыҡ ғалимы. Ул башҡорт халҡының көнкүреше, ғөрөф-ғәҙәттәре тураһында тарихи хеҙмәт яҙған. Бынан тыш Йомаш ауылы, мәктәбе, Йомаш ауылы халҡының килеп сығышы һ. б. тураһында бик күп ҡулъяҙмалары бар. Уларҙың байтағын (әгәр ике экземпляр булһа) беҙгә бирҙе. Башҡорт халҡының тарихи үткән көнкүрешенә ҡарағанын И.Ғәләүетдинов магнитофонға яҙып алды.

Уның эшмәкәрлегенең икенсе яғы — ул оҫта художник: ағастан киртеп ҡош, хайуандар һынын яһай. Өйө, баҡсаһы кәртәләп ҡуйылған, ағас араһындағы ҡоҙоҡ яны үҙе бер музейҙы хәтерләтә. Ул шулай уҡ халыҡтың үткәне, йыр-моңо хаҡындағы мәҡәләләрҙе газета-журналдарҙан ҡырҡып алып йыйып бара. Уның хаҡында район, өлкә газеталарында бер нисә мәҡәлә баҫылып сыҡҡан. Әммә уның ғилми эшмәкәрлегенә етерлек баһа бирелмәгән әле.

Артабан был ауылда Сәйғәфәров Ғөбәйҙулла ҡартта булдыҡ. Унан бер ҡулъяҙма дәфтәр алдыҡ. Унда ошо тирә ауылдарының һәм халҡының тарихына ҡараған тарихи мәғлүмәттәр бар.

Был ауылдан шулай уҡ Хәсәнов Ғәлимйән бабайҙан «Йософ» китабының тулы баҫмаһын алдыҡ.

Был ауыл — Әҙһәм Әлибаевтың тыуған ауылы, бер урам уның исемен йөрөтә.

* * *

28 май.

Баймырҙа ауылын эҙләп байтаҡ йөрөлдө. Ауыл менән ауыл араһы бик алыҫ, юлдарҙа ауылдарҙы күрһәтеүсе билдәләр, яҙыуҙар юҡ. Беҙ, Баймырҙаны эҙләп, Ишмөхәмәт ауылына барып сыҡтыҡ. Баҡһаң, Баймырҙа ауылында ике-өс өй генә ҡалып, ҡалғандары ошо Ишмөхәмәт ауылына күсеп бөткәндәр икән. Бында бер бик оригиналь ҡарт менән осраштыҡ...

Был ҡарт 90 йәшлек. Ҡолағы ишетмәй. Үҙе ап-аҡ һаҡаллы, тере, һау-сәләмәт. Ҡолағына үҙе аппарат яһап алған. Аппараты бик ябай. Бармаҡ йыуанлыҡ резина көпшә, 1 метр ярым самаһы. Шуның бер осона һыйыр мөгөҙөнән микрофон яһап ҡуйған. Бабай көпшәнең бер осон ҡолағына тыға ла, һыйыр мөгөҙөн һиңә тоттора, һин шуға ҡысҡырып һөйләһәң, бөтәһен дә ишетеп тора. Фотоға төшөргәйнек тә, фотоаппаратыбыҙ боҙоҡ булып сыҡҡан. Быға тиклем төшөрөлгән бөтөн кадрҙар юҡҡа сыҡҡан. Дини бер нисә китабы бар ине. Алманыҡ. Бынан һуң тағы бер нисә өйгә инеп сыҡтыҡ.

Был ауылда Биишев фамилиялы кешеләр күп икән. Беҙ Биишев Әхмәтшәриф Харрас улында (1898) булдыҡ. Дини китаптары байтаҡ ине. Беҙгә кәрәкле әйбер булманы. Бынан беҙ Яңғаҙы ауылына киттек. Тимербулатов Шәкирйән Ғабдулла улынан (1904) бер нисә баҫма китап алдыҡ. Был ағай фронтта ла булған. Фронттан яҙған фронтовой йырҙарын да алып киттек. Әйткәндәй, был тирәлә әлегә бәйеттәр осрамай. Уның шәжәрәһе лә бар. Ҡарттарҙан ишетеп, үҙе төҙөгән. Матурлап күсереп ебәреүен һорап, адресыбыҙҙы биреп киттек. Был ауылда Тимербулатов Мостафа Заһиҙулла улында ла (1901) булдыҡ. Дини китаптары бар ине. Ул беҙгә Хәйбулла районы Юғары Түш ауылына барырға кәңәш итте. Был ауыл 12 саҡрым самаһы алыҫлыҡта ятһа ла, маршрутка инмәһә лә, барып сыҡтыҡ. Был көндә Хәйбулла районында һабантуй булған. Шуға күрә ауыл буш ине. Әммә беҙгә кәрәкле ҡарттар табылды. Бер ҡарттан ҡаҙаҡтар араһынан килеп башҡортлашып киткән ырыуҙың шәжәрәһен алдыҡ. Бында элек Орск мәҙрәсәһендә уҡыған, 1887 йыл тыуған Иҙрисов Исмәғил Баймырҙа улы менән таныштыҡ. Унда баҫма һәм ҡулъяҙма китаптар бар. Үҙенең шәкерт сағынан

бирле яҙа килгән ҡалын дәфтәрендә М.Аҡмулла һ.б. шағирҙарҙың шиғырҙары ла һаҡлана. Ләкин бер ни ҙә бирмәй. Шулай ҙа беҙ унан ике бит ярымлыҡ әйбер алып киттек. Был ҡулъяҙма М.Аҡмулланың бығаса билдәле булмаған шиғырҙары булып сыҡты. Шуға күрә был ҡартҡа яңынан бер барып сығыу кәрәк булыр.

Ҡайтышлай Ишмырҙа ауылына һуғылдыҡ. Ауыл ҙур. Ләкин бында боронғо китаптары булған кешеләр үлеп бөткән, (һуңынан Мәмбәт ауылына килгәс, был Ишмырҙа ауылында Байғотлин Ғәйнислам Ғәбдрәхим улында Мәмбәт ауылының шәжәрәһе һаҡланыуын ишеттек. Ул сит ауыл кешеһе булғас, Ишмырҙа (Йүкә) ауылында уны белмәгәндәр. 29 май көнө бараһы башҡа ауылдар күп булғас, Ишмырҙаға шәжәрә артынан барып торманыҡ. — В.Ә.). Көн шуның менән үтеп китте. 130 км юл йөрөп, Йомаш эргәһендәге базабыҙға әйләнеп ҡайттыҡ.

* * *

29 май.

Был көндө эште Аҡморон ауылынан башлап ебәрҙек. Аҡморон — «Баймаҡ» совхозының үҙәге. Йәкшәмбе көн ине. Шуға күрә ауылда кешене табыуы ҡыйын. Бөтә учреждениеләр ябыҡ, эшләмәйҙәр. Шулай ҙа ауылдың бер нисә ҡарты менән һөйләштек. Был ауыл урыны элек Мәмбәт ауылының йәйләүе булған. Шунан Мәмбәттәр был ерҙе һатҡандар һәм рустар килеп ултырған. Хәҙер совхоз үҙәгендә төрлө милләт кешеләре йәшәй. Тәбиғи, бындай ауылдарҙа әйбер табып булмай.

Беҙ Мәмбәт ауылына йүнәлдек. Унда эшебеҙ уңды: ике ҡартҡа инеп бер бөтөн генә ҡулъяҙма, унан «Мөхәммәдиә» китабын алып киттек. Төштән һуң Ярат, 1-се Этҡол, Буранбай ауылдарында булдыҡ. Ярат ауылында бер ни ҙә табылманы. 1-се Этҡол ауылында «Ваҡыт» газетаһының бер һанын алып киттек. Ул газета 1906 йылда 1-се Этҡол рус-башҡорт училищеһы уҡытыусыһы Ибраһим Азаматовҡа килгән булған. Ауылдың ҙур традицияһы бар. Бынан күренекле кешеләр ҙә сыҡҡандар. З.Ш.Аҡназаров ошо ауылдан. С.А.Галин ошо ауылда йәшәгән. Ауыл культуралы булыуы менән айырылып тора.

Буранбай ауылы — легендар Буранбайҙың тыуған ауылы. Уның хаҡында легенда яҙып алдыҡ. Унан һуң бер әбейҙән бер ҡулъяҙма китап алып киттек. Шуның менән эш тамам булды.

* * *

30 май.

Йәкшәмбе көн эшләгәс, бөгөн ял итергә, үҙебеҙҙең өҫ-башты, документацияны тәртипкә килтерергә булдыҡ...

* * *

31 май.

Йомаштан күсенеп, Баймаҡ аша Иҫке Сибай ауылына юл тоттоҡ. Баймаҡта туҡталып, райкомға инеп сыҡтыҡ. Р.И.Имамовта кеше бар ине. Беҙ райкомдың өсөнсө секретары Хисмәтуллинда булдыҡ. Бик һәйбәт ҡаршы алды. Телефон аша институт менән, Х.Х.Сайранов ағай менән һөйләштек. Унан Иҫке Сибайға килдек. Эргәһендә палатка ҡорорлоҡ урын булмағас, Ҡолтүбә күле эргәһенә килеп урынлаштыҡ. Күл шаулап тик ята, көслө ел иҫә.

Көн ошо күсенеү менән тамамланды.

* * *

1 июнь.

Юлда Татлыбай ауыл советы председателе Әхмәтов Ғаян Нуретдин улы беҙҙең машинаға ултырып ҡайтты. Ул беҙгә ауыл советына ҡараған ауылдар, ундағы ҡарттар хаҡында тулы мәғлүмәт бирҙе.

Маршрутҡа инмәһә лә, беҙ Кәрешкә ауылына индек. Унда Ишбаев Фахрараз Аллағыуат улында һәм Ишбаев Ғилметдин ҡартта булдыҡ. Фахрараз ҡарттың ҡулъяҙма китаптары ла булған, ләкин бер нисә көн элек кенә Сибайҙан экскурсияға килгән уҡыусыларҙың уҡытыусыһы алып киткән. Кем икәнен белә алманыҡ. Бер баҫма китабын биреп ебәрҙе. Ә. Вилданов Ғилметдин ҡарттан бер ҡулъяҙма һорап алған. Бынан беҙ Манһар ауылына киттек. Көскә эҙләп таптыҡ. Өс-дүрт өйлөк бөтөп барған бер ауыл булып сыҡты. Эҙләп килгән кешебеҙ өйҙә булманы. Халҡы ҡырыҫ. Көскә һыу һорап эсеп киттек...

Абдрахман ауылында ла эш уңманы...

...Төштән һуң Вилданов менән Ғәләүетдинов Иҫке Сибайҙа булдылар. Бер нисә әйбер алып ҡайттылар. «Диуана хикмәт» тигән китаптың тулы баҫмаһы Кашапов Йомағужа ҡартта һаҡлана икән. Бирмәгән.

* * *

2 июнь.

Төркмән ҙур, хәҙергесә бик төҙөк ауыл. Мәктәп, ауыл советы, балалар баҡсаһы, «Ирәндек» совхозының правлениеһы — бөтәһе лә кирбестән. Ауыл советы председателе өйҙә юҡ ине. Секретары халыҡты бигүк белмәй, йәш ҡыҙ. Совхоздың партком секретары Хәмитов Рәфҡәт Муллаян улы бик һәйбәт кеше булып сыҡты. Совхозға ҡараған ауылдарҙы яҡшы белә. Уларҙағы ҡарттар хаҡында мәғлүмәт бирҙе. Беҙ бында ит мәсьәләһен дә хәл иттек. Үҙҙәре үк килтереп бирҙеләр. Рәфҡәт беҙгә ҡымыҙ эсеп китергә тәҡдим итте. Ҡымыҙҙы Иҫәнбәт ауылы эргәһендә яһайҙар икән. Туйғансы ҡымыҙ эстек, өҫтәүенә, сәйебеҙҙе бушатып термостарға һалып ебәрҙеләр. Был беҙҙең йомарт Баймаҡ менән тәү тапҡыр осрашыуыбыҙ булды...

* * *

3 июнь.

...Рәхимов Ғәбделмәтин Хәлил улының бай библиотекаһынан 15-ләп ҡулъяҙма китап алып киттек. Китаптарҙың күпселеген уның атаһы Хәлил хәҙрәт (1863—1927) күсереп яҙған. Троицкиҙа Зәйнулла ишан мәҙрәсәһендә уҡыған. Муса Бигнев менән полемикаға инеп, «Химаятел әүлаят...» (исеме яҡынса) тигән китап яҙып баҫтырып сығарған. Йәғни дин ғалимы юғарылығына күтәрелгән кеше булған. Был китаптың береһен Мәтин ағай беҙгә күрһәтте. Ләкин алғы өлөшө төшкәнлектән, сығанаҡ мәғлүмәттәрен белә алманыҡ. «Тағы ла бар ине, кемдер алып торған», — тип быныһын ағай беҙгә бирмәне. Уның тағы ла бер шкаф баҫма китабы тороп ҡалды. Үҙе 1917 йылғы, намаҙға йөрөй. Халыҡ уны Мәғсүм (хәҙрәт улы) тип кенә йөрөтә. Үҙе бик асыҡ, йомарт кеше. Беҙ уға адресыбыҙҙы биреп киттек...

* * *

5 июнь.

...Түбәнге Иҙрис ауылына килдек. Унда һабантуй бара ине. Бөтә халыҡ шунда ағыла. Бала-саға, ҡарт-ҡоро, атлыһы ат менән, машиналыһы машина менән, самауыр, һауыт-һабаһын тейәп ағылалар. Һабантуй бик күңелле үтте. Беҙ Ишмөхәммәт Ғәләүетдинов менән ситтән күҙәтеүсе булып йөрөнөк. Мырҙағилдин ағай үҙенең туғандары ҡорона алып барып сәй эсерҙе. Мәйҙәре лә бар ине. Был яҡта милли колорит бик көслө, күҙгә бәрелеп тора. Милли кейем кейеп, ҡупшыланып килгән урта һәм өлкән йәштәге бисәләр бейеп бүләктәр алдылар. Ҡурай, йыр-моң яңғырап торҙо. Беҙ бында Муллаҡай, Иҙрис ауылдарының ҡарттары менән осрашып мәғлүмәт алдыҡ.

Кисен дә өйгә ҡайтыусылар бик һирәк булды. Ауыл эргәһендәге бейек тау башына менеп, шунда сәй эсеп, уйнап-көлөп төн үткәрәләр, тип һөйләнеләр.

* * *

7 июнь.

Байым ауылы элек 2-се Бөрйән волосына ҡараған. Ауылдың бай традициялары бар. Халҡы һәйбәт, ҡунаҡсыл, киң күңелле. Ауылдан алыҫ түгел иҫке бер зыярат бар. Уның таштарын барып ҡараныҡ... Беҙҙе зыяратта ауылдың оло кешеһе Хәлитов Мотаһар Ғималетдин улы оҙатып йөрөнө... Мотаһар ағай (1910) — үҙе аң-белемле кеше. Ватан һуғышы ветераны. Хәҙергесә лә, ғәрәпсә лә грамоталы. Беҙ унан бик һәйбәт һаҡланған 6 дана ҡулъяҙма алып киттек. Үҙе: «Ошо ҡулъяҙмалар араһында башҡорт тарихы ла бар», — тип әйткәйне. Был тарих Мөслимиҙең «Тәуарих Болғария»һы булып сыҡты. Бабай беҙҙе һәйбәтләп сәй эсереп ебәрҙе...

* * *

8 июнь.

Был көн Темәстә булдыҡ. Ауыл ҙур. Кешеләр бербереһен насар беләләр. Шуның өҫтәүенә был ауылды заман елдәре тегеләй ҙә, былай ҙа ҡаҡҡан, халыҡ бик тиҙ генә сиселеп бармай. Бик ҙур китапханаһы булған

Шибли мулла үлгәс, китаптарын уландары таратып алғандар, хәҙер эҙенә төшөүе ҡыйын. Ә ҡарт үҙе тере саҡта, унан беҙҙең тарихсылар байтаҡ әйбер алып киткәнлеген һөйләнеләр. Беҙ уның төп өйөндә булдыҡ. Ләкин килене бер нәмә лә күрһәтмәне. Шулай ҙа унда байтаҡ әйбер һаҡланыуын күреп-белеп һөйләүселәр булды. Тимәк, алдағы көндә быны иғтибарҙан ысҡындырмаҫҡа кәрәк. Китаптарының бер аҙын Диниә назаратына ла оҙатҡандар икән. Уның бер өйөндә әле лә ауыл ҡарттары ғәйет һәм йома намаҙына йыйылалар икән.

Буранбаев Барый Мирхәйҙәр улы (1911) — пенсионер. Уҡытыусы булып эшләгән. Урындағы тарихсы-краевед. Ҡулъяҙма һәм баҫма китаптарҙы, шәжәрәләрҙе ул үҙе лә йыя икән. Темәстә Шәһит Хоҙайбирҙин эшләп киткән ике ҡатлы ағас йортта музей төҙөргә йыйынып яталар. Ул беҙгә ҡалын бер ҡулъяҙма бүләк итте. Баштан аҙағынаса поэтик әҫәр. Ни икәнлеген әлегә асыҡлай алманыҡ, быға¬са осраған нәмә түгел. Үҙе йырлап бер йыр яҙҙырҙы. Беҙҙе фотоға төшөрөп алды. Һәйбәтләп сәй эсереп ебәрҙе. Беҙ уға адрес ҡалдырҙыҡ. Бәйләнеш тоторға вәғәҙәләштек. Ул беҙгә «Сурағол» романының авторы Талип Хәйбуллин Туҡтағол ауылынан икәнлеген әйтте.

Темәстән Талҡаҫ күле буйына әйләнеп ҡайттыҡ һәм, тейәнеп, Күсей ауылы аша Әбйәлил районы Ишҡол ауылына юл тоттоҡ. Ирәндек тауын туранан аша сыҡҡанда машинаның рессоры биртенде, береһе генә тотоп ҡалды...

Күсей ауылына һуғылып, Кинйәбулатов Исхаҡ Ҡотлоәхмәт улының баҫма китаптарын ҡараныҡ. Ул, ҙур бер йәшниккә тултырып, күмергә әҙерләп ҡуйған икән. Үҙе өйҙә булмаһа ла, әбейе ҙур ихласлыҡ күрһәтте. Бер-ике баҫма китабын алып киттек. Дини әйберҙәр, ҡулъяҙмаларын элек беҙҙә эшләп киткән Таңсулпан Дәүләтколова алған икән. Ул үҙе лә ошо ауыл ҡыҙы. Бәлки, ул был китаптарҙы беҙҙең архивҡа тапшырғандыр...

Ишҡолға килеп, ауыл советына индек. Таныштыҡ. Улар беҙгә Ҡыҙыл йылғаһы буйынан урын күрһәттеләр. Кисен беҙҙе, ҡанға туҙҙырып, серәкәй таланы. Йүнле йоҡо күрә алманыҡ. Ғөмүмән, бик йыш күсенеү, урын алмаштырыу еләтә, ял итергә лә, эшләргә лә ҡамасаулай.

* * *

9 июнь, 1977 йыл.

Әбйәлил районында эш уңышлы башланды. Әделмәмбәт (Һарт) ауылында Зөлҡәрнәев Рәхимйән Хәкимйән улында булдыҡ. Үҙе беҙҙең институт заказы буйынса, тирмә эшләп йөрөй ине. Шул уҡ тирмәне «Мосфильм»дән М.Кәримдең «Ай тотолған төндә» трагедияһын киноға төшөрөргә килеүселәр ҙә алып китеп файҙаланалар икән...

Апайҙа бер нисә баҫма китап бар ине. Дини әйберҙәр. Бер-икеһен алып киттек.

Әлмөхәмәт ауылында Әхмәтйәнов Әбүзәр Ғәбдрәшит улында (1905) булдыҡ. Беҙҙең Кимдең атаһы. Был тирәне бик яҡшы белә. Үҙе бер мулланан ҡалған ҡулъяҙма мөнәжәттәр биреп ебәрҙе, һәйбәтләп сәй эсеп, һөйләшеп ултырҙыҡ. Был тирәлә, ғөмүмән, районда абруйлы кеше. Персональ пенсионер. Коммунист.

Ишбулды ауылында Ғүмәров Хажғәли ҡарттың китаптары байтаҡ. Беҙ унан «Пәйғәмбәрҙәр ҡиссаһы»ның ҡулъяҙмаһын алдыҡ. Ошо яҡта күсерелгән. Хәби кантон бер ат биреп күсертеп алған. Унан Ғабдрахман Биксурин тигән кешегә тороп ҡалған. Ғабдрахман Биксуриндан Хажғәли ҡартҡа күскән.

* * *

14 июнь.

Бөгөн көн юлда үтте. Амангилде, Ҡаҙмаш, Рысҡужа ауылдарын ҡыҙырып йөрөп сыҡтыҡ. Шап-шаҡтай ҡарттар бар. Баҫма китаптары ла бар, ләкин дини әйберҙәр булғас, берҙән, үҙҙәре биреп бармайҙар, икенсенән, беҙ ҙә бик ныҡышып һорамайбыҙ.

Рысҡужа ауылында бер һандыҡ китап һаҡлаусы сәсән әбей Әсмә Мостафина бар икәнен Өфөлә Әкрәм Биишевтан ишеткәйнек. Ҙур өмөт бағлап килһәк тә, бушҡа булды. Әбей күптән түгел донъя ҡуйған, ә китаптарын төрлө яҡҡа таратып алып бөткәндәр. Ҡаҙмашта ла эш сығарып булманы. Бындағы әйберҙәрҙең күбеһен элек-электән алып китә торған булғандар.

---

[244] Апай — урындағы һөйләш — ағай.

Ауыл тарихына, культураһына ҡараған әйберҙәрҙе Өфөлә йәшәүсе Ғәли ағай Ишбулатов та йыйып алған, сөнки ул үҙе ошо ауылда тыуып үҫкән.

...Стартер табыуға беҙҙең рессор эштән сығып бара ине. Таштимер Баймөхәмәтов Асҡарҙың сельхозтехника директорына записка биреп киткәйне, туҡталып алып китергә булдыҡ, сөнки Белорет аша ҡайтыу өсөн машинаны йүнәтмәй мөмкин түгел. 14 июнь көнө беҙ Асҡарға эш аҙағына ғына килеп еттек. Шуға бынан иртә китергә булдыҡ. Минең курсташтар менән осраштыҡ...

* * *

15 июнь.

Төшкә тиклем рессор артынан йөрөнөк. Әлеге Таштимер бажаның запискаһы арҡаһында беҙгә өр-яңы рессор биреп ебәрҙеләр. Ташбулатҡа барыу юлында Таштимер ауылында туҡталып киттек. Асылбаев Әнүәр тигән кешелә булып, унан ауыл хаҡында һораштыҡ, үҙендә һаҡланған әйберҙәр менән таныштыҡ. Был ауылда бер ни ҙә таба алманыҡ.

Кисләтеп Ташбулатҡа килеп еттек. Ҡарабалыҡлы күле эргәһенә, экспедицияға сыҡҡандан бирле, алтынсы урынға палатка ҡорҙоҡ. Ләкин Ҡарабалыҡлының ҡара балығын ашарға тура килмәне. Ямғыр яуҙы.

* * *

16 июнь.

Иртән палаткаларҙы, бөтә әйберҙәрҙе йыйып, машинаға тейәнек. Яйлап ҡайтыу юлына сығыу көнө етте. Ташбулат ауылында Әхмәдин Ғиззәт Әхмәдиә улында булдыҡ. Ҡарт — балыҡсы. Сабаҡлы күлендә балыҡ тота, шул күлде браконьерҙарҙан ҡарауыллай икән. Бөгөн дә иртәнсәк кенә ҡайтҡан. Китаптары һаҡланмаған, мин наҙан булдым, китап тоторға тура килмәне, ти. Үҙе халыҡ ижады, ауыл тарихы буйынса төрлө әйберҙәр яҙып ятҡан булған. Ул әйберҙәрен Әхмәт Сөләймәнов, унан һуң Тайфур Сәғитовтар алып киткән. Унан беҙ Күсем ауылы хаҡында һораштыҡ. Унда Ҡарағужин Хәйретдин Ғилметдин улынан башҡа оло кеше юҡ

икән. «Унда һеҙ эҙләгән әйберҙәр булмаҫ», — тине бабай. Мин 1963 йыл Күсемдә булып, Ҡарағужин ҡарттан Күсем ауылының килеп сығышына ҡағылышлы легенда һәм «Ямғырса», «Ала ҡарға» тигән йыр яҙып алып киткәйнем (Биктимер Шәрипов менән бергә). Шулай булғас, Күсемгә барып тороуҙың әллә ни кәрәге ҡалманы. Ғиззәт ҡарт беҙгә Мораҡай ауылына барырға кәңәш итте.

Унан һуң беҙ Ташбулатта Хәйбуллина Мәғрүфә Сөләймән ҡыҙында булдыҡ. 1905 йылда тыуған, үҙе түшәктә ауырып ята ине. Ҡартынан ҡалған китаптары күп булған. Бер аҙын Ленинградҡа, бер аҙын Ҡаҙағстанға биреп ебәргән. Үҙендә бик аҙ дини әйберҙәр генә тороп ҡалған.

Байым ауылы хаҡында ла белешмәләр алдыҡ. Хәҙер Ташбулатта йәшәгән Фәткуллина Мөхтәрәмә Муса ҡыҙы (1912), Байым ауылында атайым указлы мулла булып торҙо, ти. Китаптары бик күп булған. Үҙе үлгәс, килендәре һарайға сығарып ырғытҡан, һәм улар шунда юҡҡа сыҡҡандар.

Мораҡай ауылында Ғабдрахманов Ғофран Ғимран улында булдыҡ. 1894 йыл тыуған. Ҡарт ҡолаҡҡа ҡатыраҡ. Әбейе менән бәрәңге күмеп йөрөйҙәр ине. «Эшем күп, эштән айыраһығыҙ бит!» — тип өйөнә инмәй тартышты ҡарт. Өйөнә ингәс, китап кәштәһенән берәмләп кенә алып китаптарын күрһәтте. «Мөхәмәдиә», «Ҡөрьән» һ.б. баҫма китаптар. «Тәһәрәтегеҙ юҡ», — тип Ҡөрьәнен ҡулға тотторманы. Ныҡыша торғас, «Рәхәт дәл» тигән бер баҫма китабын һәм «Йософ» китабының өҙөктәрен биреп сығарҙы. Беҙ машина янына килеп еткәс, әбейе беҙҙе кире саҡырып алды. Һарайҙа бер йәшниктә һаҡланған китаптары бар икән. Сәлимов Әхсән мулланан тороп ҡалған нәмәләр. Аҡтарып ҡараныҡ, бик туҙған айырым-айырым биттәр генә бар ине. Шунан «Диуан хикмәт»те йыйып алып киттек.

Бынан Белоретка юл тоттоҡ. Белореттан Стәрлетамаҡ юлына төшөп, Урал тауҙары аша ҡайтыуға йүнәлдек. Төшкә, сәғәт 12-ләргә Ғүмәр ауылына килеп йығылдыҡ. Был көн 280 км юл үттек, бик ныҡ арытҡайны. Өҫтәүенә, көнө буйы шаулатып ямғыр ҡойҙо. Юл бик ныҡ туҙғайны. Риф хәлдән тайып арыны, беҙ ҙә билде яҙа алмай ултырҙыҡ.

* * *

17 июнь.

Иртән торғас, һәйбәтләп сәй эстек. Егән буйына сығып әйләндек. Балыҡ тота алманыҡ. Беҙҙе Әхмәҙиев Ғафир Исхаҡ улы (минең ағайым) оҙатып йөрөнө. Булғанса һый-хөрмәт күрһәтте. Кисләтеп Өфөгә ҡайтып индек. Бөтәбеҙ ҙә хәлдән тайып арығайныҡ.

Иң мөһиме: экспедиция һәйбәт үтте. Бер ниндәй бәлә-ҡаза булманы. Етмештән ашыу ҡулъяҙма, алтмышлап баҫма китапты ҡотҡарып алып ҡалдыҡ. Улар араһында, йылдар уҙғас, меңәр һум биреп тә табылмаясаҡ әйберҙәр булыуы шикһеҙ.

## Йөкмәткеһе

### Әҙәбиәт ғилеме һәм теория мәсьәләләре

Феодализм дәүере әҙәбиәтендәге реалистик тенденциялар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 5
XX быуат башында башҡорт поэзияһы. . . . . . . . . 50
Аңлатмалар . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 207
Башҡорт поэзияһында традицион образдар . . . . . 215
Прозабыҙҙың тәүге аҙымдары . . . . . . . . . . . . . . . 241
Аңлатмалар. . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 253
Башҡорт мәғрифәтселек реализмы прозаһының стиль үҙенсәлектәре . . . . . . . . . . 255
Фәнни-техник прогресс һәм башҡорт әҙәбиәте . . . 272
Әҙәби тәнҡиттең методологияһы һәм методикаһы мәсьәләләре . . . . . . . . . . . . . 291
Башҡорт әҙәбиәтендә реализмдың формалашыу юлдары . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 306
Кескәйҙәрҙең оло донъяһы . . . . . . . . . . . . . . . . . 315

### Әҙәби портреттар

Һаҙи Сәғҙи . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 339
Булат Ишемғол ижады . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 343
Күңел ҡапҡаларын асыусы (Назар Нәжми) . . . . . 354
Шағирҙың граждандлыҡ йөҙө (Рауил Бикбаев) . . . . 361
Яҡты таңдар йырсыһы (Яҡуп Ҡолмой) . . . . . . . . 386
Тылсымлы ҡәләм көсө (Нәжиб Иҙелбай) . . . . . . . 395
Бәхетле балалыҡ, ғорур әсәлек йырсыһы (Фәүзиә Рәхимғолова) . . . . . . . . . . . . . . . . . . 400
Яҙыусының күңел тәҙрәләре (Йыһат Солтанов) . . . 406
Шағир табынған йондоҙҙар (Барый Ноғоманов) . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 410
Шиғриәткә тоғролоҡ (Шакир Бикҡолов) . . . . . . . 415

Йомарт күңелле әҙип (Рәйес Ғабдрахманов) . . . . . 420
Ижади өлгөрөү юлында(Роберт Байымов) . . . . . . . 428
Шағирҙың поэтик ораны (Әсхәл Әхмәтҡужин) . . . 433
Күренекле ғалим-филолог Әхнәф Харисовтың
ижады һәм тормош юлы . . . . . . . . . . . . . . . . . . 439
Йософ Гәрәй . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 449
Дуҫлыҡ, туғанлыҡ эҙәрмәне
(Суфиян Сафуанов) . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 455
Ғалим үткән юл (Афзал Ҡудаш) . . . . . . . . . . . . 461
Табыштар юлға саҡыра (6-сы археографик
экспедициялар көндәлегенән) . . . . . . . . . . . . . 466

2010 йылдың 29 декабрендәге 436-ФЗ һанлы
Федераль законға ярашлы 16+

В соответствии с Федеральным законом
от 29 декабря 2010 г. № 436-ФЗ 16+

Литературоведческое издание

**АХМАДИЕВ Вафа Исхакович**

**СВЯЗЬ ПОКОЛЕНИЙ**

(*на башкирском языке*)

Әҙәби-ғилми баҫма

**Әхмәҙиев Вафа Исхаҡ улы**

**БЫУЫНДАР БӘЙЛӘНЕШЕ**

Мөхәррире Г. Й. Фазлиәхмәтова
Биҙәлеш мөхәррире һәм рәссамы З. И. Кәримова
Техник мөхәррире В. Р. Абдрахманова
Корректорҙары А. Р. Исҡужина, З. М. Камалова,
М. Р. Шәрипова

Форматы 84 х 108 $^{1}/_{32}$. Балтика гарнитураһы.
Шартлы баҫма таб. 25,62. Шартлы буяу отт. 26,04.
Иҫәп-баҫма таб. 23,51. Заказ 1.0069.13.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

Әҙер файлдарҙан баҫылды.

Башҡортостан Республикаһының Өфө полиграфкомбинаты
дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.